# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ



I

ТОМ

# BASHKIR PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## RITES FOLK-LORE

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ОБРЯДОВЫЙ ФОЛЬКЛОР

# BAŞKURT HALIK FOLKLORU

## TÖREN FOLKLORU

УФА
«КИТАП»
1995

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## ЙОЛА ФОЛЬКЛОРЫ

I

ТОМ

ӨФӨ
«КИТАП»
1995

ББК 82.3 Баш
Б 29

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов* (баш мөхәррир), *Ҡәҙим Аралбаев, Рауил Бикбаев, Наил Бикбулатов, Салауат Галин, Нур Зарипов, Фәнүзә Нәҙершина, Зиннур Ураҡсин, Сабир Шәрипов, Ғайса Хөсәйенов, Ғәлим Хисамов* һәм *Рәмил Йәнбәков.*

Материалды һайлаусылар, төҙөүселәр, аңлатма биреүселәр, инеш мәҡәлә авторҙары *Әхмәт Сөләймәнов* менән *Розалиә Солтангәрәева.*

Яуаплы мөхәррир — *Ғайса Хөсәйенов.*

Нәшриәт мөхәррире — *Марсель Искәндәров.*

**Күсереп баҫтырғанда томға һылтаныу мотлаҡ.**

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов* (главный редактор), *Кадим Аралбаев, Рауиль Бикбаев, Наил Бикбулатов, Салават Галин, Нур Зарипов, Фануза Надршина, Зиннур Ураксин, Сабир Шарипов, Гайса Хусаинов, Галим Хисамов* и *Рамиль Янбеков.*

Подбор материалов, составление, комментирование и предисловие *Ахмета Сулейманова* и *Розалии Султангареевой.*

Ответственный редактор — *Гайса Хусаинов.*

Редактор издательства *Марсель Искандаров.*

**При перепечатке ссылка на том обязательна.**

Б $\frac{4702110500-161}{М 121(03)-95}$ 19—95

ББК 82.3 Баш

ISBN 5-295-01394-4 (Т. 1)
ISBN 5-295-01393-6

© Составление Сулейманова А., Султангареевой Р., 1995

## МӨХӘРРИРИӘТТӘН

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары 1972—1985 йылдарҙа беренсе тапҡыр күп томлыҡ рәүешендә донъя күргәйне. Ун һигеҙ китаптан торған ул ғилми тупламаның тәүге томы сыҡҡандан алып егерме йылдан ашыу ваҡыт уҙып китте. Шул дәүер эсендә фольклор ғилеменә һәм халыҡ ижадын һөйөүселәрҙең күптәренә бығаса билдәле булмаған байтаҡ ҡомартҡылар тупланып өлгөрҙө; тәүге баҫма һирәк осраусы китаптар хисабында ҡалды; һуңғы осорҙа бындай йыйынтыҡтарға ихтыяж бермә-бер артты. Шуларҙы иҫәпкә алып, Башҡортостан Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һүҙ барған күп томлыҡтың тулыландырылған яңы баҫмаһын әҙерләргә ҡарар ҡылды.

Тәүге баҫма эпос-ҡобайырҙарҙан төҙөлгән томдар менән башланғайны. Яңыһын йола фольклоры йыйынтығынан асыу мәслихәт тип табылды. Сөнки, йола ижадын белмәй тороп, халыҡтың эстетик ҡараштарына ла, ысынбарлыҡ күренештәрен художестволы дөйөмләштереү принциптарына ла — тимәк, фольклор әҫәрҙәренең поэтикаһының серенә лә, бабаларыбыҙҙың фәлсәфәүи фекерләүенең асылына ла, телдән-телгә, быуындан-быуынға изге аманат итеп тапшырыла барған әхләҡи, хоҡуҡи кодекстары менән педагогик тәғлимәтенең милли үҙенсәлектәренә лә төшөнөү ситен. Быуаттар һуҙымында төрлө-төрлө бәйләнештәргә инеп, аралашып, ҡатнашып йәшәү һөҙөмтәһендә, башҡа халыҡтарҙың йолаларынан үҙләштерелгән күренештәр ҙә бар беҙҙә. Уларҙың «башҡортлашыу» билдәләрен айыра белеү өсөн дә үҙ халҡыңдың йола фольклорын белеү фарыз. Әйтелгәндәрҙән был китаптың «Башҡорт халыҡ ижады»ның башҡа томдарына асҡыс булыуын аңлау ҡыйын түгелдер.

Милли йолаларыбыҙға хас поэтик ижад күренештәре бығаса айырым йыйынтыҡ рәүешендә нәшер ителгәне юҡ ине. Был китап — тәүге тәжрибә. Уның хаҡындағы фекерҙәрегеҙҙе, теләктәрегеҙҙе, бындай баҫмала урын алырға хаҡлы тип иҫәпләгән йола фольклоры өлгөләрен белһәгеҙ, шуларҙы яҙып, (ошо адрес буйынса: 450054, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 71-се йорт, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фольклор һәм сәнғәт бүлеге) төҙөүселәргә ебәреүегеҙҙе үтенәбеҙ. Был теләкте, башҡа томдар менән танышҡанда ла, иҫтә тотһағыҙ ине.

Йола поэзияһы һәм ул «хеҙмәтләндергән» йола күренештәре берҙәм фольклор-этнографик комплекс хасил итә. Шуға ла, томға материалдар һайлағанда, поэтик үрнәктәр менән генә сикләнмәйенсә, ул поэтик үрнәктәр ҡулланылған йола күренештәренең тасуирламалары ла бирелде.

Йыйынтыҡтың «Туй йолалары» бүлеген филология фәндәре кандидаты Р. Ә. Солтангәрәева, «Алғыштар һәм ҡарғыштар», «Миҙгелдәр», «Нәҫел-нәсәп», «Мәжлес», «Йыр бүләк итеү, өгөт-нәсихәт», «Көйлө хаттар, микрут зары» бүлексәләрен нигеҙҙә филология фәндәре докторы Ә. М. Сөләймәнов, ә ҡалған өлөштәрен шул уҡ хеҙмәткәрҙәр бергәләп төҙөнө. Инеш мәҡәләнең ғаилә-көнкүреш йолаларына ҡағылған бүлектәрен Р. Ә. Солтангәрәева, бергәләп әҙерләнгән историографиянан башҡаһын Ә. М. Сөләймәнов яҙҙы. Йола поэзияһына хас көйҙәрҙе музыка белгесе Л. К. Сәлмәнова нотаға һалды. Һүҙлеккә ингән ғәрәп, фарсы һүҙҙәренә аңлатма — арабыҫҙан бик иртә киткән мәшһүр ғәрәп теле белгесе, тарих фәндәре кандидаты Ф. Н. Баишевтыҡы.

Халыҡ ижады әҫәрҙәре, йола күренештәре, уйындар, хатта улар бер төрлө аталып йөрөтөлгән сүрәттә лә, төрлө урында, төрлө башҡарыусылар репертуарында төрлө-төрлө варианттарҙа, версияларҙа йәшәй. Күп томлыҡҡа уларҙың яҙып алынғандарының иң әһәмиәтлеләрен, йөкмәтке һәм күркәмлек йәһәтенән иң камилдарын ғына индерергә тырышылынды. Ҡулъяҙма фондтарында һаҡланған бүтән вариант һәм версиялар хаҡында «Аңлатмалар» бүлегендә мәғлүмәт бирелде. Һәр тексттың ҡасан, ҡайҙа, кемдән, кем тарафынан яҙып алыныуы, ҡайҙа һаҡланыуы хаҡында ла белешмәне шул бүлектән табырға була.

Күп томлыҡты төҙөгәндә, һөйләүсенең, башҡарыусының тел һәм стиль үҙенсәләктәрен, һәр хәлдә, ҡағыҙға теркәлгәнсә, һаҡларға тырышылды. Айырыуса информаторҙың лексик үҙенсәлектәрен һаҡлауға ныҡ иғтибар ителде. Диалект, һөйләш, ситтән ингән һәм айырым социаль мөхиткә хас һүҙҙәргә йондоҙсоҡ (*) ҡуйылды һәм «Һүҙлек» бүлегендә аңлатма бирелде. Бары урындағы һөйләшкә хас фонетик айырмалар ғына, әҙәби тел ҡағиҙәләренә яраҡлаштырылып, төҙәтелде.

Һәр томда бөгөнгө уҡыусылар өсөн ауыр аңлашыла торған йә бөтөнләй аңлашылмай торған төшөнсәләр, шәхес, ер-һыу исемдәре осрай. Уларға ла аңлатма бирә барылды. Күп томлыҡҡа ингән һәр йыйынтыҡ, «Аңлатмалар»ҙан тыш, инеш мәҡәлә менән сыға.

Беренсе баҫмаһынан айырмалы рәүештә, күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады»ның был баҫмаһы баштан аяҡ рәт һаны менән билдәләнде, тимәк, һәр томдың үҙ һаны бар. Бындай билдәләнеш уҡыусыны буталыуҙан ҡотҡарыр. Ә йыйынтыҡ халҡыбыҙ ижадына битараф булмаған киң уҡыусылар аудиторияһына тәғәйенләнә. Унан халыҡ мәҙәниәтен, ауыҙ-тел ижадын махсус өйрәнсүсе талиптар, уҡыусылар, шәкерттәр, уҡытыусылар, тикшеренеүселәр айырыуса ҙур файҙа күрәсәк.

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ЙОЛА ФОЛЬКЛОРЫ

Ғүмерҙең, йылдың һәр миҙгеле, айы, көнө һәр кемдән билдәле бер ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен талап итә. Әҙәмдең һәр аҙымы, хатта ниәт-маҡсаттары ла әүәл-әүәлдән ҡанундарға яраҡлаштырылған. Улар бөтә кешегә лә фарыз иҫәпләнгән. Ана шуны йола, йола үтәү, йола атҡарыу тиҙәр.

Кешеләр борон-борондан тәбиғәт күренештәренә, физик һәм физиологик үҙгәрештәргә, ғәйләлә, йәмғиәттә булып ятҡан хәлдәргә үҙҙәре теләгәнсә йоғонто яһарға тырышҡан. Шул ынтылыштар ҙа фарыз ҡағиҙәләр тыуыуына сәбәп булған. Тимәк, улар ҙа — йола күренештәре. Йолалар кеше аңын мифологик ҡараштар биләгән тәүтормош дәүерҙәрендә үк барлыҡҡа килә башлаған.

Йола атҡарғанда, көйләнә, һөйләнә торған теҙмә һәм сәсмә телмәр өлгөләрен, гәҙәттә, йола фольклоры тип йөрөтәләр. Йола атҡарыу йыш ҡына театраль күренеште хәтерләтә. Шуға нигеҙ булған халыҡ драмаһын да йола фольклорына индерергә була.

Башҡа халыҡтарҙыҡы менән уртаҡлыҡтары, оҡшашлыҡтары булған сүрәттә лә (ә был, тарихи үҫеш закондары буйынса, ҡотолғоһоҙ), нәҡ йола күренештәре һәр халыҡтың милли булмышын ҡылыҡһырлаусы иң мөһим билдәләүҙән иҫәпләнә. Шуға ла, берәй халыҡ хаҡында мәғлүмәт йыйыр булһалар, тикшеренеүселәр уның йолаларына иғтибар итмәй ҡалмаусан. Башҡорттарға ҡағылған хеҙмәттәр ҙә шуға дәлил. Әхмәт Ибн-Фаҙлан (X б.) һәм Әбү-Хәмит Әл-Ғарнати (XIII б.) ҡалдырған сәйәхәтнамәләрҙә башҡорттарҙың мәжүсиҙәргә хас йолалары (төрлө илаһи заттарға, алпамышаларға ышаныуҙары һ. б.) телгә алына. Башҡорттарҙың ышаныуҙары венгр миссионерҙары Юлиан, Ҡарпини, Рубрук (XIII б.), унан голланд ғалимдары Масса менән Витсендарҙың да (XVII б.) иғтибарын йәлеп итә. Башҡортостан хаҡында ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр ҡалдырған рус тикшеренеүселәре В. Татищев, П. Рычков, И. Георги, И. Лепехин (XVIII б.), П. Кудряшев, В. Даль, П. Размахнин, В. Черемшанский, Л. Берхгольц, С. Рыбаков (XIX б.), Д. Зеленин, С. Руденко, М. Салтыковтарҙың хеҙмәттәрендә лә башҡорт йолаларын сағылдырған мәғлүмәттәр

күп. «Ҡитап ене» ҡағылып, үҙҙәре лә ҡәләм тибрәтеүгә маһирланған башҡорттар араһынан сыҡҡан, П. Назаров, Б. Юлыев, М. Өмөтбаев (XIX б.), Ғ. Вилданов, Н. Таһиров, Х. Ғәбитов, Ғәббәс Дәүләтшин (XX б.) кеүек энтузиастар ҙа йолаларыбыҙҙы йыйыуға, улар менән башҡа халыҡтарҙы таныштырыуға форсат тапҡан. Был изге эште З. Вәлиди-Туған, А. Инан (Фәтхелҡадир Сөләймәнов), Ғ. Амантай, Ә. Харисов, Ҡ. Мәргәндәр дауам итә. Унан эстафета М. Сәғитов, С. Галин, Н. Шоңҡаров, Ф. Нәҙершина, Әхмәт һәм Риф Сөләймәновтар, уларға эйәрә килгән Р. Солтангәрәева, Б. Байымов, Г. Хөсәйеновалар кеүек яңы быуын фольклорсыларына күсте. Р. Ҡузеев, Н. Бикбулатов, Л. Нагаева, Ф. Фәтихова кеүек этнографтар ҙа йолаларыбыҙға ҡағылышлы бай мәғлүмәт туплаған.

Башҡорт халҡының йолаларын ғилми яҡтан өйрәнеү буйынса ла байтаҡ эштәр башҡарылған. Фольклор ғилеме күҙлегенән ҡарағанда, XX быуаттың баштарынан уҡ башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен йыйыу менән шөғөлләнә башлаған М. Буранғолов туй йолаһының йыйылма тасуирламаһын төҙөгән, Ә. Харисов сеңләүҙәрҙең идея-тематик, поэтик үҙенсәлектәрен, Л. Лебединский уларҙың музыкаль яғын тикшергән. Ҡ. Мәргән менән С. Галин башҡорт йолаларының иң мөһим күренештәрен тасуирлап, уларҙың этнографик һәм поэтик асылы хаҡында ла һүҙ алып барҙы. Башҡорт йолаларын ижади күренеш булараҡ махсус тикшеренеүҙәр исемлегенә һуңғы осорҙа Р. Солтангәрәеваның туй йолаһының тарихи нигеҙҙәрен, поэтик репертуарын өйрәнгән хеҙмәте өҫтәлде [1].

Тәғәйен генә йола фольклорына бағышланмаһа ла, ошо ижад төрөнә мөһим урын бирелгән хеҙмәттәр ҙә сыға тора. Уларҙы ике төркөмгә бүлергә мөмкин. Беренсеһенә — фольклорсы ғалимдар яҙғанын [2], икенсеһенә — тарих, этнография, археология, тел ғиле-

---

[1] Буранғолов М. Башҡорт туй йолалары. — ҒА, ф. 3, оп. 12, д. 215; Харисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. — Өфө, 1965. 135—142-се б.; Лебединский Л. Башкирские народные песни и наигрыши. — М., 1965. С. 68—72; Кирәй Мәргән. Йыр дәфтәре. — Өфө, 1964; Башҡорт халыҡ ижады материалдарын йыйыу буйынса ҡулланма. — Өфө, 1967. 15—18-се б.; Башҡорт халҡының йола фольклоры буйынса күҙәтеүҙәр (Әҙәбиәт, фольклор, әҙәби мираҫ). — Өфө, 1976. 31—76-сы б.; Башҡорт халыҡ ижады: Юғары мәктәптәрҙең филол. фак-ры өсөн дәреслек (Яуаплы ред. Ә. М. Сөләймәнов). — Өфө, 1982. 32—56-сы б.; Галин С. Ә. Башҡорт фольклоры: Юғары уҡыу йорттары, педучилище студенттары һәм урта мәктәп уҡытыусылары өсөн ҡулланма (Яуаплы ред. Э. Ф. Ишбирҙин). — Пермь, 1975. 95—135-се б.; БХИ: Йырҙар. 2-се китап (Төҙөүсеһе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар бирсүсе С. Ә. Галин). — Өфө, 1977. 20—34-се, 221—277-се, 284—291-се б.; Башҡорт халҡының йыр поэзияһы: Йыр жанрының ҡайһы бер мәсьәләләре. — Өфө, 1979. 197—214-се б.; Султангареева Р. А. Башкирская свадебно-обрядовая поэзия: Автореф. дис. канд. филол. наук. 10.01.09. — Алма-Ата, 1988.

[2] Нәҙершина Ф. А. Халыҡ һүҙе. — Өфө, 1983. 64—68-се б.; Халыҡ хәтере. — Өфө, 1987. 53—123-сө б.; Сәғитов М. М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. — Өфө, 1987. 107—110-сы, 145—168-се, 202—231-се б.; Сөләймәнов Ә. М. Тормош-көнкүреш әкиәттәре: Жанр үҙенсәлектәре. Өфө, 1990. 109, 199—214-се б.

ме һ. б. фән өлкәһендә эшләгән ғалимдарҙың тикшеренеүҙәре[3] инә.

Башҡорт халҡының йолаларына ҡағылышлы хеҙмәттәр, дөйөм алғанда, байтаҡ. Әммә, туй йолаһынан тыш, рухи ҡомартҡыбыҙҙың был өлөшө фольклор ғилеме күҙлегенән монографик йәһәттән әлегә махсус өйрәнелмәгән. Фактик материал йыйыу эшен дә йәнләндереһе, тупланғанын системаға һалып, ижадсыһына кире ҡайтараһы бар. Ә бындай ғилми хеҙмәттәргә, йыйынтыҡтарға ихтыяж көндән-көн арта бара. Был томды әҙерләгәндә ошо ихтыяжды иҫәпкә алырға тырышылды.

## 1

Этнографтар йолаларҙы ғаилә-көнкүреш һәм календарь йолаларға бүлә. Фольклорсылар ҙа (П. Богатырев, К. Чистов, Н. Савушкина, Н. Кравцов, А. Новикова, В. Аникин, Ю. Круглов, М. Бакиров, Р. Мөхәмәтйәнов һ. б.) нигеҙҙә ошондай бүленеште хуп күрә. Бындай тикшеренеүселәр башлыса йолаларҙың тәғәйенләнешен генә иҫәпкә ала. Ошо хәл йолаларҙы төркөмләүҙең башҡа принциптарын эҙләүгә этәреш бирә. Сыуаш тикшеренеүсеһе В. Родионов, мәҫәлән, уларҙы төркөмләгәндә, хеҙмәт бүленешен дә, кешеләрҙең йәш буйынса, социаль һәм енси төркөмдәр хасил итеүен дә иҫтә тота[4]. Им-томдар ҙа йола күренештәренән айырылғыһыҙ. Әммә телгә алынған төркөмләү принцибын үҙ итеүселәр уларҙы айырым ҡарай. Шуныһын да әйтергә кәрәк: этнографтар йолаларҙың шиғриәте менән иҫәпләшеп бөтмәй, фольклор белгестәре иһә башлыса йола вазифаһын үҙҙәре үк атҡарыусы поэтик үрнәктәрҙе тикшереү менән сикләнеүсән.

Башҡорт фольклор ғилемендә йола жанрҙарының төрҙәрен, сиктәрен киңерәк күҙаллау ғәҙәткә ингән. 20-се йылдар башында сыҡҡан «ҡулданмаһында» Нурлығәзәм Таһиров уларҙы шулай төркөмләп сыҡҡан: им-том, сихыр (доға), арбауҙар, ырым, алҡыш-ҡотто булһын әйтеү, ҡуптау (ҡоптау), көйөпөү, кәмһетеү, тиргәү, һүгеү, ҡарғыш; йола, ғөрөф-ғәҙәт (килен әйттереү, туй яһау; һабан, ҡарға туйы, «бутҡа яҫау», «әүлиә», урнаҡ булы-

---

[3] Руденко С. И. Башкиры: Историко-этнографические очерки: М.; Л., 1955; Вәлиди-Туған З. Хәтирәләр // Ағиҙел, 1991, № 1. 149—151-се б.; №2. 160—163-сө б.; №1. Jnan Abdulgadin. Makileler ve Jncelemeler.— Ankara, 1968.— S. 66—75, 271—274, 341—493; Кузеев Р. Г. Очерки исторической этнографии башкир. Ч. 1. Родоплеменные организации башкир в XVII—XVIII вв. — Уфа, 1957; Происхождение башкирского народа. — М., 1974; Бикбулатов Н. В. Башкирский аул. — Уфа, 1969; Башкирская система родства. — М., 1981; В соавторстве с Фатыховой Ф. Ф. Семейный быт башкир. — М., 1991; Нагаева Л. И. Танцы восточных башкир. — М., 1981; Мажитов Н. А. Тайны древнего Урала. — Уфа, 1973. С. 48—135; Южный Урал в VII—XIV вв — М., 1977. С. 78—133; Күсемова Т. Х. Башҡорт исемдәре. — Өфө, 1982; Торма Йожеф. Башҡорттарҙа матур йолалар бар // Ағиҙел. — 1991, № 6. 161—165-се б.; Ғүмәров В. З. Башҡорт халыҡ медицинаһы. — Өфө, 1991.

[4] Родионов В. Г. Вопросы жанровой классификации чувашского фольклора (Чувашский фольклор: Специфика жанров). — Чебоксары, 1982. С. 76—100.

шыу; аш сәсеп бөткәс, ямғыр яуһын өсөн һыу һибешеү; ҡалын бирешеү), уйындар; ғәйепкә ышаныу һәм ышандырыу, һынау-тәжрибә. 30-сы йылдарҙа Ғабдулла Амантай төҙөгән ҡулланмала иһә ни бары бата, ырым, арбау, сихыр ғына айырып күрһәтелә. Ҡирәй Мәргәндең фекеренсә, йола ижадын ваҡыт-миҙгел (Нардуған, Ҡәкүк сәйе, Ҡуҙғалаҡ байрамы, Ҡарға бутҡаһы, Ямғыр теләү, йыйындар, һабантуй, баш итенә йәки һарығаяҡҡа саҡырыу, ҡаҙ өмәһе, кейеҙ йәки тула баҫыу), ғаилә һәм тормош-көнкүреш (бала тыуыуға бәйле йолалар, Айыу байрамы, туй йолалары, мәйет оҙатыуға бәйле йолалар), им-том (имләү, эпсенләү, осоҡлау, ҡот ҡойоу, бүҫер ҡыуыу, татран ҡыуыу, биртек һорау), ырымдар, арбауҙар, тиҫкәре тәьҫир яһау маҡсатында башҡарылған йолалар (сихырлау, ырымлау, ҡарғыш) бүлемдәренә айырырга була. С. Галиндың классификацияһы күп яҡтан Ҡ. Мәргәндекенә яҡын [5].

Күренеүенсә, башҡорт халҡының йола ижадын төркөмләгәндә, тикшеренеүселәр бер принципты ғына үҙ итмәгәндәр: Н. Таһиров уның тәғәйенләнешенән сығып эш итһә, Ҡ. Мәргән атҡарылыу мәлен, мөхитен, ниәт-маҡсатын, С. Галин халыҡтың донъяға ҡарашының, метеорологик күҙәтеүҙәренең, ваҡыт-миҙгел төшөнсәләренең сағылышын иҫәпкә ала.

Бығаса йолалар махсус йыйынтыҡ рәүешендә баҫтырылмағанлыҡтан, китапҡа, поэтик үрнәктәрҙән тыш, тәү ҡарашҡа йола фольклоры менән уртаҡлығы булмаған күренештәр ҙә индерелде. Сөнки уларһыҙ йола фольклорының ғына түгел, халыҡ ижадының бүтән төрҙәренең дә асылына төшөнөү ҡыйын. Бығa тиклемге төркөмләү тәжрибәһен инҡар итмәҫтән, йолаларҙың тәғәйенләнешен, ҡасан, ниндәй шарттарҙа, нисек атҡарылыуын күҙ уңында тотоп, йыйынтыҡҡа ингән материалдар түбәндәге төркөмдәргә бүлеп урынлаштырылды:

1) хөрәфәттәр, боронғо ыҙан йолалар( серле заттарға ышаныу, им-том, арбау, эпсенләү, мал-тыуарҙы имләү, тәбиғәт дауалары, теләктәр, һынамыштар, ырымдар, юрауҙар һ. б.);

2) тәбиғәт-ыҙан йолалары, халыҡ байрамдары (ваҡыт миҙгелдәре, тәбиғәт байрамдары, йыйындар; хеҙмәт, кәсеп һәм яу-көрәш йолалары, йыр бүләк итеү, өгөт-нәсихәт һ. б.);

3) ғаилә-көнкүреш йолалары (тыуым, бала бағыу, бала бәпләү, туй, кешене ҡайтмаҫ юлға оҙатыу).

## 2

Ибн-Фаҙландың юлъяҙмаларынан мәғлүм булыуынса, X быуаттың тәүге сирегендә башҡорттар (һәр хәлдә, сәйәхәтсе осратҡан-

[5] Таһиров Н. Башҡорт халҡының байҙығын белеү һәм тарих үә йәғрәфиәләренә кәрәкте уҙыҡтарын йыйнау ҡомартҡыларын сүптәп табыу һәм туптау өсөн ҡулданма. — Стәрлетамаҡ: Башҡортостан мәғариф комиссариаты, 1922; Амантай Ғ. Һайланма әҫәрҙәр. — Өфө, 1960. 146—148-се б.; Ҡирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады. 32—56-сы б.; Галин С. Ә. Башҡорт фольклоры. 110—135-се б.

дары) ун ике раббыга (ربّا) инанған, «ҡыш раббыһы, йәй раббыһы, ел раббыһы, Ер раббыһы бар», ә «күктәге раббы» — иң өлкән раббы, тип белгән [6]. Үҙе Алланы ғына берҙән-бер илаһ тип таныған кеше булараҡ, гәрәп илсеһе башҡорттарҙың күмәк илаһи заттарын «божество» мәғәнәһендәге «раббы» һүҙе менән генә теркәгән, әлбиттә. Әммә бында «раббы» ислам күрә алмаган «тәңре» һүҙе урынында ҡулланылыуына шик юҡ. Быға ике дәлил бар. Беренсенән, сәйәхәтсе үҙе үк «күк раббыһын» айырып күрһәткән. Башҡа төрки халыҡтарында ла нәҡ шул «күк раббыһы» — иң юғары илаһи зат тип иҫәпләнгән. Уны Күк тәңреһе тип йөрөткәндәр. Икенсенән, башҡорттар, боронго бер Ҡытай сығанагында күрһәтелеүенсә [7], күп тәңреле халыҡтар иҫәбенә ингән. Ошо әйтелгәндәр үҙ нәүбәтендә, борон башҡорттарҙа «Күк тәңреһе» тигәндән башҡа осраҡтарҙа «тәңре» һүҙе «эйә» мәғәнәһендә лә ҡулланылган, тип раҫларға нигеҙ бирә.

Ибн-Фаҙлан, башҡорттарҙың дини берекмәләренең (الأديان) береһе йыланға табына [8], ти. Тимәк, ул килеп киткән заманда беҙҙең бабаларыбыҙ тәңрелек рәүешендәге монтеистик дингә инана башлаган ғына була. Иң юғары илаһи заттан тыш, улар төрлө сихри заттарға (рухтарга, эйәләргә һ. б.) ышана. Ислам диненә күскәс тә, был ышаныуҙар онотолмаган. Һәм башҡорт, асылда, ғүмер баҡый «ике динле» булып ҡалған.

«Ике динле» бабаларыбыҙ, башҡа төрки ҡәрҙәштәребеҙ кеүек үк, донъяны өс ҡатлы итеп күҙ алдына баҫтырған:

1) иң югары донъя — Күк тәңреһе (йәки Күк) донъяһы. Унда шулай уҡ Көн (Ҡояш) менән Ай, уларҙың ире Самрау. Тимер ҡаҙыҡҡа бәйле Һарат менән Буҙат һәм уларҙы ҡыуыусы алты ас бүре (йәки ете дейеү) йәшәй;

2) ер өҫтө донъяһы — әҙәм заты, уның ярҙамсылары — толпар, шоңҡар, торна, аҡҡош, күгәрсен; йорт, ҡура, тау һ. б. эйәләре көн иткән урын;

3) ер (һыу) аҫты донъяһы — аждаһалар, сәмреғош, һыу эйәһе һ. б. төйәге [9].

Шул өс донъяла йәшәүсе заттарҙың беррәүҙәре (аҡбуҙат, толпар, торна, балыҡ) — изге, икенселәре (дейеү, ғифрит, ялмауыҙ, аждаһа һ. б.) — яуыз, өсөнсөләре (эйәләр) зыянһыҙ иҫәпләнгән [10]. Әммә мифик заттарҙы йәшәгән донъялары буйынса айырыу ҙа, кешегә мөнәсәбәттәре йәһәтенән төркөмләү ҙә шартлы. Сөнки бер

---

[6] Ковалевский А. П. Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921—922 гг. — Харьков: Изд-во Харьковского университета, 1956. С. 131—132.

[7] Гадланов Г. Р. Относительно «Тэнгри» — божества тюрко-монголов (По культовым текстам) // Тюркология-88. — Фрунзе: Илим, 1988. С. 551—552.

[8] Ковалевский А. П. Книга Ахмеда Ибн-Фадлана. С. 131.

[9] Сәғитов М. М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. 70—71-се б.

[10] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — Өфө, 1961, 46-сы б.

үк зат һыуҙа (ер аҫтында) ла йәшәргә, күккә лә ашырға (мәҫәлән, дейеү, сәмреғош); изгелек тә, яуызлыҡ та ҡылырға (мәҫәлән, эйәләр) мөмкин.

Мифологик фекерләү һөҙөмтәһендә, хыялда тыуған сихри заттарҙың образдарын бабаларыбыҙ йәнле итеп күҙаллаған. Уларҙы тотороҡло һыҙаттар менән ҡылыҡһырлаған. Күптәрен антропоморф зат тип иҫәпләгән. Бәрейҙәр (биреләр), мәҫәлән, әҙәм кеүек үк, туй үткәреп, ирле-ҡатынлы, бала-сағалы була, йәйләүгә күсә (№№ 2—9). Әммә антропоморф заттарҙы кеше менән бутарға мөмкин түгел. Сөнки уларҙың берәүҙәре тик бер енестән була (албаҫты, убыр, шүрәле — ҡатын-ҡыҙ затлы ғына), икенселәре (бисура, бәрей, ен, шайтан) берсә ир, берсә ҡатын-ҡыҙ булып күренә, ә юха һәр төрлө ҡиәфәткә инә ала. Ҡылыҡтары менән дә улар кешенән ныҡ айырыла: бәрей, ен юҡ-бар менән туҡлана, юха — ҡыҙҙарға, аждаһа — мал тыуарға, әҙәм балаһына үс тота, шүрәле теләһә кемде ҡытыҡлап үлтерә.

Боронғо кешеләр тәбиғәт көстәрен кәүҙәләндереүсе мифик заттарҙы ғына түгел, сир-зәхмәттәрҙе лә, хатта кешенең психологик торошон да (көлкөнө яңырталар, илауҙы үлтерәләр) йәнләндереп күҙ алдына килтергәндәр. Уларҙың да бер төрөн икенсеһенән айырырлыҡ һыҙаттары бар тип уйлағандар. Берәүҙәрен төҫө («Ҡара бүһер, аҡ бүһер! Унда ятма, бында ят!» — № 36Д), икенселәрен ҡиәфәте («Татран тигән татлы ҡыҙ, Ике имсәкле һөтлө ҡыҙ», — № 30F) һ. б. буйынса ҡылыҡһырлағандар. Сир-зәхмәттең күптәре юханы хәтерләтә. Осоҡ кешегә берсә эт булып сыйылдай-сыйылдай, берсә ҡош булып сутылдай-сутылдай эйәрә. Төрткө әбей булып та, сысҡанға әүерелеп тә зыян ҡыла.

Кешегә хаслыҡ өсөн ебәрелгән боҙом, сихыр ҙа сир-зәхмәттәр иҫәбенә инә. Сир-зәхмәттең һәр төрөнән дә арындырыу маҡсатынан им-том итеүселәрҙе имсе, бағымсы (ҡара китапсы, шайтан күрәҙәсе) тип, борон бик хөрмәтләр булғандар [11], ә боҙом ебәреүсе яуыз имселәрҙе сихырсы тип әҙәрләгәндәр.

Серле мифик заттарға аңлатма биргәндә, улар менән осрашҡан хәлдә, ниндәй йола атҡарыу, нимәнән тыйылыу фарыз икәнен төшөндөрөүсәндәр. Зыянлы сихри заттар менән алышҡанда, билдәле шарттарҙың үтәлеше талап ителә. Бағымсы (шаман) албаҫтыны, ҡамсылай-ҡамсылай, баҫтырып йөрөп ҡыуырға тейеш. Был эшкә тотонғанға тиклем уны төнө буйы аңдыуы ла шарт. Юханы еңер өсөн дә, тәүҙә аңдыйҙар, килеп сыҡҡас, үксәһен йәрәхәтләгәнсе, бер тынала бер-бер артлы атыу кәрәк [12].

Сир-зәхмәт менән көрәшкәндә лә тәғәйен шарттар үтәлергә тейеш. Убыр күңеле төшкән балаға бағымсылыҡ итеү өсөн, мә-

---

[11] Л е п е х и н И. И. Дневные записи путешествий по разным провинциям Российского государства в 1770 году... — СПб., 1802. С. 72—76; К у д р я ш о в П. М. Предрассудки и суеверия башкирцев // Башкирия в русской литературе. Предисл., биогр. спр., коммент. в библиогр. М. Г. Р а х и м к у л о в а. Т. 1. — Уфа, 1989. С. 357—368.

[12] Д а л ь В. И. Башкирская русалка. Там же. С. 175.

çәлән, уның күлдәген һыуҙа сайҡау шарт. Үҙ сиратында был шарттың да үҙ шарттары бар:

1) үтәгән мәле — мотлаҡ кис,
2) һыуының ағын булыуы,
3) күлдәкте сайҡар алдынан шул һыуға сепрәк йә тәңкә ташлау (хәйер биреү),
4) хәйер биргәндә:

— Һыу инәһе Һарысәс,
Һыу инәһе Һарысәс,
Шәфҡәтеңде һал миңә,
Зәхмәтеңде ситкә сәс! —

тип һамаҡлау, йәғни магик һүҙ әйтеү,

5) күлдәкте теүәл өс мәртәбә сайыу,
6) уны ҡуйында алып ҡайтыу,
7) еүеш килеш сырхау балаға кейҙереү фарыз (№ 34).

Бөтә сир-зәхмәтте имләгәндә, йәнә шундай тәүшарттың үтәлеүе фарыз: ауырыған кеше лә, уның яҡындары ла имсенең ҡөҙрәтенә шик белдермәҫкә тейеш.

Ҡайһы бер мифик заттарҙы (ен-шайтанды) өркөтөү өсөн, ҡоралдың янда булыуы ғына ла етә, уның ҡулланылыуы мотлаҡ түгел. Хатта ҡоралдың өлөштәре йә уны хәтерләтерҙәй нәмәләр (мәҫәлән, сәнсеүгә тәғәйен бысаҡ урынына ҡайсы, ҡаҙаҡ кеүек осло әйберҙәрҙең) янда булыуы ла уларҙың ҡотон ала тип белгәндәр. Сөнки борон әйбер менән уның өлөшө, билдәһе араһында айырма күрмәгәндәр [13]. Был ҡарашҡа янау, имитациялау менән шуны ысынлап ғәмәлгә ашырыуҙы ла бер нәмә тип иҫәпләү оҡшаш: өс йәнде имләгәндә, бысаҡты ҡулға алып, ҡырҡыуҙы, сәнсеүҙе; һөрөнгәнде имләгәндә тышау киҫеүҙе имитациялайҙар (№ 33).

Сихри мифик заттарҙан, сир-зәхмәттән арыныу өсөн илаһи заттарға, әруахтарға һығыныр булғандар. Мәҫәлән, ергә һалғанда, Ер-һыуға (№ 623), ҡот ҡойғанда, бөтә төркиҙәргә уртаҡ ҡанбабалар Ҡорҡот ата менән Түлкә атаға (№ 253) һығыналар. Уҡыныш, сик тартыу, түңәрәк һыҙыу, мышар (миләш), артыш та уртаҡ магик сара иҫәпләнә. Им-томда былар ҙан тыш төҫ һәм һан магияһы ла (№№ 53, 58Б) ҡулланыла.

Ен-шайтанды, сир-зәхмәтте өркөтөү өсөн төрлө сараларҙы комплекста ҡулланыу уларҙың тәьҫир көсөн ишәйтә тип белгәндәр. Им-том иткәндә, магик сараларҙан тыш шифалы үҫемлектәр, емештәр ҙә файҙаланыла.

Фольклор күҙлегенән ҡарағанда, им-том иткәндә, халыҡта «ҡара доға» тип йөрөтөлгән һамаҡтарҙың роле ҙур. Уларҙа (ғөмүмән, халыҡ шиғырының башҡа өлгөләрендәге кеүек үк) сатнап торған рифманың булыуы шарт түгел.

---

[13] Ровинский Р. Е. Нашим солнцем был Сириус // Наука и религия. 1991, № 11. С. 47.

Әпсен-төпсөн,
Минән китһен,
Айға күсһен,
Шунда үçһен!
Әпсен-төпсөн,
Тиҙерәк бөтһөн! (№ 26Ж), —

тибындағы төҙөк үлсәмле (4—4), аныҡ рифмалы (аа, бб, вв...) строфалар менән бер рәттән рифма урынына бер үк һүҙҙе («Ҡайҙан килһәң, шунда ҡайт, Ҡөндән килһәң, көнгә ҡайт...» № 26Ҙ), рифмаһыҙ ике юллыҡтарҙы ҡабатлауға ғына («Ай, ҡайҙа һинең тәтәйең, Бына минең тәтәйем; Ҡайҙа һинең тәтәйең...» — № 50Б) ҡоролғандары ла осрай. Әммә борон-борондан шиғри һүҙ көйләп башҡарылғанлыҡтан, артыҡ ижектәр йотола, етмәгәне башҡалары һуҙыу иçәбенә тулылана. Һөҙөмтәлә үлсәм төҙөкләнә һәм рифма кәмселеге һиҙелмәй. Иң мөһиме — сәсмә телмәр менән сағыштырғанда, теҙмә телмәр магик тәьçир көсөнә эйә тип белгәндәр. Ә бынан «Ҡара доға» ролен уйнағанының бындай ҡөҙрәте икеләтә, өсләтә көслөрәк тип аңлауҙарына төшөнөүе ҡыйын түгел.

Сир-зәхмәттәр төрлө булған кеүек, уларҙы имләү ысулдары ла төрлө-төрлө. Әммә төрлө ауырыуҙы бер үк үлән менән дауалап булған шикелле шул ысулдарҙың береһе булған һамаҡтарҙың да бәғзеләрен төрлө ауырыуға ҡаршы ҡулланырға мөмкин. Өсйән имләгәндә, әйтелә торған:

— Ай ҙа ҡайта,
Көн дә ҡайта,
Һин дә ҡайт —

һамағы шешек имләгән саҡта ла әйтелә (№ 39А). Мал-тыуарҙы имләү һамаҡтары ауырыу кешене имләүҙе хәтерләткеләй. Күҙ тейгәндә (№№ 29Е, 76Д), баланың «тышауын», малдың «тел-тешен» ҡырҡҡанда әйтелә торғандары (№№ 79, 36В) ҡалыпташ.

Һүҙ магияһына нигеҙләнгән ыңғай им-томдарға — алғыштар, киреһенә ҡарғыш һәм әр һүҙҙәре яҡын. Алғыш (татарҙа — алҡыш, ҡараҡалпаҡта, сахала — алғыс, ҡарасәйҙә — алғышла) — яҡшы теләк, изге теләк. Уның «бата», «бата һүҙ» тигән синонимы ла бар. Ә ул ғәрәп телендәге «фәтиха» һүҙенән яһалған. «Аҡ бата», «тиреç бата» (терисбата) тиһәләр, тәүгеһе — «алғыш», икенсеһе «ҡарғыш» мәғәнәһен аңлата [14]. Башҡорттарҙа «фатиха биреү» мәғәнәһендә «бата уҡыу» ҡулланыла. Ҡеше нимә ниәтләй, нимә эшләй — бөтә осраҡта ла алғыш әйтелгән. Улар ғөмүми ҙә (№ 153В), эштең уңышын хәл итеүсе ҡоралдың, ярҙамсының уңғанлығын № 140А), уңышлы һөҙөмтәнең төп шартын (№ 155А), уңышлы һөҙөмтә (№ 140Д, З) теләү рәүешендә лә, башҡа төрлө лә әйтелергә мөмкин.

[14] Абылкасимов Б. Ш. О некоторых особенностях благопожеланий // Тюркология-88: Тезисы докладов и сообщений V Всесоюзной тюркологической конференции (7—9 сентября 1988 г.). — Фрунзе: Илим, 1988. С. 423—424.

Тәғәйенләнештәре яғынан алғыштар махсуслашҡан һәм махсуслашмаған (универсаль) төрҙәргә бүленә. «Махсуслашҡан» алғыштар билдәле бер һөнәргә, кәсепкә хас этнографик деталдәргә бай була. «Эт», «саңгы», «һыҙма», «һунар ҡошо» телгә алынғандары — һунарсыға; «солоҡ», «күс», «бал», «умарта», «кирәм» кеүек һүҙҙәр ингәне — ҡортсоға әйтелә.

Йәйең йәпле булһын,
Уғың уҡлы булһын! —

тип, аусыны ла, яусыны ла, яугирлеккә имтихан тотоусыны ла (йәғни инициацияға дусар ителеүсене лә), уҡ-һаҙаҡ менән уйнаусы баланы ла алҡышларга мөмкин.

Заманалар үтә килә, алғыштың «махсуслашҡан»мы, әллә түгелме икәнен, үҙ халҡындың этнографияһы, тарихы хаҡында хәбәрҙар булмай тороп, аңлауы ауырлаша.

Тәңре һиңә дарман бирһен,
Тау әйәһе фарман бирһен, —

был алғыштың адресатын белер өсөн, тәңре һәм тау әйәһе хаҡында төшөнсәң булыу ғына етмәй. Тау әйәһенең музыка, әкиәт тыңларға яратыуы, шул «эстетик ихтыяжын» ҡәнәғәтләндергән сүрәттә генә һунарсыны кейеккә үҙе юлыҡтыра [15] тигән ышаныу хаҡында ла мәғлүмәтең булыуы кәрәк.

Им-том ярҙамында сихырҙы әйәһенә кире ҡайтарган кеүек, яман һүҙҙе, ҡарғышты ла кире борор булғандар. Алғышҡа алғыш әйтеү йолаһы ла бар (№ 144).

Алғыштар кешене дәртләндереү, ҡеүәтләү, уның уңышына булышыу маҡсатынан әйтелһә, ҡарғыш, әр һүҙе кешенең күңелен төшөрөү, рухын һындырыу маҡсатын алға һөрә. Им-том һамаҡтары ла йыш ҡына алғыш менән ҡарғышты хәтерләтә. Әйәһен ташлап киткән ҡотто имсе берсә ағын һыуға, берсә аҡ балыҡҡа сағыштыра, унан ҡалһа кешнәп килгән айғырға, мөңрәп килгән һыйырға оҡшата (№ 25Г, Ғ); ҡыҙылсаны имләгәндә — Аллаға (№ 53), ергә һалып имләгәндә — Ер-һыуға (ер-һыу тәңреһенә, № 62В) һығына. Шуның менән ҡоттоң, илаһи заттарҙың күңелен табып, уларҙан мәрхәмәт күрергә иҫәп тота. Ә әрләү, ҡарғау формаһындағы им һүҙе сир-зәхмәттең ҡотон алыуҙы, уға психологик баҫым яһауҙы маҡсат итә. Татран ҡыуыу һамағында:

Тат-тат, татран,
Татран һиңә баҡырам
(Йәғни ҡысҡырам, әрләйем), —

тип, башта иҫкәртеү генә яһала. Артабан шул үҫкәртеү ғәмәлгә аша:

---

[15] Алексеев Н. А. Ранние формы религии тюркоязычных народов Сибири. — Новосибирск, 1980. С. 255—261.

Татран, татран,
Убырлы, ыстырам,
Шаҡшы мәлғүн, тфү, тфү!

Этте арбағанда ла әрләү алымы ҡулланыла (№ 71Б). Йылан арбағанда иһә, уның сослоғо, етеҙлеге маҡтала-маҡтала ла, аҙаҡ «Ҡәкерәйеп ҡат, йылан!» — тип ҡарғыш әйтелә.

Шулай итеп, айырым-айырым ҡарағанда, мифик заттарҙың да, сир-зәхмәттәрҙең дә йола менән уртаҡлығы юҡ, әммә уларҙан һаҡланыу, ҡотолоу өсөн, билдәле бер ҡағиҙәләрҙең үтәлеүен шарт итеп ҡуйыу, әйбер, хәрәкәт, ым-ишара, имитация, алғыш, ҡарғыштар менән тамырҙаш, һүҙ сәнғәте өлгөләренең магик көсөнә таяныу — барыһы ла уларҙы йола күренештәренә мөнәсәбәтле итә.

## 3

Тирә-йүнде оҙайлы күҙәтеүҙәр, һынауҙар һөҙөмтәһендә алдағын көн элек юрау тәжрибәһе тупланған. Ошоноң менән махсус шөғөлләнеүселәрҙе яурынһынсы, һынсы, күрәҙәсе, ырымсы тип йөрөтөр булғандар.

Күрәҙәлек иткәндә, боронғолар сәбәп һәм һөҙөмтә бәйләнешенең логик эҙмә-эҙлелеген бутап, теге йәки был үҙгәрешкә сәбәп булғанды — һөҙөмтә тип, һөҙөмтәне — сәбәп тип танығандар. Ҡышын көн һалҡынайыр булһа, ай кәртәләнә; йылыныр булһа, Көн (йәғни Ҡояш) кәртәләнә. Боронғолар шуны, киреһенсә, ай кәртәләнгәнгә, көн һалҡыная; ҡояш кәртәләнгәнгә, көн йылына тип аңлаған да был тәжрибәһен: «Ай кәртәләнһә, аҙбарыңды әҙерлә, Көн кәртәләнһә, көрәгеңде әҙерлә» (йәғни ҡар яуа, көрәргә әҙерлән) тип, формула төҫөн биреп, хәтергә бикләп ҡуйғандар. Тән ағзаларының, ҡош-ҡорт, мал-тыуар, йорт-ҡаралтыларының торошо үҙгәреүгә ҡарап юрағанда ла сәбәп менән һөҙөмтә бәйләнешен кирегә әйләндереү принцибы һаҡлана. Төш ырымы иһә, ғәҙәттә, кире символдар системаһына (төштә илау — өндә ҡыуаныуға, көлөү — илауға), төҫтәр (аҡ — ырыҫҡа, аҡ кейем кейеү — дуҫ-иш менән күрешеүгә, ҡыуаныусҡа), оҙонлоҡ (арҡан, дилбегә, билбау — юлға сығыуға) ишараһына таяна.

Йыл, миҙгел, көн торошон фенологик күҙәтеүҙәр ярҙамында билдәләгәндәр. Бындай саҡта ҡоштарҙың ҡасан, нисек килеүе лә, килгәс, ҡайҙа ҡуныуы ла, нисек һайрауы (ҡысҡырыуы) ла иҫәпкә алынған.

Ғаләм киңлегендә билдәле бер дәүерҙә генә була торған үҙгәрештәр ҙә һынсылар иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Был осраҡта юрау бер генә принципҡа таянмай: ул күренештәрҙең берәүҙәре үҙҙәре үк ырым, икенселәре теләк рәүешендә әйтелә торған юрауға сәбәп кенә була. Сулпан йондоҙо юғалып торһа (№ 103), Ҡойроҡло йондоҙ күренһә (№ 104), Һаҙағай уйнаһа (№ 105), — һуғыш сыға. Тимәк, был күренештәр — афәт ырымы. Ә Ҡәҙер төнө асылғанда, күк килгәндә (№№ 106 А, Б, 109 А—З), кеше ни те-

ләһә, шул алдына килә була. Яңы тыуған айҙы күргәндә, юралаһы, өлгәшәһе нәмә теләк рәүешендә түгел, ә ғәмәлдә өлгәшелгән кеүек әйтелә (№ 108 А, Ғ).

Бер сирҙе бер генә төрлө имләү менән сикләнмәгән кеүек, бер ырымды тик бер төрлө генә юрамағандар. Мәҫәлән, тәүләп кәкүк тауышын ишеткәс, ергә ятып тәгәрәгәндә усҡа эләккән тупраҡты берсә үлемгә, берсә рәнйеүҙән арыныуға тип юрайҙар.

Метеорологик, фенологик һәм ваҡыт ағышын күҙәтеүҙәр тәжрибәһе көн, тәүлек( уларҙың өлөштәре: иртә, төш, кис, төн), аҙна (уның өлөштәре: бөгөн, иртәгә, иртәнән һуң, кисә, өләкөгөн, береһе көн), ай, миҙгел, йыл, мөсәл, быуат һәм уларҙың «ҡылығы» тураһындағы төшөнсәләре тыуыуына килтергән. Ваҡыт төшөнсәһен береүсе атамаларҙы ижад иткәндә, боронғолар үҙҙәренең кәсебен, тирә-йүнде күҙәтеү тәжрибәһен иҫәпкә алғандар. Рәсми телдә шишәмбе тип йөрөтөлгән көндө атлы башҡорт атланған көн, йәғни юлға сыға (күсенә) торған көн, тип атаған. Көндөң өлөштәрен, Ҡояш һөңгө буйы күтәрелгәс, Ҡояш байыуға тышау (дилбегә, арҡан) буйы ҡалғас, тигәндә атлы һәм яугир халыҡ тәжрибәһе сағыла. Ә ай исемдәрендә халҡыбыҙҙың хужалығы, кәсебе тураһындағы мәғлүмәттәр дөйөмләштерелгән: май — һабанай, июль — маяй (һыйырға һөт төшөп, майға мулыҡҡан ай), август — урағай һ. б. Башҡорттағы ай исемдәренең шундай үҙенсәлеге лә бар: ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ араһындағы хеҙмәт бүленешенән сығып, шул ике мөхиттә бер үк ай үҙенсә атала: ир-ат июнде — күс айы, июлде — бесәнай, тиһә, ҡатын-ҡыҙ уларҙын беренһен аҡмай (майбаш), икенсеһен — һарымай тип йөрөткән. Борон йылды алтышар айҙан торған ике миҙгелгә («Хаҡтың ҡөҙрәте шундайҙыр: Бер алты айҙы ҡыш иткән, Бер алты айҙы йәй иткән, ти», — ҡобайырҙан) йә туҡһанышар көндән торған дүрт айға (Яҙ айы — яҙ туҡһаны, йәй айы — йәй туҡһаны, көҙ айы — көҙ туҡһаны, ҡыш айы — ҡыш туҡһаны) бүлеп йөрөтөү ғәҙәте лә хужалыҡ тәжрибәһе менән аңлатыла: тәүге бүленеш күсмә малсылыҡ менән көн итеүселәргә, һуңғыһы игенселек кәсебен үҙләштереүселәр өсөн ҡулай булған. Бына шулай халыҡ календары тыуған.

Ваҡыт-миҙгел бүленештәренең «ҡылығы» хаҡындағы төшөнсәләр һынамыштар рәтен тулыландырған. Ваҡыт-миҙгел һынамыштары төрлө-төрлө принциптарға таяна. Мәҫәлән, йыл һынамыштарының берәүҙәре уны тәбиғи булмышы буйынса («Йылан йылы — һыҙғыраҡ йыл», «Йылан йылы — яуынлы йыл»), икенселәре, һөҙөмтәһенән ҡарап ҡылыҡһырлай («Барс йылы — байлыҡ», «Ҡуй йылы — ҡытлыҡ», «Сысҡан йылы — сысҡан күп, сөнки иген ныҡ уңа»), өсөнсөләрендә йылдың булмышы туранан-тура баһалана («Йылҡы йылы — ҡаты йыл», «Һарыҡ йылы — еңел йыл»), дүртенселәре кешеләрҙе иҫкәртеү формаһында әйтелә («Барс йылы барын сәс, һис булмаһа тары сәс», «Йылҡы йылының башынан һаҡлан»).

Йылдарҙы йән эйәләренең исеме менән атаған календарь көнсығыш халыҡтарының күптәренә уртаҡ һәм ул боронғо тотемистик

ҡарашҡа нигеҙләнә. Әммә был һынамыштар бер үк тигәндә аңлатмай. Сөнки төрлө халыҡ төрлө хужалыҡ төрө менән шөғөлләнә. Бер үк кәсеп менән шөғөлләнгән сүрәттә лә, төрлө тәбиғәт шарттарында, төрлө географик киңлектә, зонала йәшәй. Шулар һынамыштарҙың да төрләнеүенә, бер үк йылдың төрлөсә һыналыуына сәбәпсе була. Йылан йылын нуғайҙар, мәҫәлән, ике ослораҡ йыл тип белә һәм; «Аты сувыҡ йыландынъ. Оннан ни шыгараясынь» (исеме һыуыҡ йыландың, унан ни өмөт итмәк кәрәк), — тип баһалай. Татарҙар араһында уны, киреһенсә, йылы йыл тип юраусылар бар [16].

Бер үк халыҡта ла бер үк йыл төрлөсә һыналырға мөмкин. Йылан йылы башҡорттарҙа Һыҙғырыҡ (№ 169Б) тип тә, Яуынлы йыл тип тә (№ 169Л) баһалана.

Йыл һынамыштарының (һәр хәлдә, башҡорттарҙыҡының) тағы шундай бер үҙенсәлеге лә бар: башҡалар үгеҙ, тәкә, әтәс йылы тигәне беҙҙә — һыйыр, ҡуй (һарыҡ), тауыҡ йылы, енес яғынан айырылмағаны — башҡа халыҡтарҙағыса. Шуға таянып, борон башҡорттарҙа, монголдарҙағы кеүек, мөсәл эсендә йылдарҙы «ҡаты йыл» йәки «ир-ат йылы» (сысҡан, барс, ылыу, йылҡы, маймыл, эт йылы), «йомшаҡ» («еңел») йәки «ҡатын-ҡыҙ» йылы (һыйыр, ҡуян, йылан, ҡуй, тауыҡ, сусҡа йылы) тип бүлер булғандар, тип фараз итергә мөмкин.

Борон «теге йәки был хайуан өсөн хас булған холоҡ-сифаттар уның исемен йөрөтөүсе йылға ла, ошо йылда тыуған кешеләргә лә күсә тип ышанғандар» [17]. Шуға ла, ҡаты йылда тыуған егеткә йомшаҡ йылда тыуған ҡыҙ иш түгел, тигәндәр.

Халыҡ календары хужалыҡты, кәсепте яйлауға хеҙмәт итеү менән генә сикләнмәгән, ул кеше ғүмеренең төрлө дәүерҙәрен, шул дәүерҙәге хәлен билдәләргә, шуларҙан сығып, йәмғиәттәге, ғаилә-көнкүрештәге бурыстарын, уның алдында башҡаларҙың бурыстарын көнәлек иҫкәртеүгә лә яйлаштырылған (№ 175А, Б, В, Г).

Халыҡ календары, һынамыштар ваҡыттың иҫәбен, «ҡылығын» билдәләү, хужалыҡ эштәрен уңышлы алып барыуға ғына түгел, бер быуындың әхләҡи, ғаилә-көнкүреш тәжрибәһен икенсеһенә еткереүгә лә хеҙмәт иткән.

Йолаларҙың шундайҙары бар: улар бары билдәле бер миҙгелдә генә атҡарыла. Яңы йыл тыуыуын Науруз байрамы менән, яҙ килеүен Ҡарға бутҡаһы, унан Ҡәкүк сәйе менән билдәләһәләр, яҙғы эштәр бөткәс, теләк салыу, май сәйе, һабантуй байрамдары

[16] Керейтор Р. Х. Народный календарь // Календарь и календарная обрядность Карачаево-Черкесии. — Черкесск, 1989. С. 96. Мәхмүтов Х. Ш Ел тәүлеге — 12 ай. — Казан, 1991. — 10—13 нче б.

[17] Мәхмүтов Х. Ш. Ел тәүлеге — 12 ай. 8-нче б.

үткәрелгән. Йәйләүҙәргә сыҡҡан осорҙа иһә — йыйындар, көҙөн — Сөмбәлә байрамы, ҡар яҡҡас — Һуғым байрамы, Ҡаҙ өмәләре, көн ҡыҫҡарыуҙан туҡтаған осорҙа Нардуған байрамы уҙғарылған. Нардуған, һуғым байрамы, Ҡаҙ өмәһе, Ҡәкүк сәйе кеүек байрамдарҙа, ғәҙәттә, бер ауыл кешеләре генә ҡатнашҡан. Айырым кешеләр ҡырҙан ошо мәлгә ҡунаҡ саҡырһа, улар ҙа байрамдан ситтә ҡалмаған. Һәүнәк йыйыны, Зәйнулла йыйыны, Атайсал йыйыны кеүек оло байрамдарҙы төрлө ырыу бер булып, Ҡарға бутҡаһы, Ишәле йыйыны кеүектәре ауыл-ауыл ҡара-ҡаршы саҡырышыу рәүешендә үткәргән. Ә инде Сәхрәгә сығыу — ир менән ҡатындың ғына тәбиғәт ҡосағында үткәрә торған аулаҡ байрамы булған.

Борон байрам табындарында ир-ат бер башҡа, ҡатын-ҡыҙ бер башҡа ултырыр булған. Айырым байрамдар ҙа енес буйынса бүленгән. Ҡесе йыл, Ҡарға бутҡаһы, Суҡлы ҡайынға барыу, Әбейҙәр сыуағы — ҡатын-ҡыҙ йыйыны булһа, Оло йыл байрамы — ир-ат байрамы иҫәпләнгән. Шуға ла уңда-бында Ҡыҙҙар тауы (ташы), Ҡилен ташы, Ирҙәр тауы (ташы) кеүек атамалар осрай. Мәҫәлән, Бөрйән районы Байғаҙы ауылы янындағы Ураҙы тауындағы текә ҡая — Ҡыҙҙар ташы, түбәге — Ирҙәр ташы тип йөрөтөлөүе — ике заттың борон ике башҡа йыйын үткәреү ғәҙәте булыуына документ әһәмиәтендәге дәлил ул. Ә «борон» тигәнебеҙ матриархат дәүере булһа, ни ғәжәп?! Гүзәл заттың байрамдарының да, уларға бәйле топонимик атамаларҙың да ирҙәрҙекенә сағыштырғанда (һәр хәлдә, беҙгә билдәлеләренең), күберәк булыуы ҡатын-ҡыҙҙың нәҡ шул дәүергә хас өҫтөнлөгөнә ишара.

Заманында һәр байрамдың саҡырыу рәүеше үҙенсә булған. Ырыу-ара үткәрелгән йыйындарға, ат еткән урынға — ат, хат еткән ергә хат ебәреп, ҡунаҡ саҡырғандар. Ҡарға бутҡаһына алсабыр булған әбей менән бала-саға һәр ҡапҡаға борола-һуғыла, ҡарға булып ҡарҡылдай-ҡарҡылдай, саҡырыр булған. Тәүгеһендә ырыу-ара бәйләнеш тотоу формаһы, һуңғыһында ҡарға культына инаныу сағылған (ҡарҡылдаусы бала-саға — бала ҡарғаларҙы, алсабырҙың балаларын осорға, емшәнергә өйрәткән инә ҡарғаны хәтерләтеүе лә шунан килә).

Миҙгел байрамдарына саҡырыуҙың рәүеше тарихи, этнографик нигеҙе төрлө булған сүрәттә лә, уларҙың барсаһына ла бер мотив уртаҡ: ул — байрамға барыу шартын әйтеү. Ҡарға бутҡаһына саҡырғанда, ул шарт ҡарға исеменән еткерелә:

— Ҡарға әйтә: «Ҡар, ҡар,
Туйым етте, — бар, бар!
Ярма, күкәй алып бар,
Һөт, майыңды һалып бар!» (187F).

Байрамға барыу шарты аҙыҡ-түлек менән генә сикләнмәй. Түшәк-яҫтыҡ тотоп барыу ҙа, ҡупшы кейенеү ҙә, бала-саға эйәртеү ҙә шарт.

Науруз байрамына барыу өсөн аҡса биреү шарт («Науруз ха

ҡы — бер алтын», № 180Г). Әммә наурузсылар уны үҙҙәре теләгән изге теләккә әжер рәүешендә генә һораған кеше булып ҡыланалар. Һамаҡтарының өс юлы һайын: «Науруз мөбәрәге бар, — тип ҡабатлайҙар. — Изге доғалар ҡылдыҡ», — тип тә өҫтәйҙәр (№ 180Г). Ә Нардуған байрамына саҡырғанда, бары изге теләктәр теләйҙәр, һоранмайҙар (№ 179Б). Әммә башҡа байрамдарға барыу шартын әйтеп саҡырыуҙы белгән кеше шул теләкте лә шарт үтәргә саҡырыу тип аңлай.

Саҡырылмаған ҡунаҡты башҡорттар артыҡ күрмәгән, килеһенсә, уны «тәңре ҡунағы» тип атаған: «Маҡтап йөрөйһөң», «Яҡшының ҡунағы — бер көндә», тип һыйлаған, ә инде саҡырылып та килмәүҙе яҙыҡ эш, тип белгән. Йола байрамына килмәү, мәҫәлән, һаранлыҡ билдәһе тип баһалана. Ҡарға бутҡаһы байрамына саҡырғанда, тап шуға күрә:

— Ҡарғатуйға бар, бар!
Ҡарғатуйға бармағандың
Күңеле булыр тар, тар, —

тиҙәр саҡырыусылар (№ 183Д). Ә Науруз байрамына саҡырыусылар: «Ҡарама ялтан-йолтан! Ҡараһаң, бир ике алтын!» — тип, һаранлана ҡалһа, шартты икеләтә үтәттереү менән янап, йорт хужаһын иҫкәртеп ҡуялар.

Йыйын-байрамдарҙа ҡәҙимге ризыҡ йыйыла. Әммә ризыҡ бергә ҡушылып, бешеп сыҡҡас, ул ҡәҙимге лә булмай. Сөнки күмәк кешенән йыйылып, бер ҡаҙанда, бер мейестә, бер табала бешә һәм күмәкләп ашала. Шул уны йола ризығы итә. Берәүҙең ризығы менән (мәҫәлән, ҡорбан ғәйетендә, теләккә сыҡҡанда, бер кеше биргән малды салып, шуны бешереп) күмәк һыйлана икән, ул да йола ризығы була. Йола байрамдарына махсус әҙерләнә торған ризыҡ та (ҡарға бутҡаһы ла; ураҡ бөткәс ер өҫтөндә әҙерләнгән бутҡа ла; кәкүк сәйенә килтерелгән аҡ ризыҡ та; яҙ башында әруахтарға аят уҡытҡас, ашала торған баш ите лә) шундайҙар рәтенә инә.

Йола ризығының саҡырылғандарҙың ғына түгел, саҡырылмай килгәндәрҙең дә алдынан-артынан артып ҡалырлыҡ булыуы, етемеҫергә, ҡош-ҡортҡа өлөш сығырлыҡ итеп әҙерләнеүе шарт.

Беҙ ҡапҡандың ҡалғанына
Турғай, сәпсек йыйылһын, —

тиҙәр ишәлеләр, үҙҙәренә ҡунаҡҡа килеүсе ләмәҙҙәрҙән күпер асыу күстәнәсен талап иткәндә. Ҡарға бутҡаһы байрамында ҡарғаларға өлөш сығарырлыҡ итеп бутҡа бешерәләр, кәкүк сәйендә кәкүк ҡунған ағас төбөнә ҡойоп китерлек аҡ ризыҡ арттырыла.

Күмәктән әҙләп йыйылып, мул ризыҡ әҙерләнеүе, уның артып ҡалыуы — киләһе ризыҡтың мул булыуын теләүҙе аңлата. Ҡарға бутҡаһы байрамында ашнаҡсыларҙың:

— Иләк менән иләп тор,
Күнәк менән ҡойоп тор, —

тип һамаҡлауы ла (№ 183Г) ырыҫ теләүгә тиң. Был теләк Науруз байрамында асыҡтан-асыҡ белдерелә:

— Йылдың башы уң булһын,
(Ы)ризығы мул булһын,
Игендәр шашып уңһын,
Ҡаҙандар ташып торһон!

Йола байрамдарында, ҡунаҡ йыйған табында өлөш һөйәге тотторoccurrence — үҙе бер йола атҡарыу ул. Һәр өлөштөң символик мәғәнәһе бар. Ҡош итен бүлгәндә, мәҫәлән, ҡыҙҙарға ҡанат биреү — уларҙың ата йортонан тиҙерәк кейәү йортона күсеүен, малайҙарға тояҡ (бот) биреү — уларҙың ил гиҙеүен, күпте күреп, аҡыл туплауын теләү ул.

Табында өлөш бүлгәндә, һәр кемдең йәмғиәттәге һәм ғаиләләге урыны иҫәпкә алына, иерархия тәртибе күҙәтелә. Өлөшкә бәйле әле әйтелгәндәр һәм тояҡлы малды, ҡошто билдәле һандағы өлөштәргә бүлеү йолаһының тотороҡлашыуы — халыҡтың һунарсылыҡ, унан малсылыҡ кәсебе менән борондан шөғөлләнеүенән, табышты уртаҡлашып ашау, шул уҡ ваҡытта һәр кемдең булдыҡлылығын иҫәпкә алыу ғәҙәтенән килә. Мәжлестәге «хеҙмәт бүленеше» лә (табын хужаһы, көрәгәсе, аяҡсы, ҡурайсы, йырсы, йомошсо), урынлашыу тәртибе лә (түргә абруйлы аҡһаҡалдарҙы, ил ағаларын ултыртыу), йырсы менән ҡурайсыны ихлас тыңлап, «Һай, шулай!», «Вай, вай!», «Һай, көй икән!» кеүек һүҙҙәр менән ҡеүәтләп, көй күтәрешеү ҙә (берҙәмлек күрһәтеү ҙә) — ырыу йәмғиәтендәге тәртиптәрҙең үҙенсәлекле сағылышы ул.

Борон ағай-эне, дуҫ-иш кенә үҙ-ара саҡырышып, мәжлес ҡороп ултырмаған. Әйткәнебеҙсә, ырыу менән ырыу ҙа ҡара-ҡаршы саҡырышҡан. Ишәле менән Ләмәҙ ауылдарының ҡара-ҡаршы йыйын үткәрешеүҙәре — шуның бер эҙемтәһе. Унда көлкөлө театраль күренештәр мул ҡулланыла. Ике ауыл бер-береһен төртмә таҡмаҡтар менән мәсхәрәләй, әммә берәү ҙә үсекмәй, бөтәһе лә һүҙ күтәреүсәнлек күрһәтә. Йыйындың ошо үҙенсәлеге дуаль йәмғиәт тәртиптәрен хәтерләтә. Кешеләрҙең тәүтормош көтөүенә алмашҡа килгән ул йәмғиәттә ике ырыу бер-береһе менән ҡоҙа булышҡан (әйткәндәй, ләмәҙҙәр менән ишәлеләр бер-береһенә ҡоҙа, ҡоҙағыйҙан өҙөлөп тора). Әммә үҙ-ара хурлашып, кәмһетешеп йәшәһәләр ҙә, шул уҡ ваҡытта был уларға уртаҡ дошманға ҡаршы бер төптән күтәрелергә ҡамасауламаған [18].

Йыйындарҙың, миҙгел байрамдарының, олоһо ла, кесеһе лә башҡорт йәмғиәтендә мөһим ижтимағи һәм тәрбиәүи әһәмиәткә

[18] Золотарев А. М. Родовой строй и первобытная мифология. — М., 1964. С. 288—289.

эйә булған. Йыйындарҙа, мәҫәлән, ырыу-ара мәсьәләләрен, ил яҙмышын уртаға һалып һөйләшер булғандар. Унда кешеләрҙең һөнәргә маһирлығы менән бер рәттән йыйнаҡлығы ла, бөхтәлеге лә һыналған (№ 190).

Йыйын, миҙгел байрамдары йәмғиәт менән шәхес, шәхес менән шәхес араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яйлауға, әхләҡи тәрбиә биреүгә лә ҡулай булған. Миҫалға, табынды ғына алайыҡ. Өлөш биргәндә:

— Быныһы була муйыны,
Ете була быуыны.
Ете быуын кемдеке?
Ала белһәң, — һинеке!
Алғы умыртҡа — өлөшлө,
Өлөшлө ҡул — килешле.
Артҡы умыртҡа — ун ике,
Ала белһәң, — һинеке! —

тиҙәр (№ 287B).

Өлөштө ҡулға төшөрөү өсөн, зирәклек күрһәтеү талап ителеүен әйтмәй өлөшсө, ә уны алғас, ашай белеүҙе күҙ уңында тота. Һәр өлөш тағы ла бер нисә тигеҙ өлөштәргә бүленмәле була. Ә йола буйынса, һәр кем үҙ өлөшөн башҡаларға ауыҙ иттерергә тейеш. Бында өлөш алған кешенең үҙе тиңһенгән кешеләргә бер тигеҙ өлөш сығарыу мөмкинлегенә ишара яһала булыр. Өлөшсө һамағы шуныһы менән дә фәһемле: унда ололарҙы хөрмәт итергә, кесе алдында оло булырға саҡырыу ҙа, ырыуҙар берҙәмлегенә өндәү ҙә бар:

Унан килә һигеҙгүҙ,
Һигеҙгүҙгә — һигеҙ һүҙ.
Һүҙ айышы — ырыуҙыр.
Ырыулы ил — ырыҫтыр.

## 5

Башҡорттар борон-борондан һунарсы, малсы булған, балыҡ та тотҡан, иген дә иккән. Ер-һыуҙың матурлығын, уңайлылығын шуға ла ошо кәсептәр күҙлегенән баһалағандар [19]. Быуаттар буйы шөғөлләнә торғас, һәр кәсептең үҙ йолаһы, үҙ фольклоры хасил булған. Эшкә тотоноп киткәндә үк, уның уңышлы башланып, уңышлы тамамланыуын тәьмин итеүҙе көҫәү йолалары атҡарылған. Илаһи заттарға, әруахтарға мөрәжәғәт итеп, «Ҡулдың ҡеүәтен бирһен!» (№ 2133) кеүегерәк эш башы теләге әйтелгән. Эш башы теләге эш ҡоралына («Туҫтаҡҡайым тулып кит!» — № 215A),

[19] Башкирские шежсре. — С. 29—30. БХИ: Риүәйәттәр, легендалар / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авт. Ф. А. Нәҙершина. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. — 63-сө б.

объекткә («Йыуа, йыуа, йыуа, күрен!» — № 216Б) — изге рухтарға мөрәжәғәт итеүгә тиң.

Эш башы теләктәренең ҡайһы берәүҙәрендә ялбарыу мотивын теләк-маҡсат белдереү алмаштыра:

— Эй, сләктәр булһа ине,
Силәктәрем тулһа ине,
Матур ҡыҙҙарым менән,
Яратҡан әбейҙәрем менән
Ашарға яҙһа ине! (№ 215З).

Эштең төрө әйтелмәгән башламдар ҙа бар. Әммә аяҡ-ҡул хәрәкәтенең тасуирланышы уларҙың ҡайһы эшкә тотонор алдынан әйтелерен аңғарта. «Уң ҡулдан, һул ҡулдан, — ҡотло ҡулдан!» № 214Е). Май тасҡауҙы белгән кеше был һамаҡтың ошо эш алдынан әйтелеүгә тәғәйен икәнен аңлай. Ә инде: «Эшем башы — эш ҡары», «Ике кеше күрмәһен», тип башланғандары — махсуслашмаған эш башламы (№ 214А, Б).

Һамаҡ, теләк әйтеүҙән тыш, эштең уңышын тәьмин итә торған бүтән сараларға мөрәжәғәт итҡәндәр. Мәҫәлән, тыйыу йолаһын еренә еткереп үтәргә тырышҡандар (№№ 224А, Б, Ғ, Д, З, 225Б).

Башҡа халыҡтарҙың һунарсылары кеүек, башҡорттар ҙа, ауға сыҡҡанда, кейектең ысын исемен телгә алмағандар. Һунарсылар телендә «олатай» һүҙе айыу тигәнде, «ҡыр һыйыры» — боланды, «ҡыр кәзәһе» — илекте (ҡоралайҙы), «оҙон ҡолаҡ» — ҡуянды, «көлтә ҡойроҡ, йылтыр күҙ» — төлкөнө аңлатҡан. Кейекте албырғатыуға тәғәйен һамаҡтарҙа ла тыйыу ҡағиҙәһе асыҡ күҙәтелә: мәҫәлән, төлкө үҙ исеме менән аталмай, бары уның тышҡы билдәләре, фиғылы тасуирлана, ә ул тасуирлама уның хәйләкәрлеген («әйләнмәле, һуҡмалы»), тышҡы күркәмлеген (түҫөнөң ут ҡыҙыл, ҡойроғоноң көлтәләй булыуын, күҙенең янып тороуын) маҡтау кеүек аңлашыла. Быны, йәнәһе, үҙе лә аңлар, тип ышанғандар. Шул рәүешле һунарсылар тәүҙә был йылғыр кейектең күңелен, шунан үҙен ауларға тырышҡандар:

— Әйләнһәң дә, мин һуғам,
Боролһаң да, мин һуғам... (№ 226Б).

Һамаҡ төлкөнөң үҙенә төбәп әйтелә. Шуға ла уның «Төлкө теле» тип аталыуы урынлы. «Ҡуян теле»нең дә тәғәйенләнеше «төлкө теле»неке кеүегерәк (№ 227Б).

Һунар кейегенә мөрәжәғәттәрҙән айырмалы рәүештә балыҡҡа төбәп әйтелгәндәрендә маҡтау ҙа, иҫкәртеү ҙә, янауҙа юҡ, бойороу ғына бар: «Йүгереп ҡап, йүгереп ҡап! Үҙ ишеңде, ҡушыңды тап!», «Ебәр ата-әсәңде, Атыу ярам эсеңде!» (№ 221Г).

Малсылыҡҡа бәйле йолалар башлыса ҡот, түллек төшөнсәһе менән бәйле.

Ҡот — күҙгә күренмәҫ абстракт төшөнсә. Әммә халыҡ уның йәшәгән урынын белә. Ул — малдың түбәһендәге йә һыртындағы

өлтөгө (№ 241А), малдың ашаған бесәненә лә күсә ала. Малды һатҡанда, уның ҡотон алып ҡалып була. Уның магик ҡөҙрәтле үҙ символдары бар (№ 241А).

Символдарҙың магик көсөнә ышаныу торлаҡ ҡороуға бәйле йолаларҙа ла күҙәтелә. Нигеҙ ҡоролаһаҡ урынға, тупһа тапҡырына аҡташ һалыу (№ 225А), нигеҙ ҡороусыға ауылдаштарының ашамлыҡ килтереүе (№ 255А, Б); иҙән майы (иҙән аҫтына май һалып) ҡалдырыу[20] шуға миҫал: аҡташ — аҡ бәхетте, нигеҙ ҡоролған ергә таш кеүек ныҡ ныҡ ныҡ тора торһон теләүҙе, төрлө йорттан килгән ризыҡ, май, миҙгел байрамдарындағы һымаҡ уҡ, муллыҡты, ырыҫ теләүҙе символлаштыра. Йорт төҙөгәндә, тула, кейеҙ баҫҡанда, иген урғанда, ашлыҡ һуҡҡанда һәм башҡа осраҡтарҙа өмә үткәреү, йәғни күмәк кешенең көсөн бер урынға туплау (күмәк йорттан йыйылып, бер ҡаҙанға һалынған ризыҡ, туйымлыҡ булыуҙан тыш, өмөттәге ырыҫты символлаштырған һымаҡ уҡ) уңай баһалана. Тимәк, өмә — боронғо коллектив хеҙмәт традицияһының дауам ителеше генә түгел, мәжүсилеккә хас ышаныуҙың кәүҙәләнеше лә.

Мәжүсилек башланғысы иген игеүгә бәйле йолаларҙа айырыуса аныҡ күҙәтелә.

Боронғо кешеләр орлоҡ сәсеүҙе Ерҙең түлләнеүе (ауырға ҡалыуы, ғомаклы булыуы) тип белгән[21]. Башҡорттар, йомортҡа — түллек символы, тип, уның магик көсөнә инанған[22]. Сәсеүлекте һөрөп, тырматып, йомшартыу — Ер-инәнең күңелен яулау, уға түлләнеү алды тәрбиәһен күрһәтеү ул. Ошо хәстәрлек һәм сәсеүлектә йомортҡа тәгәрәтеү орлоҡ сәсеүгә һалынған магик мәғәнәне, түллек төшөнсәһен көсәйтә. Ә инде илаһи заттарға:

Күк инәһе — күк яулыҡ,
Ер атаһы — ерән һаҡал!
Түбә туҡлыҡтары бир! (№ 264А),

Ер! Ер! Көсөң бир!
Берҙе бир, өсөн бир:
Ябаға тайҙың көсөн бир... (268В),

тип ялбарыу — «түлләнгән» Ерҙең мул уңыш биреүенә һаналған илаһи заттарҙан булышлыҡ һорау ул. Йәнле телдә 40, 60, 70, 90 һандары, ғәҙәттә, теүәл иҫәпте аңлатыуҙан «бик», «күмәк», «күп», «мул» тигән мәғәнәлә ҡулланыла. «Алтмыш арба арыш», «етмеш арба етен», «туҡһан арба тары» (№ 264В) һоралған «мул уңыш» төшөнсәһен һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Мул уңыш теләү — бер эш. Теләк ғәмәлгә ашып, шул уңыштың ризыҡҡа яҙыуы — икенсе эш. Ризыҡҡа яҙыуҙың төп шарты иһә —

---

[20] Торма Йожеф. Башҡорттарҙа матур йолалар бар. 164-се б.

[21] Фрэзер Дж. Дж. Золотая ветвь. С. 458; Путилов Б. Н. Песни южных морей. — М.: Наука, 1978. С. 19.

[22] Янгузин Р. З. Хозяйство башкир дореволюционной России. — Уфа: Башкнигоиздат, 1989. С. 181.

ил именлеге лә йән-тән һаулығы. Шуға ла илаһи заттан йәнә шуны теләр булғандар:

Илгә-мирға именлек бир,
Йәнгә-тәнгә аманлыҡ бир! (264А).

Муллыҡ, ырыҫ, ил именлеге, тән-йән һаулығы идеяһы эште тамамлағас (мәҫәлән, ризыҡты ҡуйыр еренә ҡуйғас, һарыҡтың йөнөн ҡырҡҡас) әйтелә торған теләктәргә лә хас.

Тәғәйенләнеше йәһәтенән кәсеп йолаларына яу-көрәш йолалары яҡын. Әммә йөкмәтке һәм идея йәһәтенән улар үҙҙәренә генә хас билдәләргә эйә. Ул йоланың һүҙ менән атҡарыла торған өлөшөндә (һәр хәлдә, беҙгә килеп еткән өлгөләрҙә) Күккә йә Ергә бағып, ниндәйҙер илаһи затҡа ялбарыу, һығыныу юҡ. Уның ҡарауы яу ҡырындағы яугир үҙ ҡулындағы ҡоралды Аллаһылай күрә, уға үтенеп ялбара (№ 271. Бәлки, ҡасандыр ҡоралдың рухы булыуына ла ышанғандарҙыр). Ә дошманы менән яугир ажар һөйләшә. Ажарланыу алыш алымын килешеү, үртәшеү әйтештәрендә асыҡ сағыла. Ошо һүҙ сәнғәте өлгөләре дошмандың рухын ҡаҡшатыуға хеҙмәт итә.

Хеҙмәт, кәсеп йолаларында һамаҡ, әйтештән тыш, йыр, таҡмаҡ та файҙаланыла. Эштең төрөнә ҡарап, улар бер осраҡта ваҡытты үткәрергә булыша (киндер иләгәндә, сигеү сиккәндә, бәйләм бәйләгәндә һ. б.), икенсе осраҡта хеҙмәтте еңелләштерә (һалсы, бүрәнәсе, киндер туҡмаусы йыры), юлды ҡыҫҡарта (ылаусы йыры). Хеҙмәт процесында төрлө йырҙар йырлау менән бер рәттән, шөғөлгә бәйлеләре лә йырлана.

Булыр микән был тула,
Булмаҫ микән был тула?
Был туланы баҫып бөткәс,
Уйнатыр микән хужа? —

тип йырлайҙар тула өмәһендә (мәҫәлән, № 253А).

Хеҙмәт йырҙарында тормош, яҙмыш, һөнәр хаҡында уйланыуҙар ҙа, социаль мотивтар ҙа булғылай. Һалсы-бүрәнәселәр, ылаусылар йыры нәҡ ошо йәһәттән башҡаларҙан айырылынҡырап тора. Бынан тыш уларҙа кәсеп үҙенсәлеге лә, хеҙмәт ритмы ла сағыла. Мәҫәлән, һалсы-ҡыуғынсы йырының ике юлы уларға, багорҙарын яңынан сабып, күкрәк тултырып, тын яңыртырға форсат бирә, ә «һо-оп! Һай, раз ищу!» ҡушымтаһы күмәк кешенең беләктәре бер юлы көсөргәнеүенә, бүрәнәнең бер талай алға күселеүенә булыша.

Дөйөм алғанда, кәсеп йолаһына бәйле фольклор элементтары кешенең хеҙмәтен еңелләштереүгә, эшенең уңышлы, емешле булыуын, көсөнөң елгә осмауын тәьмин итеүгә тәғәйен.

6

Халыҡта васыят, нәсихәт әйтеү, йәдкәр ҡалдырыу, көйлө хаттар яҙыу кеүек йолалар ҙа бар. Тәүге икәүһен, ғәҙәттә, өлкән быуын кешеләре атҡара. Улар шулай үҙҙәренән түбән быуынға, бала-сағаларына аҡыл өйрәтә, әхләҡ һәм донъя көтөү тәжрибәһен еткерә. Васыятта кеше үҙенән ҡалған мираҫты кемдәр нисек бүлешергә тейешен күрһәткән кәңәш тә була. Мөлкәт мәсьәләһе килеп ингәнгә, улар ҡағыҙға яҙылыусан. Уны васыятнамә тип атайҙар. Васыятнамәнең аҙағында уны яҙған (яҙҙырған) кешенең, шаһиттарҙың ҡултамғаһы ҡуйыла. Ул юридик көскә эйә булған документ иҫәпләнә.

Нәсихәттәр ҙә телдән һәм яҙма рәүештә еткерелә. Унда авторлыҡ, ғәҙәттә, теркәлмәй. Улар беренсе заттан да, өсөнсө заттан да әйтелә.

Нәсихәт биргәндә, әйткән һүҙ үтемлерәк, тәьҫирлерәк булһын өсөн, Аллаға арҡаланалар, уға һығынырға ҡушалар.

Раббыбыҙ!<br>
Пак иман менән тибә беҙҙең йөрәк.<br>
Раббыбыҙ!<br>
Мәңге нурлы, мәңге мәҡсүм * булһа ине<br>
күңелебеҙ! —

тигән һүҙҙәр бар бер нәсихәттә (№ 307Б). Нәсихәтсе үҙе Алланан «мәңге нурлы күңел» теләй, әммә, башҡаларға өндәшкәндә, бөтәһен дә Алланан көтөп кенә ятмаҫҡа: «ит иждиһат, ҡыл тәүәккәл, тәңренән ҡөҙрәт һора», — тип үҙенә лә тилбер һәм өлгөр булырға кәрәк икәнен төшөндөрә. Шул уҡ ваҡытта Алланы, иманды онотмаҫҡа ҡуша. Идеяһы: үҙең сәбәп ит, Хоҙай тәғәләнән эш ҡалмаҫ.

Нәсихәт өгөтләү стилендә генә түгел, булғанды йә булырҙы нейтраль стилдә констатациялау формаһында ла була:

— Донъяларҙа йәмдәр бөтөр,<br>
Халыҡ уңға, һулға китер,<br>
Ата-әсәгә хөрмәт бөтөр.<br>
Балаларҙан шәфҡәт китер... (307Г).

Нәсихәттәр бәйет, мөнәжәт, дәрт уҡыу көйөнә башҡарылыусан.

Нәсихәт менән васыятта өгөт, аҡыл, кәңәш мотивы өҫтөнлөк алып, шуларҙы биреүсенең шәхесе хаҡындағы иҫтәлек икенсел урында торһа, йәдкәр иң әүәл шәхестең үҙе хаҡында иҫтәлек ҡалдырырға тырышыуын сағылдыра. Йәдкәрҙе, ғәҙәттә, ирекһеҙҙән ситкә китеүсе яҙып йә йырлап ишеттереп, шуны отоп алырға тәҡдим итеү формаһында ҡалдыра. Риүәйәттәрҙән билдәле булыуын-

са, ҡулға алынғас, тыуған илдән һөрөлгәс, ҡасҡындар иҫтәлеккә йыр ҡалдырыр булған [23].

Йәдкәрсе йә әҙер йырҙарҙан үҙенең кисерешен сағылдырырлыҡ строфаларҙы йырлап ишеттергән йә үҙе сығарғанын бүләк иткән. Мәҫәлән, Ҡотләхмәт мулла, кулак исемлегенә теркәлеп, Себергә һөрөлгән. Ғәҙел булмаған хөкөмдө ауыр кисереүен әҙер йырҙарҙағы «Ҡәмселек тә менән юҡсылыҡты Белгертмәй бит ирҙең уяуы», «Ризыҡ яҙған икән — ирҙәр барыр, Тупраҡ яҙған икән баш һалыр» һәм үҙе сығарған йырҙағы «Күренә торған гонаһым юҡ, Күрешербеҙ мәхшәр көнөндә» кеүек һүҙҙәр аша әйтеп биргән (№ 306А).

Йәдкәр-иҫтәлектәр яҙышыу шәриҡтәштәр, әхирәттәр араһында ныҡ таралған күренеш. Ундай дәфтәрҙәрҙә аҡыллы кәңәшкә, нәсихәткә лә урын табыла.

Элек һалдатҡа оҙатыу йорттан мәйет сығарыуға тиң булған: егерме биш йыл (1863 йылғы хәрби реформағаса. — История СССР. — М., 1955. С. 105) хеҙмәт иткәнсе, әллә кем бар, әллә кем юҡ. Шуға ла, туған-тыумаса, ауыл менән хушлашҡанда мәңгелеккә бәхилләшкәндәй:

— Беҙ ауылдан сыҡҡан саҡта,
Күтәрелде томандар,
Донъя хәлен белеп булмай. —
Бәхил булың, туғандар, —

тип йырлар булғандар (№ 311А). Имен ҡалған хәлдә лә, күрешеү көнө тиҙ тыумаҫын да аңғартҡандар: «Беҙҙең баштар йыраҡ китә — Ҡайта алмабыҙ тиҙ генә» (№ 311Г). Хәҙерге быуын һалдаттарының хеҙмәт итеү ваҡыты бик ҡыҫҡа. Әммә уларҙың йырҙары ла зар менән һуғарылған. Сөнки тыныс мәлдә лә һалдат баштары фажиғәгә юлығып тора, хаҡһыҙ йәбер-золом да кисерә.

Ғәскәри хеҙмәткә киткәндәрҙе, яу ҡырында ятып ҡалғандарҙы һағынғанда, улар йырлап киткән йә хаттарына яҙып ебәргән йырҙарын хәтергә төшөрәләр. Шул йырҙарҙы икенсе кеше ауыҙынан ишетеү ҙә һалдаттарҙы иҫкә алыуға сәбәп була. Һалдат йырҙары ла бына шулай йәдкәргә әүерелә.

Һалдаттар араһында ғына түгел, ғөмүмән, халыҡта хатты йыр, бәйет менән тамамлау ғәҙәте ныҡ таралған. Хатта әйтеп бөтөлмәгән кисерештәр бына шулай теҙмә юлдар аша еткерелә.

Шиғыр формаһы хат башланышында ла йыш ҡулланыла. Улары, ҡалыплашып китеп, әллә ҡасан уҡ үҙенең авторын «онотҡан». Хат башының иң ябай формаһы: «Хат башы — яҙ ҡаршы!» (№ 308А). Ҡыҫҡа, ләкин тос. Хатҡа ни яҙылыры билдәһеҙ, әммә уға яуап яҙыу мотлаҡ икәне ярайһы ғына ҡәтғи талап рәүешендә белдерелә. Ошо уҡ фекер бер ни тиклем киңәйтелеп тә әйтелергә мөмкин:

---

[23] БХИ: Риүәйәттәр, легендалар. 235—243-сө, 250—253-сө б.

— Хаттар яҙам, дуҫым, һеҙгә,
Әгәр ҡабул итеп алһағыҙ;
Минең яҙған хатты алһағыҙ,
Яуап хаты яҙып һалһағыҙ (309А).

Шарт ҡуйыла. Уның үтәлеүе билдәһеҙ, ә кеше үҙенең адресатына хат яҙып та ултыра. Ҡарамаҡҡа, логика боҙолған: кеше сыҡмаған ҡояшҡа ҡыҙына кеүек. Әммә эске логика бар бында: үҙ өмөтөнөң аҡланырына хат яҙыусының иманы камил.

Яуап-хатҡа өмөт ҡаршы яҡтың быға тиклем яҙған хаттарының тәьҫир итеү көсөнә баһа рәүешендә лә белдерелә:

«Иҫәнмеһегеҙ?» — тип башлайым,
Хат башы бит шулай башлана.
Һеҙҙең яҡтан хаттар килһә,
Уҡығанда, күңел шатлана (308Г).

Үҙендә ташҡан хистәрҙең ҡаршы яҡҡа ныҡ тәьҫир итеүенә өмөт иткәндә иһә, бындайыраҡ хат башламы файҙаланыла:

Ағиҙелдең аҡ ташы,
Һағынышлы хат башы —
Һағыныу түләге,
Күрешеү бүләге (308В).

Йәнәһе, хат авторының һағыныу хисе улай-былай ғына түгел, түлле, үрсемле, етешкән һағыныу.

Хаттарҙың шиғри өлөштәре назым менән көйләп, һамаҡлап уҡыла. Шуға ла бындай хат яҙыу йолаһын «көйлө хат яҙыу йолаһы» тип атарға була.

7

Донъяға яңы кеше килеүе борон-борондан ғаилә өсөн генә түгел, тотош ырыу яҙмышында ла мөһим ваҡиға иҫәпләнгән. Матриархат дәүерендә балаға һәр ҡатын (бала тапҡандан өлкәне) әсәй һаналған. Әсә хоҡуҡтары өҫтөнлөк ҡылған йолалар башҡорт бала бәпләү фольклорында тотороҡло эҙ ҡалдырған. Бала тыуғас, «тулғаҡ сәйенә», «бәпәй сәйенә» тик ҡатындар, әбейҙәр генә йыйылышып ҡотлауҙар, балаға, әсәгә, кендек инәйгә махсус бүләктәр биреүҙәр, «йүргәк исемен», «тәүге исемде» ҡушыу фәҡәт кендек инәһенең вазифаһы булыуы — боронғо дәүерҙән, Әсә культынан (олоҡлауҙан) ҡалған күренештәр. Асылда башҡорт бала бәпләү фольклоры — халыҡтың тәрбиә биреү, әхлаҡ һәм сәләмәтлек һаҡлау, сәнғәт, ижади аң үҫтереү тәжрибәһен туплаған тәрән тамырлы милли мәктәп.

Бала бағыу фольклорын ике өлөшкә бүлеп ҡарау мөмкин:

1) тормош барышында тәбиғи үҫеште, етлегеүҙе билдәләгән, бер йәштән икенсе ҡорға күсеүҙе раҫлаған йолалар;

2) тормошта килеп сыҡҡан хәлдәргә (сир, бәлә-ҡаза) ҡаршы тороу, ҡурсалау йолалары.

«Тулғаҡ сәйе» (331), «Исем ҡушыу», сөннәтләү (333Б), «Исем туйы», «Бәпес туй», «Ҡарын сәс алыу», «Теш туйлау», «Тәпәй туйы», «Бишек туйы» * кеүек йолаларҙа төп маҡсат бала ғүмеренең барышын, үҫеүен билдәләү. «Һаҡлау-ҡурсалау, йәки сәләмәтлек нығытыуға тәғәйендәре — күҙ тейеүҙән, ен-шайтандан һаҡлау, сәңгелдәк урлау, бала һатыуҙар («Эт исеме», «Ғүмерле исемдәр» (326), «Тәүге исем» (323В) ише йолалар булыр. Төрлө тылсымға нигеҙләнгән — яраттырыу, туған туғанды яҡынайтыуға (319), киләсәктә матур, саф күңел, тормош булмышын (322, 329), бәхетен (322А, В, 329В) ишәйтеүгә арналған күп төрлө йола саралары үҙҙәре айырым башҡа. Улар тәбиғи хәлдән дә һаҡлау-ҡурсалауҙарҙан да түгел, ә өсөнсө тараф — кеше үҙенең теләгәнен бойомға ашырыу маҡсатынан яралмыштыр. Ә инде был йөкмәтке теләктелә, һаҡлауҙа ла осрай торған һыҙат һәм бала бағыу фольклорында ҙур урын ала. «Йүгерә-йүгерә йүгерек булһын!» йәки «Атаңа шәфҡәтле бала, инәңә игелекле бала!» — ише раҫлауҙар һүҙ тылсымына ла, юрауға ла ҡарай. Был шартлы бүлеү, әлбиттә, әммә беҙ теге йәки был йолала өҫтөнлөк иткән төп маҡсат буйынса сиктәр айырабыҙ. Беренсе төркөм тип ҡараған йолаларҙа тәбрикләү, фатихалау үҙәктә торһа, икенсеһендә һаҡлау, ҡурсалау йәки ҡыуыу (яман көстө) саралары билдәләүсе һыҙаттар булып тора.

Аталған йолалар донъя халыҡтарының боронғо бала тәрбиәләү мәҙәниәтендә ҙур ғына урын биләй. Оҡшашлыҡтар күп [24] булған сүрәттә лә, башҡорттоң бала бағыу тәртиптәрендә милләткә хас ижади һынландырыу үҙенсәлеге, сағыу тойғололоҡ, итәғәт айырылып тора.

Бала бағыу йолалары башҡарылыш ваҡыты буйынса өс өлөшкә: тыуғанға тиклемге, тыуыу, тыуғандан һуңғы йолаларға бүленә [25]. Имен, сәләмәт бала хәстәре гоманлы ҡатынға махсус тәрбиә, махсус ҡағиҙәләр, тыйыуҙар, үҙен тотоу бурыстарында уҡ сағыла (күп кеше араһында йөрөмәҫкә, ҡош-ҡорт рәнйетмәҫкә һ. б.). Төрки, Ҡавказ, шулай уҡ урыҫ халыҡтарында гоманлы ҡатын тылсымына бәйле махсус тыйыуҙар, әҙәп ҡағиҙәләре булараҡ, үҫешкән [26]. Улай ғына түгел, Австралия, Индонезия халыҡтарында йөклө ҡатынға булған талаптар башҡорттоҡо менән бермә-бер оҡшашлыҡта (ит киҫергә, атай буласаҡ кешегә ағас

---

* Бишек туйы йолаһы буласаҡ ҡалым туйға туранан-тура бәйле һәм шул бүлектә өйрәнелә.

[24] Васильева Г. П. Магические функции детских украшений у туркмен. // Древние обряды, верования и культы народов Средней Азии. М., Наука, 1986, с. 182—192; Снесарев Г. П. Реликты домусульманских верований и обрядов у узбеков Хорезма. М., 1969. С. 70—81.

[25] Бикбулатов Н. В., Фатихова Ф. Ф. Семейный быт башкир XIX—XX вв. М., Наука, 1991. С. 86—96.

[26] Александров А., Лобанов С. Заметки из путешествий по Дагестану // ЭО, 1910, № 1/2. С. 165; Листова Т. А. Обряды и обычаи, связанные с рождением ребенка у русских западных областей РСФСР // ПИИЭ. М., 1986. С. 63.

ҡиҫергә ярамау, ауыр эш башҡармау һәм башҡалар) [27]. «Бала теләүҙә»ге ялбарыуҙарҙа сабыйҙың Хоҙай бүләге булыуына ышаныуҙар, бала табыу шарты — ҡорбан килтереү менән бәйле мәжүси инаныстар нәфис һынлана:

Әй Хоҙайым, бала бир!
Һиңәниҙәр ҡуяйым?
Һимеҙ тана һуяйым!

Тыуымға килгән баланы ҡулына алған кендек инәһе әйтемдәрендә иһә башҡорт инәләренең түл-ырыҫҡа, киләсәк йорт ағзаһына ҡуйылған талаптар, камиллыҡ сифаттары дөйөмләшкән. Шулай уҡ әле ҡарындағы балаға өндәшеп, яҡшы вәғәҙәләр биреп кендек әбей уның тыуыуын да «йәһәтләтә», тулғаҡты ла «еңеләйтә»: «Атаң тирләп мал табыр, Тере иткәнен ҡоро итмәҫ!»; «Кендек инәң — мине бел, Башың менән еңел кил!»

Кендек инәйенең етеҙ генә «тоҡ бушата» килеүе, теҙеп-теҙеп теләк әйтеүҙәре оҡшатыу тылсымына ҡарай һәм бик боронғо бала табыу ысулдарын һынландыра: мәҫәлән, борон урҙаға тотоноп, тубыҡланып тулғаҡлау. «Ә «тоҡ бушатыу»ҙар иһә ҡатын янында туҡыма йыртыу һәм шуның менән тулғаҡ «еңеләйтеүгә» оҡшашлыҡ тылсымына бәйле (имитативная магия) [28]. Әйтемдәрҙә төрлө тарафтар, төрлө тылсымдар йәнәшә: бала, уянып килгәндә, аяғынан башына ҡарай һыпырып: «Үҫә, үҫә, үҫә ул, ағаңды ҡыуып етә ул!» — тиеүҙәр ҙә оҡшатыу тылсымы. Бишек йырҙарында ниәтте морат итеп раҫлауҙар «Үҫеп кенә китер ул, илгә хеҙмәт итер ул!», маҡсатты һөҙөмтә итеп һынландырыуҙар «Ҡыҙы барҙың — наҙы бар, Баса тире туны бар!», кешенең үҙ теләгенән һәм һүҙ тылсымына инаныуҙан килә. Ә еңелсә бойороу, ялбарыу һүҙҙәре, теләкте булған эш итеп нығытыуҙар фольклорҙа «бир», «булһын», «бул» ҡылымдары аша бирелә. Һәм кешенең үҙ теләген генә түгел, Раббыйҙар менән мөғәләмәгә инеүен белдерә. «Уңын бир, уңын бир, һулын бирмә, уңын бир!» — ти кендек инәйе. «Телең татлы булһын» (балаға) йә иһә «Теләгең насип булһын!» Теләктәрҙә шиғри юл аҙағына тура килгән, йыш ҡабатланған «булһын», ғөмүмән, «боронғо төрки халыҡ поэзияһында таралған алым — һүҙ тылсымын тылсым итеүсе бер сара» [29].

Йола ижадының һәр төрөндәге кеүек үк, бәпләү фольклорында ла боронғо ысынбарлыҡ, көнкүрештәге тәбиғи хәлдәр сағыла. Хәҙерге заманда аңлашылып бөтмәгән һындарҙа шиғри ҡалып булып тарихи мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған. Бала һөйгәндә: «Тфү, тфү, остоҡ, кипкән сөрөк бер тоҡ» — тип әйтеп ҡуйыу әүәл баланың аҫтына кипкән ҡайын сөрөгөн һалып биләүҙе аңлата. Ә инде һөйөп-һөйөп, маҡтап-маҡтап, аҙаҡтан: «Тфү, тфү, буш икән,

[27] Бутинов Н. А. Детство на островах Адмиралтейства // Этнография детства. — М., Наука, 1992. С. 66—67.
[28] Гаджиев Г. А. Доисламские верования и обряды народов Нагорного Дагестана. — М., Наука, 1991. С. 23—64.
[29] Словарь литературоведческих терминов. — М., 1974. С. 319.

Ай һынлы түгел икән!» — тип ҡуйыу, бирҙән, күҙегеүҙән һаҡлау сараһы. Шулай уҡ артыҡ маҡтауҙы мөрхәтһенмәгән халыҡтың тыйнаҡлығы ла сағыла. Милли әҙәп боронғо тыйыу тылсымдарҙан һаҡланыу сараларынан башланғыс ала тип фараз ҡылыр урын бар.

Бишек йырҙарындағы «туҙ бишеккә һалайым» ише юлдарҙа әүәл сәңгелдәктең ниҙән яһалғанына ишара.

Мифологик белемде үҙ эсенә йомған шиғри йомаҡ булараҡ, мунса индереү һамаҡтары ифрат ҡыҙыҡлы. Төрлө ерҙә төрлөсә әйтелгән хәлдә лә, уларҙы ҡабатланыусы үҙәк рәүешендә нәфис һындар берләштерә. Ана шул тотороҡло һаҡланған һындар — ҡасандыр мәшһүр олоҡлау, мәжүси инаныстарҙың нык үҙгәргән килбәте ул. Мәҫәлән, тауышты ҡабатлаған өн теҙмәһе — көсҡеүәтте мәртәбәләгән саранан башлана миндек менән сабыу: «Һап-һап-һап-һап!» Унан һуң, мунсаның ҡәҙимге түгел, ә маҡсатлы йола икәне әшкәртелә: «Мунса ташы, бүрәнә башы! Атаң киҫкән утын түгел, Инәң яҡҡан мунса түгел!»

Мунса инеү мифологик боронғо аңды: һыу менән мөғәмәлә итеү, махсус урында йыуыныу — үҙе яңырыу тылсымдарын тоҫмаллата. Мунса инеү (ғилми әҙәбиәттә таҙарыныу [30], икенсе ҡорға күсеү [31], кеше булыу статусын аныҡлаусы саралар [32]) йола шарттарында яңырыу мәғәнәһе ала. Яман күҙтәрҙән һаҡланыу ниәте әҙәм балаһын «Айыу балаһы, бүре балаһы!» тип кинәйәләүҙә бер сағылһа, тотем хайуандарын атап, яҡшы сифаттарына «ылығып», ныҡлыҡ, сәләмәтлек көҫәү — һүҙҙәрҙен икенсе, йәшерен мәғәнәһе. Кешенең был ғүмеренә тиклем булған тормошонда тотем хайуан, һуңынан әҙәм булыуы, шулай булғас, үҙе «ата-бабаһын» белергә тейешлеге лә сағыла, күрәһең. Донъя халыҡтары фольклорында (әкиәт, эпос, риүәйәттәрҙә) ҙур урын алған был күренеш реинкарнация мотивы [33] мунсала (йолала) тылсымлы арбау рәүешендә сағыла. Артабан имде инициация [34] (күсеү, етлегеү) мәғәнәһе үҙ урынында: «Әбейҙе «әбей» тип әйт, Бабайҙы «бабай» тип әйт! Ағайҙы «ағай» тип әйт!» Үтәлгән йолалар, һынауҙарҙан һуң, бала ырыу ағзаһы була. Ә был инде балаға хәҙер уның кемгә нисек өндәшергә тейешлеген иҫкәртә. Тәбиғәт балаһынан йәмғиәт балаһына әүерелеү артабан әхләҡи камиллыҡҡа өйрәтеү-өндәүҙә дауам итә: «Игелекле бала бул!», «Шәфҡәтле бала бул!», «Ҡесегә олоҡло бул!». Инде лә килеп, бар әйткәндең һөҙөмтәлә емешле булыры, үҙенең ҡул көсө мәртәбәләнһен өсөн (сөнки ул миндек саба, һыйпай, тапап һөйә) сабындырыусы уларҙы изге ҡул-

[30] Сурхаско Ю. Ю. Семейные обряды и верования карел. — М., Наука, 1985. С. 36.

[31] Байбурин А. К. Ритуал: между биологическим и социальным // Фольклор и этнографическая действительность. СПб. — Наука, 1992. С. 21.

[32] Чистов К. В. Семейно-обрядовый фольклор // Этнография восточных славян. — М., Наука, 1988. С. 399.

[33] Еремина В. И. Ритуал и фольклор. — Л., Наука, 1991. С. 28.

[34] Гаврилюк И. К. Картографирование явлений духовной культуры (по материалам обрядности украинцев). Киев, 1981. С. 130—135. Таджики Каратегина и Дарваза. Душамбе, 1976. С. 74—76.

дар — «Ғәйшә, Фатима ҡулдары» тип атай. Был инде бөтә имтом итеү һамаҡтары, доғаларында киң таралған алым. Шулай итеп, йоланың һүҙ сәнғәте — төрлө тарихи мәғлүмәттәрҙе үҙенсәлекле һаҡлаған мираҫ. Боронғо миф үҙенең йәшәү рәүешен йола һүҙендә дауам итә.

Бала «урлау» — яуыз көстәрҙән һаҡланыу сараһы булараҡ, күп халыҡтарҙа таралған күренеш. «Һатып» алынған, тимәк, ят бала инде яуыз көстәргә, сир-ҡаҫтаға кәрәкмәй була. Үлемде алдарға тәғәйенләнгән бындай йолалар «сәңгелдәк урлау», «бүре ауыҙы» аша үткәреү, тәҙрә аша алыу (һатыу) һәм башҡа төрлө күренештәрҙә инсценировка рәүешендә үтәлә. Ә боронғо халыҡтар көнкүрешендә бейеү, оҡшатыу-ҡыланыу, күренеш ҡуйыу (инсценировка) мәшһүр һаҡланыу саралары [35] булған. Шулай уҡ үлемде алдау маҡсаты йола һүҙендә лә бар: һатып алыусы баланы «ғүмере менән» һатып ала, «бәхете менән» һатып ала.

Баланы тәрбиәләү йолаларында етлегеү осорҙарын, кеше бер миҙгелдән икенсеһенә күсеүҙе билгеләгән саралар ата-әсәнән тыуғанды ил балаһы итеп танытыуға тәғәйен. Һәр бер мәл: беренсе аҙым, ҡарын сәс алыу, тәүге һүҙ, атҡа тәүге менеү, сөннәт һәм башҡа миҙгелдәр махсус йола менән атҡарыла һәм изге фатиха, теләк-алғыштар менән нығытыла. Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, бүрәт, тувин, яҡут, хакастарҙа баланың һәр бер етлегеү мәле байрам, махсус тамаша, ат сабыштырыу, уйын-көлкө, йыр менән уҙғарылған [36]. Һәр миҙгелгә байрам кимәлендә махсус иғтибар иһә сәс, кәүҙә, йәш (ҡор), тел, тауыш, енси етлегеү мәлдәре мифик белемдә үҙ йөкмәткеһе булыуынан ғибәрәт. Мәҫәлән, төрлө халыҡта сәс — тормош башланғысын билгеләүсе еп [37], теге донъяға юл булған [38] кеүек, башҡортта бәхет һаҡлаусы, әхирәттә соъал яуабын биреүҙә ярҙамсы, оҙон юл мәғәнәләрендә йәшәй. Ҡарын сәсен алыу һәм бала (кеше) сәсенә бәйле йолалар шул ҡараштарға бәйле һәм айырым хәрәкәттәрҙә һүҙ менән әйтелә лә: «Бәхетле бул, аҡ сәсле бул!», «Сәсең — көл, үҙең гөл!»

Сөннәттуй — ир баланың етлегеүенә арналған байрамдарҙың береһе ил-ырыу тормошонда ул мөһим ваҡиға булған. Таҡ һандағы йәштәрҙә үткәрелергә тейешле йола тамырҙары бик тәрән. «Мосолман динле ирҙәр ҡорона тейешле белемгә, мәҙәниәткә бағышлау» [39], һуңғараҡ паклыҡ билгеһе итеп ҡаралған хәлдә лә, сөннәттең бөтөн төрки донъяла, Урта Азия, Ҡавказ халыҡтарында ғына түгел [40], ә Австралия, Меланезияла ла бик ныҡ үҫешкән

[35] Еремина В. И. Ритуал и фольклор. — Л., Наука, 1991. С. 71.

[36] Шаракшинова Н. Роль традиционных лирических песен тюрко-монгольских народов Сибири в социализации детей и подростков // Вопросы тюркологии. — Ашхабад, 1988, II ч. С. 77.

[37] Грачева Г. Н. Традиционное мировоззрение охотников Таймыра. — Л, 1983. С. 53, 59.

[38] Репуденкова Е. В. Представления о волосах // Фольклор и этнографическая действительность. — СПб., 1992. С. 111.

[39] Абрамзон С. М. Рождение и детство. — М., 1966. С. 99—102.

[40] Снесарев Г. П. К вопросу о происхождении праздника суннат-той в его Среднеазиатском варианте // Среднеазиатский этнографический сборник — Л., 1971. С. 255—258.

йола булыуы билдәле[41]. Тарихи-генетик тамырҙарында махсус иң һалыу, түлгә ярҙам итеүсе Раббыларға тейешле ҡорбан килтереү (ҡан сығарыу) ибеп дә күрмәй мөмкин түгел. Махсус өйрәнеү талап иткән күренеш халыҡтың фольклор аңында, «бабай ҡуян алып килә!», «күгәрсен күрһәтә!» (Әлшәй, Миәкә), «Мәккә ҡарарға кил!» (Күгәрсен, Ишембай районлары), «Майлы күмәс бирә!»ише кинәйәләүҙә һаҡланған

Балага бағышланған һүҙ сәнғәте төрҙәре — бишек йырҙары, һикертеү, атлатыу, уйнатыу, тел астырыуҙарға һәм башҡа хәлдәргә тәғәйен һамаҡтар халыҡтың наҙлы күңелендә тәрбиә биреү, остазлыҡ маһирлығын да, кеше йәненең түрҙәренә инә алыу һәләттәрен (психологик) дә үҙ эсендә сағылдыра. Иң мөһиме — тел байлығы һәм уның тәьҫирлелеге: ябай һүҙҙәр теҙмәһе йән түренә үтеп инер, һәр кемде тулҡынландырыр көскә эйә. Был иһә хис һәм һүҙҙең эске бер көйҙә, гармонияла булыуында. Һәр ижек, һүҙ үҙе үк һикертеүҙе («Һәтес-һәтес-һәтес тә»), тынысландырыуҙы («әлли-бәлли итер ул...»), иман туҡып һөйөүҙе («Ул булһаң, уҙаман бул, устан ашып, алға тул!») тәбиғи әйтеп тора. «Устан ашып алга тул»ише нәфис һыны ғына күпме мәғәнәне ҡыҫҡа әйтеп бирә. «Бәләкәй, усҡа һыйырлыҡ сағыңдан үҫеп етеп, баласағаң менән, донъяң менән ҡарт сағымда донъямды тултырып йөрө!» тигәнгә ишара ул.

Рухи һәм тән, йән сәләмәтлеген көйләгән бәпләү фольклорында ҡобайыр аҡылы, фәлсәфәһе лә, әкиәт йәбе лә, йыр наҙы ла, таҡмаҡ күңелсәклеге, назым нәсихәте лә, мөнәжәт моңо ла бар һәм халыҡ телендә лә улар үҙенсәлекле сағыла.

## 8

Кеше тормошондағы туйҙар тәбиғәт туйҙары, миҙгелдәр үҙгәреүгә бәйле байрамдар менән йәнәшә.

Ҡарғатуй — йыл башына, «Кәкүк сәйҙәр» — йәй, «һабантуйҙар» сәсеү мәлдәрен ил алдында йола менән раҫлаһа, кеше ғүмеренә бәйле туйҙар әҙәм затының етлегеү осорҙарын, бер ҡорҙан икенсе ҡорға күсеүен дә билдәләй. Шуға ла кешенең донъяға килеп китеү арауығы өс туй төшөнсәһенә инә: Бишектуй (тыуыу, үҫмер, етлегеү), Ҡалымтуй (ғаилә ҡороп, түл-ырыҫ дауам итеү), Үлемтуй (асылға ҡайтыу, мәңгелеккә күсеү).

Сабыйҙарҙы кесе йәштән йәрәштереп, киләсәктә ырыу, ил-ара мөнәсәбәттәрен ныҒытыу аманаты — Бишек туйы үткәреү күп халыҡтар тормошондағы күренеш. Төрөктәрҙә — «бешик кертмеси», ҡырғыҙҙарҙа — «бешик кода», бүрәттәрҙә «Хода оролсохо» тип аталган йолалар, асылда, бер мәғәнәлә, сыуаш, мордва халыҡтарында ла был йола тотороҡло булған[42]. Башҡорттарҙа уның ҡа-

[41] Азаров А. И. Основные этапы социализации детей у народов северо-западной Меланезии // Этнография детства. — М., 1992. С. 101.

[42] Кийков А. К истории семьи и брака у башкир, татар, мордвы и чуваш // Краеведческий сборник. — Уфа, 1927, № 2. С. 59.

сандыр мөһим йола булыуы тураһында «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Таһир менән Зөһрә» эпостары, әкиәт, риүәйәттәр бәйән итә. Ике сабыйҙы йәрәштереү ниәтендә бер бишеккә һалыу, уларға теләктәр теләп, уйын-көлкө яһау бик боронғо ҡараштарҙың рәүеше. Бында бишеккә һалыу үҙе оҡшашлыҡ тылсымына, имитацияға ҡоролһа, кеше тотемы, игеҙәктәр культын тоҫмаллатҡан дуаль ҡоролош аңы эҙҙәрен дә шәйләп була. М. Буранғолов күҙәтеүенсә, бер бала сирләһә, бишек туйын мотлаҡ үткәрергә тырышалар тигән мәғлүмәт бишектуйҙың, ҡуш-парлылыҡтың һаҡлау, ҡурсалау көсөнә эйә булыуын да иҫкәртә. Йоланың башҡорттарҙа XIX быуат аҙағына тиклем һаҡланыуын[43], ырыуҙар араһында килешеү, ярҙамсыллыҡ шарты булыуын[44] иҫләгәндә, бишектуйҙың күпме тарихи дәүерҙәрҙең эҙен һаҡлағаны аңлашыла. Туйҙы сабыйҙар тыуғандан һуң ҡырҡы үткәс, яһағандар: ҡолаҡ тешләтеп (шартлы) бүләк әйтеүҙәр ҙә ошонда булған. Бишек туйындағы һамаҡ-йырҙар, теләктәр бала бағыу, бәпләү фольклорына инә. Шуға ла тасуирлау, нәфис һынландырыу саралары оҡшаш. Ғөмүмән, йома һөйләү һәм изге теләк бишектуйҙарҙа төп урынды биләй. Күҙ тейеүҙән, яман көстән һаҡлау теләктәре («Дегәнәк тә теймәһен, Күҙ ҙә быға теймәһен!») йола маҡсатына ярашлы һөйөү, наҙлы шаяртыу һүҙҙәре менән йәнәшә: «Улыма мин ҡыҙ алам, Уның күңеле була, Минең киленем була!»

«Һырғатуй» балалар үҫмер сағында үткәрелә. Асылда ул кеше ғүмерендәге беренсе мөсәл, 12—13 йәшкә етеүҙе билдәләй һәм ҡыҙ сөннәте — алҡа тағыуҙы, ир сөннәте — бағышланыуҙы сағылдырған йола. Теләктәр, фатихалар бирелеп, ике үҫмерҙең ҡотло киләсәге ил алдында нығытыла. Уларҙың туйында ҡушамат ҡыҙ, егет булыуы һәм уларҙың ир-ҡатын булып ҡушылыу шарты ла түл, ырыҫ көсәй торған сара. Яратыу тылсымына ҡараған ҡауышыу йолаһы тәбиғәт көстәрен ишәйтеүгә арналған махсус имитацияның[45] эҙҙәре булһа кәрәк. Изге теләк, фатиха, йола өйрәтеү һырға туйының фольклорында төп урынды биләй. Бәхет аманаты булып сығыш яһаған егет менән ҡыҙ — ҡушаматтарҙың йырҙары иһә — йолала үҙ-ара аңлашыу саралары («Егеткәйем, һиңә мин бүләкмен, эскән һыуым булһын илеңдә!»)

Бишек, һырға ише ритуаль саралар дөйөм өс туй йолалары теҙмәһендә туй алды мәлен билдәләй.

Төп туй — ҡалым үткәрергә «ҡыҙ күҙләү» йола уйындары — күренештәрҙе бәйләүсе, эҙмә-эҙлелекте һаҡлаусы сара. Йәрәшелгән йәштәрҙең дә уйынға сығыуы (никахлы), бишектуйҙары булмаған йәки шарттар үҙгәреү сәбәпле кәләш һайлауҙар (ҡыҙ күҙләү ҙә) үткәрелгән. Тәғәйене буйынса, йөкмәткеһе, барышы менән ул «ҡыҙҙар уйынына» бәйле. Әммә туй йөкмәткеһенә инеп китеүе

---

[43] Руденко С. И. Башкиры. С. 259.

[44] Бикбулатов Н. В., Фатыхова Ф. Ф. Семейный быт башкир XIX—XX вв. — М.: Наука, 1991. С. 11.

[45] Токарев С. А. Эротические обычаи // Календарные обряды и обычаи в странах Зарубежной Европы. — М.: Наука, 1983. С. 103. Бында: үҫмерҙәрҙе шартлы алмаштырыу мәғәнәһе.

лә тәбиғи. Халыҡтарҙың боронғо көнкүрешендә ғәҙәти булған йәштәр йыйындары, «оргиялар, символик йәрәшеүҙәр (никахтар), бейеү-уйындар» Тәбиғәт көстәрен ишәйтеү магияһына ҡарай[46]. Ҡейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар тылсым «Тәбиғәт, түл торошон, ҡотон юрап ҡыҙҙарҙы олоҡлау иһә, ғөмүмән, фольклор аңда тотороҡло күҙәтелә (әкиәт, эпос, йырҙар)».

Эротик тылсымға бәйле мәғәнә уйындың йыр-таҡмаҡтарында иркә әйтешеү, ярым шаярыу аша хис-тойғоларҙы аңлатыуҙар рәүешен алған: «Ошо егетегеҙме матур ҡыҙҙар эҙләгән?», «Ҡыҫма күҙең, һиҙәм үҙем, әйләнермен кискәрәк!» һәм башҡалар.

Ҡыҙ күҙләүҙә бер-береһен тапҡан парҙарға яусы килеүен, һөйләшеүҙәр-килешеүҙәрҙе димсе әбей, еңгә-ағайҙар яйлап ҡуя.

Ҡалымтуй — халыҡтың боронғо йола мәҙәниәтендә ҙур урын алған тарихи күренеш. Ил ырыҫын, түл, ғаилә бәрәкәтен дауам итеү, шулай уҡ ырыу-ара мөнәсәбәттәрен ыңғайлатыу маҡсатында уҙғарылған был йола халыҡтың мифик аң ҡеүәһен, сәнғәте һәм көнкүрешен берлектә һаҡлаған ҡомартҡы.

Ҡеше тормошонда тағы бер баҫҡысты билгеләгән йола ағасы төп өс уй-тағанға таяна:

1) Ер-һыу, Тәбиғәт балаһы булып, уларҙың көстәре фатихаһында маҡсаттарҙы бойомға ашырыу (ялбарыу, ҡылыҡ-мөрәжәғәт, олоҡлауҙар);

2) ике ырыу бәйләнешен, ҡаршылыҡтар аша туғанлашыуҙы мифтағы эҙмә-эҙлелектә башҡарыу (яусылау, тамаша ҡылыу, туй хәлдәре, түркен);

3) китәһе ҡыҙҙы биреү хаҡына (табу боҙоу) раббылар, сит ырыу ағзалары һәм илдәгеләр күңеле йомшарырлыҡ сығыш яһау (бейеү, һөйләү, теләү, көйләү, уйнау).

Үҫеү мәлендә кешеләрҙең «үҙенсәлекле тәртип ҡанундарын үтәгән»[47] туйҙың ошо йүнәлештәренән ҡатмарлы йола бөтөнлөгө, мәҙәниәте, драма һыҙаттары һәм сәнғәте, фольклоры тәрәҡҡиләшә. Түл, ырыҫ теләү туй йолаһы фольклорының төп фекере һәм сеңләү, һынамаҡ, таҡмаҡтарҙа ла төрлө рәүештә әйтелә. «Эй бүлле бул, бүлле бул, бүҙәнәләй түлле бул!» — тиҙәр киленгә. «Ырыу-ырыу балаларың ауыл-ауыл ултырһын!» — тип оҙатып ҡалалар. Тәбиғәт көстәренә, раббыларға туранан-тура ялбарыу эҙҙәре һирәк һаҡланһа ла, уларҙы һүҙ сәнғәтенең төрлө рәүештәрендә тоҫмаллап була; алғышта йә һығыныуҙа, фатихала йә сеңләүҙә:

Ҡабағандан ҡаптырма,
Тибәгәндән типтермә.
Хаҡ тәғәлә ҡушҡан алға килер,
Ырыҫ-түлләүемдән яҙҙырма! —

тип ҡыҙ ер-һыуы, тыуған төйәге менән хушлашҡанда ялбарып, алғышын әйтә. Әсәнең ҡыҙына әйткән фатихаһында Тәбиғәткә һығыныу аманат, тормош тәжрибәһе рәүешендә кәүҙәләнә:

---

[46] Еремина В. Ритуал и фольклор. С. 128.

[47] Зорин Н. В. Русская свадьба в Среднем Поволжье. — Казань: Изд-во Казанского университета, 1981. С. 3.

— Һағынғанда һыу саҡыр, балаҡай,
Һарғайғанда тау саҡыр, балаҡай!

Тәбиғәтте олоҡлау, кеше үҙен уның бер балаһы, данаһы тип аңлау йөкмәткеһе сеңләүҙә тәьҫир көсө, нәфислеге буйынса тетрәндергес һынланған. Бында ул эске кисерештәрҙе асыу сараһы: «Әхирәттәрем менән йөрөгән ер, күк үләнкәй үҫмәй ҡаҡ ятыр»; «Тупыр ҙа тупыр тояғым тупырҙап та ҡалһын был ерҙә».

Йоланы үтәү, ғөмүмән, уның хәрәкәт, ысул (акциональ) өлөшө лә раббылар күңелен яулау сараһы. Шуға ла уны хатаһыҙ башҡарыу — тормошто ыңғай алып барыу шарты (туй ҡуйыу, кәңәштуйҙар, яланда һыйлау, бәйгеләр һ. б.). Йола үтәлмәйенсә, ваҡиға ил алдында үҙ көсөнә эйә булмай. Сөнки ата-бабаларҙың ҡеүәтле мифик аңын бары йола ғына әҙәм ҡулланыр сара, донъя тотор көсәр итеп, йомаҡ итеп еткергән. Раббылар, Ер-һыу, ырыу тотемдары менән мөғәмәлә итеү — йола үтәү сараһы берҙән-бер йәшәү сараһы була.

«Башҡа күп кенә халыҡтарҙағы һымаҡ уҡ, башҡорттарҙың туй йолаһы ярайһы ғына киң хронологик сиктәрҙе, ҡайһы саҡта, әлбиттә, борон, — буласаҡ хәлдәрҙең тыуыуынан алып ғаилә тормошон башлағанға тиклемге дәүерҙе «иңләй» [48]. Кеше ғүмерендә мөһим был ваҡиға -- ҡалым туйы өс баҫҡыстан тора: бишек, һырға, никах туйы. Ошондай бүленеш үҙе үк бер йәш ҡоронан икенсегә күсеү йөкмәткеһен сағылдыра һәм туй барышында таянғыс маҡсат булып, йола төҙөклөгөн тәьмин итә.

Һынау — күсеүҙең төп шарты. Еткән ҡыҙ ҡатындар ҡорона инер өсөн, бирнә әҙерләй, йола, сең һамаҡтары, өй эштәренә өйрәнә һәм туйҙа уларҙы күрһәтә. Егет ир ҡорона инер өсөн, ҡыҙ эҙләй, бүләкләй, ҡалым түләй, йыртышҡа баҫа, ҡауыша, күңел асыу тамашаларында һынатмаҫҡа тырышып, кейәү (еҙнә) була, ҡатын ире статусын яулай.

Йола буйынса, кейәүгә йомаҡ ҡойоп, аҡыл зиһенен һынау, төрлө шарттар ҡуйып, уларҙың үтәлеүен талап итеү башҡорт халҡының эпос, экиәт, көләмәс, легенда, риүәйәт, йырҙарында һынау — баһа биреү, әҙәп мәғәнәһендә сағыла. Һынау үтәмәгән өсөн яза биреү башҡорт мәжүсилегендә генә түгел, донъяның бөтә халыҡтары тарихында тотороҡло күренеш. Йолала ул әхләҡ, тәртип, әҙәп ҡанундарын боҙған өсөн яза була: «кейәүләп йөрөүҙә» егет кәләшенә ваҡыт белмәй килһә, уны туҡмап ҡайтаралар.

Туй барышында бөтә булған бүләкләү, кейендереү, ҡаршы алыуҙар һәм оҙатыуҙар — һәммәһе лә, асылда, ғүмерҙең бер дәүеренән икенсеһенә күсеү байрамдарының мотлаҡ һаналған мәғәнәле билгеләре. «Күсеү» сиген йола билдәләй. Мәҫәлән, кейәү булаһы егетте ҡыҙ менән ҡушырға алып китер алдынан «имәлтә йыйыу» һәм «серге ҡағыу» йолаһы үткәрелә: егеткә бүләктәр тапшы-

---

[48] Бикбулатов Н. В. Фатыхова Ф. Ф. Семейный быт башкир. С. 9.

рыла, теләк әйтелә. Уны тик ирҙәр ҡоро ғына ҡыҙ яғына оҙата. Бөтә һынауҙарҙы үтеп, тейешле йолаларҙы үтәп бөткәс кенә, кейәү егет «тирмәнең төп кирәгәһенән», йәки тупһанан «өйҙөң төп түшәм ағасынан ары үтә ала» *, ирҙәр менән бер ҡорҙа йөрөй башлай, ҡыҙҙың ата-әсәһенә «әбей», «бабай» тип өндәшеү хоҡуғы ала. Шулай итеп, кейәү егеттең кәләшенең ата-әсәһе менән күрешә алыуы ла, ят ырыу әруахтарының ҡабул итеүенә дәғүә итеп үткәрелгән һынау кеүек тә аңлашыла. Кейәү кеше ололар алдында кеселекле булырға тейеш тигән идея ла ята.

Оҙатылырға тейешле ҡыҙҙы, яланға алып сығып, ҡыҙ сағы менән хушлаштырып, башына ҡатындар ябына торған ҡушъяулыҡ ябыу йәки таҫтар урау йолаһы ла — шул инициация, күсеү тәртиптәренең, ҡыҙ кешенең ҡатындар ҡорона инеү билгеһе ул. «Тәлмәрйентун», «Аҡыллы ҡыҙ» ише әкиәттәрҙә ҡыҙға никах алды һынауы үткәреү йә йәш киленде һынау йыш осрай (уны зирәклектә, ҡул эшенә, бешерем-төшөрөмдә һынаусандар).

Килен төшкәндә, йомаҡ ҡойоп, зиһенен байҡау, бейетеп, мал әйтеү, тупһанан аша атлағанда, юрамал һепертке, көйәнтә ташлап һынауҙар ҙа шул боронғо ғәҙәттәрҙе тоҫмаллата.

Туйҙағы төрлө көрәш, киҫкен болашыу, ҡыуыуҙар, ат сабыштар, егеттәрҙең ҡыҙ өсөн талашып, «ҡыҙ ярыуҙары» һәм башҡа ҡыйышыуҙар ике дәүер алмашыныу сиген һынландыра, күрәһең. Аталар хоҡуғы әсәләр маһирлыҡ ҡылған (матриархат) мәлде алмаштырған мәл полигамиянан бер парлы ғаилә сығыуына ла бәйле. «Таҡыяга болашыуҙа» ҡыҙҙы еңгәләрҙән тартып алып, егеттәрҙең ҡыҙ саҡ менән хушлашҡан затты арбаға ултыртып алып ҡайтып китеүҙәре был фекерҙе асығыраҡ дәлилләй.

Төрлө халыҡтарҙың туй төҙөлөшө ижади оҡшаш һәм өс өлөшкә бүлсңә: туй алды, туй үҙе һәм туй арты. Башҡорт халҡының бишек, һырға туйы, димләү, никах (ижәп) — туй алды йолалары. Туй үҙе — ҡоҙа төшөү, туй ашы, ҡунаҡ күрһәтеү, йыуаса кеүек йолаларҙан тора. Туй арты — ҡалын туй, кейәүләп йөрөү, килен төшөрөү, игәт алыу һ. б. Туй арты йолаларына ингән тамашалар үҙенсәлекле көнкүрмеш «бәхәстең» (ҡыҙ алыу, биреү), ынғаи хәл ителеүен аңлата. Ҡалымда булған йолалар ҡабатлана, тик йөкмәтке, хис-тойғо үҙенсәлектәре тормошсан, тантана төҫөн ала.

Яусылау, килешеү, төп туй ашы, ҡыҙ оҙатыу, ҡыҙ сеңләтеүҙәр төрки халыҡтарында ғына түгел, славян, уғыр-фин һәм башҡа халыҡ туйҙарының да төп өлөштәренән иҫәпләнә.

Үҙ-ара тарихи-генетик, этник яҡтан, тел, мәҙәниәт йәһәтенән яҡынлығы булмаған халыҡтарҙың туй йолаһындағы оҡшашлыҡты һәр халыҡтың үҙенең тарихи үҫеш юлын Тәбиғәт балаһынан алыуы, оҡшаш ихтыяждар кисереүе, уларҙы хәл итеү өсөн бер төрлөрәк ысулдар, алымдар файҙаланыуы менән аңлатырға була. Иң мөһиме иһә — мифик фекерләү, боронғо ҡараштар йолала үҙенсәлекле йәшәү сараһы булып дауам итеүе. Ә мифик белемдә

* Түшәм ағасынан ары үтеү — түргә, ололар янына үтеү.

халыҡтар аңы бик яҡын, туғанлыҡ (Ер — Кеше — Һыу — Һауа) мәғәнәһе көслө. Шулай уҡ туйҙа һәр халыҡтың милли үҙенсәлеген, холоҡ, рухи һәм көнкүрмешенең бары уларҙың үҙҙәренә генә хас билдәләрен кәүҙәләндергән йола ысулдары, хәрәкәттәре (действия) күп. Яусылағандан һуң, ике яҡтың килешеүен таҫтамал бирешеү менән билдәләү, һуйылған туй малының таҙғарыны менән болашыуҙар, килен төшөп, уға теләк теләгәндә, уның аяғы аҫтына таш ырғытыу, йәки теләк әйтеүҙә уның алдында епкә тағылған тәңкә тотоп тороуҙар; ҡунаҡтарҙы сыбыртҡылау, оҙатылған ҡыҙҙың ата йортондағы урҙаға тәңкә тағып китеүе, батмуста, һандыҡта бейеүҙәр — башҡорт туйының үҙенә генә хас милли үҙенсәлектәрен асыҡ сағылдырыусы күренештәр.

Туй фольклоры — бер-береһенә оҡшамаған төрлө ижад ҡушылмаһы. Унда драматик хәрәкәт — һүҙ сәнғәте — көй — бейеү — бәйге (уйын, йүгереш, көрәш һ. б.) тотош бер бөтөндө хасил итә. Туй дәүере билдәле көндә генә урыны, маҡсаты менән генә башҡарыла торған йолалар теҙмәһе. Шуға ла фәндә «туй йолаһы күп актлы театраль күренеш»[49] тиеү «туй йолаһы һәм театраль күренештең уртаҡ» булыуын таныу ғәҙәти. Туйҙың үҙенсәлекле сюжетҡа ҡоролоуын, унда күренештәрҙең үҫә барған экспрессияла бәйләнеп килеүен, барыһының да төп маҡсаттың логикаһына ярашлы нескә ижад менән үрелеп килеүен күҙ яңында тота театр белгесе Һ. Сәйетов[50].

Ысынлап та, туйҙа ҡатнашыусылар айырым-айырым йә төркөм-төркөм булып билдәле бер вазифа атҡара һәм спектаклдәге актерҙар һымаҡ күҙ алдына баҫа. Туй йолаһында сәхнә әҫәренә хас шундай төп ҡанундар ҙа күҙәтелә: «актерҙар»ҙың тейешле һанда ғына, улар уйнай торған урын менән ваҡыт билдәле булыуы. Былары ике яҡта ла «кәңәш-туй» ваҡытында махсус билдәләнелә. Төп «ролдәрҙе», әлбиттә, туйға сәбәпселәр уйнай. Туй барышында түрҙә ултырыр, фатиха бирер баш (төп) ҡоҙалар — аҡыл үҙәге, бөтә спектакль улар ихтыярына буйһона. «Нүгәр ҡоҙа»ға ике баш ҡоҙа араһында йөрөгән «яусы ҡоҙа» ла үҙ исем-вазифаларын «кәңәштә» ала[51] һәм шуға ярашлы йолала — «спектаклдә» йәшәй башлай.

Туй «спектаклен» үткәреү урыны — мотлаҡ баш ҡоҙа йорто. Тәүҙә ҡыҙ биргән кешенең йортонда, унан һуң килен алыусының йортонда үткәрелгән йола.

Яусылау — туй драмаһының прологы булһа, төп конфликт — бер яҡтың ҡыҙҙы үҙ йортонан алып китергә, икенсеһенең бирер ебәрмәҫкә тырышыуында асыла. Ҡыҫҡен нөктә ҡыҙҙы ата йортонан оҙатыу йолаһын атҡарған мәлгә тура килә. Төп «бәхәстең» хәл ителеүен сағылдырған тамаша — егет йортондағы ҡалын туй. Эпилог — түркен барыу йолаһы. Түркен барыу — ҡыҙҙың ата-

[49] Бикбулатов Н. В. Башкирский аул. С. 187.

[50] Саитов С. С. Начальные формы театра в башкирском народном творчестве // Фольклористика в Советской Башкирии. — Уфа, 1974. — Вып. 1. С. 178.

[51] Дәүләтшин Ғ. Бүгәсәү башҡорттарында ҡыҙ биреү йолалары // Яңы юл. 1923. № 4.

һы йортона ваҡытлыса ҡайтып килеүе, игәт (бүләк) малы алып ҡайтыуы.

Шулай итеп, төп күрһәткестәре менән туй спектакль ҡанундарына ҡоролған күренеште хәтерләтә. Шуның менән бергә һәр йола күренеше оҫта уйналған әҫәрҙе төҫмөрләтә: үҙ мәсьәләһе, үтәлеше, сиселеше бар. Ҡыҙ ҡушыуҙа, мәҫәлән, бәхәс — «ниндәйҙер көстәрҙең» ҡыҙҙы урлауы, йәғни уны йәшереүҙәре, уны тапҡас, бирмәҫкә тартҡылашыуҙары булһа, кульминацияһы — кейәү егеттең ҡауышыу йортона йыртыш баҫып инеүе, сиселеше — ҡауышыу. Ҡыҙ оҙатыуҙа кейәүҙең юлын быуыу, ҡапҡаны бикләү, ат башын бирмәү — ҡаршылыҡ, бәхәс. Кейәү бүләк биргәс, юл асылыуы — сиселеш.

Әммә туй театр түгел. Берҙән, туйҙа ҡатнашыусылар, театрҙағыса, тамашасы һәм уйнаусыға бүленмәй. Туйҙа бөтәһе лә ҡатнашыусы. Тамашасылар иһә драманы ситтән күҙәтеүселәр генә. Икенсенән, театр импровизациялауға ирек бирмәй, ә туй йолаһында уйлап сығарыу, йәнле ижад туй үҫешен һәм нәфислеген, рухи йөҙөн билдәләүсе төп шарт. Өсөнсөнән, театрҙа «уйнау»ҙың сәбәбе — бәхәс — айырым шәхестең, авторҙың ижади ихтыяжынан тыуған әҫәр. Туй драмаһының төп маҡсаты, шарты иһә әҙәм балаһының нәҫел ҡалдырыуға булған тәбиғи талабы һәм йәмғиәт алдындағы бурысы менән билдәләнә. Дүртенсенән, театр күренеше ике-өс сәғәттә уйналып бөтһә, туй йолаһы ике-өс айҙан алып бер нисә йылға (киленде оҙатып алғансы) дауам итеүе шарт. Аҙаҡ килеп, йола (туй) тамырҙары мәжүси инаныстарҙан, мифтан моронланһа, театр (драма) сәнғәттән, даими ижадтан килә. Бына ошо айырмалыҡтар туй йолаһының театр сәнғәте менән оҡшашлыҡ-айырмалыҡтарҙың үҙенсәлектәрен аныҡлай. Ҡайһы бер ғалимдарҙың, туй театр сәнғәтенән айырылып сыҡҡан йә булмаһа, үҙенең эволюцияһы дәүерендә айырым кәмселектәрҙән арыныу өсөн театр сәнғәтенә мөрәжәғәт иткән ижад тигән бер яҡлы ҡараштарҙы кире ҡаға. Туй уйындарының башҡарылышында дөйөм әҙмә-әҙлелектә генә театраллек күҙәтелә.

Туй ижадында көлкөлө, илаулы элементтар ҙа, бейеү ҙә, уйын да, һүҙ сәнғәте лә бергә сығыш яһай. Һәр айырым хәрәкәт туйҙың тәғәйенләнешенә ярашлы ижад күренеше менән оҙатыла бара. Йолала мәғәнәһе асыҡ булмаған күренештәрҙе аңларға төрлө өлөштәр бер-береһенә ярҙам итә: мәҫәлән, хәрәкәт — фекерҙе, һүҙ — инанысты һ. б. Теләктәр әйтеүҙә аҡ тәңкә биреп, аҡ киләсәк юрала. Илауҙа ҡыҙ өс рәт башын хушлашыусының яурынына ҡуйып күрешә (бәхиллек ала), ҡосаҡлаша, иҫтәлек бүләге ала, сөйгә еп таға. Былар бөтәһе лә сеңләү аҫтында барған тотороҡло ҡалыптар.

Килендең аяҡ аҫтына таш ырғытҡанда: «Таштай, ҡомдай бат!» — тип әйтеүҙә мәжүси инаныс (таш культы), оҡшашлыҡ тылсымы (ҡалыу, төшөү), һүҙ тылсымы бер бөтөндә сығыш яһай. Әлеге заманда онотолған баҡый инаныс йола һүҙендә йомаҡ булып ҡала. Был йәһәттән туй ижады ла үҙенең ҡатнашма сифаты менән үҙенсәлекле, мәғлүмәтле. «Йәшел генә ебәк һуҙайыҡ, Урам-

дарҙан ғына уҙайыҡ», — тигән сеңләүҙә шаршау төҫө әйтелә. Ә борон төҫ тылсымы буйынса һәр затҡа айырым төҫ булышлыҡ иткән: ҡыҙға — йәшел, ҡыҙыл, бурлат; ир-затҡа — күк.

Сеңләү йолаһы — туйҙа төп күренештәрҙең береһе. Ҡыҙҙың атай йорто менән хушлашыуын бөтә тирә-яҡ шаһитлығы алдында китеүҙе (күсеүҙе), бәхилләүҙе белдергән сара. Икенсенән, башҡорт бисәләренең күңелен, ижади һәләтен, нескә тел тойомон һынландырған рухи мираҫ. Һәр төбәктең сеңләү һамаҡтарын башҡарыу ысулы, йөкмәтке, тәғәйенлек уртаҡлығы берләштерә. Шул уҡ ваҡытта сеңләүҙә этник, хужалыҡ үҙенсәлектәре менән аңлатылған айырмалыҡтар ҙа бар. Уның көйө, һүҙе, башҡарыу алымдары һәр төбәктә үҙенә бер төрлө.

Башҡарыу урыны буйынса, ялан-ҡыр, йорт-ил, туғандар менән хушлашыу сеңләүҙәре, ваҡыты буйынса ҡыҙ иртәгә * китә торған көн сеңләүҙәре һәм китә торған көндә әйтелә торған сеңләүҙәре булған. Тәғәйенләнеше, тематикаһы, хис-тойғо үҙенсәлеге буйынса сеңләүҙәрҙе: 1) сеңләү-уйланыуҙарға, 2) сеңләү-мөрәжәғәткә һәм 3) сеңләү аша тиргәүҙәргә бүлергә мөмкин. Беренсе төркөмгә ингән сеңләүҙәрҙә халыҡтың донъя, ҡатын-ҡыҙ яҙмышы, хәсрәттәре хаҡындағы фәлсәфәүи ҡараштар сағыла. Уларға «Зөлхизә», «Таштуғай», «Зәлифәкәй» ише йырҙарҙағы бәхетһеҙ, әсе яҙмышлы ҡатын хәсрәте ауаздаш, яҡын. Яҙмыш, ят-ятҡа китеү тураһында илап-һыҡтап йыр сығарыу шул уҡ ниәттә ижад ителгән сеңләүҙәр менән тамырҙаш, күрәһең.

Төрлө үлән сәскә атҡан саҡта
Ер ярылып ҡалғандай була.
Тыуып-үҫкән илдән киткән саҡта,
Йән ярылып барғандай була.

Сеңләү-мөрәжәғәттәрҙә ҡыҙҙың үҙ яҡындарының һәр береһенә тәғәйен-тәғәйен үпкә белдереүе («Бер ҡабымҡайынды ҡыҙғанып, Аҫыраманың, атай, өйөңдә»; күрешеүс: «Инәкәйем, һиңә мин киләм, бәхиллегең менән ҡулың бир!»; ялбарыуы, бәхиллек һорауы: «Атаҡайым бәхиллек теләп ҡал инде») әйтелә.

Мөрәжәғәт — һәр төркөмдә булған мотив. Тик шартлы бүлеүештә беҙ өҫтөнлөк иткән һыҙаттарға иғтибар итәбеҙ.

Тиргәп сеңләүҙәр насар әрләү һүҙенең уңыш арттырыр магик көсөнә ышаныуға нигеҙләнгән. Е. Кагаров Боронго Грецияла һәм Римдә туйҙарҙа махсус оятһыҙ йырҙар йырланыуын яҙа [52]. Туйҙағы тиргәү һамаҡтары төрлө зыян килтерерҙәй көстәрҙән һаҡланыу һәм үрсеү-тыуыу көстәрен ишәйтеү ниәтенән әйтелгән, күрәһең. Шулай уҡ ике ырыуҙың (фратрияның) бер-береһе менән көлкө ярҙамында ла көрәшеүенең сағылышы ла бар. Ҡыҙ исеме-

* Иртәгә — шартлы ваҡыт. Оҙатылырға аҙна йә өс көн ҡалғас тигәнде лә үҙ эсенә ала.

[52] Кагаров Е. Г. Состав и происхождение свадебной обрядности // Сборник музея антропологии и этнографии. — М.; Л., 1929. — Т. VIII. С. 176.

нән уның әхирәттәре күмәкләшеп (бер ырыу) ҡаршы яҡтың вәкилдәренән (икенсе ырыуҙан) көлә. Яман һүҙ тылсымына бәйле әрләүгә күрәләтә үртәү йә кире мәғәнә биреү хас:

Майһыҙ бешкән йыуаса,
Ашама — тел ҡамаша! —

тип әйтеүҙәр быға миҫал. Былдай алым ен-шайтандың иғтибарын алдар өсөн кәрәк.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы әрләү, хатта мыҫҡыллап көлөү — өсөнсө төркөм сеңләүҙәрҙең төп тәғәйене. Нәфис аҫтыртын көлөү бында яуыз көстәрҙе алдауға тәғәйен насар һүҙгә нигеҙләнеп үҫешә, тимәк, асылы менән уларҙы ысынлап та яман күреүҙе аңлатмай. Йола һүҙенең тәүге маҡсаты юғала, әммә традиция халыҡ хәтерендә ҡала. Бер кем дә үпкәләргә тейеш булмаған йола тәртибе шулай.

Туйҙың нәфис һүҙ өлөшөндә теләктәр, өгөт-нәсихәт, алғыштар ҙур урын ала. Һырға, һебә, ҡалым, ҡалын туйҙарында батырҙарға, ҡоҙаларға атап әйтелгән алғыштар, маҡтауҙар, һаба йыйыуҙа, килен битен асыуҙа һәм башҡа йола рәүештәрендә әйтелә торған теләктәр халыҡтың әхлаҡ ҡағиҙәләрен, киләһе быуынға ҡуйған талаптарын бәйән итә.

Күрше хаҡы — Тәңре хаҡы,
Унһыҙ усаҡ дөрләтмә.
Ирең хаҡы — йәнең хаҡы,
Ireңде һин хөрмәтлә!

Туй теләктәрендә, асылда, халыҡтың өгөт-нәсихәт, тәрбиә мәктәбе һынлана. Уларҙа ырыҫ тотҡаһы, бисәгә — әҙәп, ҡылыҡ өлгөһө тупланған.

Туй хәрәкәтен бер-береһенә бәйләүсе сара рәүешендә ҡатнашҡан иң таралған жанрҙың береһе — таҡмаҡ. Туйҙа таҡмаҡ ҡоҙаларҙың кәйефен күтәреүгә, уларҙы сәмләндереү, хәл-ваҡиғаларҙы барлау, аңлатыуға тәғәйен. Туйҙа таҡмаҡ бейемәҫте бейетер, көйһөҙҙө көйләтер сарага ла әүерелә. Һамаҡ менән таҡмаҡ ҡоҙа булышҡан ике яҡҡа ла берҙәй хеҙмәт итә: яҙыҡты яманлай, яҡшыны яҡлай, дөйөм алғанда, ике яҡтың үҙ-ара мөнәсәбәтен яйлай. Был жанрҙарға шуныһы хас: улар бөтә туй ваҡиғаларынан да инсафлы ғына итеп көлә. Шул уҡ ваҡыт туй таҡмағы кеүек, һамаҡтар ҙа төрлө эпизодтарҙы башлаусы, бер-береһенә ялғаусы (композицион сара) ролен атҡара. Мәҫәлән, һаба йыйыу йолаһы ошондай һамаҡ менән башлана:

Һаба йыйырға сығайыҡ,
Төп ҡоҙанан башлайыҡ.
Ҡоҙағыйҙың йомартлығын
Ошо ерҙә һынайыҡ!

Туй фольклорында йомаҡтар һәм һынамаҡтар ҙа мәғлүм бер йола функцияһын үтәй. Мәҫәлән, «йомаҡ ярҙамында ҡыҙ йортона киләсәк егеттең аҡылы һынала»[53].

Йомаҡ ҡойоу ярҙамында, ғәҙәттә, кейәү йә ҡыҙҙың да аҡылы, зирәклеге һынала. Мәҫәлән, килен ҡәйнә буҫағаһын аша атлап, уң аяғы менән септәгә баҫып үтергә тейеш. Ҡәйнә йә еңгә шул мәл йәш килендән: «Ай ҡайтты, көн ҡайтты; Бейә ҡайтты, тыу ҡайтты, Был илгә кем ҡайтты?» — тип һорай. Яуап ҡәйнә күңеленә хуш килерлек тапҡыр, мәғәнәле булырға тейеш. Йомаҡтың кинәйәле телендә түл бәхете, ырыҫ, ҡот теләүҙе һынландырған (тыу бейә образы), ғүмер, тормоштоң мәңгелеге тураһында (Ай, көн ҡайтты), тимәк, кеше яҙмыштарының ҡабатланышы тураһында фәлсәфә ята.

Һынамаҡтар — халыҡтың тәжрибәһен, аҡылын сағылдырған нәфис һүҙ өлгөләре. Ҡалыплашҡан шиғри рәүеше, башҡарылыу үҙенсәлеге, үҙенә хас эске көйө булыуы, өндәрҙең гармоник ҡабатланышы һынамаҡтарҙы үҙ аллы һүҙ сәнғәте өлгөһө тип баһаларға ерлек бирә.

Һынамаҡ ике бүлектән тора. Тәүҙә хәлде әшкәртеү, икенсе — баһа биреү. Мәҫәлән, «Ҡаты төштө ҡаты килен,. Төбәп төштө төплө килен», тип һынайҙар килен төшкәндә.

Башҡорт туй фольклорында «яр-яр» йырҙары ярайһы ғына. Үзбәктәрҙә, татарҙарҙа был жанр — «яр-яр», ҡарағалпаҡтарҙа — «хау-жар», нуғайҙарҙа — «хей-жар», ҡаҙаҡтарҙа — «жар-жар» тип аталған. Башҡорттарҙа ике төрлө «яр-яр»ҙар (йәр-йәр) билдәле. Беренсеһенә һөйөү-һөйөлөү, бәхетле туй һәм ҡауышыуҙы маҡтаған «яр-яр» йырҙары, һамаҡтары инә. Икенсеһенә «яр-яр» әйтеп, сеңләүҙәр ҡарай:

Ҡара һыйыр мөгөҙөн ҡайырмағыҙ, яр-яр,
Әсәһенән балаҡайын айырмағыҙ, яр-яр!

Бейеүҙәр — башҡорт туй йола ижадының сағыу, айырылғыһыҙ өлөшө. М. Буранғоловтың «Бейеү теле» хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәре һаҡланған[54].

Туйҙа башҡарыла торған бейеүҙәрҙән боронғо кинәйәле аңлашыу, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе асыҡлау, мәжүси табыныуҙарҙан ҡалған магик сараларҙы ла төҫмөрләп була. Тора-бара бейеүҙәрҙең нәфис уйы, тәғәйенләнеше өҫтөнлөк ала.

Башҡорт халҡының туй бейеүҙәре ҡасандыр тәбиғәт көстәрен ишәйтеүгә, тыуыу-үрсемгә булышыуға тәғәйен тылсымлы мәғәнәле хәрәкәттәрҙән торған. «Ҡыҙҙар уйыны»ндағы ҡыҙҙарҙың (шул иҫәптән оҙатылған ҡыҙҙарҙың да) бейеү уйындарының тамырҙары шул уҡ тәбиғәт көстәренә ышаныуға, эротик уйындарға ла барып тоташа.

«Йыуаса» йолаһында йыуаса тоғо менән бейеү, «Сыбыртҡы

---

[53] Нәҙершина Ф. А. Халыҡ һүҙе. — Өфө, 1986. 128-се б.
[54] Буранғолов М. А. Башҡорт туйы йолалары. — 25-се б.

ашы»нда сыбыртҡы шартлатып, тире тундың кире яғын әйләндереп бейеүҙәр уңыш килтереүҙән, шулай уҡ хайуандарҙы олоҡлауҙан ҡалған, күрәһең.

«Сеңләү» ритуалындағы түңәрәк яһап бейеүҙәрҙә ҡояш культы сағыла (китәһе ҡыҙ түңәрәк эсендә һалмаҡ ҡына әйләнә)[55]. Батмуста бейеү, «Ҡөрәгә» йолаһында буш көрәгә һауытына сиртеп бейеүҙәрҙә[56] ырыҫ, уңыш тылсымына ҡараған хәрәкәттәр тоҫмаллана. Ғөмүмән, йолала бейеү үҙенең боронғо тамырҙарын, тәүбулмыш тәғәйенләнешен асығыраҡ күрһәтә.

Башҡорт ҡалым туй йолаһы — сәнғәт һәм көнкүрмештең үҙенсәлекле ҡатнашмаһы, мәжүси, исламға тиклемге дин эҙҙәрен, халыҡ ижадының баҡый рәүештәрен үҙендә сағылдырған милли мираҫ. Туй йолаһы ике ят ырыуҙың туғанлашыуын ғына сағылдырмай, ә тормоштағы ҡаршылыҡтарҙың берлеген, йәшәү ҡанундарын бәйән итә.

## 10

Һуңғы туй — ерләү йолаһы ҡатмарлы рухи мираҫ. Ерләү йолаһын аңлау өсөн халыҡтың Ғаләм, Донъя, Тәбиғәт төҙөлөшөн нисек күҙаллауын белеү кәрәк. Башҡорттарҙың донъяны өс ҡатлы итеп (Күк, Ер өҫтө, Ер-Һыу аҫты донъяһына бүлеп) күҙаллауы билдәле. Аҫҡы ҡат, өҫкө ҡаттар үҙҙәре етешәр ҡаттан тора, тип тә белгәндәр. Ҡешеләрҙең аңы үҫә килә, был бүленеш ҡатмарлана, төрләнә: Күк ҡабағы — Тәңре (Алла), изге рухтар төйәге; Ер өҫтө — кешеләр, йәнле үҫемлектәр, хайуандар донъяһы; Ер (Һыу) аҫты — ҡара көстәр иле. Ерләү йолаһында ошо мөхиттәрҙең ыңғай һәм ҡапма-ҡаршылыҡлы бәйләнеше сағылыш ала.

Башҡа халыҡтарҙағы кеүек үк, башҡорттарға ла кешенең һәм тереклектең йәнен тәндән айырым йәшәй алыусы зат итеп күҙаллау хас булған. Йән — мәңге тере зат, ә тән — йәнгә ваҡытлы ҡоршау ғына, ҡасан да тупраҡҡа инеү өсөн генә яралған ғүмере сикле зат.

Хәҙерге заманға килеп еткән мәрхүмде ҡуйыу йолаһы — баҡыйҙа ҡатмарлы, төрлө рәүештәре булған архаик мәҙәниәттең ярсығы ғына. Асылда, ул хәҙер — ислам ҡағиҙәләре тотороҡло һаҡланған мәжүси инаныстар нығ үҙгәреп, мәңгелек донъяға оҙатыуға — ергә ҡуйыуға (ерләүгә) — ҡайтып ҡалған йола. Ә боронғо тарихында уның мәйет яндырыу[57], ер өҫтөнә ҡуйыу[58] (ҡалды-

---

[55] Ғилми әҙәбиәттә ул «солярный культ» тип атала. Иванова Ю. В. Следы солярного культа // Календарные обычаи и обряды в странах Зарубежной Европы. — М., Наука, 1983. С. 107—110.

[56] Нагаева Л. И. Танцы восточных башкир. С. 75—77.

[57] Мажитов Н. А. Южный Урал в VII—XIV вв. М., 1977. С. 162—164; Уныҡы: Новые материалы о ранних башкирах // Археологические открытия 1973 г. М., 1974. С. 162—163.

[58] Мажитов Н. А. Курганский могильник в дер. Ново-Турбаслы — БАС. Уфа, 1959: Пшеничнюк А. Х. Охлебининский могильник. — АЭБ, Уфа, 1969. Т. III.

рыу), үлем далаһына оҙатыу ише рәүештәре лә булғанын ғилми әҙәбиәттән һәм дә махсус һорауҙар бирел йыйылған (һуңғы йылдарҙа) мәғлүмәттәрҙән байҡарға мөмкин.

Мәрхүмдәрҙе олоҡлау эҙҙәре иһә уларҙың һынын яһап табыныу йолаларында сағыла. Тәрән тарих эҙе — потҡа инаныстарҙы һөйләгән был мәғлүмәтте Ибн Фаҙлан яҙмаларынан Ә. Вәлиди Туған күтәрә [59].

Тупраҡ — халыҡ аңында тыуҙырыусы, яратыусы көс. Шуға ла «Тупраҡтан яралғанбыҙ, тупраҡҡа ҡайтабыҙ» тигән фәлсәфә боронғо мәжүси табыныу — ер-тупраҡҡа табыныуҙың эҙҙәрен һаҡлай. Тупраҡҡа ҡайтыу — асылға ҡайтыу була. Ә асылға ҡайтыу — йәшәүҙең икенсе сифатында дауам ителеүе тигән һүҙ.

Мәрхүмде һыҡтап, илап гүргә оҙатыу, йәғни тәнде йән артынан икенсе сифатта «йәшәһен» өсөн махсус йолалар үтәү, ерләү-ҡуйыу ҙа кешенең һуңғы туйы — Үлем туйының төп идеялары. Мәрхүм менән бергә уның донъялыҡта төшкән тештәрен, ҡойолған сәсен (бик борон атын, ҡоралын) бергә һалыу, кәфенде тәүҙә бил һәм баш, аяҡ остарынан өс урындан бәйләү, мәрхүмде гүргә һалғас, ул бәйҙәрҙе сисеү, һыу «эсергә» еңел булһын өсөн мәрхүмдең баш осона балсыҡ һалыу, «тороп ултырырлыҡ» урын, өй яһау, йәғни ләхет алыу һәм башҡалар — барыһы ла мәрхүмде ҡайтмаҫ юлға оҙатыу йолаһындағы элементтар һәм, улар төрлө дәүерҙәргә хас һыҙаттарҙы һаҡлап ҡалған булһа ла, барыһы ла теге донъяла йәшәүҙе күҙ уңында тотоп атҡарыла. Мәрхүмдең йәне йәннәткә инһен өсөн муллаға хәйер биреүҙәр, ирҙәргә бин ҡат, ҡатындарға ете ҡат кәфен урауҙар, фәрештәләргә мәрхүм(ә) «биргән» яуаптарҙы тыңлау, уның гонаһтарын йөкмәү (алыу) — дәүрет итеү — ислам ҡанундарынан килгән йолалар.

Үлгәндәр рухы «әруахтар культы» — ерләү йолаһында иң тотороҡло һаҡланған мотив. Әруахтарҙы рәнйетеүҙән ҡурҡып тыуған төрлө тыйыуҙар (мәрхүмдең исемен донъялыҡта яман һүҙ менән телгә алмаҫҡа, иҫкә алыу көндәренең (өсө, етеһе, ҡырҡы) ваҡытын һуңлатмаҫҡа) әруахтарҙы олоҡлауҙың сағылышы ул. Үлгәндәр рухына мөнәсәбәт һуңғараҡ ислам дине индергән ҡағиҙәләр менән тулыландырыла.

Ҡайтмаҫ юлға илап, һыҡтап оҙатыу күп халыҡтарҙың ерләү-ҡуйыу йола мәҙәниәтенә хас. Һыҡтауҙар (ҡаҙаҡтарҙа — жоктау, ҡарасай-балҡарҙарҙа — сыйыт, сарнау, жиләү, урыҫта — плач һ. б.) башҡорт ерләү йолаһының да айырылғыһыҙ өлөшө булған. Һирәк осрай торған был мираҫтың сағыу, бөтөн бер өлгөһөн профессор Ғайса Хөсәйенов Белорет районында яҙып алған. Тамъян ырыуы башлығы, ил иминлеген һаҡлап, Рәсәйгә ҡушылыуҙы йүн күргән, Яуыз Иван батшаның бәләһен алдан белгән аҡыл эйәһе, сәйәсәт маһиры Шәғәли аға Шаҡман үлгәненә һыҡтау ул.

Ил ағаһы Шәғәли,
Ил эсендә бер инең.

---

[59] Вәлиди Ә. Т. Башҡорттарҙың тарихы // Ағиҙел, 1993, № 1. 7-се б.

Көнөн ҡояш һин инең,
Төнөн ай һин инең!
Күктә шоңҡар һин инең,
Ерҙә толпар һин инең.
Беҙ иламай, кем илар:
Ил эсендә бер инең!

Һыҡтауҙарҙа мәңге югалтыу ҡайғыһы, унан тыуған хис тәрәнлеге һәм шәхесте юғары дәрәжәлә һынландырыу тетрәндергес бирелә. Йән мәңге тере, ә батырҙарҙың, яҡшыларҙың рухы фатиха, кәңәш биреүсе изге йәнгә әйләнеүе боронғо ҡараштар булараҡ, һыҡтауҙа нәфис һындарҙа ябай, асыҡ ишетелә:

Онотма беҙҙе, ҡайта йөр,
Яҡшы һүҙең әйтә йөр,
Аҡ шоңҡарыбыҙ Шәғәли,
Әй! Әй! Әй! Әй!

Боронғо һундар батшаһы Атилланы, төрки хакандарын[60], шумер батырҙарын илап-һыҡтап ерләүҙәргә[61], данлауға ауаздаш был юлдар. Күренеүенсә, һыҡтауҙар ҡайғыны ла, маҡтауҙы ла белдергән. Уның ярҙамында гүр эйәһе булған кешенең донъялыҡта ҡылған эштәренә, йәмғиәттә тотҡан урынына баһа бирелгән.

Һәр һамаҡлау юлдарынан һуң «Э-ү! Әй!» тигән инрәү өндәре сеңләүҙәге шундай уҡ өндәрҙе хәтерләтә. Һыҡтауҙарҙа тәрән образлылыҡ та тетрәндерә:

Башһыҙ атҡа мендерерҙәр,
Еңһеҙ күлдәк кейҙерерҙәр.
Ни тип яуап бирерһең
Ҡара ерҙең ҡуйынында?

Бында «еңһеҙ күлдәк» — кәфенде, «башһыҙ ат» — мәрхүмде алып бара торған тим ағасын кинәйәләй. Бындай тасуирлауҙарҙың килеп сығыуының үҙ тарихы бар, әлбиттә. Ҡарағалпаҡтарҙа, мәрхүмде ҡәбергә алып бара торған таҡтаны — агаш-ат[62] тиҙәр. Тим ағасын «башһыҙ ат» тип атау борон кешене аты менән бергә ерләү йолаһының ныҡ үҙгәргән күренеше, буғай. Әйтелгәнсә, әйберҙе, йәнде билге алмаштырыу уларҙың икеһен бер тип белеү боронғо аңда ғәҙәти хәл булған.

Халыҡта киң таралған «үлем мөнәжәттәре» килеп сығыштары менән һыҡтауҙарға тоташа. Уларҙа, ғәҙәттә, үлгән кеше исеменән

---

[60] Бакиров М. Х. Бәйет эволюцияһына бер ҡараш. — Татар фольклоры жанрлары. Казан, 1978; Турсынов Е. Ҡазах ауыз әдәбиетин жасаушылардың байыргы әкелдәре. — Алматы, 1975. 36—40-сы б.

[61] Хамицаева Т. А. Осетины // Семейно-обрядовая поэзия народов Северного Кавказа. — Махачкала, 1985. С. 136.

[62] Липец Р. С. Отражение погребального обряда в тюрко-монгольском эпосе // Обряды и обрядовый фольклор. — М.: Наука, 1982. С. 225.

һүҙ алып барыла. Мәрхүмдең «тауышы» яҡты донъяны ҡалдырыу ҡайғыһынан әрнеү ҙә, ялбарыу ҙа, тереләрҙе иманлы йәшәргә саҡырыу ҙа булып ишетелә мөнәжәттә: «Тәндәрем зәғиф, ҡаты йыумағыҙ», «Сәләмәт булһа иманым, Ғазап күрмәç ине йәнем», «Йәлләмәй ул балаңды ла, Ҡарап тормай малыңды ла — Был үлем шундай бер хәл был». Асылда мөнәжәттәр күңел, рух таҙарыр өсөн яралған үҙенсәлекле доғалар.

Үлгәндәргә мәрхүм аша сәләм әйтеүҙәр — боронғо бөтөн бер йолалар сатҡыһы. Ватанға ҡайтыу — тупраҡҡа ҡайтыу мәле әҙәмзат тарафынан алдан хәстәрләнә, ер-тупраҡ түренә сәләм ҡылына:

> Ятраҡан Яппарыма,
> Барасаҡ мәҡамыма,
> Сығанаҡ солтаныма,
> Сәләм әйткел, йә-һу!

Әжәле етерен һиҙенгән оло кешеләр бәйет-мөнәжәттәрен үҙе үк әҙерләп, кемгәлер: «Мин үлгәс, мәйетем эргәһендә көйләрһең»— тип әйтеп ҡуйыуҙары ла осраҡлы түгел. Улар кешенең борон үлемтек әйберҙәрен генә түгел, ә рухын да асылға ҡайтыуға әҙерләүен, шул ыңғайы ижад итеүен дә һөйләй.

Ислам диненең мәрхүмде оҙатыуға ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡатнашыуын, илау-һыҡтауҙарҙы ҡәтғи тыйыуы, башҡа төрлө сикләүҙәре сәбәпле, тора-бара һыҡтау йолалары һүнеүгә дусар булған.

Башҡорттарҙың ерләү йолаһы ҙур өс өлөшкә бүленә: ерләүгә тиклемге йолалар (ясин уҡыу, йыйыу, һаҡлау, ҡәбер ҡаҙыу). Ерләү үҙе (оҙатыу, йыназа уҡыу, ерләү). Ерләүҙән һуңғы йолалар (мәрхүмдең өсөн, етеһен, ҡырҡын, илле берен уҡыу).

Һуңғы юлға оҙатыуға бәйле һүҙ сәнғәте өлгөләре (һыҡтауҙар. мөнәжәттәр, бәйеттәр, сәләмдәр) тәғәйенләнеше, йөкмәткеһе, атҡарыу алымдары, башҡарыу урыны һәм ваҡыты буйынса бик үҙенсәлекле. Уларҙа халыҡтың мифологик белеме, бер кемгә лә был фани донъяла беленергә тейеш булмаған мөхитте үҙенсә күҙаллауы, тереләргә шиғри васыяттары һынлана. Тәрән тарихи тамырҙарҙа сеңләү менән һыҡтау йолаларының ҡәрҙәшлеге сағыла. Был ҡәрҙәшлектең асылы ҡыҙҙы кейәү йортона оҙатыу менән кешене теге донъяға оҙатыу араһында мәғәнәүи оҡшашлыҡта. Был йолаларҙың төҙөлөш, үтәлеш яҡтарынан оҡшашлығы ла (кейендереү, күмәкләп оҙатыу, илашыу, сеңләү, һыҡтау ҙа, ҡыҙҙың билбауын кейеү йортонда, ә мәрхүмдең билбауын ҡәберҙә сисеү ҙә) шуға ишара.

Башҡорттарҙың ҡарашынса, гүр эйәһе булыу — йәшәүҙең икенсе рәүешенә күсеү мәле. Ерләү, ерле итеү — кешенең үткән быуындар янына китеүе. Ер — бар тереклектең, донъяуи табыштарҙың сығанағы. Шулай итеп, Ергә киткәндәр уңыш, үрсемгә булышыусылар рәтенә инә.

Башҡорт халыҡ йола ижады — быуаттар буйы халыҡтың тормош-көнкүрешен, күңел, рух булмышының ыңғай, камил йәшәйешен тәьмин иткән боронғо мираҫ. Уны инҡар итеү — алтынды быҫраҡҡа буяп ташлауға бәрәбәр. Әҙәм балаһы йола менән тыуған, йолаһа донъя ҡуйған. Тик, аҙан әйтеп, исем ҡушылып, «тулғаҡ сәйе», «бәпәй сәйе» эселгәс кенә, әҙәм ырыу ағзаһы, кеше, тип аталыр затҡа әүерелә; сеңләп оҙатылып, ҡәйнә буҫағаһынан үткәндә, мал бүләге, һыуға бағыныу йолаһын атҡарғас ҡына, ҡыҙ — килен, хәләл түл йәйер ырыу ағзаһы иҫәпләнә ала. Үлгән кеше лә, һуңғы туйы еренә еткерелеп атҡарылғас ҡына, сафланған гүр эйәһе тип ҡабул ителә, тигәндәр.

Әҙәм затының тәүге (фани донъяға килеү), һуңғы (ҡайтмаҫ юлға оҙатыу) туйының еренә еткереп атҡарылыу-атҡарылмауы башҡаларға бәйләнгән. Ололарҙың кесе алдындағы, тереләрҙең үле алдындағы бурысы шулай билдәләнгән. Шул бурыстарҙы йола фольклоры рәүешендә халыҡ быуын-быуын күндерә килгән.

Йола фольклорында инаныуҙар ғына түгел, ата-бабаларыбыҙҙың баҡый быуаттар буйы төйнәлгән донъяуи аҡылы ла, тәжрибәһе лә сағылған. Ҡешеләр тәбиғәте ҡуйынында ҡулланыусы, уның көсөн күреүсе булып ҡына йәшәмәгән. Уның менән һыйышып, Ер, Күк, Һыу, Ут даирәләре менән килешеп йәшәргә тырышҡан. Уларҙы олоҡлап, доғалар, һығыныу, данлау һүҙҙәрен әйткән. Шуға ла йолаларҙан шиғри, нәфис һүҙ айырылмаған. Ана шулай, бер-берәһе менән, туҡыманың арҡауы менән буйы кеүек, туҡылып, йомаҡтай йомарланып, йола ижады фольклоры әллә нисә быуаттар ашаһына тартыла ла быуаттар хәтеренә юл ала. Йола эҙҙәре үтә тәрән һәм тотороҡло. Беҙҙең эраға тиклем XVI—XII быуаттарҙа уҡ дала цивилизацияһының бер ҡәлғәһе булған Арҡаимда әле булһа бабаларыбыҙҙың Күккә, Ергә, Утҡа, Һыуға табынып ҡорбан килтереү йолалары, Тәңреләрҙән именлек, бәрәкәт, түл һорап тауҙа табыныу йолаларын һаҡлаған эҙҙәр табыла тора бит. Арҡаимда (арҡа — иң), ҡәлғәнең ҡоролошонда ла, урамдарҙың, ҡоҙоҡтарҙың төҙөлөшөндә лә дүртмөйөш һәм түңәрәк-тәр өҫтөнлөк итә. Һауыт-һаба, ҡорамалдарға, кейем-һалым, биҙәнеү әйберҙәренә лә ошо формаларҙың тамға булып күскәнлеге күҙәтелә. Ә былдай форма һәм тамғалар — боронғо бабаларыбыҙҙың бер тармағы булған һинд-фарсы телле ҡәбиләләрҙең мифологияһы буйынса, йәшәүҙең мәңгелеге, ир, ҡатын заттарының донъя тотҡаһы булыуы, тормоштоң әйләнмәле ҡуласа, йәғни ҡабатланыусан булыуының билгеләре ул. Әлеге тамғаларҙың башҡорттоң һөлгө-балаҫтарында осрауы бер ҙә осраҡлы түгел. Улар барыһы ла — күп мәғлүмәт һаҡлаусы йола эҙҙәре. Шулай итеп, йола башҡарыу мәлендә генә бер махсус сара булып ҡалмай, ә матди нәмәләргә лә туҡылып, һуғылып, сүкелеп, һаҡланып ҡала алыусы эстетик әһәмиәткә лә эйә булған мәҙәни үә сәнғәти күренеш ул.

Башҡорт халыҡ ижады — баҡый быуаттар буйы тәрәҡҡиләшкән мәшһүр рухи мираҫ. Тарих, тел, үҙәң, сәнғәт, милли тәрбиә мәктәбе, әҙәп, хоҡуҡ һәм тормош-көнкүрешкә ҡағылған боронғо

мәғлүмәттәрҙе ул бер бөтөнлөктә үҙендә тотороҡло һаҡлай. Шуға ла төрлө өлкәлә эшләгән ғалимдарҙың, белгестәрҙең уны бер бөтөнлөктә, берҙәм өйрәнеүе фарыз.

Хәйерле сәғәттә! Йолаларыбыҙ иман нуры булып балҡыһын, рух сафландырыр аманат булып ҡайтһын!

Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ,
филология фәндәре докторы.

Розалия СОЛТАНГӘРӘЕВА,
филология фәндәре кандидаты.

# ХӨРӘФӘТТӘР, БОРОНҒО ЫҘАН-ЙОЛАЛАР

## ПОВЕРЬЯ, ДРЕВНИЕ ОБРЯДЫ

## HURAFELER, BOŞ INANŞLAR

## POPULAR BELIEFS, ANCIENT CEREMONIAL RITES





## СЕРЛЕ ЗАТТАРҒА ЫШАНЫУ

### 1 АЖДАҺА * МЕНӘН ЮХА

Башҡорттарҙың ышаныуы буйынса, ҡәҙимге йылан, йөҙ йыл йәшәгәндән һуң, аждаһаға әүерелә. Аждаһа йыланының буйы бер нисә сажинға етә, ти. Ул күлдә, бәғзе ваҡыт ҡоҙоҡта йәшәй.

Аждаһа күлгә һыу эсә төшкән мал-тыуарҙы, ифрат та бәрәсһәрәсте йотор булған.

Мең йәшкә еткәс, аждаһа юхаға әүерелә. Юха кешене, бигерәк тә еткән ҡыҙҙарҙы ашай, ти. Кеше, йәнлек киәфәтенә инә ала... Ләкин Аллаһы тәғәләнең рәхмәте менән, аждаһа, ғәҙәттә, юха йәшенә етә алмаған, ни өсөн тиһәң, уны болот күтәреп ала ла Ҡаф тауы * артына алып барып ташлай, ти...

...Салт аяҙ күктә ҡапыл кескенә болот пәйҙә була ла, күк күкрәтеп, йәшен йәшнәтеп, күлгә төшә. Шул болот һыуға тейеүе була — һыу, ҡайнағандай урғыла, атыла башлай, күлдән ҡот осҡос бер мәлғүн килеп сыға. Уның күҙҙәре ҡымыҙ туҫтағындай булып атылып килә, ти. Болот тегенең башын ҡымтып ала ла, ти, күтәреп алып китә башлай, ти... Аждаһаның кәүҙәһе, ҡарамаҡҡа тимгел-тимгел, балсыҡ төҫлө була. Күтәрелә торғас, теге мәлғүндең ҡойроғо ла килеп сыға. Аждаһаның ҡойроғо һәнәк кеүек ике асалы була.

Һыуҙан тартып сығарылған аждаһа борғолана, тартҡылаша башлай. Тәрән бураҙна яһап, ергә һөйрәлеп килгән ҡойроғон болғарға тотона. Үҙе шыңшып, шыйылдап һыҙғыра. Берсә ҡойроғон йомарлай, берсә ҡабырғаһына һуға. Нисек тә ҡотолоп ҡалырға маташа. Тик ҡөҙрәтле көстәр уның башын ныҡ ҡымтып тота, ысҡындырмай.

Шул ғәрәсәтле дауылда аждаһаның ҡойроҡтарын борғолап барыуын күрергә була.

Күккә күтәрелә барған һайын аждаһа ҡояш нурҙарында сағыу ҡыҙғылт һары төҫ ала.

Бәғзе төньяҡ-көнсығыш башҡорттарынан ишеткәнем буйынса, аждаһа ла кеше ҡиәфәтенә инә икән.

## 2. БӘРЕЙҘӘР

Бәрейҙәр ҡая-таш тишектәрендә йәшәй. Улар елде бәйҙә тота. Улар, башҡорттарҙың үҙҙәре кеүек сәхрәләрҙә лә йәшәй. Бәрейҙәр матур-матур кейеҙ тирмәләрҙә көн итә. Тирмәләр янында ҡолондар бәйҙә тора, ә тирә-яҡта йылҡы өйөрҙәре, башҡа мал-тыуар утлай. Унда һис кәмеү-шыңеү белмәҫ һутлы үлән үҫә, ти. Бәрейҙәр ҡатын ала, геүләтеп туй үткәрә. Туйға музыкант башҡорттарҙы ла саҡыра, ти. Ҡышҡы бәрей туйҙары ваҡытында буран сыға.

Бәғзе ваҡыт кешеләр бәрейҙәр менән үҙ-ара килешә икән. Ундай саҡта кешеләр бәрейҙәр ярҙамында байып китә. Эшләгән эштәре уң була, ти.

Бәрейҙәр алдан танышҡан ҡыҙ-ҡырҡынды урлар булған.

Ҡәҙимге башҡорт ҡиәфәтенә инеп, бәрейҙәр йәрминкәләргә лә сыға, ти. Уларҙы таныр өсөн күҙгә хикмәтле дарыу һөртәһең, ти. Тик уны бәрей һиҙмәҫкә тейеш. Һиҙһә, эш харап: бәрей ул кешенең күҙен соҡоп ала, ти.

## 3. БИРЕНӘН * ҺАҠЛАНЫУ

Бире бигерәк тә йәш балалар менән булышырға ярата. Шуға күрә, бире эйәләмәһен тип, баланың сәңгелдәгенә Ҡөрьән бите һалалар. Ҡыҙ баланың ҡулына ҡыҙыл мунсаҡ (гәрәбә), ә малайҙың ҡулына күк һүренте еп бәйләйҙәр.

Исем ҡушылмаған баланы бире алмаштыра. Шуға, исем ҡуштырмайынса, уның яңғыҙын ташлап сыҡмайҙар.

## 4. БИРЕ ҠЫУЫУ

Биреләр өйгә эйәләһә, уны мылтыҡ алып, ҡоро дары менән атып ҡыуалар. Сүкәйеп ултырып, дүрт мөйөшкә аталар, иң һуңынан мейес эсенә аталар. Шулай итһәң, биреләр мейес мөрйәһенән, зыҡ ҡубып, осоп сығып китә.

## 5. БИРЕ КҮСЕҮЕ

Биреләрҙең туҡланған аҙығы ҡойо-батҡаҡ та башҡа юҡ-бар.

Биреләр кеше заты кеүек күсенергә ярата. Йәйен йәйләүгә, көҙөн ҡышлауға күсә. Бире күсенгәндә, зыҡ ҡубып тора: һыйырҙары мөңрәй, кәзәләре баҡыра, ҡолондары сырҡылдай, бала-сағаһы илаша. Үҙҙәре күҙгә күренмәй.

## 6. МОСОЛМАН БӘРЕЙЕ

Бик уҡымышлы кешеләр бәрейҙе ҡулға эйәләштерә ала. Кәрәкле һабағын уҡынымы — улар килеп етә.

— Ни бойораһың? — тип, теге кеше ни ҡуша, шуны үтәргә әҙер тора.

— Тауҙы шылдырығыҙ, — тиһә, тауҙы шылдыра.

— Бесән килтерегеҙ, — тиһә, шул минутта кәбәне менән, осортоп, алып килтереп еткерә. Ундай бәрейҙе мосолман бәрейе тиҙәр.

Мосолман бәрейенән иләк менән һыу ташытырға ла, ҡомдан арҡан иштерергә лә була. Улар ел-буран сығара ала. Сыҡҡан ел-дауылды туҡтатырға ла хәлдәренән килә. Кәрәк булһа, ҡояш нурынан бау иштерергә лә мөмкин. Уларҙың ҡулынан килмәгән нәмә юҡ, ти.

## 7. ЕН ҠЫУЫУ

### А

Өйгә ен эйәләшһә, дүрт мөйөшөнә тоҫҡап мылтыҡ атырға. Таймый ауылы Ҡамилә апай йоҡларға яттымы, өй башында ен-шайтан уйнай башлай икән. Шунан был күршеһе Зөфәргә: «Өйөмә ен эйәләшкән. Аҡшам мәлендә килеп, ат әле мылтыҡтан», — тигән.

Теге, аҡшам мәлендә килеп, ике-өс мәртәбә атҡан — ен-шайтан ҡасҡан.

### Б

Боронғо башҡорттарҙың ҡарашы буйынса, ...ат ен-бәрейҙәрҙең арбауына, күҙ бәйләүенә бирешмәгән. Кеше күҙенә күренмәгән яуыз көстәрҙе лә ул яҡшы күрә, тип уйлағандар... Хатта ат тиҙәге тотоп ултырган кешене лә күҙ бәйләүсе алдай алмай. Байтаҡ ваҡыт буш торған өйгә эйәләшкән ен-бәрейҙәрҙе ҡурҡытып, ҡыуып сығарыр өсөн дә элек өйгә ат индерер, изге артыш ағасын яндырыр булғандар.

## 8. УБЫР ЙӘКИ МӘСКӘЙ

### А

Кеше үлгәс тә, йәне бәғзе ваҡыт кеше араһында ерҙә йәшәй, тип уйлағандар. Уны убыр йәки мәскәй тип йөрөтөр булғандар. Йәндең эйәһе тере саҡта уҡ убырға әүерелеүе мөмкин, ти. Бөтә сихырсыларҙа ла йән урынына (сөнки улар уны шайтанға һата) убыр була. Уны сихырсы тере саҡта уҡ белергә була: улар бәғзе ваҡыт сей ит ашай. Әйтеүҙәренсә, убырҙың алды ғына була, арты булмай...

Тау башҡорттары әйтеүенсә, убыр көндөҙөн ҡарт бабай ҡиәфәтен ала, кисен — ярғанат төҫөн. Төнөн убыр ер өҫтөнән ут булып осоп, күп бәлә-ҡаза килтерә: ауырыу ебәрә, кешеләрҙең ҡанын эсә...

Сихырсы үлһә, уның убыр-йәне ерҙә ҡалмаһын, ил гиҙмәһен өсөн, уның үксәһенә энә ҡаҙайҙар.

Әгәр ҙә мәгәр кешенең сихырсы булыуы үлгәндән һуң ғына [illegible], убыр-йәне тереләрҙе ыҙалата башлаһа, уның ҡәберенә йә, ҡәберҙе яңынан асып, уның күкрәгенә йыла ҡаҙыҡ ҡаҡалар.

### Б

Мәскәйҙең, осҡон бөркөп, ялтырап осоп барыуын күрһәң, иҙеүҙе ысҡындырып, уҡынырға кәрәк. Әммә уға төкөрөргә ярамай. Төкөрһәң, ҡыуанып: «Әл дә төкөрҙөң, тамағым ебене», — тип әйтә, ти.

### В

Зыяраттан ут сыҡһа, уны убыр тиҙәр. Әгәр ҙә бер ағас һәнәктең сатаһын һындырһаң, шул убырҙың көсө бөтә, тиҙәр.

### Г

Яман кешенең аҙғын йәнен убыр тигәндәр. Ундайҙарҙы йәнен шайтанға һатҡан әҙәм тиҙәр.

Шайтанға һатылғас, йәненә шайтан баш булып сыға инде. Шайтан нисек теләй, бәндәһен шулай ҡоторта. «Шайтан ҡотҡоһона бирелгән әҙәм» тигән һүҙ ҙә шунан ҡалған.

Убырлы кешенең йәне йоҡлағас, убыры төнөн йөрөй, имеш. Шул мәл ул кешеләргә ауырыу йә берәй зыян килтерә икән.

Убырлы кеше үлгәс, убыры ҡәберенән тишек тишеп, тышҡа сығып йөрөй. Төндә зыяратта күренгән ут ана шул убыр инде.

Убырлы ҡәберҙең тишегенә имән сөй ҡағалар. Шунан ғына убыр осоуы бөтә.

### Ғ

Мәскәй (убыр уты) ҡағылһа, тоҙ өшкөртәләр ҙә, шуны семтекләп кенә ҡояш байышына һибеп, ишекте биклап яталар.

### Д

Балаларҙың шауын тыңлап йөрөгән убырлы ҡарсыҡты мөгөҙлө ҡарсыҡ, тиҙәр.

### 9. ЕН БЕЙЕҮЕ (ҠОЙОН)

Саңды өйөрөлтөп-өйөрөлтөп, йылан кеүек күтәрелгән ел-буранды, ҡойондо ен бейеүе, тиҙәр. Ул ендең һыңар аяҡ, һыңар ҡул, һыңар күҙ була.

Ен-ҡойонға былай тип уҡынып төкөрөргә:

— Ҡара йыланды ҡамсы ит,
Ҡарындашыңды бисә ит,
Тфү, мәлғүн!

Шулай тип әйтһәң, ул ғәрләнә лә кире ялтара.

### 10. БИСУРА

#### А

Бисура ҡыҙыл күлмәкле бәләкәй генә һары кеше ҡиәфәтендә була. Улар урман төпкөлдәрендәге аҡландарҙа йәшәй, ти. Ир енесенән булған бисуралар ҡыҙ-ҡатындарҙы, әүрәтеп, урманға алып китә, улар менән яҡынлыҡ ҡыла, ә ҡатын енесенән булғаны ирҙәрҙе аҙҙыра.

Кем менән яҡынлыҡ ҡыла, шуға бисура аҡса килтерә, ти, Шунан ул кеше байып китә, ти.

#### Б

Бисура өйгә эйәләшә, түңәрәк нәмәләрҙе (һауыт-һабаны) урлай. Уны мылтыҡ атып ҡына ҡурҡытып, ҡасырға мәжбүр итеп була. Ҡасыр саҡта бөтә ҡашыҡ-аяҡты, үс итеп, ишек алдына һелтәй.

Асыуланһа, зарар итә. Кешегә нәмә һелтәй, ондо түккеләпсәскеләп бөтә. Шуға ла уны әрләргә ярамай. Әрләгәндәре өсөн бер бабай менән әбейҙең ашына йыуғыс һала, төндә өҫтәренә утын ағасы һелтәй.

Бисураның маңлайының уртаһында бер генә күҙе була. Үҙе ялбыр, имсәге һалбыр була.

### 11. АЛБАҪТЫ

Йоҡлаған сағында кеше баҫлыҡһа, албаҫты баҫа, тиҙәр.

Албаҫты — әҙәм затлы мәлғүн. Ирҙәргә ул ҡатын булып, ҡатындарға ир булып күренә. Ирһеҙ (йә ире өйҙә юҡ) ҡатындың мейес артынан тып итеп килеп төшә лә, ти, бабай ҡиәфәтенә инә, ти. Мөьминә тигән әбейгә ҡара костюмда килер булған.

### 12. АЛБАҪТЫ ҠЫУЫУ

Ҡыуыусы, сыбыртҡы йә сыбыҡ алып, төнө буйы албаҫтыны аңдып тора. Төн уртаһында теге күренгәс, ҡамсылай-ҡамсылай, «ҡыуа» башлай:

— Ҡайҙан килдең, шунда кит,
Йыуан имсәктәргә кит,
Йомшаҡ түшәктәргә кит,

Һыуҙың ағышына кит,
Ҡояш байышына кит,
Бында һиңә урын юҡ,
Ҡайҙан килдең, шунда кит!

## 13. ЭЙӘЛЕ АҒАС

Һәр нәмәнең эйәһе була: тау эйәһе, таш ҡыуышы эйәһе, йорт эйәһе, ағас эйәһе. Эйәһе булған ағасты эйәле ағас, тиҙәр. Эйәле ағасты утынға йығырға, уға ҡағылырға, ботағын йыйырға ярамай.

Эйәле ағастың эйәһен асыуландырһаң, кешегә зыяны тейә. Ул йә ауырый, йә бүтән берәй ҡыйынлыҡ кисерә.

## 14. УРМАН ЭЙӘҺЕ, ШАҢ

Урман эйәләрен тау, Урал аръяғы башҡорттары шүрәле тип, төньяҡ-көнбайыштыҡылар ярымтыҡ тип атай. Башҡорттарҙың шүрәле менән осрашыуы хаҡында төрлө-төрлө һүҙ йөрөй. Шүрәле кешеләргә, ғәҙәттә, кеше ҡиәфәтендә килә. Тик уның күҙе лә, бото ла һыңарышар була. Ул башҡа ҡиәфәт, мәҫәлән, бүрәнә ҡиәфәтен дә ала ала, ти.

Эйәләр, кешеләр кеүек үк, һунар итә, уның ҡатыны менән бала-сағалары ла була. Ҡыҙҙары менән бисәһе иҫ киткес матур була, ти. Улар урманда, таш ҡыуыштарында йәшәй.

Шүрәле, йыш ҡына ҡысҡырып, кешене әләкләй (шаң).

## 15. ШҮРӘЛЕ

Һалбыр имсәкле, һап-һары йөнтәҫ бисә ҡиәфәтендә була, ти. Кешене әүрәтеп, ҡытыҡлап үлтерә, ти.

«Шүрәленең ҡултыҡ аҫты ҡыуыш була, аяғы артҡа ҡарап тора, йөрәге күренеп тора. Бер-бер тап булып, ҡытыҡлай башлаһа, тәгәрәп киткән ыңғайға ҡултығының аҫтына аяғыңды тығаһың», — ти торғайнылар. Шулай итһәң, шүрәле үлә лә ҡуя, ти.

## 16. ЙОРТ ЭЙӘҺЕ

### А

Һәр йорттоң үҙ эйәһе була. Кешенең ҡаралты сигенән була уның юлы. Шуның өсөн күршеләр ҡаралтыһын терәтеп һалырға тейеш түгел, әтеү йорт эйәләренең юлы тап килеп, йорттан ҡот китергә мөмкин.

### Б

Өй эйәһе кешегә күренмәй. Ул өй хужаһын төрлө бәлә-ҡазаларҙан һаҡлай, йоҡлағанда, төшөнә инеп, иҫкәртә. Мәҫәлән, «Тор,

Сәүҙә, нишләп йоҡлап ятаһың, һыйырың быҙаулаған бит». Сәүҙә апай тышҡа сыҡһа, ысынлап та һыйыры быҙаулап тора.

Өй эйәһе, кешегә күпләп күренеп ыҙалата башлаһа, уны әрләп биҙҙерәләр.

В

Өй эйәһе асыулана, тип, балаларға өйҙә бик шауламаҫҡа ҡушалар.

Г

Тиктән-тик ишек, тәҙрә асылһа, өндәшергә ярамай. Эйә ҡағылыуы бар. Ике тапҡыр шаулаған ҡына, әйләнеп ҡарарға мөмкин. Йорт эйәһе күренеп, борсоп йөрөмәһен өсөн, йорттоң дүрт мөйөшөнә йоморҡа киҫеп һалаһың.

Иҫке өй урынына яңыһын һалыр алдынан йорт урынын һөрһәң, өй тыныс була.

## 17. МУНСА ЭЙӘҺЕ

А

Мунсаның да эйәһе була. Яңғыҙ мунсаға барһаң, тамаҡ ҡырып, тауыш биреп барырға. Мунсанан сыҡҡанда, әгәр йыуынырға бүтән кеше килмәһә:

— Хәҙер берәү ҙә килмәй, мунса эйәһе, фәрештәләр, инегеҙ,— тип сығаһың. Кеше килер булһа:

— Хәҙер шул килә, был килә, — тип әйтеп китәһең.

Б

Кем дә булһа берәү мунсаға беренсе мәртәбә инһә, эләүкәһенә еп бәйләп йә булмаһа тәҙрә төбөнә тәңкә һалып сыға. Йәш баланы тәү мәртәбә мунса төшөрһәләр, эләүкәһенә суҡ бәйләп: «Суҡ — һиңә бүләк, һиңә бүләк», — тип сығып китәләр.

## 18. АРБАҘ *, ХАЗИНА ЭЙӘҺЕ

А

Кеше кеүек күренде. Беҙҙең мунса артына ике ҡыҙ-ҡатын булып, бейек ситәнде аша атлап сығып китте. Атайым: «Ҡурҡма һин унан. Ул арбаҙ эйәһе ул», — тине.

Б

Аҙбарҙа ҡышҡы һалҡында төндә һыйыр быҙаулағанда, аҙбар эйәһе йоҡлап ятҡан хужаны: «Тор, һыйырың быҙауланы», — тип

уятыр булған. Йәки: «Ни эшләп ятаһың, мунсаһ яна!», «Ҡеләтеңә ҡараҡтар төштө!», «Йәш сабыйың сәсәй, ауыҙын юрған ҡаплаған», — тип, өй эйәһе вайымһыҙ йоҡлап ятҡан хужаны иҫкәртә, имеш.

### В

Берәйһе берәй ергә хазина йәшерһә, йылдар үткәс, шуға йән инә. Ҡешегә ул һарыҡ бәрәсе булып та, кеше, эт ҡиәфәтендә лә, башҡа төрлө лә күренә, ти. Әгәр уны күргән урынға көл йә ҡоро тупраҡ һалып сыҡһаң, ул ҡайҙа эҙен ҡалдыра, шул урынды соҡоп ҡарарға кәрәк: хазина шунда ятыр булыр.

## 19. МАЛ ЭЙӘҺЕ

### А

Һәр хужалыҡтағы малдарҙың үҙ эйәләре була. Уларҙың йәнен көйҙөрһәң, тап-топ баҫып, артынан эйәреп йөрөй, ә боролоп ҡараһаң, бер нәмә лә күренмәй. Мал эйәләре өйгә яҡын килмәй.

### Б

Мал үлһә, башҡа ҡаза килһә: «Зәңке әбей рухына!» — тип әйтергә. Зәңке әбей менән Зәңке бабай — малдарҙы ҡурсалаусы мал эйәһе. Шуға ла улар рухына хәйер бирәләр. Хәйерҙе бай кешегә бирергә ярамай. Байҙар барыбер хәйеренде әҙһенеп: «Әҙ!» — тип әйтә. Хәйерҙең әҙе, күбе булмай. Хәйер бирер кеше булмаһа, эт менән бесәйгә бирһәң дә, ярай.

## 20. ҺЫУ ЭЙӘҺЕ

### А

Һыу эйәләре йылғала, күлдә йәшәй. Улар һәләк бай була. Үҙҙәренең йәшәгән ерә һыу төбөндәге бер таш аҫтындағы тишектән инәләр. Уларҙың бала-сағаһы ғына түгел, үҙҙәре лә һыуҙан сығып, тирә-йүндә йүгерергә ярата.

### Б

Ҡискеһен һыу алырға барғанда, былай тиҙәр:

— Аҡбуҙ атлы, аҡ һаҡаллы ҡунаҡ килгән. Тәһрәткә һыу бирегеҙ.

### В

Хоролдауыҡ-ҡош ҡабат-ҡабат ҡысҡырһа, ана, һыу эйәһе ҡысҡыра, быйыл бер кешене ала, тиҙәр.

### Г

Асылыкүлдең батшаһы — иң оло эйәһе илгә ҙур афәт, бәлә-ҡаза килерен башҡорттарға алдан иҫкәртеп ҡуйыр булған. Бәлә-ҡаза килер алдынан уның һыуы, ныҡ ташып, тирә-яҡты баҫыр булған.

### Ғ

Һыу эйәһе ирле-ҡатынлы була. Кешене һыуға тарта. Батырырға булһа, тауышлана. Ҡатын ҡиәфәтендәге һыу эйәһе таң алдынан алтын тараҡ менән сәсен тарай, ти. Кеше өндәшһә — юҡ була ла ҡуя, ти.

## 21. ҺЫУ ИНӘҺЕ СӘСКӘЛӘРЕ

Һаҡмарҙа һыу инәһе (йәки һыу эйәһе) бар тиҙәр ине. Томбойоҡ сәскәләрен: «Һыу инәһе сәскәләре», — тип өҙмәҫкә ҡуша торғайнылар.

## 22. ИЗГЕ ҠОШТАР ҺӘМ ТОЛПАР АТ

### А

Кәкүк тәүҙә бер ҡатын була. Яңғыҙы ғына бик михнәтләнеп донъя көтә. Бер ваҡыт ҡунаҡҡа барырға йыйына. Баш тарарға баш тарағы булмай. Иреме, ҡәйнәһелерме — кемдер ҡабаландыра быны. Сәсен дә үреп бөтә алмай ҡала. Шуға кәкүктең бер ҡанаты йәйенке — уныһы үрелмәгән сәс толомо, икенсеһе — йыйынҡы, уныһы үрелгән толомо.

Кәкүк-ҡатын зарлы булғанға, кәкүк-ҡош та зарлы.

### Б

Аҡҡошто атырға ярамай. Әгәр уны иптәшенән айырһаң, ул ҡарғай, айырған кешенең зат-ырыуы ҡорой.

Күгәрсенде, сыйырсыҡты, кәкүкте үлтерергә ярамай — зыян күрәһең.

Бөркөт менән шоңҡар ҙа — изге ҡоштар. Бөркөт ҡырҡ артыу [1] аша күрә, ти.

Бәләкәй ябалаҡ: «Һуҡ!» — тип ҡысҡырһа, ул Сөләймән бәйғәмбәрҙең * илсеһе була.

Боронғо халыҡтың ҡарашы буйынса, толпарҙың ҡанатын бер кем дә, хатта уға атланған батыр ҙа күрергә тейеш булмаған. Толпар тик төн ҡараңғылығында, шулай уҡ ҙур арауыҡты тиҙ ваҡыт эсендә үтергә кәрәк булғанда ғына, ҡанатын йәйгән һәм батырҙы күҙ асып йомғансы кәрәк урынға илтеп ҡуйған.

Ҡанатын сығарып торғанында толпарҙы күрһәң, уға күҙ тейә. Күҙ тейеүен күтәрә алмай, толпар үлә. Шуға ла өйөргә төндә яҡын килгәндә, тамаҡ ҡырырға, тауыш бирергә ҡушалар. Шулай иҫкәртмәһәң, толпар ҡанаты йәнә кеше күҙенә эләгеүе, уға күҙ тейеүе бар, тигәндәр. Ҡеше-ҡара килеүен өйөрҙәге башҡа йылҡылар ҙа иҫкәртә, ти.

### В

Шүлгән мәмерйәһендә Аҡбуҙат рухы бар. Ул йә аҡ һынлы һыбайлы менән мәмерйә ауыҙында, йә яңғыҙы шул мәмерйә һыртында, тау башында, күренә, ти. Борон Аҡбуҙат хөрмәтенә бағышлап, бында аят уҡығандар, ҡорбан салыр булғандар.



## ИМ-ТОМДАР

### 23. ШИФАЛЫ ҠУЛ

Баҡа менән йыланды айырған кешенең ҡулын сайҡатып ауырыған кешегә эсерһәң, шифаһы тейә. Һибәт олатай ике тапҡыр баҡаны йыландан һалдырып алып ҡалған.

### 24. ҠОТ ОСҺА

Кешенең бик ныҡ ҡото осһа, арба тәгәрмәсенең туғынын, эске яғынан һыҙырып, утҡа тотоп торалар, һуңынан тәүҙә йөрәк яғы яурын башына, унан уңына, шунан баш осонда һыулы һауытҡа һалар.

### 25. ҠОТ ҠОЙОУ

#### А

Әгәр кеше, берәй нәмәнән ҡурҡҡандан һуң, ауырый башлаһа, был кеше ҡото осоп ауырый, тиҙәр. Берәй әбей саҡырталар ҙа ҡот ҡойҙоралар. Ул былай эшләнә: ауырыуҙы ултырғысҡа ултырталар, ҡот сығып китмәһен тип, өй ишеген әләләр, аҡ ҡурғашты иретеп алалар ҙа, кешенең башы өҫтөнә килтереп, һалҡын һыу һалынған сеүәтәгә ағыҙалар. Был эш өс тапҡыр ҡабатлана. Ҡурғаш төрлө-төрлө һындарға оҡшап ҡата. Әгәр ул эткә оҡшаш булһа, был кеше эттән ҡурҡҡан, тиҙәр.

Ҡот ҡойған саҡта берәй кеше килеп инһә, яҡшыға юрайҙар. Килеп ингән кешенән ҡот ҡойоусы өс тапҡыр һорай, тегеһе өс тапҡыр яуап бирә:

— Нимә алып килдең?

— Ҡот алып килдем.

— Нимә алып килдең?

— Ҡот алып килдем.
— Нимә алып килдең?
— Ҡот алып килдем.

Әгәр ҡот ҡойғанда килеп инеүсе булмаһа:

— Ҡот алып кил, — тип берәй кешене тышҡа сығарып ебәрәләр. Ул кеше араһында йөрөй бирепинә. Уға эйәреп ҡот килә була.

Ҡот ҡойоп бөткәс, ауырыуға ҡот һыуын эсереп, ҡот ҡурғашын сепрәккә төрөп, уны бетеү итеп ҡот эйәһенең муйынына тағалар.

Әгәр бер ҡойғандан һуң да теге кеше ауырыһа, ҡот ҡойоуҙы ҡабатлайҙар.

Б

Бисмиллаһир-рахмәнир-рахим,
Ҡил, ҡотом, кил,
Ҡил, ҡотом, кил.
Мөрйәнән дә кил,
Ишектән дә кил,
Тишектән дә кил!

Ҡот төшмәй ыҙалатһа, етегә тиклем дә ҡоялар. Етегә тиклем ҡойолған ҡотто тағып тормайҙар.

В

Ҡорайт *, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Ҡил, ҡотом, кил, ҡотом!
Илдән осһаң, илдән кил,
Эттән осһаң, эттән кил,
Малдан осһаң, малдан кил,
Ҡоштан осһаң, ҡоштан кил,
Һыуҙан осһаң, һыуҙан кил,
Кешенән осһаң, кешенән кил!
. . . . . . . . .

Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом
Ҡил, ҡотом, кил, ҡотом!

Г

Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Ҡил, ҡотом, кил, ҡотом!
Ағын һыуҙай ағып кил,
Аҡ балыҡтай йөҙөп кил!
Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Ҡил, ҡотом, кил, ҡотом!

Айғыр булып кешнәп кил,
Һыйыр булып мөңрәп кил!
Ҡорайт, ҡотом, ҡорайт, ҡотом,
Кил, ҡотом, кил, ҡотом!
Ишектән дә кил, тишектән дә кил,
Кил, ҡотом, кил, ҡотом, кил, ҡотом!

**Ғ**

Кил, ҡотом, кил, ҡотом,
Эйәләрең бында, ҡотом,
Ағын һыуҙай ағып кил,
Аҡ балыҡтай йөҙөп кил,
Эйәләрең бында, ҡотом,
Кил, ҡотом, кил, ҡотом,
Ҡорайт, ҡотом, кил, ҡотом.
Ғазрайыл фәрештә *! Килтер, ҡотом!
Эйәң бында, эйәң бында —
Кил, ҡотом!

**Д**

Айҙан килдең — айға кит,
Көндән килдең — көнгә кит,
Ерҙән килдең — ергә кит,
Елдән килдең — елгә кит!

**Ҙ**

Әй һин, ҡотом, кил, ҡотом,
Саҡырғанда, кил, ҡотом.
Ҡаҫта * төштө башыма,
Эйәһен табып бир, ҡотом.

Ҡотом әмере буйынса,
Ҡорҡот әмере буйынса.
Ҡорҡот атай *, ҡотоң бир
Түлкә атай *, ҡотоң бир.
Ҡотом ҡайҙа — мин шунда,
Ҡотом ҡайҙа — мин шунда.

**Е**

Ҡайт, ҡотом, ҡайт, ҡотом,
Ҡайт, ҡотом: ағып ҡайт —
Ағын һыуҙы йөҙөп сыҡ,
Гөлбикәнең ҡото осҡан,
Ҡамышлыҡты йырып сыҡ,
Ҡайт, ҡотом!

### Ё

Әрҙүш, нәмәрҙүш,
Ҡәфтәти, кәтәрҙүш
Бисмиллаһи — кетмер,
Әҡлимә, Мөслимә,
Мөьминә *...

### Ж

Ҡот ҡойоп та, тауыҡ ултыртып та ҡото осҡан кеше ипкә килмәһә: «Быныҡ ҡото нығ осҡан. Йөрәге урынынан тайған», — тип, уға йөрәк ултырталар. Һарыҡты сала һалып, күкрәген ярып, туҡтап та өлгөрмәгән йөрәген ала һалалар ҙа ҡото осҡан кешене, салҡатан һалып ҡуйып, йөрәге тәңгәленә ултырталар. Һарыҡ йөрәге шиңгәнсе ултырырға тейеш.

Ҡото осҡан кешенең күкрәгенә тауыҡ ултыртыу йолаһы ла бар. Уны ете төрлө үлән менән дә ыҫлайҙар.

## 26. АРПА ИМЛӘҮ

### А

Күҙенә арпа сыҡҡан кешенең итәк осон, йәки яғаһын осло итеп тоталар ҙа, арпаға төртәләр. Төрткән саҡта шулай тип һамаҡлайҙар:

— Бер. Фатиманың күҙенә арпа сыҡҡан, шуны имләйем.
— Ике. Фатиманың күҙенә арпа сыҡҡан, шуны имләйем.
— Өс..., дүрт..., биш..., алты... .
— Ете. Фатиманың күҙенә арпа сыҡҡан, шуны имләйем.
— Арпа! Фатиманың күҙенә сыҡма, эт к...нә сыҡ.
Эттән ерәнеп, арпа бөтөргә тейеш була.

### Б

Әгәр арпа һул күҙгә сыҡһа, уң ҡулдың сыңалсай * бармағына ҡыҙыл еп бәйләп ҡуялар, уң күҙгә сыҡһа — киреһенсә.

### В

Энәне, ҡара епкә һабаҡлап:

— Әпсен-төпсөн,
Төн үткәнсе бөтһөн!
Әпсен-төпсөн,
Төн үткәнсе бөтһөн!
Әпсен-төпсөн,
Төн үткәнсе бөтһөн! —

тип, арпа сыҡҡан күҙгә өс тапҡыр бер йыҡылайтаһың, бер алыҫайтаһың.

Г

Бат, бат, бат, арпа,
Минең күҙгә сыҡҡансы,
Эт к...нә сыҡ, арпа! —

Шул, күҙгә сыҡҡан арпаға ысын арпа менән төртөп имләйҙәр. Им көнөнә өс мәртәбә ҡабатлана. Өсөһөндә лә өс тапҡыр төртәһең. Уны тиҙерәк бөтөрөр өсөн ҡайһы саҡта туғыҙ мәртәбә төртөргә ҡушалар. Был осраҡта ла ул, эттән ерәнеп, бөтөргә тейеш.

Ғ

Арпа-мәлек, мәмәлек,
Менә һиңә бер күкиш!
Ун, туғыҙ, һигеҙ,
Ете, алты, биш, дүрт,
Өс, ике, бер, күкиш!
Тфү, тфү, тфү...

Имсе, шулай тип, күҙ тапҡырына йоҙроҡ күрһәтә лә төкөрә. Был эш өс тапҡыр ҡабатлана.

Д

Арпа-мәлек, мәмәлек,
Менә һиңә биш күкиш!
Арпа-мәлек, мәмәлек,
Менә һиңә дүрт күкиш!
Арпа-мәлек, мәмәлек,
Менә һиңә өс күкиш!
Арпа-мәлек, мәмәлек,
Менә һиңә ике күкиш!
Арпа-мәлек, мәмәлек,
Менә һиңә бер күкиш!
Тфү, тфү, тфү!!!

Ҙ

Арпа һуҡыр, мин дә һуҡыр,
Ҡайҙан килһәң, шунда ҡайт.
Көндән килһәң, көнгә ҡайт,
Айҙан килһәң, айға ҡайт!
Елдән килһәң, елгә ҡайт,
Һыуҙан килһәң һыуға ҡайт!

## Е

Арпаны, кұлдәктең иҙеү осон ғына тотоп, төртә-төртә имләйҙәр.

Арпа имләгән кешенән икенсе бераү:

— Ни сыҡҡан? — тип һорай.

Тегеһе:

— Арпа сыҡҡан, — тип яуап бирә.

— Ни имләйһең?

— Арпа имләйем.

Ошо рәүешле өсәр ҡабат әйтәләр.

Имләгән кеше иҙеүе менән төртә-төртә:

— Ай ҡайта, көн ҡайта —

Һин дә ҡайт, — ти.

Шулай итеп имләһәң арпа бөтә.

## Ё

Күҙгә арпа сыҡһа, урта бармаҡ менән ағас ботағына төртөп алып, шуны арпаға һөртәләр, һамаҡлайҙар:

Арпа күкеш, мә, күкеш,
Әсмәйем, әсмәйем, мә, күкеш!
Ай ҡайтты, көн ҡайтты,
Яман ҡаҫта, һин дә ҡайт!

## Ж

Әпсен, төпсөн,
Минән китһен,
Айға күсһен,
Шунда үҫһен!
Әпсен, төпсөн,
Тиҙерәк бөтһөн!
Тфү!

## З

Арпа — мәлек, мәмәлек,
Мә, күкеш! Әүбаш, Әбжәт, Һәүбәс,
Ҡарасәт, Ҡойди(с), Ҡәләмәс, Сәғәбәс,
Ҡарамат, Ғаризылан, хата-бәрәкәт,
Ғаәзиғолан, Әхсәлим!
Бына һиңә, тфү!
Билғәзизи, Әҡсәлим,
Рәхмәт! Ррахим!

## И

Иҙеүҙе өс тапҡыр тешләйҙәр ҙә шуның менән арпа сыҡҡан күҙгә өс мәртәбә төртәләр. Төрткәндә, шулай һамаҡлана:

Һин тирһегән булһаң,
Мин ирһегән.
Ай ҙа бөтә, һин дә бөт,
Ай ҙа бөтә, һин дә бөт,
Ай ҙа бөтә, һин дә бөт!

### 27. КҮҘ АУЫРЫУЫН ИМЛӘҮ

## А

Сәсәк ауырыуынан һуң күҙ һуҡыраймаһын өсөн, син һиҙәп * ҡырындыһын һалалар. Син һиҙәп, ҙур тәңкә ҙурлығы була. Уны түшкә тағып йөрөйҙәр.

Беҙҙең ауыл Зәйнетдин ҡарый бала саҡта сәсәктән һуң һуҡырая, һуҡыраймаҫ өсөн, син һиҙәпте ҡырып һалыу урынына ете бөртөк һиҙәпте алып, шуны онтап күҙенә һалғандар. Күҙгенәләре өйөрөлөп кенә сыҡҡан да ҡуйған.

## Б

Күҙ ауырығанда, күҙгә имсәк һөтөн һауҙыралар. Ул хәләл һөт, йәғни зина белмәҫ яңғыҙ ҡатын һөтө булырға тейеш.

...Бер кеше юлда китеп барһа, аҡ йылан тап була. Аҡ йылан йыландар батшаһы икән. Был, уны-быны белмәй, ҡамсыһын ала ла һелтәй, йылан өйәҙәп ятып ҡала.

Хәҙер китеп барһа, йә, бер заман быны йыландар ҡамап ала. Ҡамап алып, әлеге аҡ йыланға, батшаларына, килтерәләр. Ул бишектә генә ята, хәле хәл өҫтөндә була.

— Хәләл һөт табып килтер, — тиҙәр был кешегә.

Китә был. Бөтә ҡаланы һыҙырып сыға — таба алмай. Тапмаһа, үҙенә үлем килерен белә бит инде ул. Тағы китә. Бара торғас, ситтә генә бер тәпәш өй ултырғанын күреп ҡала. «Барайыммы, бармайыммы?» — тип тора-тора ла бара. Барғас: «Инәйемме, инмәйемме?» — тип аптыраланып * тора ла инә. Әмәлгә ҡалғандай, яңғыҙ өйҙә яңғыҙ ҡатын була. Шуның һөтөн һауҙырып алып, теге аҡ йыланды һауыҡтырғас ҡына, йыландар был кемсәнәне * ебәргән, ти.

Хәләл һөт бәндәне ана шулай әжәленән алып ҡалған.

Йөҙ ҙә бер ҡатын осрар, шуның берәүһенең һөтө хәләл булмай ҡалмаҫ, тигән.

## В

Күҙгә аҡ һалһа, уҡынып-уҡынып тороп: «Бур тоттом, бур тот-

том, бур тоттом! Ҡөф-ф-ф! Тфү, тфү, тфү!» — тип төкөрһән, бөтә, ти.

### Г

Күҙ ауырыуын һауа анаһы тип әйтә инек. Һыйырҙы һуйғас, башын ашамай, хужа кешенең биленән өс уратып алаһың да берәй фәҡир әбейгә хәйер итеп бирәһең. Әбей башты өшкөрә лә бешереп ашай. Һауа анаһы бөтә.

## 28. КҮҘГӘ СҮП ТӨШКӘНДӘ

### А

Күҙгә сүп төшкәндә әйтелә торған ҡара доға:

Убыр, күҙем йот, йот,
Мәскәй, күҙем йотма, йотма!
Убыр, күҙем йот, йот,
Мәскәй, күҙем йотма, йотма!
Убыр, күҙем йот, йот,
Мәскәй, күҙем йотма, йотма!

### Б

Күҙгә сүп төшһә, керпекте тартып, күҙҙе ныҡ итеп асалар ҙа:

— Сөмәкәй * күҙем, йот-йот,
Сөмәкәй күҙем, йот-йот! —

тип һамаҡлайҙар ине.

## 29. КҮҘ ТЕЙЕҮҘӘН ҺАҠЛАНЫУ

### А

Бөтә нәмәнең дә йәне бар, тип уйлаған боронғолар. Күҙ ҡарашының да сарпыуы * тейә, тиҙәр. Бигерәк тә балалар күҙегеүсән. Яңы тыуған баланы күҙ тейеүҙән һаҡлау өсөн беләгенә ҡыҙыл сепрәк бәйләгәндәр, маңлайына ҡором һөрткәндәр. Малайҙарҙың түбәтәйенә, ҡыҙҙарҙың бишмәтенә, камзулына ҡаҙ өлтөгө, ҡусҡар ҡабырсаҡтары, ҡортбаштар теккәндәр. Имеш, насар күҙ ҡарашы, шул нәмәләргә ҡарау менән, көсөн юғалта.

### Б

Урын ҡыҙырып йөрөгән йә уйнап ултырған балаға күҙ теймәһен өсөн, кеше килеп ингәндә, өләсәһе уны төп яғына ултырта, күрһәтмәй.

### В

Оҙаҡ йәшәгән кеше йәшен йәшерә. Йәшен әйтһә күҙегә.

### Г

Кешегә күҙ тейһә, уны артыш, ағын һыуҙа эләгеп ҡалған һалам, ылымыҡ, башҡа төрлө ҡый менән ыҫлайҙар.

### Ғ

Күҙе тейгән тип, күҙе осло кешенең олторағын йә күлдәгенең берәй һүрентеһен яндырып, өйҙө төтәҫләйҙәр. Берәй нәмәгә, балаға йә бүтән кешегә үтә-үтә ҡараусыға, уларҙы үтә маҡтаусыға: «Күҙең тейеп ҡуйһын шунан, итәгеңде ҡырҡып алырмын мин һинең», — тип әйтәләр, шунан күп осраҡтарҙа ошолайыраҡ өҫтәп тә ҡуялар: «Күҙең к...тенә, к...тең — ҡаҙыҡ башына!»

### Д

Берәйһе икенсе кешене йә уның балаһын, башҡа берәй нәмәһен маҡтаһа, уға шулай тиҙәр:

— Ана, аяғыңа тиҙәк йәбешкән!

Теге кеше:

— Ҡайҙа-ҡайҙа? — тип аяғын ҡарай башлай. Шул ваҡыт уға:

— Күҙең шунда китһен! — тиҙәр.

### Ҙ

Бер, ике, өс, дүрт, биш,
Тупраҡҡа булһын, тфү!
Бер, ике, өс, дүрт, биш,
Һибелеп китһен, тфү!
Елгә китһен, биҙеп китһен,
Осоп китһен, иңеп китһен!
Һинән китһен, шәүләгә китһен!
Һинән китһен, шәүләгә китһен!
Берлекһеҙ ҡайтһын!
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатималар * ҡулы, тфү!
Бөтһөн, китһен,
Бөтһөн, китһен,
Бөтһөн, китһен!
Амин!
Иншалла!

### Е

Әпсен-төпсөн, тиҙерәк китһен,
Үҙ күҙе үҙенә китһен.

Кемдең күҙе тейһә лә:
Ҡара күҙҙән, зәңгәр күҙҙән,
Рус күҙенән, татар күҙенән,
Минең һүҙем түгел,
Ғәйшә, Фатима һүҙҙәре,
Тфү, тфү, тфү...

Ё

Бисмиллаһир-рахманир-рахим!
Кемдең күҙе тейһә, шуға,
Ҡырҡ кешенең төкөрөгө,
Ҡара күҙе ҡара елкәһенә!

### 30. ТАТРАН ҠЫУЫУ

А

Балаларҙың ҡолағынан эрен ҡойолһа, татран ҡысҡырғандар:
— Татран тигән татты (татлы) ҡош! Өйөң ҡайҙа?
— Ҡумырыҡта.
Шулай тиҙәр ҙә баланың ҡолағына:
— Көф, көф, көф! — тип өрәләр.

Б

Тат, татран, татран,
Таттырмамдыр мин һиңә.
Һары ала айыуым бар,
Ҡаптырмамдыр мин һиңә.
Татран, күс, татран, күс, —
тип өшкөрәләр. Шунан:

Иләксенең ике ҡыҙы —
Айыуҙан да көслө ҡыҙ,
Үгеҙ кеүек көслө ҡыҙ,
Татран, күс, татран, күс,
Татран, күс!
тип тағы өрәләр.

В

Тат, татран, татлы икән,
Таттырмамын мин һиңә.
Юлаусы күрһә, ирем, ти,
Ҡумырыҡты өйөм, ти,
Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты,
Татран ҡолаҡ, һин дә ҡайт!

Г

Тат, татран, татран,
Таттырмамдыр мин һиңә,
Һары ала айыуым бар,
Ҡаптырмамдыр мин һиңә.
Татран, күс, татран, күс!
Иләксенең ике ҡыҙы —
Айыу кеүек көслө ҡыҙы,
Бейә кеүек һөтлө ҡыҙы,
Дөйә кеүек көслө ҡыҙ.
Татран, күс, татран, күс!
Таштан йүкә һуяйыҡ,
Таштан йүкә һуяйыҡ...
Ҡаптырмамдыр мин һиңә.
Татран, күс, татран, күс!

Ғ

Тат, тат, тат(ы)ран
Татран тигән татлы ҡыҙ,
Ике имсәге һөтлө ҡыҙ,
Мунса күрһә, өйөм, ти,
Йылан күрһә ҡамсым, ти,
Ҡырмыҫҡа күрһә, ирем, ти,
Имән кеүек көслө икән,
Татран, ят, татран, ят, —
тип ҡолаҡҡа ҡысҡыралар.

Д

Тат, татран, татран,
Татран тигән — һин булһаң,
Иҙел кискән — мин булам!
Тат, татран, татран,
Татран тигән — һин булһаң,
Яйыҡ кискән — мин булам!
Тат, татран, татран,
Татран тигән — һин булһаң,
Иртыш кискән — мин булам!

Ҙ

Тат-тат, татран,
Татран, һиңә баҡырам,
Юлда йыуан ҡуймаған,
Йыуанына туймаған;
Ата-инәһен тоймаған,
Юлын ары бормаған,

Борау-борау, бораған,
Татран, күс, күс, күс!
Татран, күс, күс, күс! —

тиһәң, ҡорт ағып сыға.

## 31. ИНСЕГӘ ИМ

### А

Баланың ҡолағы боҙолоусан. Йә ал яҡтан, йә һырт яғынан быҫҡылдап тора. Шулайтһа, инсе теләй, тиҙәр. Ҡолаҡтың һыртынан инсе теләһә, инә йортонан инселәнгән мал теләй була. Алдан теләһә, ата йортонан мал һорай була. Шунан мал инселәнгәс, шул малдың ҡанын сығарып, ауыртҡан ҡолаҡҡа һөртһәң, йүнәлә лә ҡуя, ти.

### Б

Ҡолағы боҙолған баланың исемен әйтәһең дә мейескә ҡысҡыраһың:

— Фәлән улы Фәләндең
Ҡолаҡ арты боҙолған,
Ҡолағына — бер ҡолаҡ
(Уға — бер ҡолаҡ).

### В

Ҡолаҡтың арты боҙолһа, балаға артйорттан (инә йортонан) — бер ҡашыҡ, алды боҙолһа, алғы йорттан (ата йортонан) бер ҡашыҡ бирелә.

Алды боҙолһа, баланың әсәһе, арты боҙолһа, ҡыҙҙары: «Бер ҡалаҡ!» — тип ҡысҡыра.

## 32. БАЛА АТЛАМАҺА, ҺӨЙЛӘШМӘҺӘ

### А

Бала оҙаҡ атламай ултырһа, уны юл уртаһына сығарып ултырталар. Ат-фәлән күрһә, ҡурҡышынан тороп йүгерә, ти.

### Б

Ике-өс йәшендә лә бала атламаһа, ғоманлы сағында әсәһе эткә типкән, тиҙәр. Шуға атламаған бала аша көсөктө атлаталар.

В

Атламаған баланың түбәһендә йылы икмәк һындыралар. Шул бүленгән икмәкте кендек әбсейенә хәйер итеп бирәләр. Шул саҡ былай тиҙәр:

— Йүгереп, йүгереп етә алһын,
Йүгеректәрҙе үтә алһын,
Атлыларҙы ла уҙһын,
Ғүмере оҙон булһын,
Һайыҫҡандан һаҡ булһын.

Г

Оҙаҡ һөйләшә алмаған баланы шулай имләйҙәр: ай тулған мәлдә мейескә таба ҡуялар ҙа уға йоҙороҡтай өс өшә һалалар. Өшәләр бер-береһенә йәбешеп бешә. Бешеп сығыу менән, шул өшәләрҙе сабыйҙың биленән, башынан өс тапҡыр уратып алаһың да бүләһең. Бүлгәндә: «Ай нисек асыла (тулғас, ныҡ яҡтыра), телең шулай асылһын», — тип әйтергә.

### 33. ҺӨРӨНГӘН БАЛАНЫ ИМЛӘҮ

Гел генә һөрөнөп йығылған баланы, тышаулы булып тыуған, тиҙәр. Бынан ҡотҡарыу өсөн, баланың бото араһынан өс тапҡыр «тышау» киҫергә кәрәк. Ҡайсы менән «киҫкән» саҡта:

— Нимә киҫәһең? — тип һорай бирәү. Киҫеүсе:

— Тышау киҫәм, — тип яуап бирә. Шулай өс тапҡыр ҡабатлана:

— Нимә киҫәһең?

— Тышау киҫәм.

— Нимә киҫәһең?

— Тышау киҫәм.

### 34. УБЫР КҮҢЕЛЕ ТӨШКӘН БАЛАНЫ ИМЛӘҮ

Бала күгәренеп-буҙарынып ауырыһа, убыр күңеле ҡағылған, тиҙәр. Әңер мәлендә ағын һыуға барып, шул ауырыу менән интеккән баланың күлдәген сайҡайҙар. Күлдәкте сайҡар алдынан һыуға сепрәк өҙөгө йә тәңкә ырғытып:

— Һыу инәһе Һарысәс,
Һыу инәһе Һарысәс,
Шәфҡәтеңде һал миңә,
Зәхмәтемде ситкә сәс! —

тип әйтәләр. Күлдәкте өс тапҡыр сайҡайһың да, һығып, ҡуйынға

тығып ҡына алып ҡайтаһың, еүеш көйө генә эйәһенә кейҙерәһең.
Һыуҙан ҡайтҡанда, артҡа боролоп ҡарамаҫҡа.

### 35. ИЛАҠ БАЛАНЫ ИМЛӘҮ

Оло мейестә икмәк бешереп алғас ҡына, илаҡ баланы таҫтамалға төрөп, икмәк көрәгенә һалып бәйләйҙәр ҙә өс тапҡыр мейескә тығып алалар. Тыҡҡан һайын:

— Илағыңды өтәм,
Илағыңды өркөтәм;
Илағыңды өтәм,
Илағыңды өркөтәм;
Илағыңды өтәм,
Илағыңды өркөтәм,
Ҡөф-ф, тфү, тфү, тфү! —

тип әйтәләр. Бала мыжыҡ булһа, «илаҡ» урынына «мыжыҡ» тиелә.

### 36. БҮҪЕР ИМЛӘҮ

#### А

Бала ныҡ илаһа, бүҫерҙер, тип, бер әбей саҡырталар. Ғәҙәттә, бүҫер малайҙа була. Ап-аҡ ҡына әйбергә баланы урайҙар ҙа, шул әйбер үтә генә ауыҙы менән әбей: «Һам-һам-һам!» — тип, уның бүҫерен «талай» башлай. Үҙе шулай тип әйтем дә әйтә:

— Бүҫер, бүҫер, ҡара бүҫер,
Ләп-ләп бүҫер, ләп бүҫер!
Бәй мин, бәк мин вәжәки,
Вәрнәки, ҡолҡолоси, тырнаҡи!
Ай ҡайтты, көн ҡайтты,
Йә бүҫер, һиндә дә ҡайт!

Янында торған кеше имсе әбейҙән «Нимә талайһың?» — тип, өс тапҡыр һорай. Имсе әбей: «Бүҫер талайым!» — тип өс рәт әйтә. Шунан бүҫер бөтә.

#### Б

Бүҫер баланың эсендә кендеге тәңгәлендә була. Баланың эсен шул ауырттыра. Боронғолар әйтеүенсә, эстән эсәктәрен ашай. Бала эсе ауыртыуға түҙә алмай илай. Илап тынысһыҙланған һайын, бүҫер өҫкә ҡалҡа. Бала туҡ булһа, бүҫер ҙә туҡ була, маҙаһыҙламай, тиҙәр.
Бүҫерҙе имләп бөтөрәләр. Кендек өҫкә ҡалҡмаҫ борон, туң

майға тәмәке ҡушып иҙәләр ҙә сепрәккә һалып, кендекте ҡаплап, бәйләп ҡуялар. Йә булмаһа миндек алып, шуның төбө менән төрткөләйҙәр. Төрткөләгәндә:

— Сыҡ, бүҫер, сыҡ, бүҫер,
Эстән тышҡа сыҡ, бүҫер,
Сығып, тышта ҡал, бүҫер!
Ҡәкерәйеп ҡат, бүҫер! —

тиҙәр.

В

Йәш баланың туҡтауһыҙ эсе ауыртһа, бүҫере бар, тиҙәр һәм уны ошолай имләйҙәр. Япраҡ һеперткене тотоп бөткәнсе:

— Ни сабаһың, ни сабаһың?

— Бүҫер сабам, бүҫер сабам, — тиҙәр. Был өскә тиклем әйтелә:

— Ни сабаһың, ни сабаһың?

— Бүҫер сабам, бүҫер сабам.

— Ни сабаһың, ни сабаһың?

— Бүҫер сабам, бүҫер сабам.

Ҡәзәнең эс майын алып, ҡайнатып, ҡоротҡа иҙеп эсәләр. Эс майы бүҫерҙе ҡаплап тик ята, ул тән буйлап йөрөй алмай, ти.

Г

Имсе бүҫер менән ауырыған кешене үҙенең алдына ҡырын ҡаратып ултыртып ҡуя ла уның башын, эсен һыйпай-һыйпай бер ҡат өшкөрөп сыға. Унан ауырыуҙың эсен ыуып, түбәндәге әйтемде әйтеп, аҙаҡтан айғыр булып кешнәй ҙә ауырыуҙың эсен тешләп ала.

Әйтеме:

Һары бүҫер, һары бүҫер,
Ҡара башлы һары бүҫер,
Һары бүҫер — сос бүҫер,
Эстән тышҡа күс, бүҫер,
Күс, бүҫер!
Күсһәң, тышта ҡалырһың,
Ҡәрәгең һайлап алырһың,
Күсмәһәң, күсмәһәң,
Бына һиңә, бына һиңә,
Һи-һа-һа!

Д

Ҡара бүһер,
Аҡ бүһер,
Унда ятма

Бында ят,
Ҡил, сыҡ!

## 37. АШҠАҘАНДЫ ИМЛӘҮ

Ашҡаҙан ауыртҡанда:

— Имем, имем шул булһын,
Ашҡаҙаным йүнәлһен, —

тип уҡынып, һамаҡлап имләйҙәр.

## 38. ӨС ЙӘН ИМЛӘҮ

### А

Йәше тулмаған баланың эсе ҙур булһа, уны «өс йәнле» бала тиҙәр. Ул бала илап йөҙәтһә, имсе әбейгә алып барып имләтәләр. Имләүсе әбей баланы башы яғынан тота, ә баланың әсәһе аяҡтарынан тотоп, ишеккә «ҡыҫалар». Ишекте ябып, баланы «ҡыҫҡанда», әсәй кеше һорай:

— Инәй, инәй, ни ҡыҫаһың?

Әбей эстән яуап бирә:

— Өс йән ҡыҫам, өс йән ҡыҫам:
Икеһен үлтерәм, береһен ҡалдырам!

Ошолай өс тапҡыр ҡабатлана:

— Инәй, инәй, ни ҡыҫаһың?
— Өс йән ҡыҫам, өс йән ҡыҫам:
Икеһен үлтерәм, береһен ҡалдырам!
— Инәй, инәй, ни ҡыҫаһың?
— Өс йән ҡыҫам, өс йән ҡыҫам:
Икеһен үлтерәм, береһен ҡалдырам!

Өстән һуң тыштағы кеше өйгә инмәй, оҙаҡ ҡына йөрөп килергә тейеш. Ул шулай итеп аяҡ юлы яҙҙыра. Ә эстәге әбей баланы тиҙ генә алып, һалып тора.

### Б

Яңы тыуған баланың эсе өскә бүленеп торһа, уны өс йән тиҙәр. Бысаҡ, ҡайраҡ, орсоҡ, үрмәкес ауы алалар. Игеҙәк бала тапҡан кешенең һеперткеһенән сыбыҡ һәм күмер урларға кәрәк. Баланы өс тапҡыр имләйҙәр. Имләү көнө — ҡоро көн (шәмбе). Баланы салҡан һалалар, күмер менән эсенә һыҙалар.

Бер йән, ике йән, өс йән!
Ҡайҙа һинең макамың? —
Таш һарайҙың эсендә.

Ике йәнде үлтерәм,
Бер йәнде ҡалдырам.
Бер йән, ике йән, өс йән,
Ҡайҙан индең, шунан сыҡ!

## В

Мунсаға барағыҡ, ете таш алаһың. Баланың исеме Сабир булһа, алты тапҡыр «Заһир ташы», «Ғәфүр ташы» тип әйтәләр, етенсегә «Сабир ташы», тиҙәр.

— Өс йән булған — сәхәуат * булған, — тиһең дә:

— Һыуҙан килһәң, һыуға кит,
Елдән килһәң, елгә кит,
Ҡемдән килһәң, шуға кит,
Ҡемдән килһәң, шуға кит.

Минең ҡулым түгел, Ғәйшә, Фатималарҙан ҡалған ҡул, — тиһең. Шунан инде:

— Заһир ташы, Ғәфүр ташы,
Заһир ташы, Ғәфүр ташы,
Заһир ташы, Ғәфүр ташы,
Сабир ташы, —

тип ете ташты берәм-берәм алаһың да төртәһең, алаһың да төртәһең.

Имләүҙе, өс тапҡыр мунса яғып, өс тапҡыр ҡабатлайҙар.

## Г

Бер, өс, биш, ете, туғыҙ,
Туғыҙ, ете, биш, өс, бер,
Ете, биш, өс, бер,
Өс, бер,
Берәү.
Бер, ике, өс, дүрт,
Биш, алты, ете,
Һигеҙ, туғыҙ, ун,
Ун, туғыҙ, һигеҙ,
Ете, алты, биш,
Дүрт, өс, ике, бер,
Өс йән булғас, өс йән инең,
Ике йәнең ҡайтыр һинең.
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатималар ҡулы.
Бер, ике, өс, дүрт,
Биш, алты, ете,
Һигеҙ, туғыҙ, ун.
Ун, туғыҙ, һигеҙ,

Ете, алты, биш,
Дүрт, өс, ике, бер.
Бер берҙән ҡайта.
Ай ҙа ҡайта,
Көн дә ҡайта —
Һин дә ҡайт!

Ғ

Баланың эсенә өс нәмә менән төртәләр: тараҡ, ирҙәрҙең ойоҡ үксәһе, бысаҡ. Өс урынға төртәләр ҙә: «Тфү, тфү, тфү, бар сығып кит!» — тип, был әйберҙәрҙе сығарып ырғыталар (һуңынан уларҙы кире алалар инде ул алыуын).

Д

Өсан (өс йән) ауырыуын имләгәндә, шулай тиҙәр:

Бер — берҙән ҡайтҡан,
Ике, өс, дүрт, биш, алты, ете,
Һигеҙ, туғыҙ — тупраҡҡа!
Бер, ике, өс, дүрт, биш,
Алты, ете — елгә китһен,
Биштән ҡайтһын,
Бер, ике, өс — осһон, китһен,
Бер — берҙән бөтһөн!

Итәкте бер осонан бөкләп тоталар ҙа, баланың ҡорһағына төртәләр.

Ҙ

Өс йәнле баланың эсен тәүҙә эттән ялаталар. Шунан өс мәртәбә ишеккә ҡыҫалар. Шунан һуң, баланы ятҡырып, иләп кенә өс тапҡыр эсенә баҫаһың. Өс мәртәбә имсенән: «Ни тибәһең?» — тип һорайһың. Өсөһөндә лә имсе: «Өс йән тибәм», — ти. Артабан бәләкәй генә ян менән уҡ эшләп баланың эсенә атаһың. Берәү: «Ни атаһың?» — ти өс рәт. Өсөһөндә лә: «Өс йән атам», — тип әйтергә. Уҡтарҙы йүргәккә һалып тораһың да, бысаҡ алып, баланы ҡырҡҡылағандай, һуйғандай итәһең: өҫтөндәге күлдәген ҡырҡҡылап алып, йәнә йүргәккә һала бараһың, йәнә берәү өс мәртәбә: «Ни һуяһың?» — тип һорай, яуапҡа өс мәртәбә: «Өс йән һуям», — тип әйтелә. Шулай иткәндән һуң, баланың эсенә төрткөләй-төрткөләй, шулай тиһең:

— Күс! Күс! Күс!
Һөтлө имсәккә күс!
Ҡыу сүпкә күс!
Ҡола яланға күс!

Һыуҙың ағымына күс!
Көндөң байышына күс!
Ҡаф тауҙың артына күс!

Иртәнсәк йүргәк эсендәге нәмәләрҙе, уларға өҫтәп баланың кәпәсен, ярау иткән әйберҙәрен һыу түбәненә, урманға, ҡырға алып барып ташлайһың да, юл яҙҙырып, икенсе яҡтан урап ҡайтаһың.

## 39. ШЕШЕК ИМЛӘҮ

### А

Ҡолаҡ төптәренә шешек сыҡҡанда, имсәк шешкәндә, дүрт йәки бер нисә әйбер менән шешкән урынға баҫа-баҫа һамаҡлайҙар ҙа әйберҙәрҙең һәр береһен бер яҡҡа яурын аша артҡа ырғыталар. Ырғытылған әйберҙәр бысаҡ, күмер, ҡайраҡ һәм башҡа әйберҙәр булырға мөмкин. Ундай нәмәләр шеште ғәрләндереү ниәте менән алына. Шеш имләү һамағы:

Ай ҙа ҡайтҡан бит инде,
Көн дә ҡайтҡан бит инде,
Һин дә йәһәт ҡайт инде!..
Ҡара ҡайын ҡабығына ҡайт!
Ҡара ҡайындың суғыртмағына * ҡайт!
Көндөң байышына ҡайт,
Һыуҙың ағышына ҡайт!
Ҡайт, ҡайт, ҡайт!

### Б

Шешек сыҡһа, сыбыҡ менән өс мәртәбә ағас ботағына төртәһең дә шешеккә төртәһең йәки тирләп килгән аттың ҡолағы артынан тир алып һөртәһең, йәки шешекте ғәрләндергәнсе әрләйһең.

Имсәк шешһә, нимәнән шешкән, шуның сәбәбен белергә кәрәк: берәйһендә ни күреп ашағыһы килгәндәй булһа, ҡайтҡас, үҙенең усын ялай. Сәбәбен белмәһә, иренең балағын йыртып яба йә түбәтәйен ҡаплай.

## 40. ЙЫЛАНҠАРАҠТЫ, ҠАЙРАҠ БУЛҒАНДЫ ИМЛӘҮ

### А

Бармаҡ шешә. Күҙ ауырта. Кеше яҡтыға ҡарай алмай интегә. Шуны йыланҡараҡ сығыуы тиҙәр. Уны бөтөрөү өсөн аждаһа һөйәге баҫалар (баҡаны яндырғас, һөлдәһе ҡала, ана шуны аждаһа һөйәге тиҙәр).

### Б

Бисмилләһи, мәр-мер,
Бисмилләһи, тәш-түш,
Саҡма, йылан ҡарағы!
Һин яман, һин яман,
Һинән яман — мин яман!

Күҙгә йә башҡа ергә йылан ҡарағы сыҡһа, ошоно әйтәһең дә төкөрәһең.

### В

Йыланҡараҡ сыҡҡан күҙҙе ысыҡ менән йыуалар. Уны шулай атҡаралар:

— Ни булған?

— Ысыҡ булған, — тиһең дә, ысыҡлы устың һырты менән күҙҙе йыуаһың.

Йылан тиреһен, өшкөрөп, күҙгә һалһаң да ауырыуы бөтә. Йылан ҡабығын яҙ йылан өңөнән «сисенеп» сыҡҡан саҡта йә, һалып өлгөрмәһә, һыҙырып алаһың да, кеше күҙенә күрһәтмәй генә алып ҡайтып, өшкөрөп, йәшереп тотаһың.

Беҙҙең яҡта Йылан ҡарағы тигән шишмә бар. Уның һыуы илап ҡына тора. Ул бик шифалы. Һыуын алғас, тәңкә һалалар.

### Г

Көйәнтә аша атларға ярамай: ҡайраҡ сире ҡағыла. Уны ҡайраҡ менән имләйҙәр. Берәү ҡайраҡҡа ҡайраҡ менән төртөп-төртөп ала, икенсеһе:

— Ни булған? — тип һорай.

— Ҡайраҡ булған, ҡайраҡ имләйем, — ти имсе. Шулай өс тапҡыр ҡабатлана. Шунан:

— Имең-томоң шул булһын! — тип, ҡайраҡты ташлайҙар.

## 41. ӨҘЛӨГӨҮҘЕ, ИМСӘҠ ШЕШЕН ИМЛӘҮ

### А

Ауырға ҡалған ҡатындың бәпәйе төшмәһен өсөн, итәк күктәйҙәр: уның күлдәгенең итәген ҡат-ҡат бөкләп, эре-эре сәнсеп, тегеп сығалар. Ошоно «итәк күктәү» тип атайҙар.

### Б

Яңы ғына бала тыуҙырған ҡатын, көн элек ҡуҙғалып донъя мәшәҡәттәренә тотонһа, өҙлөгә. Уны шулай имләйҙәр:

— Нимә эшләйһең? — тип һорай берәү имсенән.

— Өҙҙөк өҙҙөкләйем, — ти имсе.
— Нимә эшләйһең?
— Өҙҙөк өҙҙөкләйем.
— Нимә эшләйһең?
— Өҙҙөк өҙҙөкләйем.

Шунан имсе өҙләккән ҡатындың күлдәк итәгенең өс яғына кол төйнәп бәйләй. Ҡатын аяғына баҫмайынса, көлдө сисергә ярамай.

В

Ымһыныуҙан имсәк шеше була. Берәй кешегә килеп ингәндә, ул тәмле итеп ашап ултырһа, һин: «Мине лә саҡырыр был табын янына», — тип ымһынһаң, «Бисмилла», — тип өс тапҡыр ус-ты яларға. Яламаһаң, имсәк шешә.

## 42. БИРТЕК ҺОРАУ

А

Берәйһенең биле биртенһә, уны биртек һорап имләйҙәр.

Биртек һорарға өс бала: баш бала, уртансы бала, кинйә бала (төрлө кешенеке булһа ла ярай) йөрөй. Улар өс өйҙән биртек һорай:

— Билем, билем биртенгән,
Биртек һорай мин килдем.
Ҡайным улы ҡатынған,
Ҡатыҡ һорай мин килдем.
Асығыҙ ишекте, —

тип ҡысҡыра. Уға ишекте ҡыҫып ҡына асалар, ул арты менән тора. Шунан килен кеше былай ти:

— Ҡайның улы ҡатынһа,
Ҡатыҡ туҡып бирерһең.
Улың биле биртенһә,
Мал майына йыуырһың, —

тип уға икмәк, ҡорот һ. б. ризыҡ биреп ҡайтара. Ауырыған кешенең билен май менән ыуалар, алып ҡайтҡан башҡа ризыҡтарҙы ашаталар. Шунан ул кеше һауығырға тейеш була.

Б

Баш бала менән кинйә бала сүмес тотоп сыға ла, кешегә барып, ишекте ҡыҫып, ҡулын һона:

— Етем улы етенгән,
Ете-бото бирегеҙ;
Ҡайны улы ҡатынған,
Ҡаты-ҡото бирегеҙ;
Бейем улы биртенгән,
Биртек һорай мин килгән.

## 43. ТЕЛ ОСОНҒАНДА

Теле осонған кеше имсегә:

— Телем осонған, — ти. Имсе:

— Бесәй к...нә, — ти.

— Эй, хайран телемде хур иттең! Тфү, тфү, тфү!

— Тағы әйт.

— Телем осонған.

— Эт к...нә.

— Эй, хайран телемде хур иттең, тфү, тфү, тфү!

— Тағы әйт.

— Телем осонған. Ҡасан бөтөр икән?

— Һә тигәнсе, мә тигәнсе бөтөр.

— Эй, хайран телемде хур иттең! Бөтһөн инде, Хоҙайым! Тфү, тфү, тфү!

## 44. АУЫҘЛЫҠ, ЙОТҠОЛОҠ БУЛҒАНДА

### А

Ауыҙҙың мөйөштәре иҙелеүсән була. Шуны ауыҙлыҡ булған, тиҙәр.

Ауыҙлыҡтан шулайтып ҡотолалар. Берәү һорай:

— Ни булган?

— Ауыҙлыҡ булған! Иһо-һо-һо! — тип әйтә ауыҙлыҡ булған кеше (әсәһе әйтә, йә икәүләп әйтеп, кешнәйҙәр. Шулай өс тапҡыр ҡабатлайҙар).

Яуап биргәндә, былай тип тә өҫтәйҙәр:

— Елдән килһәң, елгә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит,
Ҡайҙан килһәң, шунда кит!
Иһо-һо-һо!

### Б

Йотҡолоҡ булһа:

— Анауы тауҙы йотайым, — тиһең дә, тауға ҡарап, төкөрөгөңдө йотаһың.

— Бынауы тауҙы йотайым, — тиһең дә йәнә йотаһың. Шулай өс тапҡыр ҡабатлайһың.

### В

Йотколок булып, тамағы ауыртҡан балаға ҡарап, имсе:

— Ни булған? — ти. Әсәһе:

— Йотҡолоҡ булған! — ти. Шунан ауырыу:

— Тауҙы, ташты йотам — хуп! — тип өс тапҡыр төкөрөгөн йотоп, өс тапҡыр төкөрә.

— Тамагым ауырта, тау йотам,
Тамағым ауырта, таш йотам!
Тфү, тфү, тфү, —

тиһәң дә ярай.

## 45. ТИМЕРӘҮ ИМЛӘҮ

### А

Тимерәүҙе балан менән түңәрәтеп һыҙа-һыҙа, өс мәртәбә шулай тиһең:

— Әң-әң әңерәү,
Мең-мең мәңерәү,
Бур тоттом,
Битенә ҡара яҡтым.
Тфү, тфү, тфү!!!

Берәү тимерәү тип бик оҙаҡ балнисҡа йөрөнө. Ахыры миңә килде. Өс мәртәбә һыҙып ҡайтарғайным, бөттө лә ҡуйҙы инде.

### Б

Тимерәүҙе имләү өсөн, ҡаҙандың йә мейестең ҡоромон ҡырып алалар. Шуны тимерәүгә һөртәләр.

Ата тимерәү, инә тимерәү була. Тимерәүҙе имләгәндә, өҫтөнән ҡайраҡ йөрөтөп:

— Бисмиллаһир-рахманир-рахим,
Им-имерәү,
Тим-тимерәү,
Ата булһа, аҙмаһын,
Инә булһа, име шул, —

тип өс йә ете рәт һыҙалар. Һамаҡ та өс, ете ҡабат әйтелә. Шунан былай тиһең:

— Бисмиллаһир-рахманир-рахим,
Бында сыҡма, тышҡа сыҡ!
Имең-томоң шул булһын!

Минең имем түгел,
Ғәйшә, Фатималар име.

### 46. ТАҘ ТӨҠӨШТӨРӨҮ

Сынйыра менән ауырыған кеше (аттың ыйығы һымаҡ, бысҡылдап ҡабарып тора) таҙ менән төкөшә. Таҙ:

— Һин сынйыра булһаң, мин — таҙ, — ти ҙә сынйыралы кешенең башын төкөй. Тегеһе:

— Һин таҙ булһаң, мин — сынйыра, — тип төкөй. Шулай өс тапҡыр ҡабатлана.

Төкөштөргәндән һуң икеһенең дә сире бөтә, тиҙәр: сынйыра — таҙҙан, таҙ сынйыранан ерәнә була, йәнәһе. Мин бәләкәй саҡта Яңы Монасипта Хәсән тигән сынйыра Ғәлимйән таҙ менән төкөштө.

### 47. АУСЫН АУЫРЫУЫН ИМЛӘҮ

Ауҫын ауырыуы — бик насар ауырыу. Ул әҙәмдең танауын йә иренен ашай. Ул ҡорттоң башы ҡыҙыл була. Асыуташ (әсеүташ), нишатыр, йәшел яр (йәшелһәңгәр) — шундай дарыуҙар була. Уларҙы Сорокиндан алып ҡайталар ине. Инәйем ауҫын сирен дауалай белә ине. Шул өс дарыуҙы ҡушып, бутай торғайны. Дегет кеүек дарыу килеп сығыр ине. Доғаһын уҡып, сирле урынға шуны баҫһаң, ҡорттар ҡойолоп бөтә. Дауаламаһаң, кешенең ирене лә, танауы ла китек булып ҡала.

### 48. «ЭТ ИМСӘГЕ»Н, «ЭТ ТЫРНАҒЫ»Н ИМЛӘҮ

#### А

Кешенең ҡултығы аҫтына ослайып шешек сыҡһа, шуны эт имсәге тиҙәр. Уны шулай имләйҙәр: һалма йәйеп алаһың да шуны ҡырҡ башҡа өҙөп, һәр береһе менән әлеге эт имсәгенә төртөп сығаһың. Төрткән саҡта:

— Эттән килдең — этқә кит,
Ҡайҙан килдең, шунда кит, —

тип әйтәһең.

#### Б

Эт тырнағы сыҡһа:

— Миңә сыҡма, этқә сыҡ,
Хужаң һинең мин түгел,

Ниңә бында килдең һин?
Кит, кит, кит! —

тип һамаҡлайҙар.

## 49 МЕЙЕ УЛТЫРТЫУ

### А

Мейе төшкәндә башты еп менән ҡоршайһың да маңлайҙан, елкәнән, ҡолаҡ тишеге тәңгәленән һыҙып билдәләйһең. Ҡара-ҡаршы билдәләрҙе тотоп ҡарайһың: еп артҡа һалыҡ булһа, мейе артҡа төшкән була; уңға һалыҡ булһа — уңға, һулға һалыҡ булһа — һулға, алға һалыҡ булһа — алға төшкән була. Шунан башты яулыҡ йә таҫтамал менән быуып, төйөнөн мейе төшкән яҡтың ҡаршыһында ҡалдырып, остарынан тотҡан хәлдә шул төйөнгә һуғаһың:

— Төштөмө? — тип һорайһың да һуғаһың, һорайһың да һуғаһың. Һораған һайын теге кеше:

— Төштө, — тип яуап бирә. Шунан һуң башты үлсәп, епте өҙөп ташлайһың.

### Б

Мейе төшкәндә башты үлсәгән епте түңәрәккә элеп китһәң, баш ауыртыуы бөтә. Тик түңәрәккә элгәс, уға боролоп ҡарарға ярамай.

## 50. СӨЙӘЛ * ИМЛӘҮ

### А

— Нимә төйәһең?

— Сөйәл төйәм, — тип йыуан ҡара еп алып төйнәйһең дә төйнәйһең. Беренсеһендә өс мәртәбә, икенсеһендә — биш, өсөнсөһөндә — ете, дүртенсеһендә туғыҙ һ. б., шулай күбәйә баралар. Төйнәгән бер епте бысраҡ йыуынты һыу менән сығарып түгәләр. Түккән ваҡытта: «Минең ҡулым түгел, Ғәйшә, Фатиманың ҡулы», — тип түгәләр. Шулептәр серегәс тә, ҡулдағы сөйәлдәр бөтөргә тейеш.

### Б

Ҡулына йә башҡа ерenә сөйәл сыҡһа, был кеше, ай яҡтыһына сөйәлен күрһәтеп, һамаҡлай:

— Ҡайҙа һинең тәтәйең?
Бына минең тәтәйем.

Нисәү һинең тәтәйең?
Берәү (икәү, өсәү һ. б.) минең тәтәйем, —

тип нисә сөйәл булһа, шул саҡлы сптән төйөн яһап, уны кеше күп йөрөгән ергә ташлай. Был имде өс тапҡыр ҡабатлағас, сөйәл бөтә.

### В

Сөйәл бөтһөн өсөн, шулай тип һамаҡлайҙар:

— Сөйәл сөрөккә сыҡһын,
Сөрөк дүңгәккә сыҡһын!

### Г

Һепертке һабынан бер сыбыҡ алып, шуға нисә сөйәл, шунса киртек киртәһең. Берәү:
— Нимә киртәһең? — тип һорай. Имсе:
— Киртек киртәм, — ти. Шулай өс тапҡыр ҡабатлана:
— Нимә киртәһең?
— Киртек киртәм.
— Нимә киртәһең?
— Киртек киртәм.
Шулай итеп әйтешкәндән һуң бире табан сыбыҡ менән һыпырырға ла өрлөккә ҡыҫтырып ҡуйырға кәрәк.

### Ғ

Сөйәл, ҡысыу сыҡһа:

— Им, им, имрәмин,
Имләмәһәң, мөһрәмин, —

тип һамаҡлай-һамаҡлай, уларҙы күк ҡәләм менән түңәрәтеп һыҙып сығаһың.

## 51. ОСОНҒАНДЫ ИМЛӘҮ

Осоноп ауырығанда, салгыны ҡып-ҡыҙыл итеп ҡыҙҙыралар ҙа ауырыуҙы сығарып, өй мөйөшөнә ултыртып, шул салғыға өс тапҡыр шыжлатып һыу бөркәләр:

— Ҡайҙан килһәң, шунда кит!
Көлдән килһәң, көлгә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит!
Килһәң көн байышынан,
Көндөң батышына кит!..

### 52. ВАБА АУЫРЫУЫН ИМЛӘҮ

Ваба — бик яман ауырыу. Кеше аяҡ-ҡулы ҡорошоуҙан интегә. Иртәнсәк ауырый башлаһа — кис үлә. Ваба менән ауырыған кешене әрем, артыш һыуы менән ҡойондоралар. Һамағы (ҡара доғаһы) онотолған.

### 53. ҠЫҘЫЛСАНЫ ИМЛӘҮ

Ҡыҙылса сыҡҡан кешегә (йәй) бөлдөргән * кеүек ҡыҙыл емешеләк ашаталар.

Бәндә — сәбәпсе,
Алла — сихәтсе,
Бәндә — сәбәпсе,
Алла — сихәтсе,
Бәндә — сәбәпсе,
Алла — сихәтсе.
Аллам, үҙеңдән ярҙам!
Сихәттәреңде бир! —

тип әйтәләр. Шунан, ни, ауырыу һауыға.

### 54. ҠАРА СӘСӘКТЕ ИМЛӘҮ

Ҡара сәсәк — яман сир. Ҡысығанда тырнаһаң, быжыр булып эҙе ҡала. Унан һаҡланыу өсөн, ҡыҙылсаны имләгән кеүек имләйҙәр. Шул уҡ һамаҡты әйтәләр:

Бәндә — сәбәпсе,
Алла — сихәтсе (өс тапҡыр)...
Аллам, үҙеңдән ярҙам!
Сихәттәреңде бир!

### 55. БИҘГӘК ИМЛӘҮ

Биҙгәк менән ауырыған кешене: «Мейескә яғам! — тип ҡурҡыталар. Ҡурҡышынан тертләһә, кеше биҙгәк тотоуҙан арына.

### 56. ҺАРЫ АУЫРЫУЫНАН ДАУАЛАУ

Һары ауырыуы тип бауыр ауыртыуға әйтәләр. Был ауырыуға тарыған кеше табаҡтағы һыуға сабаҡ ебәреп, шуға ҡарап ултыра, балыҡ өйәҙәп * китеп үлә.

Ауырыу ауыҙына көмөш тәңкә ҡабып ултыра. Аҙаҡ уны түшенә баҫа.

## 57. ЗЫЯНДАШТЫ ИМЛӘҮ

Зыяндаш тип, тапма һымаҡ, кешене быуып һала торған ауырыуға әйтәләр. Кеше зыяндаш булһа, муйыны боролоп ҡала. Берәйһенең балаһы үле тыуһа, зыяндаш булған, тиҙәр.

Зыяндаш юлаусыға йоға.

1. Айыуҙың тырнағын, һөйәген алалар. Кеше зыяндаш булһа, быуманан ауырыһа, уны, шул һөйәк-тырнаҡтарҙы төтәтеп, ыҫлайҙар.

2. Бүренең ике иренен дә түңәрәтеп кенә ҡырҡып алалар ҙа киреп киптерәләр. Ҡорһаҡтағы бала зыяндаш булһа йә ауыр тыуһа, ғоманлы * ҡатынды «бүре ауыҙы» аша үткәрәләр.

3. Зыяндаш баланы ашай, тиҙәр. «Бүре ауыҙы» йә ул булмаһа, доғалыҡ яҙылған үткәрмә бетеү ҡулланалар. Ҡатынды шул үткәрмә аша үткәрәләр.

«Бүре ауыҙы»нан үтһәң дә, доға-үткәрмәнән үтһәң дә бер *, тиҙәр.

## 58. ОСОҠЛАУ *

### А

Кеше тапма менән йә енләнеп ауырыһа, әтәс йә тауыҡ салалар. Салыу ҡаны ергә ағырға тейеш түгел. Шуға күнәктә генә салалар. Салған саҡта өс тапҡыр:

— Ауырыуға им булһын,
Рәнйеүгә шифа булһын, —

тип әйтәләр. Шунан уны, ауырыуҙан алынған сепрәк менән урап, шәм яҡтыһында осоҡлап, өс (ете) юл сатына алып барып ташлайҙар.

Осоҡ ауырыуы ел менән ҡағыла. Кеше енләнә. Осоҡлағанда әйтелә торған доғаһы, һамағы юҡ. Осоҡто ташлап ҡайтҡанда, сир йә эт булып сыйылдап, йә ҡош булып сутылдап эргәһенә килгеләй.

### Б

Осоҡтан һуғылған ауырыуҙы ла осоҡлайҙар. Шул ваҡытта был кешенән сир (рәнйеү) китә.

Сағыу сепрәктән ҡурсаҡ эшләйҙәр. Шул ҡурсаҡҡа ярсыҡ-марсыҡтан, балсыҡтан һауыт-һаба яһайҙар. Шуларҙы ауырыу кеше янына һалалар (кисен йә иртәнсәк). Был һауыт-һаба, ҡурсаҡтар бер көн буйы ауырыу эргәһендә ятырға тейеш. Ҡояш байып, кеше аяғы һил булғас, таң менән имсе ярҙамсыһы менән осоҡто алып:

— Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ! Бына һиңә туҫтаҡ, бына һиңә ҡалаҡ. Әйҙәгеҙ, һеҙҙе ҡунаҡҡа алып китәм, — тип сығып китә. Рәнйеү * ҙә шулар менән китергә тейеш.

Рәнйеү ҡыуыусылар юл яңылыштырыу өсөн артҡа ҡарамай ғына икенсе кешенең өйөнә ҡайта. Ауырыу янына бер көн буйы килмәй.

## В

Ҡурсаҡ, һауыт-һаба эшләп ултырған саҡта килеп ингән кеше, йомошон йомошламай, тиҙ генә:

— Нимә төйәһең? — тип һорарға тейеш.

Осоҡлаусы уға:

— Осоҡ төйәм, — тип яуап бирә. Һорау-яуап өс тапҡыр ҡабатлана:

— Ни төйәһең?

— Осоҡ төйәм.

— Ни төйәһең?

— Осоҡ төйәм.

Ҡурсаҡтар, һауыт-һабалар әҙер булғас, ауырыу эргәһенә ҡуялар ҙа:

— Һинең өйөң был түгел,
Һинең өйөң — ҡумырыҡ —
Ҡайт инде, ҡайт инде, —

тип һамаҡлайҙар, шунан арттарына ҡарамай ғына ошо ҡурсаҡтарҙы алыҫҡа алып барып ташлайҙар.

Ҡурсаҡты һөйәк менән бергә ташлау бигерәк киң таралған. Ауырыусыға бағышлап ҡорбан салалар. Уның итен һөйәгенә теш тигеҙмәй генә ашайҙар. Шунан һөйәктәрҙе йыйып, ҡурсаҡты төрөп, шуның араһына һалып, бөтәһен бергә күнәк менән ҡырға алып барып ташлайҙар.

## Г

Осоҡ ташларға ике кеше бара. Ҡайтҡанда, артҡа боролоп ҡарамай ғына ҡайталар: береһе тәкбир әйтә, береһе йырлай. Ауырыу әйәрмәһен өсөп икенсе юлдан ҡайталар. Әгәр юл яңылыштырырға мөмкинлек булмаһа, бисмилла итеп, юлды өс ҡат арҡыры һыҙып китәһең. Сир шул «кәртә»не аша сыға алмай.

## Ғ

Сирҙәрҙе һепертке арты менән осоҡлай инек. Ауырыуҙың тәненә бер нисә тапҡыр төртәбеҙ ҙә әйтемләйбеҙ:

— Осоҡ, осоҡ,
Ҡайҙан килдең, шунан сыҡ!

Осоҡто сығарып ташлағанда ла шулай тибеҙ. Унан тағы былай әйтемләйбеҙ:

— Осоҡ, осоҡ, ослаған,
Сырхауымды ураған,
Сырхауымды ураған да
Үҙенә иш урлаған!

### 59. ЕН ҠАҒЫЛҒАНДА

#### А

Кешенең туҡтауһыҙ башы ауыртһа, тәне һыҙлаһа, ен ҡағылған, тип имләйҙәр. Ундай саҡта: «Ергә һалмайынса, әҙәм булаһы түгел!» — тип әйтәләр. Имсе ауырыуҙың буйын ете төрлө еп менән ете тапҡыр үлсәй. Шунан улептәрҙе алып барып күмә. Күмер алдынан айға ҡарап:

— Ен ҡағылған кешемдең
Төҫө-буйы кипкәндер.
Тәңренең ҡөҙрәте булып,
Һинең ғәзиз бәндәңә
Нуры-зауыҡ ҡайтҡандыр, —

ти. Ошонан һуң ауырыу ете аҙнанан да ҡалмай һауығырға тейеш.

#### Б

Сарпыу (сарфыу) һуғылып ауырыған ир баланы кәнтәй эттең, ҡыҙ баланы арҙан эттең йөнө менән ыҫлайҙар.

### 60. НӘҪТӘ ҠАҒЫЛҒАНДА

Нәҫтә ҡағылғанда, ауырыған кешенең тырнағын, уның үҙе буйы өс төрлө (ҡыҙыл, ҡара, аҡ) еп, күмер, йәнә килеп, шәшке тырнағы, көл алалар. Шуларҙы бергә төрәләр. Төргәндә:

— Елдән килһәң, елгә кит,
Ерҙән килһәң, ергә кит,
Һыу инәһе Һыуған һаҡал,
Ер инәһе Ерән һаҡал,
Ҡайҙан килһәң, шунда кит,
Ҡабат килеп йөрөмә! —

тип һамаҡлайҙар. Шунан шул төйөнсөктө ете юл сатына алып барып ташлайҙар. Алып китеп барғанда: «Әйҙә, әйҙә, киттек, киттек!» тип «көслөкләп», сирҙе «эйәртеп» алып китәләр.

Ҡайтҡанда, артҡа әйләнеп ҡарамай ғына, юл аҙаштырып, икенсе яҡтан урап-урап ҡайталар. Юҡһа, ауырыу эйәрә була.

## 61. ЕНЛӘНЕП АУЫРЫҒАНДЫ ИМЛӘҮ

Ете мулла ауырыуҙың ете яғынан ултырып, китап менән һуға-һуға өшкөрә. Берәү утын ҡырҡып тора, уҡынып тора.

— Ҡил, муйыныңды өҙә сабам, — тип киҙәнә.

Ен һуҡһа, ауырыуҙан:

— Ҡем һуҡты? — тип һорайҙар. Ауырыу әйтмәй ҡырталаша.

— Муйыныңды өҙә сабам, — тип янағас ҡына, уның исемен әйтә:

— Шул һуғылды.

Ен кешегә билдәле кеше һынында һуғыла. Шуға ауырыу уны әйтмәй. Әйттергәндән һуң, шул исемде ҡағыҙға яҙып, уны утҡа ташлайҙар. Шунан теге кеше ен елпеүенән яҙыла.

## 62. ЕРГӘ ҺАЛЫУ

### А

Аяҡ-ҡул һыҙлағанда, ергә һалалар. Уны шулай атҡаралар. Һыуға тырнаҡ, сәс, йомортҡа ҡабығы, көл һалалар.

Бисмилләһи, ерҙән күккә,
Бисмилләһи, күктән ергә,
Бисмилләһи, ғәрештән * күккә, —

тип, ҡара доға уҡый-уҡый, һыу һалынған һауытты өс мәртәбә ауырыу тирәләй уратып алалар ҙа, юл саты араһына түгәләр. Шулай итһәң, ауырыу ергә китә була.

### Б

Ҡара төн уртаһында кеше аяғы һил булып ерҙәге бар тереклек тәрән йоҡоға киткәс, шылт иткән дә тауыш юҡ саҡта, кәзә баҡырыуы ла, эт өрөүе лә ишетелмәгән мәлдә имсе сей тауыҡ йомортҡаһы ала. Унда тәүҙә еп һыйырлыҡ ҡына тишек тишә. Ауырыуҙың кейеменән ҡыҙыл еп ала ла шуны, бер тинлек аҡсаны, тутыҡҡан тимер ҡаҙаҡты һәм ҡош тырнағын әлеге тишеккә төшөрә. Шул йомортҡаны ауырыу тирәләй йөрөтә-йөрөтә:

— Әпсен, әпсен,
Бында торма,
Кит һин.
Ҡем ебәргән,
Шуға кит!

Ауыр сирҙе
Алып кит! —

тип һамаҡлай. Шунан ул йомортҡаны ауырыуҙың берәй күлдәгенә урап, йә соҡорға, йә күлгә, йә сүплеккә, йә ағын һыуға һелтәйҙәр.

В

Беҙҙең ауыл ҡарсыҡтары ергә һалып имләйҙәр.

Берәй кешегә зәхмәт ҡағылды, ти. Ул имсегә килә. Ләкин имсе имләргә теләп бармай. Сөнки зәхмәт уға күсә, ти. Шуға имсе ете төрлө нәмәнән им йыя. Унда тырнаҡ, сәс, көл, күмер, тотонолмаған энә, терегөмөш, бер тин аҡса була. Имсе шуларҙың бөтәһен бер төйөнсөккә йыя. Шунан әлеге төйөнсөктө ауырыу тирәләй уңдан һулға әйләндерә. Әйләндергәндә, шулай тип һамаҡлай:

— Ер инәһе Ерән һаҡал,
Һыу инәһе Һыуған һаҡал,
Ерҙән тейһәң, ергә кит!
Елдән килһәң, елгә кил!
Бына һиңә яулыҡ,
Сәлимәгә бир һаулыҡ!

Был һамаҡ өс мәртәбә ҡабатлана (кем ауырыһа, шуның исеме әйтелә). Имсе шулай ти ҙә имен ергә һалырға сығып китә. Ауырыуға зәхмәт ҡайҙа ҡағылған, ул уны шунда һалырға тейеш. Шуны «ергә һалыу» тиҙәр.

Ергә һалырға барғанда ла, ҡайтҡанда ла артҡа ҡарарға ярамай. Кеше осрап, өндәшһә лә, туҡтамаҫҡа, уга яуап бирмәҫкә, өндәшмәҫкә. Артҡа ҡараһаң, туҡтап өндәшһәң, ауырыу кире ҡайта, ти.

Г

Ергә һалғанда, былай тип һамаҡлайҙар:

— Ер эйәһе Ерән һаҡал,
Һыу инәһе Һыуған һаҡал,
Уны (ауырыған кешене) тотма, енде тот,
Ен кендеге — бары бер.

### 63. ЕР ЗӘХМӘТЕН ИМЛӘҮ

Ҡояш байығас, ергә зәхмәт ята. Шул ваҡыт йығылһаң, ер зәхмәте ҡағыла. Уның сирен бер дауа менән дә алдырып булмай. Бала сирләмәһен өсөн шул урынға баланы «бес» иттерәләр, көл һалалар. Ошо ваҡыт әйтемләп торалар:

— Ер анаһы Ерән һаҡал,
Һыу анаһы Ҡөрән һаҡал,
Мине тотма, быны тот!

Шунан шым ғына алға китәһең, боролорға ярамай. Бер аҙ ул һинең артыңдан ҡыштырҙап-ҡыштырҙап килә. Өйгә ҡайтып еткәнсе, һөйләшмәҫкә, хатта тамаҡ та ҡырмаҫҡа. Ергә көл һалғанда, «бисмилла» тип әйтергә ярамай. Юғиһә, сир үҙеңә кире йоға.

## 64. ТОТАНАҠ АУЫРЫУЫН ИМЛӘҮ

Тотанаҡ ауырыуы төрлө сәбәптән: ҡапыл тертләп ҡурҡыуҙан, йығылыуҙан була. Ауырыу кеше тамаҡтан яҙа. Уның хәле бөтә. Баҫып та тора алмай. Иҫен юғалта, тешен шығырлата...

Дауаһы шул: ауырыуҙы гөлйемеш һабағы менән сабырға кәрәк. Ул яңы ғына киҫелгән булырға тейеш. Сисендермәйенсә, гөлйемеш һыуына теймәҫкә. Саба-саба, доға уҡый-уҡый ауырыуҙы өс мәртәбә әйләнеп сығаһың:

— Нимә һуғылған, нимә ҡағылған, шул сығып китһен! — тиһең.

## 65. ҺЫУ ТОТҠАНДА

### А

Ят ерҙең һыуы ҡайһы бер кешеләргә ярамай: эсһә йәки йыуынһа, тәненә юҡ-бар сыға. Шуны һыу тотоуы тиҙәр. Ят ерҙең һыуын файҙаланыуҙан әүәл өҫтөңдән сепрәк өҙөп һыуға ташларға кәрәк. Шунан һуң ғына был һыуҙы эсһәң дә була, уға ҡойонорға ла ярай.

### Б

Күлдәк-яулыҡтан һүренте алып һыуға һалғас:

— Һыу, мине тотма,
Ана ошо епте тот, —

тип әйтәһең дә шунан һыуға төшәһең.

### В

Ер инәһе Ерән һаҡал,
Һыу инәһе Һары һаҡал!
Мине тотма, уны тот,
Аҡ һаҡаллы ҡартты тот!

Ерҙән килһәң, ергә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит.
Бүҙәнәнән май һора,
Ябағанан йөн һора.
Ерҙән килһәң, ергә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит,
Һиңә (ауырыған кешенең исеме) һаулыҡ,
Ҡалған кешегә яулыҡ...

Г

Ҡешенең аяҡтары һыҙлағанда, сей бәрәңгене урталай ярып, ауыртҡан урынды ышҡырға. Ышҡығанда шулай тип әйтемләйһең:

Һыу инәһе Һарысәс,
Ер инәһе Ерәнсәс!
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатима ҡулы,
Мине тотма,
Ошоно тот!

Шунан бәрәңгене ергә күмәһең.

## 66. ЙЫҒЫЛҒАНДА

А

— Тфү-тфү-тфү,
Шайтан, миңә ҡағылма,
Ана, енгә ҡағыл, —

тип һамаҡлап, ҡағынып-һуғынып, йығылған ергә өс тапҡыр төкөрәһең.

Б

Ҡеше аяҡ аҫтында ятҡан әйбергә һөрөнөүсән. Утын ағасымы, тимерме, ташмы — барыбер:

— Атам рухынан, әсәм рухынан! — тип, уны артыңа ташлайһың.

В

Ҡисен йығылһаң, нәҫтә ҡағыла. Шуға ла:

Шайтанға ауырлыҡ,
Бәндәгә еңеллек! —

тип әйтергә.

Г

Тфү, тфү, тфү!
Балаға ҡағылма, енгә ҡағыл,
Енгә ҡағыл!
Ай, Аллам, вай, Аллам,
Вай, балам, вай балам,
Тыңламаның бит, балам,
Енгә ҡағылма, балам! —

Бала йығылып китһә, бына шулай тип һамаҡлайҙар.

## 67. АЯҠ БӘРЕЛҺӘ

Аяҡты бәргәндә:

— Аяғымды ташҡа бәрҙем,
Инна-анни, кати-катика, —

тип һамаҡлап, ауыртҡан урынды ыуалайһың.

## 68. ЭС АУЫРТҠАНДА

Эс ауыртҡанда:

— Эсем, эсем, ауыртма,
Бер һыйпайым, ике һыйпайым, —

тип, өс тапҡыр әйтеп, ауыртҡан урынды һыйпарға.

## 69. МУЙЫН АУЫРТҠАНДЫ ИМЛӘҮ

Муйын ауыртһа, яман ятҡан, тиҙәр. Уны бөтөрөү өсөн түңгәккә (йә бағанаға, йә ата ҡаҙға) өс тапҡыр:

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Әссәләмәғәләйкүм!

— Әссәләмәғәләйкүм! — тип сәләм биреп, «түңгәк» («бағана!», «ата ҡаҙ!») һүҙен әйтеп үтергә, тиҙәр. Шулай тиһәң, муйындың һыҙлауы бөтә.

## 70. АЯҠ-ҠУЛ ҺЫҘЛАУЫН ҺӘМ БӨКӨРӨНӨ ИМЛӘҮ

А

Аяҡ-ҡул һыҙлаһа, мал һөйәге менән имләйҙәр. Ул яланда ҡуҙғалмай ятҡан һөйәк[1] булырға тейеш. Имләгәндән һуң кире урынына ҡуйырға кәрәк.

Шунан тағы әсәйемдең имләүе иҫтә ҡалған:

Аҡ таш, ҡара таш,
Аҡ таш, ҡара таш,
Бына һиңә, Тәңре, баш!

Б

Һөйәк менән имләү һамаҡтары:

Бер, ике, өс — осоп китһен,
Дүрт, биш — биҙһен, китһен.
Алты, ете — елгә!
Һигеҙ, туғыҙ — тупраҡҡа!
Уңдан килһәң, уңға кит,
Һулдан килһәң, һулға кит,
Ерҙән килһәң, ергә кит!
Һигеҙ, туғыҙ — туҡтаһын,
Туғыҙ, һигеҙ — китһен.
Ете — елгә,
Алты, биш — биҙһен,
Дүрт, өс — осһон,
Ике, бер — бөтһөн,
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатима ҡулы!

В

Бер, ике, өс, дүрт,
Биш, алты, ете!
Ете — етенән ҡайт!
Алты — алтынан ҡайт!
Биш — биштән ҡайт!
Дүрт — дүрттән ҡайт!
Өс — өстән ҡайт!
Ике — икенән ҡайт!
Бер — берҙән ҡайт!
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатима ҡулы!



## АРБАУҘАР

### 71. ЭТТЕ АРБАУ

#### А

Эттән ҡурҡкан кешенең башы осонан осҡон борлап тора, ти. Эт шуны күрә лә, ауалап, тешләргә тырыша. Эт тешләргә итһә:

— Ләкен-ләкен *,
Сөмбула ләҡуа,
Инәң — берәү, атаң — ҡырҡ,
Тфү, тфү,
Ҡара ләғнәт! —

тип арбайһың. Ул тешләмәй, китә лә бара, ти.

#### Б

— Лаули-лаули, лаули ҡап!
Лаули-лаули, лаули ҡап!
Инәң — бер,
Атаң — ҡырҡ,
Яурының ҡыйыш,
Яңағың ҡарыш,
Ҡолағың ҡарпыш,
Телең тартыш,
Ҡойроғоң һалбыр,
Йөнөң ялбыр.
Өрмә, туҡта, тфү! —

тип әйтергә кәрәк.

Шунан эт өрөүҙән туҡтай, ҡойроғон болғап тик тора.

В

Ҡешене ҡоторған эт тешләһә, ҡырҡ бөртөк ҡорт, ҡырҡ бөртөк һалма, ҡайһы ваҡыт шул эттең ҡолағын ҡырҡып ашатҡандар.

Ҡоторған эт тешләһә, уны Ҡөрьән менән дә һуғыр булғандар.

## 72. ЙЫЛАНДАН ҺАҠЛАНЫУ

Йылан юлды ҡыйып үтһә йәки эргәнән генә үтеп китһә, әгәр уның үҙенең юлын ҡыйыу мөмкин булмаһа, ул киткән яҡҡа үлән йә ботаҡ өҙөп ташлайһың. Ташлағанда, уҡынырға кәрәк.

Йылан йылҡы малынан ҡурҡа. Уның тире йылан өсөн ҡурҡыныс. Шуның өсөн дә ҡырҙа ятырға тура килһә, үңлек түшәп ятырға. Ятҡан ерҙе түңәрәтеп, дилбегә, эйәр, йүгән, ҡамыт һалһаң да, йылан килмәй. Йыланды таяҡ менән түгел, сыбыртҡы менән үлтерәләр.

В

Йылан саҡҡас, йыландан алда яҡын-тирәләге йылғаға йүгерергә кәрәк. Әгәр сағылған кеше, һыуға алдан йүгереп етеп, яраһын һығып-һығып йыуып, һыу эсһә, ул тере ҡала. Әгәр йылан алдан һыуға төшөп өлгөрһә, сағылған кеше үлә.

## 73. ЙЫЛАН АРБАУ (ЙЫЛАН ТЕЛЕ)

Яйыҡ буйы Тиләү башҡорттарында йылан арбау шулай атҡарыла. Йылан осраһа, ҡиблаға ҡарап, тәһәрәт алалар. Шунан йылан тирәләй уратып йөрөп:

— Ҡамсы, ҡамсы,
Ҡамсы, ҡамсы.., —

тип һамаҡлайҙар. Шулай итһәң, йылан: «Мине ҡамсы менән һуғалар икән», — тип уйлай ҙа, ти, йомарланып ята, ти. Шул арала кеше йә уны үлтереп өлгөрә, йә ҡасып өлгөрә.

Б

Сәңке, сәңке, сәңке йылан,
Сәңке башлы ҡара йылан,
Атҡан уҡтан етеҙ йылан,
Ағын һыуҙан рауан *йылан,
Аҡ мамыҡтан йомшаҡ йылан,
Сағыр булһаң, саҡ, йылан,
Саҡмаҫ булһаң, ят, йылан,
Нух бәйғәмбәр * хөрмәтенә
Ятҡан ерҙә ҡат, йылан
Ятҡан ерҙә тибрән (үл), йылан!

## В

Бисмиллаһир-рәхманир-рахим,
Сәңке, сәңке, сәңке йылан,
Сәңке башлы ҡара йылан,
Мөтер-мөтер башлы йылан,
Ҡират-кират * кергән йылан,
Ҡинә килуан * атар йылан,
Ҡылдин нескә йылан,
Ҡылыстан етеҙ йылан,
Туҙ башлы, ҡара күҙле
Тулы йылан.
Аҡ башлы тимерҙе киҫкән йылан,
Бир рәхмәтең,
Йә рәхманир-рахим!

## Г

Йыландың теше менән йә, йүкә ағасын һыҙырып алып, сағылған урынға тейҙерә-тейҙерә әйтемләйҙәр:

— Аҡ йылан,
Туҙбаш йылан,
Баҡыр йылан,
Һыу кеүек ағыҙайым,
Көл кеүек туҙҙырайым.

## Ғ

— Бурта арбан-торбан салмауыр йылан,
Ун ике башлы мәҡәрдис йылан,
Әбрәй әбрәйенә һартҡан
Сартҡар тибрән йылан,
Нух бәйғәмбәр * хаҡы өсөн,
Ҡирсә-кирсә кире кил,
Мар йылан!
Утыҙ башлы уй йылан,
Урман. тауҙың башынан
Ләп-ләп кил, сыҡ, йылан,
Ләпәләй, сәмиға *, тәлғат *,
Нәлби-тәлби, сарба-торба,
Ҡәмәһә-кәмәһә, кил, мулла,
Ҡилдем, әфисәр, бусар * күҙле
Барса йыландарҙың атаһы бул,
Ары барһам, бире барһам,
Бирелә-фар йылан,
Ҡылыстай нескә йылан,
Алтмыш алты тамырыңды,
Етмеш ете мөгөҙөңдө,
Телеңде һурырмын.

Һин — йылан,
Һинән артыҡ мин — йылан.

Д

Йылан арбаусы кешене саҡҡан йыландың үҙ исемен әйтеп өшкөрмәһә, бер файҙаһы ла теймәй. Атайым (Исмәғил ине уның исеме) йылан арбай торғайны. Бер көндө бер ҡатынды алып килделәр. Йылан саҡҡан. Шешенеп бөткән, эсе күпкән, хәле хәл өҫтөндә генә. Атайым үҙе белгән йылан исемдәрен әйтеп бөттө — ҡатындың хәле ауырая ғына. Бер саҡ ҡатын: «Быуылам, еҙ төймәмде ысҡындырығыҙ!» — тине. Шулай тигәйне генә — ҡатындың эсе шиңә башланы. Атайым һиҙеп ҡалды: был ҡатынды саҡҡан йыландың исеме Еҙтөймә икән. Шул исемде әйтеп өшкөрә башланы — ҡатын һауыҡты ла ҡуйҙы.

Ҙ

Күҙәмбәт ауылында бер ҡарт йәшәй торғайны. Шул кеше йыландар менән һөйләшә белә торғайны. Урманға барыр, йылан ояһын табыр, йыландарҙы саҡырып сығарыр ҙа улар менән һөйләшеп ултырыр ине. Өйөндә ултырған ерҙән саҡырһа ла, йыландар килеп, һөйләшеп киткәндәрен күргәндәр.

Е

Йылан арбағанда:

— Әшер-өшөр, ағыуыңды төшөр,
Йылан, аҡма, мине саҡма! —

тип һамаҡлайҙар.

### 74. ТЕШ ҠОРТОН АРБАУ

А

Һыу ҡойолған күнәккә ҡыҙыу утта ҡыҙҙырылған таш һалып, уға киндер орлоғо өҫтәп, күтәрелгән быуға теше һыҙлаған кешене бөркәндереп ултыртаһың да йәмкәгә бысаҡтың һырты менән бер көйгә генә һуға-һуға тораһың. Ауырыуҙың хәленә ҡарап, ташты өҫтәргә мөмкин. Аҙаҡ һыуҙы һарҡытып, орлоҡ араһынан тештән төшкән ҡортто һүпләп ташлайһың.

Б

Алтмыш башлы ала ҡорт,
Етмеш башлы ерән ҡорт,
Ҡырҡ башлы ҡара ҡорт,
Бөтөр-бөтөр бала ҡорт,
Ҡинәт-кинәт кир ҡорт,
Кинәгән ар ҡорт *,

Кәликүрҙе ҡырҡ башлы ала ҡорт,
Әүбәкерҙең *алтмыш тамырын
Киҫкән ҡорт!
Шеш теймәм шарша,
Йә, Мөхәммәт, йә әле!
Асылам, асылам,
Асылам ләҡәт *,
Аҫтыртын йөрөгән кафыр ләҡәт,
Туғыҙ ҡабат тупраҡтан
Тешеңде сығарма ләҡәт!
Шеш теймәм шарша,
Йә, Мөхәммәт, йә әле!
Сәңке, сәңке, сәңке ҡорт,
Сәңке башлы һары ҡорт,
Ҡылдан нәҙек нескә ҡорт,
Ҡылыстан да етеҙ ҡорт,
Ағын һыуҙан үткен ҡорт,
Аҡ мамыҡтан йомшаҡ ҡорт!
Шеш теймәм шарша,
Йә, Мөхәммәт, йә әле! —

Теш һыҙлағанда әйтелә торған был һамаҡты йылан арбауға ла файҙаланырға була.

### В

Алтын ҡойроҡ — атағыҙ,
Айыры ҡойроҡ — инәгеҙ,
Төш, ҡортом, төш, ҡортом,
Шул солоҡҡа күс, ҡортом.
Алтын башлы атағыҙ,
Уҡа башлы инәгеҙ,
Кемгә зәхмәт һалған ҡорт,
Кемгә рәхмәт һалған ҡорт,
Өс йөҙ алтмыш тамырға
Сихәт һалған сәңке ҡорт,
Сихәтең менән ҡун, ҡортом!
Ҡун, ҡортом, ҡун, ҡортом!
Ҡун, ҡортом, күс, ҡортом!
Төш, ҡортом, төш, ҡортом!..

### Г

Сәңке, сәңке, сәңке ҡорт,
Сәңке башлы ҡара ҡорт,
Сәңке башлы ҡара ҡорт,
Айыры ҡойроҡ ҡара ҡорт,
Айыры ҡойроҡ ана ҡорт,
Атаң-инәң бында, ҡорт,

Ынйы булып теҙелеп кил,
Ебәк булып һуҙылып кил!
Ҡил, ҡортом, кил, ҡортом,
Ағын һыуҙан ағып кил,
Аҡ балыҡтай, йөҙөп кил!

### 75. ӘПСЕНЛӘҮ

#### А

Эй, Хоҙайым, шифаһын бир
Өс йөҙ алтмыш тамырға.
Күҙҙәренең нурын бир,
Тәндәренә сәләмәтлек бир.
(Өс тапҡыр елкәһенән өрөп ебәрә.)

#### Б

Әпсен-төпсөн, әмәләк,
Күҙҙән килһәң, күҙгә кит,
Ерҙән килһәң, ергә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит,
Ҡайҙан килһәң, шунда кит.
Тфү, тфү, наҙы юҡ,
Күҙ төшөрлөк ере юҡ...

#### В

Әпсен-төпсөн,
Шайтан үпһен,
Таң атҡансы
Шешеп сыҡһын.

#### Г

Әпсен-төпсөн,
Бүрәнә баҫһын,
Бер биҙ(е)рә ҡаны сыҡһын,
Бер биҙ(е)рә биҙе сыҡһын,
Бөлдөргәне бөтөп китһен,
Әпсен-төпсөн, үтеп китһен.
Сир-сир, сирмешкә,
Им — имгә,
Сир — мөйөшкә.
Әпсен-төпсөн,
Шайтан үпһен!



## МАЛ-ТЫУАРҘЫ ИМЛӘҮ

### 76. МАЛДЫ КҮҘ ТЕЙЕҮҘӘН ҺАҠЛАУ

А

Мал күҙекмәһен өсөн, уға сағыу-сағыу сепрәк бәйләйҙәр. Күҙе үткер кешенең иғтибары шуға китә була. Арышпарҙа Мамылин тигән ҡарт булған. Шул ҡарт берәй нәмәгә һоҡландымы — күҙе тейә лә ҡуя ине, ти. Хатта ағасҡа ла күҙе тейгән. «Эх, бынауы ҡарағай! Таҡта итеп ярырға ине! Былай-алай булмаҫмы!» — тиһә, икенсе барыуға әлеге ҡарағай ҡыуарыр булған, ти.

Б

Һыйыр малы күҙекһә, һөтө бөтә, һауҙырмай. Ундай малды, күҙекмәһен өсөн, уҡынып тороп ыҫлайҙар, мөгөҙөнә, ҡойроғона төрлө төҫтәге сепрәктәр тағалар.

Элек бер кешенең күҙе хәтәр үткер булған. Берәүгә бер ҡараһа — көл итә лә ҡуя, ти. Берәү әйтә: «Туҡта, ҡылайым әле ҡылыҡты». Ҡыубаш тотоп китә. Тегс үткер күҙ быға бер ҡарай — алдыра алмай, ә йәнәшәлә барғанды көл итә.

Шуға кәртә-ҡура тирәһенә, умарта эсенә ҡыу йылҡы башын эләләр. Ҡортбаш * ҡыу йылҡы башына оҡшаш. Шуға ла уны бишмәткә баҫалар. Ул ҡыҙ балаларҙы күҙегеүҙән һаҡлай.

В

Мал (йә кеше) күҙекһә, саталы мышарҙы ярып, түңәрәк туғын яһайһың да уны шуның аша үткәрәһең. Мышарҙан төймә яһап, малдың мөгөҙөнә (ялына), кешенең түшенә тағалар.

### Г

Ҡояш байығас кешегә һөт алырға барһаң, һауытыңа тәүҙә һөт ҡоялар, шунан бер киҫәк күмер һалып ҡайтаралар. Һөт алған кеше өйҙәренә ҡайтып ингәс кенә күмерҙе алырға тейеш. Шулай иткәндә, малдың һөтө кәмемәй, күҙ ҙә теймәй, хужанан «аҡ китмәй».

### Ғ

Малға күҙ тейһә, уның маңлайын, ҡолағын, морон тишеген төтәсләйҙәр.

— Нимә булған? — тип әйтә берәү.

— Күҙ тейгән, — ти имсе. Шунан өс тапҡыр әйтәһең дә ҡаты күҙле кешенән урлап алып ҡалынған сепрәк киҫәген йә сәс бөртөгөн төтәсләйһең:

— Аҡ күҙҙән,
Күк күҙҙән,
Ҡара күҙҙән,
Һары күҙҙән — төҫ, төҫ, төҫ!

### Д

Күҙле (тишекле) бәшмәк була. Малға күҙ тейһә, шуның менән төтәсләйҙәр. Малдың өҫтөн ябып, ябыу өҫтөнән бәшмәк менән йөрөтәһең. Әйтемләп торорға кәрәк:

— Ала күҙҙән,
Һоро күҙҙән,
Ҡара күҙҙән,
Зәңгәр күҙҙән,
Тфү, тфү!
Күҙе к...нә китһен,
Уңдан килһә, уңға китһен,
Һулдан килһә, һулға китһен,
Яман күҙ к...әнгә!
Тфү! Тфү! Тфү!

### Ҙ

Һыйыр, күҙ(л)егеп, һауҙырмай башлай. Ундай саҡта уны иләк үтә һауалар.

## 77. БӘПКӘЛӘРҘЕ КҮҘҘӘН ҺАҠЛАУ

### А

Бәпкәләр сыҡҡас, уларға күҙ тейеүсән була. Күҙ теймәһен

өсөн уларҙы иҫке ыштан балағынан үткәрәләр. Балаҡ үтә үткәргәндә, «салауат» доғаһын уҡыйҙар.

Б

Дим буйы башҡорттарында, күҙ тейеүҙән һаҡлау өсөн, яңы тыуған ҡаҙ бәпкәләрен ат ҡыубашының күҙ төбө аша үткәреү ғәҙәте булған.

## 78. МАЛДЫ НӘМӘ ТАРЫУҘАН ҺАҠЛАУ

А

Малға нәмә тарымаһын (ен, шайтан, сир ҡағылмаһын) өсөн салғы күтәреп ҡуялар. Яман заттар салғынан (тимерҙән) ҡурҡа, ти.

Б

Өй башына йәки өрләккә яҙын, май айында, артыш киптерергә ҡуялар. Кипкән артыш сатырҙап янып тора. Артыш күп осраҡта ҡулланыла. Йәш мал тыуғас, уның өрпәйеп торған йөндәрен шул янып торған артыш менән төтәҫләйҙәр (ыҫлайҙар).

Быҙауҙың «шайтан көндәре» шунда янып бөтә.

Элек артышты туйҙа ла ҡулланғандар. Ҡыҙ өйөн йәки келәттә йыйыштырғас, килен төшәһе өйҙө артыш яғып ыҫлағандар. Уның еҫе тәмле генә була. «Артышлы өйҙән ҡот китмәй. Артыштан ен ҡаса», — тиҙәр ололар.

## 79. КӨЙӨШ ТӨЙӨҮ

Һыйыр малын көйөш ала алмаһа, бер үлән алалар ҙа өс ерҙән «көйөш төйәләр». Бер кеше һорай, төйөүсе яуап бирә:

— Ни төйәһең?

— Көйөш төйәм.

— Ни төйәһең?

— Көйөш төйәм.

Шунан төйөлгән үләнде көйөшө яңырған малға ашаталар.

## 80. ЭСЕ ТАШҠАН МАЛДЫ ИМЛӘҮ

Әгәр мал, көйөштән яҙып, ярау итә алмай, эсе ташып ыҙалanһа, уны хужаһының (мәҫәлән, Хәйернисаның) итегенең ҡуңысы менән туҡмайҙар. Туҡмағанда, эйәһенең исемен әйтеп, ошолай һамаҡлайҙар:

— Хәйернисаның көйөшө яңырған,
Шуның көйөшөн имләйем.

Хәйернисаның көйөшө яңырған,
Шуның көйөшөн имләйем...

## 81. СЫҪКАНСЫҠ БУЛҒАН МАЛДЫ ИМЛӘҮ

Сыҫкансыҡ булған мал тәгәрәп китә, тороп китә. Ундай малдың бөйөрө тапҡырында ғына бармаҡ баҫымындай төйөнө була. Шуны төтәҫләйҙәр.

— Сыҫкансыҡ, сыҫкансыҡ,
Ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ, —

тип һамаҡлап, итек ҡуңысы менән һуға-һуға йөрөтәләр. Шунан сыҫкансыҡ бөтә.

## 82. ТАЛАҠТАН ҠОТОЛОУ

Күп ҡыуыуҙан йә талағына һуғыуҙан ат талауһырай (уға талаҡ тейә). Унан шулай ҡотолалар: аттың ҡойроғонан ҡыл алып, шуны уның танауына тығып, бышҡырталар. Шулай бышҡыртабышҡырта, теҙгененән тотоп, сыбыртҡы менән ҡыуа-ҡыуа үҙең тирәләй йүгерттерәһең. Тирләгәнсе йүгертәһең, ат бирешмәй.

## 83. «ЭҪЕЛӘЙ БУЛҒАН» АТТЫ ТӘРБИӘЛӘҮ

### А

Юл йөрөп тирләгән атҡа ҡапыл һыу эсерергә ярамай, «эҫеләй була», яна.

«Эҫеләй булған» атҡа андыҙ үләненең төнәтмәһен эсерәләр. Андыҙ эсе киткән атҡа ла килешә. «Андыҙлы ерҙә ат үлмәҫ» тип шуға әйткәндәрҙер инде.

### Б

Янған атты шулай имләйҙәр: йылан тотоп алалар ҙа, башы менән ҡойроғон өҙөп (сөнки улар ағыулы була), аттың уртына һалаһың, башын күтәрәһең. Ат сәйнәй-сәйнәй ҙә йота тегене. Шунан уға көрпә-фәләп ашатаһың да ебәрәһең. Шунда ла ат төҙәлмәһә, тағы йылан ашатаһың.

## 84. БЫҘАУ «ҠАНАТЫ»Н ӨТӨҮ

Яңы тыуған быҙауҙың ҡабырғаһында, һыртында аҡһыл оҙон таптар була. Уны быҙауҙың ҡанаты, тиҙәр. Быҙау төнөн осоп йөрөй ҙә, ти, шуға йонсой, имеш. Шуның өсөн, туҙ яндырып, шул төктәрҙе өтөп сығалар. Шунан быҙау шәбәйә, тиҙәр.

## 85. ТӨРТКӨ АУЫРЫУЫ ҺӘМ УТ ЯҢЫРТЫУ

### А

Төрткө — бер әбей сүрәтендә була, ти. Исеме Мөстән, ти. Был исемде әйтергә ярамай.

Төрткө малдың яурынбашына төртә лә китә.

Бер саҡ Тимер ауылынан китеп барабыҙ. Тауҙы төшөп кенә бара инек, бер әбейҙе күреп ҡалдыҡ. Аҡ күлдәкле, аҡ яулыҡлы. Беҙгә ҡарамай ҙа әрәмәгә инеп бара. «Ҡайҙа бараһың?» — тинек. Барыбер боролоп ҡараманы. Аҙаҡ белдек, был әлеге шул Мөстән әбей, төрткө, булған. Ғәлимырҙа тигән кешенең быҙауын төртөп китеп барған.

Хәҙер төрткө ауырыуы юҡ. Укол һалалар бит.

### Б

Төрткө ауырыуы таралһа, ут яңырталар.

Һуҡыр сысҡан төрткө ояһын ашаһа, шунда төрткө ауырыуы ҡуба. Унан һаҡланыу өсөн, бөтә усаҡтарҙағы утты һүндерәләр. Бер генә өйҙә бер генә осҡон ут ҡалһа ла, килешмәй. Шуға ла тәғәйенләнгән кешеләр ҡыҙырып йөрөп, усаҡтарҙы тикшереп сыға. Шунан ирҙәр сығыр уты сығарырға тотона. Ҡоп-ҡоро ғына имәнде ергә һалалар ҙа уның өҫтөнә кер туҡмағы кеүек итеп киртләсләнгән икенсе имәнде арҡыры һалалар. Уның ике башында икешәр арҡыры тотҡа була. Һәр тотҡаға икешәр кеше тотоноп (бөтәһе һигеҙ кеше), бысҡы менән утын бысҡандағы һымаҡ алмаш-тилмәш тарта башлай. Аҫҡы ағас аҫтына ҡуйылған ялғашҡа һалынған сөрөк быҫҡығанса тарталар. Осҡон төшөп тә сөрөк төтәй һалмаһа: «Кемдә ут ҡалды?!» — тип яңынан усаҡ тикшереп сығалар.

Яңы ут табылғас, ауырыу бөтә була. Яңы утты тапҡан саҡта сөрөк янып ыҙан барлыҡҡа килгән көлдө малға еҫкәтәләр, теләнә һалалар.

## 86. МАЛ ҮРСЕМЕ АЛЫУ, ТҮЛ ТЕЛӘҮ

### А

Һыйыр быҙаулар ваҡыт етһә, хужа аҙбарға фуфайкаһынынмы, пальтоһынынмы элмәһен ысҡындырып килеп инә. Үҙе былай тип әйтә:

— Мал(ы)ҡай, иҫән ҡотол,
Артыңа б...ҡ тултыр,
Еленеңә һөт тултыр!

### Б

Йәш быҙауҙың һыртынан һыпырып-һыпырып мейес нигеҙенә тигеҙәләр:

— Быуын-һеңерең теүәл булһын,
Артыңдан мал тыуһын!

### В

Яңы тыуған быҙауҙы йәки бәрәсте алып ингәс, мейес янына һалалар ҙа:

— Таштай, мөрйәләй,
Мейестәй, кирбестәй бул! —

тип әйтәләр ине.

### Г

Элек башҡорттар һәр көтөүҙә, өйөрҙә өлөшлө мал була тип уйлағандар. Яҡшы тоҡомло айғыр, үгеҙ, тәкә өлөшлө мал һаналыр булған. Йылҡы, һыйыр, ваҡ малдың түлләп (үрсеп) китеүенә шулар сәбәпсе тип белгәндәр.

Өлөшлө малды һатмағандар, кешегә бүләк итмәгәндәр, ҡарап тотҡандар, ҡәҙерләгәндәр, күҙ тейеүҙән һаҡлағандар. Үлһә йә һуғышта һуйыла ҡалһа, ундай малдың йән ерен ҡырҡып алғандар ҙа бейеккә элеп киптергәндәр. Шунан уны ваҡ-ваҡ кисәктәргә турап, түл төйөмө яһағандар. Шуны бейәләргә, һыйырҙарға, башҡа орғасы малға, түлле бул, тип теләктәр әйтеп, тағып ебәргәндәр. Шулай итһәң, мал үрсемле, түлле була. Түл төйөмө тағылған малға өлөшлө малдың бөтә һәйбәт сифаттары күсә, имеш.

Түл төйөмөн, малдың йән ерен, сыуынын аяҡ аҫтына ташлау, эткә биреү — гонаһ эш. Уларҙы ергә күмергә.

### В

Тупһаға, һикәлтәгә даға ҡағыу йолаһы бар. Уның ырымы шулай: кешенең яман уйы, яман һүҙе шунда эләгеп ҡала. Даға еншайтандан да һаҡлай. Шуға ла уны ҡаҡҡан саҡта түбәндәгене әйтәләр:

— Шайтан килмәһен өсөн,
Хәрәм кермәһен өсөн,
Тел-теш баҫмаһын өсөн,
Бәрәкәт ҡасмаһын өсөн!

Тупһаға (йә һикәлтәгә) ҡағыла торған даға ат тояғынан төшөп ҡалған даға булырға тейеш.

Г

— Ҡатынан ҡаты ни ҡаты?

— Ҡатынан ҡаты — ат тояғы ҡаты.

Шулай тигәндәр борон. Шуға ат тояғына ҡағылған даға ла ҡаты тип ҡарағандар.

Ғ

Тел-тештән һаҡланыу өсөн, тупһа тапҡырынан нигеҙ аҫтына бүре башы күмәләр.

## 87. ТЕЛ-ТЕШ ҠЫРҠЫУ

### А

Ҡайһы бер кешене (айырым ғаиләне) сит кешеләр ниңәлер бик телгә ала, уның бөтә ғәйебен һөйләй, яҡшылығын да насарға һабыштырып, ғәйбәт тарата. Бына шул ваҡытта беҙҙең төбәктә им-томсо бер әбей шундай кешегә (ғаиләгә) «тел-теш ҡырҡа». Ул былай атҡарыла: әбейҙе саҡырып килтерәһең дә, өй эсендәге төрлө кейем-ҡаралтынан ете төрлө сепрәк ҡырҡып, уның алдына һалаһың. Әбей шул сепрәктәрҙе берәм-берәм ваҡ киҫәктәргә турай, хужабикә әбейҙән һорай-һорай ултыра:

— Ниҙәр ҡырҡаһың, әбекәй?

— Тел-теш ҡырҡам,<br>Кешеләрҙең яуыз телен ҡырҡам,<br>Нуретдин ҡыҙы Зәйтүнәнең<br>Бәхеткәйен яңыртам, —

тип һамаҡлай. Һорау-яуап өс мәртәбә ҡабатлана. Шунан турандыны иҙән уртаһында яндыралар. Көлөн йыйып, яҡшылап төрөп, тыш яҡтан ишек башына ҡыҫтырып ҡуялар. Шунан һуң халыҡ был кешене (ғаиләне) һөйләүҙән туҡтай, һөйләргә теләһә лә, теле бармай ҙа ҡуя.

### Б

Тел-теш баҫһа, кәртә-ҡура тирәһенә бағана, шеш осона ҡыу йылҡы башы, салыу һөйәге кейҙерәләр йә өс төрлө еп алалар ҙа ҡырҡ бер төйөн төйнәйҙәр. Төйөн төйнәгәндә, берәү һорай, имсе яуап бирә.

— Ни төйнәйһең?

— Тел-теш төйнәйем: дошмандарҙың, януар-йыртҡыстарҙың телен боғаҙлайым!

Һорау-яуап өс тапҡыр ҡабатлана. Шунан төйөнлө епте турайҙар. Төйөн турағанда, шулай тип һорайҙар:

— Ни ҡырҡаһың?

— Дошмандарҙың, януар-йыртҡыстарҙың тел-тешен ҡырҡам,— ти тураусы. Был һорау-яуап та өс тапҡыр ҡабатлана.

## 88. ӘМӘЛЛӘҮ (СИХЫРЛАУ)

### А

Әгәр һин яратҡан егет һиңә күҙ һалмаһа, ошолай әмәлләйҙәр: тере баҡаны (тәлмәрйендә) утта көлгә ҡалғансы яндыралар. Унан, янып бөткәс, мөгөҙ ҡалырға тейеш. Шул мөгөҙ менән яратҡан кешеңдең арҡаһына һыҙып китәһең. Быны ул һиҙергә тейеш түгел. Ошо минуттан алып ул кешелә һиңә ҡарата мөхәббәт уянасаҡ.

Ошондай мөхәббәт доғаһы ла бар:

— Бисмиллаһир-рахмәнир-рахим!

Бутаһын буталар менән дөйә нисек бутамай, үҙ бутаһын күрмәйенсә, дөйә нисек түҙә алмай:

«Бутам, бутам, бутаным,
Бутам, балам, бутаным!» —

тип, нисек тәҡәт итә алмай, нисек тауҙар артылып, нисек даръялар йөҙөп, ер ҡыҙырып, ил гиҙеп, буҙ бутаһын буҙлап эҙләй, ул да минһеҙ тора алмаһын; ашағаны аш булмаһын — таш булһын, йоҡоһо йоҡо булмаһын — өкө булһын; көнө көн булмаһын — төн булһын; ятһа, төшөндә булайым, торһа, уйында булайым, ерҙең өҫтөн ҡыҙырып, ерҙең аҫтын ҡыҙырып, мине эҙләрҙәй булһын; һары май йылы икмәккә нисек килешә, ҡомға ҡойһаң, уға һыу нисек һеңешә, ул да минең ҡуйыныма шулай инһен, шулай һеңһен! Ете төндә ете тороп, инә сабыйын ете имеҙә, ете һөйә, ул да мине ете төндә ете тороп, ете һөйһөн, минһеҙ янһын, минһеҙ көйһөн!..

### Б

Башҡорттарҙа йәрәшеүҙе «сәсе сәскә бәйләнгән» тип әйтеү бар. Әгәр егеттең иркенән тыш берәй ҡыҙҙы уның менән ҡауыштырырға теләһәләр, шул ҡыҙҙың бер-ике бөртөк сәсен, берәй нәмәгә төрөп, егет тотонған мендәр эсенә йәшерәләр. Шул сәс егеттә әлеге ҡыҙға мөхәббәт уятырға тейеш (ҡыҙҙы үҙ иркенән тыш берәй егет менән ҡауыштырырға иткәндә, киреһенсә эшләйҙәр).

### В

Бер ҡатын бер егетте ҡарата алмай йөрөгән. Шунан бер ваҡыт өй йыуғанда, ҡатын үҙенең тирен һауытҡа йыйып йөрөй ҙә шуны теге егеткә эсерә. Егет был ҡатынды оҡшата башлаған, уға өйләнгән.

## Г

Бер ир, ишле генә ғаиләһен ташлап, йәш ҡатынға өйләнгән. Ә үҙе гел балалары янына килеп йөрөй икән. Ҡатып быны сихырларға уйлаған. Тәүге сынаяҡты ҡатындар — үҙҙәренә, икенсеһен иренә яһарға тейеш. Әгәр тәүгеһен иренә яһап эсерһә, ире ғаиләһенә кире ҡайта, ти. Был ир, һиҙенеп ҡалып, һәр сынаяҡ сәйҙе уҡынып эскән. Шунан сығыр саҡта ҡатынына: «Һин дә мине сихырлай алмай ыҙаландың», — тип әйткән, ти.

## Ғ

Бур бик тә йәнде көйҙөрһә, нәмәһен урлатҡан кеше бүре тарамышын үртәй. Бур, урындыҡҡа ла ҡалҡып менә алмай, тартырып-тартышып, кәкрәйеп ятып үлә. Ауылдан Нәғимә әбей: «Бейәмде урлаған кешегә бүре тарамышы яҡҡайным, кәкрәйеп ятып үлде. Бейәм ише генә булманы!» — тип маҡтанғайны.

## Д

Бүре тарамышын үртәгәндә әйтелә торған һамаҡ:

Бүре, бүре, бүрекәй,
Бәлә килде башыма.
Үҙең килсе ҡашыма,
Күҙем тулған йәшемә.

Бүре, бүре, бүрекәй!
Атым уғры ҡулында.
Ҡороп ҡатһын юлында,
Шул ҡарғышым уйымда.

Бүре, бүре, бүрекәй!
Табып бирсе уғрыны.
Харап итмә тоғроно —
Бар теләгем шул ине.

Урланған әйбер табылмаһа, беҙҙең ауылдың ете урамының абруйлы ете ҡарсығы бергә йыйылып, бурҙы фаш итеүҙең иң ҡаты сараһын ҡулланырға — бүре тарамышын өтөргә һүҙ ҡуйыша. Шул ҡарар ете ҡарсыҡ ауыҙынан ете урамға тарала. Урлаған кешегә лә барып етә. Урлаған әйберен алып барып бирмәһә, тотоноп өлгөрһә, шул хәбәрҙе ишетеү менән, ауырый башлай. Ә бүре тарамышын өтә башлауға тартышырға, туларға тотона. Бур нығыраҡ ыҙаланһын өсөн, тарамышты ҡапыл ғына өтмәйҙәр, усаҡлыҡҡа киптерергә һөйәлгән утындар эргәһенә ҡуялар. Ул шунда йылыға әкрен-әкрен генә борғолана, тартыша башлай, бурҙың тарамышы ла шулайта.

### Ҙ

Хасланған кешенең телен бәйләр доға:

Лә Илаһи, Илаһи!
Ерҙән күккә!
Лә Илаһи, Илаһи!
Күктән ергә!
Лә Илаһи, Илаһи!
Ғәршедән * күккә!

### Е

Берәйһе һиңә хаслыҡ итергә ҡырын уй уйлап йөрөүен һиҙеп ҡалһаң, шулай тиһең:

— Бисмиллаһи — баш,
Иманым — юлдаш,
Ауыҙың — мөһри *,
Телең — таш!
Телем осона,
Ҡара ҡаҙан к...енә,
Ҡара күнәк к...енә!

## 89. БОҘОМ

Башҡорттар боҙомдоң яман ҡөҙрәтенә ышаналар, унан ныҡ ҡурҡалар. Уларса, боҙом сихырсы ярҙамында берәй дошман тарафынан хаслыҡ өсөн эшләнә. Унда ендәр ҙә ҡатнаша. Сихырсыны ҡорбанына (мал-тыуарға, ғаилә башлығына, уның бала-сағаһына, бисәһенә һ. б.) ендәр һөсләй.

Боҙомдо ҡайтарыу өсөн сихырлап йәшерелгән әйберҙе табыу кәрәк. Боҙомдо тапмайынса, өйгә тыныслыҡ ҡайтмай: йә мал-тыуар зыянлана, йә — эйәһе.



## ТӘБИҒӘТ ДАУАЛАРЫ

### 90. ҮЛӘН ШИФАҺЫ

#### А

Ҡоторған үлән була. Шуны мал ашаһа, ҡотора. Ул үләнде тымыҡ көндә ҡарайҙар: үҙе тымыҡ көндә лә һелкенеп ултыра икән. Ҡотороуҙың башы шунан сыға.

#### Б

Аҡ үләнде эс ауыртыуынан эскәндәр. Эс сәнскеләһә, сәнскәк башлы ҡара үлән эсерәләр. Ҡуҙғалаҡтың тамырын йыуып, ҡырып, киптереп эсерәләр. Дармана (ул тары һымаҡ, әсе була) эсһәң, йылан төшә.

#### В

Һөйәк һыҙлаһа, андыҙ үләненең тамырын алып, бәрәңге менән бергә бешереп, һыҙлаған ергә һалырға кәрәк. «Андыҙ бар ерҙә ат үлмәҫ» — ти бит халыҡ. Андыҙҙы ерҙән алғанда бушлай ғына алмайһың, хәйер итеп, ергә икмәк һыныҕы, тоҙ һалып ҡалдырырға кәрәк.

#### Г

Ашҡаҙан, эсәк ауыртҡанда, өс андыҙ тамырын йыуаһың һәм ҡырып, турап өс литр һыуҙа бер сәғәт ҡайнатаһың. Шул ҡайнаған һыуға ике аш ҡалағы шәкәр һалаһың да бер аҙна төнәтәһең. Шунан көн дә сәй кеүек эсәһең, ашар алдынан да, һуңынан да ярай. Ҡешенең бөтә ғәмәлен таҙарта. Эс, бауыр, бөйөр, баш ауыртыуынан да бик һәйбәт, шеште лә ҡыуа андыҙ һыуы. Ә бешкән

андыҙҙы алып, аяҡ быуынына бәйләп ятһаң, һыҙлау бөтә. Андыҙҙы август айында ун биштәрендә-егермеләрендә йыялар.

Ғ

Аҫҡырһаҡты (аҡһырғаҡ та тиҙәр) эҫе һыуға манып, һыҙлаған урынға баҫалар. Ул үләнде буйға тартылыу дәүерендә генә алырға.

Д

Һуҡыр кесерткән — ашҡаҙан ауырыуынан файҙалы.

Ҙ

Яҫы япраҡлы кесерткәнде «ожмахтан сығыусы үлән» тиҙәр. Малға, ҡошҡа һәйбәт үлән. Уны ҡайнатып, баш ауыртыуынан эсәләр.

Е

Ваҡ кесерткән тире ауырыуынан дауа (хәҙерге экзема тигәндәре инде). Үләнде бешереп ыуалар ҙа тәнгә ябалар.

Ё

Йүкәнең япрағы менән сәскәһе бөйөр менән бауырға килешә. Уларҙы ҡайнатып эсәләр.

Ж

Ҡыҙамыҡтан һуң эс китһә, һөттө йылытып, ҡайын япрағы һалып эсәләр. Ул да килешмәһә, әлморон ҡайнатып эсәләр.

З

Аш үтмәһә, аҡ һөтләкәй, күк һөтләкәй, әлморон, андыҙ үләндәрен бергә йыйып, бал ҡушып эсәләр.

И

Кеше насар ҡандан ауырыһа, башы ауыртһа, бәбәләш үләнен ҡайнатып эсәләр.

Й

Ҡыҙамыҡтан айыу үтен эсергәндәр.

## К

Йүткергәндә ҡыҙыл емеш һыуы эсерәләр. Шунан билсән, дегәнәк үләне һәйбәт була. Уларҙы ҡайнатып эсәләр.

## Ҡ

Теш һыҙлағанда дүрмән үләнен (еҫле үлән), һыуҙа йылытып, ауыҙҙа тоторға кәрәк.

## Л

Шеш сыҡһа, бесәй япрағы ябалар.

## М

Аяҡ һыҙлаһа, әрекмән япрағын, йылы һыуҙа сылатып, һул яғы менән ябырға кәрәк. Ә дегәнәк орлоғон һыҙлауыҡ сыҡҡанда ашайҙар. Беренсе көн — берҙе, икенсе көн — өстө, өсөнсө көн — биште ашайҙар. Орлоҡ таҡ һанында булырға тейеш.

## Н

Аяҡ һыҙлауынан аҡһырғаҡ бик һәйбәт. Уның япрағын ҡайнатып ябалар, һыуын эсәләр.

## Ң

Аяҡ-ҡул һыҙлағанда ҡайын ҡайырын ҡайнатып, шул һыуға инеп яталар

## О

Баш ауыртҡанда дегәнәк япрағын сылатып, башҡа йәйеп һалалар.

## Ө

Күҙ ауырыуынан (йылан ҡарағы тибеҙ) ер еләге япрағы һәйбәт. Уны һыуға еботеп, япраҡтың кире яғы менән ябалар.

## П

Күҙ тейгән балаға күҙле ҡата үләнен һөртөп эсерәләр.

## Р

Тән һыҙлауҙан аҡбаш үләнен ҡайнатып эсәләр.

С

Ирәмән (ирәүән) үләне — бик күп төрлө ауырыуҙан дауа: бигерәк тә ашҡаҙандан, теш һыҙлауҙан. «Ирәмән барҙа, ир үлмәҫ», — тиҙәр.

Ҫ

Мәтрүшкәне баш ауыртҡанда, һалҡын тейгәндә бешереп эсәләр.

Т

Бәләкәй балалар ауырыһа, ылпылдап ултырып, ваҡ ҡысыу менән интекһә, ҡарағат сыбығы ҡайнатып эсерәләр.

У

Ҡатындарҙың имсәге шешһә, мәтрүшкә бешереп ябалар.

Ү

Юл япрағы ҡырҡылған, киҫелгән ергә килешә. Шуға ла уны яра япрағы тип йөрөтәләр.

## 91. РЕВМАТИЗМДЫ ДАУАЛАУ

Аяҡ, ҡул быуындарын дауалау өсөн май айында, үләндең әлегенә сыҡҡан сағында, ете төрлө үлән йыйып, быҡтырып, шуға ултырырға кәрәк. Үләндәр ете төрлөнән дә кәм булмаһын.

Ҡырмыҫҡа иләүенә ултырыу ҙа бик килешә. Бының өсөн ҡырмыҫҡа иләүен тоҡҡа тултырып алып ҡайтаһың да, уны берәй һауытҡа (кәткегә, ялғашҡа, ваннаға) һалып, өҫтөнә ҡайнаған һыу ҡояһың. Ҡырмыҫҡа иләүенең майы өҫкә сыға. Һыу һыуына төшкәс, ике сәғәткә яҡын ултыраһың. Йыуынаһың да бер аҙ баҫырынып ятаһың, тирләп китәһең, ана шуның файҙаһы була.

## 92. МАЙ ҮЛӘНЕ

Май айында ете төрлө үлән ауыҙ итергә кәрәк. Балтырғандан өс тапҡыр аш бешереп эсергә.





# ТЕЛӘКТӘР, ҺЫНАМЫШ, ЫРЫМ ҺӘМ ЮРАУҘАР

## 93. ТЕЛӘККӘ СЫҒЫУ

### А

Ҡоролоҡ башланһа, ҡырға сығып, ямғыр теләгәндәр. Шуны теләккә сығыу тиҙәр. Ауылдың иң өлкән әбейе, өй беренсә йөрөп, ашанты йыя. Халыҡ күмәгеһе уртаҡҡа аҡ кәзә һатып ала. Йылға буйында шуны салалар:

— Ямғыр булып ҡайт!
Ямғыр булып ҡайт!
Ямғыр булып ҡайт! —

тип, салыу ҡанын тирә-яҡҡа һибәләр. Итен бешереп ашайҙар, теләк теләйҙәр:

— Ямғыр яу, яу,
Иген үҫһен тау, тау...

Балаларға әсе итеп һыҙғырып торорға, теләкте ҡабатларға ҡушалар.

Аҙаҡ һыу һибешәләр. Һәр кем көсө еткәнен һыуға һалырға тырыша.

### Б

Теләккә сығырҙан алда йәш балаларҙы — әсәләрснән, ҡолондарҙы — бейәләрҙән, быҙауҙарҙы һыйырҙарҙан айырыр, усаҡ-мейестәге, самауыр утлығындағы ут-ҡуҙҙы һүндерер булғандар. Бар халыҡ ҡырға сығып, кейемен әйләндереп кейә. Ике рәҡәғәт * намаҙ уҡыла. Шунан һуң ҡорбан салғандар ҙа, сығыр ярҙамында ут яңыртып, итте шул утта бешереп ашағандар.

### В

Тау башында теләк уҡығандан һуң, шундағы таштарҙы итәккә тултырып алып төшә, һыуға һала торғайнылар.

1966—1967 йылдарҙа булды был хәл. Әсәйем итәкләп һыуға таш ташып йөрөй ине:

— Һай-һай, тауҙан таш төшөрөп, ямғыр яуҙыра бирәү! — тип көлдөләр. Әсәйем өндәшмәне. Әҙме-күпме үткәйне — биҙрәләп яуырға тотонмаһынмы! Әсәйемдән: «Ямгыр яуҙырырға, һин Хоҙай булдыңмы?!» — тип көләүселәр өнһөҙ ҡалды.

### Г

Ямғыр яумаһа, яуын бутҡаһы йыйыны ҡоралар. Бәләкәй күл янына барып, бутҡа бешереп, сәй ҡайнатып эсәләр, теләк теләйҙәр, бер-береһен һыуға ырғыталар.

## 94. ЯМҒЫР ТЕЛӘҮ ҺАМАҠТАРЫ

### А

Ямғыр, яу, яу, яу,
Тәтәй ҡашыҡ бирермен,
Майлы бутҡа бирермен,
Ямғыр, яу, яу, яу,
Майлы бутҡа — ҡаҙанда,
Тәтәй ҡашыҡ — баҙарҙа,
Ямғырҡайым, яу, яу!

### Б

Яу, яу, ямғырым,
Беҙгә аслыҡ килмәһен,
Һыйырҙарҙа һөт булһын,
Астан халыҡ үлмәһен;
Яу, яу, ямғырым,
Ҡара тәкә һуйырым,
Башын һиңә ҡуйырым,
Түшен үҙем ашармын,
Һөйәген эткә ташлармын!

### В

Ямғыр, яу, ашлыҡ, үҫ,
Иләкләп, биҙрәләп.
Илгә бир, көнгә бир,
Иң күбеһен беҙгә бир!

Г

Ямғырым, яу, яу, яу,
Ҡара тәкә һуйырмын,
Һиңә башын ҡуйырмын,
Түшен үҙем ашармын.
Ингән-сыҡҡан малайҙарға
Эс-ҡарынын бирермен.

Ғ

Яу, ямғыр, яу, яу,
Ал томалап,
Яу йомалап!
Иренмәһәң, иләк менән,
Сикәнмәһәң, силәк менән,
Яу, ямғыр, яу, яу!

Д

Ямғыр, яу, яу, яу,
Ашлыҡ үҫһен тау, тау!
Балалар булһын туҡ,
Күңелдәр көр булһын,
Илдәр имен булһын,
Ерҙәр игендә булһын!

Ҙ

Ямғыр, яу, яу,
Беҙгә аслыҡ килмәһен,
Астан халыҡ үлмәһен,
Ваба кеүек сирҙәрҙе
Һис бер әҙәм күрмәһен!
Яу, яу, ямғырым!
Ташып сыҡһын ярҙарҙан,
Юлаҡ аҡһын юлдарҙан,
Ямғыр, яу, яу!

Е

Яу, яу, ямғырым,
Балыҡ башы бирермен;
Балыҡ башы алмаһаң,
Тәкә башы бирермен;
Тәкә башын алмаһаң,
Балыҡ башы бирермен...

### Ё

Яу, яу, Яуметдин,
Ҡара тәкә һуйырмын;
Башын һиңә ҡуйырмын,
Түшен үҙем алырмын.
Яу, яу, Яуметдин,
Ҡара тәкә һуйырмын,
Башын һиңә ҡуйырмын,
Түшен үҙем алырмын,
Ингән-сыҡҡан балаларға
Туҡ эсәген бирермен.
Яу, яу...

### Ж

Ямғыр яуһа, ергә май,
Ямғыр яуһа, кем дә бай.
Ямғырым, ямғырым,
Яу, яу, ямғырым!
Иген үçһен ишелеп,
Асыҡмаһын кешелек.
Һыйырҙарға һөт төшһөн,
Тәпәндәргә май төшһөн!

### З

Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген үçһен тау, тау,
Арыштан, бойҙайҙан,
Беҙ һорайбыҙ Хоҙайҙан!

### И

Ямғырым, яу, яу,
Иген үçһен тау, тау,
Тәтәй ҡашыҡ — баҙарҙа.
Майлы бутҡа — ҡаҙанда.
Алла табыр, мулла ҡабыр,
Ҡөллө йортҡа теүәл бир.

### Й

Ямғыр апай, яу, яу,
Тәтәй ҡалаҡ — баҙарҙа,
Һөтлө һыйыр — яланда,
Һөтһөҙ һыйыр — аранда,
Ямғыр апай, яу, яу!

К

Сыуаҡ апай, кит, кит,
Һалҡын ағай, кил, кил, —
Һимеҙ һарыҡ һуярмын,
Итен үҙем ашармын,
Һөйәген эткә ташлармын,
Һиңә майын бирермен,
Сыуаҡ апай, кит, кит,
Һалҡын ағай, кил, кил!

Ҡ

Ямғыр апай, яу, яу,
Иген үҫһен тау-тау,
Ҡабыр-ҡабыр ҡабырсаҡ,
Ҡабырсаҡ төбө кимерсәк,
Ашлыҡтар сәселгән саҡ.

Л

Ямғыр, яу, яу!
Әй, илаһым, яу, яу,
Күк инәһе — күк яулыҡ,
Ер атаһы — ерән һаҡал,
Туҡлыҡтар бирһен Хоҙай.
Мал-тыуарҙар имен булһын,
Ямғыр, яу, яу!
Беҙ йәшәрбеҙ һау, һау... —

Шулай тип әйтә-әйтә, яҡындағы күпергә йәки баҫмаға ҡырҡ күнәк һыу ҡоялар.

М

Яу, ямғыр,
Яу, ямғыр!
Ерҙең һыуһынын ҡандыр,
Байҙың йөрәген яндыр!
Яу, ямғыр,
Яу, ямғыр!
Иләкләп,
Силәкләп,
Ҡаҙанлап,
Мискәләп!

Н

Бағым, баҡ,
Сыуағым, яҡ!

Бағым, баҡ,
Сыуағым, яҡ!
Ямғырым, яу,
Ашым, уң!

О

Ямғыр, яу, яу!
Майлы бутҡа бирербеҙ.
Майлы бутҡа бирербеҙ ҙә
Ерҙе гөлгә төрөрбөҙ,
Һыу сәсрәтеп, ер тетрәтеп,
Яуғаныңды көтөрбөҙ!
Ямғыр, яу, яу!

### 95. СУҠ БӘЙЛӘҮ, ТӘҢКӘ ҺАЛЫУ, ДОҒА ЯҘЫУ

А

Ямғыр теләп теләк әйткәндә, ағас ботаҡтарына суҡ бәйләйҙәр, ҡиблаға ҡаршы ағып сыҡҡан йылғаға тәңкә һалалар. Тәңкәләргә тейерға ярамаған. Тәңкәле йылғаның (шишмәнең) һыуын сирлеләргә эсергәндәр.

Б

Бер ҙә яумай китһә, туҫтаҡҡа (тәрилкәгә) доға яҙып, бағана башына ултырталар, шуға һыу һалаһың. Шулайтһаң, ямғыр яуа торғайны.

### 96. ҺЫУҒА ҠАҘАН ҺАЛЫУ

Ямғыр яуҙырыу өсөн, берәй кешенең ҡаҙанын «урлап» һыуға түңкәреү йолаһы ла булған. Ямғыр яуғас ҡына, «урландыҡ»ты эйәһенә ҡайтарып биргәндәр.

### 97. ҠӘБЕРГӘ ҺЫУ ҠОЙОУ, ЯҢҒЫҘ ТИРӘККӘ ҺЫУ ҺИБЕҮ

А

Аҫылынып үлгән кешенең ҡәбере өҫтөнә һыу ҡойоу ҙа ямғыр яуҙыра тип белгәндәр. Сөнки ул кеше, үлер саҡта ауыҙына һыу тамыҙыусы булмағас, бөтә ямғыр болотон йотоп ята, имеш.

Б

Ҡоролоҡ булһа, эсеп, уйнаш итеп йөрөп үлгәндәрҙең ҡәберенә

һыу ҡоя инек. Уларҙы зыяратҡа күмдермәнеләр, һаҙлыҡҡа күмделәр элгәре.

### В

Ямғыр яумаһа, яңғыҙ тирәккә һыу һибәләр.

### 98. ТӘЛМӘРЙЕН «АРҠАНЛАУ»

Йәнә, тәлмәрйенде тотоп ағасҡа бәйләү ҙә ямғыр яуыуға сәбәп була, тигәндәр. Сөнки тәлмәрйен ҡороға сыҡһа, ямғыр яуа.

### 99. ЙӘЙ ТАШЫ

Ҡоролоҡ оҙаҡҡа һуҙылһа, ямғырҙы «Йәй ташы» ярҙамында яуҙырып була, ти торғайнылар.

Беҙгә күрше «Ленинизм» колхозының Һирәктәл тигән яланында ике таш ята. Халыҡ уларҙың береһен «инә» таш, икенсеһен «ата» таш тир ине (ата ташы ҙурыраҡ). Шул ике ташты «Йәй ташы» тип йөрөттөләр. Борон, әгәр ямғыр яумай башлаһа, кешеләр күмәкләшеп ошо таштарҙы йыуып китер булған. Шунан ямғыр яуырға тотонор ине. Ә инде яуын оҙаҡҡараҡ һуҙылһа, ике «Йәй ташы»н да майлап китерҙәр ине. Шунан аҙаҡ аяҙыта торғайны.

### 100. ИЗГЕ ТАШТАР

### А

Ассы ауылынан алыҫ түгел бер «Йәй ташы» бар ине. Уны Ҡолоҡай * таш тип йөрөттөләр. Өҫтәл бейеклеге самаһындағы был таштың, ҡолон башын хәтерләтеп, сосайып торған өлөшө бар ине. Аҙаҡ ул һынып төшкән. Был ташты борон-борондан, имән бағаналар ултыртып, кәртәләп ҡуйғандар. Шул ташҡа һуҡһаң, ямғыр яуыр булған. 1961 йылда мин быға үҙем дә шаһит булдым. Район газетаһында Вахрушевтың «Юрмаш таштары» тигән мәҡәләһе сыҡҡайны. Шуны уҡығас беҙҙе, Инйәр урта мәктәбе уҡыусыларын Шакир Зөбәйеров тигән география уҡытыусыһы Ҡолоҡай ташына алып барҙы. Ассынан Юныс бабай юл башлаусы булды. Беҙҙе ташҡа яҡын ебәрмәнеләр. Сөнки яҡын барған, уға һуҡҡан кеше ауырый, ти торғайнылар. Шулай ҙа аҙаҡ беҙ таяҡ, таш, һалдат ҡайышының ҡаптырмаһы менән һуғып, әҙерәк ташын ырғытып алдыҡ. Июнь айының түҙеп торғоһоҙ бер аяҙ көнө ине. Сәғәт киске алтыларҙа һуҡҡайныҡ. Оҙаҡламай болоттар сыға башланы. Төнөн яуҙы. Иртәгәһенә Инйәргә ҡайтып еткәнсе яуҙы. Ямғыры ла ғәҙәттәге ямғыр булманы, ваҡ ҡына, томан кеүек кенә ямғыр ине.

Ямғырҙы туҡтатыу өсөн ҡарттар, халыҡтан май йыйып алып, Ҡолоҡай ташты майлар булған, ти.

Б

Иҫке Сибай ауылы яғындағы Бабай тауында Өләсәйташ тип йөрөтөлгән таш бар. Ул, кешегә оҡшатып, таштан юнып эшләнгән һын ине. Еләккә барғанда, әбейҙәр уның янында доға уҡып, ауыҙына еләк ҡаптырып, теләк теләп китә торғайнылар.

## 101. ЯҘАТАШ

Һуйыр, ҡор, ҡарағош кеүек ҡыр ҡоштарының бөрләтәүенән сыҡҡан шыма таштарҙы яҙаташ тиҙәр. Шул таштарҙы таҙартҡансы йыуып, ҡоротҡансы һөртөп, аҡ сепрәккә төрөп, көн төшмәҫ ергә ҡуйып, өйҙә һаҡлайҙар. Ҡоролоҡ башланһа ғына, уны ҡулға алғандар. Алып, көн яҡтыһына сығарып, сепрәген сисеп, таш өҫтөнә һалғандар ҙа яҙаташҡа һыу ҡойғандар. Шулай итһәң, ямғыр яуыр булған.

## 102. АЯҘ ТЕЛӘҮ

А

Көн оҙаҡ яуынлап китһә, аяҙ теләйҙәр. Аяҙға (ҡояшҡа) бағышлап, ҡалҡыу ерҙә аҡ мал салалар. Ике рәкәғәҙ намаҙ уҡыйҙар, тәкбир әйтәләр. Йәштәр икенсе урында уйнай, күңел аса.

Б

Балалар йәй көнө һыу инә барғанда йәки уйнап йөрөгән ваҡыттарында ҡояшты болот ҡаплаһа һәм һалҡын булһа, ҡояшты болот аҫтынан сығарыу өсөн шулай һамаҡ әйтә:

Ҡояш апай, кил, кил,
Һалҡын ағай, кит, кит!
Ҡояш апай, кил, кил,
Һалҡын ағай, кит, кит!

В

Әбей ҡояшы, сыҡ, сыҡ,
Бабай ҡояшы, ҡас, ҡас!
Ҡара ҡаҙан аҫырмын,
Һимеҙ тәкә һуйырмын,
Майлы бутҡа бешереп,
Һинең алға ҡуйырмын,
Итен үҙем ашармын да
Һөйәген эткә ташлармын!

Г

Эт ҡояшы, ары кит,
Беҙҙең ҡояш, бире кил!
Балҡ, балҡ, ҡояшым!
Ҡара тәкә һуяйым,
Башын һиңә ҡуяйым,
Түшен үҙем ейәйем *.

Ғ

Көн сыуағы, сыҡ, сыҡ!
Майлы ҡашыҡ бирермен,
Һимеҙ һыйыр һуйырмын,
Майын һиңә ҡуйырмын,
Итен үҙем ҡурырмын.
Ҡыуанышып йөрөрбөҙ...
Көн сыуағы, сыҡ, сыҡ!
Эт сыуағы, кит, кит!
Майлы ҡашыҡ юҡ һиңә,
Һимеҙ һыйыр юҡ өйҙә,
Майы һиңә яҙмаған,
Ите миңә булмаған,
Болот уны урлаған
Эт сыуағы, кит, кит!..

Д

Ҡара кәпәс, кит, кит,
Ҡояш апай, кил, кил,
Бер йылмайып көл, көл!

Ҙ

Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Атаң-әсәң килгән.
Һыуыҡ ағай, кит, кит,
Атаң-әсәң үлгән.

Е

Сыуаҡ апай, кил, кил,
Һалҡын еҙнәй, кит, кит!

Ё

Ҡояш апай, Ҡояш апай,
Ҡапҡаңды ас, кейәүең килде!

## Ж

Боҙло ямғырҙы туҡтатыу өсөн, урамға тол ҡатындарҙы, баш баланы (уны тоңһоҙ бала тиҙәр) урамға сығаралар. Улар өсәр бөртөк боҙ ҡабып кире инергә тейеш.

Боҙло ямғыр яуғанда ҡыҫҡыс, йәмке, тәртешкә сығарып ташлау ырымы ла бар.

## З

Ныҡ йәшенләһә, йәшенде тартһын тип, торомбаш сығарып ырғыталар. Шәп ямғыр яуғанда йомортҡа тәгәрәтһәң, һөт түкһәң, йәшен тыма.

Күктә ялт-йолт иткән нәмә — күк һаҡсыһы. Ул көҙөп кешеләргә ашлыҡты бешереп бирә. Ялт-йолт һаҡсы — йәшендең иптәше. Ул гел йәшен менән бергә йөрөй. Ялт итә лә болотҡа инеп китә. Йәшен һаҡсыһы булған Ялт-йолт салт аяҙ көндө лә күренгеләй.

## ТӘБИҒӘТКӘ, КҮК ЕСЕМДӘРЕНӘ БӘЙЛЕ ЮРАУҘАР, ТЕЛӘКТӘР

### 103. СУЛПАН ЙОНДОҘО ЮҒАЛЬА

Сулпан йондоҙо — ул иң яҡты йондоҙ. Афәт сығыр булһа, был йондоҙ юғалып торор, ти. Үткән Ярман һуғышында ла, быныһында ла Сулпан йондоҙ ғәйеп булып торған, имеш. Бөйөк Ватан һуғышынан алда ул бер йыл әүәл үк юғалып торған да, немецтарҙы еңгәс, яңынан ҡалҡҡан.

### 104. ҠОЙРОҠЛО ЙОНДОҘ КҮРЕНЬӘ

Ҡайһы саҡта күктә Ҡойроҡло йондоҙ күренә. Ул ҡайһы яҡта күренһә, шул яҡтан һуғыш ҡалҡа, ти. 1941 йылда Ҡойроҡло йондоҙҙо беҙҙең ауылда ҡояш байышындағы Арҡыры тау башында күргәндәр.

### 105. ҺАҘАҒАЙ УЙНАЬА

Һаҙағай уйнаһа, күк йөҙө яҡтырып, ҡыҙарып тора. Кешеләр: «Ҡан тарта, һуғыш сыға», — ти. 1941 йылда һуғыш сығыр алдынан һаҙағай бик яман уйнағанын күргәндәр.

### 106. ҠӘҘЕР ТӨНӨ

А

Ҡибла яҡтан күк ярылып, яҡтырып китә. Ундай төндә аяҡ аҫтында ятҡан энә лә күренә.

Ҡәҙер төнө асылыуын һәр кем күрмәй. Ярыш ултырып та аранан берәү генә күрергә мөмкин. Бер саҡ шулай булды: төн уртаһы ине. Фәриҙә менән мин күрҙем, эргәбеҙҙәге Ҡамила еңгәм күрмәне.

Ҡәҙер төнө асылғанда ни теләһәң, шул алдыңа килер, ти.

Хәмит олатайым ауылдан Серәкәй ҡыштауына китеп барғанда Түбәлейортҡа еткән икән, ҡапыл ҡәҙер төнө асылған. Ҡарт: «Эй Илаһым, миңә ошо ерҙә үлем бир», — тигән, ти. Икенсе йылына шул ерҙә үлгән, бахыр.

Ҡәҙер төнө асылғанда теләһә ни теләргә ярамай. Уйлап әйтергә кәрәк әйтерендә. Бер ҡатын ямау яҫҡанып ултырғанда, ҡәҙер төнө асылып киткән, ти. Шунан ул уйлап-нитеп тормаған: «Эй Хоҙайым, бөтә тишек-тошоғомдо бөтәштер», — тигән икән, Хоҙаның ҡөҙрәте менән үҙенеке бөтәшкән дә ҡуйған, ти.

Ҡәҙер төнө асылғанда шулай тип әйтәләр:

— Эй, Илаһым, донъялыҡта донъя байлығы бир,
Бөтмәҫ, китмәҫ һаулыҡ бир,
Әхирәттә иман нуры бир,
Ожмахтан урын бир.

Б

Ҡәҙер төнө асылыуы — ете төн уртаһында күк ҡабағы асылып китеүе. Ҡәҙер төнө асылғанда, ерҙә ятҡан энә лә күренә, ти. Ҡәҙер төнө асылғанда, күк ярылып китә лә, ти, ожмах күренә, ти.

Әхирәттә иман бир,
Донъялыҡта ғүмер бир,
Ғүмер бир ҙә тәүфиҡ бир, —

тип теләк теләргә, ти.

Ҡәҙер төнө бәхетле кешегә генә асыла. Һиңә асылһа, мин күрмәйем. Уның бына шундай хикмәте лә бар.

Шаһбан айының * берендә асыла. Шул кистә, Ҡәҙер кисе һаҡлайбыҙ, ти торғайнылар. Боронғо әбейҙәр Ҡәҙер төнөн көтөп, намаҙ уҡып ултырғандар.

## 107. УРАҘА АЙЫНЫҢ УН ДҮРТЕ

Ураҙа айының ун дүртендә, ун бишендә айлы төндә тышҡа сығып күләгәне ҡарарға була. Күләгәлә баш булмаһа, шул кеше оҙаҡламай үлә. Иҙелбайҙа бер әбей башһыҙ күләгәһен күргән. Көнбағыш һатып ҡайтып килгәндә, әжәлен тапҡан. Беләүтамаҡтан Йәнбикә тигән әбейҙең ун биш йәшлек ҡыҙы төнөн тышҡа сыҡҡан да илап килеп ингән. Ул да күләгәһендә башын күрмәгән. Яурыны бар — башы юҡ, ти. Үлгән.

## 108. ЯҢЫ ТЫУҒАН АЙҘЫ КҮРГӘНДӘ ӘЙТЕЛӘ ТОРҒАН ҺАМАҠТАР

А

Ай күрҙем аман менән,
Ауыҙым тулы иман менән.

Ошо айҙа вафат булһам,
Үткәр, Хоҙай, иман менән.

**Б**

Ай күрҙем иман менән,
Күҙем тулы нур менән,
Ҡәртәм тулы мал менән,
Башым тулы ғилем менән,
Иман менән, белем менән,
Айға — баш, миңә — йәш.

**В**

Ай тыуа эҙе менән,
Йылмайған йөҙө менән,
Алтын таяғы менән,
Алтын табаны менән,
Ҡыйғас ҡашы менән,
Ҡара күҙе менән,
Китер эҙе менән.

**Г**

Ай күрҙем аман менән,
Ҡуйыным тулы Ҡөрьән менән,
Бала-сағаларым менән,
Ҡәртәм тулы мал менән,
Ошо айҙа вафат булһам,
Ҡәберем тулһын иман менән!
Ошо айҙа үлеп китһәм,
Иман бирһен бер Алла!

**Ғ**

Ай ҙа ҡайтты, көн дә ҡайтты,
Яман ҡаҫта *, һин дә ҡайт.
Һинең килеүең яңы,
Минең күреүем яңы.

**Д**

Изге айым, изелҡа,
Яңы айым, ярлыҡа!
Әхирәттә — иман менән,
Донъялыҡта — мал менән!

## 109. КҮК КИЛГӘНДӘ

### А

Яҙын беренсе күк күкрәүен күк килеү[*] тиҙәр. Күк килгәндә ҡороҡ менән ергә һуғаһың, йүгән алып, шылтырата-шылтырата күккә ҡарап болғайһың-болғайһың да ергә һуғаһың. Шулай һуға-һуға, өй, тирмә, аласыҡтарҙы уратып сығаһың, үҙең шулай тип һамаҡлап йөрөйһөң:

— Ҡорайт, күгем,
Ҡорайт, күгем!
Ергә бир, илгә бир,
Мал-тыуарға бир,
Ҡош-ҡортҡа бир,
Бала-сағаға бир,
Етем-йеһергә бир,
Тол ҡатындарға бир,
Ҡарт-ҡорога бир,
Зәғифтәргә бир,
Ауырыуҙарға бир,
Артҡанын миңә бир!

Мин бәләкәй саҡта Ҡорбанбикә, Бибиғәйшә инәйҙәр күкте шулай тип ҡаршылай торғайнылар.

### Б

Йәшен йәшнәп күк килгәндә, шулай тип теләк теләй торғайнылар:

— Афәттәр менән килмәһен,
Рәхмәттәр менән килһен!
Йәшенләһә — ут була,
Ен-шайтандар юҡ була.
Ямғыр яуһа — мал була,
Емеш-еләк мул була.
Яу, яу, ямғырым!
Нурлан, нурлан, йәйгором!*

### В

Афәттәр менән килмәһен,
Рәхмәттәр менән килһен!
Собханалла, халиҡа нура,
Ямғыр яуһа, мал була.

### Г

Ҡорайт, ҡорайт!
Уралдан кил, Уралдан кил!

Уралдан килһәң,
Һыйыр һөтлө булыр.
Ҡорайт! Ҡорайт!
Яландан кил!
Бейә һөтлө булыр!

## Ғ

Күк килгәндә өләсәй бахыр йүгән тотоп, шуның ауыҙлығын шылтыратып, өй эсен бер итеп йөрөй торғайны. Үҙе шулай тип һамаҡлаған булыр ине:

— Ерҙән ерән айғыр бир,
Күктән күк айғыр бир!
Ерҙән ерән айгыр бир!
Күктән күк айғыр бир!
Ерҙән ерән айғыр бир,
Күктән күк айғыр бир!
Ҡорайт! Ҡорайт! Ҡорайт!

## Д

Доға уҡып ҡаршылайҙар беренсе күк күкрәүен һәм:

— Ҡорайт, ҡорайт!
Эй Раббым, Хоҙайым,
Эй Аллаһы тәғәләм,
Һиңә ҡарап һығынам:
Ярҙамыңдан ташлама,
Ҡазаларҙан һаҡлай күр,
Ҡош-ҡорт, бәндәләреңде,
Үҫер үҫемлегеңде
Ырыҫыңдан ҡалдырма,
Бөтәһен дә туған ҡыл,
Бәндәләрҙе аҙҙырма! —

тип һамаҡ һамаҡлайһың. Ҡыңғырау шалтыратаһың, йүгән, ҡороҡ ҡолторатаһың.

## Ҙ

Яҙғыһын беренсе тапҡыр күк күкрәгәнде көтөп йөрөргә кәрәк. Күк килеүен ишетеү менән, ҡайҙа торһаң, шунда ятып тәгәрәргә. Шулай итһәң, билдең ауыртыуы бөтә, имеш.
Тәгәрәгәндә шулай тиҙәр:

— Дөбөрҙәп китһен,
Имәндәй ныҡ булһын!
Билем, билем-билемәс,
Сирем-сором, сығып ҡас!

Б

Күк күкрәп, йәшен йәшнәгәндә, зыян килтермәһен өсөн, шулай тип теләк әйткәндәр:

— Ялт-йолт итте,
Ялмап китте,
Бында теймәне,
Үтеп китте;
Ялт ит, йолт ит,
Юлың ана бара,
Үтеп кит, үтеп кит!

Был теләкте «Йәшен теле» тип тә йөрөтәләр.

Йәшен атып, ут сыҡһа, уны аҡ (һөт, ҡатыҡ) һибеп кенә һүндерәләр. Үрт сыҡһа, «Ялҡын теле» тип йөрөтөлгән теләк әйтелә:

— Яҡын килмә,
Ялмайым, тимә.
Ялҡынға — һалҡын,
Өст, өст, фиү!

### 110. ҠОЙОН УЙНАҒАНДА

Ҡойон уйнаһа, доға уҡып тороп:

— Тфү, мәлғүн! Килгән ереңә кит!
Тфү, тфү! Таҙҙың өйөнә кит! —

тиһең.

Ҡойондо, убыр ҡарсығы тип, уға бысаҡ, балта, күсәк һелтәйҙәр. Ҡарый (кейәүһеҙ ҡартайған) ҡыҙ кесәү ташлай. Шунан ҡойон баҫыла, боҙло ямғыр тыма, ти.

Б

Тфү, тфү, тфү!
Ҡара йылан ҡамсыһы! —

Дауыл сыҡһа, шулай өс тапҡыр төкөрөргә. Дауыл (ҡойон) эсендә ҡалырға ярамай.

### 111. ЛӘЙСӘН ЯУҒАНДА

А

Беренсе яҙғы ямғырҙы ләйсән ямғыры тибеҙ. Ләйсән аҫтында ялан баш тороп:

— Эй Аллам, эй, Тәғәләм,
Хәйерҙәрең менән!

Дәүләттәрең менән!
Бәхеттәрең менән!
Бәлә-ҡазаң булмаһын,
Ер ефеттәре менән килгән ямғыр бул, —

тиһең. Боронғолар әйткән бит:

— Ут ефете — ел менән,
Ер ефете — ямғыр менән,
Ҡатын ефете — ир менән.

Йәшен йәшенләгәндә лә ошо һүҙҙәрҙе һамаҡлайҙар, мәскәй осҡанда ла. Шуға өҫтән доға ла уҡыйһың.

Беҙ бәләкәй саҡта: «Башығыҙ ауырымай, тиҙерәк үҫерһегеҙ», — тип, ялан баш шул ләйсән ямғыры аҫтында торорға ҡуша торғайнылар.

## 112. ЙӘЙҒОРОН

Ямғырҙан һуң йәйгор төшһә, көн аяҙый. Йәйғорондо аша сыҡҡан малай — ҡыҙға, ҡыҙ малайға әйләнә, ти.

## 113. КӘКҮК КИЛЕҮЕ

### А

Тәүге кәкүк тауышын уң ҡолаҡ менән ишетһәң, гел яҡшылыҡ ишетәһең, һулы менән — насарлыҡты.

Ҡәкүктең тәүге ҡысҡырыуын ишеткәндә салҡатан ҡолайһың да уҫлап алаһың. Усыңа ни эләкһә, был йылда шул алдыңа килә була: үлән сыҡһа — яҡшылыҡҡа, йөн сыҡһа — мал үрсей, ризыҡ сыҡһа — ашлыҡ уңа, тупраҡ сыҡһа — үлем була...

### Б

Ҡәкүктең тәүге ҡысҡырыуын ишеткәндә, ҡайһы ҡолаҡ менән ишетеүгә ҡарап, төрләсә юрайҙар. Әгәр кеше уң ҡолағы менән ишетһә — килешә. Тауыш арттан ишетелһә, кеше һөйләй йә ғүмерең ҡыҫҡа була.

Ҡәкүк тауышын ишеткәс тә, тауыш килгән яҡҡа ҡарап, өс таңҡыр тәгәрәргә кәрәк. Һәр осраҡта ла шулай итһәң, килешә.

### В

Ҡәкүктең тәүге тауышын ишеткәндә:

— Тәнемдең һаулығын бир,
Йәнемдең һаулығын бир.

Тәнемдең зәкәтен бир,
Илдең именлеген бир,
Күпте күрҙем. Алда ла
Тағы күпте күрергә,
Насип булһын күрергә, —

тип, ҡайҙа торһаң — шунда, ҡайҙа ҡарап торһаң — шул яҡҡа ҡолап, тәгәрәп китеп, услап тупраҡ алырға. Шул тупраҡ бөтә рәнйеүҙәрҙән дә килешә. Уны тупһа аҫтына һалһаң, төрлө бәлә-ҡазанан һаҡлай.

### Г

Кәкүк япраҡтан алда килһә, күктән *алда ҡысҡырһа, йыл насар килә.

Кәкүктән алда тәүге күк күкрәһә, йыл яҡшы була. Күк күкрәгәндә, ер һелкенеп, балсыҡ таралып, үҫемлек үҫеүгә уңай була. Ундай йылда игә ырыҫ килә.

### Ғ

Башлап саҡырған сағында кәкүк япраҡ ярмаған ағасҡа ултырһа, йыл ауыр килә. Йәшел ағасҡа ултырһа, йыл матур килә.

### Д

Тәү башлап ҡысҡырғанда кәкүк агастың аҫҡы ботағына ултырһа, йыш һәм оҙаҡ саҡырһа, ул тиҙ һаҡауланмай. Шул йылды ямғыр мул була. Инде лә кәкүк, башлап ҡысҡырғанында, ағастың иң өҫкө ботағына ултырһа, ул тиҙ һаҡаулана — йәй аяҙ була.

## 114. ЗЫРҠЫУЫТ КИЛҺӘ

Зырҡыуыт тигән ҡош бар. Уның башында бер мөгөҙгенәһе була. Үҙе һаҙҙа йәшәй. Шул ҡош тураһында:

— Зырҡыуыт килмәй, йәй етмәй,
Зырҡыуыт китмәй, көҙ етмәй, —

тиҙәр беҙҙә. Ул ҡош: «Зырҡыуыт! Зырҡыуыт!» — тип ҡысҡыра.

## 115. ТОРНА КИЛЕҮЕ

### А

Торна яҙын бик һауалап ҡысҡырып килһә, уңыш йоҡараҡ була. Түбәндән ҡысҡырып килһә — дан * була.

Торна — изге ҡош. Уны йәберләргә ярамай.

Б

«Торна килһә, тором юҡ» тиҙәр. Хаҡ һүҙ. Ала ҡарға килһә, ҡар оҙаҡ ятмай. Торна бик ауалап * килһә, йыл ҡыуан * була.

Сыңрау торна уйнағанда, башлығы уртала уйнай.

«Сыңғырауыҡ торна уйнағанда,
Ҡурайсыһы була уртала.
Ҡесе лә улың кем, тип һораһағыҙ,
Исемдәре булыр Мортаза». —

Беҙҙең ауыл Мортаза Хоҙайбиргәновтың атаһы фронттан ебәргән хатында шулай тип яҙған.

### 116. ҺАБАНТУРҒАЙ УЙНАҺА

Баҫыу өҫтөндә һабантурғай уйнаһа — муллыҡҡа: ашлыҡ уңа. Һабан һөргәндә, иген урып, ашлыҡ һуҡҡанда һабантурғай һайраһа, эш уңайға була.

Борон ярлы ғына бер кеше ырҙынға ашлыҡ һуғырға бара. Яңғыҙы яңғыҙ ат менән тапатҡан була ла әйләндерә, әйләндергән була ла тапатҡан була, ти. Игене төшмәй, ти. Шунда бер ҡыуаҡ булып, шуға бер һабантурғай ҡунған. Был әҙәмдең ыҙаланыуҙарын ҡарап-ҡарап торған да, телгә килеп, былай тигән, ти:

— Эшлә генә, әҙәм, тырышып эшлә,
Елгә китмәҫ көсөң, аңлаһаң.
Балаларың булһа, уҡыт һабаҡ,
Уҡыт ныҡлап, һүҙем тыңлаһаң.
Мин дә, һинең кеүек, моңло бер йән,
Балаларым уйлап һайраймын, —

тигән дә, ти, былай тип өҫтәп ҡуйған, ти:

— Һайрай-һайрай көйҙәр сығарамын,
Дөрөҫ уйҙы шунда һайлаймын.

Теге ярлы, эшен ҡуйып тороп, һабантурғайын тыңлап торған-торған да:

— Һайра әле, турғай, моңло турғай,
Һин һайраһаң, миңә эш уңай.
Ямғыр телә, турғай, уңһын иген,
Ырҙын тулып, халыҡ булһын бай! —

тип әйткән, ти.

## 117. ФУМПЫЛДАҠ, БҮҘӘНӘ, ҺАНДУҒАС ҺӘМ АҠ СӘПСЕККӘ БӘЙЛЕ ЫРЫМДАР

### А

Фумпылдаҡты урыҫтар феп тиҙәр. Ул, күтергә башын тығып, иртәле-кисле генә ҡысҡыра. Фумпылдаҡ ашлыҡтың быуыны һа-йын бер ҡысҡыра. Дүрт ҡысҡырһа, ашлыҡ уңмай: һабағы дүрт кенә быуын була. Өҙөп-өҙөп күберәк ҡысҡырһа, килешә: ашлыҡ уңа — ул күп быуынлы, оҙон һабаҡлы була.

Фумпылдаҡтың ите хәрәм, уны ашамайҙар. Таҙ ҡашҡалаҡ, торна, аҡҡош, сарҙаҡ (аҡ сарҙаҡ) кеүек ҡоштарҙың да ите хә-рәм.

### Б

Бүҙәнә ҡысҡырһа, атай тыңлай торғайны. Тыңлай-тыңлай ҙа:

— Биш ҡысҡырһа, әүендән — биш бот, алты ҡысҡырһа, әүен-дән — алты бот, ете ҡысҡырһа, әүендән — ете бот, — ти торғай-ны. Бүҙәнә әҙ ҡысҡырһа:

— Әҙ ҡысҡырҙы, әүендән ике боттан үтмәҫ, — ти торғайны. Бүҙәнә әҙ ҡысҡырған йылды башаҡтың башы ҡыҫҡа, иген тө-шөмһөҙ була.

### В

Һандуғас ҡунып һайраған ботаҡты һындырып алып икенсе кешене һуҡһаң, һуғылыусы тәҡәт итә алмай һуғыусыны күрергә теләй. Уны ярата ла ҡуя. Бер ҡатын: «Саматты мин һандуғас сы-быҒы менән ҡараттым бит ул», — ти торғайны.

### Г

Һандуғастың ояһына теймәҫкә. Тейгән кешегә зыян булмай ҡуймай. Бер мәлде беҙҙең лапаҫҡа һандуғас ояланы. Биш бөртөк йомортҡа һалды. Түше һары, ҡанаты ҡара ине. Илһам улым тәрбиәләне. Һандуғас беҙгә шул хәтлем өйрәнде, янында торһаң да, осмай торғайны. Икенсе бер малай ғына эште боҙҙо. Бер көн-дө, тыйыуһыҙлығына барып, һандуғастың ояһын алған да кит-кән. Теге бахыр йомортҡаларын таба алмағас, өҙҙөрөп-өҙҙөрөп һайраны. Бер генә йомортҡаны баҫып ултырған булды. Ә йоморт-ҡаларын алған малайҙың атаһы үлде.

### Ғ

Аҡ сәпсек ҡойроғо менән боҙға һуҡһа, оҙаҡламай боҙ китә. Һаҙый тигән ҡарт: «Ана, аҡ сәпсек килгән. Туҡһан бот батманы менән боҙҙо һуғырға килгән. Боҙ тотмаҫ», — тип көлгән була тор-ғайны.

## 118. ҠАРҒА ҠАРҠЫЛДАҒАНДА

Миңә — хәбәрең,
Муллаға — эскерең,
Үҙең — ҡиблаға,
Ауыҙыңа бал да май,
Туйынмаһаң, һары май!
Аллаға шөкөр,
Аллаға шөкөр!

## 119. ҠОҘҒОН ҠОРҠОЛДАҒАНДА

### А

Ҡоҙғон ҡысҡырһа, сәбәләнеп ҡыуырға, уға һалмауыр һелтәргә ярамай. Ул — изге ҡош. Үҙе үк: «Ҡолоң! Ҡолоң!» — тип ҡысҡыра, ти. Кеше ҡоло була инде.

Әй, собханалла, ҡошҡайым,
Изге ҡошҡайым,
Хәйерле хәбәргә,
Шатлыҡлы хәбәргә,
Үҙең — ҡиблаға,
Һүҙең — Хоҙайға,
Ауыҙыңа — һары май,
Изге ҡошҡайым! —

тип әйтергә кәрәк.

### Б

Ҡоҙғон ҡысҡырһа, өс тапҡыр шулай тиҙәр:

— Ҡоҙғон, ҡоҙғон,
Тамағыңа таш торһон!

## 120. ҺАЙЫҪҠАН ШИҠЫРЫҠЛАҺА

### А

Һайыҫҡан шиҡырыҡлаһа, ҡунаҡ килә, тиҙәр. Ҡәртә-ҡура тирәһенә килеп шиҡырыҡлай башлаһа:

— Изгелеккә шиҡырыҡла, изгелеккә!
Изгелеккә шиҡырыҡлаһаң, ауыҙыңа — һары май.
Яманлыҡҡа шиҡырыҡлаһаң,
Яурыныңа — уҡ,
Ауыҙыңа — б...ҡ, —

тип һамаҡлайҙар.

### Б

Һайыҫҡан талпынып-талпынып, өйөрөлөп-өйөрөлөп шиҡырыҡлаһа, изгелеккә юрайҙар. Буштан-бушҡа шиҡырыҡлаһа — яман һүҙ ишетеүгә:

Изгегә шиҡырыҡла,
Изгегә шиҡырыҡла —
Ем һалам!
Яманға шиҡырыҡлама,
Яманға шиҡырыҡлама —
Йәнеңде алам!
Бер яҫау һиңә!
Шул етәр һиңә!

## 121. ЙЫЛАН МӨГӨҘӨ

### А

Йылан мөгөҙөн тапһаң, һине һис бер кеше күрмәй. Ҡапҡаһынан малын сығарып ебәрәһең, эйәһе малын күрә, һине бар тип тә белмәй.

### Б

Йылан күрһәң, алдына сығып, ап-аҡ яулыҡ йә ашъяулыҡябырға, ти. Бәхетле кешегә йылан мөгөҙөн һалып китә була. Шул мөгөҙҙө аҡ сепрәккә төрөп, өй йәки ҡура егенә ҡыҫтырып ҡуйһаң, бермә-бер ырыҫ арта, ти.

Табында һый өҫтө-өҫтөнә өҫтәлеп торһа, ҡунаҡтар: «Хужаның мөлкәтенә йылан мөгөҙө ингәндер был!» — тип мәрәкәләй.

## 122. ҠЫРМЫҪҠА МАЙЫ

Ҡырмыҫҡа майы ла ырыҫ килтерә. Уға ла бәхетле кеше генә юлыға.

Ҡырмыҫҡа майы иләү өҫтөндә күперепе ята, ти. Тапҡан кеше уны алып ҡайтып, үҙенең бала-сағаһының тәнен, мал-тыуарының ҡолаҡ, мөгөҙ тирәләрен майлай.

## 123. САБЫЙЛЫ ЙОРТҠА САБЫЙ МЕНӘН КИЛГӘНДӘ

Өйҙә теле асылмаған бала булһа, шул уҡ өйгә икенсе ҡатын сабый бала менән килһә, ике баланы ла тышҡа алып сығырға кәрәк. Шунан ике баланы ике ҡатын ҡулдарына ала ла ишектән бер юлы инә. Шулай итмәһәң, шул ике сабыйҙың береһе тормай, үлә, тигәндәр.

## 128. ҠАУЫШЫУҘЫ ЮРАУ

Яратышып йөрөгән егет менән ҡыҙ, әгәр оҙаҡ ваҡытҡа айырылышып торорға тура килһә, урманға барып, йәнәш кенә үҫкән йәш кенә ике сауҡаны ишеп китер булған. Ишелгән сауҡа тағатылмай үҫеп китһә — ҡауышыуға, тип юрағандар.

Ҡыуат ауылы янындағы урманда бер рәт кенә булып үҫеп ултырған ҡайындар бар. Уларҙы янлап ҡына һуҡмаҡ үтә. Был ҡайындарҙы ир-егеттәр Бөйөк Ватан һуғышына киткәндә ишкән. Уларҙың ҡайһыларын егеттәр менән ҡыҙҙар айырылышыу билдәһе тип юраған.

Хәҙер ул ҡайындар ҙа ҡартая. Яуҙан имен ҡайтҡан яугирҙар, инде күптән ҡартайһалар ҙа, шул ҡайындар янына йыш килә. Ишелгән ҡайындар янына әбейҙәр ҙә бара. Уларҙың араһында ирҙәрен көтөп ала алмаған толдар ҙа, һөйгән егеттәре менән ҡауышырға насип булмайынса тол ҡалғандар ҙа була.

Ишелгән ҡайындар хәҙер ауыр яуҙа ауған яугирҙарҙы хәтерләтеп тора. Шуға ла уларҙы янлап үткән һуҡмаҡты үлән баҫмай.

## 129. ҺӨЙҘӨРГӨС

Ул, ҡыҙыбыҙ күрер өсөн, шулай янып-көйөп йөрөһөн;
Әҙәм үҙ балаһын күрер өсөн нисек көйөп, янып йөрөр,
Ул, ҡыҙыбыҙ күрер өсөн, шулай көйөп, янып йөрөһөн;
Әҙәм һыуыҡтан йылыға керер өсөн нисек көйөп, янып йөрөр,
Ул, ҡыҙыбыҙ күрер өсөн, шулай көйөп, янып йөрөһөн;
Болоттан көн, йондоҙ сығыр өсөн нисек көйөп, янып йөрөр,
Ул, ҡыҙыбыҙ күрер өсөн, шулай көйөп, янып йөрөһөн;
Әҙәм, яланда һыуһаһа, нисек көйөп, янып йөрөр,
Ул, ҡыҙыбыҙ күрер өсөн, шулай көйөп, янып йөрөһөн;
Ете юл сатында бар бер һылыу тирәк,
Ул һылыу тирәккә үтеп барған нисек һөйкәлер —
Һөйөклө шул кешебеҙ күргәс, миңә шулай һөйкәлһен;
Йософ бәйғәмбәр * нисек күркәм ине —
Һин унан да күркәм булайың;
Йософ бәйғәмбәргә Зөләйха * нисек ғашиҡ булды,
Шул кеше күргәс, һиңә шулай ғашиҡ булһын;
Ете ҡат ерҙең аҫтынан сәсрәп сыҡҡан таш,
Шул таш кеүек, йөрәге һиңә урғылһын.
Әй Хоҙай, ошо кешенең ҡыҙын һин миңә ғашиҡ ҡыл,
Өс йөҙ алтмыш өс таҫыл менән әүрәт,
Йөҙ ҡырҡ рәт әүрәт,
Шуның менән оҙон сәсен ҡуш, һүҙгә һүҙ бәйлә,
Татлы теле менән, асыҡ күңеле менән,
Йылы ҡуйыны менән, тотор ҡулы менән,
Йөрөр аяғы, башы менән, оло фәһем менән хисен,
Барыһын ғашиҡ әҙәмгә ҡуш!

## 124. «ТЫН»ҒА БАРЫУ

Ҡеше эштең килеп сығыуына икеләнһә, теләк юрап сит кеше өйөнә «тын»ға барған, йәғни, өйгә инмәй генә, эстә ниндәй тауыш сығырын тышта тыңлап торған. Өй эсенән ыңғай хәбәр ишетелһә — эш уңа, яман хәбәр ишетелһә — уңмай, тигәндәр.

Әгәр өй хужаһы «тын»ға килеүсене һиҙеп, ҡаҙан ҡырһа, тыңлаусы кеше һаңғырау булып ҡала, тигәндәр.

Был юрауҙы бигерәк тә һуғыш осоронда ҡулланғандар. Мәҫәлән, кешенең һуғыштан иҫән ҡайтырын йә ҡайтмаҫын шулай юрағандар.

## 125. ҠОЛОН КҮРЕҮ

Яҙ еткәс, арба юлы төшмәҫ элек, йәш ҡолон күрергә кәрәк, — йыл буйы ҡолон шикелле еңел йөрөйһөң, һап-һау булаһың.

## 126. СЫЙЫРСЫҠ ҠАРАУ

Йәше етеп өйләнмәгән кешеләр яҙ көнө сыйырсыҡтарға иғтибар итә. Ишле күрһә — шул йылда өйләнә, ишһеҙ күрһә — өйләнмәй.

## 127. СӘФӘР СЫҠҠАНДА

### А

Кеше юлға сыҡһа, ул берәй һыуҙы аша сыҡҡансы, иҙәнде йыумайҙар, өҫ-башты, өйҙө йыйыштырмайҙар, һыуға бармайҙар.

### Б

Юлға сыҡҡанда буш биҙрәле кеше осраһа, юлға сыҡма: юлың уңмай. Әгәр тулы биҙрәләре менән кеше осраһа, юлға сығыусы был кешегә берәй әйтеү әйтә. Юлы уңһа, һуңынан әйтеүен үтәй.

Юлдың уңыу-уңмауын кем осрауына ҡарап та юрайҙар. Йүнле кеше осраһа — юл уңа, йүнһеҙе осраһа — барыр ереңә бармай, кире ҡайт, юлың барыбер уң булмай, тиҙәр.

### В

Лә Илаһи бәнди үҙгәнәй,
Ләйсә ҡеүәтем бәнем.
Хызыр Ильяс юлда булһа,
Юлда юлдашым бәнем.

### Г

Юлға сығыр алдынан юлсы үҙ ҡулы менән берәй кешегә хәйер бирергә тейеш, тигән. Хәйер бирмәһә, эткә ит йә икмәк бирһәң дә ярай. Эттән фатиха алыу ҙа килешә: сәфәрең уң була.

## 130. ИШАРА МЕНӘН АҢЛАТЫУ

### А

Ирен үбеү — ҡаты һөйөү.
Уң яңаҡтан үбеү — һин минеке, тип әйтеү.
Һул яңаҡтан үбеү — йәшерен яратыу.
Күҙ уйнатыу — мин һине яратам, тиеү.
Маңлайҙан үбеү — ғәфү ит.
Елкәнән үбеү — дошманлыҡ.
Күҙҙе киң асыу — шикләнеү.
Юғарыға ҡарау — мине көт.
Ҡаш һикертеү — ысынлап һөйөү.
Яулыҡ менән уйнау — үбергә теләү.
Тәмәке төтөнө өрөү — танышырға теләү.
Аяҡҡа баҫыу — сығып кит.
Ҡул ҡыҫыу — серҙе берләштереү.
Һуғып китеү — мине онотма.
Баш бармаҡтан ҡыҫыу — дошманлыҡ.
Ҡул биреү — һүҙеңдә тор, тиеү.
Ҡул ҡыҫыу — һоҡланыу.
Билдән ҡыҫыу — яратып һөйөү.
Түбән ҡарау — онотма.
Ике бармаҡтан ҡыҫыу — онотма.
Иң өҫтөнә ҡул ҡуйыу — иркәләү.
Ҡосаҡлау — ныҡ һөйөү.
Ҡулды йоҙроҡлау — күңелдән һөйөү.
Бармаҡ аша тын өрөү — дошманлыҡ.
Һул ҡулды ҡыҫыу — ҡәҙерләү.
Һул ҡулын үбеү — һүҙ берләштереү.
Иңбашҡа таяныу — иркәләү.
Кепканы артҡы кейеү — маһайыу.
Йөҙгә тура ҡарау — шикләнеү.
Бармаҡ шартлатыу — дуҫлыҡты айырыу.
Ҡул биреү — ҙурлау.
Ҡул тотоу — ҡәҙерләү.
Аяҡҡа ҡарау — шикләнеү.
Ҡул йомарлау — көнләшеү.
Ҡырын ҡарау — һоҡланыуҙы белдереү.
Йыр көйөнә һыҙғырыу — туҡта тим, тиеү.
Ҡул болғау — онотма.
Иренде бармаҡ менән һыйпау — һин, тим, тиеү.
Битте һыйпау — һин минән түбән, тиеү.
Үҙ иренеңде тешләү — юғал бынан, тиеү.
Зәңгәр күҙ артыҡ яратыусан була.
Йәшел күҙ яратыусан була.
Ай буйы йөрөү — яратыу, һынау.
Уң ҡулды биреү — ҡәҙимге күрешеү.
Күҙгә тура ҡарау — ысын күңелдән һөйөү.

Осаға һуғыу — мыҫҡыллау.
Сәс һыйпау — их, яратам, тиеү.
Аҫтан ҡарау — көнләшеү.
Ҡешегә ҡарап көрһөнөү — йәрең мин, тип әйтеү.
Арттан ҡарап ҡалыу — һин мине ташла, тиеү.
Икең бер күҙгөгә ҡарау — серҙәш булыу.

Б

Баш бармаҡ — ҡайғы,
Шеш бармаҡ — шатлыҡ,
Урта бармаҡ — кейем,
Сығанаҡ бармаҡ — хат,
Сәңгәсәй бармаҡ — мөхәббәт!

## 131. ТӨШ ЮРАУ

А

Төштөң ниндәйен генә күрһәң дә, яҡшыға юрарға, ти. Төштөң муйыны ҡыл кеүек, башы тубал һымаҡ була, ти. Яҡшыға юраһаң, яҡшы яғына, яманға юраһаң, яман яғына еңеп төшә лә китә, ти.

Б

Төрлө кеше төштө төрлөсә юрай. Шуның өсөн дә төштө теләһә кемгә әйтергә ярамай. Төштө нимәгә юраһаң, шул була, ти. Төшөңдә ни күрһәң дә: «Изгелеккә булһын!» — тип әйтеү кәрәк.

В

Ҡеше насар төш күреп уянһа, өндә насарлыҡҡа булып ҡуймаһын, тип, ҡояш ҡалҡмаҫ элек үк тышҡа сыға һалып, шулай тип һамаҡларға тейеш:

— Ҡыу башҡа,
Ҡыу төшкә,
Ҡола яланға!

Шулай тип өс тапҡыр әйтмәһәң, яманға юлығыуың бар.

### Изгелеккә

**Ай, ҡояш күрһәң,** дуҫ-иш араһында хөрмәткә (сауап була, ти), моратҡа ирешерһең, ҡулыңа мал төшөр.

**Аҡҡош** — ҡәнәғәтләнеү.

**Аҡ тун кейһәң** — һөйөнәһең; **итек, калуш кейһәң** — теләгеңә ирешәһең.

**Аҡ әйбер** — ҡыуаныс.

**Алма** — теләгендең ҡабул булыуы.

**Ат менһәң,** һөйөнәһең.

**Ашлыҡ күрһәң,** моратыңа ирешәһең.

**Бала күрһәң,** яҡшыға.

**Берәй кешене үлгән икән тип күрһәң,** ул кеше оҙон ғүмерле була.

**Бесән сапһаң** — малың күбәйер.

**Бысаҡ, көҙгө, ҡылыс күрһәң,** өндә дошмандарың һиңә баш эйә йә ярашырға теләк белдерә.

**Ваҡ мал күрһәң,** байлыҡ була.

Ел — мөхәббәт.

**Ҙур ағын һыуҙы йөҙөп сыҡһаң,** теләгеңә ирешерһең.

**Икмәк** — бәхет, ҡәнәғәтләнеү.

**Илаһаң** — шатланырһың.

**Ир кеше төшөндә икенсе ҡатын алдым тип күрһә,** ғүмере оҙоная.

**Йыланды тотор булһаң,** әҙ генә нәҫтә алаһың.

**Ҡеше осоп йөрөһә йә бейек тау башына менһә,** һәйбәт була (шул кеше, ғөмүмән, шатланырға тейеш).

**Ҡөҙгөлә тешеңә ҡараһаң,** шатлыҡ килә.

**Ҡөмөш йөҙөк күрһәң,** өндә ил эсендә йә аҡса, йә мал күбәйә.

**Ҡар күрә ҡалһаң,** ризығың күбәйер.

**Ҡом күрһәң,** һаулыҡ була.

**Ҡар күрһәң,** гонаһтарыңдан пак булаһың.

**Мал күрһәң,** байыйһың, ҡулыңа әйбер йәки аҡса төшә.

**Менәр ат бирһәләр,** өндә насипҡа ирешәһең.

**Намаҙ ваҡытын күрһәң,** һөйөнөрһөң.

**Поезд күрһәң,** хат килә.

**Таҙа һыу** — ҡәнәғәтләнеү.

**Таң атыуы** — яңы ҡыуаныслы хәбәр.

**Тауға менеү** — эштәреңдең алға барыуы, ҡыуаныу, моратҡа ирешеү.

**Төрлө шәрбәтле һыуҙар күрһәң,** өндә һәйбәт була.

**Тымыҡ диңгеҙ йәки күл** — үҙеңдә генә һаҡлана торған яҡшы сер.

**Ул (малай) күреү** — шатлыҡ.

**Үлекте тере имеш, тип күрһәң,** донъяла бәхетеңде табырһың.

**Үлекте күрһәң,** хәләлдән малың, байлыҡ була, ти, ғүмерең оҙон була, ти.

**Үлгән кешенән әйбер алыу** — һәйбәткә.

**Үрмәксене тотор булһаң йә ул ҡулыңдан юрмалаһа,** зәһит булып *, халыҡ араһында ҡәҙерле булаһың.

**Һимеҙ һыйыр күрһәң,** хөкүмәттән берәй ярҙам күрәһең.

**Һыйыр күрһәң,** рәхәтлек була, ти.

**Һыуҙың, йылғаның аҡҡанын күрһәң,** моратыңа ирешерһең.

**Эре аҡса** — байлыҡ.

**Яңы сығарылған мейес күрһәң,** тормошоң алға китә, дәүләтең арта.

**Яр** — тыныс тормош.

## Сәфәр сығыуға

**Арҡан күрһәң, сәс үргәндә сәсең ҡалһа,** юлға сығаһың.

**Оҙон сәс толомо** — оҙон юл була.

**Оҙон сәс үрһәң,** юл була (ҡыҙҙар күрһә — кейәүгә барыуға).

**Сәс тараһаң,** оҙон юлға сығаһың.

**Тулҡындар** — көтөлмәгән юл.

**Шаршау күрһәң,** сәфәр сығыуға. Әгәр **ул шаршау ишек төбөндә булһа** — тиҙ өйләнәһең, **түр яҡта булһа** — һуң өйләнәһең.

## Кейәүгә сығаһың, кәләш алаһың

**Атҡа менһәң, көҙгөгә ҡараһаң,** яңы аяҡ кейеме кейәһең.

**Ир-ат тар ғына ерҙән монар күрһә,** йәш ҡыҙҙан кәләш алыр, ти.

**Итек кейһәң,** тормошҡа сығаһың; **итегеңдең ҡуңысы ҡыҫҡа булһа,** ирең менән әҙ ғүмер итәһең; **оҙон булһа,** оҙон ғүмер итеүгә була.

## Кем тыуырын юрау

**Бысаҡ күрһәң,** ир заты була.

**Ҡатын кеше йоҡлө сағында мунсаҡ күрһә,** ҡыҙ бала була.

**Төштә сыбыртҡы тапһаң,** ир бала табаһың.

**Сәғәт тапһаң,** ҡыҙ бала табаһың.

**Йоҡлағанда үҙен бик оҙаҡ осоп йөрөгән итеп күрһә,** бала ошо осорҙа үҫкән була.

## Осрашыуға, ҡунаҡ килеүгә

**Алҡа** — һөйгән кешең менән осрашыу.

**Йыуыныу** — ҡунаҡҡа барыу.

**Китап** — кеше менән танышыу.

**Ҡан** — ҡыуаныс, туғандарыңды осратыу.

**Ҡатыҡ, бал, май күрһәң,** армияла булған туғаның иҫән-һау ҡайта.

**Һабын** — кемдеңдер килеп китеүе.

**Яҙ булған, имеш, тип күрә ҡалһаң,** йыраҡта булған бер ҡәрҙәшең ҡунаҡҡа килә.

## Һүҙ ишетеүгә (кеше һүҙенә ҡалыуға), дошманың барлығына

**Айыу күрһәң,** һүҙ ишетәһең.

**Ваҡ аҡса күрһәң,** кеше һүҙе ишетеүгә була.

**Аҡ тоҙ күрһәң,** гонаһҡа дусар булаһың.
**Аяҡ кейеме юғалтһаң,** ирһеҙ ҡалаһың.
**Йәш быҙау күрһәң,** бәлә күрергә була.
**Ҡара ташҡын һыу күрһәң,** зыян килә.
**Мейес емерелеүен күрһәң,** бәлә килә.
**Һыуға батыу** — мәшәҡәт.
**Һыуҙан сыға алмаһаң** — бәләгә тарыуға.

### Мәйет сығыуға

**Аҡ тауарға төрөнөп тәҙрә аша осһаң,** үләһең.
**Балтаңды юғалтһаң,** йә ирең, йә балаң үлә.
**Баштағы шәлеңдең юғалыуын күрһәң,** һыйырың быҙаулап, быҙауы үлеүгә була.
**Бура бураһаң,** мәйет сыға.
**Йәшел үлән** — йәш ғүмер (йәш кеше) үлә.
**Көткән һыйырың һыуға төшһә,** йә етем ҡалыуға була, йә балаң үлеүгә.
**Кәкүк саҡырыуын йә өй башынан үтеп китеүен күрһәң,** мәйет күрәһең.
**Оҙаҡ ауырып, урындан торғаның күрһәң,** шул кеше үлә, ә **ауырып ятҡан кешенең үлгәнен күрһәң,** ул йүнәлә.
**Оҙон толоп кейһәң,** үләһең.
**Сәс киҫеү** — юғалтыу.
**Төшөңдә тешең төшөп таба алмаһаң,** берәй яҡының үлә, ә **төшкән тешеңде тапһаң,** изгелеккә була.
**Үлгән кеше алып китһә, ҡунаҡҡа саҡырһа** — насарға, кешенең үлеүе.
**Үлгән кеше күрһәң, ул һине тотһа йә үҙенә саҡырһа,** ул һинән хәйер һорай булыр. Хәйер итеп төрлө нәмә бирергә була. Ни бирергә теләһәң дә, тәүҙә уны әнә менән тишкеләү кәрәк. Тишкеләгәндә шулай тип һамаҡлайҙар:

Минән һиңә ни кәрәк?
Ҡабат һорап йөрөмә...

Ә ҡайһы берәүҙәр, **үлгән кешене күрһәң,** һауа торошо үҙгәрә, тиҙәр.

## 132. КӨН ТОРОШОН ЮРАУ

*(Айырым өлгөләр)*

### А

**Ай ҡолаҡланһа,** көн боҙола.
**Бал ҡорто кире әйләнеп ҡайтһа,** ямғыр яуа.
**Балыҡ өҫтә йөҙһә,** ямғыр яуа.

**Бесән сапһаң,** һүҙ ишетәһең.

**Ҡейемең ҡыҫҡарған тип күрһәң,** кеше һинең менән була (хәйер бир).

**Ҡара йылан күрһәң,** кафыр дошманың була, **аҡ йылан** — мосолман дошманың. **Әгәр шул йылан ҡаршылашһа,** хәйер бирергә. **Әгәр уны үҙ ҡулың менән үлтерһәң һәм ул һине саҡмаһа,** һинең һүҙең өҫкә сыға.

**Тау-таш күрһәң,** өндә гәйептән һаҡланырга кәрәк.

**Тешең төшһә,** кешенән һүҙ ишетәһең, **төшкән теште ҡулға алһаң,** зыян күрмәйһең.

**Урман** — шулай уҡ дошмандарың була.

**Ут күрһәң,** кеше һүҙе, ғәйбәт була.

**Һине еңә алмаған дошман** сабый булып күренер.

**Ябыҡ ҡатын күрһәң,** дошманың була, **һимеҙ ҡатын булып** дуҫың төшөңә керер.

## Төрлөһөнән

**Араҡы** — көтөлмәгәнлек.

**Картиналар** — ҡыҙыҡһыныу.

**Кино** — эште тикшереү.

**Тауыҡ менән әтәс күрһәң,** хәрәм мал инә.

**Әсәйҙе күреү** — һиҙенеү, нимә булырын алдан белеү.

## Ауырыуға

**Ит ашаһаң,** ауырыйһың.

**Ҡыҙыл емеш ашаһаң,** ауырыу көт.

**Ҡыҙыл күрһәң,** ҡыҫтау була, тиҙәр.

**Ҡыҙыл төҫ күрһәң,** ауырыу була.

**Муйыл күрһәң,** ауырыу була.

**Һары май күрһәң,** ауырыйһың.

## Ҡайғыға, эс бошоуға

**Берәй туғаныңды (йә егетеңде) алам-һалам кейемдә күрһәң,** ул кешенең эсе бошҡан була.

**Бысраҡ һыу** — мәшәҡәт, ҡайғырыу.

**Бер төркөм кешеләр** — насарға, ҡайғы хәбәре.

**Емеш-еләк йыйыу** — күҙ йәшенә.

**Ҡурайҙа йәки гармунда уйнаһаң, көлһәң** — ҡайғыға.

**Муйыл ағасын күрһәң,** ғүмерең ҡайғылы була.

**Мунса инһәң** — эс боша.

**Үлекте илай имеш, тип күрһәң,** иманһыҙ була, ҡайғы кисерәһең.

## Бәлә-ҡаза күреүгә

**Алтын, баҡыр аҡсалар күрһәң,** оло кешегә хәйер бирмәк кәрәк, насар була.

Аҡ болот тамырланып килһә, ямғыр оҙаҡҡа һуҙыла.
Аҡкош иртә килһә, яҙ оҙон тора.
Арҡа һыҙлаһа, ямғыр була.
Ат аунаһа, көн боҙолор.
Ат ҡарға ятһа, йылыға тарта.
Ат ҡуршылдаһа — буранға.
Бал ҡорттары иртән иртүк осмаһалар, көндөҙ ямғыр буласаҡ, умартанан өҫкә туп-тура осоп сыҡһалар, көндәр аяҙға тартасаҡ.
Бала, туңҡайып, бото араһынан ҡараһа, ҡунаҡ килә.
Бесәй битен йыуғанда ҡолаҡ артын һыйпаһа, ямғыр була.
Бесәй ишекте тырнаһа, көндәр боҙола.
Бесәй мейескә инһә, буран була.
Бесәй моронон ҡолтыҡ аҫтына тыҡһа, көн боҙолор.
Бесәй өйҙән сығып ҡасһа, ер тетрәр.
Бесәй салҡан ятһа, аяҙый.
Бесәй тырнанһа, буран сығыр.
Бесәй, эт ергә ятып аунаһа, көн боҙола.
Етегән йондоҙ ҡараһыу булып күренһә, ямғыр була.
Иртәнге томан ергә ятһа, аяҙый.
Иртән ысыҡ күп булһа, бал күп була.
Йома көн ваҡ ямғыр төшкә ҡарай башланһа, аҙна буйына дауам итә.
Йондоҙҙар үтә бытыш булып сығып торһа, былай тиҙәр: «Аты ла, тайы ла, ҡолоно ла сыҡҡан — көндәр ныҡ һыуытыр инде».
Йондоҙҙар һирәкләнһә, яуа.
Йылға шаулап, тәлмәрйен баҡылдаһа, ямғыр яуа.
Йылҡы малы ятһа, көндәр йылыға.
Кис тауыш алыҫҡа китһә, аяҙый.
Көйәнтә йыуһаң, ямғыр яуа.
Көн ҡолаҡланһа, көрәгәцде нығыт,
Ай ҡолаҡланһа, аяғыңды нығыт.
Кәзә ҡолагын шапылдатһа, буранға.
Ҡаҙ бейеккә менеп осһа, ямғыр булыр.
Ҡаҙҙар өйгә ҡаңғылдашып, ғауғаланып ҡайтһа, яуын көт.
Ҡаҙҙың баҫып ятҡан йомортҡаларының бөтәһенән дә бәпкә сыҡһа, хужа башына сыға.
Ҡаҙ тешен шаҡылдатһа, ҡырау төшә.
Ҡаҙ һыңар аяҡта баҫып торһа, көн һыуыта.
Ҡар тәрән булһа, яуым күп була.
Ҡояш ҡолаҡланып сыҡһа, ямғыр була.
Ҡояш ҡыҙарып байыһа, көн йылыта.
Ҡыҙ хәтере ҡыҫҡарһа, кейәүгә сығыр мәле етә.
Ҡылыс йөҙө менән өҫкә ҡарап ятһа, үлем теләй, тиҙәр.
Ҡырмыҫҡа иләүенә йәшеренһә, ямғыр була.
Мейес башындағы бесәй иҙәнгә төшөп ятһа, көн йылытыр.
Мейестә ут һыҙғырып янһа, буранға.
Мейестәге утын шартлап янһа, көндәр йылытырға була.
Мейес яҡҡанда ыңғай тартһа, аяҙға.

**Баш, ҡолаҡ ҡысыһа,** ямғыр яуа.
**Бесәй мейескә һыйынһа,** көн һыуыҡ буласак.
**Бесәй моронон ҡаплап ятһа,** көн һыуыта.
**Бесәй стенаны тырнаһа,** көн боҙолор.
**Болот япһа,** көн айаҙ була.
**Быуындар һыҙлаһа,** көн боҙола.
**Бәке уйыны уйнаһаң,** иген насар үҫә, тиҙәр.
**Иртән ҡояшты болот ҡаплаһа,** көн аяҙ була.
**Килен төшкәндә буран булһа,** килен уҫал булыр.
**Көн болотло булһа,** балыҡ ҡапмай.
**Көн ҡыҙҙырһа** — ямғырға.
**Кәкүк ҡыйыҡ башынан үтеп китһә,** ут сыға, тиҙәр.
**Кәкүк тауышын һанау** — ғүмереңде һанау.
**Ҡарға, килгәс тә, юлға төшһә,** иген уңыр.
**Ҡарғалар, йылы яҡтан килгәс, ағас башына ҡунһа,** йыл туҡлыҡлы була.
**Ҡарлуғастар түбән осһа,** ямғыр яуа.
**Ҡолаҡ ҡысыһа,** буран була.
**Ҡоштар яҙын иртә килһә,** йәйен ҡоролоҡ була.
**Ҡояш байығанда йоҡларға ярамай,** сирләйһең,
**Ҡояш болотҡа байыһа,** иртәгә көн насар була.
**Ҡояш ҡолаҡланһа (эргәһендә дүңгәләк булһа),** көн һалҡынайта.
**Ҡыҙҙың туйында ямғыр яуһа,** килен уңған була.
**Ҡырмыҫҡа ҡанатланһа,** көн боҙола, ямғырлай.
**Мөрйәнән сыҡҡан төтөн ергә ятһа,** көн насар була.
**Муйыл уңған йылда** иген уңмаҫ.
**Сәүкәләр ҡысҡырышһа,** ямғыр яуа.
**Торналар бейектән осһа,** көн аяҙға була.
**Торна ҡысҡырһа,** көн йылыныр.
**Торналар түбән осһа,** һауа боҙолор.
**Үрмәкес, бауланып төшөп, кире менһә,** ҡунаҡ килә.
**Хополдауыҡ исемле ҡош дүрт-биш ҡабат ҡысҡырһа,** иген уңмай, **алты-ете ҡабат ҡысҡырһа** — уңа.
**Сентябрь башында ҡар күренһә,** ҡырҡ көн аяҙ була.
**Юлда йылан осраһа,** ямғыр яуа.
**Ямғыр яуғанда тамсылар күбекләнһә,** ямғыр оҙаҡҡа һуҙыла.

### Б

**Ағастарҙы бәҫ баҫһа,** һыуыҡ була, **томан төшһә,** йылыта.
**Ай баҫып тыуһа,** көн аяҙ була.
**Ай кәртәләнһә,** айлыҡ ризығыңды әҙерлә, **көн кәртәләнһә,** көрәгәнде әҙерлә.
**Ай салҡан тыуһа,** көн һалҡыная.
**Ай салҡан әйләнеп, күнәк элерлек булһа,** яуын була; **күнәк элерлек булмаһа,** аяҙға тарта.

**Өй бүрәнәһе шығырлаһа,** ҡаты һыуыҡтар башланғанын көттә тор.
**Себештәр бергә йыйылһа,** ямғыр яуа.
**Сиңерткәләр кис сырылдаһа,** көн аяҙ булыр.
**Сыпсыҡ туҙанда ҡойонһа,** ямғыр була.
**Телефон бағаналары геүләһә,** көн һыуыта.
**Теш һыҙлаһа,** көн боҙола.
**Тоҙ дымланһа,** ҡар яуа.
**Төнөн бәҫ төшһә,** көндөҙ ҡар яумаҫ.
**Төньяҡ-көнсығыштан ел иҫһә,** аяҙ була, көн һалҡыная.
**Төтөн тураға сыҡһа,** сыуаҡ булыр.
**Төштән һуң ел башланһа,** ямғыр була.
**Торна үрҙән килһә,** йыл ҡоро була.
**Тәҙрә тирләһә,** ямғыр була.
**Тәлмәрйен ҡоро ергә сыҡһа,** ямғыр яуа.
**Тәүге күк күкрәһә,** көн йылына.
**Урман шаулаһа,** буран көт.
**Үрмәксе ау һуҙып, үҙе бер урында туҡтап ҡалһа,** яуа.
**Үрмәксе ауын тартып үрһә,** көн аяҙ була.
**Һуғандың ҡабығы йоҡа булһа,** ҡыш йылы килер.
**Ысыҡ тиҙ кипһә,** аяҙый.
**Эт моронон ҡуйынына тығып ятһа,** йә ямғыр яуа, йә ҡар яуа.
**Эт тулау** — буран булыу.
**Эт олоһа,** буран була.
**Ялағай уйнаһа,** иген уңа.
**Япраҡтар иртә һарғайһа,** көҙ иртә килә.
**Ямғыр яуғанда йәйғор ҡалҡһа,** ямғыр туҡтай, **әгәр туҡтағас ҡалҡһа,** ямғыр оҙаҡ яуа.

## 133. ЫРЫМДАР

### А. Ҡунаҡ килеүгә, күстәнәс ашауға

**Ашағанда артыҡ һауыт алһаң,** кеше килә.
**Бесәй бит йыуһа:** «Бесәй битен йыуа, ҡолаҡ арты ҡап-ҡара»,— тип уны ишек төбөнә алып килеп ултырталар. Ишек асҡас бесәй сыҡһа, ҡунаҡ тиҙ ҡайта, сыҡмаһа, оҙайлы ҡунаҡ була. Түрбашҡа уҙһа, ҡунаҡ — ҡатын-ҡыҙ, үргә уҙһа — ир-ат затынан була. Бесәйҙең ҡайһы яҡҡа ыңғайлауына ҡарап, ҡунаҡтың ҡайһы тарафтан килеүен дә юрайҙар.
**Бысаҡ иҙәнгә төшөп китһә,** ир затынан кеше килә; **ҡалаҡ төшһә,** ҡатын-ҡыҙ килә.
**Йыйып ҡуйған мендәр ҡолаһа,** ҡунаҡ килә.
**Ҡош тәҙрәнән ҡараһа,** ҡунаҡ килә.
**Ҡуҙ ултырһа,** ҡунаҡ килә. Шуға ла; «Мә һиңә икмәк, мә сәй, мә һиңә яҫтыҡ, мә юрған, ят та йоҡла», — тип ҡуҙҙы һыйлаған булалар.
**Тамаҡ саҡырһа,** ҡунаҡ килә, күстәнәс ашайһың.

**Уң ҡул ҡысыһа** — күрешеүгә.

**Һул ҡул ҡысыһа** — аҡса тотоуға.

**Түбәнән үрмәксе төшһә:** «Үрмәксе, үрмәксе, беҙгә ҡунаҡ килмәксе», — тип һамаҡлайҙар. Ул үрмәксене үлтерергә ярамай.

**Урҙанан мендәр төшөүе** ҡунаҡ килерен хәбәр итә. Ҡайсаҡ ауырайтып, йоҡо килеп торһа ла шулай була.

## Б. Юл төшөүгә, уның уңыу-уңмауы

**Ат егеп торғанда ат с...һа,** юл уңышлы була.

**Балыҡҡа барғанда күҙ алдында үрмәксе өйөрөлһә,** балыҡ бермә-бер күп эләгә.

**Ҡатын, билдәле бер кеше тап булһа,** яҡшыға юрайҙар (ауырлы ҡатын менән осрашыу байлыҡҡа була тиҙәр).

**Изге эшкә барғанда** кире боролоп керергә ярамай.

**Ҡейемгә еп йәбешһә,** ҡайҙалыр юл төшә.

**Ҡара бесәй юлды ҡыйһа,** юл уңһын өсөн өс мәртәбә төкөрөп үтәләр.

**Сәс үргәндә толомға эләкмәй ҡалған сәс** — юл төшөүгә.

**Сәфәргә сыҡҡанда, балыҡҡа барғанда юлды ҡуян ҡыйһа,** юл уңа.

**Юлға сыҡҡанда ҡатындар юл ҡыйһа,** оҡшамай.

## В. Тән ағзаларының ырымланыуы

**Ауыҙ-мороноң ҡысыһа,** күстәнәс ашайһың.

**Бит янһа (ҡыҙарыуы),** кемдеңдер һине уйлауы, иҫләүе йәки һағыныуы.

**Күҙҙең аҫты тартһа** — илауға, **өҫтө тартһа** — танһыҡ кеше күреүгә. **Уң күҙең тартһа,** яҡын дуҫыңды (кешеңде) туғаныңды йә өҙөлөп көткән башҡа кешеңде күрәһең. Әгәр инде **һул күҙең тартһа** — яратмаған, күрә алмаған кешеңде йәки дошманыңды күрәһең. **Күҙ оҙағыраҡ тартһа,** хатта үлек күрерһең, тиҙәр. Шунлыҡтан күҙ оҙаҡ тартһа, «изгегә» тип аҡ һөртәләр.

**Танауың ҡысыһа** — күстәнәскә.

**Һул яҡ ҡолағың сеңләһә,** кемдер һине яманлай, **уң яҡ ҡолағың сеңләһә** — маҡтап һөйләй.

**Уң ҡаш тартһа,** кеше күреүгә,

**Һул ҡаш тартһа** — йәшкә.

## Г. Яманға

**Бала ярһып илаһа, эт олоһа, һыйыр мөңрәһә** — насарға, кеше үлә.

**Бысаҡ салҡан ятһа,** бәлә-ҡаза килә.

**Иртән тәү башлап ҡатын-ҡыҙ заты килһә** — насарға, **ир кеше килһә** — яҡшыға.

**Кешенең бер ҙә юҡҡа эсе бошоп йәне көйөүсән булһа, кәйефе насарланһа,** берәй күңелһеҙлек килеп сығыуы ихтимал тигәнгә юрап була.

**Кис менән сәс тарама** — бәхетһеҙ ҡалырһың.

**Мәйет йыуған һыу түккән ергә баҫһаң,** аяҡ һыҙлай.

**Сәйнүк һыҙғырып ултырһа** — насарға.

**Тауыҡ әтәс булып ҡысҡырһа,** кәртәләге мал ҡырыла, ул тауыҡты һуйырға кәрәк.

**Һыйыр туҡтауһыҙ мөңрәһә,** хужаға ҡайғы килә.

**Тәҙрә тупһаһына ултырһаң,** уйың ҡыҫҡа булыр.

### Ғ. Үлем һәм башҡа фажиғәләргә

**Күк ат урам уртаһынан сабып үтһә,** әжәл килә.

**Ерҙе, урынды йыландар ташлап китһә,** ҡаза килә.

**Яңғыҙ ҡарға оҙаҡ ҡысҡырһа,** мәйет сыға.

**Юғалған кеше, үлеп, күмелмәй ятһа,** тирә-яҡҡа бәлә-ҡаза килә.

**Кәкүк ауылға осоп килһә,** янғын сыға.

**Кәкүк йорт-ҡура тирәһендә ултырып ҡысҡырһа,** бәхетһеҙлек була, тиҙәр. Мәҫәлән: йә мал-тыуарға ҡаза килә, йә йорт-ҡура яна һ. б.

**Ауыл өҫтөндә ҡоҙғон ҡорҡолдаһа,** ауылдан мәйет сыға.

**Ҡояш ҡыҙылы ерҙе ҡаплап төшһә,** әҙәм ҡаны сағыла, ти, фажиғә була.

**Һыу олоһа** — әҙәмде ала.

**Эйәк, танау тартһа** — үле хәбәр ишетеүгә.

**Эт олоғанын ишетергә ярамай,** ғүмерең ҡыҫҡара.

## 134. ТӨРЛӨ ҺЫНАМЫШТАР

### А

**Бала бик ныҡ илаҡ булһа,** үҫкәс йырға оҫта йә бик уҫал була тигәнде аңлата.

**Бесәй аяҡҡа ураланһа,** кемдер яманлап һөйләй.

**Йөнлө кеше** бай була.

**Ҡаҙ һуйғанда ҡанат һөйәген алып ҡалһаң,** ҡаҙың уңыр.

**Пәрҙәле бала** — бәхетле бала.

**Сәйгә сәй шамаһы төшһә,** байлыҡ баҫа.

**Тырнаҡтағы аҡ һыҙаттар,** яңы әйбер кейеүгә.

**Һауыт-һаба ватылһа** — бәхеткә.

**Шәл бәйләй башлар алдынан берәйһе шәп итеп йүгереп килһә,** шәл тиҙ бәйләнеп бөтә тигәнгә ишара.

### Б

**Ашағанда сәсәһәң,** ашығып берәү килеп етә.

**Егет кеше утынды эре киҫһә,** кәләше йәмһеҙ була.

**Ҡейем араһынан үрмәкес сыҡһа,** ҡунаҡ килә.

**Ҡейемдең тиҫкәреһен кейһәң** — шатлыҡҡа.

**Күҙгә төшкән керпекте бармаҡ битенә ҡуйып, теләк теләп, өргәндә, ул осһа** — теләгең ҡабул була.
**Ҡаш тартһа,** кемдер һине бик һағына, күргеһе килә.
**Ҡаш тартһа,** илайһың, **танау ҡысыһа,** кеше ҡаршы алаһың.
**Ҡыҙ кеше иләк аша ҡараһа, иҙән һепергәндә сүп ҡалдырһа,** кейәүе шаҙра була.
**Өйҙә бесәй йылы урын эҙләһә,** буран була.
**Сынаяҡ ярылһа,** бәхетең арта.
**Сәй өҫтөндә шама йөҙөп йөрөһә,** тиҙҙән бүләк алаһың.
**Сәй шамаһы ҡалҡһа,** бәхетең ҡалҡа.
**Сәй эскәндә шама йөрөһә,** ҡунаҡ килә, **әгәр шаманы ишек күгәненә ҡыҫтырһаң,** ҡунаҡ килә алмай тора.
**Табан ҡысыһа,** йыуаса килә.
**Эленмәгән (йә төшкән) төймәң өҫтән нисәнсе,** шул көндө ҡыуаныс булыр.
**Эт олоһа** — яманға.
**Эт ояһынан сыҡмаһа,** тиҙҙән буран була.
**Яурын тартһа,** кейем кейеүгә.

## В

**Ашы тоҙло килендең** теле әсе була.
**Аяҡ ишеккә ҡыҫылһа,** ҡунаҡ килә.
**Берәй сит ирҙең фуражкаһын кейһәң,** ҡырҡ көнлөк ҡатыны булаһың.
**Бер таҫтамалға бер юлы ике кеше һөртөнһә,** талашалар.
**Бесәй үлән ашаһа,** хужаһы байыға.
**Зыярат тирәһендә йығылған кеше** үлә тиҙәр.
**Кеше ҡытыҡсан булһа,** көнсөл була.
**Ҡаш бер-береһенә яҡын булып үҫһә,** кеше кәләште яҡындан ала.
**Ҡыҙ оҙатҡанда егелгән ат сығынлаһа,** яҡшыға булмай.
**Ҡыш өйҙөң бүрәнәләре шаулаһа,** өйгә ен эйәләгән була.
**Ҡулы йөнлө кеше** бай була.
**Самауыр шыжлау** — ризыҡ теләү.
**Иртән ашамлыҡ иҙәнгә төшһә,** ризыҡ арта.
**Тауыҡ, ҡаҙ, өйрәкте көтөү ҡайтҡанда баҫтырырға ултыртһаң,** себештәре күп була.
**Төндә йоҡлағанда һаташып йыш төш күрһәң,** артыш үләне яндырырға кәрәк.
**Тауыҡ иртә төнәһә,** таңға ямғыр яуа.
**Тоҙ түкһәң,** ыҙғышаһың.
**Һөйләгән кеше килеп инһә,** ғүмере оҙон була.

## 135. МАХСУС ЮРАУҘАР

**Берәй нәмә юғалһа йә башҡа берәй бәхетһеҙлек көтөлһә,** был ваҡытта ноҡот бүлеүселәргә мөрәжәғәт итәләр. Был үҙенә күрә юғалған әйберҙең эҙенә төшөү була.

**Кис йондоҙ һанап ятһаң,** төштә кемде күрәһең, шул кейәүең (кәләшең) була.

**Йондоҙ атҡанда бер уйың тура килһә,** шул тормошка аша.

**Ҡартая башлағас, яулыҡ йә ҡулъяулыҡ осон төйнәп ҡуялар,** бер нисә айҙан һуң сисәләр: **тупраҡ булһа** — үлеүгә, **бойҙай бөртөгө** — йәшәүгә.

**Ҡуш муйылды баш аҫтына һалып ятһаң,** кемгә бараһың (йәки алаһың), шуны төшөңдә күрәһең.

**Тәү тапҡыр ҡунған ерҙә баш аҫтына көҙгө һалып ятырға кәрәк:** һөйгәнеңде күрерһең.

**Яңы ай ҡалҡҡан ваҡытта уң яғыңдан сүп алаһың да, ҡағыҙға төрөп, баш аҫтына һалып йоҡлайһың.** Төшөңдә кемде күрһәң, шул һинең ирең (йә кәләшең) була.

## 136. ЙОСОФ КИТАБЫ МЕНӘН ЮРАУ

Һуғыш осоронда ирҙәрен яуға оҙатҡан ҡатындар араһында шундай күрәҙәлек ҡылыу ныҡ таралған. Әхмәтйәнова Хөпъямал тигән ҡатында «Йософ вә Зөләйха» * тигән китап булған. Ҡисен һалдатка ҡатындар Хөпъямал инәйгә барып, шул китапты асыр булғандар. Улар берәмләп тоҫмал менән асҡандар. Әгәр ошо биттә Йософ менән Зөләйханың айырылышыуы тураһында һүҙ барһа, киләсәктә осрашырға яҙмаған, тип, инде лә уларҙың осрашҡан, ҡауышҡан сағына тап килһәләр, киләсәктә осрашыу насип икән әле, тип әйткәндәр.

## 137. ҺАНДАР МЕНӘН ЮРАУ

Һандар менән уларҙың аңлатмаһы уйынсыларҙың берейһендә була. Уйынсылар берҙән алып йөҙгә тиклемге һандарҙың берейһен әйтә. Дәфтәрлеһе асып, күрәҙәлек итә.

1 — түҙемле булыу, ҡайғырмау.
2 — һорау менән һине һынау.
3 — ҡайғынан, уҫаллыҡтан күҙ йәше түгеү.
4 — бәхетле ҡыуаныс.
5 — тикшереү.
6 — һөйгәнең бүләк бирә.
7 — хыяллы һөйөү.
8 — ҙур ҡыуаныс.
9 — тормошондан ҡыуаныу.
10 — башҡа таныш бар. Ул һине һөйә.
11 — һине генә һөйә.
12 — ҡыҙғаныслы һөйөү.
13 — күңелдән һөйөргә әҙерләнеү.
14 — яҡшы хәбәр ишетеү.
15 — ҡайғылы хәбәр ишетәһең.

16 — айырылыу үҙгәреше.
17 — яҡын кешеңдән хат.
18 — һин уны һөйөргә теләйһең.
19 — икегеҙ ҙә бер-берегеҙҙе һөйәһегеҙ.
20 — һинең менән танышырға теләйҙәр.
21 — яҡшы таныш, әммә насар холоҡло.
22 — икегеҙ бергә дошман һүҙен тапайһығыҙ.
23 — насар һүҙ ишетәһең.
24 — шатлыҡлы һөйөнөү.
25 — үткәндәрҙе ҡабатлау.
26 — теләгәнеңә ирешеү.
27 — һине ҡыҙғана.
28 — ҡайғылы һүҙ ишетеү йәки йәш түгеү.
29 — һиңә ике кеше икеләнеп ҡарай.
30 — көтөлмәгән ерҙә һөйөнөү.
31 — тормошҡа сығыу (кәләш алыу).
32 — бәхетле булаһың.
33 — һиңә бәйләнергә теләй.
34 — уҫаллыҡтан күҙ йәше түгеү.
35 — бәхет һәм шатлыҡ.
36 — бәхетһеҙ булырһың.
37 — бүләк.
38 — шәп мөхәббәт.
39 — һине яраталар.
40 — киләсәк мөхәббәт яман булыр.
41 — теләгең булыр.
42 — күңелһеҙ булыр.
43 — туралыҡ.
44 — йәнең теләгән булыр.
45 — хат, яҡшы хәбәр.
46 — хат, насар хәбәр.
47 — хат алырһың.
48 — һине яратмайҙар.
49 — ҡайғы, хәсрәт.
50 — күҙ йәше булыр, бәхетең бөткән, рәхәт күрмәҫһең.
51 — һине яҡшы егет (ҡыҙ) ярата, күҙ йәше булыр.
52 — тынысһыҙлыҡтар.
53 — ҙур бәхет.
54 — ғәйбәт һүҙ ишетәһең.
55 — ҙур-ҙур шатлыҡ.
56 — михнәт, ҙур ҡайгы килер.
57 — һине яратҡан кеше кис килер.
58 — ҡайғы, күҙ йәше, яратмайҙар.
59 — айырылышыу.
60 — ҡушылыу.
61 — теләгәнең менән бергә булаһың.
62 — теләгең үтәлә.
63 — тыныслыҡ.
64 — һине һөймәйҙәр.

65 — йәш түгәһең.
66 — бәхет һәм шатлыҡ.
67 — көтөлмәгән яҡшы хәбәр.
68 — бүләк.
69 — ышанысһыҙ йәр.
70 — төрлө ҡайғы.
71 — шатлыҡлы хат.
72 — һине ҙурлап һөйләйҙәр.
73 — кесе бәлә.
74 — ҡайғы ишетеү.
75 — һөйөнөү.
76 — хат алаһың.
77 — шатланаһың.
78 — теләгең үтәлә.
79 — яраталар.
80 — мөхәббәт.
81 — шатлыҡҡа әҙер булыу.
82 — яңы кеше менән танышаһың.
83 — яңы дуҫтар була.
84 — көтмәгәндә һөйөнөү.
85 — йомартлыҡ.
86 — тормошҡа сығаһың (кәләш алаһың).
87 — киткәнең кире ҡайта.
88 — күҙәтә.
89 — яраталар.
90 — йәрең ҡайта.
91 — һинән көләләр.
92 — тормошҡа сығыу (кәләш алыу).
93 — араңа дошман керә.
94 — һине дошман күрә.
95 — ул һине ярата.
96 — ул һине ярата — һин яратмайһың.
97 — ҙур һөйөнөс.
98 — ҡайғынан һарғайыу.
99 — һөйгәнең һине ташлай.
100 — һин икенсе йәр табаһың.

## 138. ТЫЙЫУҘАР

### А

Алдашмағыҙ, алдашҡандың, кеше һөйләгәндәрҙең телдәре эйәктән аҫҡа аҫылынып тора, ти, теге донъяла.

Бала күп илаһа, инәһе йә атаһы үлә.

Бер иптәшең менән барғанда, ялан аяҡ көйө үксәһенә баҫһаң: «Тфү, таштабан!» — тиергә кәрәк, шунан үксәһенә төкөрөргә; шулай уҡ иптәшеңдең эҙенә баҫырға ярамай — уның ҡатынын алаһың, тиҙәр.

Бер сыҡҡан юлыңдан кире боролоу — эшләргә тейеш булған эшеңдең уңышһыҙ булыуын билдәләй.

Бер уңмаған эштең артынан ҡыума.

Бесәй менән уйнама, ҡарғышы төшә, тиҙәр.

Борон ҡымыҙҙы, һөттө, итте һатып бирмәгәндәр. Һатырға ярамаған.

Ғысаҡтың йөҙөн өҫкә ҡаратып һалма: дошманлыҡ теләйһең.

Ғегет уйындан ҡайтып, ут ҡабыҙмай ҡараңғыла ашаһа, кәләше бүр була.

Зыяратҡа бармаҡ төртөп күрһәтмә, бармаҡ серей.

Пәрҙәһеҙлек — яуызлыҡ; балдаҡ, беләҙек — ҡулға пәрҙә, алҡа (һырға) — биткә пәрҙә.

Зыярат эргәһенән үткәндә теш күрһәтергә, ауыҙ асырға ярамай.

Икмәкте бер ҡул менән һындырырға ярамай, юҡһа, ризыҡтың бәрәкәте кәмей.

Иҫке ағасты яңыртып юнырға ярамай, ҡайғы яңыра.

Ит ашағас, һөйәктәрҙе гел бер ергә генә йыйырға кәрәк.

Йома көн кер йыуырға ярамай. Берәү, шул һүҙгә ҡарамай, йома көн кер йыуған да түгергә сыҡҡан. Бер ҡарт тап булған да һораған:

— Йома көн ниңә кер йыуҙың?

Кер һыуы түгеүсе:

— Унда һинең ни эшең бар! — тигән икән — сусҡаға әйләнгән дә ҡуйған. Теге ҡарт Хызыр Ильяс булған икән, ти. Йыуынты һыу эсеп йөрөгән сусҡа шул әҙәпһеҙ әҙәм, ти.

Йома көн тырнаҡ киҫергә ярамай, эт тырнағы сыға.

Йәй көнө туғайҙа баҡаны аша атлаһаң, юл уңмай, уны урап үтергә кәрәк.

Йәш баланың тәү алған сәсен һаҡларға кәрәк, ташларға ярамай, юғиһә, бәхетһеҙ була.

Кеше аяғын ашатлаһаң, насар була.

Кеше тупһаға баҫып торһа, үҫмәй.

Кисен тырнаҡ киҫергә ярамай, йәнәһе, бәхетһеҙлеккә осрайһың.

Көйәнтәне аша атлама, үҫмәйһең.

Ҡыҙ кеше егеттәргә типһә, аяғы тартыша.

Ҡатлап кәпәс кейһәң, ҙураймайһың.

Ҡунаҡ үҙенең күстәнәсен ашаһа, хужаның эте тешләй.

Туҙбаш йыланды үлтермә, ҡаза килә.

Үҙәк тартһа, бәхетһеҙлек килә.

Үргәс, сәсте оҙон төйөнләргә ярамай, кеше бәхетһеҙ була.

Һепертке менән һуҡһаң, бүре ашай.

Юлға сыҡҡас, өйгә кире боролоп керергә ярамай, керһәң, берәр нәмә алып, ултырып сығырға кәрәк, юҡһа юлың уңмай.

Юлға сыҡһаң, артыңа ҡарамай сыҡ.

Яңы һалынған өйгә ингәндә, тупһаға баҫырға ярамай, юғиһә хужаһы үлә.

Б

Ҡайраҡты ҡулдан ҡулға тоттормаҫҡа.

Мылтыҡты кешегә төҙәмәҫкә.

В

Тупһаға баҫырға ярамай. Сөнки тупһа: «Мин әҙәм аяғы аҫһында. Һин дә минең кеүек бәхетһеҙ бул!» — тип әйтер, ти.

Кис көнө аҡса һанарға ярамай. Әгәр ҙә кешегә аҡсаны кис бирер булһаң, алыусының ҡулына бирмәҫкә, иҙәнгә ташларға. Шулайтмаһаң, ырыҫ китә.

Юлға сығыр саҡта төймә тағырға ярамай — юл уңмай.

Г

Үрмәкес менән баҡа — тел-тешһеҙ йән эйәһе (улар тел менән үҙҙәрен яҡлай алмай).

Үрмәкесте үлтерергә ярамай, сөнки ул бәйғәмбәрҙе ҡотҡарған, зат-зөриәтың ҡороуы бар. Ырыуҙан ҡалған кеше генә үлтерә ала.

Үрмәкес — бик ырымлы мәхлүк. Уны шуның өсөн дә үлтермәҫкә. Стаканға ябып ҡуйһаң, яҡшы урын булһа — ау үрә. Насар урын булһа — түбән төшә лә ята.

Ғ

Ҡояш байығанда ятырға ярамай. Елҡуҙ йөрөй, ти. Ул төрлө ҡиәфәткә инә ала: йәш егет тә, һылыу ҡыҙ ҙа булып килә ала. Уны шунан танып була: арҡаһы тишек. Шуны күрһәң — теймәй, зыян итмәй, ти.

Д

Эңер менән аҡшам араһында (ҡояш батыр-батмаҫ саҡта) ҡағылған сарпыу китмәй. Шуға ла: «Эңер менән аҡшам араһында йоҡлама, теген текмә», — тиҙәр — күҙгә зыян була.

## 139. СӘС МЕНӘН ТЫРНАҠ ҺӘМ ТЕШ

А

Тарағанда сыҡҡан сәс менән ҡырҡылған тырнаҡты теләһә ҡайҙа һелтәмәҫкә. Яғырға. Яҡмаһаң, шайтан ала. Шунан кеше ауырый башлай. Шайтан тырнаҡты ризыҡҡа һалһа, кешенең эсе күбә. Ул бирән булып ҡала.

Б

Тырнаҡты, шайтан алып китмәһен тип, бер урынға ғына ҡырҡаһын да, йыйып алып, бисмилла әйтеп, иҙән егенә төшөрәһен.

В

Тырнаҡты кискеһен киҫергә ярамай. Кис кешенең ярты йәне (рәүә йәне) тырнаҡ осона килә. Тырнаҡ менән уның да ҡуша ҡырҡылыуы бар.

Г

Сәс тарағанда сыҡҡан сәсте йыйып барырға.

Ғ

Бисмиллаһир-рахмәнир-рахим!
Был донъяла көл бул,
Теге донъяла гөл бул,
Яуап көнө гөл бул!

Сәсте мейескә яҡканда, шулай тиҙәр. Теге донъяла сәстең бөртөгө һайын һорау бирәләр, шунса яуап алалар, ти.

Д

Тырнаҡ киҫкәндә:

Бисмиллаһир-рахмәнир-рахим,
Бәрейгә — ҡамыр тырнаҡ,
Миңә — тимер тырнаҡ! —

тип әйтергә кәрәк.

Ҙ

Теш төшкәндә:

Тараҡанга — ҡамыр теш,
Балама — тимер теш!
Йә, хәҙрәт, Шәйәхмәт,
Хызыр Ильяс, бир ҡеүәт! —

тип, уны еккә ҡыҫтырырға.



## АЛҒЫШТАР ҺӘМ ҠАРҒЫШТАР

### 140. АУСЫ МЕНӘН БАЛЫҠСЫҒА

А

Саңғың йылғыр булһын,
Этең алғыр булһын!

Б

Мәргән атһын һыҙмаң,
Байрам итһен ыҙмаң!

В

Тәңре һиңә дарман бирһен,
Тау эйәһе фарман бирһен.

Г

Уғың тейһен кейеккә,
Ҡошоң осһон бейеккә.

Ғ

Йәйәң йәпле булһын,
Уғың уҡлы булһын!

Д

Ҡотло булһын мурҙаң,
Балыҡ төшһөн ҙурҙан!

Ҙ

Йылтыраһын йылымың,
Ҡалтыраһын йылымың!

### 141. ҠОРТСОҒА

А

Солоғоң ҡотло булһын!
Күс артынан күс ҡунһын!

Б

Кәм булмаһын ҡортоң һөтлө бейәнән,
Татлы балың ағып торһон кейәнән!

### 142. МАЛСЫҒА

А

Малың үрсемле булһын!

Б

Һыйырың һөтлө булһын!

В

Ҡәзәң дебетле булһын!

Г

Көткән малың — түккән тирең хәләл мәнфәғәтеңә яҙһын!

Ғ

Изге булһын уйҙарың,
Ишле булһын ҡуйҙарың!

### 143. УҢЫШ ЙЫЙЫУСЫҒА

А

Картуф, йәшелсә һәм башҡаларҙың уңышын йыйып йөрөгән саҡта килеп сыҡҡан кеше:

— Ырҙынға бәрәкәт! — тип әйтә. Уға ҡаршы:

— Ауыҙыңа бал да май! Һиңә — кәтмән! — тиҙәр ҙә итәгенә бер нисә бөртөк картуф йә йәшелсә һалып ебәрәләр.

Б

Ергә кәрәк кәтмәне,
Кәтмән күмеп китегеҙ!
Ҡоро ҡалып ҡуймаһын,
Ризалатып китегеҙ!

В

Кәтмән, кәтмән,
Кәтмән бирмәһәң, китмәм!

Йомартлығың өҫкә сыҡһын,
Кәтмәнеңдән буш итмәң!

### 144. ҺУҒЫМ ҺУЙЫУСЫЛАРҒА

— Һуғым һимеҙ булһын,
Ите татлы булһын,
Йөҙөң яҡты булһын!
— Бергә булһын!
— Әйткәнең килһен!
Иҫән-һау ризыҡҡа яҙһын!

### 145. ЭШ БАШЛАП ТОРОУСЫҒА

А

Алла ярҙам ҡылһын!
Эшең уң(ды) булһын!

Б

Минән ҡеүәт — һинән көс!

В

Кәсебең уңһын!

Г

Эшең уңышлы булһын,
Еңел ҡулдан,
Еңел аяҡтан,
Ике һуҡыр күрмәһен,
Икендегә етмәһен.

Күрһә, күрһен йүнлеһе,
Эйәре көмөшлөһө;
Еңел бөтһөн,
Тигеҙ бөтһөн,
Ашың ташһын,
Ҡолаҡ бөкһөн,
Ун эшең!

### 146. НИГЕҘ ҠОРОУСЫҒА

А

Нигеҙ ҡорғанда, нигеҙҙең дүрт мөйөшөнә дүрт тәңкә һалалар, Хужаға теләк теләйҙәр:

Донъяң ҡотло булһын,
Эсендә тыныслыҡ булһын.
Таҙалыҡ, иҫәнлек булһын,
Хоҙай хәйере!

Б

Нигеҙегеҙ ҡотло булһын,
Ҡитмәҫ булып ырыҫ ҡунһын!
Нәҫел-нәсәбең уңһын да уңһын,
Быуын эйәрә быуын йәшәрлек булһын!
Ырыҫы менән!
Амин!

В

Өрлөк күтәргәндә, уның баш-башына көмөш тәңкә һалып ҡалдыралар. Аҙаҡ шулай тип теләктәр әйтәләр:

Нигеҙегеҙ ныҡ булһын,
Бала-сағағыҙ күп булһын,
Малығыҙ ишле булһын!
Ҡыуанып-шатланып
Ғүмер итергә яҙһын!

### 147. ӨЙ ҠОТЛАҒАНДА

А

Ҡотло булһын йортоғоҙ,
Баллы булһын ҡортоғоҙ,
Бөтмәҫ булһын балығыҙ,
Үрсеп торһон малығыҙ,

Имен тормош көтөгөҙ,
Ипле тормош көтөгөҙ,
Һау-сәләмәт булығыҙ
Бала-саға — көллөгөҙ!

Б

Хәйерле булһын,
Тигеҙ ғүмер итергә!
Үҙегеҙгә туҙҙырырға яҙһын!

В

Өйгә тәүҙә икмәк-тоҙ индерәһең дә:

Бисмилләһир-рахмәнир-рәхим,
Шатлыҡлы булһын,
Эсе тулы аш-һыу булһын,
Бала-саға зар-зыя ҡылһын! —

тиһең.

## 148. БАШҠА СЫҠҠАН ЙӘШТӘРҘЕ ҠОТЛАҒАНДА

А

Тиң йәшәгеҙ, тиң ҡартайығыҙ!
Арағыҙҙан ел дә үтмәһен —
Дошман янһын, төтәһен!
Күп ҡыуаныс күрегеҙ!
Яҡты булһын түрегеҙ,
Татлы булһын һүҙегеҙ,
Яҡты булһын йөҙөгөҙ!
Йомарт булһын ҡулығыҙ,
Унлап булһын улығыҙ!
Ҡыҙы юҡ өй — буш күнәк,
Ҡыҙығыҙ булһын күмәк!
Сәс, һаҡалдар ағартып,
Берегеҙ булһын ил ағаһы,
Икенсегеҙ — ил инәһе!

Б

«Көнөн күрһен, көлөндә аунаһын!» — Шулай тигән теләк тә бар. «Ярар, үҙҙәренә бер башҡа мөрйәнән төтөн сығарһындар. Үҙҙәре нисек теләй, шулай йәшәһендәр, әйҙә», — тиҙәр ул саҡта.

## 149. ЯРҘАМ ИТЕҮСЕГӘ

А

Аяҡ-ҡулың имгәкһеҙ булһын!

Б

Ҡулыңдан ҡыуан!

В

Ҡулыңдан уң!

Г

Телеңдән ҡыуан!

Ғ

Донъя торғанса тор (йәшә)!

Д

Берәй кеше икенсеһенән берәй изгелек күрһә, бына шулай ти:
— Рәхмәт!
— Йәшәгеҙ рәхәт!

### 150. БЕРӘЙ ЭШТЕ БЕРЕНСЕ БУЛЫП БАШЛАУСЫҒА

А

Ҡул артың еңел булһын!

Б

Аяғың еңел булһын!

### 151. ҺӨЙӨНСӨЛӘҮГӘ

А

— Һөйөнсө! Һөйөнсө!
Һөйөнсөгә ни бирәң?
— Ауыҙыңа — бал да май!

Б

— Һөйөнсө! Һөйөнсө!
Һөйөнсөгә ни бирәң?
— Телеңдән һөйөн!

В

— Һөйөнсө! Һөйөнсө!
— Һөйөнсөһөнә — уң ҡолағың үҙеңә!
(Һөйөнсөһөнә — ҡолағы!)

Г

— Һөйөнсө! Һөйөнсө!
Һөйөнөстән бейесе!
— Һөйөнсөһөнә — бер самауыр сәй!
(Һөйөнсөһөнә — яулыҡ йә бәрәс, йә һарыҡ һ. б.)

## 152. МӘЖЛЕСТӘ УЛТЫРЫУСЫЛАРҒА

— Мәжлестәр күркәм булһын!
— Әйҙүк, уртаһында бул!
— Һурпаһына еткән — уртаһына еткән!

## 153. ҠУНАҠ ҺЫЙЛАУСЫҒА

А

Малдарыңа ҡот килһен;
Йот килмәһен, туҡ килһен,
Ҡортоң осһон кейәнән,
Ҡолон тыуһын бейәнән,
Тай-тулағың туҡ булһын,
Тауығығыҙ күп булһын!
Һеҙгә — һаулыҡ,
Миңә — яулыҡ!

Б

Рәхмәт! Бик ныҡ һыйланығыҙ,
Гел дә шулай ҡы(й)ланығыҙ!

В

Рәхмәт яҡты йөҙөгөҙгә,
Рәхмәт яҡшы һүҙегеҙгә!

Г

Өйөгөҙ — яҡты,
Һүҙегеҙ — татлы,
Үҙегеҙ — яҡшы!

### Ғ

Х у ж а:
— Тәүҙә — сәләм,
Шунан — тәғәм,
Һуңынан — һүҙ!

Ҡ у н а ҡ:
— Рәхмәт яуһын инде һеҙгә,
Һеҙҙең менән ултырған беҙгә!
Бер Алланың рәхмәтендә
Ултырһаҡ ине бергә-бергә!

Бындай теләкте «дәрт» уҡыу тип тә әйтәләр. Уны йыйын, мәжлес ҡорғанда әйтеүсәндәр.

### Д

Ҡайһы өйҙәрҙә мәжлестәр бар,
Фәрештәләр: «Амин!» — тигән
Доғаға ҡул күтәргәндә,
Улар беҙгә: «Амин!» — тиер,
«Амин!» — тиәйек беҙҙәр ҙә —
Теләк-доға ҡабул булһын,
Фәрештәләр: «Амин!» — тигән
Сәғәттәргә тура килһен!

### Ҙ

Киң ризыҡ, киң дәүләт бирһен,
Иҫләмәгән, уйламаған ерҙән
Ғәйеп ҡаҙналығы *ризыҡтары бирһен,
Һәр ике бәндәгә киләсәген имен күреү насип булһын!

## 154. ЯҢЫ КЕЙЕМ КЕЙЕҮСЕГӘ

### А

Ғүмерең оҙон булһын,
Күлдәгең көйөрәк булһын.
Фәрештәнең: «Амин!» —
тигән сағына тура килһен!

### Б

— Кейемең ҡотло булһын,
Йылы тәнеңдә туҙһын!
— Һиңә лә булһын!

В

— Ҡейемең серек булһын,
Ғүмерең оҙаҡ булһын!
— Рәхмәт, шулай булһын!

Г

Күлдәгең туҙһын,
Буйың уҙһын!

Ғ

— Күлдәгең ҡотло булһын,
Буйың үҫһен,
Үҙең — кәләш ҡуйынына!
— Әйткәнең бойомға ашһын!

Д

Ҡотло булһын,
Иҫән кейеп,
Һау туҙҙыр!

Ҙ

Үҙең — һике башына,
Күлдәгең — сүплек башына!
Үҙең — кейәү ҡуйынына,
Күлдәгең — яңы башына!

Е

Ебе серек булһын,
Ғүмерең оҙаҡ булһын!

Ё

Үҙе үҫһен,
Күлдәге туҙһын,
Яңылары тағы булһын!

## 155. СӘФӘР СЫҒЫУСЫҒА

А

Сәфәр сығыусының биленән икмәкте өс тапҡыр ураталар ҙа шулай тиҙәр:

Хызыр Ильяс *, Хөбби хужа * — ярҙамсың,
Хызыр Ильяс булһын изге юлдашың.
Юлың уң булһын,
Ун ике мөсәлең * һау булһын.
Йә Ханнан, йә Маннан *,
Әй, Хоҙайым, үҙең һаҡла,
Дошмандың күҙен ҡапла,
Ауыҙын бәйлә, телен сис!

Б

Изге сәғәт — изге юл,
Йондоҙҙарың яҡты булһын!
Көнөлөңә шатлыҡ тулһын!

В

— Ай йөрө, аман йөрө!
— Үҙегеҙ имен тороғоҙ!

Г

Аҡ юл, оҙон ғүмер!

Ғ

— Еңел китеп, ауыр (кәсебең уңып) ҡайт!
Иҫән йөрөп, һау ҡайт!
— Һаулыҡта күрешергә яҙһын!

Д

— Изге сәғәт — хәйерле юл!
— Изге һүҙеңә рәхмәт!

Ҙ

— Сәфәрең уң булһын!
— Иҫән йөрөп иҫән ҡайт!
— Иҫән тороң, туғандар,
Илдә тороп ҡалғандар!

Е

Изге юлға, изге сәфәргә
Дусар итһен Аллаһы тәғәлә!

Ё

Хызыр Ильяс * булһын юлдашың —
Мең дошманға торор бер башың!

Ж

— Хәүеф-хәтәрһеҙ йөрөп ҡайт!
— Фатихаңа мең рәхмәт,
Йәшәгеҙ илдә рәхәт!

З

Ебәрҙем аманат,
Ҡайтарып ҡуй сәләмәт!

И

Бисмиллаһир-рахмәнир-рәхим...
Алла булһын иптәшем,
Хызыр бәйғәмбәр булһын юлдашым!
Аллаһы тәғәләм, үҙең һаҡла,
Дошмандарҙың күҙен ҡапла,
Бәлә-ҡазаларҙан һаҡла!
Теләгемде кире ҡаҡма!
Изге сәғәт — изге юл,
Йондоҙҙарым, яҡты бул!
Күңелдәрем, шат бул!

Й

Әғүҙи-билләһе менәшайтан-рражим,
Раббаным — баш (булһын!),
Мөхәммәт — юлдаш (булһын!),
Һүҙең — миһырбан (булһын!),
Телең — таш (булһын!).

Был һамаҡ-теләкте оло түрә алдына барғанда ла әйтәләр.

## 156. ИКЕ ДОНЪЯ РӘХӘТЕН ТЕЛӘҮ

Әхирәттә иман бирһен,
Донъялыҡта — донъя байлығы!
Ожмахтан урын бирһен,
Яуап көнөндә тел асҡысы бирһен!

## 157. ӘРМЕГӘ, ЯУҒА КИТКӘНДӘ

А

Әрмегә (яуға) китеүсене оҙатҡанда, шулай тип теләк теләйһең:

Хәйерле сәфәр, изге ниәт булһын,
Хызыр Ильяс юлдаш булһын,
Әйүп бәйғәмбәр сабырлыҡ бирһен.
Сабырлыҡ бирһен дә ғүмер бирһен,
Әжәлеңә сабырлыҡ бирһен.
Ябраил фәрештәнең ҡанаты аҫтында йөрөргә яҙһын.
Тел-тештән һаҡлаһын!
Нахаҡ бәләнән һаҡлаһын!
Юҡ яланан яҡлаһын!
Раббым, Хоҙайым!
Бер һиңә тапшырам.
Ҡазаларҙан ҡурсала!
Амин!

### Б

Ебәрҙем аманат,
Ҡайтар сәләмәт!

## 158. ӘХИРӘТ ТЕЛӘГЕ

Ҡешегә таҡма итмәһен *,
Баҡмай үлергә яҙмаһын,
Анһат үлем бирһен!

## 159. ТӨКӨРӨККӘ СӘСӘГӘНДӘ

«Ҡиләһе ризыҡҡа, бөтмәҫ ризыҡҡа», — тиҙәр.

## 160. ҠИЛӘҺЕ ҠАЗАНАН ҠОТОЛОУҘЫ ТЕЛӘҮ

Вағыраҡ ҡаза күргәндә (ҡулдан ҡашығаяҡ төшөп ватылһа, арба ватылһа, ваҡ мал ҡазаланһа һ. б.): «Ҡиләһе ҡаза шуның менән бөтһөн!» — тип әйтәләр.

## 161. ҺЫУ ТӨШӨҮ

Һыуға төшөр алдынан тәүҙә һыуға таш ырғыталар. Таш ташлағанда:

Ҡара йылан, ҡас, ҡас,
Ҡара йылан, ҡас, ҡас! —

тип әйтергә кәрәк.

## 162. ЙОҠО АЛДЫНАН

### А

Яттым, йә Алла,
Торҙом, иншалла,

Ғ

Ер йотҡор!

Д

Йәшен атҡыр!

Ҙ

Ҡулың һулығыр!

Е

Муйының сыҡҡыр!

Ё

Һеңерең тартышҡыр!

Ж

Ир рәхәте күрмә!

З

Саҡ менән Суҡтай булығыҙ!

И

Берегеҙ Битырға, берегеҙ Верхуралға!

Й

Яуыз ниәтле, яуыз уйлы, кеше араһына һыймаҫ, кәрәк саҡта юха кеүек юхалаусан ҡатындарға: «Көл кеүек туҙанға төшһөн!»— тиҙәр. Ундай кеше бер ергә лә һыймай, бер ерҙә лә йорт йыймай йә бер ирҙән икенсеһенә, унан өсөнсөһөнә... башҡаһына бара.

### 165. ҠАРҒЫШҠА ҠАРШЫ ҠАРҒЫШ

А

Ҡарғышың — ҡара башыңа!

Б

Йылы ауыҙыңдан сығып, йылы ҡуйыныңа керһен!

Татлы йоҡо бир, Алла,
Изге төштәр бир, Алла!
Ошо урында тора алмаһам,
Иманымды бир, Алла.

Б

Яттым, йә Алла, иншалла,
Шул ятҡан ерҙән тормаһам,
Баҡый иман бир, Алла,
Татлы йоҡо бир, изге төш бир.

В

Бисмиллаһир-рахмәнир-рахим,
Яҫтығым — кирбес,
Ятҡаным — ер,
Динем — ислам,
Иманым — Ҡөрьән,
Ҡөрәйеш йыланға *
Минән — сәләм!

### 163. КЕЙЕМДЕҢ ТИҪКӘРЕҺЕН КЕЙГӘНДӘ

Кейемдең тиҫкәре яғын тышҡа кейгәндә, уны сисеп:
— Мал уңһын, мал уңһын, мал уңһын! — тип өс тапҡыр әйтеп, ҡағып-һуғып төҙәтеп кейергә.

### 164. ҠАРҒЫШТАР

А

Ирҙән ҡалғыр,
Ирҙән ҡалғыр!
Ата ҡаҙҙан ҡалған
Инә ҡаҙҙай ҡаңғыр!

Б

Ҡәһәр һуҡҡыр!

В

Ер кинәнгер!

Г

Айыу (бүре) йыҡҡыр (ашағыр)!

В

Кешегә ҡаҙған баҙыңа үҙең төш!

Г

Ауыҙыңдан ел алһын!

Ғ

Телеңә тилсә сыҡҡыр!

Д

Телең ҡорогор!

Ҙ

Тартай теленән табыр,
Һин дә телеңдән тап!

Е

Ҡарғаған ауыҙыңа ҡарға ояланын!
Утыҙ ике балаң булһын!
Утыҙ икеһе — утыҙ ике яғыңдан
Ҡарға кеүек ҡарҡылдаһын!
Береһе: «Ашайым!» — тиһен,
Береһе: «Шашайым!» — тиһен,
Береһе: «Сисәм!» — тиһен,
Береһе: «Ҡейәм!» — тиһен,
Береһе: «Һ...йәм!» — тиһен,
Береһе: «Сығам!» — тиһен,
Береһе: «Эсәм!» — тиһен,
Береһе: «Сы...ам!» — тиһен.

# ТӘБИҒӘТ-ЫҘАН ЙОЛАЛАРЫ, БАЙРАМДАР

## ОБРЯДЫ, СВЯЗАННЫЕ С ПРИРОДОЙ, ПРАЗДНИКИ

## MEVSİMLERE GÖRE TABİAT BAİRAMLARI

## RITES HAVING A BEARING ON NATURE, FESTIVALS





## МИҘГЕЛДӘР

### 166. ЙЫЛ МӨСӘЛЕ

### А

Борон һәр йылдың эйәһе бар тип уйлағандар. Аҙаҡ һәр йыл үҙенең эйәһе менән исемләнеп йөрөтөлә башлаған. Һәр «эйә»нең үҙ урыны бар. Улар бөтәһе — ун ике. Ун ике йыл — бер мөсәл тип йөрөтөлә. Бер мөсәл тамамланғас, иҫәп йәнә башлана.

| Йыл исемдәре | Йылдар | | |
|---|---|---|---|
| 1. Сысҡан йылы | 1984 | 1996 | 2008 |
| 2. Һыйыр йылы | 1985 | 1997 | 2009 |
| 3. Барс (юлбарыҫ) йылы | 1986 | 1998 | 2010 |
| 4. Ҡуян йылы | 1987 | 1999 | 2011 |
| 5. Ылыу йылы | 1988 | 2000 | 2012 |
| 6. Йылан йылы | 1989 | 2001 | 2013 |
| 7. Йылҡы йылы | 1990 | 2002 | 2014 |
| 8. Ҡуй (һарыҡ) йылы | 1991 | 2003 | 2015 |
| 9. Маймыл йылы | 1992 | 2004 | 2016 |
| 10. Тауыҡ йылы | 1993 | 2005 | 2017 |
| 11. Эт йылы | 1994 | 2006 | 2018 |
| 12. Сусҡа йылы | 1995 | 2007 | 2019 |

Мөсәл нисек барлыҡҡа килгән һуң? Боронғолар шулай тигән булыр ине: Ер таба кеүек түңәрәк, үҙе әйләнеп тора. Ғәләмәт ҙур балыҡ өҫтөндә, тарбайта баҫып, үгеҙ, уның һыртында Ер, мөгөҙөндә сысҡан тора, ти. Йыл мөсәленең барлыҡҡа килеүе шул үгеҙ менән сысҡанға бәйле. Сысҡан — ун ике йыллыҡ мөсәлде башлап ебәреүсе ул. Ни өсөн тиһәң, яңы килгән йылды иң элек сысҡан күргән. «Йылды кем алдан күрә?» — тип, Ерҙе күтәргән балыҡ менән үгеҙ бәхәс итә икән. Балыҡ әйтә, имеш:

— Мин күрәм! Мин күрәм!

Үгеҙ әйтә, ти:

— Һе, һин, имеш! Мин һинең өҫтөңдә торам да баһа! Иң элек үҙем күрәм!

Былар бәхәсләшкән арала сос сыҫҡан үгеҙҙең мөгөҙөнә менеп ултырған. Сыҫҡан:

— Юҡҡа тамаҡ ярмағыҙ. Сыҡҡан ҡояшты, яңы йылды ла үҙем беренсе күрәм, — тип әйткән, ти. Бына ни өсөн йыл унан башланған икән.

## Б

Бөтә көнсығыш халыҡтарындағы ун ике йылдан торған мөсәлде кесе быуат, тиҙәр.

## В

Уртаса быуат — «бер кеше ғүмере». Ул, уртаса алғанда, Башҡорт йондоҙоноң (Галлей кометаһының) бер урап килеүенә, йәғни етмеш алты йылға тигеҙ.

Ҡытай һәм болғар Тәңреһендә биш төҫ (аҡ — ҡар, мамыҡ сәскәһе; ҡара — тупраҡ; һары — лесс тупрағы, һары сәскәләр, Хуанхе, Хуанхай; йәшел — үҫемлек, зәңгәр — күк йөҙө). Шуны ун икегә (бер мөсәлгә — кесе быуатҡа) ҡабатлаһаң, алтмыш килеп сыға. Ул һан Юпитер әйләнешен бирә.

Башҡорттарҙа өҫтәмә төҫ булған. Ул — ҡыҙыл төҫ. Алты төҫтө — бер мөсәл — кесе быуатҡа ҡабатлаһаң, етмеш ике йыл килеп сыға. Шуны уртаса быуатҡа еткереү өсөн дүрт йылды ҡушалар. Ә бының өсөн кесе быуат йылдарын ишләп сығалар: бер йыл — урман ҡуяны булһа, икенсе йыл, үр ҡуяны итеп, ишләнә. Артабан йылҡы йылына йәнәш, тарпан (ҡырағай ат) йылын өҫтәгәндәр. Ҡорораҡ йыл «ҡара йылан» йылы булһа, дымлырағын «туҙбаш йылан» тигәндәр. Сыҫҡанға ҡомаҡтың, боланға мышының ишләнеүе мөмкин булған.

## 167. ЙЫЛ БАШЫ

Йыл яҙ айынан башланған. Уны халыҡта буранай тип, ҡаңбабалар, хәрбиҙәр телендә, ғөмүмән, рәсми әйткәндә, буранара тип йөрөткәндәр.

Айҙар дүрт төрлө исемләнеүе мөмкин булған: ҡаңбабаларҙың «ғилми», рәсми, космогоник календары менән йәнәш ҡатын-ҡыҙҙарҙың утыҙ өсәр көндән торған ун бер айлы үҙ хужалыҡ йылы булған. Ирҙәрҙең хужалыҡ йылының һәр айы егерме һигеҙ генә көндән торған.

Дөйөм халыҡ календары бөтәһен дә берләштергән. Унда айҙар шулай исемләнгән: буранай, алағарай, һабанай, һатай (июнь),

май йәки маяй (июль), урағай, һарығай, ҡарасай, ҡырпағай, аҡъюлай, һыуығай, шаҡай (февраль).

Бер үк айҙың исемдәре төрләндерелергә лә мөмкин. Июлде — йәшенай тип тә йөрөтәләр. Ир-ат уны — бесәнай, ҡатын-ҡыҙ — һарымай тигән осраҡтар ҙа булған. Апрель — алағар, епсерек; август — бойҙай — ураҡ, байураҡ, айураҡ; июнь — майбаш, аҡмай, күбекмай, ҡаймағай, үләнай, һөтай, жыйынай, һабантуяй, жыйынтуяй *, еләкай, яҙғы еләк, итҡанмаҫай, балығаҫҡанай, ғыж-ғыжай, арышһаҡатауай, уатуай, ҡыҙылъеләкай...

## 168. ОЛО ЙЫЛ ҺӘМ КЕСЕ ЙЫЛ

Йыл иртә яҙҙан — буранайҙан (марттан) башлана. Тәүәрих йоғонтоһо булмағанлыҡтан, йыл аныҡ ун икегә (изге апостолдар һанынса) бүленмәй. Башҡорт ун өсөнсө апостолды, һатлыҡ Иуданы * ла, белмәй. Шуға ла айҙар һаны, уларҙың оҙонлоғо көн-һауа торошо, хужалыҡ-кәсеп күҙлегенән билдәләнгән. Ҡатын-ҡыҙҙар календарындағы утыҙ өс көнлө айҙы — оҙон ай, ирҙәрҙең егерме һигеҙ көнлөк айын ҡыҫҡа ай тип әйтер булғандар. Шунан сығып, ун өс айҙан торған йылды — Оло йыл, ун бер айлыһын кесе йыл тигәндәр (ләкин йылдарҙың олоһо ла, кесеһе лә үҙ-ара тигеҙ тиерлек: $2\times14\times13=3\times11\times1+1$, йәғни $364=363+1$).

## 169. ЙЫЛДАРҘЫҢ БУЛМЫШЫ

### А

Барс йылы — байлыҡ,  
Һыйыр йылы — туҡлыҡ,  
Ҡуй йылы — ҡытлыҡ,  
Ҡуян йылы — йотлоҡ,  
Тауыҡ йылы — сүпләндек,  
Һарыҡ йылы — еңел йыл,  
Йылан йылы — яуынлыҡ,  
Маймыл йылы — алан-йолан (билдәһеҙ).

### Б

Йылан йылы — Һыҙғырыҡ,  
Ҡуй йылы — туҡ (һәйбәт) йыл,  
Сысҡан йылы — сысҡан күп (сөнки иген уңа).  
Һыйыр йылы — һыйлы йыл,  
Йылҡы йылы — ҡаты йыл,  
Ҡуян йылы — ҡаты йыл.

### В

Сысҡан йылы — йыл башы.  
Барс йылы — барын сәс,

Һис булмаһа — тары сәс.
Йылҡы йылының башынан һаҡлан.

Ҡуян йылы — ала-сола йыл: бер ерҙә — эҫе, бер ерҙә — яуын, бер ерҙә — иген үҫмәй, бер ерҙә — үҫә.

## Г

Төрк ғәләмдәре сәнәи шәмсиәне үҙҙәренә хас улған ысул йөрөтөп һәр йылда хайуандың исеме илә тәсмиә әйләб * мәзкүр * йылды тәбәиғ ғаләм вә әхүәл * йыһан шул хайуандың тәбиғиҡ үзрә дәүер итмәкте, йәғни әйләнеп үтеп тормаҡты тәжрибә итмештер. Мәзкүр хайуандарҙың йөмләһе ун ике улуб һәм ҡайһыһына хәким улалар, ун ике йыл да бер генә дәүер итәр. Был ысул сәнәи шәмсиәнең * башы хәмәлдән, йәғни март числаһынан иғтиба итмештәрҙер. Мәзкүр ун ике йылдың исемдәре вә тәртиптәре түбәндә яҙылғанса ижраи * ҡылынмаҡталыр.

1-се. **1924-се йылда — Сысҡан.** Был йылдың әүәлге айҙарында һәм уртаһында амансылыҡ вә халыҡ вә рәғиәттә * хуш хәл вә фаруансылыҡ * улыр. Әммә йылдың айҙарында халыҡтар вә падишаһтар араһында фетнә баш күтәрер. Ҡыш көнөндә һалҡын улыр вә йәй көнө мөғтәдил вә ямғыр улыр. Дәхи * сысҡандар күп улыр. Иген-ашлыҡтарға ашарға һөжүм итерҙәр.

2-се. **1925-се йылда — Һыйыр.** Йылда йәшен йәшенләр, күк күкрәп ямғыр күп улыр. Ҡышта аушандаҡ бурандар күп улыр, ҡар күп яуыр, ҡыш оҙон килер.Иген ашлыҡ вә һәр төрлө емештәр күп улыр вә фаруансылыҡ * улыр.

3-сө. **1926-сы йыл — Барыс, йәғни Ҡаплан.** Был йылда халыҡ араһында дошманлыҡ вә ғәҙелһеҙлек эш тотар. Йөмлә халыҡ араһында, падишаһтар араһында тыныслыҡ улыр. Йәй иген вә емештәргә афәт килер, йәғни ҡаты зилзиләләр улыр. Диңгеҙҙәрҙә тулҡынлы туфандар, күп һәләкәтлелек ваҡиға улыр.

4-се. **1927-се йыл — Ҡуян.** Был йылда игендәр вә емештәр, һәр төрлө ниғмәттәр күп улыр. Йәй һәм ҡыш мөхтәдил улып, һауалар яҡшы улыр. Йөмлә халыҡ араһында тыныслыҡ вә рәхәтлек улыр.

5-се. **1928-се йыл — Нәһәҡ, йәғни Лыу, балыҡ.** Был йылда халыҡ араһында нәзиғ * вә зәнжәл * һәм фетнә *, орош вә һуғыш пәйҙә улыр. Йәй көнө йәшен йәшенләп, күк күкрәп ямғырҙар күп улыр. Ҡыш бурандар күп улыр, ҡар күп улыр. Һалҡын улыр һәм ҡыш оҙон килер. Дәхи ағастарҙы һалҡын һуғар.

6-сы. **1929-сы йыл — Йылан.** Был йылда йәй ямғырҙар әҙ улыр, һауалар ҡоро улыр. Игендәр насар улыр, күп ерҙә аслыҡ

вə ҡиммəтселек улыр, ҡыш ҡар күп яумаһа ла, рөтубиəт * ҡоро һалҡын улыр. Халыҡ араһында ҡайғы вə хəсрəттəр улыр. Ерле тəжрибəгə ҡарағанда йəй ямғырлы улыр, бесəн, иген күп улыр, йыйырға ямғырлы улыб, маниғ улыр.

7-се. **1930-сы йыл — Йылҡы.** Был йылда йəй һауаһы йылы, ямғырлы улыр. Игендəр вə емештəр фарауансылыҡ улыр. Ҡыш ауышында ҡарҙар мөғтəдил * улыр. Халыҡ вə падишаһтар араһында фетнə зөһүр * əйлəп, суғыш вə орош зөһүр əйлəр. Дүрт аяҡлы хайуандарға ауырыу вə зəхмəт ирешер.

8-се **1931-се йыл — Ҡуй.** Был йылда йəй эҫе улыр, ҡыш һалҡын улыр вə оҙаҡ килер. Əҙəмилəрҙең миғителəрендə * киңселек улыр вə, рəхəтлек улып, падишаһтар араһында һуғыш башланһа ла, тиҙ солох * ваҡиғ * улыр. Əммə диңгеҙҙəрҙə вə кəмəлəрҙə һəлəкəтлек килер.

9-сы. **1932-се йыл — Бəсен — маймыл.** Был йылда лүгəр * араһында мəслихəт вə мəшəүəрə * улып, халыҡ араһында фосад * вə дошманлыҡ улыр. Йəйҙə ямғыр күп улып, ҡыш ҡар күп улыр, ҡатылыҡтар улыр. Əҙəмиəлəр араһында ауырыу вə хəсрəттəр улыр. Вə хайуандар араһында дөйə вə йылҡы нуғаһында * сырхауға бирешер.

10-сы. **1933-сө йыл — Тауыҡ.** Был йылда йəй ямғырлы һəм эҫе улып, иген вə һəр төрлө емештəр күп улыр. Ҡыш ҡарлы һəм ҡатығ улыр. Биғəйəт ҡаты һалҡынлы, оҙон килер ҡыш. Хəмлə * ҡатындарға ауырлыҡ килер һəм тары, ҡара бойҙайҙы иртə сəсергə кəрəк.

11-се. **1934-се йыл — Эт йылы.** Был йылда йəй ямғырҙар аҙ улыр. Игендəр һəм ашлыҡтар аҙ булғандан хаҡтар ҡиммəт улыр. Ҡыш йомшаҡ улыр. Емештəр арзан улыр. Халыҡ араһында үлемдəр күп улыр. Аллаһы ағлəм!

12-се. **1935-се йыл — Хынзыр.** Был йылда йəй ямғыр улып, иген-ашлыҡ күп улыр. Ҡыш оҙон вə һалҡын улыр. Иген-ашлыҡ арзан улыр. Падишаһтар араһында мөхəлəфəт * төшөр, һуғыш вə орош улыр. Халыҡ вə рəғиəт араһында тынысһыҙлыҡ улыр вə төрлө афəттəр улыр. Аллаһы ағлəм бал сү əжə!

## 170. ЙЫЛ МИҘГЕЛДƏРЕНЕҢ ИСЕМДƏРЕ

Алым айы (яҙ миҙгеле),
Йыйын айы (йəй миҙгеле),
Бирем айы (көҙ миҙгеле),
Ҡуян айы (ҡыш миҙгеле).

## 171. БОРОНҒО АЙ БҮЛЕМЕ ҺӘМ УЛАРҘЫҢ ИСЕМДӘРЕ

### А

1. Аҡман айы
2. Тоҡман айы
3. Хут айы
4. Һәүер айы
5. Ҡәкүк айы
6. Селлә айы
7. Ураҡ айы
8. Һарыса айы
9. Әҡрәп айы
10. Ҡараса
11. Ҡаңтар
12. Ҡышҡы селлә.

### Б

Һәр ай, тәбиғәтенә һәм әҙәм башҡара торған эштәргә ҡарап, яҡынса дүрт өлөшкә бүлеп йөрөтөлгән: «Тигмә айҙың үҙ яйы — дүрт эш ҡуша дүрт байы».

Беренсе айҙа, **буранара йәки буран айында,** йыл башлана. Уны шайҙанып-әҙерләнеп ҡаршы алырға кәрәк (шуғалыр ҙа уны ир-ат шайҙанмаҡ тип тә атай): ҡамыт-ыңғырсаҡ, эйәр-өпсөн әҙерләнә, көрәктәр һаплана, тырмалар тешәлә. Ҡулынан килгәне еп-йышыу хәстәрләй, арҡан ишә. Ғәҙәттә, ай башында буран да ҡарҙы ишеп һала: соҡор-саҡыр, уйпаттар тула, һырындарҙа һуҙылып ята арҡандары. Шуға ла буранара айының тәүге аҙнаһы Арҡанай исемен алған. Был мәлдә аласыҡтан сыҡмай, арҡан ишкән ирен өйгеше * Арҡанбай тип кенә исемләр булған. Арҡанбай йоланы йола итһә, ашарға ла сыҡмаған. Уға ашарға ла, тегеһен дә, быныһын да өйгеше йүгертеп индереп биреп торған. Бишектә — бәпәйе, аласыҡта ире ҡысҡырғанда, бишкә ярылырҙай булған өйгеше:

Арғусаҡта — Арҡанбай,
Биргусаҡта — Биләнбай,
Арҡанбай, аҡырмасы,
Биләнбай, баҡырмасы, —

тип һамаҡлар булған.

Буранараның икенсе бүлеме — Ҡарғайөр тигәндәр. Был мәлдә ҡарғалар килә, ләкин ергә төшмәй, туп-туп тупланып, ағас башында емләнә. Ирҙәр гел сана өҫтөндә булыр булған.

Ҡарғасуҡ. Буранараның өсөнсө бүлемен шулай тигәндәр. Ҡарғасуҡта ҡарғалар юл өҫтөн суҡый: унда буйҙан буйға ҡарғаларға ем — ат тиҙәге асыла. Саналар алыҫ-ара юл тотмай. Эшен бөтөргәне, тәртәләре алынып, ҡыйыҡ аҫтына мендерелә.

Буранайҙың һуңғы бүлеме — ҡыштың һуңғы бураны. Ул йылына ҡарап, март аҙағына, апрель башына тура килә. Өҫтән һыҡы, рашҡы яуа, кейемгә тейеү менән, йәбешә, ирей, һеңә. Атҡа ла, әҙәмгә лә атлау ауыр: тығыҙланған еүеш ҡар ни күтәрмәй, ни батырмай. Ундай саҡта юлға сыҡҡан әҙәм буранда аҙашып үлеү осраҡтары йыш була. Ҡемдең шундай саҡта юлда әжәл табыуы-

нан сығып, ул буранды төрлө яҡта төрлөсә атап йөрөтәләр: **Нәси-буран. Мөхәмәҙи-буран, Бишҡунаҡ, Аҡман-Тоҡман бураны...** Дөйөм исеме — һ ы р т т ы ҡ (һыртлыҡ, арҡалыҡ). Уңған кешс ул мәлдә юлға сыҡмаҫ булған. Йылы аласыҡта ишелгән оҙон арҡандарға ҡуш булһын тип, ҡыҫҡа бауҙар: һыртлыҡ, тышау, башбау, теҙген, арбасыбыҡ (ҡамсынан оҙон, сыбыртҡынан ҡыҫҡа, күсер кешегә ат ҡыуыу өсөн) — һырттыҡ бау әҙерләй.

Аҙна буйы, урамға сыға алмай, зар булған ҡортлоаяҡтар тәҙрә аша һырттыҡ буранын үсекләй:

Һырттыҡ-бырттыҡ!
Аҡ балаҫты йырттыҡ!
Һыртыҡҡа — һыртым!
Сусҡаға — шыртым!
Һырттыҡ — тоҙҙоҡ,
Аҡ бишмәтте боҙҙоҡ,
Буҙ өҫтөнә буҙҙыҡ,
Ҡыштың ыштыр ыштанына
Ут төртмәгә туҙҙыҡ,
Өргөмәгә ҡуҙҙыҡ,
Ҡыш артына тоҙҙоҡ!
Һырттыҡ, һинән ҡурҡмайбыҙ,
Һине һанға һуҡмайбыҙ.
Ҡиндер үҫеп етһен әле,
Ҡүл төбөнә төшһөн әле,
Талҡы талҡ-талҡ итһен әле,
Тәрәбағас һелкһен әле,
Ҡиле, төйгөс төйһөн әле,
Ел, елпетеп, һөйһөн әле,
Ҡаба ҡап-ҡап тетһен әле;
Ҡәртнәй орсоҡ тотһон ғына,
Енгәм киндер һуҡһын ғына,
Инәй ыштан текһен генә;
Атай атын екһен генә,
Йүкәлеккә китһен генә,
Йортҡа ҡайыҙ керһен генә,
Ҡарттай уны күрһен генә,
Сабатаһын үрһен генә —
Атылып тышҡа сығам да,
Һелтәп, ергә йығам да,
Һырттыҡбикә апайым,
Һине — бына күр ҙә тор —
Сабатам менән тапайым!

И к е н с е а й ҙ ы, **алағарҙы, ауырай** тиҙәр. Өҙлөк ваҡыт: әҙәмгә лә ризыҡ наҡыҫлана. Алағарҙың эске бүленеше бына ошолай: 1) ө ҙ ә р е м йәки юл-өҙәрем мәл, 2) б а ш а ҡ (көҙҙән ҡалған башаҡты йыйып, аш ейеү), 3) у м ы р з а я (һөтлөгән) м ә л е, 4) я п р а ҡ е л е (бөрө еле) м ә л е.

## 172. АЙҘАРҘЫҢ БУЛМЫШЫ

### А

**Ҡышҡы селләлә** көндәр сасҡау (үтә һыуыҡ) була. Ҡышҡы селлә ғинуарҙың иҫкесә биштәренән февралдең биштәренә тиклем һуҙыла.

**Йәйге селлә** эҫе була. Үлән һирәгәйә, һыйырҙың һөтө кәмей. Йәйге селлә июндең иҫкесә биштәренән башланып, августың биштәренә тиклем дауам итә.

**Һарыса** август баштарында башлана. Йәй һалҡын булһа, һарыса йылы булыусан. Шуға боронғоларҙан шундай һүҙ ҡалған: «Эй, һарыса килер әле!» (шулай тип күңел оҙайтҡандар).

**Аҡман** арты **тоҡман** килә.

Хәҙер **Аҡман-тоҡман** тип иҫкесә март башында (яңыса 14 март) була торған ҡаты буранға әйтәләр. Ул буран алты көн буйы бара. Боронғоларҙың «Аҡман-тоҡман — алты көн, алты айҙан да ҡаты көн» тигән һүҙе бар.

### Б

Халыҡ әйткән: «Һыртлыҡтан ҡурҡма, ҡытлыҡтан ҡурҡ», «Һыртлыҡ оҙон булһа, ҡытлыҡ ҡыҫҡа булыр. Һыртлыҡ һыҡыға ҡалһа, ҡытлыҡ йоҡоға ҡалыр».

Буранараның ҡайһы бер үҙенсәлектәре хаҡында бер йомаҡ та бар:

Тауҙа —таҙамаҡ,
Баҙҙа — баҙамаҡ,
Ҡарҙа — һаҙамаҡ,
Ярҙа — яҙамаҡ.

**Таҙамаҡ** — яҙын тау баштарының ҡарҙан асылыу мәле.

**Баҙамаҡ** — баҙҙағы бал ҡорттарын хәстәрләр мәл.

**Һаҙамаҡ** — көрт аҫтынан, ярмаланып, аҫтындағы һыуҙың туңмай (һаҙланып) ятыуы.

**Яҙамаҡ** — яр менән һыуҙың араһында йылыу ятҡан саҡ.

**Алағар** хаҡында халыҡ шулай ти:

1) Балағарҙа бар сана шәп,
Алағарҙа бер сана шәп.
(Балағарҙа барығыҙҙың санаһы шәп,
Алағарҙа алғырҙың санаһы шәп).

2) Санаҡа балағарҙа бал бир,
Алағарҙа ял бир.

3) Балағарҙан башлап арба йүнәт,
Алағарҙан башлап сана йүнәт.

4) Алағарҙа арбаңды майлап ҡуйғансы,
Санаңды яйлап ҡуй.

5) Балағарҙа батыр балаң боҙға баҫһын,
Алағарҙа артыҡ балаң боҙға ҡатһын...

В

Борон бер бәйғәмбәр Сәфәр айында оҙон юлға сыҡҡан. Юлы уң булмаған: ул кире ҡайта алмаған. Шуға был айҙы ҡоро ай тиҙәр. Шуға ла Сәфәр айында ҡыҙ бирмәйҙәр, ҡыҙ оҙатмайҙар.

## 173. МИҘГЕЛ ӘЙТЕҮ

А

1) Ҡыш миҙгеле — алты айға һуҙылыр,
Алты айҙың алты ҡатҡағы * булыр.

2) Февраль: «Әгәр мин ғинуар булһам, һыйырҙың мөгөҙөн һындырыр инем, көнөм генә ҡыҫҡа», — тигән, ти.

3) Февралдә ҡайын ботағында ҡар алҡаланып аҫылынып торһа, иген уңыр.

4) Ғинуарҙың көнө ҡыҫҡа,
Февралдең айы ҡыҫҡа.
Мартта — шарт та март.

5) Март башында (иҫкесә) турғай (тауыҡ) эсерлек һыу булһа, яҙ иртә килер.

6) Март башында * болот булһа, иген уңа, аяҙ булһа, йәйен йәшен көслө була.

7) Апрель йылы булһа, май елле килә.

9) Апрелдә — апырыр,
Апырмаһа, шапырыр.
(Апрелдә апырыр ҙа шапырыр).

9) Май айы ямғырлы булһа, ашлыҡ уңа,
Май айы һалҡын булһа, себен туңа.

10) Йәй ҡышҡа ҡарай.

11) Июлдең ун көнөндә ямғыр яуһа, туҡһан аҙағы * ямғырлы булыр.

12) Һарыса килмәй — көҙ етмәй.

13) Сентябрҙә — һин дә бер, мин дә бер.

14) Әкрап башында ҡар яуһа, ырҡ көн ҡара ятыр.

15) Ҡаңтар тыумай — боҙ тормаҫ.

Б

Көн оҙая башлағас, уның оҙонлоғо нисә сәғәт, шуға ҡарап, ваҡытҡа баһа (билдәләүҙәр) бирелгән. Ул ғинуар айынан алып һәм яҙғы эштәр башланыуға тиклем дауам итә.

Апрелдең әйткәне:
Һигеҙендә һикертермен (һыуыҡ була).
Туғыҙҙа туҡтатырмын (һыҡы булып, сана йүнләп шыумай).
Унында уйнатырмын (һыҡы бөтә, сана еңел шыуа башлай).
Көн йылынһа — күк табан (имән сана табаны күгәрә).
Ун берендә — уҡ табан (сана табаны уйнаҡлап ҡына шыуа).
Ун икеһендә — юҡ табан (ни арба, ни сана түгел ваҡыт).
Ун өсөндә — ек һабан (һабан әҙерләй башларға ваҡытты белдерә).
Ун дүртендә — һөр һабан (ер һөрөргә ваҡыт еткәнлеген белдерә).

## В

1. Етелә — еткерермен. Йәғни көн оҙонлоғо ете сәғәт булған ваҡытта ҡар етерлек яуған була.

2. Һигеҙҙә һикертермен. Йәғни ҙә көн оҙонлоғо һигеҙ сәғәт булғанда, көндәр буранға әйләнә. Тәбиғәт бабай, йәнәһе, әйтә була: «Мин һеҙҙе һырынтылар аша һикертермен».

3. Туғыҙҙа — туҡтатырмын. Йәғни буранлы көндәр бөтә.

4. Унында — уйнатырмын. Көн оҙонлоғо ун сәғәт булғанда, яңынан бурандар башлана. Йәнәһе лә, Тәбиғәт бабай әйтә була: «Ҡар бураны уйнатырмын».

5. Ун берҙә — уҡ табан. Йәғни бурандар баҫылыр, юл ялтырап ятыр, сана табаны уҡтай шыуыр.

6. Ун икелә — һуҡ табан. Көн оҙонлоғо ун ике сәғәт булғанда, ҡар епшек була, сана табанына йәбешеп кенә бара. Сана табанына йәбешеп туңған ҡарҙы сананы түңкәреп, һуғып ҡуптарып төшөрәләр.

7. Ун өстә — юҡ табан. Көн оҙонлоғо ун өс сәғәткә еткәндә, ҡар иреп бөтә. Сана юлы ҡала.

8. Ун дүрттә — һөр һабан. Көндөң оҙонлоғо ун дүрт сәғәт булғанда, һабанға төшәләр.

## Г

Ҡәкүк ҡысҡырған ай — Зәүҙә айы, бойҙай бешкән ай — Ғаҡрап айы.

Һәр мәлдең үҙенең йондоҙо була. Сәсеүгә һәүер йондоҙо * ҡалҡҡас ҡына сығалар. Шуға әйткәндәр бит:
Етелә — елдертә (октябрь айында ҡыҙыу-ҡыҙыу йөрөтә).
Һигеҙҙә — һикертә( ноябрь айында һыуыҡтар ҡуҙғала).
Туғыҙҙа тыу айғырҙы туҡтата (декабрь айында бик һыуыҡ).
Унда уйната (ғинуар айында күк ялтырай).
Ун берҙә — күк табан (февралдә ер күренә башлай).
Ун икелә — б...ҡ табан (март айында юлда ат б...ҡтары иреп ята).
Ун өстә — юҡ табан (апрелдә юлдар боҙолған, өҙөлгән ваҡыт).
Ун дүрттә — тот һабан (май айында сәсеүгә төшөргә ваҡыт).

### Ғ

Борон йәй айҙары ҡышҡа ҡарай, йәғни ҡыш нисек — йәй шулай була, тигән була торғайнылар. Ул тура килеш шулай билдәләнә:




## 174. КӨН ИСЕМДӘРЕ

Тыуған көн (дүшәмбе),
Атланған көн (шишәмбе),
Ҡан көн (шаршамбы),
Йыҡ көн (кесаҙна),
Йөк көн (йома),
Ҡоро көн (шәмбе),
Аҙна көн (йәкшәмбе).

Ҡоро көндө ҡыҙ бирмәгәндәр, никах уҡытмағандар. Тырнаҡ ҡырҡыу, күлдәк бесеү, күлдәк тегеү, мал һуйыу тыйылған.

Ҡоро көндө яңы нәмә (кейем-һалым) алмағандар, башлап киймәгәндәр. Ҡоро көндө сусҡаның сусҡаһы: «Бер бөртөк ҡылым да төшмәһен», — тип йөрөр, тигәндәр, ти.

Ҡалған көндәрҙе бәрәкәтле көндәр тигәндәр. Бәрәкәтле көндәрҙә эштәрҙең һәр төрлөһө рөхсәт ителгән.

## 175. КЕШЕ МИҘГЕЛДӘРЕ

### А

Бер йәшемдә бер нәмә лә белмәнем, ти,
Ун йәшемдә, уйнап, уйынға туйманым, ти,
Егермелә егет ҡорона кҿрермен, ти,
Утыҙ йәштә уттай уйнап торормон, ти,
Ҡырҡ йәшемдә ҡырҡа баҫып йөрөрмөн, ти,
Илле йәштә ил ағаһы булырмын, ти,

Алтмыш йәштә алғыр бүреләй булырмын, ти,
Етмеш йәштә, етеп, бүре һуғалмам, ти,
Һикһән йәштә һикереп атҡа меналмам, ти,
Туҡһан йәштә бар эштән дә туҡтармын, ти.
Йөҙ йәшемдә ҡояш йөҙлө булырмын, ти.

Б

Биш йәштә бишектән төшкән сағың,
Ун йәштә уҡырға кергән сағың,
Ун биштә уйнап туймаҫ сағың,
Егермелә үҫеп буйға еткән сағың,
Утыҙ йәштә ут биреп торған сағың,
Ҡырҡ йәштә урта йәштәр булған сағың,
Илле йәштә ил ағаһы булған сағың,
Алтмышта — алғыр бүреләй,
Етмештә — ерән төлкөләй,
Һикһәндә һикереп атҡа менә алмай,
Туҡһанда туҡтамай бара алмай,
Йөҙҙә йөҙмәйенсә тора алмай,
Йөҙ ҙә биштә, йөҙ ҙә унда —
Ер йөҙөндә була алмай.

В

Ун ике йәштә — уланмын,
Ун ике йәштә — уланмын, әй-әй...

Егерме йәшемдә — егетмен,
Егерме йәшемдә — егетмен, әй-әй...

Утыҙ йәшемдә — ыуҙып йөрөгән саҡтарым,
Ҡуҙып йөрөгән саҡтарым, әй-әй...

Ҡырҡ йәшемдә — ҡыҙыл төлкөләй саҡтарым,
Ҡыҙыл төлкөләй саҡтарым, әй-әй...

Илле йәшемдә ил ағаһы яһарҙар,
Ил ағаһы яһарҙар, әй-әй...

Алтмыш йәшемдә — алгыр бүре саҡтарым,
Алғыр бүре саҡтарым, әй-әй...

Етмеш йәшемдә — ерән төлкөләй саҡтарым,
Ерән төлкөләй саҡтарым, әй-әй...

Һикһән йәшемдә һикереп атҡа менермен,
Еңһеҙ тунды кейермен,
Еңгәм ҡалһа, йыярмын, әй-әй...

Тутһан йәшемдә һикереп атҡа менә алмай,
Еңһеҙ тунды кейә алмай,
Еңгәм ҡалһа, йыя алмай,
Тумырайып, туңҡайып,
Ятып ҡалыр көндәрем, әй-әй...

Йөҙ йәшемә еткәндә,
Баш осона таш ҡуйып,
Мәрхүм тиерһегеҙ, әй...

Г

Берҙә — бер ни белмәнем,
Күҙемә лә элмәнем,
Имеремде эҙләнем,
Унда — ундым,
Ғилемгә сумдым.
Егермелә — елдем,
Утыҙҙа — уҙҙым,
Ҡырҡта — ҡорға керҙем,
Иллелә — ил ағаһы булдым;
Алтмышта — ала төлкө,
Етмештә — ерән төлкө;
Һикһәндә — һикерҙем,
Туҡһанда — туңҡайҙым,
Йөҙҙә — йөҙҙөм
Иңендә өйҙөң,
Урындыҡты буйлап,
Әхирәтте уйлап,
Йөҙҙө үттем — көйҙөм,
Әжәлемде һөйҙөм,
Тормаç булдым — зөңкәйҙем —
Гүр кейемен мин кейҙем.

Ғ

Егермелә еләм-сабам ҡасҡандаймын,
Утыҙымда — утҡа, ҡуҙға баçҡандаймын.
Ҡырҡта — ҡырҡа баçып йөрөйөм,
Иллелә — илек шикелле йөрөйөм,
Алтмышта — атҡа атланам.
Етмештә — ерән төлкөләй йөрөйөм,
Һикһәндә — һикереп атҡа менмәм,
Туҡһанда — туңҡайып ятырмын,
Йөҙҙә — йөҙөп йөрөрмөн (аяҡҡа ла баçа алмам),
Үҙ-үҙемдән көлөрмөн,
Көлә-көлә бөлөрмөн..

Д

Кеше ғүмере биш мөсәлгә (өлөшкә) бүленә:
1-се өлөш — сабый саҡ, балалыҡ дәүере (1—12 йәш),
2-се өлөш — үҫмер саҡ (13—24 йәш),
3-сө өлөш — яңы тормош мәле (25—36 йәш),
4-се өлөш — урта йәштәр (37—48 йәш),
5-се өлөш — ҡартлыҡ (49—60 һ. б. йәш).

## 176. НӘҪЕЛ КИТАБЫ — ШӘЖӘРӘ

Нәҫел китабы — шәжәрә. Ул сер итеп кенә һаҡлана икән. Нәҫелдән иң олоһо яҙа уны. Шул яҙыу нәҫелдән нәҫелгә (йәғни ҙә быуындан быуынға) күсә килә, һәр быуындың өлкәне уны тултыра бара. Тәкәевтарҙың нәҫел китабы Тәкәев Кәшфулла бабайҙа була. Кәшфулла бабай Стамбулда уҡып ҡайтҡан ҡарый (Ҡөрьәнде яттан белеп аңлатма биреүсе) ине. Белеме ҙур ғалим кеше булғанлыҡтан, уны Өфөгә саҡыралар. Ул унда хәҙерге Октябрь революцияһы урамында торҙо. Китаптары — бер стена.

## А

Ҡышҡы Нардуған 25 декабрҙә башланған һәм бер аҙна тирәһе дауам иткән. Яңы йыл ишек шаҡығас, ун ике айҙы хәтерләткән ун ике ҡыҙ уйын ойошторған. Халыҡ тамаша ҡарарға ашыҡҡан. Ҡисәлә төрлө уйындар уйналған, нәфис һүҙ оҫталары сығыш яһаған. Иң ҡыҙыҡлыһы «Балдаҡ» уйыны булған. Йор телле ҡыҙҙар һәм егеттәр «Ҡулымдағы балдағымдың» тигән башлау менән ошо йылда ниҙәр булаһын юрағандар.

Ҡышҡы Нардуған ҡышҡы селләнең (25 декабрҙән 5 февралгә тиклем) беренсе аҙнаһына тура килгән. Шуға күрәлер инде, Нардуған уйындарының төп геройы Селлә бабай — хәҙергесә Ҡыш бабай булған.

## Б

Нардуған байрамы йыл ахырында, көн ҡыҫҡарыуҙан туҡтағас уҙғарыла. Ҡыш булыуына ҡарамай, берәй иркен йортта йыйын йыялар. Йыйынға һәр кем үҙ өлөшөн тотоп килә: итен, ҡаҙылыын, майын, һалмаһын, ярмаһын — барсаһын. Сапҡынсылар, бала-саға өйҙән өйгә йөрөп хәбәр тарата, теләк теләй. Теләкте урамда ла әйтеп йөрөйҙәр:

— Нар, нар, нарына,
Бәхет бирһен барыңа.
Мал-тыуарың түл йәйһен,
Бала-сағаң ит ейһен *!
Малың ашһын ҡуранан,
Ашың * ашһын буранан!
Илең, йортоң һил булһын,
Күңелегеҙ киң булһын!

Өйгә инеп шулай тигәс, өй хужалары үҙҙәре ни ашаһа, теләкселәргә шунан өлөш бирә.

Өйҙән сығыр саҡта йәнә теләк һүҙен һамаҡлағандар:

— Нар, нар, нарына,
Рәхмәт һеҙгә, барыңа!
Малдарығыҙ түл йәйһен,
Барсағыҙ ҙа ит ейһен;
Һөтлө булһын бейәгеҙ,
Уҡлы * булһын йәйәгеҙ;
Мәргән булһын уғығыҙ,
Барға сыҡһын юғығыҙ *,
Малығыҙ ашһын ҡуранан,
Ашығыҙ ашһын буранан;
Ил-йортоғоҙ һил булһын,
Йәннәттәргә тиң булһын.



# ТӘБИҒӘТ БАЙРАМДАРЫ

## 177. КЕСЕ ЙЫЛ БАЙРАМЫ

Ҡатындар йылы бер көнгә кәм булған (утыҙ өс көнлөк ун бер айҙан торған). Шуға ла өйгешеләр йыл аҙағы булған шаҡайға (февралгә) бер көн өҫтәгәндәр ҙә уны Кесе йыл байрамы үткәреү өсөн файҙаланғандар.

Кесе йыл байрамында ете-һигеҙ өйгеше бер ҡорға ҡоролоп, сөгөнсәйгә (самауыр сәйенә) йөрөгәндәр. Сәйе тамаҡ ебетер, тел сисер өсөн, ә төп эш — ҡор ҡорған ҡатындың хужалыҡ мәшәҡәттәрен уртаға һалып тикшереү булған. Нисек ул-был эште атҡарырға, туймаҫты туйҙырырға, етмәгәнде еткерергә, өҙөктө ялғарға, ҡыҫҡаны һуҙырға. Бына шул хаҡта кәңәш-төңәш иткәндәр. Йәнә килеп йәш килендәргә нисек көрөҫ (туҡыу станогы) ҡорорға, нимәне ҡалай һуғырға, башҡаһын күрһәтер булғандар.

## 178. ОЛО ЙЫЛ БАЙРАМЫ

Оло йыл байрамы — Кесе йыл байрамы башланғандың иртәгәһенә үткәрелгән. Ул көндө ҡатындар кисә башланған байрамды дауам иткән: өйрәнсекте өйрәткән, тел-таба көйрәткән. Ир-ат иһә, өсәре, дүртәре бер аласыҡҡа йыйылып, йыл килешен тикшергән, аласыҡ хужаһының еп-йышыуын, һуҡа тырмаһын ҡараған, арба тәгәрмәсенә тимер ҡоршау тартҡан.

## 179. НАРДУҒАН БАЙРАМЫ

Иң оҙон һәм иң ҡыҫҡа көндәр йәйге, ҡышҡы Нардуған байрамдары менән билгеләп үтелгән. Яҙ көндәрендә Һауруз, көҙ көндәрендә Сөмбөлә байрамдары үткәргәндәр. Байрамдар араһы өс ай булған.

Әйҙә, амин тотайыҡ,
Йортоғоҙҙо ҡотлайыҡ.

Шулай тип, доға ҡылалар ҙа;

— Нар-нар, нардуған,
Нардуғанға бар, туған, —

тип саҡырып китәләр.

Йыйын булған йорт эсендә һый бөтөүгә, тышта төрлө уйындар уйнала. Ҡарттар урам буйлап тәкбир әйтеп уҙа. Аулаҡ йортта ҡыҙҙар йондоҙнамә аса, фал һала — кейәүгә сығырҙарын, кемгә барырҙарын юрай. Иртәгәһен өйҙән өйгә ҡунаҡҡа йөрөшөү башлана.

Байрам ике-өс көнгә, аҙнаға һуҙыла.

### В

Йәйге Нардуған үҙенең аяулығы менән айырыла. Был көндәрҙә (25 июндән 5 июлгә тиклем) тәбиғәтте аяғандар. Ау аулау, тереклектән ҡан сығарыу — мал салыу, ағас киҫеү, бесән сабыу кеүек эштәр тыйылған. Тик, ни ғәжәптер, нәҡ ошо ваҡытта имтомға тип сәскәләр, шифалы үләндәр йыйып ҡалғандар. Аяу көндәрендә йылға-күлдәргә етмеш ете төрлө сәскә һалғандар. Был шулай уҡ йәйҙең һәйбәт килеүенә ышанып эшләнгән. Тора-бара был ғәҙәткә инеп киткән: халыҡ йыл һайын сәскә байрамы үткәрә башлаған.

### Г

Борон Нардуған байрамы беҙҙең яҡтарҙа ҡыш көнө үткәрелгән. Көн ҡыҫҡарып, иң оҙон төн етеп, яйлап көн оҙайыуға киткән арала. Байрамға бер иркен аулағыраҡ өйгә йәш-елкенсәк йыйылған. Шунда урын ашы ла бешергәндәр. Яңы йыл тыуыш менән ҡотлашҡандар, һамаҡтарын әйткәндәр:

— Нар, нар, нардуған,
Барың бәхетле булһын,
Яңы йылы ҡот булһын,
Теләге ҡабул булһын,
Нардуғаным, нар булһын —
Эсе тулы нур булһын!
Нардуған көйөн көйләгәнгә,
Бәхет-ырыҫ теләгәнгә,
Йорт-хужаһы бай булһын,
Дәүләт, ырыҫлы булһын.

Байрамда йөҙөк һалыш уйыны уйнағандар. Бер-береһенә шатлыҡ, бәхет, уңыш теләшкәндәр.

## 180. НАУРУЗ БАЙРАМЫ

### А

Науруз байрамы көн менән төн тиңләшкән көндә башлана лә ай ахырына тиклем һуҙыла. Уны халыҡта Яңы йыл башы, Яңы йыл байрамы тип тә йөрөтәләр.

Науруз байрамыңа алдан әҙерләнеп ҡуялар. Һәр кем, һәр ауыл хәленән килгәнсә йыйына, уйын төрҙәрен уйлай, ҡайһы ерҙә ҡайһынын ойоштороу тураһында һүҙ беркетелә.

Науруз тыуған көндә һәр өйҙә һый әҙерләнә. Айырыуса бешкән итте табаҡҡа тураm, шуның өҫтөнә килелә төйөп быҡтырылған бойҙай һалынған ашҡа өҫтөнлөк бирелә. Бойҙай — туҡлыҡ, ырыҫ билдәһе ул. Унан аш әҙерләгәндә:

— Науруз йылға баш булыр,
Бойҙай ашҡа баш булыр,
Бойҙай уңһа, аш булыр,
Уңмаһа, таш аш булыр.
Йылдың башы уң булһын!
Ыризығы мул булһын!
Игендәр шашып уңһын!
Ҡаҙандар ташып торһон!
Бир көндәрҙең һилен —
Илдәр булһын имен! —

тип һамаҡлайҙар. Шулай һамаҡлай-һамаҡлай тәүҙә бойҙайҙы ауыҙ итәләр. Сөнки бойҙай — аштың иң өлкәне.

Науруз башланғас та, иртә менән бөтә бала-саға, йәштәр, үҫмерҙәр ауылдың ҡарттарын күреп сығырға тейеш. Һәр өйгә инеп: «Әссәләмәғәләйкүм!» — тип сәләм биреп, ике ҡуллап оло кешеләр менән күрешәләр. Уларҙан фатиха алалар. Ситтә булған оло ҡәрҙәштәре барып, улар менән күрешеп, фатиха алыу ҙа изге эш һанала. Тәүге көндә күрешә алмағандары аҙаҡ күрешә. Тик байрам бөтмәҫ элек.

Науруз байрамында бөтәһе лә боронғо милли кейем кейә. Урам тулып йөрөй. Эске-фәлән булмай ине.

Оло инәйҙәр хәтерләүенсә, иҫке һаламдан оло ҡурсаҡ һынын эшләп, төрлө суҡтар менән биҙәгәндәр, унан һуң, изге теләктәр теләп, яндырғандар.

Науруз байрамында ат сабыштырыу, көрәш, ҡыҙ ҡыуыу, тартышыу (һыбай сабып килеп, берәү ерҙә ятҡан һарыҡ, ҡуй, кәзә түшкәһен эләктереп ала. Ҡалғандар уны тартып алмаҡсы була. Китә тартыш, китә айҡалашыу, китә алыш) үткәрелә.

Науруз байрамында бүтән төрлө бәйге, ярыштар ҙа була. Никах туйын шул байрамға тура килтереү изге һанала. Байрам Науруз айы бөткәнсе дауам итә.

Зөйәк ауылында «Ҡышты оҙатыу» байрамы Инйәрҙең боҙо өҫтөндә үткәрелә. Унда ете йәштән алып етмеш йәшкә хәтлемге кешеләр үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәтә. Әбейҙәр тоҡ кейеп йүгерешә, бабайҙар саңғыла «ярыша».

Был байрамға хужабикәләр төрлө-төрлө ризыҡтар алып килә. Күрше ауылдар ҡунаҡҡа саҡырыла.

«Ҡышты оҙатыу» байрамында айырыуса иғтибар йәлеп иткән бер нәмә бар. Ул — кейендереп ҡуйылған Ҡыш бабай һыны. Уны күмәк халыҡ алдында үртәйҙәр. Бындай саҡта: «Ҡыш башында һин ҡәҙерле ҡунаҡ инең, хәҙер инде яндырылаһың», — тип, уны ҡыҙғанып та ҡуяһың. Ләкин шул саҡ репродукторҙар аша йырҙар, төрлө көлкөлө таҡмаҡтар яңғырай башлай, Ҡышҡа ҡарап, яҙ, йәй миҙгелен һынау тураһындағы мәғлүмәттәр әйтелә, көләмәстәр һөйләнә. Унан инде уйындар, бәйгеләр башлана. Боҙ өҫтөндә шыршы ла була. Уға төрлө-төрлө бүләктәр эленә. Ҡемдең буйы етә — бүләк шунышы.

## Б

Науруз байрамының да сере бар: уҙған йылдағы иң иҫтәлекле ваҡиғаларға бағышлап шәкерттәр кескенә бәйеттәр яҙғандар. Уларҙы өйҙән өйгә уҡып йөрөгәндәр. Бәйет әйтеү — аят әйтеү һауабы, тигән халыҡ. Бындай бәйеттәр ауыл йәки ҡаланың йылъяҙмаһына кергән. Науруз көндәре уйын-йолалары менән дә иҫтәлекле. Байрамда иң сибәр, аҡыллы ҡыҙҙы Наурузбикә итеп һайлап, унан йәйҙең нисек булаһын һорағандар. Ҡыҙ, әлбиттә, яҡшы йәй генә юраған. Уның һүҙҙәре ҡарттар күңеленә лә хуш килгән. «Юрауың юш булһын, Наурузбикә!» — тип хуплағандар.

## В

Көҙ яҡынлашҡас, кешеләр Сөмбөлә байрамына әҙерләнә башлаған. Науруз байрамындағы шикелле, бик матур ҡыҙҙы Сөмбөлә итеп кейендереп, майҙанға алып сыҡҡандар. Ҡыҙға береһенән-береһе сетерекле көтөлмәгән һорауҙар бирелгән. Мәҫәлән: «Балтамы, беҙме?» — тип һорағандар. Сөмбөлә: «Балта!» — тиһә, көҙ һалҡын буласаҡ, боҙҙо балта менән дә вата алмаҫһың, тигәндәр. «Беҙ!» — тиһә, көҙ йылы киләсәк, йылғалағы боҙҙо беҙ менән дә тишергә мөмкин буласаҡ, имеш. Йор телле Сөмбөлә аптырап ҡалмаған, барыһына ла яуап биргән. Уның һүҙҙәрен төрлөсә юрап, көҙҙөң нисек киләһен белергә тырышҡандар.

Сөмбөлә үҙе лә, уның һары сәстәре лә көҙҙө, алтын башаҡтарҙы хәтерләткән. Һәм уны шулай кейендергәндәр ҙә.

Сөмбөлә — сөмбөл сәсле ҡыҙ тигәнде аңлата. Сөмбөл һүҙе иһә ғәрәпсә «һары сәс», «башаҡ» мәғәнәһендә икән.

## Г

### Науруз бәйете

Һауанан осар мең ҡаҙ,
Меңенең башлығы — бер ҡаҙ.

Асылыр мөхәррәм * яҙ —
Науруз мөбәрәге бар.
Науруз әйтә беҙ килдек,
Ҡотло ямалын күрҙек,
Изге доғалар ҡылдыҡ —
Науруз мөбәрәге бар.
Ағиҙел буйы гел тирәк.
Япраҡтары һип-һирәк,
Тамаҡ ҡатҡан, май кәрәк —
Науруз мөбәрәге бар.
Науруз хаҡы — бер алтын,
Ҡарама ялтан-йолтан,
Ҡараһаң, бир ике алтын.
Науруз мөбәрәге бар.
Эй, төш, бикәм, төш, бикәм,
Төшөп, башмаҡ кей, бикәм,
Науруз хаҡын бир, бикәм —
Науруз мөбәрәге бар.
Һауала себен тызлар,
Был өйҙә күптер ҡыҙҙар,
Улар(ҙы) күрең, эс һыҙлар —
Науруз мөбәрәге бар.
Былбыл, һандуғас һайрар,
Тутыйғош шәкәр сәйнәр,
Ҡәкүк, ҡарға эҙе ҡайнар —
Науруз мөбәрәге бар.
Эй, Зәйнулла, Зәйнулла, —
Һары май ашар мулла,
Килтерһәгеҙ ни була!
Науруз мөбәрәге бар...

## 181. ҠӘКҮК СӘЙЕ

### А

Ҡәкүк сәйен элек май айында, кәкүк килгәс, үткәрә торғайнылар. Ҡәкүк сәйенә сыҡмаҫтан алда малайҙар йә һыбай, йә йәйәү өй һайын ашамлыҡ йыя торғайнылар. Ҡемдәр һөт, май, ҡорот бирә, кемдәр талҡан тартып бирә, йомортҡа, майлы икмәк йыйып алалар. Шунан ҡыҙ-ҡырҡын, ҡарт-ҡоро, бисә-сәсә матур итеп кейенешеп, бала-сағалары менән ҡырға сығалар.

Ғөрөф-ғәҙәтте белгән ауылдың өлкән әбейе нимә ҡуша, шуны эшләп торғайнылар.

Ҡәкүк үҙе матур итеп ҡысҡырһа ла, кеше уға шомланып, шикләнеп ҡарай торғайны бит. «Өй башына ултырып ҡысҡырһа — килешмәй: йортҡа ҡайғы килә. Ауылға осоп килһә, аслыҡ була»,— ти халыҡ. Шуға ҡырға сыҡҡан ыңғайы кәкүк ултырып саҡырған тирәк төбөнә аҡ ризыҡ — һөт, ҡатыҡ ҡоя торғайнылар. Малай-

ҙар йомортҡа ла алып барып һалалар. Илгә именлек һорап, кәкүктән гел яҡшы теләктәр теләп, тирәк башына ҡарап ялбара торғайнылар.

Ҡыҙҙар һылыу егеткә кейәүгә сыҡмаҫмынмы икән тип, кәкүктең күпме саҡырғанын һанай. Бер туҡтауһыҙ оҙаҡ саҡырһа — һылыу кейәүгә, әҙ генә саҡырһа — яман кейәүгә.

Әбейҙәр кәкүктән нисә йыл ғүмере барлығын һораған була торғайнылар. Күберәк саҡырһа, күберәк йыл вәғәҙә итә. Шуға рәхмәт йөҙөнән тирәк төбөнә һөтмө, ҡатыҡмы алып барып ҡоя торғайнылар. Ундай саҡта «Наза», «Аҡ тирәк», «Күмер йөҙөк» кеүек уйындар уйнайҙар. Талпына-талпына кәкүккә оҡшатып бейей торғайнылар. Йырҙарҙы ла кәкүккә арнап йырлайҙар ине.

Бына шул йырҙарҙың бер нисәһе:

Саҡырмасы, кәкүк, эй ҡаршымда,
Саҡырһаңсы ағас башында,
Саҡырмасы, эй, ҡаршымда —
Хәсрәт кенә бирмә башыма.

Сәхрәләрҙә кәкүк, эй, саҡыра,
Бала кәкүк микән, бисара.
Уфтанһаҡ та, дуҫтар, илаһаҡ та,
Хоҙай биргән эшкә ни сара.

Сәхрәләргә сығып йөрөгәндә,
Кәкүк саҡыра тирәк башында.
Кәкүк тә генә саҡыра мин илайым,
Ғүмер һорап ғәзиз башыма.

Аҙаҡтан ҡалған ризыҡты тирәк төбөнә һалып китерҙәр ине.

Кәкүк сәйенә сығып, бына шулай рәхәтләнеп бер ял итеп ала торолонғайны.

## Б

Кәкүк сәйе хәҙер шулай үткәрелә. Ауылдың олоһо ла, кесеһе лә матур тәбиғәт ҡосағына йыйыла. Байрамға сығыусылар үҙҙәре менән сәйен-шәкәрен, башҡаһын алып сығалар. Ҡырға сыҡҡас, өйкөм-өйкөм булып, түңәрәктәр яһап ултыралар. Байрамды алып барыусы — ҡатын-ҡыҙҙар советы председателе һүҙ ала. Ул сығышында был йоланың тарихы, үткәреү маҡсаты тураһында һөйләй. Унан һуң ҡатын-ҡыҙҙар байрамы булараҡ, йыйылған ҡатын-ҡыҙҙарҙы ошо байрам менән ҡотлай, байрамды үткәреү тәртибен әйтә.

1. Төрлө ярыштар ойошторола. Ҡул эштәре, аш-һыу оҫталары билдәләнә. Бында ҡуйылған ваҡыт эсендә ҡуҙғалаҡ, йыуа, балтырған, әтмәкәй кеүек үҫемлектәрҙән аш әҙерләү күҙ уңында тотола.

2. Алдан билдәләнгән кешеләр аҡ самауырҙар ҡайната, аш бешерә. Ҡәкүк сәйе эселә.

3. Йыр-бейеү оҫталарының сығышы.

4. Төрлө уйындар. Ниндәй уйындар үткәрергә икәнлеген ҡатын-ҡыҙҙар советы алдан уйлап ҡуя («Аҡ тирәк, күк тирәк», «Һәпәләк» кеүек уйындар).

Конкурстар, уйындар тамамланғас, кәкүк сәйе эселгәс, еңеүселәргә, ярышта ҡатнашыусыларға бүләктәр бирелә.

Ҡәкүк сәйенә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар уйнап-көлөп күңел аса, бала-сағаһы менән тәбиғәт ҡосағында кинәнеп ял итә.

## В

Байрам кәкүк саҡыра башлағас, кәкүк емеше сыҡҡас үткәрелә. Ул көндө ҡарты, йәше урманға йүнәлә. Үҙҙәре менән баҡырса һәм башҡа сәй ҡайнатыр кәрәк-яраҡтары, аҙыҡ-түлек алып баралар. Юлдыбай ауылында был байрам Түш урманында үткәрелә, сөнки Һаҡмар йылғаһы ла яҡын, тәбиғәт тә бик матур. Бында ҡарағай, ҡайын, таллыҡ етерлек, етмәһә ҡаршыла ғына Талтүбә, Сейәле тауҙары, арыраҡ — Сонтоғаш тауы. Йәй көнө был тауҙар янында еләк тә, сейә лә, бөлдөргән * дә, ҡурай еләге лә, муйыл да күп була. Сонтоғаш түбәһенән бөтә ауыл ус төбөндәге кеүек күренә.

Урманға барғас, малайҙар ҡоро сатыр-сотор йыйып килтерә, ҙурыраҡ ҡыҙҙар сәй ҡайната башлай. Башҡалар күп итеп һары сәскәле кәкүк емеше, умырзая йыйып алып килеп, бөтәһенекен дә бергә дөйөм бер оло һауытҡа ултырталар (бының өсөн айырым һауыт алып киләләр). Был сәскәле һауыт табындың уртаһына ултыртыла.

Сәй ҡайнап сыҡҡас, табын башлана. Табын янында оло әбейҙәр булһа, бигерәк тә күңелле була. Сөнки улар ниндәй ҙә булһа әңгәмә һөйләй, ғибрәтле хәлдәрҙе телгә ала. Ҡәкүк, башҡа ҡоштар тураһында балалар яратып тыңлай. Ололар булмаһа, балалар, алдан әҙерләнеп килеп, үҙҙәре сиратлашып һөйләй. Шулай һөйләшә-һөйләшә сәй эсеп бөткәс, дөйөм уйындар башлана. Барыһы ла иғтибар менән кәкүк тауышын тынлай, ҡысҡырып уға һорау бирә:

— Моңло кәкүк,
Әйтсе әлүк!
Бөгөн миңә нисә йәш?

Моңло кәкүк,
Әйтсе әлүк,
Мин йәшәйем нисә йәш?

Шунан кәкүк тауышын һанайҙар:
— Берәү, икәү, өсәү...

Ҡәкүк етене ҡысҡырып туҡтаһа, балалар хор менән ҡысҡыра:
— Ете йәш! Ете йәш!
Сиратлашып шулай һанап бөткәс, балалар түңәрәккә тотоналар. Бергәләп йырлайҙар:

— Һаумы, кәкүк, ҡошҡайым,
Ҡасан килдең, дуҫҡайым?
Емештәрең бик тәмле,
Моңло һуң тауышҡайың.

Тыңла кәкүк тауышын,
Әйтер ғүмер ағышын,
Әйтер үҙе һағышын,
Уйландырыр яҙмышың...

Тағы бер уйын: бында ла түңәрәк әйләнеп бергәләп йырлайҙар:

— Кәкүк сәйе байрамына
Беҙ аҡ ҡалас бешерҙек.
Бына шулай ҡабарған,
Бына шулай бик бейек,
Бына шулай киңерәк,
Бына шулай түңәрәк.

«Ҡабарған», «бик бейек», — тигәндә, тотоношҡан ҡулдар өҫкә күтәрелә, «киңерәк» тигәндә, түңәрәк киңәйтелә. Түңәрәк йырлап бөткәс, уртаға бер бала сыға һәм битен ҡулы менән ҡаплап тора, ул күрмәгәндә уйынды алып барыусы «ҡаласын» берәй балаға йәшерә. Ә хәҙер урталағы кеше «ҡаластың» кемдәлеген әйтергә тейеш. Әгәр ҙә дөрөҫ әйтһә, түңәрәккә барып тотона, уртаға «ҡалас» тотҡан бала сыға. Уйын шулай дауам итә. Урталағы кеше өс тапҡыр дөрөҫ әйтмәһә, уға «яза» бирелә. Уны йә йырлаталар, йә бейетәләр.
Бынан тыш шундай уйындар уйнала: «Боҙоҡ телефон», «Энә, еп һәм төйөн», «Штандар», «Ишәк», «Йоҙроҡ еҫкәтеү» һ. б.
Малайҙар күберәк йүгереүҙә, һикереүҙә, көрәштә ярыша.
Ә иң аҙаҡ олораҡ бер үҫмер һәр балаға дөйөм һауыттан сәскә тарата. Сәскәләрҙе алып ҡайтҡас, һәр кем үҙенсә ҡәҙерләп ултыртып ҡуя.

## 182. МАЙ СӘЙЕ

Элгәре был йола беҙҙең яҡтарҙа сәсеү бөткәс, болондар сәскәгә төрөнгәс, ауыл ус төбөндәгеләй күренеп торған Ҡарауыл тауында уҙғарылған. Унда сәй ҡайнатып, сәй, ҡымыҙ эсеп, күңел-сафа ҡорғандар.
— Сәселгән ашлыҡтар уңып, ризыҡҡа яҙһын, — тип мул уңыш

теләгәндәр. Көн кискә һарыҡҡас, май миндеге һындырып, ҡайтышҡандар.

Хәҙерге көндә был йола икенсерәк формала йәшәй. Май байрамында йәштәр тауға менә, уйындар уйнай, уларға эйәргән өлкәндәр май миндеге һындыра. Теләк теләү юҡ.

## 183. ҠАРҒА БУТҠАҺЫ

### А

### Алсабыр

«Ҡарға бутҡаһы» байрамын үткәрер алдынан ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә, әбей-һәбей йыйылып кәңәш-төйөш итәләр. Байрамды ҡайҙа, ҡайһы көн үткәреү, уға ҡайһы ауылдарҙан кемде саҡырырға һүҙ беркетәләр. Үткенерәк еткән ҡыҙҙарҙан, килендәрҙән саҡырыусылар һайлана.

«Ҡарға бутҡаһы» — халыҡ байрамы. Әммә унда ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡатнаша ала. Бешерем-төшөрөм, бәйгеләрҙә еңеүселәрҙе бүләкләү сығымдарын да бергәләп күтәрәләр. Ауыл буйлап бүләк, ярма, май, йомортҡа йыйыусыларҙы алсабырҙар тип йөрөтәләр.

Алсабыр итеп ауылда абруйлы, һүҙе үтемсәк, үҙе күңелсәк, йыр, бейеү оҫтаһы булғандай әбейҙәрҙе һайлайҙар.

Ауыл буйлап бүләк, ризыҡ йыйғанда, алсабырҙар сағыу-сағыу күлдәктәр кейеп, биҙәкле таяҡтар таянып, һамаҡлай-һамаҡлай йөрөйҙәр. Уларға бала-саға эйәрә. Улар шулай тип ҡысҡырыша:

— Ҡарға әйтә: «Ҡар, ҡар!
Ҡарғатуйға бар, бар!
Ҡарғатуйға бармағандың
Күңеле булыр тар, тар,
Күңеле булыр тар, тар —
Ҡарғатуйға бар, бар!»

### Б

### Юлбарсы

Һабан туйында, Ҡарға бутҡаһы байрамында һәм йыйындарҙа тәүҙә башлап йөрөүсе һайлап ҡуялар. Ул сая ла, ғәҙел дә, телгә лә оҫта булырға тейеш. Шул кешене юлбарсы тип йөрөтәр булырҙар. Байрам мәлендә әллә ҡайҙан таныулы булһын өсөн юлбарсы үҙенсә айырым кейенгән. Ул ир кеше булһа (һабантуйҙа), башына ҡырпыулы бүрек, өҫтөнә суҡлы эңербаулы аҡ күлдәк кейә. Билен ике осо ла суҡланған ҡыҙыл билбау менән быуа. Ә ҡатын юлбарсы (ҡарға бутҡаһында, кәкүк сәйендә һ. б.) сыбар

күлдәк, еңһеҙ ҡыҙыл бишмәт кейә [5]. Бишмәте шау тәңкә була, арҡаһына ике төрлө яулыҡ ябына: береһен яҙып ябына, береһен — кире ҡайтарып тарта. Яулыҡтарына ялтыр көмбәҙҙәр баҫылған була. Башына бейек көләпәрә (башлыҡ) кейә.

## В

Яҙ етә. Йылы яҡтан ҡарғалар ҡайта башлай. Матур көндәрҙең береһендә оло инәйҙәр бергә йыйылып, тәмле нәмәләр бешереп, баҡырса (сәйнүк), самауыр, көршәктәрен тотоп, йылға буйына сығалар. Улар шунда бутҡа ашап, сәй эсеп, бейеп, йырлап, күңел асып, кис булғас ҡына өйҙәренә ҡайталар. Бутҡа бешергәндә:

— Бут-бут, бутҡа бешә,
Уртаһына сысҡан төшә.
Бут-бут, бутҡа бешер,
Уртаһына сысҡан төшөр.
Бут-бут, бутҡа бешә,
Беҙҙең бутҡа майһыҙ бешә.
Бут-бут, бутҡа бешер,
Бутҡаң янына мине саҡыр, —

тигән һүҙҙәрҙе әйтәләр.

## Г

Ҡар бөткәс, Ағиҙел яры буйына ҡаҙандар ултыртып бутҡа бешереп, йылдың арыу килеүен теләйҙәр. Аш бешкәнсе, әбей-һәбей:

— Иләк менән иләп тор,
Күнәк менән ҡойоп тор,
Иләк менән иләп тор,
Күнәк менән ҡойоп тор, —

тип һамаҡлай. Шунан ямғыр теләйҙәр.

Бутҡаны ашағас, ҡалған-боҫҡанын:

— Ҡош-ҡорттар ырыҫынан,
Етем-йәһерҙәр ырыҫынан, —
Ҡарғалар ырыҫынан, —

тип, таштарға, ағастарға һалып сығалар.

Борон: «Ҡарға ҡарҡылдаһа, ямғыр була», — ти торғайнылар. Шуға ҡарға ҡарҡылдай башлаһа:

— Ямғыр яуҙыр,
Ямғыр яуҙыр.

Ямғыр яуҙырһаң,
Ауыҙыңа май булыр, —

ти торғайнылар. «Ҡарға бутҡаһы» байрамында ла шулай тиҙәр.

Ғ

«Ҡарға бутҡаһы» үткәрерҙән өс-дүрт көн алда, ауылдың иң егәрле, сәсән телле, абруйлы дүрт өлкән әбейе, өй һайын йөрөп, байрам буласағы тураһында хәбәр итә:

— Ҡарға әйтә: «Ҡар, ҡар,
Туйым етте, — бар, бар,
Ярма, күкәй алып бар,
Һөт-майыңды һалып бар,
Икмәк-тоҙоң тотоп бар,
Сәй-шәкәрең һалып бар,
Йылы түшәк ҡыҫтырып,
Үҙең ҡупшы кейенеп,
Бала-сағаң эйәртеп,
Ҡасимосҡан биткә бар».

Беҙҙең ауылда ҡарға бутҡаһын Ҡасимосҡан битләүендә үткәрә торғайнылар.

Ҡатындар байрамға йыйына башлайҙар: йомортҡа, сәй-шәкәр, һөт-ҡатыҡ әҙерләнә, килелә бойҙай, арпа, тары ярмаһы төйөлә. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәре байрамға кейә торған кейемдәрен дә кейәләр.

Байрам көндө һәммәһе лә билдәләнгән урынға йыйыла. Балитәкле * күлдәктәр, камзулдар кейгән, ҡашмауҙар таҡҡан әбейҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар йыйылып бөткәс, байрамды алып барыусы һайлана. Уны беҙҙә юлбарсы тип йөрөтәләр. Юлбарсы үҙенә айырым кейенә — сыбар күлдәк, еңһеҙ камзул, арҡаһында көмөш тәңкәләр тегелгән ҡыҙыл яулыҡ, башында осло башлыҡ. Уның әйткәндәрен һәр кем тыңлай. Байрамға саҡырып йөрөүсе әлеге дүрт әбей һәр кемдән ярмаларҙы йыйып ала, ҡара ҡаҙандар аҫып, бутҡа бешерә башлайҙар. Юлбарсы әбей бөтәһен дә байрам менән ҡотлай:

— Бына тағы имен-аман ҡара ергә баҫтыҡ, донъялар имен торһон, уңыштар уңһын. Бөтәгеҙ ҙә ихлас күңелегеҙҙе биреп байрамда ҡатнашығыҙ, йырлағыҙ, бейегеҙ, уйнағыҙ ҙа көлөгөҙ! Әммә яҡын-тирәгә ир-ат килә күрмәһен, һаҡ йөрөгөҙ, юғиһә байрамдың ҡәҙере китер, — тип һүҙен бөтөрә. Шунан башлана уйындар, йырбейеүҙәр. Бер урында «Күмер йөҙөк», икенсе урында «Йәшерәм яулыҡ» һ. б. уйындар уйнайҙар.

Күп тә тормай, бутҡа бешкәнен белдереп, әбейҙәр һөрән һала:

— Әйҙәгеҙ, бутҡа beштe. Ҡарға бутҡаһынан ауыҙ итегеҙ!

Өйкөм-өйкөм булып бер нисә табын ҡорола. Һәр табында —

бер табаҡ бутҡа. Аш янында әбейҙәр үҙҙәренең йәш ваҡыттарын иҫкә ала, ҡыҙҙарға аҡыл өйрәтә, кәңәштәр бирәләр.

Ашап туйғас, ҡалған ашты ҡарғаларға һалалар:

— Ҡалған ашты ҡарғалар ашаһын, ҡарғалар туйһын, иген уңһын, — тиҙәр ҙә бутҡаны ағас төптәренә, таштарға һалып сығалар.

Бутыр-бутыр бутҡа бешә,
Уртаһына май төшә,
Бутҡа бешергән ҡортҡаның
Фатихаһы мул төшә, —

тип тә һамаҡлағандар. Ҡарғаларҙы саҡырғанда:

— Ашағыҙ, туйыныгыҙ, илгә именлек килтерегеҙ!

Йәки:

— Бер бөртөккә ун бөртөк,
Ун бөртөккә — мең бөртөк, —

тип һамаҡлайҙар.

Һуңынан ҡара ҡаҙандарҙы, суйын-ҡомғандарҙы һыуға һалалар. Шулай итһәң, ямғыр яуа тиҙәр ине. Ямғыр теләп, былай тип һамаҡлайҙар:

— Ҡабыр-ҡабыр, ҡабырсаҡ,
Ҡабыр төбө — кимерсәк.
Ашлыҡтар сәселгән саҡ,
Ямғыр яуып үтер саҡ.
Яу, яу, ямғырым,
Һимеҙ тәкә һуйырмын...

Байрамды башлап йөрөүсе юлбарсы, һүҙен йомғаҡлап, былай ти:

— Киләһе йылда ла илдә именлек, ерҙә һиллек булып һаулыҡта йәнә осрашырға яҙһын!

## Д

### Һөлгө йыйыу

«Ҡарға бутҡаһы»на ер-һыу кипкәс бөтә ауыл менән сығып булғандар.

«Ҡарға бутҡаһы»на берәй хәллерәк кеше һарыҡ һуя.

Тәүҙә затлыраҡ кейемдәрен кейеп, ауыл араһына бала-саға сыға. Улар сыр-сыу килеп ҡарҡылдайҙар:

— Ҡар-р-р, ҡар-р-р,
Ҡарғатуйға бар-р-р, бар-р-р,

Ҡарғатуйға бармағандың
Күңеле булыр тар-р, тар-р.
Ҡарғатуйға бармағандың
Уңышы уңыр тар-р-р, тар-р-р.

Ауыл буйлап һөлгө йыйыла. Бирелгән бүләктәрҙе оҙон таяҡҡа бәйләй-бәйләй, өйҙән өйгә инеп йөрөйҙәр. Кем нимә бирә ала, шуны бирә.

Ҙ

Ҡарға туй (һәм һабантуй) алдынан өйҙән өйгә йөрөгәндә әйтелә торған һамаҡтар:

Ҡорттар осһон кейәнән,
Ҡолон тыуһын бейәнән.
Игендәре бик уңһын,
Күкәй кеүек туҡ булһын!
Әтәсегеҙ бик баҫтын,
Тауығығыҙ бик һалҡын,
Күкәй, күкәй, таҫтамал,
Ҡулъяулыҡ, ҡулъяулыҡ!

Шулай тип әйтемләп, оҙон таяҡҡа төрлө нәмә (таҫтамал, ҡулъяулыҡ һ. б.) йыйып йөрөгәндәр.

Е

**Ҡарға буҡтаһы йырҙары**

Тирәктәрҙән үтә төшә
Яҙғы ҡояш нурҙары.
Ҡарға буҡтаһына сыҡҡан
Беҙҙең ауыл ҡыҙҙары.

Ҡарҡылдашып килегеҙ,
Һеҙгә буҡта бирербеҙ.
Йомошобоҙ күп түгел —
Илгә уңыш бирегеҙ.

Бығыр-бығыр буҡта бешкән,
Уртаһына аҡ май төшкән.
Уны алайым тигәнсе,
Биш бармағы ҡуша бешкән.

Буҡта бешеп, ашарға ултырғас:
— Һиңә түгел, ҡарғаға, — тип бер-береһенең ҡалаҡтарын, ҡашыҡтарын һуғып төшөрәләр.

— Быгыр-быгыр буткаһы,
Күпте йәшәр корткаһы.
Буткаһының майы юк —
Ашамаға яйы юк.

Ашамағыҙ бутканы,
Тапамағыҙ бутканы!
Бутка бешкән дан булып,
Хурламағыҙ кортканы! —

Шулай тиҙәр ҙә:

— Бутка һиңә түгел — карғаға,
Кара карға ашаһын,
Ала карға ашаһын!
Ала карға ашамаһа,
Кара карға ашаһын! —

тип, йәнә бер-берееһенең калак, кашыктарын һуғып төшөрәләр.

Ё

Лыбыр, лыбыр буткаһы,
Етмеш йәшәр корткаһы.
Буткаһының майы юк.
Ашамаға яйы юк.
Ашамағыҙ бутканы,
Тапамағыҙ бутканы,
Бутка бешкән дан булып,
Хурламағыҙ кортканы.
Бутка — Хоҙай ризыгы,
Бутка — Хоҙай аҙыгы.
Шул бутканы хурлаһаң,
Башыңа төшөр яҙыгы!
Ал ризыкты, ал,
Бер бөртөккә — ун бөртөк,
Ун бөртөккә мең бөртөк.
Ал, ризыкты, ал!
Бер тамсыға — ун тамсы,
Ун тамсыға — мең тамсы.
Ал ризыкты, ал!
Ал, Тәңрем, ал!

Ж

Кара карға ашамаһа,
Ала карға ашаһын.
Карға буткаһын ашаған
Матур яҙға окшаһын.

Тәмле икән буткаһы,
Ауыҙ итәйек әле.
Матур яҙҙар каршылап,
Байрам итәйек әле.

3

Бер кыҙ:

Тирәклектән үтә төшә
Яҙғы кояш нурҙары.
Карға буткаһына сыккан
Беҙҙең ауыл кыҙҙары ла кыҙҙары.

Күмәкләп:

Карк!
Карға кыскыра
Кара, кара, кара, кара,
Кара карға ултыра.
Үҙе кара, үҙе карай,
Абау, йәмһеҙ кыскыра.

Икенсе кыҙ:

Дуҫтыкайым, кара әле,
Буткаң күмһеп китмәһен.
Карға, мәлғүн, кошмо ни ул,
Урлап осоп китмәһен.
Ашап кына бөтмәһен.

Күмәкләп:

Карк!
Карға кыскыра...

## 184. КАРҒАТУЙ

А

Беҙҙә карға буткаһы тигән нәмә юк, карғатуй ғына бар. Ул шулай була: кар ирей, ер-һыу короп, ағастар йәшәреп, йыуа сыккас, ауылдың бер нисә катыны кистән йыйылышып, күрше ауыл бисәләрен карғатуйға кунакка сакырырға һөйләшә.

Кунактарҙы бейеп, уйнап, йырлап каршы алабыҙ. Килеп ултырышып, саламай * ашап, сәй эсәбеҙ ҙә уйнарға керешәбеҙ. Уйын төрлө-төрлө була. Элек кумыҙ уйнай торғайнык. Хәҙер ул бөтөп бара шул. Уйын-көлкө, такмак әйтешеү була. Карғатуйҙа көрәш, йүгереш тә ойошторола, кайсак ирмәк өсөн ирҙәр кейеменә кейенеүселәр ҙә була йә бер-береһенең кейемдәрен алмаштырып кейенәләр. Карғатуйҙа биҙрә кағып, бейешәләр.

Б

Ҡарғалар! Ҡарғалар!
Баҡсаларҙа алма ағас
Короно, ямғыр яумағас.
Баҡсаларҙа һис йәм юҡ,
Ямғыр яуып тормағас,
Ямғыр, яу! Яу! Яу!
Ҡарғалар, ҡарғалар,
Һеҙ ҙә беҙҙең кеүек йыйылып һыйланығыҙ;
Ямғыр яуһын, тип теләгеҙ,
Донъя имен булһын, тип теләгеҙ!

**Ҡарға бутҡаһында ямғыр теләү**

Бутҡа ашалып бөткәс, «Һыуға һалыш» башлана. Тәүҙә муллаһы йә икенсе бер оло кешене һыуға һалалар.

Бөтәһе лә ямғыр теләй:

— Ямғыр, яу, яу,
Һимеҙ һарыҡ һуйырмын,
Һимеҙ ерен ҡуйырмын,
Ямғыр яу, яу!

Бала-саға, үҫмерҙәр әсе-әсе итеп, зыйлатып һыҙғыра, уларға һыбыҙғылар ҡушыла.

Ямғыр, яу, яу,
Беҙ булайыҡ һау-һау, —

тип һамаҡлайҙар.

Йыйын таралғанда:

— Ҡар-р-р, ҡар-р-р, ҡарғалар,
Ишетәһегеҙме, ҡарғалар!
Баҡсаларҙа алмағас
Ҡорой, ямғыр яумағас.

Ҡар-р-р, ҡар-р-р, ҡарғалар,
Беҙ тағы ла китәбеҙ.
Йыйылышып һыйланығыҙ:
«Ямғыр, яу!» — тип теләгеҙ, —

тип, ҡалған бутҡаны, ҡарғалар ашаһын өсөн һипкеләп китәләр.

### 185. ТЕЛӘК САЛЫУ

Элек, ямғыр яумай торһа, теләк салырға йыйыла торғайныҡ. Күберәген ирҙәр йыйыла. «Ҡарға туйы»ндағы кеүек, сит ауылдар-

ҙан кешеләр саҡырып, уйын-көлкө ойоштороп ултыра торғайнылар. Эске-фәлән булмай. Ат һуйып, шуның итен бешерәләр. Балааға, ҡарт-ҡоро бара. Ашты оло ҡатындар бешерә. Ҙур-ҙур итеп өлөш ашайҙар. Ҡөрәштә еңгән кешегә өлөштөң иң һәйбәте бирелә. Ул һебә тип атала. Ҡөрәшсе үҙе ашамаһа, өлөштө башҡаға бирәләр. Ҡарсыҡ-ҡорсоҡ һурпаһын ирҙәрҙән айырым ултырып эсә.

## 186. ҠУҘҒАЛАҠ БАЙРАМЫ

Ҡуҙғалак байрамы яҙ булғас, ер-һыу кибеп (үлән) ҡуҙғалаҡ сыҡҡас, үткәрелгән. Унда бөтә ырыу ҡатнашҡан.

Байрамды үткәргәндә, ҡорбан салынған, бейеүҙәр башҡарылған. Беренсе тапҡыр ҡуҙғалаҡ ҡапҡанда: «Мин киләмен — ауыҙың ас, мин киләмен, «зәңгә» ҡас», — тигәндәр.

## 187. АЙЫУ ТУЙЫ

Борон айыуға һунар бик ҙур булған. Уны туҡмап ала торған булғандар. Айыу һунарына әҙерлек шау-шыуһыҙ барған. Ауға ирҙәр кумәкләшеп сығыр булғандар. Һунарҙан ҡайтҡас, айыуҙы толоптай һуйғандар, йәғни ике артҡы ботонан асып, тиреһен ярмайынса ғына, һыҙырғандар. Һыҙырғанда, тырнаҡтары ла, башы ла, ҡойроғо ла бөтөн көйөнсә ҡалған. Айыу алған ерҙә майҙан яһағандар, уйнап-көлгәндәр, көрәшкәндәр.

«Айыу байрамдары» XIX быуат аҙағында Әбйәлил районы территорияһында Урал аръяғында Өсимәнде тигән урында үткәрелгән. Һунар бик уңышлы булған. Бер юлы өс-дүрт айыу һуҡҡандар. Икәүһен Бейеш батыр алған. Айыуҙарҙы толоптай итеп һуйғандар, шунан тире эсенә бесән тултырып, баҫтырып ҡуйғандар. Өсимәнделәге майҙан ун биш көн буйы барған. Ат сабыштырыу, көрәш, йыр-бейеү ярыштары үткәрелгән. Бейеш батыр гел беренселекте алған. Уны Ағиҙел буйынан килгән Айсыуаҡ батыр ҙа еңә алмаған.

Был Айыутуйҙа ун биш көн буйы ошо дүрт айыу һыны баҫып торған. Һунарсылар, йырҙар йырлап, шулар тирәһендә бейешкән.

## 188. АЙЫУ БЕЙЕҮЕ

Ҡыҙыл буйы башҡорттары Уралға йәйләүгә сыҡҡас та, малды айыу тәләфләр булған. Унда әле лә айыу күп. Бөрйән, Баймаҡ яҡтарынан килгән колхоз, совхоз малдарын йыл да күп ҡыра. Хәҙер заповедник булғас, улар ҙа белә язаға тарттырылмаҫтарын!

Бына шулай борон Уралға йәйләүгә килгәс, ирҙәр йыйылышын айыу аңдығандар, күпләп аулағандар. Айыу алғас, йәйләүҙә байрам үткәрелер булған. Борондан килгән ғәҙәт булғандыр ин-

де, атаҡлы һунарсылар шул йыйында айыу тиреһе бөркәнеп, айыу булып бейегәндәр. Бер олатай һөйләгәйне, шундай һунарҙа атылған ҙур айыу тиреһен кейеп, Бейеш батыр ҙа бейегән. Олатай ул бейеүҙе үҙе күргән.

## 189. ӘБЕЙҘӘР СЫУАҒЫ

Был байрам көҙҙөң иң матур, ҡояшлы мәлендә үткәрелә. Әбейҙәр бер-береһенә сәйгә йөрөй, бүләк бирешә.

Көҙгө яланға сығып ағастарға суҡ, таҫма бәйләгәндәр. Оло әбейҙәр Ҡөрьән уҡыған, барыһы ла илгә именлек, барлыҡ теләгәндәр:

«Иллала!» — тип, ҡыш үтте,
Илай-илай, яҙ етте.
Йәнгә рәхәт, тәнгә сихәт
Йәй барын да таҙа итте,
Таҙа итте лә тағы үтте;
Көлә-көлә, көҙ етте,
Көлә-көлә, көҙ етте лә
Ҡолонсаҡты тай итте,
Өлөшһөҙҙө бай итте,
Илгә, миңә — барына
Йәлләмәне, барынса,
Баһалап һәр кем эшен,
Өләште үҙ емешен.
Разый булдыҡ Тәңрегә,
Ташламаһын мәңгегә!
Шөкөрана Аллаға,
Бирәм, тиһә, ул таба!
Амин!





## ЙЫЙЫНДАР

### 190. ЙЫЙЫН

Йыйын — башҡорттарҙың йәйге байрамы. Ғәҙәттә, ураҡҡа төшөрҙән алда үткәрелә торған был байрамдың башы бик боронғо замандарҙан килә. Ул ваҡытта башҡорттар мәжүси булған әле...

Йыйынға халыҡ бөтә тирә-йүндән килә. Йәштәр — егеттәр менән ҡыҙҙар — башҡорт ҡурайына, думбыра, ҡумыҙ сиртеүгә, скрипкаға ҡушылып йырлаша, бейешә. Көрәш ойошторалар. Унда йәштәр генә түгел, ҡарттар ҙа ҡатнаша. Йәнә йүгерешеп, атта сабышып күңел асалар. Аҙаҡ өйҙән өйгә йөрөп һыйланалар...

Йыйын бер нисә ауылға уртаҡ була. Уны шул ауылдарҙың ҡап урталығында үткәрәләр. Ҡесе йома көнө ҡунаҡтар килә, йома көнө йыйын үтә. Киләһе аҙнала күршеләрҙә үткәрелә. Йыйындар 15 майҙан 10—15 июлгәсә һуҙыла...

Йыйын — башҡорттарҙың иң яратҡан байрамы. Ул хатта йот йылы ла үткәрелә.

Бер аҙнанан йыйын тигәндә, ҡыҙ-ҡырҡын, бисә-сәсә, әбей-һәбей — бөтәһе лә тырышып-тырышып булған ғына йорт-йыһазын, кейем-һалымын, ҡашыҡ-аяғын таҙарта, йыуа, йышырын йыша, Мөрйәләрҙе лә аҡлайҙар. Юҡһа, байрам көндө: «Ҡарағыҙ әле, мөрйәһен дә ағартмаған!» — тип көләләр.

### 191. ЫРЫУ АҒАСЫ (АТАЙСАЛ ЙЫЙЫНЫ)

#### А

Элек-электән башҡорттарҙың Урал тауы өсөн ҡанлы дауҙары күп булған. Дошмандар көнтыуыштан да, төшлөк яғынан да ябырылыр булған. Ҙур яу килгәндә, башҡорт ырыуҙары, бер-берсһенә оран бирешеп, ғәскәр туплап яу ҡайтарыр булғандар.

Башҡорттар көтөү-көтөү малдарын иркен дала киңлектәрендә көткәндәр, дошман яуы килә башлаһа, Уралтауға һыйынғандар.

Беҙҙең яҡтың ете ырыуы: бөрйән, ҡыпсаҡ, түңгәүер, юрматы, тамъян, ҡатай, үҫәргәндәр — бер булып ойошоп йәшәгән, бергә-бергә яу ҡайтарған. Һәр ырыуҙың башында бей торған. Ошо бейҙәр барыһы ла Мәсем тигән ханға буйһонған. Мәсем хандың йәйләүе хәҙерге Бөрйән ерендәге Мәсем тауы яланында булған, ти. Мәсем хан вафат булғас, уны бик ҡәҙерләп Ҡана йылғаһы тамағында ерләгәндәр. Ҡәбере әле лә беленеп ята. Мәсем хан үҙе бөрйән ырыуы нәҫеленән булған булһа кәрәк. Ғүмере буйы Бөрйән ерендә мәҡам * иткән.

Мәсем хан мәлендә лә, унан һуң да ете ырыу бейҙәре үҙҙәренең данлыҡлы батырҙары менән хәҙерге Иҫке Тарыуал ауылына яҡын Атайсал яланында йыйын үткәргәндәр, байрам иткәндәр. Был йыйындарҙа яу ҡайтарыу, ҡайһы ырыуға ҡайҙа мал йөрөтөү, ҡайҙа йәйләүгә сығыу кеүек ҙур мәсьәләләрҙе бергәләп хәл иткәндәр, һәр төрлө низағтарҙы тикшергәндәр.

Атайсалдың бер ситендә яңғыҙ имән үҫкән булған. Шул имәнгә һәр ырыуҙың тамғаһы сабылған. Бер имәнгә күмәк тамға һуғыу ырыуҙар үҙ-ара татыу, бер төптән булыуын аңлатҡан. Шул имән янында Атайсал йыйыны үткәрелгән. Унда ете ырыу кешеләре ҡатнашҡан. Атайсал йыйынына килеүселәр ырыу ағасы тамғалы имәнгә таҫмалар, тәңкәләр тағыр булған. Ул изге имән тип йөрөтөлгән. Изге имән бик оҙаҡ йәшәгән.

### Б

Ишберҙе ауылы ҡарттары һөйләй торгайны. Айҙаболан яланында Ырыу бағанаһы тип аталған имән бағана булған. Унда ете ырыу башҡортонoң (Үҫәргән, Бөрйән, Тамъян, Түңгәүер, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Юрматы ырыуҙарының) тамғаһы сабылған ине, ти. Борон шул ырыу ағасы янында кәңәштәр үткәрер өсөн йыйынға йыйылғандар.

## 192. АҠТҮБӘ ЙЫЙЫНЫ

Миңә бала саҡта, революциянан һуң 1923 йылда булһа кәрәк, Аҡтүбәлә ҙур йыйында булырға тура килде. Уны ҡаҙаҡтар менән башҡорттар бергә үткәрҙе. Башҡорт ягынан бик күп йырсылар, ҡурайсылар, батырҙар килгәйне.

Тай ҡаҙанында дүрт ерҙә ит бешә. Йырсылар, ҡурайсылар, думбырасылар айырым ултыртылған. Ат, дөйә сабышы булды, уҡ атышта балдаҡ үтә атыштылар. Һуғып уйнай торған уйын ҡоралдары (дөңгөр) бар, ҡатын-ҡыҙҙар бейегәндә һуғалар ине уны бигерәк тә (башҡорттар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа).

Ҡурайсылар бәйгеһендә, Йомабай Иҫәнбаев беренсе урын алып ҡайтты унан. Ул тәүҙә йырҙың тарихын һөйләп бирә, йырламаҫ борон һүҙҙәрен әйтеп сыға. Уйнагас, шул тиклем моңло, һүҙҙәрен

асыҡ итеп әйтеп йырлай, шулай итеп, уға тыңлаусеүсе кеше булманы.

Тағы Орскиҙа, Ырымбурҙа ла йыйындар була торғайны. Яйыҡҡа яҡын бер яланды әле лә Уйын яланы тип йөрөтәләр.

## 193. ЗӘЙНУЛЛА ЙЫЙЫНЫ

### А

Ашҡаҙар буйындағы Бала Сытырман ауылы янындараҡ Зәйнулла (йәки Йәноҙаҡ) тауы бар. Шул тау эргәһендә оло йыйындар үткәрелер булған. Был ер — борондан башҡорттарҙың осрашыу урыны. (Быларҙы олатайым Мөхәмәтғәли, атайым Сәитгәли һөйләй торғайны.)

Әүәл-әүәлдән Стәрлетамаҡтан Ырымбурға боронго оло караүан юлы үткән. Йәноҙаҡ тауы, Ҡыҙҙар тауы тирәһенә, башҡорттоң элекке йәйләү урынына бар ырыу-ҡәбилә йыйыла торған булған. Туҡ, Ырғыҙ буйҙарынан да, Урал аръяғынан да, Бөрйәндәр ҙә, башҡаһы ла йылдың бер миҙгелендә ошонда килгән. Йәноҙаҡ тауында һорнай ҡысҡыртып халыҡты Ҡыҙҙар тауына йыйғандар. Йыйын өс көн дауам иткән. Ата-бабалар һөйләүенсә, шул тауҙағы һорнайҙың шыңғырлап торған тауышын беҙҙең Бала Сытырманда ишетә торған булғандар. Зәйнулла йыйыны һәр йыл һайын үтер ине. Ул 1939 йылға тиклем барҙы. Унан оҙаҡ ҡына булмайыраҡ тороп, һуңғыһы 1952 йылда ла булды.

### Б

Ат саптырып күп яҡтарға, фәлән ваҡытта Сытырманда йыйын була, ҡурайсылар, йырсылар килһен, бик ҙур һый, уйын, бәйгеләр ойошторола, кемдең һөнәре бар, шул килһен, тип белдерә торғайнылар беҙ бәләкәй саҡта. Йыйынды, тирмәләр ҡороп, йәйләүҙә үткәргәндәр.

Уйын Зәйнулла тигән тауҙа башланған. Ҙур йыйын булһа йә туй яһаһалар, ҡыҙ бирһәләр йә Ҡарға буткаһы, һабантуй үткәрһәләр, шул уҡ тауға йыйылғандар.

Оло йыйынға музыканттар күп килә торғайны. Юлдаштан, Баймаҡ, Ырғыҙ, Бөрйән яғынан мөгөҙҙән яһалған һорнай тигән ҡоралда уйнаған кешеләр, ҡурайсылар, скрипкасылар, бейеүселәр, йыраусылар — күп халыҡ килеп, аш бешереп, төн уртаһына тиклем йырлашып, бейешеп, өс көнгә тиклем дауам иттереп, Ҡыҙҙар тауында күңел аса торғайныҡ.

Дөңгөр һуғырҙар ине. Шуны дөңгөрләтеп, ҡумыҙ, һорнай көйөнә бейей торғайнылар башҡорт ҡыҙҙары. Оло-оло кешеләр ҙә бейеп китә инеләр хатта, ҡыҙыҡып.

Кем яҡшы йырлаған, кем һорнайҙа, кем ҡурайҙа, кем ҡумыҙҙа, кем скрипкала яҡшы уйнаған, кем дөңгөрҙө оҫта дөңгөрләтә, шуларҙың көллөһөнә бүләк тапшыра инеләр. Сәғәтме унда, биш-

мәтме, ҡама тунмы йә яҡшы ҡама бүрекме, иң шәп уйнағандарға хатта һарыҡ та бирә торғайнылар.

Совет власы сыҡҡас та, күп йыйындар үткәрелде (1952 йылда ла булды һуңғыһы). Ҡыҙыл флагтар менән ауыл Советы, райисполком председателдәре килә инеләр. Унда ла ҡурайсылар, бейеүселәр, йырлаусылар, һорнай уйнаусы кешеләр ҙә күп йыйылды. Баймаҡ яғынан ине улар. Оло ғына кешеләр.

## 194. ГУБЕРНАТОР БӘЙГЕҺЕ

Наполеонға ҡаршы һуғышҡа һәм уны еңеүгә 100 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән. Был туйға башҡорттар күп килә. Шунда боронғо ата-бабаларҙың яу кейемдәрен кейенеп ат менән барған өсөн батшанан ҡотлау килә. Шунда барыу әҙерлегендә Ырымбур өйәҙе Бөрйән волосы Йәкшембәт ауылы (хәҙерге Көйөргәҙе районы) Байтүрә, Фәттәх Сәлтәшевтәр һәм Ғәзизйән Шәрипов алдынғылыҡ алып, миҙал менән бүләкләнә. Шул айҡанлы «Губернатор бәйгеһе» тигән исем менән Ырымбур өйәҙе Яҡуп ауылында (Көйөргәҙе районы) 1912 йылдың октябрь айында тағы ла ҙур туй була. Бына ошо ҙур йыйындарҙың икеһендә лә Ғәбит сәсән *, иң оҫта 50—60-лап ҡурайсы һәм йырсы араһында беренселекте алып, бүләкләнә.

## 195. КАНТОН БӘЙГЕҺЕ

Тамъян-Ҡатай кантонының башы, үҙ кантонындағы ҡурайсы, йырсы һәм бейеүселәрҙе саҡырып, ярыш уҙғармаҡсы булған. Бының өсөн волость башлыҡтарына хәбәр иткән, ә волость башлыҡтары үҙ ҡарамағындағы ауылдарҙағы ҡурайсы, йырсы һәм бейеүселәренә хәбәр иткән. Ярышта алдан сыҡҡан ҡурайсыға — бер дүнән, йырсыға — бер ҡонан, бейеүсегә бер һарыҡ тәкәһе бүләк ителәсәк, тип иғлан таратҡандар.

Ярыш урыны итеп Бикҡол ауылы һайланған. Билдәләнгән көнгә тирә-яҡтан ҡурайсылар, йырсылар, бейеүселәр Бикҡолға ағылған. Шоңҡар тауының итәгенә яҡшы итеп таҡтанан иҙән һалдырып, урын әҙерләткәндәр.

Йәйләп ултырыусылар иртә менән һыйырҙарын һауып, бейәләрен бәйләп, ашыға-ашыға йыйын урынына ыңғайлай. Оҙаҡ та үтмәй, паускаһына * ултырып, останат саптырып, ҡыңғырауын шалтыратып кантон башы ла килеп төшкән булған. Ул ярыш уҙғарыусы кешеләрҙе саҡырып алған да:

— Ярышҡа килгән ҡурайсыларҙы бер яҡҡа, йырсыларҙы икенсе урынға, бейеүселәрҙе айырым ултыртырға. Ярышты йырсыларҙан башлап ебәрергә, унан ҡурайсыларҙы, иң аҙаҡтан бейеүселәрҙе ярыштырырға. Бәйгене үҙ ҡулым менән тапшырырмын, — тип әмер биргән.

— Ярыш шарттарын ни төрлө ҡуябыҙ? — тигәндәр.

— Йырсы башта үҙе теләгән көйҙө йырлар, унан баһасылар бер көйҙөң исемен әйтерҙәр, йырсы шуны йырларға тейеш. Йырлаған ике көйҙө лә дөрөҫ башҡарһа, ул икенсе баҫҡыс ярышына ултырып ҡалыр, әгәр ҙә көйҙөң береһен дөрөҫ йырлап, икенсеһен яңылыш йырлаһа йәки белмәһә, артабанғы ярышҡа үтә алмаҫ.

Икенсе баҫҡыстың шарты: тикшереп ултырыусылар бер көй исемен әйтерҙәр, ул шуның вәзене, аһәңе менән йырлап бирергә һәм икенсе көйҙөң тарихын һөйләп бирергә тейеш. Йырсы ошо талаптарҙың береһен үтәй алмай икән, ул ярыштан төшөп ҡалыр.

Өсөнсө баҫҡыс, һуңғыһы: тикшереүселәр яңы ике көй йырлатырға ҡушырҙар һәм бер көйҙөң тарихын һөйләп бирһен, тауышы ел аҙағына биш саҡырым ергә ишетелһә — тимәк, ҡонан ат уныҡы. Ҡурайсыларға беренсе шарт: һәр кем үҙе белгән бер оҙон, бер ҡыҫҡа көйҙө уйнаһын. Тикшереүселәр бер көй уйнарға ҡушырҙар. Шул өс көйҙө дөрөҫ башҡарһа, икенсе баҫҡыс ярышына ҡалдырырҙар.

Икенсе баҫҡыс шарты: тикшерелеүселәр бер оҙон көй уйнарға, икенсе көйҙөң тарихын һөйләргә, үҙенән һуң уйнаусы ҡурайсының ниндәй исемле көй башҡарғанын әйтергә тейеш. Шул шарттарҙы үтәмәй икән, тимәк, ул ҡурайсы артабан ярышмай тигән һүҙ.

Өсөнсө шарт: ҡурайсыға уйнарға яңы өс көй исемен әйтерҙәр, берәүһен өҙләп уйнарға, икенсеһен күкрәк менән уйнарға. Ҡарағош башында торған кеше ишетә алырлыҡ тауышы булырға һәм ел аҙағында ун саҡрым ерҙәге кеше ишетергә тейеш; өсөнсө көйҙөң тарихын һөйләп бирһә, дүнән ат шуныҡы булыр.

Бейеүселәргә беренсе шарт: бейеүсе башта үҙе яратҡан бейеүҙе башҡарыр, тикшереүселәр шуға биш быуын өҫтәп төрләләндерергә ҡушырҙар. Үтәй икән, икенсе шартҡа күсер.

Икенсе шарт: тикшереүселәр бейеүсегә ҡатындар һәм ҡарттар булып бейергә, һуңғыһына ун быуын ҡушып төрләләндереп бейергә тейеш, өсөнсө шарт булып, айыуҙы йәки бүтән берәй хайуанды, ҡошто кәүҙәләндереп, һүрәтләп бейеһә, ҡурсаҡтар һәм йәштәр булып ун биш быуын менән бейеп күрһәтһә, ул бейеүсе һарыҡ тәкәһен алыр, — тигән кантон ярыш уҙғарыусыларға...

## 196. ИШӘЛЕ ЙЫЙЫНЫ

Беҙҙең яҡтың йыйындары үҙгә башҡа * бит ул. Бик ҡыҙыҡ була торғайны. Ике-өс йылға бер (йот йыл йоламаһа) үтә ине. Беҙҙә уҙмаған йәйҙә икенсе ауыл йыйынының ҡунағы булабыҙ.

Бер йыл шулай ләмәҙҙәрҙе (беҙҙән ҡырҡ саҡрым) ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ. Унлап аҡһаҡалы, утыҙлап ир-аты, егермеләп егете, йәнә егермеләп елән-елкенсәге, ҡырҡлап ҡырын арба егеп, әбейҙәрен әбәләп, көсөктәрен сәбәләп, түшелдерекле түтәйҙәрен түшәккә ултыртып, мөнәжәтсе мөнтәбикәләрен мендәргә мендереп, киҙеүе лә китмәгән килендәрен киҙе-кәләнкүр көпләп, килеп ул-

тыралар былар бер заман. Алдағы арбала ғәләмәт оҙон торбалы тимер мейес. Төтөнө яман борхой: сөрөк ҡатыш ҡоро тиҙәк яккандар. Мейес өҫтөндә оло суйын. Суйында «күстәнәс»кә ҡоҙғон бешә. Дуғала ҡыңғырау урынына — оло бутала. Бер дуғала төпһөҙ, бала ыштаны. Бер арбала «айыу» ҡурай уйнай, «шайтан» бейей, үҙе таҡмаҡ таҡылдай:

— Исемең кем?
— Ҡайпан *.
— Есемең кем?
— Шайтан *.
— Бейеүең ни?
— Туйтан-тайтан.
— Ҡайҙа бараң, шайтан?
— Ашайым да ҡайтам!

Икенсе арбаларҙа мәрәкә йырҙар:

— Ай, Ишәле, Ишәле,
Тоҡтоң төбөн тиш әле!
— Тоғом минең тоҡон түгел —
Сирек-сирек шешәле.
Тоғом минең прастуй түгел —
Сирек-сирек шешәле.
— Ай, Ишәле, Ишәле,
Ишәле — биш бисәле:
Бисәләре берәү түгел,
Ир-ат һайын биш әле —
Бер дүртәүен беҙгә оҙат,
Үҙең дә ҡал бисәле!
— Ай, Ишәле, Ишәле,
Сирек-сирек шешәле,
Түрҙә берҙе бушатһаҡ ни,
Ҡашыяҡ та биш әле.
Әлдә дуҫым — Ишәле,
Әлдә йыйын шешәле.
— Ишәлелә һоя * бар,
Һоябуйҙа ояба бар.
Һояһының талы күп,
Ояһының балы күп.
Саҡырмаған ҡунағына
Түшәгендә ялы күп.
— Ай, Ишәле, Ишәле,
Ишәле — күп шешәле,
Күрәгәндә балың бөтһә,
Ҡымыҙыңды беш әле,
Күрәгәнде күрәргә тип,
Килә ятҡан эш әле!

Ҡаршы алырға һыбай ғына сығалар. Һәр һыбайлы — һөңгөлө.

һөңгеләр ағас, ике-өс йәпле, остарында татлы бормасай (ишелмәле керәндил), ҡайһы берҙәрендә үле сысҡан, ҡомаҡ йәки үгеҙ ҡыуығы. Былар ҡунаҡтарға «икмәк-тоҙ» тапшыралар: «икмәк» тигәнең — киптерелгән һыйыр тиҙәге, уртаһындағы соҡорҙа — аҡбур. «Оло мейестә бешерелгән бәлеш» (мәте). Ике яҡ та көлөшөп, «йыуасалар»ҙы шап-шоп «ашайҙар»: «Ах, тәмле!» — тип һындырғылап өҙгөләп, ситкә бырагыталар.

Ир-уҙамандың ҡайһы бере күстәнәс сирегенән һары бал татый, арбалағы ҡунаҡтар «ҡаршыламыш ҡомғаны»нан ҡымыҙ менән ауыҙ емшетә.

Ауылға индереүсе күпертөптә — оло бер йола. Бында хужалар һамаҡлай:

— Ҡем килә?
— Ләмәҙ килә.
— Ҡүстәнәсе әҙ килә!
— Беҙ бит әле — Ишәле,
Тоҡтарыңды сис әле!
Үҙе теләп сисмәниһә,
Тоҡтоң төбөн тиш әле!
Бауырһагы ҡойолһон,
Балдан татлы тойолһон,
Беҙ ҡапҡандан ҡалғанына
Турғай-сәпсек йыйылһын,
— Хужа тора өлтөрәп,
Күпер тора келтерәп,
Күпер асыр күстәнәсен
Еткер йәһәт, елтерәп.

Ҡунаҡ аяҡсылары, һикереп төшөп, «күпер асыу күстәнәсен» тарата башлай. Татлы сәтләүектәргә, баллы бауырһаҡтарға ҡыуанышып, бала-саға сыр-сыу килә. Шунан «күпер асыла»:

— Күпер, күпер, келтерә,
Ерән атым, елтерә,
Ерән атым елкәһендә
Елле ҡунаҡ килтерә.

— Әйҙүк!
— Әйҙүк!
— Рәхим итегеҙ, ҙурлап китегеҙ!

Үҫмерҙәр ат башына йәбешә. Улар үҙҙәренә билдәләнгән атты етәкләп, тейешле йортҡа алып инә. Ат башынан алғанда, улар шулай таҡмаҡлай:

— Һай, атығыҙ, атығыҙ,
Йәл булмаһа, һатығыҙ —
Ҡуш атыңа — һыңар кәзә,
Кәзә егеп ҡайтығыҙ!

Һай, атығыҙ, атығыҙ
Арыҡтың да арығы,
Икеһенән ауыр тартыр
Беҙҙең йорттоң һарығы!
Һай, атығыҙ — ат икән,
Беҙҙең яҡҡа ят икән:
Аяҡтарын йыялмаған
Быҙау менән ҡат * икән!
Һай, атығыҙ — ат икән,
Беҙҙең яҡта ят икән!
Ҡайһы яғы ал икән дә,
Ҡайһы яғы арт икән!
Һай атығыҙ — ат ҡына!
Һуҡыр тингә һат ҡына!
Сабатаға сысҡан егеп
Оҙатырбыҙ — ҡайт ҡына!
Ай, атығыҙ — алаша,
Ҡарап күҙҙәр ҡамаша!
Ат тигәнем ишәк икән —
Бына һиңә тамаша!
Һай, атығыҙ —ата, шай *,
Атлап килә ята, шай,
Бер аяғын атлағансы,
Икенсеһен эт ашай!

Үсмерҙәр атты ана шулай һамаҡлап етәкләй (мин ул саҡта үсмер ҙә түгел инем әле, бала ғына инем). Алдан билдәләнгән йорттоң ҡапҡаһы төбөнә еткәс, ҡунаҡтар йырлай:

— Был йорттарға керергәме?
Ҡапҡалары ауа бит!
Ауһа, ауыр, беҙ байғошҡа
Һый-хөрмәттәр яуа бит!

— Хуш килдегеҙ! Бәхетегеҙ менән ҡуш килдегеҙ!
— Хуш килдегеҙ! Ауыҙ тотоп буш килдегеҙ!
— Юҡ, юҡ, буш килмәнек! Күстәнәскә туя белмәҫ дүрт-биш тамаҡ килтерҙек!
— Ярай ҙа, әҙәм тамағы ғына булһа, шөкөр ергә, туйырбыҙ бергә, Ләмәҙтамағын ғына ҡалдырып килһәгеҙ.
Ҡапҡаға боролғандан алып өйгә кереп еткәнсе «Был йорттарға керергәме» йыры дауам итә:

— Был йорттарға керергәме?
Лаулап тора эттәре.
Ике-өс туҫтаҡ бал түңкәргәс,
Ҡайнамаҫмы үттәре?

**Йәнәһе, туҡмап ҡайтармаҫтармы!**

Был йорттарға керергәме?
Атыма юк септәһе.
Ат ҡәҙере — ир ҡәҙере —
Әллә ҡайтып китәһе!

Ысынлап, башҡорт йортонда ҡунаҡтың үҙенән алда атын ҡәҙерләй башлайҙар. Йыр шуға тørттөрә.

— Был йорттарға керергәме?
Тибешмәйме бейәһе?
Бейәһенән бигерәк тә
Тешләмәйме эйәһе?

Хужа йәки хужабикә, йә ҡаршы алышыусы туған-тыумасаһы уйынсалап яуап биреп тора:

— Юҡ, юҡ!
Айғырыбыҙ — айҙа,
Сөңкәтояҡ * — сайҙа *,
Тайҙарыбыҙ — тауҙа,
Ҡолондарым — ҡауҙа,
Дүнәндәрем — далала,
Ҡонандарым — ҡалала,
Арғымағым — ашауҙа,
Толпарыбыҙ — тышауҙа.

— Хужабыҙҙың, бахырҡайҙың,
Өҫкө теше төшкән,
Аҫҡы теше бешкән —
Һикһән генә һөйәге
Иҫәңгерәп бөткән.

— Һимеҙ бейәгеҙгә лә, эт тешен эттән һыуыртҡан эсәкһеҙ эйәгеҙгә лә эт тә теймәҫ, бет тә теймәҫ; толпар тип еккән кәзә тәкәгеҙҙе лә, бисә имең тип бил бөккән бикәгеҙҙе лә туҡал тәкәбеҙ ҙә ҡаҡмаҫ, туҡһандағы ҡартатайыбыҙ ҙа баҡмаҫ.

— Был йорттарға керергәме?
Этем шыңшып илармы?
Астан аяҡ һуҙмаҫ борон,
Ләмәҙенә шылармы?

— Атығыҙға төйәк бар,
Этегеҙгә һөйәк бар!

— Был йорттарға керергәме?
Күтәрмәләре күркәм.
Ҡырып йыуған таҡтаһына
Аяҡ баҫырға ҡурҡам.

— Һоя беҙгә йыраҡ түгел,
Бысаҡ беҙҙә бөтмәгән.
Еңгәгеҙҙең ҡулы етәү, —
Әле рәте китмәгән.

— Был йорттарға керергәме,
Ишектәре шығырҙай.
Тышта йәштәр, кер, тиһә лә,
Өйҙә ҡарттар мығырҙай.

— Ишегемә дегетем бар,
Ҡарт ҡарарға — егетем,
Берҙе эс тә, әйҙүк өйгә —
Тик шул бары өгөтөм!

Ишектән кергәс:

— Был йорттарға керергәме?
Ҡуналҡаға ҡото юҡ.
Балаçтары бөрөлөүле,
Усағында уты юҡ.

— Балаçтарым йәйелеүле,
Ҡаҙанымда — ҡаҙылыҡ.
Күп тә түгел, әҙ ҙә түгел,
Ике кәзә таҙылыҡ!

Күмәкләп көлөшәләр.

«Ниңә һәр саҡ «кәзә» һүҙе сыға?» — тиһәң, уның хикмәте бар: Ләмәҙтамаҡ ауылдарын кәзә тип йөрөтәләр. Ләмәҙҙәргә шул «кәзә» ҡушаматы менән төрттөрәләр ҙә инде!

Бында һәр ауылдың төртмә исеме бар: Мишәр — Алтығолаҡ, Һөләймән—Һыйыр, Салйығут—Ҡарға, Һабанаҡ—Ҡашҡар (Алабай), Йонос — Ҡуян, Әбдрәхим — Зәхим (Бире — ҡатҡан тире), Мәсетле — Таҙ.

Һәр төртмә исем — үҙе бер көләмәс. Кәзә ҡушаматы шулай килеп сыҡҡан, ти:

Имештер, ләмәҙҙәр Һөләймән кәзәһен яңылыш һуйып ашаған. Хөкөм киткән. Беренсе тәҡдимдә:

— Кәзә урынына ләмәҙҙәр Һөләймәнгә икенсе кәзә бирергә тейеш, — тиелгән.

Ләмәҙҙәр риза булған, һөләймәндәр — юҡ!

— Беҙгә кәзә кәрәкмәй, ләмәҙҙәргә ҡалһын! Ләмәҙгә өçтәп Кәзә тигән исем һылашһын! — тигәндәр һөләймәндәр.

Шунан бирле, имеш, ләмәҙҙәр «Кәзә» исемле булып ҡалған...

— Был йорттарҙың ҡото юҡ шул,
Ләмәҙ ҡунаҡ килмәһә,

Нужа төшмәй, хужа һүҙен
Һаҡалына элмәһә.

(Ниндәй кәзә һаҡалһыҙ булһын инде?)

— Был йорттарға керергәме?
Самауыры сыжламай.
Самауыры сыжлар ине,
Хәзәйене ыжламай.

— Самауырым быу бөркә лә
Ҡапҡасынан һыу бөркә.
Ҡоҙа миңә ҡоҙороҡһоҙ *,
Йоҙороҡһоҙ ыу * бөркә.

— Был йорттарға керергәме —
Тығыҙ өҫтәл араһы.
Тығылып та керен була,
Тик һеҙ беҙгә бараһы!

— Ләмәҙ юлын ләм ялмаған.
Ҡәрәк ҡыр(ы)ҡ тау булһын,
Ҡәзә-һарыҡ өркөтөргә
Арғымағым һау булһын!

— Был йорттарға керергәме?
Кергәс ни хәл итәһең?
Алдарыңа килтерһәләр,
Ашап-эсеп бөтәһең!
Һарыҡ башына етәһең,
Тояҡтарын өтәһең!

Хәҙер хужалар йырлай:

— Был йорттарға килгәс-килгәс,
Атыңды туғараһың.
Аттан алда ҡатыныңды,
Үҙеңде һуғараһың.

— Был йорттарға килгәс-килгәс,
Атың ҡалһын аҙбарҙа.

— Беҙгә ниңә борсолорға,
Ҡымыҙ барҙа, ҡаҙ барҙа,
Ҡыҙыбыҙға егет барҙа,
Ә егеткә ҡыҙ барҙа,
Йәй артынан ҡыш барҙа,
Ҡыш артынса яҙ барҙа?!

— Был йорттарға килгәс-килгәс,
Күтәрмәһе күтәрер,
Береһе үткәс, ҡоҙабыҙға
Икенсеһен үткәрер,
Ҡоҙағыйҙың шәрбәте бар,
Һанға һуҡһа — түңкәрер.

— Был йорттарға килгәс-килгәс,
Ишектәре асылыр.
Ҡоҙағыйым эсеп ҡуйһа,
Ҡайғыларым баҫылыр.

— Был йорттарға кергәс-кергәс,
Балаҫтары йәйелер,
Ҡоҙағыйымдың алдында
Синдан * килгән сәйелер.
Ҡоҙабыҙҙың туҫтағында
Елпер ҡанат * мәйелер.

— Был йорттарға кергәс-кергәс,
Урындыҡтар ҡуйылыр.
Ҡоҙабыҙҙың асы балы
Һуған һуты тойолор
(Ҡәҙә һуған ярата имеш!).
Ҡоҙағыйымдың шәрбәте
Йәш әремдәй тойолор.

— Был йорттарға кергәс-кергәс,
Һикеләргә менелер.
Ҡунаҡтарҙың дәрәжәһе
Һанаттарҙың тиңелер.
Ҡоҙасаның һылыулығы
Хан ҡыҙының тиңелер!

Ҡунаҡтар торараҡ та, ҡатыраҡ та төрттөрә. Ә хужаларға улай ярамай. Хужалар, үҙҙәре ҡунаҡ булып барғас, «үстәрен» алырға, эсенә йыйып ултыра.

Һуңынан ир ҡунаҡтарҙы бер башҡа, ҡатын-ҡыҙҙарҙы айырым, егет-елкенсәкте айыра өйөрөп, өй беренсә тигәндәй ҡунаҡҡа йөрөтәләр. Арала төбәктә (туғайҙа) йүгереш, көрәш, атсабыш, уғатыш, ҡапсыҡ һуғыш, һыу йүгертеш, ҡалаҡ тешләп йомортҡа илтмеш, ҡолға менеш, шартаяҡ, һуҡыр тәкә, тағы-тағы һанап бөткөһөҙ уйын-ярыштар, йыр бәйгеһе, бейеү уҙышы, тел сарлаш уҙғарыла.

Ярыштарҙың иң ҡыҙығы, миңә ҡалһа, һары май эсеш була торғайны. Был бәйгегә алдан әҙерләнгән ике «батыр» сыға: береһе — ҡунаҡтарҙан, икенсеһе — хужаларҙан. Уртаға бер биҙрә иретелгән һары май ҡуйыла. Эсендә — ике литрлыҡ сүмес. Бына шун-

да инде мәрәкәләр! Алып барыусы батырҙарҙы айырым саҡырып сығара:

— Йүгеректәр суҡ алды,
Мәргәндәре уҡ алды,
Батырыбыҙҙы тәкә һөҙҙө,
Былбылыбыҙ мәрйен теҙҙе.

(Йәғни көрәш батырына тәкә бирҙек, ә йырсы ҡыҙға муйын биҙәүес бирҙек.)

— Таҙҙар сыҡты егеткә,
Буялмайса дегеткә.

Элек ун биш-ун ете йәшлек үҫмерҙәрҙе йыйып, уларға махсус ярыш-һынауҙар үткәргәндәр. Ҡуйылған шартты үтәй алғандары «таҙҙан» егеткә сыҡты, тип иҫәпләнгән. Шартты үтәй алмаған «таҙҙарҙың» арт һанын дегет менән буяғандар.

Аҙаҡ, XIX быуат аҙаҡтарынан үҫмерҙәрҙе «таҙ» тимәй, «һалдат» йә «сержант» тип атай башлайҙар. Әлеге һынауҙы үткәндәренә «лейтенант» исеме тапшырылған.

Ҡыҙҙарға ҡашмау бирҙек,
Ҡырҡынға таҫма бирҙек.
Инде ҡалды батырҙар —
Алыш бөткәс, көрәш бөткәс,

Эсен тотоп ятырҙар!
Хужа батыр! Сыҡ бында!
Төпһөҙ ыштан тектеңме?
Эсәгеңде таҙарттыңмы?
Билбауыңды систеңме?

Алып барыусы баҫып тора, «комиссия» өс ҡунаҡ, өс хужа — биҙрә тирәләй ултыра. Майбатыр-хужа бер сүместе эсеп бөтөргәс, уға алып барыусы дан һамағы әйтә:

— Ай, Майбатыр, Майбатыр,
Беҙҙең Ниғмәт, һай, батыр!
Ай буйына ыштан киймәҫ,
Эсен тотоп, ай, ятыр.

Шунан Майбатыр-ҡунаҡ саҡырыла:

— Ҡунаҡ батыр сыҡ әле!
Ҡорҙашыңды «йыҡ» әле!
Сүмесеңде тот әле лә,
Ҡылҡылдатып йот әле!

Майбатыр-ҡунаҡ эсеп бөткәс, уға ла дан таҡмағы туҡыла:

— Ҡунаҡ батыр — Майбатыр
Муйындан майға батыр,
Юлда ыштан киптереп,
Арба артында ҡайтыр.

Нисек тә булһа ҡунаҡты еңдергәндәр. Майбатырға бүләк — бер сирек бал, бер төпһөҙ ыштан. (Һуңынан уға төп тегеп кейгәндәр.)

— Һай, Майбатыр, Майбатыр.
Бүләк ал да тай, батыр!
Арт ҡынаһы самалы ла —
Эс кенәһе бай батыр!

Майбатырҙы илауҙағы һуңғы арбаның артына һалып алып ҡайтҡандар. Күперҙе сыҡҡас, әрәмәгә йүгереп инеп, бер ни тиклем ваҡыт юғалып торғас, уны арба артына, төшөп ҡалмаһын тип бәйләп һалғандар. Бәйләр алдынан төпһөҙ ыштан кейҙергәндәр. Ана шулай ирмәк итеп йыйындар үткәрә торғайнылар.

Ул бейеүҙәр! Эсең ҡатып бөтөр. Ләмәҙҙәрҙе саҡырһаҡ, баҡсаға төшөп асы һуған ҡапҡан кәзә булып бейейбеҙ. Салйоғуттарҙы әйтеп алһаҡ — ҡарға бейеүҙәре китә (уларҙы Ҡарға тип тиргәйҙәр ҙә инде), Йоносто саҡырһаҡ, «Бүре» менән «Ҡуян» бейей.

Ул саҡта, ни, ҡартатайыңдар (олатайыңдар) ҡарт түгел — фарт ине шул!

## 197. ИШЕМБАЙ ЙЫЙЫНЫ

Һәр йыл һайын, ашлыҡ сәселеп бөткәс, Ишембай ауылы халҡы Миндеш ауылы кешеләрен ҡунаҡҡа саҡырыр булған. Ҡунаҡтар өсөн һәр йорт хужаһы теләк малы салған. Бынан тыш өй һайын май, ярма, йомортҡа, төрлө йорт кәрәк-яраҡтары йыйылған. Саҡырылған ҡунаҡтар килгәс, уларҙы ит, ҡымыҙ менән һыйлағандар. Был һыйҙан ауылдағы етем-еһер, ҡарт-ҡоролар ҙа ситтә ҡалмаған.

Һый тамамланғас, халыҡ йыйылып тауға сыҡҡан. Унда төрлө уйын-көлкө, башҡорт көрәше, бәйге үткәрелгән. Шунда уҡ, ашлыҡ мул булһын, ямғырҙар яуһын, тип теләк тә теләгәндәр. Шуға ла был Ишембай йыйынын халыҡ «Теләк көнө», «Теләк уйыны» тип тә атаған.

Был уйын күбеһенсә ауылдан һәйбәт уҡ алыҫ Соҡорйорт тигән урында үткәрелгән булған. Сөнки был урын тәбиғәте менән бик матур. Унда йөҙйәшәр ҡарағайҙар ҙа, зифа буйлы ҡайындар ҙа, сылтырап аҡҡан шишмә лә, түңәрәк кенә аҡлан да бар. Соҡорйорттоң матурлығы тураһында ауылыбыҙҙың аҡһаҡалы Йәһүҙә сәсән Ғөбәйҙуллин шулай тигән:

Бигерәк матур икән, йәмле икән,
Һәйрәп кенә ятҡан Соҡорйорт.
Шылтырап та аҡҡан йылғаһы бар,
Тирә-яғы хәс тә хозур йорт.

Йырын буйҙарында муйыл ҡыуаҡтары,
Улар сәскә ата яҙ көнө.
Аҡ ҡар кеүек улар сәскә атҡас,
Хуш еҫтәре унда аңҡыны.

## 198. ҺӘҮНӘК ЙЫЙЫНЫ

Һәүнәкташ — Көньяҡ Уралдың бейек түбәләренең береһе ул. Уның башына менеп ҡараһаң, аяҙ көндәрҙә әллә ҡайһы ерҙәрҙә ятҡан тауҙар — Күк Ирәндек, Ҡырҡты, Ҡыраҡа һырттары, Иҙелбашы, Ирәмәл, Ямантау... Мәғәнит ҡалаһын да аңғарырға була.

Ошо бейек түбәлә борон йыйын үткәрелер булған. Ул ер-һыу ҡороп, күк үлән сығып, Тамъян, Бөрйән, Ҡарағай-ҡыпсаҡ башҡорттары Уралдың ошо күркәм яғына йәйләүгә күсеп берәҙерәк башкүҙ алған ваҡытҡа тура килгән. Өс ырыуҙан килгән халыҡ һаба-һаба ҡымыҙ, һимеҙ-һимеҙ ит бешереп, ошо түбәлә ирәүәнләп ултырып һыйлашҡан, күңел асҡан. Аҡһаҡалдар был осрашыуҙы ырыуҙар араһындағы бәхәстәрҙе юлға һалыу, барымталашыусыларҙы татыулаштырыу өсөн файҙаланған. Иҙел, Яйыҡ кисеп, Урал артын алырға теләгән баҫҡынсыларға ҡайһылайтып, ҡырап бергә-бергә ҡаршы торорға, уларҙы нисек илдән ҡыуырға кәңәш иткәндәр.

Урал йәйләүҙәренә сыҡҡан мәлдә элек-электән малды айыу тәләфләүсән булған. Шул йыйын барған арала (ә ул өс көнгә тиклем һуҙылыр булған) һунарсылар ауға сығып, күмәкләшеп айыу аңдыған. Ҡайһы ырыу һунарсылары күберәк табышҡа юлыҡһа, шул ырыуға дан өҫтәлгән.

Йыйын ябылғас, һәр кем үҙ ҡунағын, йәйләүенә алып ҡайтып, хөрмәт күрһәтергә тырышҡан.

## 199. КӨНГӘККӘ СЫҒЫУ

### А

Ағиҙелдең төньяҡҡа бөгөлгән ерендәге Төбәк ауылы янындағы тауҙы Көнгәк тауы тип йөрөтәләр. Уның көнгә ҡараған бите асыҡ ҡына. Көнгә ҡарап ятҡанға шулай аталғандыр инде.

Был яҡта шундай бер йола йәшәп килә: йәй баштарының бер көнөндә Күгәрсен, Мәләүез, Көйөргәҙе райондары йәштәре ошо тау яҡынындағы ауылдарға йыйыла башлай. Халыҡ уларҙы ҡунаҡ итә, ҡәҙерләп йоҡлата. Ә иртәгәһенә бөтәһе лә Көнгәккә күтәрелә. Шунда көнө буйы күңел асалар. Һәр кем, күмәкләшеп тә,

Беҙҙең ауыл бер егеткә
Бер сибәрҙе димләгеҙ,
Сибәрҙән дә сибәрен,
Аҡлы күлдәк кейгәнен.
Аҡлы күлдәк кем киймәй,
Ҡеше йәрен кем һөймәй.
Һөйгәненде яттар һөйһә,
Нисек йәндәрең көймәй.
Ҡөйһә, бер хәл итербеҙ ҙә
Урлап алып китербеҙ...

2-се төрлө ҡушымта:

И, эннәки-эннәки,
Ҡара күлдәгенде кей.
Ҡара күлдәк кер күтәрә,
Көн дә йыу ҙа көн дә кей.
Көн дә йыуып көн дә кейһәң,
Уғата кер күтәрә.
Беҙҙең баштар хағын түгел,
Нахағын да күтәрә...

3-сө төрлө ҡушымта:

Айҙара, айҙара,
Айҙараның буйҙары.
Айҙараның буйҙарында
Ат эсергән юлдары...

Был ҡушымталарҙы теләгән бер таҡмаҡ менән йырларға була. Улар оҙон да, ҡыҫҡа ла. Мәғәнәһе лә төрлө.

Офоҡтағы тауҙар араһынан ҡыҙарып ҡояш сыҡҡас, ял итеп алалар ҙа өлкәндәр ҙә, бәләкәстәр ҙә Көнгәк тауына күтәрелә башлай. Ул 500 метр бейеклектә ике саҡрымға һуҙылған һөҙәк түбәләстәрҙән тора, ҡатнаш ҡарурман менән ҡапланған. Байрам барған мәлдә урман ситендәге сейә, өҫкат, селек, тубылғы, ноҡот ҡыуаҡлыҡтары бөтә тирә-йүнгә хуш еҫ аңҡытып сәскә ата. Ә мөһәбәт йөҙйәшәр имәндәр Көнгәк тауының түбәһендәге ике суҡайлыҡты һаҡлап теҙелгәнме ни! Уртала — йәшеллеккә сумған аҡлан. Башҡа урында осрамаған үләндәр, сәскәләр үҫә бында. Ике саҡрым буйына һине ысын тәбиғәт музыкаһы — йөҙәрләгән ҡош тауышы оҙатып бара... Тауға менеп баҫҡас, аҫҡа ҡарайһың да иҫ киткес хозурлыҡҡа хайран булып өнһөҙ ҡалаһың. Ә Ағиҙел йәшел келәмгә бормалап һалып ҡуйылған көмөш уҡалай ялтырап ята.

Кешеләр тирә-яҡтың күркәмлегенән тағы ла көслөрәк илһамланып, дәртләнеп уйнарға, йырлап-бейергә тотона. Көнгәк тауына менеп, уйында ҡатнашҡан кеше уны йөрәгенән сығармай, тағы ла килергә йыл буйына ашҡынып тора.

Ә кис яҡынлашҡас, йәш-елкенсәк ауылға ҡайтып күңел асыу-

айырым-айырым да үҙ һөнәрен күрһәтә. Уйын-көлкөнән арығас, табын ҡоралар, унан инде йәнә күңел асыуҙар китә.

Ололар әйтеүенсә, Көнгәккә сығыу йолаһы 1812 йылғы Ватан һуғышы осоронда башланған. Француз баҫҡынсыларына ҡаршы яуға китеүсе ир-егеттәрҙең күңелен табыр өсөн ошонда Ҙур йыйын үткәрелгән.

Наполеонды Рәсәйҙән ҡыуып, Парижды алып, яугирҙәрҙең иҫәндәре тыуған яҡтарына ҡайтҡан. Ошо ҡыуаныстан халыҡ йәнә Көнгәккә сығып, йыйын йыйып, Ҙур байрам яһаған. Шунда булған кешеләр киләһе йылда ла бер мәлдә Көнгәккә сығырға һүҙ беркеткән, ти.

Ана шунан алып йәшәй икән был байрам, именлек, һиллек байрамы.

## Б

Тау исемен йөрөткән был байрам, быуындан быуынға күсеп халыҡтың төп ғөрөф-ғәҙәтенең береһенә әүерелгән.

Уның алдан әҙерләнгән программаһы ла, концерттары, бигерәк тә оҙон-оҙон ялҡытҡыс телмәрҙәре лә юҡ ине әлек. Уйынға йыйылған бар халыҡ — саҡ тәпәй баҫҡанынан алып таяҡ таянып йөрөгән ҡарт-ҡороға тиклем — тиң хоҡуҡ менән ҡатнаша, рәхәтләнеп күңел аса торғайны.

Ошо йәйге байрамға Томансы ауылы халҡы, үҙенә хас эске кинәнес менән йыл буйы әҙерләнеп, ҡупшы кейем-һалым туплап, тәмле ризыҡ бешереп ҡуя. Йорт-ҡура нығытыла. Бөтә ерҙә бөхтәлек, сафлыҡ. Урам тап-таҙа. Унда, әйтерһең дә, йәшел хәтфә балаҫ йәйелгән. Еҙ батмус, ҡомған-самауырҙар күҙҙең яуын ала. Һимертелгән тәкәләрҙе һуйып һыйҙы өҫтәлгә теҙгәс, ололар — ҡапҡа төбөндә, ә йәш-елкенсәк ауыл осона сығып, гармун уйнап, йыр-моң менән ҡунаҡтар ҡаршылай.

Был көндө Томансы ауылы ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтә. Ҡайҙа ҡарама, шатлыҡлы осрашыуҙар, яғымлы ҡараштар. Һәр өйҙә ҡунаҡ һыйлайҙар, йыр-музыка яңғырай.

Көтөү ҡайтып, малдар ҡураға ябылғас та, бар халыҡ йәшел сиҙәмгә сыға. Олоһо ла, кесеһе лә, ҡулға-ҡул тотоношоп, «түңәрәк бейеүе»нә төшәләр. Гармун, ҡурай, мандолина, скрипка бер-береһен алмаштырып уйнағандан һуң, күңел елкендергес таҡмаҡтар башлана. Уйын таң һыҙылып атҡансы дауам итә.

Бөгөнгө бала-саға таҡмаҡтың ни икәнен дә белмәй. Шуға ла бер-икеһен яҙҙырып үтәм.

Менә алмайбыҙ тауығыҙға,
Бейек икән ярығыҙ.
Беҙ килдек тә ҡунаҡ булдыҡ,
Инде үҙегеҙ барығыҙ.

Ҡ у ш ы м т а:

Алай-былай тимәгеҙ,
Ғәйбәт һатып йөрөмәгеҙ,

ҙы дауам итә. Өс көн, өс төнгә һуҙылған «Көнгәк» уйынында йәштәр унда киләсәк тормошона дуҫ-иш, ғүмерлек йәр таба.

Ауыл халҡы ҡунаҡтарҙы нисек хөрмәтләп ҡаршылаһа, шулай уҡ йыр-музыка менән оҙатып ҡала һәм яҡшы кәйеф менән эшкә тотона.

Көнгәк байрамындағы күтәренкелек һис тә «йәшел йылан» көсөнә нигеҙләнмәгән. Борон башҡорт халҡында эскелек иң хурлыҡлы эш һанала ине. Ата-бабаларыбыҙҙың ҡомартҡыһы булған был уйын фәҡәт кешеләрҙең күңел сафлығына, рухи байлыҡ көсөнә ҡоролған. Байрам итеү хатта һуғыш йылдарында ла туҡтап ҡалманы. Үлән икмәк, кесерткән аш ашап, сабата кейеп йөрөһәлә, кешелә йәшәү дәрте һүнмәй икән.

Көсләп тағылған программалы уйын-көлкө йөрәкте ныҡ илһамландырмай. Яҙғы һабантуй-бәйгеләрҙе мотлаҡ еңеү маҡсаты менән барған ярышҡа әүерелдереп, бөтә асылын төбө-тамыры менән үҙгәрттек. Алдынғыларҙы бүләкләү халыҡтың күңелен ҡыйырһытып, уйындан ситләтә. Шуға ла һабантуйҙарҙа кешеләр эскелектән йәм таба башланы.

Ата-бабаларыбыҙ йыйыны «Көнгәк» үҙгәрешһеҙ үҙ көсөндә ҡалһын ине. Халыҡ байрамы — сәмле ярыш түгел ул. Быуындан быуынға күсә килгән йолаларҙы борон ижад ителгәнсә һаҡлау яҡшыраҡ. Уйындарҙа бөтәһе лә ҡатнашһын, бер кем дә тамашасыға әйләнмәһен. Яңыртам, тип, үҙгәртеүҙең кәрәге юҡ. Халыҡтың «Көнгәк», «Сарлаҡ», «Яр» байрамдары тиң күңел асыу өсөн уйлап табылған һәм байҙарҙың бүләк таратыуға ҡоролған бәйге, көс һынашыуҙарынан нәҡ шуныһы менән айырылып тора.

## 200. ӘҢГӘМӘ ТАУЫ

Ҡыҫыҡ утары кешеләре һәр яҙ һайын иң алдан ҡарҙан әрселә торған тауға сығыр булған. Шунда Ҡарға бутҡаһы байрамын үткәргәндәр, бүтән йыйындарға йыйылыр булғандар, уйын-көлкө ҡорғандар. Ул байрам-йыйындарҙа, уйналған уйындарҙа йәш-елкенсәк ҡатнашҡан. Ололар уйын барышын күҙәтеп, үҙ-ара әңгәмәләшеп ултырыр булғандар. Шунда саҡта ил-йорт хәлдәрен тикшереп, бөтәһен дә уртаға һалып һөйләшкәндәр. Был хәл йылда ҡабатланған. Шуға ул тауҙы Әңгәмә тауы тип йөрөтә башлағандар.

## 201. ХӨКӨМ ТАУЫ

Дыуан төбәгендә Хөкөм тауы тигән тау бар. Шул тау янында борон йыйындар үткәрелгән. Төрлө ырыу аҡһаҡалдары тау башына сығып, ил-йортҡа именлек, ырыҫ, бәхет теләп доға ҡылғандар. Ырыу-ара бәхәстәрҙе тикшереп, үҙ хөкөмдәрен әйтер булғандар. Шуға тауҙы аҙаҡ Хөкөм тауы тип йөрөтә башлағандар.

## 202. МӘСЕМГӘ СЫҒЫУ

Мәсемгә иҫкесә май башында күсә торғайнылар. Унан бесән еткәс, Ҡараһыйыр тигән ергә төштөләр. Олатайым бахыр шунан Иҫке ыҙма тип йөрөтөлгән ергә күсер ине. Хәҙер Бөрйәндең район һабан туйы шул урында үтә.

Ҡымыҙлыҡ мәлендә Мәсем ташына менә торғайнылар. Ирҙәр ҙә, ҡатындар ҙа сыр-сыу килеп, Мәсемгә һыбай сабышып бара торғайнылар. Мәсем ташы бик текә таш. Унан әллә ни ҡәҙәре ерҙәр күренеп ята. Шуға ла:

Мәсем менән Баҙал ҡалҡыуы —
Күренеп ята Ирәндек ҡалҡыуы.
Кеше лә генә хәлен кеше белмәй,
Күренмәй шул йөрәгем ялҡыны, —

тип йырлағандарҙыр инде борон.

Берәй сосорағы менә. Менә лә билбауҙар ялғап бүтәндәргә төшөрә. Шулайтып билбау буйлап ҡалғандар ҙа өҫкә үрләй. Таш өҫтөнә менгәс, уйнап, бейеп күңел асырҙар ине. Төшөр саҡта ҡыуаҡтарға мәрйен, мунсаҡ, тәңкәләр тағыр ине ҡыҙ-ҡырҡын. Таш ярығына көмөш тәңкә һала торғайнылар.

Иҫке Собханғолдан Ғәзизов Хәсән: «Һуғыштан имен-һау ҡайтһам, ошо Мәсемгә тимерҙән баҫҡыс ҡуйыр инем!» — тип нәҙер әйткән, ти. Имен ҡайтҡан, һүҙендә лә торған. Һуғыштан һуң кейәүе Барыев Самат менән баҫҡыс эшләп ҡуйғандар.

Мәсемгә күскәс, Әбделғәни хәҙрәт тана һуйып, йылына бер йыйын йыйып, халыҡтан фатиха алыр булды. Йыйын Мәсем аҫтындағы туғайҙа үтә. Унда шул ҡәҙимге һабантуйҙағы һымаҡ, бәйгеләр үткәрер, йүгерешер, көрәшер, йырлашыр инеләр. Бейеүселәр бейеүҙә, ҡурайсылар ҡурай тартыуҙа ярыша.

Колхоз булғас, Мәсемгә күсеүҙәр онотолдо... Шунан ни Мәсемде һағынып шулай тип йырлаған була торғайныҡ:

Мәсем генә буйын йәйәүләп сыҡтым,
Ике аяҡҡайымды талдырып,
Мәсем генә буйы ятып ҡалды,
Йәш йөрәккәйемде яндырып.

Мәсем генә ташы — мәүлим таш *,
Көмөш кенә йөҙөк, мәрйен ҡаш.
Бармаҡтарың — ҡамыш, йөҙөң — ҡояш,
Аҡылдарың — камил, үҙең — йәш.

Мәсем генә буйы ҡалды инде,
Һары сәскә үлән алды инде.
Мәсем генә буйы ятып ҡалды,
Һағынып һөйләүҙәргә ҡалды инде.

8 Заказ 761

## 203. САҒЫЛ ТУЙЫ

Был туй йыл һайын яҙғы эштәр бөткәс, кесаҙна көндө уҙғарылыр булған. Унда һәр төрлө бәйгеләр үткәрелгән: ат сабыштырғандар, йүгеректәр йүгерешкән, көрәшселәр бил һынашҡан һ. б...

Сағыл байрамында, алға сыҡҡандарҙы билдәләп, урын биреү, бүләкләү ғәҙәте булмаған. Был байрам тик күңел асыр өсөн генә үткәрелгән.

## 204. БӘЙЕМБӘТ БАЙРАМЫ

Санъяп ауылы менән беҙҙең Сәйетҡол ауылы араһында типһән генә ер бар. Унда-бында өйкөм-өйкөм ҡыуаҡлыҡтар үҫә. Шул ерҙе Бәйембәт туғайы, Бәйембәт яланы тип йөрөтәләр. Яҙғы сәсеүҙәр бөтөп, ер-һыу кибеп (ә ул туғайҙы һәр йылда ла тигәндәй һыу баҫыр ине) үлән сыҡҡас, алдан һөйләшеү буйынса, Бәйембәт туғайына тирә-йүндәге ауылдарҙан ылауҙар, һыбайлылар, йәйәүлеләр ағыла башлай. Әлеге өйкөм-өйкөм ҡыуаҡлыҡ төбөнә ат туғарыла, тәртәләр күтәртелә, усаҡ яғыла, ҡаҙан аҫыла, табын ҡорола. Ололар, таныштары менән осрашып, ҡыуаҡ күләгәһендә ҡымыҙ һемерә-һемерә донъя хәлдәрен тикшерә. Еткән улы булған ҡатындар килен булырҙай ҡыҙҙарҙы күҙәтә. Уларҙың атаәсәһе менән танышырға тырыша. Ә йәштәр өйкөм-өйкөм булып өйкөлөшөп, уйнап-йырлап, көлөшөп күңел аса: көрәшселәр бил һынаша, йырсылар йырҙа, бейеүселәр бейеүҙә ярыша. Ҡурай тартҡан да, ҡумыҙ сирткән дә, биҙрә ҡаҡҡан да, гармун уйнаған да — барыһы ла шунда була. Аш бәйгеһе лә үткәрелә. Хас та һабантуй һымаҡ ул Бәйембәт байрамы. Тик хәҙерге һабантуйҙарҙа күберәк спорт ярышы, һөнәр бәйгеһе генә булһа, Бәйембәт байрамын кешеләр аралашып, танышып ҡалыуға файҙалана торғайнылар. Егет-елән, ҡыҙ-ҡырҡын шунда күҙ атыша. Ҡыҙҙар өсөн ыҙғышҡан саҡтары ла булғылар ине. Аҙаҡ ҡайтырға йыйынғас, ҡайһыһының дуғаһы булмай, бәгзеһенең дилбегәһе юҡ, арбаларының кендеген таба алмай ыҙалаусылар ҙа осрай. Был инде йә мәрәкәләшеү, йә әлеге ҡыҙҙар өсөн ыҙғыш касафаты... Шулай ҙа Бәйембәт байрамында күберәк мәрәкә хөкөм һөрә. Иң мөһиме шул: Бәйембәт байрамы яңы туйҙарға сәбәп булыр ине. Әлегерәк берәй бабайҙан:

— Бабай, әбейем менән ҡайҙа таныштың? — тип һораһаң, һаҡалын елпетеп йылмайыр ҙа:

— Бәйембәттә, — тир.

Ә инде әбей-һәбейгә:

— Әбей, бабайыңды ҡасан тәүгә күрҙең? — тиһәң, гәҙәттә шул уҡ яуапты алырға мөмкин:

— Ҡайҙа булһын, Бәйембәттә...

## 205. ХОЗУРҒА СЫҒЫУ, СӘХРӘГӘ СЫҒЫУ

### А

Учалы районы Яңы Байрамғол ауылы халҡы яҙын хозурға сыға. Хозурға, ғәҙәттә, 1 майҙа сығалар. Ул Янтыҡбаш, Ишанғол тигән тауҙарҙа йә Фәйез ҡойоһонда үтә. Хозурға әбейҙәр бер башҡа, ҡыҙҙар бер башҡа, малайҙар бер башҡа сыға. Һәр кем үҙе менән ашамлыҡ алып бара. Шуларҙы бешереп ашайҙар. Ашапэскәндән һуң, уйнап алалар. Күберәк «Наза», «Убыр әбей», «Йәшерәм яулыҡ» кеүек уйындар уйнала торғайны. Бала-саға «Бында еләк күп икән»де уйнарға әүәҫ. Берәү айыу булған булып ята. Балалар:

— Бында еләк күп икән,
Айыу, бүре юҡ икән, —

тип еләк йыйып йөрөгән булалар. Берәү түңгәк икән тигән булып, «айыу» өҫтөнә ултыра. «Айыу», тора килеп, баҫтыра башлай. Кемде тота — шул «айыу» урынын алып, «түңгәк» булып ята.

Хозурға сыҡҡанда, йомортҡа буяп алып барып, шуны тауҙан тәгәрәтеү йолаһы ла бар. Бешкән буяулы йомортҡаны иң бейектән тәгәрәтәһең. Кемдеке алыҫҡараҡ тәгәрәй, ярылып сәсрәмәй, шул бәхетле була. Аҙаҡ һәр кем үҙе тәгәрәткән йомортҡаны алып ашай.

### Б

Беҙҙең ауылда шундай йола була торғайны. Иртә яҙҙың бер көнөндә ир менән ҡатын матур-матур кейенешеп, көнлөк аҙыҡ алып, ат егеп, ҡырға сыға. Шуны сәхрәгә сығыу тигән була торғайнылар. Ир менән ҡатындың сәхрәгә йыйыныуын бөтә күрше-күлән белеп тора. Уларҙың, ат егеп, ҡапҡанан сығыуына бөтәһе лә оҙатып ҡала ине.

## 206. УЙЫН ТАУЫНА (ҠАПҠАҠҠА) СЫҒЫУ

### А

### Суҡлы ҡайынға барыу

Майҙың матур бер көнөндә кейенешеп-яһанышып йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡоро, береһе лә ҡалмай, уйын тауына сыға. Үҙҙәре менән ризыҡ алып килә, бешеренә. Һыйланып, бейешеп, круг әйләнеп, ҡарт ҡарамаға таған тағып, атынып, күңел асалар.

Бәке тауында ҡыҙ-ҡыртҡын йыйыла торған ғәҙәт тә бар ине. Уларға эйәреп, бала-саға ла сыға, балтырған йыялар, аш бешерәләр, уйнап-көлөп, күңел асып ҡайта торғайнылар. Ҡайһы

ваҡытта, андып тороп, егеттәр ҙә килеп етә Бәке тауына. Улар үҙҙәре менән ҡурайсы, гармунсы килтерер ине. Уйын ваҡытында саған ағасынан эшләнгән ҡумыҙ тарталар. Ҡумыҙ көйөнә бейей торғайнылар.

Б

Хәйбулла яҡтарында йәйге селләнең бер мәлендә ун ике ҡыҙ йыйыла ла, биҙәнеп, яһанып, суҡлы ҡайынға бара. Барғас, ҡайындың һалынып торған суҡтарын үреп таҫмалағандар. Ҡайын суғын үргәндә, киләсәктәрен, күрәсәктәрен юрап, изге теләктәр теләгәндәр. Сәскә ҡушып, ҡайын суҡтарынан таждар яһап кейгәндәр ҙә, суҡлы ҡайын тирәләй әйләнеп, йырлашып алғандар, таҡмаҡ әйтеп бейешкәндәр. Иң аҙаҡ сәй ҡайнатып, эсеп, ҡайын менән хушлашып, ҡайтып киткәндәр.

## 207. ҺАБАНТУЙ

А

### Ер һыҙыу

Ҡар иреп, түбәләрҙә йәшел үлән, ағастарҙа бөрөләр тулыша башлағас, ауыл ҡарттары йыйылып тауға баралар. Унда ил йолаһы һабантуйҙы нисек, ҡайҙа, ниндәй ҡунаҡтарҙы саҡырышып, үткәреү тураһында кәңәш ҡоралар. Майҙан урыны билдәле булғас, утыҙ-ҡырҡ йәштәге ир ҡорона ингән уҙаманды ат саптырып, һабантуй урынына баған * ҡағырға һәм ер һыҙырға ҡушалар. Ололарҙың ышанысын үтәп, был кеше эйәргә арҡан, арҡан осона ҡамсы, аҡ йә ҡыҙыл төҫтәге йыртынды сепрәк бәйләп, байрам булаһы урынды билдәләп, бер нисә рәт, ғәҙәттә, өс әйләнеп сабып сыға. Быны «ер һыҙыу» йә «майҙан һалыу» тиҙәр. Һуңынан бер нисә ир майҙан уртаһына бейек бағана ултырта. Ҡатын-ҡыҙҙар майҙанды биҙәй: ағастарға суҡ, таҫмалар бәйләй.

Аҡһаҡалдар кәңәш ҡора. Улар ил хәлдәрен һөйләшеп, уйлашып бата әйтә, зыяратҡа барыу көнөн билдәләп ҡайталар.

Б

### Зыяратҡа барыу

Икенсе көнөн (ғәҙәттә, йома көн иртән) ҡарттар зыяратҡа бара. Тәүҙә ҡояш сығышы буйынса ауылды бер тапҡыр әйләнеп сығалар. Унан һуң урам уртаһынан теҙелешеп зыярат яғына юл тоталар. Урамда өс тапҡыр туҡтап тәкбир әйтәләр. Ҡатын-ҡыҙ, урамға сыҡмай тыңлап амин тота, ир-ат, малайҙар урамға сыға. Түлдән үткән * оло ҡатын-ҡыҙға сығырға мөмкин. Улар, тәкбир әйтеүселәр янына килеп, яурындарына аҡ таҫтамал һалалар. Ба-

байҙарҙың башында — ҡөрәйеш *, сәллә. Таҫтамалдың йәки сәлләнең оҙон ике осо, күкрәктә, ярым түңәрәк яһап, ике яурын аша арҡаға һалына.

Зыярат ҡапҡаһы янына килгәс, ҡарттар туҡтайҙар ҙа тағы тәкбир әйтәләр. Мулла йәки ҡарттарҙы башлап йөрөүсе: «Әйҙәгеҙ, инде үҙебеҙ, кәңәш тотоп, ниәт иткән эшкә әруахтарҙың фатихаһын алып сығайыҡ!» — ти. Ауыл зыяраттарының һәр береһендә тиерлек халыҡ әүлиә ҡәбере йә оло ҡәбер тип йөрөткән ҡәбер була. Ҡарттар шундай ҡәбер тирәләп ултырыша. Ҡәберҙең дүрт мөйөшөндә — дүрт кеше, ҡибла яҡлап мулла урын ала ла, доға ҡылалар. Шулай итеп әруахтарҙы ололап, уларҙан ризалыҡ алып, олоҡлап ҡайталар.

## В

### Һабантуй күмәсе йыйыу

Һабантуй иртәгә була тигән көндө үҫмер малайҙар ауыл буйлап йөрөп һабантуй күмәсе йыя. Һәр хужабикә уларға йомортҡа, йыуаса, кәнфит сығарып бирә.

Малайҙарҙың аяҡтарында оҙон аҡ ҡуныслы ойоҡ, ул уҡа йә ҡыҙыл таҫма, суҡлы бау менән быуылған була. Баштарында — таҡыя (түбәтәй), өҫтәрендә — аҡ күлдәк, билдәрендә — ҡыҙыл билбау. Билбауҙың ике осо ике яҡта булырға тейеш. Ҡара йә бурлат ҡыҙыл кәзәки ҙә (йә камзул, йә һырыған) кейәләр. Билдәрендә — төрлө төҫтәге туҡымаларҙан тегелгән муҡсалар була. Малайҙар туҡтауһыҙ йырлап, һамаҡлап йөрөйҙәр:

— Беҙ йөрөйбөҙ ипләп,  
Һеҙ бирегеҙ икмәк.  
Беҙ йөрөйбөҙ йылап,  
Һеҙ бирегеҙ майлап.

Хужабикәләр күстәнәс биргәндән һуң:

— Ҡул артың еңел булһын,  
Ҡон артың еңел булһын.  
Теләгең ҡабул булһын! —

тиҙәр. Малайҙар ары китә:

— Йомортҡалар алығыҙ,  
Муҡсайҙарға һалығыҙ,  
Тирәкле яланына *  
Һабантуйға барығыҙ!

Ҡайһы берҙә өҫтәйҙәр:

— Иртән иртүк кейенешеп,  
Һабантуйға барығыҙ!

Йыйылған кҮстәнәсте малайҙар бер еңгә йортона илтеп ҡуялар. Бер урында кҮстәнәс менән үҙҙәре лә һыйланып ала.

## Г

### Ҡолғасылар үтеүе

Малайҙар ауыл ҡыҙырып сыҡҡас, һабантуй һөлгөһөн йыйырға, урамға утыҙ-ҡырҡ йәштәрҙәге һыбайлы ир-егеттәр сыға. Йәш килендәр ат ялына еүктар, таҫма, уҡа таға, муйынына һөлгө, яулыҡ һала. Ошо ваҡыт еткән ҡыҙҙарҙың, килендәрҙең ҡул эштәре, оҫталыҡтары һынала (һыбайлылар һаны таҡ һанда, йәғни биш йә ете булырға тейеш).

Ауылды әйләнеп сыҡҡансы, аттарҙың муйындары, ялдары, егеттәрҙең яурындары һабантуй бүләктәре менән биҙәлгән була.

Һабантуй хәбәрен халыҡҡа еткерергә ҡолғасылар сыға. Был йола төш ваҡытында була йәки һабантуй көнөндә иртән иртүк үткәрелә. Ҡолғасылар — ил ағалары, оло йәштәге ирҙәр булырға тейеш. Уларҙың яурындарында ҡыҙыл башлы һөлгөләр, билдәрендә ҡыҙыл билбау була. Улар ауылға һөрән һалалар, һәр йорт янында туҡтамайса, һамаҡламайса, үтмәйҙәр:

— Һабантуйға барығыҙ,
Ҡотлап бүләк һалығыҙ,
Таҫтамалдар һалығыҙ,
Һөлгөләр ҙә тағығыҙ!

Ҡөрәшсегә — таҫтамал,
Йүгереккә — ҡулъяулыҡ,
Барын бергә һалығыҙ!

Ҡолғаға һөлгө йыйғанда оло ағайҙар шулай тип тә һамаҡлаи:

— Һөлгө йыям, күрегеҙ,
Һеҙ ҙә бүләк бирегеҙ.
Аллы-гөллө һөлгө йыям,
Һабантуйға килегеҙ!

Ҡөрәшсегә — тыу һарыҡ,
Йүгергәнгә лә бүләк.
Һабантуйҙай оло байрам
Була бит ул бик һирәк.

Һабантуй, һабантуй,
Һабантуйға буҙа ҡой!
Ҡунағыңды көтөп алып,
Һый-хөрмәтең мул ҡуй!

Ҡолғаға бүләк бәйләүселәр шулай ти:

— Һабантуй ҡотло булһын!
Көнө имен торһон,
Ҡото йоҡһон!

## Ғ

### Һөнә һуғыу

Һабантуйға китеү ваҡытын белдереп һөнә һуғалар. Оҙон кәртәгә икс туҡмаҡ менән яңғырата һуғып, ир кеше ҡысҡыра:

— Һабантуй! Һабантуй!
Һабантуйға барығыҙ!

Һәр кем үҙ арбаһына кәрәк-ярағын һалып, иң матур кейемдәренә кейенеп, шау-гөр килешеп, хәбәр ителгән майҙанға китә.

## Д

### Һабантуйҙың барышы

**Ҡор башы** (майҙан атаһы ла тиҙәр) һабантуй менән халыҡты ҡотлап изге теләк теләй, ниндәй көрәш, бәйгеләр булырын, кемдәр, ҡайҙан килгән ҡунаҡтарҙы, уларҙың ырыуын әйтә, ниндәй атаҡлы ҡурайсыларҙың, думбырасы, ҡумыҙсыларҙың, былтырғы батырҙарҙың, йырсыларҙың килеүен әйтә, уларға халыҡ сәләмен еткерә. Һәр ауылдан килгән ҡунаҡтарҙы майҙан ҙурлап ҡаршылай: дөңгөр һуғалар, һорнай уйнайҙар *.

Ҡор башы, шулай уҡ, майҙанда ил хәлдәренә ҡағылышлы ниндәй етди һүҙ булыры тураһында ла әйтә.

**Ат сабыш.** Иң тәүге бәйге — ат сабышы. Унда, ғәҙәттә, үҫмер малайҙар сабыша. Бәйгегә тиклем аттарға махсус тәрбиә була. Бәйгенең беренсе бүләген, һебәһен, ауыш ҡолғаға тағып ҡуйыр булғандар. Беренселекте алыусы, сабып килешләй үк ул бүләкте эләктереп алған.

**Көрәш.** Көрәш бәйгеһен дә малайҙар башлай. Шунан ғына ир ҡорона еткәндәр бил һынаша. Көрәшселәр буй йә ауырлыҡ буйынса түгел, ә йәрәбә, шыбаға, буйынса көрәшкәндәр. Ғәҙәттә, һәр ауыл үҙенең батырын махсус әҙерләгән: тәкә һуйып, ай буйы ашатып, һыйлап йөрөткәндәр. Борон кесаҙна кис йә йома көн һуйылған малдың ҡанын * мөгөҙгә һалып (йә туҫтаҡ менән) эсергәндәр. Батыр даны ырыу данына әйләнгән.

Ҡарттар бер урынға йыйылып йомортҡа тәгәрәтә *. Оло түңәрәк булып, әйләнә тирәләй ултырған йәш-елкенсәк, малайҙар йомортҡа тотоп алыр өсөн ирмәк итеп болашалар.

**Аш бәйгеһе.** Һәр ауыл, ҡаҙан аҫып, байрамға атап һуйған һуғымын бешерә, ситтән килгән ҡунаҡтарҙы бүлешеп алып һыйлай,

хөрмәт итә. Һуғым башы йәки баш итен ҡарттарға килтереп бирәләр. Йола буйынса, уны, баш эйеп, батыр килтереп бирә. Оло йәштәге бабай йә мулла, баш эйеп, ҡабул итә һәм хөрмәт өсөн егеткә рәхмәт әйтә. Баш итен ҡарттар барыһы ла ауыҙ итергә тейеш, өлөшсө иң тәүҙә алып килеүсе батыр егеткә баш итенең уң ҡолағын (йә ҡолаҡ арты өлөшөн) киҫеп бирә лә: «Уң хәбәр * менән генә йөрө!» — ти.

**Атылмаҡ йәки сәңгелдәк уйнау.** Ике бейек бағананы тоташтырған урҙаға йыуан арҡандан ҙур сәңгелдәк (атылмаҡ) эшләнә. Ике-өс ҡатлы арҡанды өсмөйөшләп таҡта һалына. Уның бер башына ҡыҙ, икенсеһенә егет баҫа. Башҡалар ҙур түңәрәк булып торалар ҙа, ҡулға-ҡул тотоношоп, йәштәрҙең сәңгелдәктә бәүелгән ыңғайға һамаҡлайҙар:

— Ҡарағай таҡта — шыма таҡта,
Ялтырайҙыр сыуаҡта.
Бер башы уның ҡояшта,
Бер башы туп(ы)раҡта.
Һу-у-у! —

Ошолай итеп төрлө тауыштар менән һөрәнләйҙәр:

— Ҡарағай таҡта, буй-буй таҡта,
Талпына ла ҡалҡына,
Талпына ла ҡалҡына,
Йәш йөрәгем елкенә.
Һу-у-у!

**Аттан тартышыу.** Көс, йылдамлыҡ, сослоҡто һынау өсөн, һыбайлылар бер-береһен аттарынан тартып төшөрөргә тырышалар.

**Түңәрәк йөрөп, таҡмаҡ әйтешеү.** Түңәрәк уртаһына ҡурайсылар, скрипкасылар, ҡумыҙсылар баҫа. Түңәрәктең икенсе ҡатында таҡмаҡ әйтәләр, сәмгә һалып бейешәләр:

— Тыпыр-тыпыр бейе әле,
Таҡта табырбыҙ әле.
Бер төшкәндә бейеп ҡал,
Һағынып һөйләрҙәр әле.

Беҙҙең ауыл — ҙур ауыл,
Урамдары киң ауыл.
Беҙҙең яҡта һабантуйҙар
Ана шулай үтә ул!

Түңәрәктә ауыл менән ауыл таҡмаҡ әйтешә, мәрәкәләшә. Ҡурайсы, йырсы, сәсәндәрҙең, бейеүселәрҙең ярышы һабантуй буйына бара.

**Мәрәкә уйындар.** Ҡалаҡҡа йомортҡа һалып йүгереү, тоҡ кейеп йүгереү, бүрәнә өҫтөндә эсенә юнысҡы, бесән тултырылған

тоҡ менән «һуғышыу», күҙ бәйләп әйбер киҫеү, аҙым һайын исем әйтеү, тулы күнәктәр менән йүгерешеү, ике кеше «бер кеше» булып (береһенең һул аяғына икенсеһенең уң аяғы бәйле килеш) һикереү һ. б.

**Мәргәнлекте һынау** өсөн, бейек ҡолғаға тағылған түбәтәй йә бүреккә уҡ атышыу, бүкән өҫтөндә ултырған сеүәтәгә атыуҙар, ағас ботағына йә ҡолғаға аҫылған нәмәгә таяҡ менән бәреүҙәр һ. б.

Һабантуй аҙағында еңеүселәргә бүләктәр тапшырыла. Колхоз, совхоз эштәре, сәсеү мәшәҡәттәре буйынса алдынғылар һабантуй башында билдәләнә. Һабантуй әләмен алдынғы механизатор йә һауынсы күтәрә. Уларға бүләктәр тапшырыла.

Элек һабантуй бер-нисә көн барған. Һәр ырыу, ара үҙенең бар һәләтен, батырҙарын күрһәтеп бөтөргә, һәр ҡайһыһы тирмәләрҙә ҡунаҡ булып сығырға тейеш булған.

Һәр кис йәштәр уйынға ҡала. Ошонда ағас (сығыр) уты сығарыу йолаһы үтәлә. Ошо ут тирәһендә йәштәр таңға тиклем уйын-көлкө, йыр-моң менән байрамды дауам итәләр. Был утты һабантуй (әүәлә йыйын) бөткәнсе һүндермәгәндәр.

### Ҙ

### Һабантуйҙан һуңғы йолалар

Ике-өс көндән һуң майҙан хужалары ҡунаҡтарҙы хөрмәтләп оҙата. Ҡорбашы, аҡһаҡалдар майҙан бөтөүе тураһында хәбәр итә.

Әгәр майҙан бағанаһын алырға кәрәк булһа, уның соҡорона йомортҡа йә ҡатыҡ, мал һөйәге күмеп ҡалдыралар. Майҙандан барыһы ла ҡайтып бөткәс, оло йәштәге аҡһаҡалдар йыйылып ултырып бата эсәләр. Ҡалған ризыҡтарҙы ағас төптәренә һалып китәләр. Майҙан, байрам ваҡытында бола ҡуптарып тауыш сығарған кешене «ҡыҫыр талаҡ» йә «көсөк», тип иғлан итәләр. Уны, бер ағас төбөнә ултыртып, алдына һөйәк-һаяҡ ташлайҙар. Ырыу башлығы булаһы егетте зыяратҡа алып баралар. Изге ҡәберҙе ул өс тапҡыр ҡояш юлы ыңғайына әйләнеп сыға. Оло йәштәге бабай йә ил аҡһаҡалы ҡәбер өҫтөнән бер семтем тупраҡ алып, егеттең уң яурынына һала һәм теләк әйтә.

Зыяратҡа барғанда, ниндәй юл менән керәһең, шуның менән сығырға кәрәк. Ҡәбер таштарына тейергә, төшкәнен төҙәтергә, бүрәнәләрен күтәрергә ярамай — мәрхүмдең соһалы * яңыра.

## 208. АТ ЯРАТЫУ

### А

Яҙғы баҫыу шау-шыуы кәмеү менән, һабантурғай йыры тағы ла асығыраҡ сыңлай башлай. Урман-тауҙар йәм-йәшел хәтфәгә

төрөнә, ҡояшҡа, йылылыҡҡа һыуһаған йән эйәләре тәбиғәт ҡосағында иркәләнә. Һәр ауылда буласаҡ һабантурғай бәйгеһендә уҙыу намыҫы менән янып, ат яратыусы ағайҙар йүгеректәрен әҙерләй. Малайҙар ҙа шул тирәлә сыуала. Ә инде һынау сабышы ойошторғанда ауылдың бөтә халҡы ярһыу йүгеректәрҙе ҡарарға сыға.

«Ат яратыу» беҙҙең Барын башҡорттары диалектында «әҙерләү, күнектереү» тигәнде аңлата. Ул эш теләһә кемгә тапшырылмаған. Һәр «ат яратыусы»ның үҙ алымы булған, улар серҙәрен бер-береһе менән уртаҡлашып бармаған. Хатта сит кешеләрҙең күҙе теймәһен тип, яратҡан аттарын суҡлы, биҙәкле балаҫ менән ябып йөрөткәндәр. Боронғо ырым буйынса, йәнәһе, сит кешенең күҙе атҡа түгел, ә суҡтарға, биҙәктәргә төшә. Бәйгеләрҙә теге йәки был йүгеректең уҙыу-уҙмауын туранан-тура ат яратыусының оҫталығына бәйләгәндәр. Аты бәйгеләрҙә уҙған ат яратыусы халыҡта оло ихтирам ҡаҙанған, ул күптәргә «серле кеше» булып тойолған. Уның серҙәре быуындан быуынға күсә килгән. Йылдар үтеү менән, балаларҙың, ейәндәрҙең ат яратыу серҙәрен юғалтыуы ихтимал. Шуға күрә лә мин Һөләймән ауылынан ат яратыу оҫтаһы Латипов Талха бабайҙан белгәндәрем (ул әҙерләгән йүгерек бурылға атланып, малай саҡта һабантуйҙарҙа, бәйгеләрҙә йөрөгәнем хәтеремдә), ат яратыуҙың ҡайһы бер алымдары хаҡында һөйләмәксемен.

Иң алда ат һайлап алыу мәсьәләһе тора. Билдәле, һәр кем үҙе тотҡан аттың ынтылышын, ҡарыуын белә. Йүгерек ат яратҡан кешеләр һынамаҡҡа биш-алты, ҡайһы саҡта тиҫтәләгән атты махсус әҙерлекһеҙ өс-дүрт саҡрымға саптырып ҡарай. Әгәр ат дүрт саҡрымды 4 минут та 10—20 секундта үтһә, сабып килгәс, тын алыуы тигеҙ, нык тирләмәгән, ярһымаған булһа, ул бик өмөтлө тип һанала. Үрҙә күрһәтелгән ваҡыт күберәк тә булыуы ихтимал, уңыш күп осраҡта өйрәтеү ваҡытында ҡырҡа яҡшыра.

Ат һау булырға тейеш. Сәләмәт ат йүткермәй, эҫеләмәгән, ямаған була, аяҡтарына зарланмай, һирәк ята. Буласаҡ йүгеректең йәше 11—12-нән дә оло булмаһын. Һайлаған аттың тештәре бөтөн, «ҡоро теше» юҡ, ул ашамһаҡ, тиҙәгендә ашаған һолоһо бөтәүләй ятмай, яңағы көслө, иҙмә тешле булырға тейеш. Ғәҙәттә, йүгерек ат ҡарап тороуға еңел, ҡаҡ суртан башлы тарамышлы, нәҙек оҙон муйынлы, этәс күкрәкле була. Күпселек ябай аттарҙың танау ҡыуышлығын асып ҡараһаң, диаметры 4—5 миллиметрлы ике тишек күренер. Был тишектәр аҫ яҡлап танау ҡыуышлығы эсендә булып, йүгерек атта өс, хатта дүрт-бишкә етә. Улар ни тиклем күберәк булһа, ат шул тиклем еңелерәк һулыш ала. Боронғо һынсылар йүгерек аттың атлап йөрөүенә, етәккә етеҙлегенә, холҡона, батырлығына, ашамһаҡлығына, бәкәленә, ҡойроҡ көсөнә бик нык иғтибар биргән.

Йүгерек атҡа көс, тиҙлек, түҙемлелек, алға ат сығармаҫ намыҫсанлыҡ, ҡеүәт хас. Ат һынсылы Латипов Талха бабай һабантуйға бәйгегә килгән аттарҙы бик ентекләп ҡарап сыға ла ҡойроҡтарын күтәрә торғайны. Әгәр ат көсәнеп тотмаған ҡулдан ҡой-

роғон тартып алһа йә, ул, күтәргәндә, ярайһы ҡаты булһа, бындай атты ул: «Ҡарыулы ат», — тиер ине. Ҡойроғо ҡаршылыҡһыҙ күтәрелһә, уны тартып ала алмаһа, бындай аттың оҙон юлда сабып уҙыуына һис ышанмай торғайны. Был боронғо күҙәтеүҙәрҙең дөрөҫлөгөн хәҙерге фәнни тикшеренеүҙәр раҫлай. Үрҙә һүрәтләнгән төрҙәге сапҡы аттарҙың ҡан сифаты эш, йөк аттарының ҡанынан бик нык айырыла. Йүгерек аттарҙың ҡанында эритроциттар, гемоглобин, ҡоро матдә күберәк, ә лейкоциттар әҙерәк була. Ҡанда гемоглобин һәм эритроциттар ни тиклем күберәк булһа, күҙәнәктәр шул тиклем һәйбәтерәк туҡлана. Тимәк, уларҙың эш һәләтлеге ҙурыраҡ була, һулыш алыу ҙа еңелләшә. Йөрәк тибешенең һалмаҡ булыуы йүгеректә бик көслө йөрәк булыуын, уның бер ҡыҫымында күп ҡан ҡыҫып сығара алыу һәләтлеген раҫлай.

Боронғо ат һынсылары аттың төҫөн дә уның мөмкинлектәренә, холҡона, йүгереклегенә һәм башҡа сифаттарына туранан-тура бәйләгән. Улар әйтеүе буйынса, бик йүгерек аттар күберәк ерән, унан ҡала — ҡола, ҡоба, өсөнсө — күк, алма күк, бурыл аттарҙан сыҡҡан. Турат күберәген ҡыҙыу, ярһыу була. Ул ҡыҫҡа юлға елдәй елдерә. Уны менеп, күберәк һыйгыр менән торна һуғыр булғандар. Ҡара һәм саптар ат арбаға яҡшы. Ә юрға күберәк бүртә менән ҡара, һоронан сыҡҡан. Ала ат ғәҙәттә уртаса булмай: йә бик насар (уны «алаша» тип кәмһеткәндәр), йә егеүгә бик шәп. Олатайым һуғымға бер ваҡытта ла күк ат салманы. Быны ул үҙенсә аңлатыр ине... Төҫөнә ҡарап аттың холҡон да юрар ине ул.

Колхоз-совхоз шарттарында һаулығы яҡшы, көр атты бәйгегә әҙерләү өсөн 30—40 көн етә. Был осор өс өлөшкә бүленә, һайлап алынған атты иң алда яҡшылап таҙартырға, йыуырға, иҫке дағаларын алырға кәрәк. Тояҡтарын тигеҙләп еңелсә игәп, тояҡ йөрәгенең өҫтөн таҙартыу мотлаҡ. Мөмкинлек булһа, көнөнә өс таптҡыр туйғансы таҙа һоло ашатып, 6—7 көнгә йәшел үләнгә ебәреп ҡуйырға ла мөмкин. Әгәр йәшел үлән юҡ икән, көндәлек һоло рационынан өс килограмм самаһын алып, урында болғай-болғай шыттыраһың. Был осорҙа ат рационында шытҡан һоло һәр саҡ булып торһон өсөн, сираттағы өлөштө ике-өс көн алда шыттырырға ҡуйырға кәрәк. Тәүге аҙна-ун көнлөктә төп бурыс — аттың организмын һәр төрлө матдәләр, витаминдар, аҡһым менән туйындырыу. Шуға ла тәүге аҙна-ун көн атҡа бик туҡлыҡлы аҙыҡ биреү мотлаҡ, ә организмға төшкән күнекмәләрҙе көндән-көн арттыра барырға кәрәк. Был аҙна-ун көнлөктә яҡынса көн тәртибе түбәндәгесә булырға тейеш.

Иртәнге сәғәт 6. 100 грамм шәкәр һалынған һыуҙы туйғансы эсерергә. Унан сығарып йөнөн таҙартырға. Йыуылған, уртаса киптерелгән, тулы емле 3—4 килограмм һоло бирергә. Алдынан йәшел бесән өҙөлмәҫкә тейеш. Аттың алдында тоҙ, микроэлементтар булыу ҙа шарт.

Иртәнге сәғәт 8. Атты эйәрләп йәки эйәрләмәйенсә өйрәнелгән йомшаҡ ҡыртыш ерҙән 5—6 саҡрымды атлатып үтәһең, унан 1—2 саҡрым урта тиҙлектә юртаһың. Унан тағы ла 3—4 саҡрым атлатып үткәс, 4 саҡрым ерҙе көслө юртып уҙаһың. Ҡайтыр юлда

4—5 саҡрым атлатып бараһың — ат һыуына, тыныслана. Әгәр тәүге көндәрҙә был күрһәткес бер-ике саҡрымға кәм булһа, 7—8-се көндә иртәнге юл дөйөм алғанда 18—21 саҡрымға етһен.

Сәғәт 10.30—11. Ат бәйле тора, һыуына.

Сәғәт 11—12-ҙә бесәнгә ҡушыла.

Сәғәт 12. 50—60 грамм шәкәр иҙеп, бүлмә температураһындағы һыу эсерергә 3—4 килограмм таҙа һоло бирелә, уға тривитаминдар өҫтәлә. Алдынан бесән өҙөлмәй. Ул көндөҙгө 4—5 сәғәткә тиклем тора, ял итә, юшай.

Көн эҫеһе баҫылыу менән, тағы ла йөрөтөргә алып сығалар. 4—5 саҡрым атлатып үткәс, 3—4 саҡрым шәп юрттырырға, унан 3—4 саҡрым атлатып ҡайтырға кәрәк. Ҡиске юл 12—15 саҡрым була. Ҡайтҡас, 30—40 минут бәйле тора, унан бесәнгә ҡушыла. Бер сәғәт, сәғәт ярым бесән ашағас, 2—3 килограмм шытҡан һоло бирелә йәки 3—4 килограмм яҡшы һоло ашатып төнгөлөккә йәшел үләнгә тышауһыҙ ебәрелә. Әгәр тышаулаһаң, сасаҡтарының аҫҡы яғынан, бәкәленән бушаҡ ҡына итеп бәйләргә кәрәк. Был ат аяҡтарының өҫкө тарамыштары зарарланмаһын өсөн эшләнә.

Әгәр тәүге осор ун көн дауам итһә, уның һуңғы өс көнөндә дөйөм юлды 40—45 саҡрымға еткерергә кәрәк.

Икенсе ун көнлөктөң башынан йәшел үләнгә ебәреү ҙә, шытҡан, бүрткән һоло биреү ҙә туҡтатыла. Ә ҡоро, яҡшы сифатлы бесән һәр саҡ ат алдында булһын.

Иртәнге сәғәт 6-ла 100 грамм шәкәр иҙелгән таҙа һыу эсерелә, таҙартыла. Унан 3—4 килограмм һоло бирелә. Һоло йыуылған, киптерелгән, тышы еңелсә көрәнәйгәнсе ҡыҙҙырылған, ләкин көймәгән булырға тейеш. Иртәнге сәғәт 8-ҙә йөрөтөргә сығарыла. 3—4 саҡрым шәп атлатырға, унан 2—3 саҡрым юрттырырға, шул ыңғайҙа тәүге көн 1 саҡрым саптырырға; тағы ла 3—4 саҡрым һалмаҡ атлатып ҡайтырға. Сабыуҙы көн һайын яртышар саҡрым өҫтәй килеп, өс саҡрымға еткерергә. Иртәнге сабыуҙы шул көйө 3—4 көн дауам итәһең. Шулай итеп, тағы ла бер 9—10 көнлөк үтә. Өс саҡрым сапҡандан һуң атты атлатып тынысландырып ҡайтаһың. Был осорҙа 1, 2, 3 саҡрым араны нисә минутта үтеүен яҙып барырға кәрәк. Әгәр ат көн һайын ваҡытты кәметә бара икән, эш яҡшы тигән һүҙ. Тын алышына иғтибар итегеҙ. Әҙерәк йүткерһә, ветврачтан ҡаратырға кәрәк. Ҡайтҡас, 40—60 минутҡа бәйләп ҡуйығыҙ.

Сәғәт 10.30—12-лә — бесән ашатырға.

Сәғәт 12-лә — 70 грамм шәкәр иҙелгән һыу эсерергә, унан 3—4 килограмм ҡыҙҙырылған һоло бирергә.

Сәғәт 17-гә тиклем ял Бынан һуң тағы ла сығарырға 2—3 саҡрым шәп юрттырырға. Әгәр ат бик хәлле булһа, иркен килеп, үҙе һаман да ынтылһа, ҡыумай ғына үҙ йайы менән тағы ла бер саҡрым сабырға мөмкин. Унан яйлата биреп, атлатып ҡайтырға. Һыуындырырға. Бесән биреп, 1—1,5 сәғәт үткәс, 100 грамм шәкәрле һыу эсереп, ҡыҙған һоло ҡуялар. Яратһа, иртәле-кисле алмашлап 2—3 буханка туралған ҡара икмәк тә биреп була.

Атты көн аша ла 5—6 саҡрымға саптырырға мөмкин, ләкин был атты баҙата. Көн һайын әҙләп кенә саптырыу, көсөргәнешле генә юрттырып йөрөтөү яҡшыраҡ, тирләгән һайын атты һыуындырып, йылымыс һыу менән йыуырға, таҙартырға кәрәк. Сөнки ул тиреһе аша ла тын ала. Тиреләге күҙәнәктәр бысрамаған, асыҡ булырға тейеш. Кис һайын, врач кәңәше буйынса, һолоға ҡушып витаминдар биреү ҡарала. Егерменсе көндән иртәнге сабыу туҡтатыла. Иртәнге йөрөтөү 10—12 саҡрым тәшкил итеп, тирләгәнсе юрттырыу кәрәк. Тейешенсә һыуытырға. Ашатыу шул рәүешле.

21—22-се көндә еңел генә даға эшләтеп, 7—8 миллиметрлы сөй ҡулланып, тояҡ менән даға араһына йоҡа кейеҙ (фетр) һалып оҫта дағалаусынан дағалаталар. Дағалатҡас, тағы ла бер-ике көн сабырға ярамай, ат дағаға өйрәнергә тейеш. Был ике көндә шәп атлатып тирләткәнсе юрттырып йөрөргә кәрәк. Дағаға өйрәнгәс, төштән һуңғы сабыуҙы көн һайын бер саҡрымға арттырып, 8—9 саҡрымға еткерергә кәрәк. Аттың физик торошона ҡарап, йөрөтөү менән аралаштырып, көн аша ла саптырырға була. Һабантуйға бер-ике көн ҡалғас, алыҫ араға сабыу туҡтатыла, был ике көндә ул тик атлатып, юрттырып йөрөтөлә. Саптан хәлдә лә, ике саҡрымдан арттырырға түгел. Һуңғы 5—6 көндә һыуҙы ла 20—25 процентҡа кәметергә кәрәк. Йыл һайын ярытылған ат үҙе лә был осорға һыуҙы аҙ эсә, бесәнде лә аҙ ашай, нигеҙҙә һоло менән туҡлана. Эсе ныҡ тартыла, мускулдары ҡата, ҡашағаһы эскә керә, йүгерек үҙ фиғелен ала.

Дөйөм ашау миҡдары кәметелә, һуңғы 2—3 көндә киптерелгән икмәк кенә ашатыу яҡшы. 4—6 килограмм бесән, шәкәрле һыу бирелә. Атты ярата башлағанда уҡ, уны бер үк малай йөрөтөргә, саптырырға тейеш. Ә ат яратыусы икенсе атта йәнәш йөрөй, сөнки бала кешенең йөрөтөү һәм саптырыу тәртибен үтәмәүе ихтимал. Был бер. Икенсенән, ат малайға, малай атҡа өйрәнә, бер-береһенең холҡона төшөнә, улар араһында күҙгә күренмәгән бәйләнеш тыуа. Атты ашатыу, эсереү, бигерәк тә, йыуыуҙы ла малай атҡарыуы йәки уның ҡатнашлығында эшләү яҡшы.

Сабыу көнөндә ат бик иртә, 4—5 сәғәттә уртаса миҡдарҙа ашатыла. 100—150 грамм шәкәр иҙелгән 4—5 литр һыу бирелә. Талха бабай старт алдынан атҡа тағы ла бер-ике тәгәс шәкәрле һыу эсереп ебәрә ине. Атта саба торған малайҙың ауырлығы 35—40 килограмм булыуы яҡшы. Ҡулында — еңел генә ҡамсы. Сабышҡанда, аттың эсенә һуғырға, үксә менән ҡабырғаларына төйгөсләргә ярамай — ҡатыуы сыға. Малай еңел кейемдә, салбарҙан, аяғында — йөн ойоҡбаш, башында бәйләнгән башлыҡ була. Аттың йүгәне суҡһыҙ, еңел, майлы түгел, ауыҙлыҡ ҡуласалары ҙур була, ә һағалдырығы үңәсен һыҡмаҫҡа тейеш. Ҡойроғон таҫмалап үреп ебәрәһең.

Әйҙә, ел, ал бирмә, дөлдөл!

## Б

Бәйге атын тәрбиәләүҙең үҙ тәртибе бар. Атты көйләү өсөн, уға гел генә ҡоро бесән ашаталар, ҡоро һоло бирәләр. Бәйге атын

айырып тәрбиәләүҙе «ат яратыу» тиҙәр. Ун-ун биш көн шулай яраталар.

Ярыш көнө алдынан бәйге атын «Таңға бәйләйҙәр». Ул былай була. Бәйге атына бер нәмә лә ашатмайҙар. Ә ярыш көндө иртән таңдан бер ҡуш ус һоло, бер-ике литрҙай һыу бирәләр. Шулай итһәң, ат еңел була.

Ат яратҡанда, тәүлегенә бер мәртәбә ваҡ күл тирәләй саптыралар. Ҡумәк атты бер юлы бына шулай тикшерәләр ҙә иң шәбен асыҡлайҙар.

Бәйгегә аттар, йәштәренә ҡарап, башҡа-башҡа ебәрелә: алты йәшлектәр бер башҡа, дүрт-биштәгеләрен бер төркөмдә, йәшерәген йәнә бер башҡа ебәрәләр. (Бер йәшкә тиклемге йылҡы малын — ҡолон, тиҙәр, бер-ике йәштәгеһен — тай, өстәгеһен — ҡонан, дүрттәгеһен — дүнән, биш-алты йәштәге, унан да өлкәнерәктәрен — оло ат тиҙәр. Айғыр бестерелһә, уны алаша, тиҙәр, ҡолон күрмәгән бейәне байтал, тиҙәр. Бейә малы ҡолонлар алдынан һәм ҡолонлағас, берәр ай эшһеҙ тора. Ә алашаны йыл әйләнәһенә егәләр. Шунан әйткәндәр: «Бейә йылына бер ҡолонлай, алаша ике ҡолонлай»).

## 209. АТ ТАНЫУ

### А

Ат яҡшыһын белеү өсөн, аттың ҡатаһына баҫаһың: ул аяғын тартып алып баҫһа — шәп ат шул була.

Яҡшы аттың ялы башланған түбәһендә сөйәл һымаҡ ҡатыһы була.

Аттың теше һары булһын. Ундай мал ашауға ла яҡшы, арымтал булмай.

Аҫҡы теше — артҡа, өҫкөһө — алда булһа, ат шәп була. Ауыҙы тапҡыр ябылһа, арымтал була.

Бығымына (артҡы бото менән ҡабырғаһы тоташҡан еренә) дүрт иле ятһа, ат шәп, бер сиреккә китһә — хөрт, ашауға бармай торған ат була.

Ҡойроғо көлтә һымаҡ ҡуйы ат — ҡарға барымһыҙ ат булыр, ҡойроғо нәҙегерәк булһа, ҡарға шәп булыр.

Эре ҡыллы ат — ялҡау, нәҙек ҡыллыһы — егәрле булыр.

Ат, тарбайта баҫып, эсеп торған һыуға (йылға, күлгә) юртып барғанында, ике яҡ тәртәгә, ашап торғанда, ашаған ҡаҙнаһына ярау итһә, ул йүнһеҙ ат булыр. Шуға ла ат һатып алғанда: «Ашаған ҡаҙнаһына ярау итмәйме?» — тип һорар булғандар борон.

Һыу эскәндә, ауыҙынан шаптырлатып, кире ҡойолтоп торһа, ул — сығынсыл, барымһыҙ, ашағаны эсенә йоҡмаҫ ат булыр.

Егеп йә менеп китеп барғанда аҙым һайын (йөҙ метр һайын!) ярау итһә, ул ат файҙаһыҙға ашай, арымтал була.

Селән ботло ҡолон — барымһыҙ ат булып етешер.

Ҡолондоң мыйығы күп була. Имгәндә, йомарланып, имгәнен туҡлыҡһыҙ итә. Шуға уны ҡырҡып торалар.

Б

Аттарҙың тояҡтарын шымартып, ярылғанын ҡырҡып, тигеҙләп ҡуялар. Шунан ташҡа баҫтырып, ат тояғына теләк әйтәләр:

Тояғың таймаһын,
Сирағың һынмаһын,
Елдән етеҙ бул!
Йыландан йылғыр бул,
Арыҫландай алғыр бул,
Уҙғынсыны уҙҙырма!

Оло йәштәге бабай ат сирағын берсә бәләкәй таш менән, берсә ҡулы менән һыпырып һөйөп ҡуя.

Аттың ялдарын һәйбәтләп тарайҙар, маңлай, ҡолаҡ тирәһенән киҫәләр. Йола буйынса, бәйгеләрҙә аттар ныҡ тирләргә тейеш, шуға сабышыу 10—15 саҡрымға, унан да алыҫыраҡҡа үткәрелгән. (Ат тиренән яман күҙ, сир-зәхмәт ҡасыр булған, боронголарса).

## 210. ҺАБАНТУЙҘА АТ САБЫШТЫРЫУ

Йола буйынса дүнәженгә сыҡҡан оло аттар 25 саҡрымға сабыр булған. Унан да ҡыҫҡараҡ алыҫлыҡҡа сапҡан аттарҙың һәләтен тулыһынса асыу мөмкин булмаған. Оло аттарга 5—6 саҡрым сабыу өсөн тейешле ара түгел тип иҫәпләгәндәр. Ҡонажын, йәгни өс йәшкә сыҡҡан аттар ғына ла 12 саҡрымға сапҡан. Бына был саҡта инде сыҙамлы аттарҙың бөтә физик сифаттары ла асыҡ күренә.

Сапҡан ат өҫтөнә ҡаптал йәки үндек һалмағандар. Сабып барған ат өҫтөндә бер ни тормай, артҡа шыла. Шуға атҡа менгән кешеләрҙең ыштан төбөнә һәр саҡ йомшаҡ кейеҙ тегәләр, ул һыбайлы менән бергә ҡуша шылып йөрөй.

Сапҡан мәлдә аттың эсенә йәки бөйөрөнә һуғыу, аяҡтар менән тибенгеләү ҡәтғи тыйыла. Ә инде һинең менән йәнәш сабып барған икенсе аттың һыртына ҡамсы менән арҡыры һуғыу ҙур ғәйеп һаналды. Ундай аттың сабыу тиҙлеге шунда уҡ бермә-бер кәмей. Умыртҡа һөйәге көсөргәнешле һуҙылып, йән-фарман сабып барған ат ҡапыл аҡһай башлай, сабыуын артабан дауам итә алмай. Бик кәрәк саҡта аттың муйыны төбөнә генә һуғырға ярай, тигәндәр.

Ярыштыра торған атты ҡалын таҡта өҫтөнә баҫтырып, үткер ҡасау менән тырнаҡтарын түңәрәкләп ҡырҡып сығыу йолаһы булған. Юғиһә, ҡаҡ юлда бар көсө менән сапҡан аттың тояғы ярылып китер.

## 211. КӨРӘШСЕЛӘР ЯРЫШЫ

Һабантуйға дүрт-биш аҙна ҡалғас, һәр колхоз-совхоз үҙ ауылының көрәшселәрен, йырсыларын, ҡурайсыларын, йөрөк, дөл-дөл аттарын әҙерләргә тотона.

Ауылдың билдәле көрәшселәрен, эштән бушатып, ныҡлап ашата башлайҙар. Көрәшкә тәғәйен бәһлеүән һабантуйға тиклем кәм һалғанда бер-ике тәкәне ашап бөтөр булған. Ләкин уның был ярыш көнөнә тиклем кемдәр менәндер көрәшеп, даими күнегеүҙәр үткәреүе йолала булмаған. Ул кешенең ял итеүе һәм үҙ ауырлығын арттырыуы бурысы беренсе сиратта торған.

Көрәшсенең, үҙендә көс-ғәйрәте булыуҙан тыш, таһыллыҡ, ташлау оҫталығына эйә булыуы мотлаҡ һаналған. Ташлау — көрәшселәр үҙе менән алышыусының табандарын ерҙән айырып, тик һирпелдереп ташлау йолаһы. Шуны үтәһә генә, көрәшсе еңеүсе итеп танылған.

Икенсе көрәшсене күкрәккә һалып күтәргәндән һуң, уны һирпеп ташлау түгел, тик йығыу ҡағиҙәһе һуңғы бер-нисә тистә йылдарҙа ғына көрәшселәр араһында ҡанунлашып өлгөрҙө. Элек береһе өҫкә сыҡҡан осраҡта ла бер-береһенән айырыла алмаған батырҙарҙы яңынан көрәштереү тәртибе шикһеҙ һаҡланған.

Йәрәбә теләһә ниндәй ауырлыҡтағы көрәшсене бергә осраштырған. Быны ҙур ғәҙелһеҙлек булған тип иҫәпләргә мөмкин. Шулай ҙа үҙ иптәшенән бер баш ҡайтыш һәм күпкә еңел көрәшселәрҙең үҙенән күпкә ауырҙарын да аяҡ-ҡулын ергә тейҙермәй, һирпеп ебәреүҙәр — таһыллыҡ, оҫталыҡ билгеһе. Ташланған кешенең билдән ҡулдары ысҡынып китеүе мотлаҡ көрәш ҡағиҙәһе һаналған. Көрәш мәлендә аяҡ салыу, ике йоҙроҡ менән бөйөрҙәрҙе ҡыҫыу ҡырҡа тыйылған.

Көрәшсе даны — ауыл даны. Еңеүсе батырҙарҙы ауылдаштары түңәрәктән ҡулдарына күтәреп алып сығып һый-хөрмәт иткәндәр. Ә еңелеүсене инде, ғәрләнеп, ҡаҡҡылап һуҡҡылағандар. Ике осраҡта ла әхләҡи яуаплылыҡ көслө.

## 212. ҠЫҘ ҠЫУЫУ УЙЫНЫ

Йәштәр араһында егет менән ҡыҙ һыбай ҡыуышып уйнай торғайны. Ҡыуып етә алмаған егеткә ҡыҙҙан ҡамсы эләкһә, ҡыуып еткәне ҡыҙҙы үбергә хаҡлы булыуы беҙҙән алда йәшәгән быуындарҙан ҡалған ғәҙәт. Ибраһимға әҡрәбә тейеш Өрҡиә исемле бер ҡыҙ тап шундай ҡыйыу ҡыҙҙар иҫәбенән ине. Ибраһимдың Аҡ килен тип йөрөтөлгән ҡатыны был ярыштарҙа тамашасы булараҡ ҡатнаша торғайны. Мин бәләкәй саҡта ауылыбыҙҙағы Маһия һәм Гөлсөм исемле өлкән апайҙар һыбай йөрөүҙә егеттәрҙән ҡалышмаҫтар ине. Әммә ауылыбыҙға күсеп килгән татарҙар м о с о л м а н мәҙәниәтенә бик ныҡ бирелгән ҡатлам тәшкил иткәнлектән, уларҙың йоғонтоһо аҫтында беҙҙекеләргә лә йөҙөн ярым ҡаплап, саҡ ҡына күрһәтеп йөрөү ғәҙәте инде. Бөрйәндәрҙә иһә

урыны менән боронғо ғәҙәттәр оҙаҡ йәшәп килде. Шәп йүгерек юрғаға атланған Өрҡиә артынан ҡыуып етеп килгән саҡтарҙа ла, егеттең үбеүенән һис тартынмаçтан, боронғо дастандарҙа һөйләнгән «Ҡара юрға» йырына оҡшатып, атын дәртләндереп, көйләп барыр ине. Мәғәнәһе:

Үптермәçмен туташты,
Ҡостормаçмын туташты.
(Үптермәм дә бикәсте,
Ҡостормам да бикәсте.)

Был шиғырҙа «бей ҡыҙы» һүҙе урынына «бикәс» һүҙе ҡулланыла. Ҡасҡынбайҙарҙың ауыҙында ул һүҙ, дөйөм башҡорт әйтелешенсә, «бей ҡыҙы» мәғәнәһендә түгел, «бикәс» мәғәнәһендә әйтелер ине. Һәр хәлдә алда килтерелгән һәм «ҡобайыр» тип атап йырланған халыҡ шиғырҙарында нуғайҙарҙың тәьçире бар ине. Мин һуңынан ғына быны айышына төшөндөм.

Ярыштар ваҡытында мин ҡай саҡ Өрҡиәне ҡыуып етеп беләгенән тота торғайным, әммә үпмәй инем, сөнки беҙҙең нәçелебеҙҙә ҡыҙҙы кеше күҙе алдында үбеү гәҙәте булманы. Тамаша итеп тороусы өлкәндәр: «Беҙ үбер инек, һин дә үп!» — тип көлөшөрҙәр, мине шаяртырҙар ине.

## 213. ҠАМСЫ АЛЫУ УЙЫНЫ

Ҡарағас йәйләүҙәрендә Ҡасҡынбайҙар ат өçтөндә сабып килешләй ерҙә ятҡан ҡамсыны эләктереү уйынын уйнай торғайны. Таһылы етмәгәндәргә ныҡ итеп ҡамсы менән һуғалар, улары һуғылмаç өсөн ҡасалар, икенселәре һыбай ҡыуалап китә, етә алмаһа, ҡамсы үҙҙәренә эләгә. Алишер Науаи ҙа сығышы буйынса Анатолия төрөктәренән булған Сары Тула исемле бер дуçы менән йәш сағында һыбай ҡыуышыуҙары хаҡында һөйләй: «Мин Сары Тула менән берлектә һыбай юлға сыҡһам, тау, тигеҙлек, сәсеүлек йә сүл булыуына ҡарамаçтан, йыртыҡ кәпәнәктән * ҡулыбыҙҙы сығарып, ул ҡасһа, мин ҡыуам, мин ҡасһам, ул ҡыуа»,

## ХЕҘМӘТ, КӘСЕП ЙОЛАЛАРЫ

### 214. ЭШ БАШЛАҒАНДА

Эш башлаған саҡта (киндер йолҡҡанда́, киндер талҡығанда, киндер һуғырға ултырғанда, тула баҫыр алдынан һ. б.) шулай тип һамаҡлайҙар.

А

Ике кеше (йәки ике һуҡыр) күрмәһен,
Икендегә * етмәһен.
Ҡеше-ҡара күргәнсе,
Ҡара көсөк өргәнсе,
Тиҙ(е)рәк кенә бөтәйем!

Б

Эшем башы — эш ҡары,
Дошман башы — тыш ҡары,
Күргәндәр күреп ҡалһын,
Күрмәгәндәр тороп ҡалһын,
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатималар ҡулы.
Тфү, тфү, тфү!

В

Ҡеше-ҡара күрмәһен!
Ҡара кеше күрмәһен!
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатималарҙың ҡулы,
Әүлиә-әмбиәләрҙең ҡулы.

Г

Эш башланым — башҡары,
Дошман һүҙе — тышҡары.
Осоп барған ҡош күрҙем,
Тик ятҡан бер таш күрҙем.

Был һамаҡты күберәк, шәл бәйләгәндә, әйтәләр. Сөнки шәл бәйләгәндә, таш кеүек, ҡатып тик ултырыу кәрәк. Ҡулдар ғына тик торорға тейеш түгел.

Ғ

Эш башлағанда тиҙ генә тотонорға.

Эш башында кем килһә, шуға ҡарап, эштең барышын юрайҙар. Берәйһе килһә:

— Шәп итеп килдеңме? — тиҙәр. Шәп килһә, эш ырай. Ялҡау кеше килһә:

— Ялҡау килде, эшем ырамаҫ инде, — тиҙәр.

Тилбер кеше килһә:

— Эшем сыҙамаҫ, ыңғай барыр, — тиҙәр. Ә килеүсенең үҙенә:

— Аяғың еңел булһын! — тиҙәр. Ҡилеүсе үҙе:

— Эшең ырамлы булһын! — ти. Шул һүҙҙән һуң былай тип тә өҫтәйҙәр:

— Эшкингән кеше булһаң, уңыр, эшкинмәһәң, туңыр!

Д

Икендегә етмәһен,
Ике һуҡыр күрмәһен,
Күрһә, күрһен күҙлеһе,
Ул да булһын йүнлеһе!

Ҙ

Икмәк баҫыр саҡта:

— Ҡулдың ҡеүәтен бирһен,
Ҡиң ризыҡҡа яҙһын,
Иҫән-һау ашарға яҙһын! —

тиҙәр.

Е

Май таҫҡағанда:

— Уң ҡулдан, һул ҡулдан,
Ҡотло ҡулдан! —

тип тотонаһың.

## 215. ЕЛӘҠКӘ БАРҒАНДА

А

Әпәләмә, түпәләмә,
Туҫтаҡҡайым, тулып кит.

Б

Бында еләк күп икән, —
Айыу-бүре юҡ икән.

В

Еләк йыям, ҡаҡ ҡоям
Балаларға бүләккә.

Г

Табыл, табыл, табыл,
Табылмаһаң, ҡайтам.

Еләккә барғанда, яндауҙарҙы * һелтәп ебәргән кеше булаһың да:

— Тул, ниңә тулмайһың? — тиһең йәки:

— Еләккәйем, йыйыл, йыйылмаһаң ҡайтам, — тиһең.

Ғ

Берәй әйбер юғалһа, йә емеш-еләккә барһаң:

— Табып бир, табып бир,
Табып бирмәһәң,
Биш балаңды үлтерәм, —

тип «ҡурҡытып» ендән эҙләтәһең.

Д

Емешкә барғанда:

— Эт-ҡош күренгәнсе күнәгем тулһын, тиҙерәк ҡайтырға булһын! — тиҙәр.

— Туй(ы)ҙым, туй(ы)ҙым, тул, тул, тул!
Өй(ә)мәләм булып тул! —

тип теләп бараһың да һауытты алға һелтәп ебәрәһең. Ул ултыра төшһә емеште тултырып алып ҡайтаһың, ҡырын ятһа — ярты һауыт ҡына йыяһың, һауыт түңкәрелә төшһә — түгелә.

### Ҙ

Эй, еләктәр булһа ине,
Силәктәрем тулһа ине,
Матур ҡыҙҙарым менән,
Яратҡан әбейҙәрем менән
Ашарға яҙһын ине!

## 216. ЙЫУАҒА БАРЫУ

### А

Яҙ көнө, тау битендә ҡар асылыу менән, малайҙар йыуаға йөрөй башлай. Беләү таяҡты һелтәйһең дә шулай һамаҡлайһың:

— Йыуа, йыуа, йыуа тап,
Йыуа тап та ялтырап ят.

### Б

Йыуа эҙләгәндә:

— Йыуа, йыуа, күрен,
Йыуа, йыуа, күрен!
Әгәр миңә күренмәһәң,
Биш балаңды үлтерәм, —

тип һамаҡлайһың.

Йыуа йыйғанда, «Энә, еп, төйөн» кеүек уйындар уйнала.

### В

Йыуаны тамыры менән ҡаҙып алыр өсөн беләү алып баралар. Йыуалыҡҡа еткәс:

— Беләүем, беләүем, йыуа тап,
Йыуа тап та ялтырап ят! —

тип ырғыта инек. Барһаң, шунда йыуа була торғайны.

Йыуа тапһаң, өҙөп ҡап...

## 217. КИЛГӘН РИЗЫҠТЫ ҠУЙЫР ЕРГӘ ҠУЙҒАНДА

Ашып сыҡ, тулып сыҡ,
Ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ.

Ашып сыҡ, тулып сыҡ,
Ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ.
Ашып сыҡ, тулып сыҡ,
Ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ.

### 218. ЯҢЫ РИЗЫҠ АУЫҘ ИТКӘНДӘ ӘЙТЕЛӘ ТОРҒАН ҺАМАҠТАР

А

Бисмилләһир-рахмәнир-рәхим,
Иҫке ауыҙға — яңы аш,
Бирһен Хоҙай йөҙ йәш.
(Яңынан бер йөҙ йәш).

Б

Иҫке ҡорһаҡ — яңы аш,
Яман ауырыу, минән ҡас!

В

Яңы балтырған, ҡуҙғалаҡ, ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ, емеш-еләк ашар алдынан:

— Иҫке ауыҙға — яңы аш,
Яңынан бир йөҙ йәш! —

тип әйтергә.

### 219. ҠУЛҒА МАЛ ТӨШКӘНДӘ БӘРӘКӘТ ТЕЛӘҮ

А

Ҡилер ерен киң ҡыл,
Асты туҡҡа тиң ҡыл!

Б

Ризыҡтың килер ерен киң ҡыл:
Уңдан да бир,
Һулдан да бир, —
Уйламаған ерҙән дә бир!
Хәләлдән бир,
Аш-һыуға бәрәкәт бир,
Биргәнеңә бәрәкәт бир,
Ҡәсептәрҙең уңын бир,
Хәләл кәсептән ҡалдырма.

## 220. РИЗЫҠ БӨТӨП БАРҒАНДА

Ҡабырыңды ҡабып ҡал,
Ат арыһа, сабып ҡал, —

тиҙәр ҙә ризыҡтың ҡалдығын:
— Ҡилер ризыҡтың юлын быуып тормаһын, — тип ашайҙар.

## 221. БАЛЫҠ ҠАПТЫРЫУ

### А

Ҡап, балығым, ҡап, ҡап,
Ҡап, балығым, ҡап, ҡап,
Яр башында ялтырап ят.

### Б

Ҡармаҡҡа эләккән балыҡты күтәреп ергә һуғаһың. Шул саҡта былай тиһең:

— Биште тап!
Биштән башҡа
Биште тап!

### В

Балыҡҡа барғанда тәү балыҡ эләккәс тә, уны: «Атаң-әсәңде ҡушлап ят!» — тип ергә һуғырға кәрәк. Шулай итһәң, балыҡ күп эләгә.

### Г

Балыҡ ҡап, ҡап, ҡап,
Яр башында ялтырап ят.
Йүгереп ҡап, йүгереп ҡап,
Яр башында ялтырап ят!
Үҙ ишеңә ҡушыңды тап,
Яр башында ялтырап ят!

### Ғ

Алабуға, дөрмән, ҡап,
Яр буйында ялтырап ят!

### Д

Һайт, һайт, һайт, һайт,
Бар өйөңә тиҙерәк ҡайт.

Ебәр атаң-әсәңде,
Атыу ярам эсеңде! —

тип һамаҡлап-һамаҡлап, уны кире һыуға ебәрәһең.

Ҙ

Сабаҡ балыҡ, ҡап, ҡап,
Яр башында ялтырап ят!
Ҡесе булһаң, атаңа әйт,
Атаң булмаһа, әсәңә әйт!
Һоп!.. Һоп!.. Һоп!..
Сабаҡ, сабаҡ, сабағым
Ҡармағыма ҡабырһың —
Эҙләгәнең табырһың!
Һоп!.. Һоп!.. Һоп!

Е

Ҡап-ҡап, ҡармағым,
Ҡапсыҡ төбөн ҡарманым.
Ҡапсыҡ төбөн ҡармағанда,
Бысыраны бармағым.
Тфү, тфү, тфү!
Төкөрөп һалдым, һикереп ҡап,
Яр башында ялтырап ят!
Ялтырамаһаң, ялтырама —
Яр башында ҡалтырап ят!

Балыҡ әләкһә, ҡапсыҡҡа һалалар. Һалыр алдынан: «Тфү, тфү, тфү!» — тип, уның асыҡ ауыҙына төкөрәләр ҙә шулай тип һамаҡлайҙар:

— Ата-әсәңде саҡыр,
Ҡәҙә булып баҡыр —
Ҡапсыҡ төбө тап-таҡыр!

Ё

Ҡап, ҡап, ҡармағым,
Һыу өҫтөндә бармағым,
Минең ҡулым түгел —
Ғәйшә, Фатима ҡулы,
Балыҡ, ҡап, ҡап, ҡап!
Тфү! Тфү! Тфү!

Ж

Яҡын-яҡын килеп ят,
Аҙағыңа ҡарап ҡат,

Ҡармаҡ һалдым — йүгереп ҡап,
Үҙеңә тигәнде ҡап!

### 222. ЙЫЛЫМ ҺАЛҒАНДА

Уңы менән, уңы менән!
Балыҡ тулы йылым менән!
Ашып сыҡ, тулып сыҡ...

### 223. АУ ҺАЛҒАНДА

#### А

Ау һаламын — ашып сыҡ.
Ашып сыҡ та тулып сыҡ.
Күҙе һайын бер балыҡ,
Күҙе һайын бер балыҡ.

#### Б

Балыҡты һөҙгән саҡта ауҙы аша атлап сығырға ярамай, юҡһа балыҡ эләкмәй.

Балыҡ һөҙгән ерҙә ҡатын-ҡыҙ булмаҫҡа тейеш. Улар булһа, юл уңмай.

### 224. ҺУНАР ЙОЛАЛАРЫ

#### А

Бүрегә ҡапҡан һалырға уйлаһаң, ул ҡапҡанды өйгә индерергә ярамай, оҙаҡ ҡына тышта һаҡларға кәрәк. Ауҙы ла өйгә индермәйҙәр.

#### Б

Һунарға ҡатын-ҡыҙҙар йөрөмәй, оҙатып та ҡалмай, юҡһа юл уңмай.

#### В

Һунар этен ашатырға ярамай, юғиһә еҫ белмәй.

#### Г

Ат ҡатын-ҡыҙ ултыртып йөрөткәндә яратмай, ти. Ҡатын-ҡыҙ ауыр була икән. Ат: «Бер ҡатыг һөйрәгәнсе, ҡырҡ бот тоҙ һөйрәр инем», — тип әйтә, ти. Шуға ла, ауға киткәндә, арбаға йә санаға ҡатындар затын ултыртмайҙар — ат арый.

### Ғ

Һунарға барғанда, һөйләшмәҫкә кәрәк, юкһа кейектәр ишетә, ҡасып бөтә.

### Д

Һунарҙан ҡайтҡанда, юл яҙлыҡтырып ҡайтырға кәрәк, бигерәк тә яҙ менән бүре ояһынан балаларын алғанда. Сөнки башҡа бүреләр, арттан эйәреп килеп, малға ҡаза итеп китәләр, үс алалар.

### Ҙ

Һунарҙан ҡайтҡанда, нимә алғаныңды осраған кешегә әйтергә ярамай; иң һәйбәте — бер кемгә лә осрамау.

## 225. ҺУНАР СЫҒЫУ

### А

Һунарға сыҡҡанда, кем менән барғаныңды белеп сығыу кәрәк. Бәғзе кеше менән юл уңа. Уны иптәшлектән яҙҙырма. Ҡайһы бер кеше менән нисә сыҡма — һунар уңмай. Ундай кеше тураһында: «Ҡапъяғаһы ҡаты уның!» — тип кенә ебәрәләр.

### Б

Һунарсылар уй йәшерер булған, йәғни ауға сығырҙарын берәүгә лә әйтмәй, сер итеп тота. Һөйләнһәң, кейек һиҙеп ҡала, тип уйлағандар.

## 226. ТӨЛКӨГӘ ҺУНАР

### А

Төлкө бик хәйләкәр була. Артынан килгән һунар этенең тәжрибәһеҙ икәнен һиҙеп ҡалһа, ҡасып бара бирә лә, ҡойроҡто бер яҡҡа һелтәп ебәрә — тәжрибәһеҙ эт ҡойроҡ артынан ташлана. Бара биргәс, төлкө ҡойроҡто икенсе яҡҡа һелтәй — эт, йәнә шул яҡҡа ташланып, алдана. Тәжрибәле эт төлкөнө ҡыуып етеү менән өҫтөнә һикерә.

Ҡапҡанға эләкһә, төлкө эләгеп туңған тәпәйен кимереп өҙә лә ҡаса. Был хәйләгә барырға өлгөрә алмай ҡалһа, һунарсының күҙенә ҡарап ҡына көлөп ултыра. Күҙ алғансы ғына! Һунарсы саҡ ҡына күҙен алыуы була — ялт! Йәшенеп өлгөрә хәйләкәр.

Б

Төлкө һуҡҡанда, уны шулай тип арбайҙар (был һамаҡты «Төлкө теле» тип тә йөрөтәләр):

— Әйләнмәле, һуҡмалы,
Ҡыҙыллы ут йотмалы.
Ҡолтәғойроҡ, йылтыр күҙ,
Әйләнһәң дә, мин һуғам,
Боролһаң да, мин һуғам,
Ҡыланһаң да, мин һуғам,
Ҡолтәғойроҡ, йылтыр күҙ,
Шуры-буры былт,
Шуры-буры былт!

## 227. ҠУЯН АУЛАУ

А

Ҡуян да хәйләкәр генә. Тоҙаҡҡа, ҡапҡанга эләкһә, яраланһа, биленә баҫырға кәрәк. Тәжрибәһеҙ һунарсы уның артҡы тәпәйҙәренә баҫып салмаҡсы булыусан. Улай итһәң, ҡуян тибә лә һикереп тороп ҡаса.

Б

Ҡуянга ауға барганда (уны атып алырға иткәндә йә уға тоҙаҡ ҡорғанда), шулай тип арбау һүҙен һамаҡлайҙар (был һамаҡты «Ҡуян теле» тиҙәр):

— Алга ҡарай сапһаң,
Алдыңа сығырмын;
Артҡа ҡарай сапһаң,
Артыңда булырмын.
Юлың өҙөк булыр —
Тоҙағым төҙөк булыр.
Юлың өҙөк һинең:
Өҙөктән — боҙоҡ,
Боҙоҡтан — өҙөк.
Өҙмә, китмә, туҙма, үтмә,
Һөртмә, төртмә, май!

## 228. ҠОШ СӨЙӨҮ

А

Шоңҡар ҡошто яҙ көнө, ҡыр ҡаҙҙары килгәндә, сөйөр булған-

дар. Ул, һауаға менеп, ҡысҡырһа, тауышына бөтөн ҡаҙ ергә төшөр булған. Төшәләр ҙә икән, боçоп тик яталар. Шоңҡар иң аҙаҡтан үҙе берҙе тибеп ала ла йөрәген генә ашай.

Б

Ҡарсығаны һунарсыларға үҙем тотоп бирә инем. Мин өйрәткән ҡарсығалар өйрәк тибә.

Ҡарсығаны бала сағынан уҡ, асыҡтырып, сыпсыҡ күрһәтеп, шуны типтереп өйрәтәһең.

В

Ҡош сөйгәндә, шулай тигән арбау һүҙе әйтелә:

— Сыбарғанат, алағанат, ҡарағанат,
Ҡаптыртырнаҡ, аҡтыртырнаҡ,
Ҡәйелеп осма, йомолоп ос,
Ҡыйыҡ төшмә, тура төш!
Бергә уҡтал, икегә уҡтал,
Икене алма, өстө ал!
Дүртте алма, биште ал,
Алтыны алма, етене ал!
Уңға китмә, һулға кит!
Осош булған юлға кит!
Уңға кит, һулға кит —
Тиберенә тилбер ет!
Берҙе типмә, ишле тип,
Ишлене лә түшлене,
Ишлене, түшлене,
Мөсһөҙ түгел, көслөнө!
Һәррә-һәррә-һәррәрәү!
Һәррәрәү, кем, һәррәрәү!
Һәнә-һәррәү,
Һоп, һоп!

### 229. АЙЫУҘЫ СОЛОҠТАН БИҘҘЕРЕҮ

Борон-борон заманда Әй буйын, тау буйҙарын ҡалын урман ҡаплаған. Ҡарағайтоҡон тип аталған утрау һымаҡ ерҙә йөҙәр йыл йәшәгән өс ҡарағай тороп ҡалған. Уларҙа ата-бабаларыбыҙ бал ҡорттары өсөн солоҡ-умарта эшләп ҡалдырғандар. Ололарҙың һөйләүе буйынса, ул солоҡҡа айыу менеп ҡорттарын туҙҙырған. Унан ҡотолоу өсөн, айыу менә торған ҡарағайға һуҡма-туҡмаҡ, сиртмәк бәйләп ҡуя торған булғандар. Айыу менер өсөн туҡмаҡты ситкә этәргән. Этәргән һайын — туҡмаҡ айыуҙы һуҡмаҡ. Шунан айыу йән асыуына йәнә һуға, туҡмаҡ менән һуғыша торғас, айыу ҡолап килеп төшөр булған.

## 230. БАЛАУЫҘ ҺАЛЫУ, ҠҮС БИКЛӘҮ

### А

Апрель аҙаҡтарында бал ҡорттары менән мәшғүл булдыҡ, йөҙҙән ашыу умартанан торған баҡсабыҙ ауылыбыҙҙан дүрт саҡрым алыҫлыҡта Ҡарлы булаҡта ине. Шулай уҡ бейек ағастарҙың өҫкө ботаҡтары араһында бал ҡорто күстәрен эйәләтеү өсөн ҡарағай ағастарына уйылып эшләнгән солоҡ умарталарыбыҙ ҙа булды. Улар йөҙ саҡрымға тиклем алыҫлыҡта төрлө ерҙә, төрлө тарафта урынлашҡайны. Апрелдә боронғо ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған был солоҡтарҙың ҡырағай бал ҡорто ҡунһын өсөн эсен таҙалап балауыҙ һалыу эше башҡарыла.

### Б

Ҡорт айырғанда, тимер һуғып сыңҡылдатабыҙ. Ҡүс ҡуна. Унан ҡалһа, сүмес менән һауаға һыу һибәбеҙ. Ямғыр тип уйлап, күс йәнә бер урынға йыйыла ла ҡуя. Шунан инде тубал менән йыйып алабыҙ. Ундай саҡта сәбәләнергә ярамай. Тыныс ҡына, иплегенә ҡыланырға кәрәк.

### В

Борон туй, йыйын булғанда, башҡорттар бер-береһенә солоҡ бүләк итешкән.

— Һин геуаһ бул, һин геуаһ бул, — тип, ауылдағы абруйлы кешеләрҙе эйәртеп алып баралар. Шулар алдында солоҡтағы үҙенең тамғаһынан өҫкәрәк, солоҡто кемгә бирһә, шуның тамғаһын киртә. Яңы тыуған балаһына солоҡ биргәндә лә, шулай итә. Баланың тамғаһы атаһыныҡына бер һыҙыҡ өҫтәүҙән барлыҡҡа килә. Солоҡ биреүсе үҙенең тамғаһына оронмай: ул шул көйө ҡала. Шулай итеп, солоҡтоң олононда уға тәүҙә кем хужа булыуы ла, аҙаҡ уның кем ҡулына күсеүе лә тамға ярҙамында әйтеп бирелгән була. Тамғаларҙы юнып ташларға ярамаған. Ҡеше тамғаһын юныу — урлашыу менән бер тип иҫәпләнгән. Әгәр берәү хаслыҡ өсөн кеше тамғаһына балта күтәрһә, уны мир менән эҙләп тапҡандар. Эҙләп тапҡандар ҙа хөкөмгә тарттырғандар.

## 231. СОЛОҠҠА УМАРТА ӨҢӨҮ

Солоҡҡа умарта өңгәндә, сәмләшер булғандар. Ҡем бейегерәк өңөр икән, йәнәһе. Ҡирәм менән күтәрелә бара, солоҡҡа аяҡ осо менән баҫырлыҡ йә тубыҡ терәрлек уйымдар сабып бара солоҡсо. Уларҙың аралары метр самаһы була. Бейек солоҡтарҙа егерме — егерме икешәр соҡор була.

Шулай бейеккә күтәрелгәс кенә, умарта ырый башлайҙар. Умарта ырығанда, ҡирәмгә баҫып тороп эшләйҙәр.

Солоҡ умартаның ҡапҡасын, бурҙар асмаһын өсөн, баҫҡысһыҙ яҡҡа эшләүсән инеләр. Бур түгел айыу ҙа ундай ҡапҡасты аса алмай. Асам тиһә, йығылып төшә. Сәмләшеп, умартаны ҡаяташ башындағы ҡарағайға өңгәндә, айыу таш аҫтына осоп һәләк булыусан.

## 232. СОЛОҠҠА ТАБАНСӨЙ ҠАҒЫУ

Бурҙар йә айыу баҫа торған ергә һиҙҙермәй генә табансөй ҡағыр булғандар. Уны тимерҙән һуғып эшләйҙәр. Ҡағыла торған яғы уҡ башы кеүек итеп эшләнә. Ҡаҡһаң, кире һурырмын тимә. Кеше баҫа торған ерҙә ҡармаҡ кеүек ослайып, тармаҡланып тора. Ундай солоҡҡа үрмәләгән бур ҙа (ә ул күберәк төнөн йөрөй бит инде), айыу ҙа уға ҡабат менмәҫтәй була.

## 233. ИМӘН ШЕШ ҺӘМ СӨЙЛӨ ТУҠМАҠ

Солоҡсолар күберәген айыуҙан яфа күрә. Шуға уны биҙҙереү, урлашһа, язаға тарттырыу өсөн, солоҡ тирәләй имән ҡаҙыҡтар ултыртып сыҡҡандар. Имән ҡаҙыҡтың ер өҫтөндәге өлөшө өҫкә ҡарай ослайып тора. Уларҙың осло урынын ут менән көйҙөрөп сығыр булғандар. Шуға ул шештәр тимер сөй кеүек ҡаты булған. Айыу солоҡтан шул имән ҡаҙыҡтарға ҡолап төшә. Ә солоҡтан ҡолаһын өсөн, умартаның ҡапҡасы алдына ғына туҡмаҡ аҫып ҡуялар. Ул айыуға ҡапҡас асырға ҡамасаулай. Айыу уны ситкә этә. Туҡмаҡ ситкә китеп тора ла, айыу ҡулын алыу менән, уның башына килтереп тондора. Туҡмаҡҡа үткер остарын тышҡа ҡаратып, тимер сөйҙәр (ҡаҙаҡтар) ҡағылған була. Шундай туҡмаҡ килеп бәрелеүе була — айыу асыуланып, туҡмаҡты һуғып ебәрә — ҡулы ауырта. Уныһы ғына етмәй, сөйлө туҡмаҡ шул арала башына килтереп тондора бының. Шулай сөйлө туҡмаҡ менән алыша торғас, айыу йәлп итеп ҡала — тимер кеүек ҡатҡан, беҙҙәй осло имән ҡаҙыҡтарға ҡаҙала төшә.

## 234. СОЛОҠ ИНСЕЛӘҮ

Солоҡто: «Бәхет һынайым. Бынаһын был балама, тегеһен теге балама инселәйем! Хоҙай тәғәләмдән булып, ҡортом ишәйеп китһен!» — тип әйтеп инселәйҙәр.

## 235. БАЛ АЛЫУ

Солоҡтан бал алғанда ағас башына кирәм менән меңәләр. Батманды өҫкә күтәрер өсөн арҡандың бер осон ҡортсо үҙе менән алып менә һәм, уны сығыр аша үткәреп, ерҙә торған ярҙамсыһына төшөрә. Ярҙамсы арҡандың осонан тартыуға, күнәк үҙенән-

үҙе умартасы янына менә лә ҡуя. Бал алғанда, ҡортсо, бисмиллаһын уҡый ҙа:

— Ашып сыҡ, тулып сыҡ,
Ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ!

Дуҫ-иш менән иҫән-һау бергә-бергә ашарға яҙһын! — тип һамаҡлай.

### 236. БИЛӘМ ҠАРАУ

Билəм ҡарау тип аталған эш иң зауыҡлы һанала. Солоҡтарға «буш ҡорт» күстәренең килеп урынлашыу-урынлашмауын йә иһә ҡырағай бал ҡорто күстәренең яңы айырылғандары был умарталарҙы ни дәрәжәлә ҡабул итеү-итмәүен ат өҫтөндә ултырған килеш күҙәтеүҙән тора.

Беҙҙең милкебеҙ иҫәпләнгән солоҡ ағастары тауҙарҙа йәки үҙәндә булғанлыҡтан, көнөнә иң күбе һыбай килеш утыҙ-ҡырҡ саҡрым юл үтеп, ун-ун биш умартаны *тикшерергә* мөмкин. Йылына ни бары ун биш көн дауам иткән билəм ҡарауға минең дуҫым Ибраһим Ҡасҡынбай * менән бергә сыға торғайным.

### 237. БУР ҠОРТТАРҘЫ БИҘҘЕРЕҮ

Ҡортҡа араҡы эсерһәң, ул икенсе кешенең умартаһынан әҙер бал урлай. Урлашыуҙы белеп ҡалған хужа төндә генә умартаһын ситкә күсерә. Ә уның урынына кәрәсинләнгән ҡумта ҡуя. Бур ҡорттар ҡабат уның умартаһына теймәҫ була.

Бур ҡорттоң кемдеке икәнен белеү өсөн, умартаның хужаһы кейәһенә аҡ он тултырылған ҡурай ҡуялар. Бур ҡорттар шунан аҡҡа буялып килеп сыға. Шунан ул ҡорттарҙың кемдең умартаһына ҡайтыуын күҙәтәһең.

### 238. МАЛ-ТЫУАР ТӘРБИӘҺЕ

#### А

Һарыҡ йөнөн ҡырҡҡас, арҡаһынан ҡағып-һуғып, шулай һамаҡлайһың («Һарыҡ теле»н әйтәһең):

— Айыуҙан өрк, бүренән ҡас,
Дошмандарға тош булма *.
Күҙ-ҡараҡҡа тотторма,
Дүңгәк булып күрен.
Бүҙәнәнән май ал,
Ябалаҡтан йөн ал,
Иҫән-һау йөрө.

Бүренән тотторма,
Бирәүҙән дә отторма,
Дошмандарға тош булма...

Б

Ябалаҡтан йөн ал,
Бүҙәнәнән май ал.
Ҡарсығанан ҡан ал.
Эттән, ҡоштан алдырма,
Дүңгәк булып ятып ҡал!
Айыу, бүре килеп сыҡһа,
Дүңгәк булып ятып ҡал!

## 239. ҺЫЙЫР БЫҘАУЛАҒАНДА

Һыйыр быҙаулағас, ыуыҙын малай кешегә эсерһәң, киләһе йыл үгеҙ быҙау тыуа. Ҡыҙ кешегә эсерһәң, орғасы быҙау тыуа.

Һыйыр быҙаулағас, уның тәүге һөтө ыуыҙ була. Шунан ҡоймаҡ бешерәләр. Ыуыҙ ҡоймағына ҡунаҡ йыялар.

## 240. МАЛ ИНСЕЛӘҮ

Ғаиләләге берәй кешенең бәхетен юрап мал береү йолаһы бар. «Быныһы һинең һарығың булһын», — тип тотторалар. Шуны мал инселәү тиҙәр. Инселәп бирелгән малды яланғас ҡул менән тоторға ярамай. Уны салғый (итәк осо) йәең осо менән тоталар.

## 241. МАЛ ТОТТОРОУ

А

Кешегә мал һатҡанда, биреүсе ул малды салғыйы менән тоттора. Алыусы ла салғый менән тота. Бер ҡул менән мал тоттораһың, икенсеһе менән аҡса алаһың. Мал тотторғанда:

— Һин дә уң, мин дә уң,
Алдың, артың ҡот булһын, —

тиһең.

Алыусы шулай тип әйтә:

— Һин аҡсаның изгелеген күр,
Мин малдыҡын күрәйем.

Малды кешегә биргәнгә тиклем мал эйәһе мал ҡотон алып ҡала, йәғни түбәһенән генә бер өлтөк йөнөн ҡырҡып алып, урап, аҙбарға ҡыҫтырып ҡуя. Ҡыҫтырғанда:

— Ҡотоң ҡалһын, үҙең кит,
Ҡотоң ҡалһын, үҙең кит,
Ҡотоң ҡалһын, үҙең кит, —

тип һамаҡлайҙар (мал ҡотон алғанды һатып алыусы күрмәҫкә тейеш).

## Б

Ат һатҡанда, хужа һатып алыусыға уны йүгәне менән тоттора, һыйыр һатҡанда, хужа уның ҡаймағын, һөтөн алыусыға ауыҙ иттерә. Һатып алыусы иһә һыйыр өҫтөнә таҫтамал, күлдәк кеүек нәмәләр һалырға тейеш. Улар һыйыр хужаһына бирелә. Һыйыр муйынындағы бауы менән бергә һатыла. Һыйыр һатҡанда, ҡул бирешмәҫкә. Юҡһа, мал уңмай. Ә өй һатҡанда, ҡул бирешеү — шарт.

## В

Мал һатҡанда, ҡото китмәһен тип, аҙбарҙан уны арты менән сығаралар. Һатҡан кеше лә, алғаны ла таҫтамал бирешә.

Малды йомарт кешенән алһаң — уңа, һарандан — туңа.

Алған мал уңмаһа, элекке хужаһына барып, күренмәй генә, малының алдынан ашап торған ризығын алып ҡайтып, аҙбарыңа һалаһың.

## Г

Мал һатып алғанда:

— Алды ла уңһын,
Арты ла уңһын,
Изгелекле мал булһын! —

тиҙәр.

## 242. МАЛ ҠОТО

## А

Бер-берәүҙең ҡулы ауыр булһа, уға һатҡан мал киңгәй *.

Алағуян башы (яңыса: Яңы Мөсәт) ауылы Мостафа мулла берәүҙең бер баш айғырына ике баш мал бирә. Шул айғыр киңгәй: ялы, ҡойроғо бөтә, күҙҙәре ыуҙыға. Шунан һуң тегеләрҙең малдары ла бөтә, үҙҙәре лә бөтә. Атты һатҡан кеше малының ҡотон, хаслыҡ уйлап, алып ҡалған. Хаслыҡ уйлап мал ҡотон алғанда, ҡойроҡ төбөнән өс тапҡыр ҡыл тартып алалар. Беҙҙә берәү бар, унан алған мал бер ваҡытта ла мандымай...

Ҡешегә мал бирмәй, мал һатмай, алыштырмай тороп булмай. Мал ҡотон, киткәне менән ҡото ла китмәһен, ҡурала мал өҙөлмәһен, тип кенә алырға кәрәк.

— Ҡотонҙо алам,
Ҡотонҙо алам,
Ҡотонҙо алам, —

тип өс тапҡыр һырт буйынан, мөгөҙ төбөнән берәр семтем йөнөн йолҡоп алаһың да ҡура егенә ҡыҫтырып ҡуяһың.

Ҡеше ҡулынан мал алғас, артҡа ҡарарға ярамай. Алған малың үрсемһеҙ, ҡотһоҙ була.

Бер һунарсының бик шәп эте булған. Муйынында ебәк бау, ҡолаҡтары тороҡ, күҙҙәре үткер, үҙе алғыр булған. Шуны бер ҡарт һорай, ти:

— Миңә бир этеңде. Мин һиңә һайлам-һайлам йылҡы малы сығарып бирәм. Өйөр башының теҙгенен тоттороғмон. Һин артыңа әйләнеп ҡарама, кит тә кит. Тәҡәт итмәҫһен, барыбер ҡарамаҫһың, — ти.

Һунарсы этен бирә тегегә. Бабай быға теҙген тоттора. Китә һунарсы. Артынан ер йөҙөн ябып өйөр-өйөр йылҡы килә, ти, йылҡылдашып, быны тапарҙай булып ажарланып, һунарсы тәҡәт итә алмай, борола ла ҡарай. Күлдән сығып килгәне кире һыу төбөнә китә, ярға сыҡҡаны быға ҡала.

Шуға ла атайым:

— Мал алһағыҙ, артығыҙға ҡарамағыҙ, — ти торғайны.

Б

Шүлгәндән сыҡҡан малды мал ҡото тиҙәр. Шүлгәндән алаҡола, сысҡан һыртлы мал сыҡҡан.

Ала малдың ҡото бар,
Ҡола малдың ҡото бар, —

тиҙәр.

### 243. МАЛ ТЫУҒАС ӘЙТЕЛӘ ТОРҒАН ТЕЛӘК

Бәрәс йәки быҙау тыуһа, уны ауыҙы асыҡ мейес алдына килтереп, былай тигәндәр:

— Мейестәй, мөрйәләй ҙур бул,
Мейестәй, мөрйәләй ҙур бул,
Мейестәй, мөрйәләй ҙур бул.

### 244. БЫҘАУ ИРКӘЛӘТЕҮ

Бәләкәй быҙау кискеһен
Һуҙып-һуҙып баҡыра.

Һағынған ул әсәһен,
Шуға уны саҡыра.
Мөңрәй-мөңрәй әсәһе,
Ҡайтып килде әсәһе.
Ниндәй матур балаһы, —
Ҡарап тора анаһы.
Һикереп йөрөй балаһы,
Балаһы — күҙ алмаһы.

### 245. ӨЙӨР АЙҒЫРЫН ҺЫНАУ

Айғыр малы өйөр башы булырлыҡмы әллә юҡмы икәнен былай һынайҙар. Айғыр менән айғыр талашыусан. Талашҡанда, бирешмәгән, бүре килһә, уға ҡаршы барған, унан һырт биреп ҡасыуҙы белмәгән, ялы тубығына төшөп торған, ял ҡылы эре булған айғыр малын өйөр башы итеп һайлап алалар. Өйөр айғырын екһәң, ялы дуғаға сырмалып килер.

### 246. МАЛҒА ИНӘҮ, ТАМҒА ҺАЛЫУ

Башҡа кешенеке менән малы буталмаһын өсөн, хужа кеше уны тамғалай. Тамға йылҡы малына баҫыла. Тамғалы тимерҙе баҙлатып тороп, аттың янбашына баҫалар. Һәр кемдең үҙ тамғаһы була. Латиф ҡарттың ҡарлуғас-тамға  . Ҡүсәровтар менән Ғайсиндарҙың түңәрәк ○ (ҡояш-тамға) була торғайны.

Инәүҙе малдың ҡолағына һалалар. Ҡолаҡ осо ярылған мал беҙҙеке була торғайны. Ҡәйнүш ҡарт малының ҡолағын киртеп ҡуя торғайны.

### 247. ҠӨТӨҮҘЕ БЕРЕНСЕ ТАПҠЫР ҠЫРҒА ҠЫУЫУ

Яҙ еткәс беренсе тапҡыр көтөү ҡыуғанда, көтөүсегә йомортҡа бирәләр. Шулай итһәң, көтөү ҡурсаулы, мал үрсемле була, ти.

### 248. ҠОШ-ҠОРТ ТӘРБИӘҺЕ

А

Әгәр ҙә тауыҡ йомортҡа баҫырға ултырмаһа, уға ҡуян тиҙәге ашаталар. Тауыҡ шунда уҡ себеш баҫырға ултыра.

Себештәргә күҙ теймәһен өсөн, уларҙы иләккә ултыртып, бер нисә минут төтөндә тоталар.

Б

Ҡаҙ аҫраһаң, өйөң булһын Дим буйында,
Ашарына булһын бойҙай, һоло һәм тарың да.

Күберәк бирһәң ҡаҙҙарыңа һолоно,
Мул алырһың ҡаҙ мамығын, йөнөн.

Әгәр-мәгәр ҡыҙғанмаһаң тарыны,
Май менән тулы булыр ҡаҙ ҡарыны.
Бойҙайҙы бирһәң әгәр күберәк,
Ҡаҙ тәнендә итс булыр күберәк.

## 249. БӘПКӘ УЛТЫРТҠАНДА

Бәпкәне көтөү ҡайтҡанда ултыртырға кәрәк — себеш күп була.

Берҙе бир,
Берҙе бирһәң, унды бир,
Бәрәкәте менән бир,
Йән башына тигеҙ бир!

Сөләймән бәйғәмбәр рухына
Ишле-ҡушлы бул,
Иҫән-һау бул,
Инәле-аталы бул!

## 250. ОРҘОҠ ЙОМОРТҠА

Тауыҡ ҡайһы саҡта кесерәк кенә йомортҡа һалып ҡуя. Шуны орҙоҡ (орлоҡ) йомортҡа тиҙәр. Орҙоҡ йомортҡаны аш (иген) сәскән ергә күмәләр. Шулай итһәң, уңыш мул була, ти.

## 251. ЙӘЙЛӘҮГӘ КҮСЕҮ, ТИРМӘ ҠОРОУҘАР

### А

Башҡорт халҡы элек-электән малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Үлән ир етһә (быуынға ултырһа), май аҙағында йәки июнь башында, йәйләүгә күскәндәр.

Тирмәләр йыйылмалы, ҡапыл торғоҙоуға ҡулайлаштырып, төрлө ҡусҡарҙар менән биҙәп эшләнгән.

Йәйләүҙә бейә бәйләгәндәр, ҡымыҙ бешкәндәр, эркет ҡайнатҡандар, ҡышҡылыҡҡа эремсек, май, ҡорот әҙерләгәндәр.

Көҙгә ҡарай көҙгө йортҡа, йәғни ауылға яҡын урынға, йылдағы үҙҙәренең билдәле урындарына күскәндәр, ер туңмайынса, кәртә-ҡураны малдан иҙгеләтмәгәндәр — ыҙмаға (ауылға) инмәгәндәр.

### Б

Өйҙөрәкәйҙең буйында Яппар ауылы ере булған. Унда Ҡоръ-

ятмаҫ ауылынан да күсеп килер булғандар. Өйҙөрәкәй буйына күсенеп килеүгә хозурланып, шулай тип йырлағандар:

Өйҙөрәкәй буйы, ай, бүтәгә
Ат аяҡкайҙарын күтәрә.
Был йөрөүҙәр беҙгә тәсбих түгел,
Әҙерәк-әҙерәк күңел күтәрә...

Йәйләүгә йылҡыларын ҡыуалар, һыйырҙарын алып баралар. Ә ваҡ мал ҡышлауҙа, ауылда ҡала. Уларҙы аҙнаһына бер барып ҡарап, тсүәлләп килер булғандар.

Йәйләүҙә ағас туҫтаҡтар менән ҡымыҙ эскәндәр. Ҡымыҙҙы ҙур ағас аштауға ҡойғандар. Уның бер яғына бал ҡуялар, икенсе яғына — ҡорот. Шунан алып эсеп ултыралар. Юлдан үткән бер кешене буш итмәйҙәр: саҡырып алып ҡымыҙ эсерәләр. Юлсы бороламай үтеп китә башлаһа, атайҙар беҙҙе атҡа мендереп:

— Боролһондар ҡымыҙ эсергә! — тип арттарынан саптыралар ине.

## 252. КҮС ЮЛЫ

Беҙҙең ауыл Иҫке Муса ауылы (элек Муса ғына булған) әлеге йәшәгән төп урынына Тамъян ырыуынан күсеп килгән.

Тамъян ырыуы башҡорттары, ҡырғыҙ (хәҙерге ҡаҙаҡ) ырыуҙарының туҡтауһыҙ барымта-ҡарымталарына йәберләнеп йәшәмәҫ өсөн, Аҡ йылғаның урта ағымы өлөшөнә, бай көтөүлектәре, һунарға йөрөрлөк урмандары, йәйләүҙәр ҡороп йәшәрлек киң туғайлыҡтары, балыҡ ҡармаҡларлыҡ йылғалары булған ер эҙләп, төньяҡҡа ҡарап юл тотҡандар. Юлда һәр аҡһаҡал үҙ нәҫеле менән үҙҙәренә оҡшаған ерҙе төйәкләй барған. Һәр ырыу бер-береһе менән аралашыу өсөн шул күс юлын (күсеү юлын) файҙаланыр булған.

## 253. ТУЛА БАҪЫУ

### А

Туланы яңғыҙ-ярым баҫып булмай. Ҡатындар, ҡыҙҙар өмәгә саҡырыла. Йә эште ҡулалмаш эшләйҙәр. Эш ырамлы булһын өсөн, тула баҫҡан ыңғайға йырлашып та алалар:

Аҡ тулалар, ай, тиҙ керегә,
Арҡау, буйы тигеҙ эрләнһә,
Бер туғандарың да ят була ул,
Ситтә йөрөп, күңел керләнһә.

Булыр микән был тула,
Булмаҫ микән был тула,

Был туланы баҫып бөткәс,
Уйнатыр микән хужа?

Йырлай-йырлай өмәләрҙә
Гөрләп тула баҫабыҙ.
Йырлап, гөрләп, тула баҫып,
Аҙаҡ күңел асабыҙ.

Б

Борон башҡорттар тула кейем кейгән. Ҡыш буйы йөн иләгәндәр ҙә, өмә яһап, уны баҫыр булғандар. Егерме биш аршин туланы бер кистә баҫҡандар. Тула баҫыусыларҙы хужа, тәмле-тәмле аштар бешереп, һыйлар булған. Тула баҫҡанда ҡыҙҙар шулай тип йырлаған:

Йырлап, тула баҫалар.
Йырлап, тула баҫа-баҫа,
Йәштәр күңел асалар.

В

Баҫып бөтөрәйек тулаһын,
Башын тотоп улаҫын!

Г

. . . . . . . . . . .
Тула баҫыу — эшме ни?!
Иптәштәрең араһында
Йырламау тейешме ни?!

Йырлай-йырлай өмәләрҙә
Гөрләп тула баҫабыҙ.
Йырлап тула баҫабыҙ ҙа
Йырлап ситкә атабыҙ.

Ғ

Тула, тула, тула ла,
Тулала ҡыҙҙар була.
Тула баҫҡан матур ҡыҙҙың
Ҡаштары ҡара була.

Йөн эрләйем, йөн эрләйем —
Йөнөм бер ҙә ырамай.
Ҡешеләрҙе кейәү һорай,
Беҙҙе берәү һорамай.

## 254. ШӘЛ БӘЙЛӘҮ

Шәл бәйләгәндә, ҡыҙ-ҡырҡын киске утырмаға йөрөүсән. Сөкөр-сөкөр һөйләшә-һөйләшә, кәңәшләшә-кәңәшләшә эшләйһең. Күмәкләшеп йә алмаш-тилмәш йырлашып та алаһың.

Шәл бәйләйем, шәл бәйләйем,
Уртаһынан күҙ алам.
Күреп туймай ике күҙем,
Күҙем талғас, кире алам.

Шәлем аҡлы, шәлем аҡлы,
Шәлем аҡлы, шаҡмаҡлы.
Ҡәртәләп алырҙай булам,
Һин йөрөгән һуҡмаҡты.

Шәл бәйләһәм дә, күренә
Сәсемдең бөҙ(ө)рәһе.
Ай ҙа яңғыҙ, тип әйтәләр —
Бар уның Зөһрәһе.

## 255. НИГЕҘ ҠОРОУ

### А

Нигеҙ ҡоролаһы урынға тәүҙә ҙур аҡташ һалалар. Шуны нигеҙ ташы тиҙәр. Тупһаға аҡташ һалыу йолаһы ла бар. Ҡесаҙна һайын шуны йыуып, сайып торалар.

### Б

Нигеҙ бутҡаһы тигән йоланы атҡарыу, исеменән үк аңлашылыуынса, өй нигеҙе һалыу менән бәйле.

Өй нигеҙе һалған көндө ауылдаштары хужаға төрлө ризыҡ килтерә. Ярҙам иткән кешеләргә шул ризыҡтан ашамлыҡ бешерелә. Ул ашамлыҡ төрҙәренә бутҡа бешереү мотлаҡ ингән. Был йола бигерәк тә Дим буйына хас.

### В

Башҡорт ауылдарында борон йорттар урам буйлап теҙелеп кенә ултырмаған: береһе эстәрәк, икенсеһе тыштараҡ, өсөнсөһө арҡыры, дүртенсеһе буйына һалынған. Ни өсөн тигәндә, кешеләр тыныс урын эҙләгәндәр. Ә тыныс урынды шулай табалар: бер һумлыҡ көмөш тәңкәне, ауыртмаҡ кеүек итеп епкә таҡҡандар ҙа шуны ҡулға тотоп йөрөтөп сығалар. Тәңкә бәүелә башлаһа — ул ер оҡшамай. Бәүелеүҙән туҡтаған ерҙә нигеҙ ҡорорға була.

Г

Нигеҙ ҡорғанда, ҡорбан салалар (ҡорбан малы һарыҡ йә тана булырға мөмкин). Ҡарттарҙы саҡырып, аят уҡытып, фатиха алалар. Шуны нигеҙ ҡорбаны ашау, тиҙәр.

Ғ

Нигеҙ ҡорғанда, урамдан кем үтә, шуны индереп, май, икмәк менән һыйлайһың. Шуны «Нигеҙ майы», «Нигеҙ икмәге» тиҙәр.

## 256. ӨЙ ҺАЛЫУ

А

Өйгә өрлөк һалғанда, уның ике яҡ башына 15-әр йәки 20-шәр тинлек тәңкә һалып ҡалдыралар. Өрлөктөң баш яғын күтәргән кешегә таҫтамал бирәләр.

Өй күтәрешеүселәргә май ҡаптыралар Шул уҡ майҙы яңы өйҙөң мөйөшөнә һөртәләр.

Б

Өй һалғанда, нигеҙгә, өрлөк аҫтына тәңкә һалып ҡалдырырға кәрәк. Хужа бәхетле була (Учалы яҡтарында өрлөккә таҫтамал тағалар. Аҫтына тәңкәнән тыш, йөн һалалар. Был ырым ырыҫ, ҡот теләүҙе аңлата).

В

Өй һалынып бөткәс, хужаның туған-тыумаһаһы, дуҫ-ише өй ҡотларға килә. Борон: «Өйөң ҡотло булһын», — тип, ҡыры-тиңе бер туҫтаҡ ҡатыҡты нигеҙгә күмгәндәр. Был ырым «ғүмер буйы бәхетле булығыҙ, бәхетегеҙ аҡ булһын!» тигәнде аңлатҡан.

Г

Яңы өйгә күсер алдынан иртә менән, кеше аяғы ҡуҙғалмаҫ борон, яңы өйөңә икмәк-тоҙ алып бараһың. Көндөҙ кеше йыйып аят уҡытаһың. Ишек башына Ҡөрьән ҡуяһың. Иҫке өйҙән күсенгәндә: «Әйҙә, яңы өйгә күсәбеҙ!» — тип, иҫке өйҙөң эйәһен саҡыраң. Әгәр уны саҡырмаһаң, мал-мөлкәтеңә ҡаза килер.

Ғ

Әбей-бабайҙарҙы йыйып аят уҡытҡандан һуң, өй һалыуҙа ҡатнашҡан кешеләр саҡырыла. Бер ҡунаҡ та күстәнәсһеҙ килмәй.

## 257. ҺЫУ ТАБЫУ

Өй һалғас, һыуы ла кәрәк. Боронғо бабаларыбыҙ һыуһыҙ ерҙәр аша күсенгәндә, алдан үгеҙ ебәрер булғандар. Һыуһаған үгеҙ ҡайһы ерҙә сапсына, һөҙгөләй, шул ерҙе соҡоһаң, һыу сығыр булған.

Өй эргәһендә һыу сығырлыҡ урынды белеү өсөн ҡаҙ ебәрәләр. Әгәр ҡаҙ ятһа, соҡона башлаһа, шул ерҙә ҡоҙоҡ ҡаҙырға була.

Суйын табаны ергә түңкәреп ҡарайһың. Ҡайһы ерҙә ул эстән быулана, шул ерҙә ҡоҙоҡ ҡаҙырға була.

Тал тамырын ике усҡа һалып, ер өҫтөнән тейер теймәҫ кенә йөрөтһәң, һыу яҡын урында ул, тартылып, әйләнеп китә. Шунда ҡоҙоҡ ҡаҙырға, хатта шишмә сығарырға була.

## 258. ҺАЛ ҺАЛЛАУ

Һал ағыҙғанда һайға ултырыуҙан ҡурҡыныс нәмә юҡ. Таһыллы ҡарттар юлды балыҡ йөрөшөнә ҡарап билдәләй белә.

Һалға бер ҡасан да һыу сәпсеген ултыртырға ярамай, әтеү һал аккурат һайға ултыра. Шуның өсөн, һал һаллағанда, һалда аҡҡанда, ирҙәр һай-һаулап, һалдан һыу сәпсеген ҡыуа-ҡыуа баралар. Һалды бәйләгәндә (кәшмәкләгәндә) үк, уны берәй кеше бәхетенә бағышлап бәйләйҙәр. Һаллау уңышлы үтһә, ул кешегә хәйер бирергә кәрәк. Күп осраҡта ҡунаҡҡа саҡырып һыйлайҙар.

Һал ағып килеүен яр башында бала-саға һағалап ҡына тора. Тапҡырҙарына еткәс, һикрәңләй-һикрәңләй шулай тип һамаҡлайҙар:

Һалсы, һалма биреп китсе,  
Һалма биреп китмәһәң,  
Һыу төбөнә китсе,  
Һалсы, һалсы!..

Һалсылар күстәнәс һелтәп китә.

Элгәре һалды кәшмәкләүгә, ағыҙыуға, имен юлға арнап йырһамаҡтар йырлағандар.

## 259. ҺАЛСЫ-БҮРӘНӘСЕЛӘР ЙЫРЫ

### А

Һал һаллап аҡҡанда, һай ерҙә ултырған һалды, бүрәнә ҡыуғыны ваҡытында бүрәнә һөйрәгәндә, бергә-бергә бер төптән көсәнер өсөн һуҙып-һуҙып, ҡеүәтләшеп ҡысҡырғандар.

Түбәндәге йырҙы Тамъян-Түңгәүер волосынан Оло Ҡыҙыл, Әйек, Һүрәм, Ҡола алат йылғалары буйынса иҫке замапда һал ағыҙған һалсылар, бүрәнәселәр йырлаған:

Бүрәнәсе — сос кеше,
Ике күҙе ут кеше лә...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Шәп багор! Саба күр!
Әрҙәп тормаһын Егор ҙа *...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Ҡарағай — кантауай *,
Ҡарағай — минауай ҙа *...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Ҡарағас — ҡаты ағас,
Ҡарама — алама ағас,
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Егор килә һал менән,
Ҡонторҙағы мал менән дә...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Йылтыр, йылтыр шәм яна
Һал өҫтөндә, конторҙа ла...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Йән йәл түгел, мал жаль түгел,
Йәнең һөйгән матурға ла...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Ярҙар бейек, һыу һалҡын,
Ҡәшеүәрҙәр * ут яҡһын да...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Һыу һалҡыны туңдыра,
Ҡәшеүәр йылындыра ла...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Тула ҡуңыс, күн ҡата,
Ҡата туҙһа, сабата ла...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Сабата конторҙа бар,
Юриндарҙан * һатып ал да...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!
Залом * торһа, эш була,
Юриндарға көс була ла...
Һо-оп!
Һай, раз ищу!

Затор * торһа, яй була,
Нагыратҡа * май була ла...
    Һо-оп!
    Һай, раз ищу!
Оло Эйектән һал аға,
Ырымбур тигән ҡалаға ла.
    Һо-оп!
    Һай, раз ищу!
Һыу эсендә һөрән һалып,
Бүрәнәсе мал таба ла,
    Һо-оп!
    Һай, раз ищу!

Б

Ҡумәкләшеп, бер бүрәнәне багурлап һөйрәгәндә, шулай тип йырлап, һалсы-бүрәнәселәр бер-береһен ҡеүәтләй.

Арыш икмәк, һөтһөҙ сәй —
    һо-оп!
Бүрәнәгә көс етмәй ҙә,
    һо-оп!
Бүрәнәһе шижала ла,
    һо-оп!
Ҡуҙғатырбыҙ, иншалла,
    һо-оп!
Ҡайын ағас, ҡарағай ҙа,
    һо-оп!
Ҡарағас — ауыр ағас,
    һо-оп!
Һөйгән йәрен тартып алдым,
    һо-оп!
Ҡүңелемә ярағас та,
    һо-оп!

## 260. «НА-А, МАЛҠАЙ» ЙӘКИ ЫЛАУСЫЛАР ЙЫРЫ [8]

Был йырҙы Әбей батша юлы (Екатеринский тракт) һалыуҙа, Строганов заводтарында күмер, руда, суйын ташыуҙа йөкләмә утәусе башҡорт ылаусылары тигеҙ ерҙә, тау төшкәндә йөк өҫтөнә ултырып, ат юртҡан ыңғайға һалмаҡлап йырлап барыр булған:

Ҡәкере-бөкөрө, соҡор-саҡыр
Үгәлжинйә * юлдары.
Бөкөрәйешеп бөткәнбеҙ беҙ —
Устырғандың * ҡолдары...
    На-а, малҡай!
    Ҡалма ҡалҡай!

Тау менәбеҙ, тау төшәбеҙ,
Зауыттарға еткәнсе
Был юлдарҙы тапайбыҙ беҙ,
Йәһәннәмгә киткәнсе!

Ҡ у ш ы м т а.

Урау-урау Урал юлы
Әбей батша һалдырған.
Әбей батша, Устырған бай
Беҙҙе асҡа ҡалдырған.

Ҡ у ш ы м т а.

Бейә, бейә, бей(е) әле,
Ҡаҡ юлдарҙы төй әле.
«Мин әлегә үлән йотам —
Хужам ас», — тип көй әле.

Ҡ у ш ы м т а.

Урал юлы — урман юлы:
Бар ағас бар — ерек юҡ.
Мең ҡайғым юҡ, бер ҡайғым бар —
Ул да булһа ирек юҡ *.

Ҡ у ш ы м т а.

### 261. ҮГӘЛЖЕНЙӘ ҺАМАҒЫ [9]

Саҡ-суҡ! Саҡ-суҡ!
Балта менән киҫәбеҙ,
киҫәбеҙ.
Көҙ, ҡыш — ҡыуыш-өйҙәбеҙ,
Күмер — беҙҙең бисәбеҙ...
киҫәбеҙ.
Таҡ-туҡ, шаҡ-шуҡ!
Ағастарҙы йығабыҙ,
йығабыҙ!
Тоҙға ҡатҡан күлдәктәрҙән
Арҡа тирен һығабыҙ...
һығабыҙ!
Һай-й, һуп! Һей-й, һуп!
Бүрәнәне өйәбеҙ!
Өйәбеҙ!
Өйөбөҙгә ҡайтыр көндө
Һағынабыҙ, көйәбеҙ...
Өйәбеҙ!
Уһ-һуһ! Ыһ-һуһ!
Көрәк менән күмәбеҙ,
күмәбеҙ!

Көн дә бара, төн дә бара
Ҡүмәкләшеп өйәбеҙ...
кумәбеҙ!
Ыҫ-быҫ, шыш-быш!
Ҡүмерҙәрҙе үртәйбеҙ,
төтәйбеҙ!
Ҡүмер кеүек ыҫлап-быҫлап,
Ғүмерҙәрҙе үртәйбеҙ,
төтәйбеҙ!
Һап-һуп! Ҡаҡ-һуҡ!
«Үгләжинйә» — һамағым!..
Һамағым!
Ул һамаҡты ташлар инем —
Өйҙә алты тамағым...
Һамағым.

## 262. КОМБАЙЫНЫ ШИЖАЛА *

(Ҡ е ү э т л ә ү й ы р ы)

Һуғыш ваҡытында тылда ҡалған ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро бөтә ирҙәр эшен үҙебеҙ эшләнек. Игенен дә урҙыҡ, бүрәнәһен ҡырҡтыҡ, сплавҡа ла йөрөнөк, Таналыҡ буйында Баймак заводы өсөн торф та сығарҙыҡ. Эш ауыр. Ауыр эште йыр менән еңеләйткән була торғайныҡ. Ул саҡта йырлаған йырыбыҙ шулай булыр ине:

Яҙ еткәс, китә Иҙел боҙҙары, һо-оп!
Аҡ ҡалпаҡ, зәңгәр суҡ, һо-оп!
Комбай(ы)ны шижала ла, һо-оп!
Стахановсылар менән, һо-оп!
Аҡ ҡалпаҡ, зәңгәр суҡ, һо-оп!
Комбай(ы)ны шижала ла, һо-оп!
Тула колхоз ҡырҙары ла, һо-оп!
Аҡ ҡалпаҡ, зәңгәр суҡ, һо-оп!
Комбай(ы)ны шижала ла, һо-оп!

## 263. ЗИМАГУРЛЫҠ КӘСЕБЕ

Борон ир-ат ҡышын кәсеп эҙләп, заводҡа, ҡалаға, рудниктарға, приискаларға китеп, ҡайһы ваҡыт аҙып-туҙып ҡайтыр булған. Шуларҙы зимагур тигәндәр. Ситтә йөрөп, тапҡан-таянғанын туҙҙырып, эсергә, тәмәке тартырға өйрәнеп, «һөнәр» арттырып ҡайтҡандар, үҙҙәренән үҙҙәре көлөп, шулай тип йырлағандар:

Зимагурҙар гурыт китә,
Вагондарға тейәлеп.
Ҡатынҡайы тороп ҡала,
Бағанаға һөйәлеп.

Араҡы бар эскәнгә,
Тәмәке бар тартҡанға.
Араҡы юҡ, тәмәке юҡ,
Мейес башында ятҡанға.

Тәмәке тәм генәһе лә —
Бала ҡорт бал ғынаһы.
Тәмәке тартҡан егеттәр —
Матур ҡыҙ йәргенәһе.

Зимагурҙар талчокта,
Ҡайғырмайҙар мал юҡҡа.
Ҡайғырһалар, ҡайғыралар
Тәмәкеләре юҡҡа.

Зимагур булып йөрөнөм,
Ни нужналар күрмәнем.
Ҡараңғы төн, ямғыр яуа —
Өҫтөмдә бер күлдәгем.

Зимагур булды башым,
Нисек илемә ҡайтим:
Аҡтыҡ күлмәгемде һаттым,
Ниҙәр ябынып ятим?

Зимагурҙар бик байыҡһа,
Таяна тимер таяҡ.
Стансанан стансаға
Йүгерә ялан аяҡ.

Зимагурҙы шунан беләм:
Ҡайыш быуа биленә.
Ашай ҡалъя, һөйә мәрйә —
Ник ҡайтһын ул иленә.

Зимагурға хаттар килә:
«Утын бөттө, ҡайт», — тиеп.
Хатҡа ҡаршы хаттар яҙа:
«Өй мөйөшөн яҡ!» — тиеп.

### 264. АШЛЫҠ СӘСЕҮ

### А

Орлоҡ тейәп сәсеүгә барырға йыйынған кешегә күп итеп йомортҡа бешереп бирәләр. Уны бала-сағаға таратала. Иген сәскән ергә лә һалалар. Ер өҫтөнән бала-саға йыйып ала. Иген сәскәндә:

— Күк инәһе — күк яулыҡ,
Ер атаһы — ерән һаҡал!
Түбә туҡлыҡтары бир!
Илгә-миргә именлек бир,
Йәнгә-тәнгә аманлыҡ бир! —

тип һамаҡлайҙар.

## Б

Башҡорттарҙың сәсеү ерҙәре ауылдан алыҫ булмаған. Сәсеү ваҡытында бөтә ғаилә баҫыуға сыҡҡан. Сәсеүгә барғанда орлоҡ менән бергә бешкән йомортҡа ла алғандар. Үҙенең сәсеү ерәнә барышлай хужа кеше ул йомортҡаларҙы осраған фәҡир-фоҡраға, етем-йәһергә, бала-сағаға тарата-тарата барыр булған. Йомортҡа алыусылар был хужаның игене уңыуын теләгән. Улар:

— Ямғыр, яу,
Ашлыҡ, үҫ!
Илгә бир,
Иң күбеһен миңә бир! —

тигәндәр.

Йомортҡалар ашалғас, ҡатындар: «Эй, Алла, беҙҙең ашлыҡ бөртөктәре ошо балалар ашаған йомортҡалар һымаҡ, эре булып үсһендәр ине», — тип теләк теләгәндәр.

Был йола тау яҡтарында таралған булған. Башҡа яҡтарҙа йомортҡаны сәсеү ере өҫтөндә ҡалдырғандар. Ғәҙәттә, уларҙы сәсеүсе артынан тырматып йөрөүселәр, хужаның уландары йәки яҡын туғандарынан иҫәпләнгән малайҙар йыйыр булған. Был йола тураһында Дим башҡорттарында әле лә шулай тип йырлайҙар:

Орлоҡ һалғас тубалға,
Атай теләк теләне,
Йомортҡалар тәгәрәй,
Мин йыямын сүгәләп...

Сәсеү тамамланғас, хужа кеше ер башына баҫып, игендең ишелеп уңыуын теләгән:

Эй, бойҙайым, бойҙайым,
Бирһен ине Хоҙайым!
Йәшең тулып, үҫеп еткәс,
Үҙем килеп урайым.

Эй, арышым, арышым,
Һиндә минең табышым.
Һин булмаһаң, был донъяла,
Юҡтыр минең табышым.

### В

Ер! Ер! Ҡөсөң бир!
Берҙе бир, өсөн бир:
Ябаға тайҙың көсөн бир.
Ҡөсөм һиңә, Ер, Ер!
Эшем һиңә, Ер, Ер!

. . . . . . .

Алтмыш арба арыш бир.
Алтмышын да ярыш бир;
Етмеш арба етен бир;
Туҡһан арба тары бир.
Асҡа бир, туҡҡа бир,
Иң күбеһен миңә бир —
Һинең өсөн барыбер!
Һорағандың барын бир,
Ер! Ер!

### Г

Атай инвалид булды. Шуға ла иген сәскәндә, орлоҡто арбала ултырған ерҙән һибәр ине. Мин ат йөрөткән була торғайным. Игенсе сәсеп бөткәс, атай мәрхүм шулай тип һамаҡлаған булыр ине:

— Сәстем бойҙай,
Бирһен Хоҙай
Бер бойҙайҙан
Мең бойҙай!
Йә, Хоҙай!

### Ғ

Сәсеүсе билбау менән тубалды муйынына аҫып ала ла ҡолас киреп орлоҡ һибә. Тәүге һибеүендә:

— Йә, Аллам, рәхмәтеңде киң ҡыл! — ти. Икенсеһендә:

— Ҡилгән-киткән ырыҫҡалына *! Ата-баба рухына! — ти. Өсөнсөһөндә:

— Етем-еһер ырыҫҡалына! — ти. Дүртенсеһендә:

— Ҡош-ҡорт ырыҫҡалына! — ти. Артабан:

— Мал-тыуарым ризығына! — ти.

Бөтәһенә лә мул уңыштан өлөш юрай, тик үҙен генә әйтмәй.

### Д

Яҙғы сәсеүгә төшөр алдынан бөтә кеше баҫыуға бара. Унда пионерҙар ҙа була. Бер аҡһаҡал, тракторҙар алдына төшөп, ергә бешкән йомортҡа тәгәрәтә. Шуларҙы ҡарғалар ашаһа, иген дә йомортҡа кеүек тәгәрәп уңа була.

## 265. УҢЫШ ЙЫЙЫУ

У р а ҡ ҡ а   ә й ҙ ә л ә ү

Әйҙә, ураҡ урайыҡ,
Әйҙә, ураҡ урайыҡ!
Бай ҡыҙыр, көн һыҙыр,
Ураҡ ал да ҡыр ҡыҙыр!

## 266. УРАҠ УРА БАШЛАҒАНДА

Бисмиллаһи баштан,
Эштең башы — башлам.
Еңел ҡулдан,
Еңел аяҡтан!
Ике һуҡыр күрмәһен,
Берәү ике күрмәһен,
Икендегә етмәһен,
Күргәне күреп ҡалһын,
Күрмәгәне ятып ҡалһын!
Күргән уңға юраһын,
Ҡырт-ҡырт ҡырҡһын урағым!

## 267. ҠӘТМӘН

Уңыш йыйғанда күрше-күлән килеп сыҡһа, хужа уларға кәтмән бирергә тейеш була. Ер риза булһын тип, хатта ергә бөрәй ус бойҙай, картуф күмеп китеү ҙә булған. Ул ер **кәтмәне тип йөрөтөлгән**. Әле лә ҡыҙыҡ йөҙөнән күршеләр баҡсаға килеп: «Ҡәтмән! Ҡәтмән бирмәһәң, — китмәм», — тип таҡмаҡлайҙар.

## 268. РИЗЫҠҠА БАТА ӘЙТЕҮ

Иген, картуф, йәшелсә уңышын йыйып алғас, һуғым һуйып, иттәрҙе келәткә ҡуйғас, шулай тиҙәр:

### А

Имен-аман йыйып алдым,
Ҡеләт, баҙға әлдем, һалдым.
Туған-тыумаса менән,
Ағай-эне, дуҫ-иш менән,
Һаулыҡ-таҙалыҡ менән,
Бергә-бергә ашарға яҙһын!
Илгә-мирға именлек бир,
Йәнгә-тәнгә аманлыҡ бир.

Б

Туған, дуҫ-иш менән,
Ҡилгән-киткән менән,
Һаулыҡ-таҙалыҡ менән,
Йәнгә, тәнгә сәләмәтлек бир,
Хоҙай тәғәлә.
Йыйырын йыйҙым инде,
Иҫән-һау ашатайым инде...

В

Бешеп сыҡҡан икмәкте бара килеп алһаң, икмәк: «Һабансылар килеп алығыҙ!» — тип ҡысҡыра, ти. «Бисмиллаһи!» — тип алһаң, улай тимәй.

Икмәген алғас, мейесте буш ҡалдырырға ярамай. Уға утын тултырырға, һис булмаһа, берәй тап булһа ла һалып ҡуйырға кәрәк. Юҡһа аслыҡ була, ти.

Г

Икмәк алғанда:

— Ҡиң ризыҡ менән,
Ҡиң дәүләт менән!
Иҫләмәгән, уйламаған
Ғәйеп ҡаҙналарындағы
Ризыҡтарыңды бир! —

тиҙәр. Икмәкте ҡулға алғас, башын киҫеп алып, тәүҙә шуны ҡабырға кәрәк йә өй хужаһына бирергә кәрәк.

Икмәкте мейестән алғас, ишекте асып: «Ҡыямат икмәге ашарға килегеҙ!» — тип тә ҡысҡыра торғайныҡ.



## АЛЫШ, ЯУ ҠАЙТАРЫУ ЙОЛАЛАРЫ

### 269. ОРАН ҺАЛЫУ

#### А

Ике батыр осрашҡанда «Ҡайһы ил батыры?» тигән һорауҙан һуң йыш ҡына:

— Тамғаң нисек?

— Ағасың нимә?

— Ҡошоң ниндәй?

— Ораның ни? — тигән...

Дөйөм оран булыуы, ил өҫтөнә дошман килгәндә, бөтә ырыуҙы аяҡҡа баҫтырыу өсөн хеҙмәт иткән.

#### Б

Ырыуым — бөрйән,
Ҡошом — төйләгән,
Тамғам — таяҡ,
Илем — Баймаҡ,
Ағасым — ерек,
Тауым — Ирәндек,
Дошманым — Тәфтиләү,
Бошҡаным — уф тимәү.

#### В

Ырыуым — бөрйән,
Ағасым — имән,
Ҡошом — бөркөт,
Телем — башҡорт.

Г

Тыуған илем — Әбйәлил,
Тыуған ерем — гүзәл ил,
Ырыуым булыр — ҡыпсаҡ,
Тәү бабабыҙ — Бабсаҡ,
Билемдә булыр бысаҡ:
Дошманыма — бысағым,
Дуҫтарға — йән-усағым.

Ғ

Ырыуым — тамъян,
Ҡайҙа ла ҡаным тамған,
Ҡошом — ыласын,
Йәйгән ҡоласын,
Эскәнем — Ҡыҙыл *,
Ҡандарым ҡыҙыу.

Д

Ынйы-мәрйен кеүек, теҙелеп киткән
Ҡыпсаҡ-дархандарҙың урамы.
Ағастары — ҡарама, ҡошо — бөркөт,
«Туҡсаба!»лыр уның ораны.

### 270. АЛЫШ АЛДЫ ӘЙТЕШЕ

А

— Алыш бармы, көрәш бармы?
— Алыш та бар, көрәш тә бар!

Б

— Алыш бармы, атыш бармы?
— Атыш атаң башына! Алыш бар!

### 271. ҠОРАЛ ТЕЛЕ

Ефәк кереш, өҙөлдө ниһәң, — һиңә намыҫ,
Һөйәк янып, һынды ниһәң, — һиңә намыҫ,
Дошманымды ер менән тиң ҡылмаһам, — миңә намыҫ.

## 272. АЛЫШ ШАРТЫ

### А

Алышҡанда, атышҡанда нәүбәт һаҡлар булғандар. Иң тәүҙә нисек көрәшергә килешкәндәр, алыш алды әйтешен әйтешкәндәр. Шунан йәрәбә һалғандар. Ҡемгә йәрәбә төшә, көрәште шул башлаған.

Көрәш башлар алдынан нисек көрәшергә, ҡылыс алышырға булһалар — күпме, нисек алышырға, атышырға булһалар — ҡайһы тиклем аранан ни менән атышырға һүҙ беркеткәндәр. Арттан килеп атмағандар, йығылғанды сапмағандар.

### Б

Ҡан күп ҡойолмаһын тиһәләр, яу башлыҡтары алға сығып килешеү төҙөгән: йә икеһе генә көс һынаша, йә ике яҡтан ике батырҙы ҡара-ҡаршы сығаралар. Алышырға булһа, шул икәү алыша, киҫешергә булһа — шулар, атышырға булһа — шулар...

Ҡайһы яҡтың кешеһе еңә — шул яҡ еңеүсе иҫәпләнә. Еңелеүсе яҡ һөңгөләрен ергә ҡаҙай. Һөңгөнө ергә ҡаҙау «Дәғүәбеҙҙән ваз кисәбеҙ» тигәнде аңлатҡан. Шуға ла бер-бер кешенең: «Һөңгөнө ергә ҡаҙаным», — тип әйтеүе «Мин алышты ҡуйҙым, көрәшеүҙән туйҙым» тигәнде аңлата.

## 273. БАҪҠЫНСЫЛАРҒА ҺАБАҠ БИРЕҮ

Әлдән-әле баҫып инеп, илгә бола һалған башкиҫәр баҫҡынсыларҙан, барымтасыларҙан теңкәһе ҡороғанда, башҡорт бабалары йыйылып кәнәш иткәндәр. Шунан килмешәктәрҙе кинәт уратып алып, берәүһен генә тере ҡалдырып, ҡалғанын ҡырып һалғандар ҙа:

— Бар, илеңә тай! Әйт, ҡабат яу сапмаһындар, аяуһыҙға — аяу юҡ! — тип уны иленә оҙатыр булғандар.

## 274. ҠАЛҠАН ТӨЙӨҮ, ҠЫЛЫС ҺЫНДЫРЫУ

### А

Яуҙан еңеп ҡайтһалар, ир-егеттәр ҡалҡан төйәләр. Ҡалҡанды тубыҡтарына һалалар ҙа шунан устары, ҡушҡар һөйәге менән дөбөрләтәләр.

### Б

Илен һатҡан, ҡасып тотолған йә ырыу башлығына антын боҙған кешенең муйынынан тамғаһын алып ташлайҙар, баш кейемен һалдырып, өҫтөндә ҡылыс һындыралар.

## 275. ЯУ САПКАНДА, СИК ҺАКЛАҒАНДА

### А

Яу сапҡанда, яу ҡайтарғанда (барымтаға, ҡарымтаға барғанда), киң йылғаны аша сығырға кәрәк булһа, түбәнгә ҡарай ҡыялатып ҡына кискәндәр. Шулай итһәң, йылғаның ҡомағы (болғансығы) арғы яҡҡа тартыла. Һыу түбәнендәге дошман, теге яҡтан был яҡҡа кисәләр икән тип белеп, яңылыша.

### Б

Яуға ат ҡушарлап сапҡандар: атының береһе арыһа, яугир икенсеһенә менеп алған. Йөктән бушанғаны, яугир аҫтындағыһынан тотам да артта ҡалмай, саба. Ғәҙәттә, ул теҙгененән етәкләтмәйенсә лә йәнәш сабып килә.

Ҡушарлап саба торған яу аттарын, ҡолон саҡтарынан уҡ әсәһенән дә, башҡа йылҡы малынан да айырып, бергә тәрбиәләйҙәр. Улар, инәһенә ҡолоно нисек эйәләшә, бер-береһенә шулай эҫенә. Берәүһен тотоп менһәң, ҡалғаны йүгәнһеҙ ҙә, саҡырыуһыҙ ҙа уның артынан ҡалмаҫ була. Шуға ла «ат ҡушарлап сапҡан» тигән һүҙ ике атты ҡушлап сабыуҙы ғына аңлатмай.

### В

Сик тотоп тороусы яугирҙар сик аръяғында саң күтәрелеүҙән үк дошман килеүен күреп ҡалһа, бейек һырғауыл осона алдан әҙерләнеп ҡуйылған туҙға йә ҡоро бесәнгә, оҙон ҡолға ярҙамында ут төртә. Ҡөндөҙ уның төтөнөн, төндә ялҡынын күҙ күреме ерҙә торған бүтән һаҡсылар күреп ала. Шунда уҡ улар үҙҙәренең һырғауылында ут ҡабыҙалар, унан күреп — башҡалары... Шул рәүешле хәүефле хәбәрҙе утлы телеграф башҡорт иленә һә тигәнсә тарата. Оран һалына — яугирҙар атҡа атлана һәм тиҙ арала алдан билдәләнгән урынға йыйыла ла яу ҡайтарырға әҙерләнә.

### Г

Батырҙар (яугирҙар) араһында бәхәс сығып, кем хаҡ, кем нахаҡ һөйләгәнен асыҡлап булмаһа, уларҙы уҡ хөкөмөнә сығарғандар. Тәүҙә нисә кәррә атышырға һүҙ ҡуйышылған. Дәғүәләшеүселәрҙе ике түбәгә ҡара-ҡаршы баҫтырғандар ҙа, янға уҡтар һалынғас, хөкөмсө ҡул һелтәй — уҡтар бер юлы атыла. Ҡемгә уҡ тейә, шуның һүҙе нахаҡ булған тип иҫәпләнә. Икеһенә лә теймәһә, икеһен дә гонаһһыҙ тигәндәр.

## ӨМӘЛӘР, ҺУҒЫМ БАЙРАМЫ, МӘЖЛЕС

### 276. ӨМӘ ТӨРҘӘРЕ

*Өмә тип күмәк башҡарыла торған эшкә әйтәләр. Беҙҙең яҡта ҡаҙ өмәләре, һуғым һуйыу өмәләре, өй нигеҙе ҡороу, өй күтәртеү өмәләре әле лә йәшәп килә. Бынан тыш яҙ етеү менән өй йыуҙырыу, йәйгеһен бесән саптырыу кеүек өмәләр ҙә бар.*

### 277. БАЛСЫҠ ӨМӘҺЕ

#### А

Берәйһе өй һалырға булһа, өмәгә әйтә. Кемдең ҡулы бушыраҡ, шул өмәгә бармай ҡалмай. Күмәкләшеп балсыҡ баҫалар ҙа һыларға тотоналар. Балсыҡ һылап тора торғас, ҡатындарҙан берәү:

— Балсыҡ ҡоро! — тип ҡысҡыра.

— Балсыҡ ҡоро, һылап булмай!

Башҡалары шулай тип күтәреп ала. Шул һүҙҙе ишетеүе була, хужа ҡатын сәйнүк менән йә ҡымыҙ, йә буҙа, йә булмаһа бал килтерә.

Өмәгә ҡатнаша алмаған әбей-һәбей:

— Сәсмә күтәрәбеҙ!

— Сәсмә күтәрәбеҙ! — тиешеп, май, ҡорот, бал, икмәк, тағы әллә ниндәй ризыҡ күтәреп килеп етә. Киләләр ҙә:

— Бында көн иткән кешеләр оҙон ғүмерле булһын!

— Иҫән-һау, татыулыҡ, тәүфиҡ менән торорға яҙһын! — тип теләк теләй-теләй, ризыҡтарынан ауыҙ иттерәләр, ҡалғанын хужа ҡатынға тапшыралар.

Өйҙө йә келәтте һылап бөткәс, ҡибла яҡ стенаның аулағыраҡ бер мөйөшөнә иң оло еңгә бер йомарлам балсыҡты йәбештерә һу-

ға ла: «Минең ҡулым түгел, Ғәйшә, Фатималарҙан ҡалған ҡул»,— тип үҙенең ҡулының эҙен ҡалдыра.

Эште бөткәс, һый башлана. Һый ваҡытында, йырлашып, бейешеп, күңел асалар.

Б

Ялан яҡтарында элек-электән яғыу өсөн йә өй һалыу өсөн тиреҫ (тиҙәк) баҫыуға, тиреҫ һуғыуға өмәләр үткәрелгән.

Өй һылағандан ҡалған балсыҡты өмәлә ҡатнашыусылар матур итеп йомғаҡлап, бер тәрилкәгә һалып, алсаҡ, сумарт *, киң күңелле, уйынды уйын итеп ҡабул итә ала торған кешегә алып бара Хужабикә тәрилкәләге балсыҡты ала ла, һауытын йыуып, бер йомғаҡ май, ҡорот һалып, бер бөтөн икмәген тоттороп сығара (ошо йоланы ө м ә б а л с ы ғ ы и л т е ү, тиҙәр). Ошолай итеп бер нисә өйҙән алган бүләктәр менән кис «аулаҡ өй» ойоштороғандар, унда уйын, һәр төрлө көлкө, йырҙар, бейеүҙәр гөрләп торған. Йәш егеттәр бындай кисәләрҙә ҡыҙ күҙләгән.

## 278. ҠАҘ ӨМӘҺЕ

А

«Ҡаҙ өмәһе» октябрь-ноябрь айҙарында үткәрелә. Ҡемдә, ҡасан булыуы тураһында кистән үк киләсәк ҡатын-ҡыҙҙарға хәбәр итеп ҡуйыла. Өмәгә бигерәк тә етеҙ, таҫыллы ҡатын-ҡыҙҙар саҡырыла, сөнки ҡаҙ йолҡоу үҙенә күрә ҙур оҫталыҡ талап итә. Ҡаҙ өмәһе барышында, башҡорттарҙың башҡа йолаларындағы көүек йыр йырлана. Әгәр оло быуын ҡатындар ҡатнашһа, улар үҙҙәренең йәш саҡтарын, үткән тормоштарын һөйләйҙәр.

Ҡаҙ ҡанаттарын һайларға,
Төштөм һыу буйҙарына.
Һыу буйында йөрөгәндә,
Һин генә уйҙарымда.

Йолҡолган ҡаҙҙарҙы таҙалағандан һуң, көйәнтәләп барып, йылғала сайҡап алып килгәс, өмәселәр баш-күҙ төҙәтергә ҡайтып китәләр.

Ҡисен ҡаҙ йолҡоусылар хужа йортона йыйыла. Хужабикә уларҙы ҡаҙ ите менән һыйлай.

Ҡаҙ өмәһендә (шулай уҡ башҡа ваҡытта ҡош ите бешергәндә) иң тәүге өлөш ҡыҙҙарға бирелә. Ҡанат итен биргәндә:

— Ҡанатланып өйөңдән тиҙерәк осоп сыҡ! — тиҙәр. Борондан ҡыҙҙар ата йортонда тик ҡунаҡ һымаҡ ҡына булған, ҡарт ҡыҙ булып ҡалыу ғаилә өсөн бәхетһеҙлек тип иҫәпләнгән. Ҡыҙҙарға өлөш бүленеп бөткәс, ололарға бүлеп сығалар. Әгәр ҡаҙ бото эләкһә:

— Ҡаҙ шикелле бейеп тор! — тиҙәр. Баш тотторһалар:
— Башлы бул! — тип әйтәләр.

Һәр төрлө ит үҙенсә бүленә. Һәр өлөштө һамаҡлап, йырлап биреү йолаһы ла булған.

**Был ҡаҙ ҡайҙа ултырған,**
Бото — өрөп тултырған?
Өлөшөң ҡулыңдан төшмәһен,
Ипләп!
Ауыҙың бешмәһен!

## Б

Ҡаҙ өмәләре, һабантуйҙар кеүек, ауылда йәшәүселәрҙең бөтәһе ҡатнашлығында ҙур байрам итеп уҙғарыла. Был байрам уңған хужа һәм хужабикәнең яҙғы-йәйге эшенең йомғағы тип ҡарала.

Өмә көндө ауылда иртә менән йәнлелек башлана. Сөнки был байрамды ололар ҙа, йәштәр ҙә, кескәйҙәр ҙә — бөтәһе лә көтөп ала

Йыр яңғырай. Күп кенә өйҙәрҙең ҡапҡаларына «Бөгөн беҙҙә ҡаҙ өмәһе. Рәхим итегеҙ!» тип яҙылған ҡыҙыл сепрәк эленгән. Ҡапҡа баштарында флагтар елберҙәй, төрлө төҫтәге шарҙар елгә талпына. Милли кейем кейгән бер төркөм егеттәр, ҡыҙҙар ҡаҙ өмәһе барған йортҡа килеп тула. Был өйҙә ауылдың уңғандары йәшәй. Оло инәйҙәр йәштәргә ҡаҙ йолҡоу серҙәрен өйрәтә. Шул саҡ өмәгә килеүсе күрше ҡатындарҙың береһе йыр башлай. Йырҙы башҡалар күтәреп ала.

Күмәкләгән — яу ҡайтарған, ҡаҙҙарҙы тиҙ үк йолҡоп та бөтөрәләр. Ҡыҙҙар, күҙ яуын алырлыҡ итеп буяп эшләнгән көйәнтәләргә дүртәр ҡаҙ элеп, уларҙы йыуырға йылға буйына алып китәләр. Ҡалғандар икенсе йортҡа йүнәлә. Өйҙөң хужалары, өмәселәрҙе әйҙүкләп, ишек алдына сығып яҡты йөҙ, йылы һүҙ менән ҡаршы ала. Хужаларҙың ҡулдарында — икмәк менән тоҙ. Гармун уйнап, «Ҡаҙ ҡанаты» көйөн йырлап килгән йәштәр ҙә бында туҡтай.

Өмә иткән өйҙәрҙең барыһынан да ҡаҙҙар йылға буйына килтерелеүгә, гармунға ҡушылып, йырлаша-йырлаша, дуғаларына төрлө-төрлө төҫтәге шарҙар, тауар, таҫтамалдар тағып биҙәлгән аттарҙа милли кейемдәге ҡыҙҙар, егеттәр килеп етә. Өмәселәр ҡаҙ сайҡаған ваҡытта, йәштәр боҙ өҫтөндә «Өс таған», «Ебегән», «Наза» уйындарын уйнайҙар. «Өс таған» бейеүендә өсәрләшеп бейейҙәр, ә «Ебегән» уйынында берәү уртала бейей, шунан берәйһенә барып баҫа, икәүләп бейегәс, икенсеһе өсөнсөһөнә барып баҫа, түңәрәк барлыҡҡа килә. Түңәрәктә таҡмаҡ әйтеп өйөрөләләр, ҡыҙҙар эстә түңәрәк яһайҙар, егеттәр — тышта:

— Һоп-па, һә-ти-тә...
Ҡыҙҙар эстә, беҙ тышта.
Ишек шаҡыйбыҙ тышта, —

тип, таҡмаҡ әйтеп бейегәндә, уйламаған ерҙә ҡапыл гармун туҡтай. Бейеү көйө туҡталыу менән егеттәр, ҡыҙҙар ишле-ишле етәкләшергә тейештәр. Ҡем яңғыҙы тороп ҡала, шул «ебегән» була. Ул яңғыҙы бейей башлай, икенсегә барып баҫа, тағы түңәрәк барлыҡҡа килеп уйын шулай дауам итә.

Эш бөткәс, күмәкләп клубҡа йыйылалар. Колхоз председателе бригаданың уңыштары тураһында һөйләй.

Оҫта хужабикәләр ҡул эштәренән күргәҙмә ойошторалар. Комиссия ағзалары күргәҙмәгә йомғаҡтар яһай. Ауылдың алдынғы эшсән ҡатын-ҡыҙҙарына, йәмәғәт эшендә актив ҡатнашыусыларға маҡтау грамоталары, бүләктәр тапшыралар.

Һуңынан ауыл йәштәре тарафынан концерт ҡуйыла. Унан инде төрлө милли уйындар китә.

Ҡискелеккә, өмә булған өйҙәргә килеп, ҡаҙ итенән ауыҙ итәләр.

Ҡыҙҙар ҡаҙ ҡауырһынының бер өлөшөн алып, йылға буйына китә. Ҡиске эңерҙә, ҡанаттарҙы йылға яры буйлап һирпәләр, теләк теләйҙәр: «Икенсе йылда ла ошолай ап-аҡ булып, йылға буйлап һирпелеп йөрөгөҙ, уңығыҙ!» Шунан йырҙар йырлап ҡайтып китәләр.

Ҡаҙ ҡыуыҡтарынан балаларға ҡыуыҡтар өрөп бирәләр. Улар ҡыуыҡ менән уйнап зыҡ ҡубалар, үҙҙәренсә күңел асалар.

**В**

Ҡыҙҙар йыйылған өйгә,
Ҡыҙҙар килгән өмәгә.
Һисек итеп ҡаҙ йолҡорға
Еңгәләрҙән күрмәгә.

Ҡаҙ өмәһе, ҡаҙ өмәһе,
Алдарҙа ҡаҙҙар ғына.
Ҡаҙ өмәһенә йыйыла
Гел уңған ҡыҙҙар ғына.

**Г**

Ҡөҙгө байлыҡ, көҙгө муллыҡ —
Ауылда ҡаҙ өмәһе.
Йәше-ҡарты, бала-саға —
Шау-гөр килә һәммәһе.
Ҡаҙ ҡанаты ҡаурый-ҡаурый,
Хаттар яҙырға ярай.
Уйнамағас та, көлмәгәс,
Был донъя ниңә ярай!

Өй эстәре мамыҡ ҡына,
Шатлыҡ тулы өй эсе.

Эй, өмәләр! Күңелдәргә
Байрам яһай йорт эше.
Ҡаҙ ҡанаты, ҡаҙ өмәһе
Йылдарына бер була.
Үҙе йырлы, үҙе моңло —
Ауыл шатлыҡҡа тула.

## Ғ

Беҙҙең Әлшәй яҡтарында ҡаҙ өмәһе ноябрь аҙаҡтарында үткәрелә. Өмәгә ҡыҙҙар, еңгәләр, егет-елән саҡырыла. Егеттәр ҡаҙ салып, йолҡоусыларға индереп тора, уларҙың башҡа йомош-юлдарын үтәй. Ә ҡыҙ-ҡырҡын өйҙә һике тирәләй ултырып, уртаға ҙур шаршау һалып, уның ос-остарын үҙҙәренә тартып, ныҡытып, салынған ҡаҙҙарҙы эшкәртә башлай. Йолҡоу эштәре бөткәс тә, ҡаҙ мамығын ала һалмайҙар. Һәр кем аяҡ-ҡулын мамыҡҡа тығып ала.

Беләгең һимеҙ булһын,
Күңелең наҙлы булһын,
Йортоң ҡаҙлы булһын,
Баҫығыҙ!

Шулай итһәң, аяҡ-ҡул һыҙлауһыҙ була.

Мамыҡ йыйылғас, ҡаҙҙы таҙалау башлана. Шунан һуң ҡыҙҙар, еңгәләр бер нисәшәр ҡаҙҙы көйәнтәгә элеп, йылға буйына төшәләр. Унда мәрәкә һүҙҙәр әйтешеп, шаярыша-шаярыша ҡаҙҙар һалҡын ағын һыуҙа сайҡатыла. Йылға буйы йыр-көлкөнән яңғырап тора.

Кисен өмә байрам, мәжлес төҫөн ала. Ҡаҙ ашына өмәлә ҡатнашыусылар бөтә ғаиләләре менән килә. Аштан һуң ҡаҙ майына бешерелгән ҡоймаҡ килтерелә. Ҡоймаҡты бөткәнсе ашау шарт. Сөнки, ашап бөтмәһәң, киләһе йыл ҡаҙ уңмай. Ашап бөтһәң, уңа. Мәжлес йыр, бейеү менән аралаш бара. Шунан, шау-гөр килеп, күмәкләшеп урамдан үтәләр.

## Д

Ҡаҙ йөнөн йолҡоп бөткәс, берәй оло әбей йә еңгә кеше ҡыҙҙарға: «Барығыҙ әле, бәхет ҡарап кәрәгеҙ!» — ти. Ҡыҙҙар ҡаҙҙың ҡойроҡ ҡаурыйын ҡулдарына йыйып тоталар ҙа берәм-берәм сығып китәләр. Урамға сыҡҡас:

— Ҡаурый, ҡаурый, ҡаурыйҡайым,
Ҡайҙа минең йәр-йәрем? —

тип һамаҡлай башлайҙар. Юлында кем тап була, шуға ҡарап һынайҙар: егет осраһа — йәш кейәүгә, ир уртаһы еткән кеше осраһа — ҡарт кейәүгә. Ҡатын кеше тап булһа — ҡыҙға ул: «Күҙҙән,

зәхмәттән һаҡлаһын», — тип ҡыҙыл мәрйен бүләк итә, осраусы әбей кеше булһа, ҡыҙ уға мамыҡ мендәр йә таҫтар бүләк итәсәген әйтә.

Ҡаҙҙарҙы йыуып алып ҡайтҡансы, оло әбейҙәр, теләк әйтеп, мөнәжәт көйләйҙәр.

Һыу буйында еңгәләр ҡаҙ ҡаурыйҙарындағы мамыҡты, һыҙырып алып, елгә осора:

— Ҡаҙ булып ҡайтығыҙ,
Ҡаҙ булып ҡайтығыҙ,
Ҡыр тултырып ятығыҙ,
Ҡыр тултырып ятығыҙ!

Шул һыҙырылған ҡауырыйҙарҙың йыуан яғынан бәләкәй генә ике ярыҡ эшләйҙәр ҙә остоҡ мамығы ҡалған нәҙек осона сиртеп, көй сығаралар. Ҡаурый ҡумыҙ көйө тиҙәр быныһын.

## 279. ҺУҒЫМ БАЙРАМЫ

### А

Хәҙергесә ноябрь бөтөп, декабрҙең ун биштәре еткәс тә, һуғым һуя башлай торғайнылар. Һуғым һуйыусылар үҙ-ара саҡырышып, ит ашашалар. Итте бүлгеләп ваҡламайынса эре көйөнсә һалып бешерәләр. Шунан уны киҫәкләп тотторалар. Хәҙер табаҡка йә тәрилкәгә тураған булалар.

Ит бешеп килгәндә, йоморолай көйө бәрәңге һалып бешерәләр. Шуны ит араһына турайҙар.

Һуғым ашағас, шулай тип теләк теләйҙәр:

— Малдарығыҙ күп булһын,
Малдарығыҙ нык уңһын!
Беҙ ашаған ерҙәргә,
Беҙҙең эскән ерҙәргә —
Хоҙай тәғәлә ишетһен —
Малығыҙҙы ишәйтһен!
Ғәйеп ризыҡ * бирһен,
Ғәйеп малдар бирһен!
Рәхмәт һыйығыҙға!

### Б

Һуғымды һуңыраҡ, ҡар ятып ныҡлы һыуыҡтар башланғас, ноябрь аҙаҡтарында һуялар. Һуғым һуйыуға хужаның туғандары һәм күрше-күләндәре саҡырыла. Ирҙәр малды йығып салғансы, ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнашмай, тик тиреһен һыҙырып бөткәс кенә, һуғым һуйған урынға баралар һәм эштең аҙағына тиклем ярҙам итәләр.

Һуғым һуйғанда, ярҙамлашҡан кешеләрҙе, туғандарын кис ашҡа йыялар. Халыҡ һуғымға күрше-күләндәрен дә ала. Бер ауыл халҡы өс-дүрт өлөшкә бүленеп, бер тиреләрәк йөрөй.

Һуғым итендә һәм шулай уҡ ҡаҙ өмәһендә итте турау эше осҡа ҡуллы кешегә бирелә. Иң тәүҙә һәр кешегә тултырманан өлөш тотторола. Тултырма һәр һуғым итендә булырға тейеш, әгәр хужабикә уны бешермәһә, ғәйеп итәләр (ялҡаулыҡта ғәйепләйҙәр).

Һуғым итендә шулай уҡ салыу һөйәген бешерәләр. Уны мал салған кешегә бирәләр.

Малдың ите йомшаҡ, татлы булһын өсөн тыныс, йомшаҡ күңелле кешенән салдырыу гәҙәте бар.

### В

Эйек, Һаҡмар йылғалары буйында таралған лапамит һыйышҡы байрамға инә. Уны мал һуйғанда ҡатнашҡан кешеләргә әҙерләйҙәр. Малды, ғәҙәттә, иртәнсәк һуялар. Ирҙәр сала, ҡатын-ҡыҙ эсәк йыуа. Ә кисен хужаға ҡунаҡҡа киләләр. Ул көндө хужа малдың төрлө урынынан һалып ит бешерә.

## 280. ИТ ТӘМЕ ӘЙТЕҮ

Мал салған көндө хужа ҡунаҡ йыя. Һәр кем алдына киҫәкләмә ит, тумалтай *, һөҙлөккә бешкән картуф, һөҙлөк ҡуйыла. Мал һуйған көндө малдың түшкә-муйынын һалалар. Хәҙер иттең тәмен татыйҙар. Ит тәме мал салған кешенең ҡулы ниндәй булыуға ҡарай. Ит ҡаты булһа: «Салыусының күңеле ҡаты», — тиҙәр. Ит йомшаҡ, татлы булһа: «Салыусы йомшаҡ күңелле, «татлы» ҡуллы кеше икән», — тиҙәр.

Һый башлана. Башта йырлайҙар, унан уйын, бейеү китә.

Ҡарттар «Буранбай», «Сибай» ,«Сахраларҙа» кеүек, әбейҙәр «Таштуғай», «Зөлхизә» кеүек йырҙарҙы башҡарыусан Йырсы ҡарттар хәҙер бөтөп бара инде. Әүәле Мөхәмәҙрәхим, Сәфәрғәле ағай мәрхүмдәр мәжлес йәме булып йөрөр ине.

Бейеүҙе ололар башлай. Һуңынан йәштәр алып китә. Ололар бейегәндә:

— Ана шулай өҙә баҫ!

— Әллә кемдең бабаһы! — тип дәртләндереп торалар.

Шунан йәнә ултырышалар. Ололар баштан үткәндәрен һөйләй. Уларҙың һөйләгәне йәштәргә һабаҡ биреү менән бер була.

## 281. БАШ ИТЕНӘ САҠЫРЫУ

Көҙ көнө һуғым һуйғас, малдың башы ҡәҙерләп элеп ҡуйыла Яҙға табан «баш итенә саҡырыу» йолаһы башлана. Һәр өйгә йөрөп, көн һайын баш ите ашайҙар. Баш ите ашағанда:

— Малың ишле булһын, малдың ҡото китмәһен! — тигән теләк теләйҙәр.

Баш һөйәген ташларға ярамай, ә ергә күмергә кәрәк. Ташлаһаң, малдың ҡото китә, тиҙәр.

### 282. БАШБАЙРАМ

Нөгөш йылғаһы буйы башҡорттарында мал һуйыу мәлендә башбайрам тигән йола бар. Унда айырыуса баш-тояҡтан бешерелгән ҡойҡа ашамлығы мотлаҡ һанала.

Баш-тояҡтан бешерелгән ҡойҡаны дерелдәк йә һерелдәк тип йөрөткән яҡтар бар.

### 283. МИР ҠОРБАНЫ* БАЙРАМЫ, МӘҮЛИТ БАЙРАМЫ

#### А

Мир ҡорбаны байрамы хәҙерге һабантуйға яҡын байрамдарҙың береһе булған. Волость кимәлендә үткән. Был байрамға ауыл һайын һәр өйҙән мал, бал, аҡса, таҫтамал, ситса киҫәге йыйыла. Йыйылған аҡсаға бик һимеҙ ат йә һыйыр алына. Байрам башланған көндө малды иң абруйлы кешеләр сала. Байрам һыу буйында ойошторолғанлыҡтан, яр буйына аҫмаҡлыҡтар, усаҡтар әҙерләнеп, ошонда ит бешә, самауырҙа сәй ҡайнай. Һәр кем үҙе менән туҫтаҡ, ҡалаҡ алып килә.

Төшкә тиклем мәжлес башлана: атта сабышыу, йүгереү, көрәшеү, ир-егеттәрҙең таҫыллығын, көсөн, һәләтлеген һынау уйындары башҡарыла. Балаларҙы ла ярыштыралар. Ололар ниндәй уйын уйнаһа, улар шуның бөтәһен дә башҡара. Һуңынан һебә бирелә, йәғни тантаналы рәүештә мир алдында отош бүләктәре тапшырыла.

Мир ҡорбаны байрамында ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнашмаған, тик ир-егеттәр, бала-сағалар ғына ҡатнашҡан.

Бындай йыйындарҙа иң беренсе етем балаларҙы ултыртып, туйғансы ашаталар. Һуңынан ғына ҡаҙан янына еңеүселәр, байрамда ҡатнашыусылар саҡырыла. Иң затлы өлөш һөйәктәре дәрәжәле, абруйлы кешеләргә, аҡһаҡалдарға тоттoрола.

Мир ҡорбаны тип шуға әйткәндәр: мир — халыҡ, ә ҡорбан — ҡан сығарып мал һуйыу.

Ҡорбан байрамы — дини байрамдарҙың иң ҙурыһы. Ул көндө хәле еткән ҡорбан сала. Ҡорбан салғанда, күмәкләшеп уның иөнөнә тотоналар. Шулай итһәң, теге донъяла Сират күперен, ошо ҡорбан малына йәбешеп сығырға була.

Дини байрамдарҙың иң ҙурҙарының береһе — Мәүлит байрамы, Мөхәммәт бәйғәмбәр тыуған көн. Ул саҡта ла мал һуйып, ҡорбан килтереп, бәйғәмбәр хөрмәтенә Ҡөрьәндән сүрәләр, аят уҡып, байрам итәләр.

Мәүлит байрамында шулай тип дәрт әйтәләр:

Шатланың беҙҙәр, шатланың һеҙҙәр,
Һәр кемгә шатлыҡ мәүлит айында.

Сафлыҡтар килде, хаҡлыҡтар килде,
Шатлыҡтар килде мәүлит айында.

Донъялағы бар мосолман
Ниңә шатланған был көн?
Сөнки хәҙрәти Мөхәммәт
Донъяға тыуған бөгөн.

Ҙур сәғәҙәт * килгән бөгөн,
Шуға һәр кем шатлана,
Сөнки бөгөн ҙур бәйғәмбәр
Килгән ошо донъяға.

Б

Малды салыр алдынан:

— Беҙ һине үҫтерҙек,
Ризыҡҡа еткерҙек,
Йәлләмәйсә һуябыҙ! —

тибеҙ. Салынасаҡ малдың башын ҡиблаға ҡаратып һалабыҙ.

В

Ҡорбанға салынған малдың ҡанын бер һауытҡа ағыҙып алып, һуңынан ергә күмәләр. Ҡорбан итенең һөйәктәрен ваҡламайҙар, быуын-быуын ҡырҡып ҡына алалар. Итен ашағас, һөйәктәрен йә короған ҡоҙоҡҡа, йә кеше аяғы баҫмаҫ ергә ташлайҙар.

Г

Ҡорбанға орғасы малды тәғәйенләйҙәр. Бәлә-ҡаза күрһәң, ҡорбан салып, ҡунаҡ йыйырға кәрәк. Ҡорбанға етемдәрҙе, ғәриптәрҙе саҡырғандар. Ҡорбан итенең һөйәген эткә бирергә ярамай. Башын хәйергә биргәндәр.

## 284. АҠ ҠОРБАН САЛЫУ

Кеше берәй ҡаза күрһә, ауыр хәлгә ҡалһа (хөкөмгә, әсирлеккә юлыҡһа һ. б.): «Ошо бәләнән ҡотолһам, аҡ ҡорбан салыр инем», — тип нәҙер (әйтеү) әйтә. Фарыз булмаған ҡорбан, ирекле ҡорбан булғанға ла, уны аҡ ҡорбан тип атағандар.

## 285. ӨЛӨШ

— Әсәйем һеҙҙе өлөшкә саҡырҙы, — тип берәй бала килеп әйтә икән, өлкәндәр аш ашарға саҡырыла тигән һүҙ.

Өлөшкә барғанда, кешеләр байрамса кейенә. Өлөшкә саҡырышыу — именлек, иркенлек билдәһе ул.

— Һин инде өлөшсө булырһың, — тип хужалар өлөшсө тәғәйенләгән, ҡалғандар:

— Алты һартҡа бер тартай,
Өләшә килә, ул да артҡай...
Өлөшсөгә — өс өйрәк, —

тип уны мәрәкәләп ала.

— Түҙгәнгә — түш,
Түҙмәгәнгә — кукиш! —

тигән булып алғас, өлөш бүлергә тотона.

Өлөш бүлгәндә, ҡунаҡҡа килеүселәр генә түгел, уларҙың өйөндә ҡалған балалар ҙа иҫәпкә алына. Табын таралған саҡта хужабикә өйҙә ҡалған балаларҙың өлөшөн ата-әсәләренә тотторол ҡайтара.

### 286. ҠОШ ИТЕ ӨЛӘШЕҮ

#### А

Ҡыҙҙарға — ҡанат,
Малайҙарға — аяҡ,
Хужаға — баш,
Ҡатынға — түш,
Ҡунаҡҡа — ҡойроҡ майы.

#### Б

Өлөшсөгә — өс өйрәк,
Күрөнәп дә күрөрәк.
Түҙгәнгә түш булыр,
Түҙмәгәндәр буш булыр.
Күҙ өҫтөндә ҡаш булыр —
Ир кешегә — баш булыр,
Ҡатынға — муйын тейер,
Ҡимереп туйын, тиер.
Ҡемдәр алыр ҡанатын? —
Ҡыҙҙар алыр ҡанатын.
Егеттәргә бот тейер:
«Бына һеҙгә бот», — тиер...

### 287. ҺУҒЫМ ИТЕ ӨЛӘШЕҮ

#### А

Буғана һөйәге — һуйыусыға,
Салыу һөйәге — салыусыға,

Орсоҡбашы — олоға,
Түҙемлегә түш тейер,
Түшен алған бер бейер.

Ураҡта саҡта түше менән ҡойроҡто шәп урған кешегә остайҙар *. Ағай кешегә — түш, ҡыҙыҡайға — ҡойроҡ. Баш һөйәген өлкән кешегә остатаһың. Ул баш итен сикәләп ҡырҡып, башҡаларға ауыҙ иттерә.

Б

Ҡош ите ете өлөшкә бүленә: ике бото, ике ҡанаты, муйыны, түше, һырты — һәр береһе бер өлөш.

Һарыҡ итен былай бүләләр:

Ете — бейек арҡа,
Ете — тәпәшәк арҡа,
Муйыны — етегә,
Һигеҙгүҙе — өскә,
Ҡойроҡ йәбешкән ере — бер өлөш,
Янбаш — ике өлөш,
Урта елек — ике өлөш,
Икенсе елек — ике өлөш.

Бәкәлсәйе-тояғы иҫәпкә инмәй. Бөтәһе — утыҙ бер өлөш. Ҡунаҡҡа түш һөйәге, билдәмәһе, унан янбашы, елек бирелә. Ул, бысаҡ алып, үҙенә тейгән өлөштө телгеләп, ҡырҡҡылап, башҡаларға һоғондора.

Йыйындарҙа, туйҙарҙа көрәшкән кешегә һебә (бығым) бирәләр.

В

Салыу һөйәге — салыусыға,
Янбаш булыр ҡыҙға,
Ҡейәү, улға — бейек үркәс,
Ҡилен, ҡыҙға — бәләкәй үркәс,
Баш һөйәге — башлауға,
Тулараһы * — ташлауға,
Һум иттәре — ашауға;
Ыштылығыҙ аш-һыуға!
Майын йотһаң — һимерерһең,
Һөйәк тотһаң — кимерерһең.
Һөйәктең ал ҙурыһын —
Електәрен һурырһың.
Быныһы була муйыны,
Ете була быуыны.
Ете быуын кемдеке?
Ала белһәң, — һинеке!

Алғы умыртҡа — өлөшлө,
Өлөшлө ҡул — килешле.
Артҡы умыртҡа — ун ике,
Ала белһәң — һинеке!..
Башын алыр атайың,
Ботон алыр ағайың,
Ҡарындашың — аяғын,
Еңгән алыр — тояғын.
Унан килә һигеҙгүҙ,
Һигеҙгүҙгә — һигеҙ һүҙ:
Һүҙ айышы — ырыуҙыр,
Ырыулы ил — ырыҫтыр;
Ырыулы ил — уҙғаны,
Ырыуһыҙ ил — туҙғаны,
Олоға юл бирерһең,
Кесегә ҡул бирерһең.
Оло күңелен һаҡла,
Кесе күңелен йыҡма!

## 288. ЙҮРМӘ БИРЕҮ

Элек өмәлә ҡатнашҡандарҙы һыйлап оҙатҡанда, ҙур яҡшы ит киҫәге бүләк итеп ҡайтара торған булғандар. Уны төрлө төбәктә төрлөсә атағандар: Дим буйында — йүрмә, Ҡыҙыл йылғаһы буйында — мөсә, Силәбе өлкәһендә ҡарсаға һөйәге, мозол, мосол, тип атағандар.

Ошондай ит өлөшө менән элек бәйгелә ҡатнашҡандарҙы бүләкләү ҙә булған. Унда, ғәҙәт буйынса, һарыҡтың тәүге ҡабырғаһы тәңгәлен еңеүсегә бүләк иткәндәр. Уны ла төрлө төбәктә төрлөсә атағандар: йәғни көньяҡ башҡорттарында ҫөбә, сөбә, дөбә, зебә, зобан ҡабырға, бағана ҡабырға һүҙҙәре ҡулланыла, көнсығыш башҡорттарында уны һебә, һөбә, бүкә, ҡулан ҡабырға, ҡарсаға һөйәге тип атағандар.

## 289. МАЛ ҺӨЙӘГЕНӘ БӘЙЛЕ ЫШАНЫУҘАР

1. Һуғым ашалғас, салыу һөйәген кәртә бағанаһына элеп ҡуйғандар. Ул малға ҡот, үрсем теләп тора.

2. Мал үрсеһен өсөн, ашығын биҙәп өйгә элгәндәр.

3. Бүре һуғыр (тубыҡ) һөйәге менән салыу һөйәгенә теш тигеҙмәй ашарға кәрәк. Әгәр теш тигеҙһәң, киләһе йылға малды бүре ҡыра, тиҙәр.

4. Кеше талаштырам тиһәң, малдың бүре һуғыр һөйәген шул кешенең өй башына ташлайҙар.

5. Берәйһенә йәнең көйөп тә, шуны белдерә алмай йөрөһәң, уға юрамал малдың бәкәлсәйен бешереп ашатаһың.

## 290. ӘҮЕН БУТҠАҺЫ

Башҡортостандың көнсығыш районларында Әүен бутҡаһы бешереү йолаһы бар. Ул бутҡаны ураҡ бөткәс, игене йыйып алынған урындарҙа бешергәндәр һәм ауылдың барлыҡ кешеләрен, ҡартын, йәшен һыйлағандар. Ул үҙе бер байрамға әүерелгән. Байрамда, килер йылдарҙа уңыштың мул булырын теләп, теләк әйткәндәр.

## 291. ҠУРМАС ҠУРЫУ

Көньяҡ башҡорттары ҡурмас ҡурыу йолаһы үткәрә. Иң яҡшы бойҙайҙан ғына ҙур ҡаҙанда майға ҡурмас ҡыҙҙыралар. Уның менән бөтә кешене һыйлайҙар. Һый күңел асыу менән тамамлана. Ҡурмас ҡурыу байрамы билдәле бер урында үткәрелер булған. Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районы Ейәнсура ауылы халҡы ҡурмас байрамы уҙғарған урын әле лә Ҡурмас тип йөрөтөлә.

## 292. НӘҪЕЛ-НӘСӘП

### А

Нәҫел-нәсәптең иң олоһо — халыҡ *(милләт)*. Ул үҙе ҡәбиләләрҙән *(оло ырыуҙарҙан)*, ҡәбилә ырыуҙарҙан *(кесе ырыуҙарҙан)*, ырыу араларҙан *(аймаҡ, түбә, тармыт, нәҫел, зат* һ. б.) тора.

Аралаштар (түбәләш, аймаҡташтар), ырыуҙаштар, ҡәбиләләштәрҙе туған-тыумаса, нәҫел-нәсәп, зат-зориат, ҡәрҙәш, ҡәрендәш, ағай-эне, нәҫелдәш, нәҫел-ырыу, туғандаш тип йөрөтәләр.

Һәр кемдең иң кәмендә ете быуынға тиклем үҙ затын, шул заттың, ырыуҙың батырҙарын, башҡа күренекле шәхестәрен, уларға бәйле риүәйәттәрҙе, йырҙарҙы, ҡобайырҙарҙы белеүе лазым булған.

Ете быуынға унан да күберәккә айырылғанды ете ят тигәндәр. Ете ятҡа айырылмағандар араһында никах гонаһ эш һаналған. Ете быуынға тиклем шулай билдәләнә.

А т а я ғ ы н а н:

ата(й) — ул(ы) — ейән(е) йәки тороно — бүлә(һе) йәки һаратаны — тыуар(ы) йәки туңаяғы — тыуаят — етеят.

Ә с ә я ғ ы н а н:

әсә(й), инәй, әни, әнкәй, әнәй — ҡыҙ(ы), — ейәнсәр(е) йәки тороно — бүлә(һе) йәки бүләсәре, һаратаны — тыуаса(ры), туңаяғы — тыуаят — ете ят.

## Б

Ҡалған ҡәрҙәштәрҙең аталыштары:

**Абзый, абый, ағай** — атай-әсәңдән кесе, һинән өлкән ир туғаның.

**Абышҡа, ир, бай(ым)** — ҡатын кешенең хәләле.

**Аҡ бабай, апа, бабай (олатай)** — ҙур олатай, — атаң-әсәңдән өлкән, олатайың менән өләсәйеңдән кесе ир туған.

**Апай, апый, апау (апа)** — һинән өлкән, ата-әсәңдән йәш ҡатын-ҡыҙ туғаның.

**Апһындар (апҫын, афын, абсын)** — килендәш, ағай-энеләрҙең ҡатындарының үҙ-ара ҡәрҙәшлеге (апҫын-еңгә, апсын-килен).

**Ата-баба** — боронғолар (предки).

**Бажалар** — бер туған (ҡәрҙәш) ҡыҙ тугандарҙың ирҙәре.

**Балдыҙ** — ҡатыныңдың һеңлеһе.

**Бей, абзый, бей ағай, ҡайнаға** — ир кешегә ҡатынынан (ҡатынға — иренән) өлкән, әммә ата-әсәһенән йәш ир туғаны булған кеше.

**Бейана (би анай), бейем, ҡәйнә, ҡайын инәй** — ҡатындың иренең әсәһе йә өләсәһе.

**Бейатай (би атай), ҡайны** — иренең атаһы.

**Бикәм, ҡайынбикә** — ҡатын кешегә иренең апаһы.

**Бикәс, ҡайынһеңле** — иренең һеңлеһе.

**Бисә, ҡатын, хәләл ефет** — ир кешенең ише.

**Дәү әни (Дәү әти)** — атай-әсәйеңдең апайы, еңгәһе.

**Дәү инәй, инәй, әбей** — атайыңдың (әсәйеңдең) апаһы.

**Ҙур бабай** — олатай, өләсәйҙән өлкән ир ҡәрҙәш.

**Ҙур бей атай** — ҡатын кешенең ҡайныһының атаһы.

**Ҙур ҡартатай (ҙур олатай)** — олатай һәм өләсәйҙең аталары йә ағайҙары, еҙнәләре.

**Ҙур ҡартинәй** — олатай һәм өләсәйҙең әсәләре, апайҙары, еңгәләре.

**Ҙур өләсәй** — әсәйҙең өләсәйе, апаһы, еңгәһе.

**Ефет, хәләл ефет** — үҙ ҡатының.

**Еҙнә, жиҙнә, жиҙнәй** — апайҙың ире.

**Икәтә, икәтәй** — ике туған ир туған (өлкәне лә, кесеһе лә) йә кесе ир туған да, ҡыҙ туған да.

**Йорсо** — иренең ҡустыһы.

**Йәнага(й), янаға(й), жанаға(й)** — иренең ҡустыһы йә икәтәһе.

**Ҡейәү** — ҡыҙың, һеңлең, ҡарындашың тейеш кешенең ире.

**Килен** — ҡустыңдың, улыңдың ҡатыны.

**Ҡинйә** (ҡыҙ йә ул) — иң кесе (төпсөк) бала.

**Көндәш** — бер ирҙең ҡатындары.

**Ҡәләш** — йәш ҡатын.

**Ҡайнаға** — ир (ҡатын) кеше өсөн ҡатынына (иренә) ағай булған кеше.

**Ҡайнбикә, ҡәйнбикә, ҡыйымбикә, ҡайембикә, ҡаймикә, ҡәмбикә** — ир (ҡатын) кеше өсөн ҡатынына (иренә) апай кеше.

**Ҡайнйеҙнә, ҡәйнйеҙнә** — иренең (ҡатынының) апаһының ире.

**Ҡайнйеңгә** — ирендең (ҡатыныңдың) еңгәһе.

**Ҡайны(м), ҡайнымәти, ҡайнәтәй** — иренең атаһы, олатаһы.

**Ҡаныш** — иренең иң кесе, йәш киленгә иң яҡын ҡарындашы (һеңлеһе).

**Ҡарсыҡ, әбей, ҡортҡа** — оло йәштәге ҡатын кеше.

**Ҡарт, бабай** — оло йәштәге ир кеше.

**Ҡарттай, ҡартатай, олатай** — атайҙың, әбейҙең атаһы, ирҙең (ҡатындың) атаһының атаһы.

**Ҡарындаш, ҡәрендәш, хәрендәш** — ағай кешенең үҙенән кесе ҡыҙ туғаны (туған-тыумасаһы).

**Ҡоҙа** — еҙнә, кейәү, еңгә, килендәрҙең, килендәштәрҙең, бажаларҙың атаһы, ағайы, ҡустыһы, ғөмүмән, ир туғаны.

**Ҡоҙағый** — ҡоҙа булған кешенең ҡатыны (бында йәштең әһәмиәте юҡ).

**Ҡоҙаса** — ҡоҙаларҙың ҡыҙы, апаһы, ҡарындашы, **кейәү**, еҙнәнең ҡарындашы, апаһы (бында ла йәштең әһәмиәте юҡ).

**Ҡусты, мырҙа, мыртый, эне(м)** — кесе ир туғаның.

**Ҡәйнеш, ҡайын эне, ҡәйнекәй** — ирҙең (ҡатындың) ҡустыһы.

**Ҡәрсәй, ҡарсәй, ҡәртәсәй, ҡартәсәй, өләсәй** — атайҙың (әсәйҙең) әсәһе, уның апаһы, еңгәһе, әсәһе, инәһе һ. б.

**Нағаса, ағасы, ағасай** — әсәһе яғынан ағай һәм уның улы, икенсе яҡҡа килен булып төшкән ҡыҙҙың ата йорто.

**Олинәй** — атайҙың өлкән ҡатыны.

**Олул** — иренең ҡустыларының өлкәне.

**Өйгеше, өй кеше** — ҡатын.

**Тыума** — никахһыҙ тыуған бала.

**Тәнәй** — ағай менән апайҙың иң кесе туғаны (кесе йәшендә).

**Үгәй атай** — әсәйҙең икенсе ире.

**Үгәй бала (ул, ҡыҙ)** — ҡатындың (йә ирҙең) эйәрсән балаһы үгәй атай (әсә) өсөн үгәй бала була.

**Һеңле, сеңле, сеңен, һеңде** — ҡатын-ҡыҙҙың кесе ҡыҙ туғаны.

**Әме, әмей, әмәй** — әсәй, ата-әсәйҙең апаһы, еңгәһе.

Йәштәр олоға юл бирә, ҡуш ҡуллап күрешә. Килендәр ҡайны, ҡайнаға, ҡәйнә (бейеме) алдында тартына. Ҡоҙа менән ҡоҙаса мәрәкәләшә, шаяра. Был эш хатта хуплана. Шуға ла: «Ҡоҙа менән ҡоҙаса шаярһа, мал уңа», — тигәндәр. Еҙнәй кеше балдыҙ, ҡәйнештәре менән мәрәкәләшә, шаяра, уйнай ала.

Борон: «Ярты еңгә — ҡәйнештеке», — тигәндәр. Йәғни ҙә, ағай үлеп, еңгәй ҡалһа, уны ҡәйнешенә никахлағандар. Мал-мөлкәте менән ата йортона ҡайтып китмәһен, икенсе кешегә сыҡмаһын, балалары етем булмаһын өсөн шулай иткәндәр. Шул сәбәптән ошондай йыр сыҡҡан:

Беҙ бәләкәй саҡтарҙа,
Һикереп мендек аттарға.
Ағай үлеп, еңгәй ҡалһа,
Ебәрмәнек яттарға.

### В

Һәр кем үҙ ырыуын башҡаларҙан айырыусы билдәләрҙе белергә тейеш, тигән боронғолар. Ундай билдәләргә ырыуҙың ораны, ҡошо, ағасы, тамғаһы инә.

Ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙың ораны — Тәңре, Дим буйы ҡыпсаҡтарыныҡы — Тоҡсаба, меңлеләрҙең — Байһоңғор, әйлеләрҙеке — Салауат.

Юрматы ырыуының төп тамғаһы — һәнәк тамға.

Бөрйәндеке — сүкеш тамға.

Үҫәргәндеке — әүернә тамға.

Түңгәүерҙеке, әйҙеке — ай тамға.

Табындыҡы — ҡапҡа тамға.

Тамъяндыҡы — ирәк тамға, дағa тамға.

Ҡыпсаҡтыҡы — һәнәк тамға һәм ҡапҡа тамға.

Ҡатайҙыҡы — сүкеш (балға) тамға.

Һалйыуыттыҡы — йәйә тамға.




Тамға мал-тыуарға (йылҡының янбашына көйҙөрөлөп), солоҡҡа, ҡорамалдарға һ. б. һуғыла, быуындан быуынға тапшырыла бара.

Ҡәбиләнең, ырыуҙың һәр тармағы төп тамғаға яңы һыҙат өҫтәгән йә улар яңы тамға алған.

## 293. УТ ҠҮРШЕ, ӘХИРӘТЛЕК ҺӘМ ҠИӘМӘТЛЕКТӘР

### А

Элекке ваҡытта кешеләрҙең шырпыһы булмаған. Саҡма сағып ут тапҡандар. Уттың оҫҡонон көлгә күмеп тора торған булғандар. Оҫҡон һүнһә, күршегә инеп, ут алғандар. Шулай ут бире-

шеп, ут алышып торған яҡын күршене ут күрше тип йөрөтөр булғандар. Ундай күршеңә, ниндәй йомошо менән инһә лә, ярҙам итеү фарыз иҫәпләнгән. Шунан ҡалған ул «күрше хаҡы — Тәңре хаҡы» тигән һүҙ. Халыҡ белгән: күршеңә изгелек итеү — Тәңрегә (иң өҫтәге Аллаға) изгелек итеү ул.

### Б

Әхирәт булышыу йолаһы таралған. Йәғни бер ҡыҙ үҙенә оҡшаған дуҫын ҡунаҡҡа саҡырып, уға бүләк биреп, уны әхирәт итә. Әхирәт булған ҡыҙ ризалығын белдереп, ҡаршы саҡыра һәм ул да бүләк бирә. Шулай итеп, улар мәңгелеккә әхирәт булып ҡалалар.

### В

Ата-әсәһе үлгән йә сит-ят ергә килгән кеше үҙе хөрмәт иткән оло йәштәге ҡатынды һәм ирҙе ҡунаҡҡа саҡырып, ҡиәмәтлек әсәй, ҡиәмәтлек атай булырға ризалыҡтарын һорай. Улар ризалыҡ бирһә, бүләкләп, бер-береһенә терәк-таяныс булырға һүҙ ҡуйышалар.

Ризалыҡ алған кеше, ҡиәмәтлек әсәһе менән ҡиәмәтлек атаһын үҙ әсәһе менән үҙ атаһылай күреп, уларға ҡул-ҡамыт итә, яҡлар ерҙә яҡлаша, кәңәшләшер саҡта кәңәшләшә. Ҡайғыһын да, шатлығын да улар менән уртаҡлаша. Ҡиәмәтлек ҡыҙ йә улдың балалары өсөн ҡиәмәтлек әсәй менән ҡиәмәтлек атай өләсәй менән олатай хоҡуғында була.

Яҡында йә бөтөнләй туғандары булмаған кеше ҡиәмәтлек апай менән ҡиәмәтлек ағай яһап алыу йолаһы ла бар.

## МӘЖЛЕС

(Ҡайһы бер үрнәктәр)

### 294. МӘЖЛЕС ТӘРТИБЕ

### А

Борон эске булмаған. Мәжлес йыйғанда, ҡымыҙ эскәндәр ҙә буҙа эскәндәр. Шунан инде буҙлап йырлашып, ҡурай уйнатып, бейешеп күңел асҡандар.

Рәхим итегеҙ түрҙән,
Ашап эсик, уйнап көлик,
Үлгәс, ҡайтмабыҙ гүрҙән.

Мәжлес ҡорғанда, табын һайын бер аяҡсы була. Мәжлесте асҡансы, иң әүәл ике кеше еҙ тас, еҙ ҡомған тотоп йөрөп, йылы

һыу менән ҡунаҡтарҙың ҡулын сайҙырта (аш ашағас тағы сайҙырта).

Табынға борон ирҙәр бер башҡа, ҡатындар бер башҡа ултырыр ине. Совет заманаһында ирҙәр менән ҡатындар ҡара-ҡаршы ултыра башланылар. Хәҙер инде, урындыҡтан өҫтәл артына күскәс, ишле-ишле ултырыу йолаһы керҙе.

### Б

Мәжлес йыйғанда, бейәһе булған ҡымыҙ менән һыйлар ине. Ҡымыҙ эсеп, ҡурай тартып, күңел асалар. Аяҡсы (көрәгәсе) ағас сүмес менән (тимер ҡашығаяҡта ризыҡтың бәрәкәте китә, тирҙәр ине) ағас туҫтаҡҡа (аяҡҡа) ҡымыҙ ҡойоп йырлап бирә:

— Көрәгәләре, һай кем, тулы икән,
Нисәү икән һауған бейәһе?
Бейәләрен һорап, ай, ништәйһең?
Йомарт, тиген, аш-һыу эйәһе.

Ҡымыҙ эскән һауытында һәр кем бер йотом ҡымыҙ ҡалдыра. Уны ергә һибәләр. Һипкәндә:

— Тамсы булып һибелһен,
Үгеҙ булып һимерһен! —

тиҙәр.

### В

Эскеһеҙ ҡунаҡ йыйыуға һыпы туйы тип әйтәләр. Ундай саҡта табында бәлеш булыуы шарт. Ул ашап бөтөрөлөргә тейеш.

## 295. ХУЖАНЫҢ ЙЫР БАҒЫШЛАУЫ

Йырла ғына тиһәгеҙ, йырлайым,
Йырламайса ғына, ҡыймайым.
Ай кеүектәй нурлы йөҙөгөҙҙө
Ҡарап та ғына һис тә туймайым.

Йырла ғына, йырла, тиһегеҙ ҙә —
Йырҙар тәсбих түгел Аллаға.
Һеҙ дуҫ-иштәремде оҡшатамын
Бохарала бешкән алмаға.

Ҡырҙан ғына килгән ҡыҙыл төлкө
Менеп кенә бара ҡаяға.
Уйнап та ғына көлөп ултырайыҡ,
Был хөрмәттәр китмәһен заяға.

Берғамыт̆кай * һыуы, әй тәрән һыу —
Аттарымды ҡайҙа эсерәйем.
Һыйҙар бөткәс, һеҙҙәр ҡайтып киткәс,
Оҙон төндө ни хәл кисерәйем?

Һәләүеккәй * буйын мин буйланым,
Күк үләнкәйҙәрен саң итеп,
Был йырҙарҙы һеҙгә бағышлаймын —
Һөйләрһегеҙ, үлгәс, дан итеп.

### 296. АЯҠСЫ

Йыйындарҙа, мәжлес ҡорғанда аяҡсы та эйенләйҙәр. Аяҡсы булған кеше хужа исеменән һүҙ йөрөтә. Табында ултырыусыларға ҡымыҙ ҡойоп, аяҡ * тоттора. Ҡымыҙ тотторғанда:

— Эсеп ебәр һалғанын —
Ырызыҡҡа яҙғанын.
Эсеп ебәрһәң һалғанын,
Баҫа йөрәк янғанын, —

тип йәки бүтән төрлө йырҙар йырлап, һамаҡ һамаҡлап, ҡеүәтләп, өгөтләп ултыра.

### 297. АЯҠСЫ ЙЫРҘАРЫ

**А**

Т а б ы н   х у ж а һ ы н а:

Ағиҙелкәйҙәрҙең аръяғында
Елә-саба килә күк юрға.
Алла бәхетеңде биргән икән —
Ғүмереңде бирһен күп йылға.

Ҡ у н а ҡ т а р ғ а:

Йылт-йылт итеп кенә йылтылдай,
Юлаусынан ҡалған ҡуҙ икән.
Мәж(е)лестәр йыйып ултырыуҙар
Бабайҙарҙан ҡалған йола икән.

Ерәнсәй ҙә менеп, еләп кейеп,
Йөрөһәң ине Урал буйлатып,
Көрәгәләр ҡойоп, тиң-тош йыйып,
Ултырайыҡ, ҡурай уйнатып.

Анау ғына яҡтан бераү килә,
Менгән икән аттың һәйбәтен.
Уйнап ҡына көлөп ултырайыҡ,
Һөйләмәйек кеше ғәйбәтен.

Б

Бейек кенә тауҙар, әй, йәнәшә,
Таш тәгәрләп килә тау аша.
Уйнап та көлөп ултырайыҡ,
Ғүмер ике килмәй йәнәшә.

## 298. ЙЫР БАШЛАУ

* * *

Ебәрәйек йырлап,
Китһен шырлап
Ыҙба буйлап...

* * *

Эй, дуҫтарым, йыр башлайым,
Күтәреп ебәрегеҙ.
Ауыр һүҙҙәр ишетһәгеҙ,
Үткәреп ебәрегеҙ.

* * *

Йырла ла ғына, тиеп һин һорайһың,
Йырсы ла ғына кеше мин түгел.
Йырламай ҙа тороп, йырлап эйһәм *,
Бик күп йырсыларҙан ким түгел *.

## 299. КӨРӘГӘ ЙЫРЫ

Эй ышайҙы, дуҫтар, ышайҙы,
Көрәгәләр төбө ҡыйшайҙы.
Көрәгәләр төбө ҡыйшайһа ла,
Табыр әле хужа шул шайҙы.

Бушаған көрәгәне яңынан тултырып килтергәндә, ҡунаҡтар:
— Көрәгә-ә! Көрәгә-ә!— тип ҡысҡыра. Йырсы йыр башлай:

— Көрәгә килә, көрәгә киләләү —
Нисә генә икән һауғандау бейәһе.
Ашайыҡ та, дуҫтар, эй, эсәйектәү,
Ҡыуанып та ҡалһын, шул, эйәһе.

## 300. МӘЖЛЕС ЙЫРҘАРЫ

А

Йырла ла йырла, тиһегеҙ,
Оялып торам бит ят өсөн.

Йырламаç та ерҙә йырлап торам
Һеҙ туғанҡайҙарым хаҡы өсөн.

Инйәр генә буйы, ай, өҙәрем,
Өҙәремгә ҡарап йөҙәрем.
Һеҙ, туғанҡайҙарым, иçкә төшһә,
Ни хәлдәрем итеп түҙәрем.

Б

Арҡа-арҡаларҙан, ай, килдеңме,
Туғай-туғайҙарҙан килдеңме?
Әллә һағынып, шул, ай, килдеңме,
Әллә күрең өсөн үк килдеңме?

Инйәр генә буйы туғай, туғай,
Туғайында һайрай бер турғай.
Шул турғай ҙа кеүек һайрар инем,
Тел асҡысы бирмәй шул бер Хоҙай.

В

Өçтәл аçҡайҙары, һай, дүрт тояҡ,
Өçтәл өçкәйҙәре сынаяҡ.
Беҙҙең ошолайҙау ултырғанды
Беләләү микән күршеләү, тирә-яҡ.
Беләләү микән, шул, ишетә лә микән,
Һиҙәләү микән, шул, күрше-тирә яҡ.
Эсеп тә сбәр ҡымыҙҙың һалғанын,
Бәлкем баçылыр йөрәгең янғаны *...

Г

Бүре тундар кейеп, бүртә ат менеп,
Бүре ҡыуа башҡорт балаһы.
Еләндәр үк кейеп, билен быуып,
Ҡунаҡ һыйлай ата балаһы.
Бейек кенә тауҙың, эй, башына,
Әллә кемдәр һалған конюшнай.
Егет яндарына егеттәр килә,
Уйнап көлөр өсөн нарушнай.
Егет кеше улай булырмы,
Егет кеше былай булырмы?
Егет кенә булып буй үçтергәс,
Бер уйнамай, көлмәй булырмы?
Асылы күлдә, һай кем, сабаҡ уйнай,
Ҡайҙа икән уның суртаны.
Килгәне лә бирле күҙ алмайым —
Һеҙ икәнһеҙ ирҙең солтаны.

Бесәндәр үк сапһаң, ай, таҡыр сап,
Күренеп кенә ҡалһын ҡабырсаҡ.
Ашаныҡ та эстек, уйнап-көлдөк,
Инде етте беҙгә ҡайтыр саҡ.

## 301. ХУЖАБИКӘНЕ МАҠТАП БЕЙЕТЕҮ

Айҙай ғынам,
Вайҙай ғынам,
Һары һандуғас ҡынам,
Ҡара ҡарлуғас ҡынам.
2 тапҡыр
Ҡәләмферең әсе икән,
Баҙыяның сөсө икән,
Сәйең баллы-татлы икән,
Бигерәк уңған зат икән.
Ынйы-мәрйен теш икән,
Ҡыйғас ҡара ҡаш икән,
Буйы зифа ҡош икән,
Бигерәк оҫта баҫ(а) икән.
Айҙай ғынам,
Вайҙай ғынам,
Ҡыйғас ҡара ҡашҡынам,
Аҫыл аҡыҡ ташҡынам.
2 тапҡыр
Ҡәләмферең әсе икән,
Баҙыяның сөсө икән,
Сәйең баллы-татлы икән,
Бигерәк уңған зат икән.
Ынйы-мәрйен теш икән,
Ҡыйғас ҡара ҡаш икән,
Буйы зифа ҡош икән,
Бигерәк оҫта баҫ(а) икән.
Айҙай ғынам,
Вайҙай ғынам.
Ал булып күренәһең,
Нур булып һибеләһең.
2 тапҡыр
Ҡәләмферең әсе икән,
Баҙыяның сөсө икән,
Сәйең баллы-татлы икән,
Бигерәк уңған зат икән.
Ынйы-мәрйен теш икән,
Ҡыйғас ҡара ҡаш икән,
Буйы зифа ҡош икән,
Бигерәк оҫта баҫ(а) икән.
Айҙай ғынам,
Вайҙай ғынам,
Аҡҡош булып йөҙәһең,
Үҙәгемде өҙәһең.
2 тапҡыр

Ҡәләмферең әсе икән,
Баҙыяның сөсө икән,
Сәйең баллы-татлы икән,
Бигерәк уңған зат икән.
Ынйы-мәрйен теш икән,
Ҡыйғас ҡара ҡаш икән,
Буйы зифа ҡош икән,
Бигерәк оҫта баҫ(а) икән.
Бигерәк оҫта баҫ(а) икән дә
Хайран ҡалалар икән.
Хайран ҡалалар икән дә
Уфтап яналар икән.
Уфтап яналар икән дә
Һуштан яҙалар икән.

### 302. БЕЙЕҮГӘ САҠЫРЫУ

#### А

Һик(е)реп төшөп бейемәгә
Таҡыр иҙәне кәрәк,
Таҡыр иҙән өҫтәренә
Саған табағы кәрәк.

Саған табаҡ өҫтәренә
Хөрмә емеше кәрәк.
Хөрмә емешен киҫергә
Алтын бәкеһе кәрәк.

Алтын бәке мән киҫергә
Ғалим-шәкерте кәрәк,
Ғалим-шәкерте эргәһенә
Ҡара ҡашлы ҡыҙ кәрәк.

Ҡара ҡашлы ҡыҙ ҡаршына
Булат көҙгөһө кәрәк.
Булат көҙгөһө быяла —
Ыуала ла сыуала.

#### Б

Шыуый-шыуый бейергә,
Шыма иҙән булһа ине.
Шыма иҙән өҫтәрендә
Быяла өҫтәл булһа ине.
Быяла өҫтәл өҫтәрендә
Син * тәрилкә булһа ине.

Син тәрилкә эстәрендә
Маилы ит тә булһа ине.
Майлы итте бүлергә,
Булат бысаҡ булһа ине.
Булат бысаҡ тоторға,
Батыр егет булһа ине
Батыр егет янында
Хур ҡыҙы ла булһа ине.
Хур ҡыҙының яғында
Аҡ сымылдыҡ булһа ине...

### 303. СӘЙ ЭСКӘНДӘ

Синдән генә килгән син-сынаяҡ,
Сылтыратмай ғына тотһаңсы!
Сәйҙәреңә тәңкә һалып бирәм,
Эсеп бөтөп, шуны алһаңсы!

### 304. БУҘА КӨРӘГӘҺЕН ЭСКӘНДӘ, ҺУРПА ЭСКӘНДӘ

#### А

Сәңке * ҡуштыр, буҙа бештер,
Ҡил эсәйек буҙаны.
Сапсағының төбө ялтыр
Һәм көмөштөр ҡаҙаны.

Ҡымыҙҙың әүәле — майҙа,
Ахыры — синтәбер айҙа,
Табылмаҫ ул әкрәп айҙа,
Эсәйек беҙ уны, әйҙә!

Буҙа затлы, буҙа татлы
Эсеп ебәр һин аны.
Эсеп ебәрһәң һин аны
Йәндәргә бар шифаһы.

#### Б

Сителеп тә кителеп йөрөй торғас,
Ҡилеп сыҡтыҡ бына уртаға.
Бал эскәндә, дуҫым, кем йырламай,
Һөнәрең булһа, йырла һурпаға.

### 305. ХУШ АЯҒЫН ТОТҠАНДА

#### А

Хоҙайҙың рәхмәте булһын,
Был өйҙәр нур менән тулһын!

Был мәжлесте йыйғандарға
Һигеҙ ожмах насип булһын!
Йәнем-тәнем менән һеҙгә
Доға ҡылам барығыҙға.
Именлек һәм сәләмәтлек
Бирһен Хоҙа тәнегеҙгә!
Ҡунаҡ булдыҡ өйөгөҙҙә,
Зекер әйттек түрегеҙҙә,
Нурҙар балҡый йөҙөгөҙҙә —
Яҡты булһын гүрегеҙ ҙә.
Уҡығандар, тыңлағандар
Ике йыһанда шат булһын.
Инеп йәннәт һарайына,
Йәһәннәмдән азат булһын.

Б

Бейек икән тауығыҙ,
Ҡаршы яуа ҡарығыҙ.
Бөгөн һеҙҙә ҡунаҡ булдыҡ,
Иртән беҙгә барығыҙ.

В

Рәхмәт инде: һыйланығыҙ,
Гел дә шулай ҡыланығыҙ!
Малдарығыҙ ныҡ уңһын,
Балдарығыҙ * күп булһын!

Г

Өйөгөҙгә кергәс тә,
Ҡараным түрегеҙгә,
Ашығыҙға, һыйығыҙға,
Рәхмәт үҙегеҙгә!

Ғ

Еләктәрҙе йыя-йыя,
Силәктәрем тулды инде.
Хуш, рәхмәт, хөрмәтеңә —
Күңелдәрем булды инде!





# ЙЫР БҮЛӘК ИТЕҮ, ӨГӨТ-НӘСИХӘТ

## 306. ИҪТӘЛЕККӘ ЙЫР БҮЛӘК ИТЕҮ ЙОЛАҺЫ

Яҡын күргән кешеңә иҫтәлеккә бүләк ҡалдырыу — борондан килгән йола ул. Бирәү: «Төҫөм итеп һаҡларһың», — тип тотоноп йөрөгән ҡәҙерле ҡоралын бирә, бирәү — тунын... Йыр ҙа — бүләк. «Йырым ҡалһын мине иҫләргә», — тип йыр бүләк итешеү ҙә бар ине.

### А

Ботороз * ауылы Ҡотлоәхмәт мулланың, кулак исемлегенә теркәлеп, Себергә китмәҫ борон, Йыһангир муллаға йырлағаны:

Һыуҙар ғына ағыр, таштар ҡалыр,
Таш араларына ҡом һалыр.
Ризыҡ яҙған икән — ирҙәр барыр,
Тупраҡ яҙған икән — баш ҡалыр.

Сәй-сәйнүккәй генә, эстәкәндең
Юйылмай ҙа уның буяуы.
Ҡәмселек тә менән юҡсыллыҡты
Белгертмәй ҙә ирҙең уяуы.

Билән генә тауҙың ай ҡалҡыуы —
Күгәреп тә күренә бик күп ер.
Гәүһәр, яҡут таштан ҡиммәт булды
Тиң-тош менән уйнап-көлгән ер.

Аҡ ябалаҡ ҡоштоң, ай, балаһы
Суҡ үләнкәйҙәрҙең төбөндә.
Күренә генә торған гонаһым юҡ,
Күрешербеҙ мәхшәр көнөндә.

Б

**Олатайымдың йырлағаны:**

Ерәнсәккәй атым килә, елә,
Ел бауырлап осҡан ҡош кеүек.
Йәшлектәге үткән ғүмерҙәрем
Йоҡолағы күргән төш кеүек.

Ағиҙелкәй алҡын, һыуы тулҡын,
Һыу тулҡынҡайҙары ҡаҡмаһын.
Кеше һүҙкәйҙәре кеше үлтерә,
Нахаҡтарҙан Хоҙай һаҡлаһын.

В

Беҙгә ҡарт Әхмәтйән хәлфә килеп төштө. Шунан «Ҡана мин һеҙгә йырлап күрһәтәйем», — тип ошо йырҙы йырлап ебәрҙе:

Әҙрәс бишмәт киң кәрәк,
Һөйгән йәрең тиң кәрәк.
Һөйгән йәрең тиңдән булһа,
Донъя малы ник кәрәк?!

Г

Үтәбай ауылының Әбеләхмәт исемле мулла ла булған. Шул мулланың йыры:

Алтын ғына туҫтаҡ — байҙарҙа,
Йоморо тояҡ тайҙар — баҙарҙа.
Әллә ҡайҙан килеп дусар булдым
Был хәтле лә йомарт байҙарға.

Ғ

Вәзәм * ауылы ҡарты Төхфәтулла Мусиндың йырлағаны:

Сәхрәләргә сығып күрһәң ине
Төрлө сәскәләрҙең атҡанын.
Әүлиәләр булһам, белер инем
Ризыҡтарҙың ҡайҙа яҙғанын.

Д

Ике лә генә турат парлап егеп
Йөрөһәң ине Һаҡмар буйлатып.
Көрәгәләр алып, тин-төш йыйып,
Ултырһаң ине ҡурай уйнатып.

### Ҙ

Армияға хеҙмәткә алынып, шунан туп-тура һуғышҡа ебәрелгән Ишмөхәмәт һалдаттың йырлағаны:

Ятмасәле, иркәм, яр ситенә,
Ҡәмәлеккәй ташып, һыу алыр.
Сисмәсәле сереҥ (һырын), дуҫың бик күп,
Ғәзиз башҡайҙарың сыуалыр.

## 307. ӨГӨТ-НӘСИХӘТ БИРЕҮ ЙОЛАҺЫ

Егет кешене ғәскәри хеҙмәткә оҙатҡанда, ҡыҙҙы кейәүгә биргәндә, бала-саға юлға сыҡҡанда, башҡа осраҡтарҙа ла йәштәргә ата-әсәләр, аҡһаҡалдар, ил инәләре өгөт-нәсихәт бирер, аҡыл өйрәтер булған.

### А

Эй балам, көнләшеүҙән, үҙ һүҙеңде генә һүҙ итеүҙән һаҡлан, сөнки ул — айырылышыуҙың асҡысы.

Күп әрләшеүҙән, даулашыуҙан, ирендең кәмселектәрен генә күреүҙән һаҡлан, сөнки ул, мөхәббәтте һүндереп, дошманлыҡҡа алып килә.

Үҙең һәр ваҡытта күҙеңә һөрмә тарт, сөнки ул — зиннәттәрҙең зиннәте.

Хушбуйҙың иң яҡшыһы — һыу. Йәғни һәр ваҡыт һыу менән йыуынып, пакланып йөрө, һинән тик тәбиғи еҫтәр генә сығып торһон.

### Б

Был заманда нәсихәт һүҙ һөйләмәйҙәр,
Мәжлестәргә һалҡын ҡараш булғанғамы?
Төрлө китап һүҙҙәрен дә һөйләмәйҙәр,
Тыңлаусылар ғәйеп итеп торғанғамы?
Өйгә керһәм, тышҡа сыҡһам, йәм таба алмайым,
Күңелдәргә төрлө фекер тулғанғамы?
Үҙебеҙҙә әҙәп, инсаф күтәрелмәй,
Әмре мәғриф менән мөнкир * бөткәнгәме?
Арабыҙҙа йәбер-золом бик күбәйҙе,
Ғалимдарҙы кәм-хурлыҡта тотҡанғамы?
Арабыҙҙа йәбер-золом бик күбәйҙе,
Мосолманлыҡ әшәрәте * бөткәнгәме?
Уғыздарҙа сәләмәтлек күтәрелде,
Намаҙ раза, гөсөлдәрҙе * ҡуйғанғамы?
Ризыҡтарҙа бәрәкәттәр күтәрелмәй,
Күңелебеҙ бик ҡарайып бөткәнгәме?

Хәйер, ихсан * бирһәләр ҙә, малы артмай,
Әллә риза булмай, биргәнгәме?
Белмим инде сәбәп ниҙән икәнлеген,
Сөннәт, фарыз ғәмәлдәрҙе * ҡуйғанғамы?
Ир һәм ҡатын ниңә тыныс тормайҙар,
Араларҙа ғәҙәт-никах бөткәнгәме?
Ирҙәрендә нимә өсөн ғәйрәт бөткән —
Сәс үҫтереп, ҡатын булып йөрөгәнгәме?
Ашағанда, бисмилланы әйтеүсе юҡ,
Ауыҙыбыҙға шайтан төкөрөп бөткәнгәме?
Йә, Хоҙай, рәхмәтендән мәхрүм ҡылма һин,
Ҡолондоң аҡ күгәрсендәй теләген тыңла һин.
Күңелебеҙҙә шул ҡәҙәр матур теләк.
Раббыбыҙ,
Пак иман менән тибә беҙҙең йөрәк.
Раббыбыҙ!
Мәңге нурлы, мәңге мәҡсум * булһа инде
күңелебеҙ!
Әкрен-әкрен, йәмле, һәйбәт үтһә ине ғүмеребеҙ!
Ит иждиһат, ҡыл тәүәккәл,
Тәңренән ҡөҙрәт һора.
Тау бейекме? Менә алмайһың,
Менә алһаң, мен тауға, мен,
Тауға мен һин, мен дә күр һин
Был донъябыҙҙың йәмен,
Йәки төшһәң, һин онотма,
Иҫеңдә тот иманың:
Кем яратҡан донъяны, һин яратҡан донъяны...

В

Ямандарҙан йыраҡ итһен,
Яҡшыларға яҡын итһен!
Шулай итеп ғүмер ит һин!
Үҙең — түрҙә бул һин,
Һүҙең — үрҙә булһын!
Тәүфиғың булһа, бәхет килер,
Булмаһа, барын алыр кире.
Күп йәшәгән ни белә —
Күп йөрөгән шул белә.
Күп йәшәгән күпте белә —
Әҙ йәшәгән ни белә?

Күп тә йәшә, күп тә күр,
Күпте күр ҙә, күпте бел!

Г

Ҡиәмәт етеүе тураһында бер изгенең әйткәне

Донъяларҙа йәмдәр бөтөр:
Халыҡ уңға, һулға китер,

Ата-әсәгә хөрмәт бөтөр,
Балаларҙан шәфҡәт китер,
Туғандарҙан рәхим бөтөр —
Бына шундай заман етер.
Дин турында уҡыу бөтөр,
Ғалимдарҙан салма китер
Бына шундай заман етер.

Ир-егеткә ҡәҙер бөтөр,
Ҡатын-ҡыҙҙан әҙәп китер,
Балаларҙан өмөт бөтөр,
Бына шундай заман етер.
Йоҡолары — нәүбәт булыр,
Хеҙмәттәре — сәғәт булыр,
Ризыҡтары — үлсәү булыр.
Биналары бейек булыр,
Эсе тулы йыһаз булыр.
Дин донъяһы боҙоҡ булыр, —
Бына шундай заман етер.

Ҙур-ҙур биналар һалырҙар,
Ашарға шунда барырҙар,
Эсендә ғауға кҮтәрерҙәр,
Ҡай берҙәре ғәйбәт һөйләр, —
Бына шундай заман етер.

Ир, ҡатындар хәмер эсер,
Төрлө уйындар ҡорорҙар,
Ислам дине юҡҡа китер,
Ҡафыр кейеме кейерҙәр,
Мине күрһендәр, тиерҙәр,
Тәгәмде баҫып ейерҙәр —
Бына шундай заман етер.
Баҙарҙары ла бик ҙур булыр,
Ямғырҙар ҙа һирәк яуыр,
Хәрәм эштәре фаш булыр —
Бына шундай заман етер.

Атаһыҙ бала күп булыр,
Фәхеш, зиналар күп булыр.
Мәсеттәрҙә уйын булыр —
Бына шундай заман булыр.

Хаҡ һүҙҙәргә ҡарышырҙар,
Күп һөйләр кеше күп булыр,
Дин эйәһе ғажиз * булыр —
Бына шундай заман килер.

Гонаһ икәнен белмәҫтәр,
Биш ваҡыт намаҙ ҡылмаҫтар,

Зәҡәт, фытыр * һис бирмәҫтәр —
Бына шундай заман етер.

Балалары түрә булыр,
Ҡатындары хужа булыр,
Ир заттары ҡолдар булыр —
Бына шундай заман етер.

Ҡеше ғәйебен асырҙар
Эштәре менән насарҙар,
Үҙҙәрен ҙурға ҡуйырҙар —
Бына шундай заман етер,

Ауыҙҙарында аш булыр.
Күҙҙәрендә ки йәш булыр,
Ҡулдарында эш булыр —
Бына шундай заман етер.

Әҙәмдәрҙең өҫтәрендә
Аллы-гөллө кейем булыр,
Берен һалыр, берен кейер, —
Бына шундай заман етер.

Ғалим кешеләр күп булыр,
Бигерәк ҙур эштә эшләрҙәр.
Хәрәм эштәре фаш булыр —
Бына шундай заман етер.

Һауа-ғәләмгә менерҙәр,
Төрлө хәлдәрҙе күрерҙәр,
Барса эштәрҙе белерҙәр —
Бына шундай заман етер.

F

Йәшлек үтеп, ҡартлыҡ көнө килә икән,
Тәнебеҙҙең ҡеүәттәре бөтә икән.
Был ҡартлыҡҡа ҡаршы тороп булмай икән,
Иң ауыр хәл ҡартлыҡ икән, эй туғандар!

Ризыҡ сәйнәргә тештәрең ҡалмай икән,
Йыраҡтан күрмәй икән күҙҙәрең дә,
Балаң ҡолаҡ һалмай икән һүҙҙәреңә,
Иң ауыр хәл ҡартлыҡ икән, эй туғандар!

Етмеш йәшкә етһә әгәр йәшең,
Ҡәрәк фекерен уйлай алмай икән башың,
Сәйнәй алмай икмәкте лә һинең тешең,
Иң ауыр хәл ҡартлыҡ икән, эй туғандар!

Ауыҙында һис бер тештең заты ҡалмаҫ,
Һис бер кемгә булышырға көсөң ҡалмаҫ,
Шул сәбәптән дуҫ-иштәрең бер ҙә булмаҫ,
Иң ауыр хәл ҡартлыҡ икән, эй туғандар!

Ҡолаҡтар ишетмәҫ, һаңғырау булыр,
Тешеңдең һөйәктәре һыҙлап торор,
Әйтер һүҙең әйтмәйенсә, ҡурҡып торор,
Иң ауыр хәл ҡартлыҡ икән, эй туғандар!

Ҡалмайҙыр тәнеңдә һис бер көсөң,
Ҡалмайҙыр йөҙөңдә һис бер төҫөң,
Кәңәшенә ҡатыштырмаҫ һис кеме лә,
Иң ауыр хәл ҡартлыҡ икән, эй туғандар!

Әгәр сырхау килер булһа тәндәреңә,
Кергән-сыҡҡан күҙен һалмаҫ хәлдәреңә,
Күптән ҡәбергә керергә ваҡыт, тиер,
Иң ауыр хәл ҡартлыҡ икән, эй туғандар!

* * *

Уйлап ҡына торһаң, ғәжәп донъя
Төрлө хәлдәр менән һуғара:
Кисә генә беҙҙең менән йөрөгән кеше
Арабыҙҙан кинәт юғала.
Ҡәбер тигән йыраҡ сәфәр,
Беҙгә лә бит унда барырға.
Берәү ҙә бит мәңге һыуын эсмәй,
Унда бармай, тороп ҡалырға.

## Д

Эй балам! Ҡулыңа китап алғас, Хоҙайҙан һора: «Эй Хоҙайым! Ошо китап эсендәген миңә төшөндөр!»

Аҡыллы кешенең һүҙе (ҡалай) татлы, яҡшы китаптың һүҙе унан да татлы.

Аҡыллы кешенең ҡашында гел генә тороп булмай, һәйбәт китапты туҡтамай үҙең менән тоторға була.

Боронғолар әйткән: «Яҡшы китаптағы һүҙ балдан да татлыраҡ!»

Эй балам! Йәштән уҡырға тырыш — ғүмерлек файҙа табырһың.

Уҡығанды, ҡайта-ҡайта уҡып, иҫеңә төшөр. Шулайтһаң, онотмаҫһың...

Балалар! Ата-инәгеҙҙең һүҙҙәрен күңелегеҙҙә тотоң! Хоҙай шуны бик ярата.

Атаһын хөрмәтләгән баланың теләге ҡабул була, ти.

## Ҙ

Өгөт биргел нәфсеңә,
Рәхим итеп үҙенә,
Ҡолаҡ һалып, һүҙемә —
　　Ғафил булма *, ғәзизем!
Аңлағандар мәғәнәһен
Ҡолаҡ һалып тыңлаһын,
Беҙгә доғалар ҡылһын —
　　Ғафил булма, ғәзизем!
Ғәзиздәргә ярҙам юҡ,
Был заманда фетнә күп,
Уяу ирҙәр бында юҡ —
　　Ғафил булма, ғәзизем!
Был донъяға инанма,
Ҡеүәтеңә таянма,
Дәүләтеңә ҡыуанма —
　　Ғафил булма, ғәзизем!
Фани булыр барыһы,
Зайығ * булыр ҡамысы *,
Файҙа ҡылмаç береһе —
　　Ғафил булма, ғәзизем!
Ышанма юҡ-барына,
Ҡыуаныс юҡ барына.
Таяныс юҡ һәреңә —
　　Ғафил булма, ғәзизем!
Илаһимдан теләгел *,
Әхирәт өсөн ғәмәл ҡыл *,
Әхирәтте баҡый * бел —
　　Ғафил булма, ғәзизем!
Әхирәттә яҡшылар
Төрлө шатлыҡ ҡылырҙар,
Ғазабынан көтөрҙәр —
　　Ғафил булма, ғәзизем!
Ғәзиз ғүмереӊ бәйәһен,
Уны һис бер белмәçһеӊ,
Һатып уны алмаçһыӊ —
　　Ғафил булма, ғәзизем!
Хәрәм, маҡрух * йыярһыӊ
Ғафил булып йөрөһәӊ,
Ғибәҙәттәр ҡылмаçһыӊ —
　　Ғафил булма, ғәзизем!

## Е

Нәсихәтем былдыр, туған,
Был ғәфләттән дәхи уян.
Бу әжәл кемдәрен ҡуйған,
Уҡыйыҡ намаҙ, уҡыйыҡ Ҡөрьән.

Был донъя фекерен ҡуйғыл,
Йөҙөңдә йәш илә * йыуғыл,
Бәхилне ҡыу, йомарт уғыл,
Уҡыйыҡ намаҙ, уҡыйыҡ Ҡөрьән.

Һин үҙеңдә кесе тотҡол,
Йөҙөңдә һин асыҡ тотҡол,
Асы телең сөсө тотҡол,
Уҡыйыҡ намаҙ, уҡыйыҡ Ҡөрьән.

Ғалимдарға хәлим * булғыл,
Ҡеселәргә рәхим ҡылғыл,
Йәтимдәргә шәфҡәт ҡылғыл,
Уҡыйыҡ намаҙ, уҡыйыҡ Ҡөрьән.

Был донъяға һин алданма,
Һиңә баҡый ҡалыр һанама,
Үҙеңде үҙең утҡа яҡма,
Уҡыйыҡ намаҙ, уҡыйыҡ Ҡөрьән.

Был донъя малылыр фани,
Был донъя дәү ҡадир фани *,
Ҡисәһе һәм көнө фани,
Уҡыйыҡ намаҙ, уҡыйыҡ Ҡөрьән.

Был ғүмерҙер аҡҡан һыу дик *,
Был ғүмерҙәр (аҡҡан) иҫкән ел дик,
Күренмәҫ бер көн дик,
Уҡыйыҡ намаҙ, уҡыйыҡ Ҡөрьән.

Һинең анда атаң юҡтыр,
Һинең анда анаң юҡтыр,
Уңың-һулың, туған, юҡтыр,
Уҡыйыҡ намаҙ, уҡыйыҡ Ҡөрьән.

Е

«Алла, Алла!» — тиһәгеҙ,
Ожмах ишеге асылыр
«Собханалла!» * — тиһәгеҙ,
Ете тамуғы ябылыр
(Гүрем эсе яҡтырыр).
Хәрси-хөрси баҫҡысы * —
Һигеҙ ожмах аҫҡысы.
Утлы суҡмарҙары бар —
Ғибәҙәтең алып бар.
Унда барғас, һорарҙар.
Ни яуаптар бирерһең?

Унығын беҙҙән һорама,
Үҙең барғас белерһең.

Алла, Алла, әй Алла!
Собханалла, йә, Алла!
Ожмахтарың асыҡ ҡыл,
Мине шунда хасил ҡыл!

Шулай тигел, әй, бәндә,
Йәнең барҙа тәнеңдә —
Соъал тотор көнөң бар,
Ҡилеп етер ул мәл дә.

Баҡый донъя — мәңгелек,
Эләгерһең бер килеп.
Фани донъяң ғәмәле —
Унда йәшәй әмәлең:

Яҡшылығың — яҡшыға.
Эйәрһәң һин шаҡшыға,
Өмөт итмәң йәннәткә:
«Мин гонаһһыҙ!» — тип әйтмә!

Тәнеңдә саҡта йәнең,
Белеп ҡал иман тәмен:
Изге булһын ҡылғаның,
Алла белер ҡалғанын.

Был донъялар — фаниҙыр,
Шуны, бәндәм, таный бел,
Нәсихәтем ҡабул ҡыл,
Күңелеңә һалыр бул!



## ҠӨЙЛӨ ХАТТАР, МИКРУТ * ЗАРЫ

### 308. ХАТ БАШЫ

А

Хат башы,
Яҙ ҡаршы!

Б

Иҫәнмеһеҙ, тиһәм, белерһеҙме
Кемдәр һеҙгә хаттар яҙғанын,
Һеҙгә һаулыҡ, сәләмәтлек һәм дә
Изге теләк теләп ҡалғанын?

В

Яратһаң, уҡып, баҡ,
Яратмаһаң, утҡа яҡ!
Ағиҙелдең аҡ ташы,
Һағынышлы хат башы,
Һағыныу түләге,
Күрешеү бүләге.
Иҫәнмеһеҙ,
Сәләм һеҙҙәргә —
Ҡара күҙҙәргә,
Ай-ҡояштай нурлы йөҙҙәргә!
Рөхсәт итегеҙ
Хаттар яҙырға...

Г

«Иҫәнмеһеҙ?» — тип башлайым,
Хат башы бит шулай башлана.

Һеҙҙең яҡтан хаттар килһә,
Уҡығанда, күңелем шатлана.
Сәләм һеҙгә таң-ел аша,
Сәләм һеҙгә осҡан ҡоштарҙан,
Сәләм һеҙгә саф йөрәктән,
Сәләм һеҙгә барлыҡ дуҫтарҙан...

### 309. КӨЙЛӨ ХАТТАР

#### А

Хаттар яҙам, дуҫым, һеҙгә,
Әгәр ҡабул итеп алһағыҙ;
Минең яҙған хатты алһағыҙ,
Яуап хаты яҙып һалһағыҙ.

Дуҫым, был хаттарҙы яҙған саҡта,
Яңғыҙ башым уйлап ултырҙым,
Шуның өсөн хаттарымды
Төрлө һүҙҙәр менән тултырҙым.

Ал һин минең ҡулъяҙмамды,
Шул ҡалһын минән бүләк;
Киләсәктә бул бәхетле —
Шул һиңә минән теләк!

#### Б

Һағынмаҡтан һары булды сырайым,
Ҡауышмаҡты насип итһен Хоҙайым.
Әгәр белһәң ине һағынғанымды,
Һинең өсөн күҙ йәшем ағыҙғанымды.
Һинең менән күрешмәктер морадым *,
Морадыма ирештерһен Хоҙайым.
Был хатымды ҡабул итеп ала күр,
Миңә лә бер-ике юл хат яҙа күр.
Уҡыһам мин мөбәрәк * һүҙҙәреңде,
Бер күргәндәй булырмын үҙҙәреңде.
Ялҡытһам да, яҙайым бер-ике юл,
Янып барған йөрәккә ял булыр ул,
Дәхи * ниҙәр яҙайым, бөттө һүҙем,
Йәш менән тулы минең ике күҙем.
Һүҙем бөттө һиңә, йәнем, етерме,
Был хат менән арала һүҙ бөтөрмө?
Хаталы хат хатаһын өрмә йөҙгә,
Хатанан хали * айырмаһын Хаҡ илә үҙгә.

Б

Сәләм һиңә Урал тауҙарынан —
Осһоҙ-ҡырыйһыҙ һиңә сәләмем;
Һәм шулай уҡ һиңә дуҫтарымдан
Ялҡынланған сәләм яҙамын.

Йөрәгемдән ҡайнар сәләм яҙам,
Ҡәләм алып көслө ҡулыма;
Һандуғасҡа бирәм был хатымды,
Илтеп бирер һинең ҡулыңа.

Сәләм яҙам мине белгәндәргә,
Айырып-айырып яҙып тормайым,
Шунда сәләмемдә туҡтатам да
Үҙ хәлеңде бер аҙ һорайым.

Дуҫым, һиңә хат яҙғанда,
Төрлө булды ҡаралар,
Һағынһаҡ та, юҡ саралар,
Йыраҡ булғас аралар.

### 310. ХАТ БӨТӨМӨ

Һауаларҙа мамыҡ оса,
Күгәрсен ҡағынғанда.
Туғандарым, хаттар яҙҙым,
Уҡырһығыҙ һағынғанда.
Бейек тауҙың баштарында
Илек тота алманым.
Телдәремә ни булды икән,
Хуш бул, тип әйтә алманым
Хаттар яҙҙым ултырып,
Аҡ ҡағыҙҙы тултырып.
Хатым китте, үҙем ҡалдым
Ҡазармала ултырып.

### 311. МИКРУТТАР ЗАРЫ

А

Батша сағында микруттарҙы һалдатҡа алыу өйҙән мәйет сыҡҡанға хисап булған. Микрут меҫкен, йорттан сыҡҡанда, бәхилләшеп китер булған. Микрутлыҡҡа алынғанда, шундай йола атҡарылған: китәһе егеттәр ауыл ҡарттары менән хушлашҡан, шунан, үҙҙәренең ҡайғыларын йырға һалып, урам буйлап йырлап уҙыр булған:

Беҙ ауылдан сыҡҡан саҡта,
Күтәрелде томандар.
Донъя хәлен белеп булмай, —
Бәхил булың, туғандар.

Һалдат итеп алдылар,
Билгә ҡайыш һалдылар.
Ағай-эне, туғандарым,
Тилмерешеп ҡалдылар.

Һалдат меҫкен поста тора,
Тар шинелен ябынып,
Һағынышлы хаттар яҙа,
Тыуған илен һағынып.

Б

Урамдарҙан үткән саҡта
Төштө аяғым соҡорға.
Беҙҙән ҡыҙҙар ҡалды инде
Аҡһаҡ менән һуҡырға.

Иртә тороп кәртә буйлап
Китеүҙәрем микән ни?
Шулай йәш ғүмерҙәремдең
Үтеүҙәре микән ни?

В

Беҙ китәбеҙ иртәгә лә,
Шинель һалып елкәгә.
Беҙ китмәҫ инек иртәгә,
Герман тейә теңкәгә.

Китергә тигәс, китергә, —
Ҡайтырбыҙ әле беҙ ҙә.
Беҙ киткәс тә, һау булығыҙ,
Туғандар, илебеҙҙә.

Г

Беҙ ултырған вагондарҙың
Тотҡалары еҙ генә.
Беҙҙең баштар йыраҡ китә —
Ҡайта алмабыҙ тиҙ генә.

Суйын сүлмәк ауыҙы тар —
Бешә һалдат аштары.
Ҡоштар осоп етмәҫ ергә
Китә һалдат баштары.

## 312. ХӘҘЕРГЕ ҺАЛДАТТАР ЗАРЫ

### А

Килеп еткәс вокзалға,
Командаға теҙҙеләр.
Йөҙ кешегә автобустың
Бәләкәйен birҙеләр.

Һәр кешенән берәр тәңкә
Хәйер тейҙе шоферға.
Ошо вокзалдарға ҡабат
Яҙһын ине ҡайтырға.

Өфө юлдары асфальт —
Машиналар елдерә.
Тонсоҡкансы тығылғанбыҙ —
Илата ла көлдөрә.

Боролоштоң уңында
Сборныйы күренде.
Егеттәрҙең күңеленә
Моңло уйҙар үрелде.

Эңер төшкән мәл ине,
Беҙ торабыҙ теҙелеп.
Рюкзагыбыҙ аҡтарылған
Дежурныйҙан тентелеп.

Сборныйҙың казармаһы
Ағас түгел, таш икән.
Ҡаҡ таҡталарҙа аунап,
Зар илаған баш икән.

Урындыҡтары яҫы —
Йөҙ кешене һыйҙыра.
Әфисәрҙәр кәрәкте биреп,
Иҙәндәрҙе йыуҙыра.

Прапорщиктар зыйлап йөрөй,
Һүгенә, баҡыралар —
Призывниктар Алланы
Ярҙамға саҡыралар.

Бал ҡортоноң күселәй,
Мыжғышалар малайҙар.
Кәрт-календарҙар һата
Телһеҙ зәғиф ағайҙар.

Призывниктың аштары —
Ҡыҫыр бәлеш, лимонад.

Рус егеттәре һүгенә:
«Как попали в этот ад?!»

Отбой сәғәт һигеҙҙә,
Йоҡлатырға һалалар.
Әгәр ҙә тороп ултырһаң,
Елкәгә бер һалалар.

Хырылдаған, һаташҡаны
Бында һанап бөткөһөҙ.
Мари, удмурт, мишәр, татар —
Йыйылышҡан төрлөбөҙ.

Армияға, төнөн килеп,
Тейәп алып китәләр.
Ҡалғандары, тилмерешеп,
Командирын көтәләр.

Плацҡа теҙеп ҡуялар
Ҡойма ямғыр аҫтына.
Алты сәғәт тә торһаң,
Туңып, шунда ҡатһаң да.

Киң Уралдың буйҙарында
Күбәләр тотһаң ине.
Армияға сборныйһыҙ
Туп-тура китһәң ине.

Б

Студент саҡ менән хушлашып өлгөрөр-өлгөрмәҫтән Тотскийға хәрби лагерға ебәрә торғайнылар. Йәнәһе, запас офицер итәләр. Бер көндө сборҙан ҡайттыҡ та, маршҡа баҫып кухня яғына барҙыҡ — аш әҙер түгел. Шунда бер саған төбөнә яттыҡ. Тәмәкеселәр тәмәке көйрәтә, тартмағандары гәп һата, кеме серем итә. Шулай ята инек, ҡурайсыбыҙ Юлай Ғәйнетдинов, себеп тотҡандай итеп: «Туҡта-туҡта!» — ти. «Ни булган?» — тип ҡараһаҡ — был бер көйҙө хәтеренә төшөргән, имеш. Бер көйләне был, ике. Шунан ни шунда ятҡан башҡорт, татар егеттәре теге көйгә һүҙ эҙләй башланыҡ. Бәйет килде лә сыҡты. Иртәгәһенә лагерға йыйылған бөтә башҡорт, татар егеттәре уны әйттереп йөрөйҙәр ине инде. Бына ул бәйет:

Йәйҙең йәмле көндәрендә
Тотскийҙа яттыҡ беҙ.
Тыуған илдәрҙе һағынып,
Йыр сығарҙыҡ үҙебеҙ.

Һөйгән ҡыҙҙар төшкә инә,
Ә өндә — старшина.

Сиратһыҙ нәрәттәр сәпәй —
Зәхмәт төшһөн башына!

Ҡарауылдарҙа торабыҙ,
Автоматты ҡосаҡлап.
Сәғәте — йыл, минуты — ай —
Ҡайтыр көндө хисаплап.

В

Ҡом бураны, ҡом бураны —
Беҙҙең ауыл урамы.
Беҙ киткәс тә, тыныр әле
Ауылдарҙың урамы.

Военкомат ишек алдын
Тапамам, тигән инем.
Өҙөлөп һөйгән ауылымды
Ташламам, тигән инем.

Военкомат ишек алдын
Тапарға тура килде —
Өҙөлөп һөйгән ауылды
Ташларға тура килде.

Алмабикә — алма бит тә,
Алмабиттәр ҡала бит.
Алма биттәр ҡалмаç ине —
Военкомат ала бит.

Военкомат янһа ине
Ҡомиссарҙары менән!
Армияға китһәң ине
Һөйгән йәрҙәрең менән.

Армияға барған инем,
Шинель кейермен тиеп —
Тишек шинель кейҙерҙеләр:
«Ямап кейерһең!» — тиеп.

Армияға барған инем,
Мылтыҡ атырмын тиеп —
Ағас мылтыҡ тотторҙолар,
«Ҡайтҡас атырһың!» — тиеп.



*Йыл мөсәле*



*Шүрәле*



*Ҡот ҡойоу*



*Ҡейәүҙең йыртыш йыртыуы*



*Һабантуйҙан бер күренеш*



*Баланы күрергә килеү*



*Айыуҙы солоҡтан биҙҙереү*



*Яусы килеүе*

# ҒАИЛӘ-КӨНКҮРЕШ ЙОЛАЛАРЫ

## СЕМЕЙНО-БЫТОВЫЕ ОБРЯДЫ

## AİLEDE ÖRF VE ADETLER

## FAMILY LIFE RITES



11 Заказ 761



## БАЛА БӘПЛӘҮ, БАЛА БАҒЫУ

### 313. БАЛА ТЕЛӘҮ

#### А

Ҡиленгә теләк теләгәндә йәки игелеге өсөн фатиха биргәндә, былай тиҙәр:

Ал итәгендә бала баҫһын,
Арт итәгендә мал баҫһын!

Бала-сағаң күп булһын,
Берәү түгел, йоп булһын,
Берәү түгел, йоп булһын да
Алдың тулы б...к булһын!

Йүгерә-йүгерә йөклө бул,
Бәпәйләгәс, һөтлө бул!

Ир бала тап,
Иркенләп ят!

#### Б

Эй Хоҙайым, бала бир:
Ул бир — уңған булайым,
Ҡыҙ бир, ишле булайым
Эй Хоҙайым, бала бир!

Һиңә ниҙәр ҡуяйым?
Һимеҙ тана һуяйым,
Эй Хоҙайым, бала бир!

Һорап, бала бирмәһәң,
Биргәнеңде ала бир!

## 314. БАЛАҒА УҘҒАН ҠАТЫНДАРҒА ТӘҒӘЙЕН ТЫЙЫУҘАР

Ауырлы ҡатындарға ҡәбергә барырға ярамай, сөнки аяғына ҡәбер тупрағы йәбешһә, баланың ғүмере ҡыҫҡа була йә үле тыуа.

Ауырлы ҡатындар мейес көлдөксәһенә ултырһа, бала «өс йәнле» булып тыуа.

Ауырлы сағында ҡатын бысаҡ ҡайраһа, бала киләсәктә мәсекәй (ашамһаҡ) була.

## 315. БАЛА ҠАРШЫЛАУ

### А

Бала тыуҙырыусының сәстәрен һүттерәһең, йөҙөктәрен, балдаҡ, беләҙектәрен систерәһең. Шулайтһаң, йәнәһе, ул еңелерәк тыуҙыра. Кендек инәһе итәген алдан бер ҡул менән бөрә тотоп, уны уңға, һулға һелтәй-һелтәй килеп инә лә:

— Уңын бир,
Йүнен бир!
Уңын бир,
Йүнен бир!
Уңын бир,
Йүнен бир! —

тип әйтә. Шунан ишеккә эстән бик һалалар. Өйҙәгеләр кендек инәһенә:

— Ниңә килдең? — тиҙәр. Ул:
— Тоҡ бушатмаға килдем, — ти.
— Ниңә килдең?
— Тоҡ бушатмаға.
— Ниңә килдең?
— Тоҡ бушатмаға.

Шулай өс тапҡыр һорап, өс тапҡыр яуап алалар.

Тулғаҡ ауырлашһа, кендек инәһе тоҡ бушата йә иһә тулғаҡ эйәһен таҫтамал аша атлата. Ҡатын тыуҙыра алмай ыҙаланһа, тәҙрәләрҙе асалар. Шунан уны кейеҙгә урап, иҙәнгә тәгәрләткәндәр, иренән өс ҡабат аша атлатҡандар.

### Б

Элек баланы өйҙә тапҡандар. Кендек инәйҙәре баланың кендеген атаһының йәки берәй күркәм ир кешенең аяҡ кейеменә һалып ҡырҡҡан. Имеш, бала шул аяҡ кейеме хужаһына оҡшап көслө, матур, батыр була.

Йәш бала менән әсә янына берәүҙе лә индермәйҙәр. Атай кеше, тупһа аша үтмәй генә, кендек инәһенә күлдәк әйтә. Аҙаҡ килгән кешеләр балаға бүләк индереп:

— Ата-инәһенә иш булһын! Матур, батыр булһын! — тип теләктәр әйтеп сығалар.

### В

Йөҙлөк (битлек) менән тыуһа, бала бәхетле була. Ир бала йөҙлөк менән тыуһа, йөҙлөгөн яғаһына тегеп куйғандар.

Һуңғылыҡты һәйбәтләп йыуып, йөҙө менән өҫкә ҡаратып, күмәләр. Аҫҡа ҡаратһаң, бала табыусының түле бөтә (һуңғылыҡты ике сәғәт буйы ҡараһаң да, түл бөтә).

Ҡатынды, баланы йыуындырған һыуҙы кеше йөрөмәҫ ергә генә түгәләр.

Тәүге һөттө мейес ҡултығына һалалар. Баланың ҡарын сәсен, киптереп, сәңгелдәгенә тағалар.

### Г

Хужаһының йортонда ҡыҙ бала тыуғанды эт яратмай, ти: «Ҡыҙ тыуҙы. Миңә ит ҡалдырмай, үҙе ашап бөтә инде!» — тип әйтә, ти.

Шуға ла ир бала тыуһа: «Их ҡына! Малай тыуҙы! Миңә лә итен кимерерлек һөйәк ҡалдырасаҡ!» — тип ҡыуана, ти.

Ир бала донъяға килгәндә, тау-таш тетрәп торор, ти: «Ах, беззең йөрәкте яра бит был!» — тип әйтер, ти.

## 316. ТУЛҒАҠ ТОТҠАНДА ӘЙТЕЛӘ ТОРҒАН ТЕЛӘКТӘР

### А

**Игез бала теләү**

Игеҙ бирһәң, тигеҙ бир:
Бере — һылыу, бере — ир.
Игеҙ имгәк һаналмай,
Ят күҙ менән ҡаралмай.

Игеҙ тыуһаң, тигеҙ тыу:
Бере — бикә, бере — ул.
Игеҙ табыу йортта бар,
Йортта түгел, затта бар.

Атаң тирләп мал табыр,
Тере иткәнен ҡоро итмәҫ,
Әсәң балдан һөт табыр,
Ҡисәгәйенде * ҡоротмаҫ.

### Б

**Яңғыҙ бала теләү**

Бирәү булһаң, бирәгәй бул,
Устан ашып, алға тул.
Һылыу булһаң, тыйыу бул,
Мырҙам булһаң, ҡыйыу бул.
Ҡыҙ булһаң, ҡыҫарҙан бул,
Ҡуш ҡуллап һуҙарҙан бул.
Ҡәпәс менән һуҡҡанда,
Йығылмаҫтан үрә тор.
Ул булһаң, уҙаман бул,
Устан ашып, алға тул.
Дуҫтарыңды күтәп ал,
Дошманыңды етеп ал.

## 317. КЕНДЕК ИНӘҺЕНЕҢ ТЕЛӘКТӘРЕ

### А

Туғыҙ айҙа тулғандың,
Туғыҙ көндә болғандың
Кендек инәң — мине бел,
Башың менән еңел кил.

Минең аяғым еңел,
Аяғымды талдырма.
Төн аштырып, ҡалдырма.
Бүтән инәй алдырма!

### Б

Тыу, бала, тыу, бала,
Әсәңә иш бул, бала.
Атаңа ҡуш бул, бала.
Өйгә бәхет бул, бала.

### В

Ҡотло булһын башың,
Имен-аман башҡаланыуың менән!

### Г

Уңын бир, уңын бир,
Һулын бирмә, уңын бир,
Минең ҡулым еңел ул,

Еңел генә килә бир,
Башың менән килә бир,
Барың менән килә бир!

Ғ

Аяғың менән килмә,
Башың менән кил,
Уңың менән кил!
Үҙ төйөнөңдө үҙең сис,
Үҙ һыуыңды үҙең кис,
Илаһым, рәхимеңде бир!
(Бала тыуа башлағас)
Башыңдан башҡа булаһың —
Иншалла, тыуаһың.

## 318. БАЛА ТЫУҒАС ӘЙТЕЛӘ ТОРҒАН ҺАМАҠТАР

### А

### Ир балаға

Балаһы бар — б...ғы бар,
Бер уҫлаптай улы бар.
Йылтыр-йылтыр күҙе бар,
Әҙәм төҫлө һыны бар.
    Тфү- тфү, б...ҡ икән,
    Маҡтар ере юҡ икән.
Толомдары ялбырап,
Ирендәре ҡалтырап,
Утыҙ икән балаһы,
Бала түгел, бәләһе.
    Тфү, тфү, күҙенә,
    Күҙ теймәһен үҙенә.

### Б

### Ҡыҙ балаға

Балаһы бар — б...ғы бар,
Бер ай һынлы ҡыҙы бар.
Йылтыр-йылтыр күҙе бар,
Бөтә кеше ҡыҙығыр.
    Тфү-тфү, буш икән,
    Ай һынлы түгел икән.
Балаһы бар — ҡыҙы бар,
Ҡыҙ тапҡан тип, даны бар,
Ҡыҙы барҙың наҙы бар,
Баса тире туны бар.

Тфү-тфү, назы юҡ,
Күз төшөрлөк ере юҡ.
Ҡызым, ҡызым, ҡыз кеше,
Ҡызыма килер йөз кеше.
Йөз кешенең араһынан
Алып китер бер кеше.
Тфү, тфү, остоҡ,
Кипкән сөрөк бер тоҡ!

B

Тыуған көнөндә үк баланы әсәһе менән бергә мунсаға алып баралар. Сабыйзы йыуындырғанда, кендек инәһе шулай тип һамаҡлай:

— Бәхетле, тәүфиҡлы бул,
Татлы телле бул!
Мунса ташы,
Бүрәнә башы,
Таштай, ныҡ бул,
Бүрәнәләй, бүкән бул!
Аталы-инәле,
Алтын ҡанатлы,
Һүззәрең өстөн,
Йөззәрең күркәм,
Ҡулдарың эшсән булһын!

Шулай тип сайындырғандан һуң: «Су-у-уп!» — тип, сабыйзың һырт буйынан аҡҡан һыузы ирендәре менән аҫтан өҫкә ҡарай һыпырып алып, ситкә төкөрә (шуны «Бала арҡаһынан йөн алыу» тизәр. Йәнәһе, баланың арҡаһы йөнлө була, уны «Бала йөнө» тизәр). Шунан әсәһенең һөтө менән баланың тәнен һыпыра.

Сабыйзы тәүге йыуындырғанда, йыуынтыға ете бөртөк тары һалалар. Икенсе йыуындырғанда — туғыз, унан — ун бер... Шулай итеп мунсала йыуындырған һайын ҡырҡ бергә тиклемге таҡ һанынса тары һалып сығалар. Был ырым баланың тарылай тәгәрәп, ырыҫлы, ғүмерле булып үсеүен теләүзе аңлата (ошо уҡ маҡсатта икенсе игенде лә ҡулланырға була).

## 319. БАЛАНЫ БЕР ТУҒАН АҒАҺЫНА, АПАҺЫНА КҮРҺӘТЕҮ

Бала тыуғас, уны ағаһына йә апаһына күрһәткәндә, йөзөнән элек аяғын күрһәтәләр. Шулай итһәң, улар татыу була. Өлкәне кесеһен йәберләмәй.

## 320. БАЛАНЫ ЕН-ШАЙТАНДАН, ЯМАН КҮЗЗӘН ҺАҠЛАУ

A

Бала тыуғас та, уны ен-шайтан алмаштырыуҙан һаҡларға кә-

рәк. Ҡырҡ көн үтмәйенсә, төндә утты һүндерергә ярамай. Баланы яңғыҙ ҡалдырып сыҡҡанда, өҫтөнә бысаҡ йә ҡамсы һалырға. Ен, шайтан бысаҡ менән ҡайсынан ҡурҡа.

Б

Бала тыуғас уҡ, уға иң тәүҙә «эт күлдәге» кейҙерәләр. «Эт күлдәгенең» еңе лә, итәге лә бөрөп тегелмәй, ә ике яҡ ҡырынан ғына тегелә.

«Эт күлдәге» кейҙерһәң, балаға ен, шайтан килмәй, йәнәһе.

В

Шайтан күлдәге төрлө (ете төрлө) ҡораманан тегелә. Ете төрлө ҡораманы өй һайын йөрөп йыйып алалар, шунан ҡоршап тегәләр.

Шайтан күлдәген, балаһы тыуып та, тормаған ҡатындарҙың яңы тыуған балаһына кейҙерәләр.

Күлдәктең матурлығына ҡыҙығып, шайтан балаға зыян итергә онота, ти.

Г

Был йола бала тыуып, өс көн үткәс тә үткәрелә. Тәүҙә майға ғына ҡоймаҡ ҡойола, шунан биш-алты йәшлек малайҙар саҡырыла. Ҡоймаҡты сәңгелдәккә бала эргәһенә һалалар. Малайҙар шул ҡоймаҡты алабыҙ тип, ҡулдарын һуҙһалар, сәңгелдәк эргәһендә ултырыусы әбей уларҙың ҡулдарына таяҡ менән «һуға». Малайҙар «илай».

— Инде тағы тейерһеңме? — тигән һорауға улар:

— Бүтән урламайым! — тип ҡысҡыра.

Күҙгә күренмәгән ен-бәрейҙәр уларҙың шулай ҡысҡырғандарын ишетә лә:

— Әһә, былар ҙы туҡмаған кеүек, беҙҙе лә туҡмар, — тип сәңгелдәккә килмәйҙәр.

Бәпәй сәңгелдәген «урлаусылар»ҙы аҙаҡтан ҡоймаҡ менән һыйлайҙар.

Ғ

Баланың ҡулына ҡыҙыл сепрәк бәйләп, маңлайына ҡором һөртөргә кәрәк, юғиһә, кешеләрҙең дә, ен-бәрейҙәрҙең дә күҙе тейә, бала сырхау була.

### 321. ҠАРЫН СӘСЕН АЛЫУ, ҠАШ ҺЫҘЫУ

А

Сабыйҙың сәсен тәүге алыу ҡарын сәсен алыу була. Уны телә-

һә кемдән түгел, күңеленә оҡшаған кешенән генә алдырырға кәрәк. Ғөсөл алып тороп, сабыйҙы ултыртып тотоп торaһың. Шунан сәс алыусы сабыйҙың сәсен ҡыра. Шунда әйтәһең инде: «Ҡыҙыма (улыма) — бер бәрәс!»

Сәсен алдырғас, балаға тумалатып, урап сәллә кеүегерәк итеп нәмә тегеп ҡуя торғайныҡ.

Б

Сабый сағында ҡарын сәсе алынмаған кешене рәнйетергә ярамай. Юҡһа, рәнйетеүсегә рәнйеше ҡаты төшә.

В

Ҡарын сәсе баланың ҡырҡы сыҡмаҫ элек алына. Баланың ата-әсәһе ҡарын сәсен алыусыға бүләк бирә. Ҡарын сәсен утҡа яғырға ярамай, уны төрөп, ҡыҫтырып ҡуялар. Шунан ҡарын сәсе сәйен эсәләр.

Г

Ҡашы матур үҫһен тип, сабый кешенең ҡашын көмөш тәңкә менән һыҙып сығалар: «Һыҙылып үҫһен, аҡ уйлы булһын!» — тип теләк теләйҙәр.

## 322. БАЛАНЫ КҮРЕРГӘ БАРЫУ

А

Балаға исем ҡушылғас, ҡатындар бала күрергә баралар. Бала күрергә барыуҙы беҙҙә «таныша барыу» тиҙәр. Таныша барғанда, ҡорот, май, бал, ит, баҫмаланған (аяҡланған) еп тотоп баралар.

Йәш балалы ҡатын, кешегә килеп, ҡайтырға булһа:

— Өйҙән ҡоро ауыҙ менән сыҡма, — тип, баланың ауыҙына бал, май яғалар.

Б

Бала тыуыу ғаиләгә ҙур шатлыҡ һәм бәхет алып килә. Әсәгә бөтә күрше-күләне тәмле аҙыҡтар, бәпес ҡоймағы йәки бәпәй ҡоймағы, бәпес бәлеше йәки бәпәй бәлеше килтерә. Был йола әсәгә һәм балаға һаулыҡ теләү маҡсатынан атҡарыла.

В

Баланың «ҡырҡы сыҡҡас» (тыуғандан һуң ҡырҡ көн үткәс) бәпәй туйы үткәрелә. Балаға бүләктәр бирәләр. «Инәһенә иш булһын, атаһына ҡуш булһын», — тип теләктәр әйтелә.

Ошо уҡ туйҙа исем ататыу ҙа үтергә мөмкин. Элегерәк мулла саҡыртып исем ҡушыла ине.

Г

Яңы тыуған балаға беренсе тапҡыр ризыҡ биргәндә, теләк теләйҙәр. Уны «Бала ауыҙландырыу» йолаһы тиҙәр. Шул ваҡытта былай тип һамаҡлайҙар:

— Атаңа шәфҡәтле бул,
Әсәңә ярҙамсы бул!
Атаңдан олоға, бабай, тиң,
Үҙеңдән олоға, ағай, тиң,
Әсәңдән олоға, инәй, тиң,
Үҙеңдән олоға, апай, тиң!

Ғ

Баланың ҡырҡы сыҡҡас, әбейҙәр йыйыла. Әсәй йә өләсәй кеше уларға сабый ебе йәки кендек ебе бирә. Ул, аяҡланып, осо төйөлгән була. Аяҡлы еп биреү — баланың тиҙерәк аяҡланыуын теләү, ололарҙан шуға фатиха һорау ул. Еп әбейҙәрҙең уң тубығына һалына. Епте алып, кеҫәләренә һалғанға тиклем, улар доға ҡылалар:
— Оҙон ғүмерле булһын!
— Тиҙерәк атлап китһен!
— Ата-әсәһенә изгелекле, илгә игелекле булһын!
— Тәүфиҡлы булһын!
— Бәхетле булһын! — тиҙәр.
Шунан күмәкләшеп, сәй эсәләр. Шуны еп сәйе (еп туйы) тиҙәр.

Д

Бала ауыҙландырғанда, бал, май ҡаптыра инек. Шул саҡ:

— Телең балдай татлы булһын,
Түрең майҙай йомшаҡ булһын! —

ти инек.

## 323. БАЛАҒА ИСЕМ ҠУШЫУ

### Йүргәк исеме

А

Бала тыуғас та, кендек инәһе тарафынан исем ҡушыла. Борон баланы исемһеҙ бер көн дә, хатта сәғәткә лә бишеккә һалыр-

ға ярамаған. Әммә исемһеҙ һалһаң, ен-бәрейҙәр алмаштыра, улар үҙҙәренең исемен ҡушып өлгөрәләр, ти. Был саҡта бала ла зәғиф була, йә үлә. Шуға күрә кендек инәһе баланы йүргәккә төрә лә: «Исемең шулай булһын!» — тип, ҡолағына ҡысҡырып әйтә. Был «йүргәк исеме» йәки «тәүге исеме» тип атала.

## Б

### Ысын исем

Ысын исем ҡушҡанда, борон мулла аҙан әйтә торғайны. Аҙан ҡысҡырғанда, сабыйҙың ҡолағына:

— Ата-инәңә шәфҡәтле бул,
Олоға кесе бул,
Кесегә оло бул.
Уң ҡолағыңа — аҙан,
Һул ҡолағыңа — исем! —

тиҙәр.

Балаға аҙан менән исем ҡуштырмаһаң, үлгәс, ата-инәһен танымай, ти.

Атаһы үлгәс тыуған малайға — Мираҫ, ҡыҙға Бүләк (Бүләкбикә) тип исем ҡушалар.

Тыуыу менән үлгән баланы исемһеҙ күмергә ярамай. Ҡыҙ булһа — Фатима, малай булһа — Абдулла тип исем ҡушалар. Шунан ғына ерләйҙәр.

Үлгән ағаһы (йә апаһы) тыуған көндә донъяға килгән балаға шуның исемен ҡушалар.

Йөҙлөк менән тыуған балаға Йөҙлөкбай (Йөҙлөкбикә) тип ат ҡуялар.

## В

### Эт исеме ҡушыу

Ҡайһы бер кешенең балаһы тормай: тыуып тора, үлеп тора, тыуып тора, үлеп тора. Быға ҡаршы шундай әмәл тапҡандар. Яңы тыуған баланы үҙ атаһы кендек инәһенән һатып ала, йә уны этаяҡҡа (эткә аш бирә торған һауытҡа) һалалар. Ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙың Фазулла тигән бер мәшһүр кешеһенең (ул беҙҙең олатай) бер ҙә балаһы тормай икән. Шунан бер ваҡыт улы тыуғас, уны кендек инәһе алып ҡайтып китә. Күпмелер торғас, теге яр һалып ҡысҡыра-ҡысҡыра кире килә.

— Малай һатам! Малай һатам! Кем ала? Бала һатам, кем ала?

Фазулла ҡарт тәҙрәһен аса була ла:

— Мин алам. Күпме тора? Бер баш ҡолонло бейә бирәм, бирерһенме? — ти була.

— Бирәм.

Шулайтып, үҙ балаһына үҙе хаҡ бесеп, тәҙрә аша һатып ала. Шунан аҙан әйтеп тороп:

— Исемең һатыбал булыр, — тип уға исем ҡушалар.

Әмәлгә ҡалғандай, шул бала йәшәп алып китә. Хәҙер ауылда беҙҙең урамда йәшәүселәрҙең күпселеге һатыбаловтар. Уларҙы һатыбалдар араһы тиҙәр.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Фазулла ҡарттың йәнә бер улы донъяға килә.

— Бынығын эт тә алмаç! — тип әйтте, ти, бабабыҙ.

Кендек инәһе сабыйҙы сепрәккә төргән дә этаяҡҡа һалған, ти. Эт килеп еçкәп, бер ялаған да киткән.

— Әйттем бит! Эт тә алманы! — тигән бабабыҙ. Шунан ни был улына Эталмаç тип исем ҡушҡандар. Бынығы ла йәшәп алып киткән Ул да үçеп, ир етеп, кәләш алып, бала-саға үçтереп, аҡ һаҡаллы ҡарт булып әхирәткә күскән.

Эталмаç ҡарттың затын әле лә эталмаçтар тип йөрөтәләр. Һатыбалдарға ҡарағанда, улар бик үрсемле булмаған: ике-өс йорттан уҙмаған. Яңы ғына күбәйешеп баралар. Эталмаç араһы Ҡотлоғәләмов, Әхмәтов тигән фамилиялар йөрөтә.

Ни эшләп үҙ балаһын үҙе һатып алғандар, ниңә баланы этаяҡҡа һалғандар тигәндә, уның мәғәнәһе былай. Һатып алғас, кеше балаһын алған була бит инде. Шуның менән үҙенә ҡаныҡҡан (үсләшкән) ен-бәрейҙәрҙе алдай була.

Ен, шайтан, бәрей кеүек заттар эттән ҡурҡа. Баланы этаяҡҡа һалғас, эт ялағас, уға эт еçе һеңә. Ен, шайтан, бәрейҙәргә эттең үҙе ни ҙә, еçе ни!

## 324. БАЛА ҺАТЫП АЛЫУ

### А

Әгәр бер ғаиләлә, ҡыҙ бала тыуып-тыуып, бер ир бала донъяға килһә, ғүмере оҙон, атаһына иш булһын, тип, тыуыу менән уны тәҙрә аша һатып алалар.

Баланы «һатҡанда», «һатыусы» (кендек инәһе) шулай тип һамаҡлай:

— Ергә һалдым — Ер алмай,
Күккә сөйҙөм — ҡош алмай,
Эткә һалдым — эт алмай,
Бала һатам, кем ала?
Бала һатам, кем ала?

А т а й  к е ш е:

— Бала һатһаң, мин алам,
Нимәһе менән һатаң?

«Һ а т ы у с ы»:

— Ғүмере менән һатам,
Бәхете менән һатам.

Атай кеше:

— Нимәһе менән һатаң?

«Һатыусы»:

— Ғүмере менән һатам,
Бәхете менән һатам.

Атай кеше:

— Нимәһе менән һатаң?

«Һатыусы»:

— Ғүмере менән һатам,
Бәхете менән һатам.

Атай кеше:

— Бала һатһаң, миңә һат,
Ғүмере менән бергә һат,
Бәхете менән бергә һат.
Һибәһенә * тун бирәм,
Уға ҡушып мал бирәм.

Шулай тип, үҙенең балаһын үҙе һатып ала. Ҡуяндағы (Нәби ауылындағы — Ә. С.) һатыбалдар атаһының олатаһы Һатыбал шулай һатып алынған.

## 325. «МИҢ»ЛЕ ИСЕМ

### А

Тыуған сағында, бала миңле булмаҫҡа ла мөмкин. Өс-дүрт аҙна үткәс, тәнендә ҡыҙыл миңдәр барлыҡҡа килә. Күберәк баланың маңлайында, елкәһендә, ҡолаҡ артында була. Миң аҙып (таралып) китмәһен өсөн, баланың исеменә «миң» һүҙе өҫтәйҙәр. Мәҫәлән: «Зилә» булһа — «Миңзилә», «Рауза» булһа, «Миңлерауза» тип йөрөтәләр. Ундай ике исемле кешеләр хәҙер ҙә күп. Өйҙәрендә бер төрлө, уҡыған йәки эшләгән ерҙәрендә икенсе төрлө исем йөрөтөүселәр ҙә бар.

### Б

Баланың күҙендә миңе булһа, мөрйәнән ҡысҡырғандар. Исеме Әнисә икән, ти. Ул саҡта мөрйәнән: «Исемең Миңлеәнисә булһын!» — тип ҡысҡыралар. Шулай итмәһәң, миңе аҙа, ти.

## 326. «ҒҮМЕРЛЕ» ИСЕМ

Балаға йәлсемәгән кешеләр, бала оҙон ғүмерле, сыҙамлы булһын өсөн исем ҡушҡанда, шул теләктәрҙе исемгә лә һалғандар:

Йәнғәле, Йәнебай, Ғүмерҙаҡ (Ғүмере оҙаҡ), Ғүмәр (Ғүмер), Йәнтимер, Тимерйән, Тимерғәле, Таштимер, Тимербикә, Йәнбикә.

### 327. УРТАҠ ИСЕМДӘР

Ен-шайтан алмаштырмаһын өсөн сабыйға (ул ҡыҙмы, малаймы — барыбер) Фәрүәз, Сәрүәр, Зөбәржәт, Йондоҙ, Алмаз кеүек исем ҡушалар. Ен йә шайтан килә лә:

— Был бала малай микән, ҡыҙ микән? — тип аптырай ҙа ҡала, ти (ишетмешсә, исемен белә бит инде). Шулай:

— Малай микән, ҡыҙ микән? — тип әҙәм балаһын ни үҙенең малайына, ни ҡыҙына алмаштырырға белмәй аптырап торған арала йә таң ата (таң атһа, ундай мәлғүндәр йөрөмәй), йә теге сабыйҙың бағыусыһы килеп етә.

### 328. ҮРСЕМ ТУҠТАТҠЫС ИСЕМДӘР

Әгәр ҙә берәйһенең балалары күбәйеп китһә, Туҡтабикә, Туҡтағол кеүек исемдәр ҡушырға кәрәк. Шунан ни башҡа бала булмай.

Исем ҡушҡас әйтелә торған һүҙҙәр:

Атын мин бирҙем,
Йәшен Алла бирһен.
Балаға исем ҡуштыҡ —
Донъя гиҙәһе генә ҡалды.

### 329. БАЛАҒА ИСЕМДЕ ЯҢЫСА ҠУШЫУ

Балаға исем ҡушыу йолаһы тантаналы рәүештә ауыл Советында йәки клубта үткәрелә. Был турала алдан уҡ бөтә халыҡ белеп тора. Сөнки матур итеп яҙылған белдереү эленә. Унда кемдәрҙең балаларына исем ҡушыласағы әйтелә.

Билдәләнгән көндө яңы тыуған балалары булған ата-әсәләр байрамға йыйыла. Улар менән яҡын туғандары ла була. Ҡыҙыҡһынған бүтәндәр ҙә ҡалмай.

Исем ҡушыу йолаһы атҡарыласаҡ зал матур итеп биҙәлгән. Унда «Балалар — беҙҙең киләсәгебеҙ», «Бала — бауыр ите», «Бала — тормош йәме» тигәнерәк һүҙҙәр яҙылып эленә. Өҫтәлдәрҙә ата-әсәләргә бала тәрбиәләү буйынса кәңәштәр яҙылған альбомдар, исемдәр китабы, күргәҙмә әсбабтар ята. Байрамды ойоштороусылар алдан уҡ ата-әсәләрҙең ниндәй исем һайлауын белеп, балаларҙың тыуыу тураһындағы танытмаларын тултырып ҡуйған була. Ауыл Советы бала исеменә һаҡлыҡ кассаһында иҫәп асылыуы тураһында танытма әҙерләй.

Алып барыусы кисәне аса. Пионерҙар ғәзиз әсәләр, сабыйҙар тураһында шиғырҙар һөйләй, йырҙар йырлай. Шунан ата-әсәләргә сәскәләр тапшыралар. Алып барыусы иҫтәлекле бүләктәр бирә,

альбомдар тапшыра. Унда атай кешегә, әсәгә, балаға изге теләктәр, кәңәштәр яҙылған була. Унан әсәйҙәр, өләсәйҙәр хаҡында йырҙар йырлана.

Балаға теләк теләгәндә, шулай тиҙәр:

— Бәхетле бул,
Аталы бул,
Әсәле бул,
Ғүмерле бул,
Тәүфиҡлы бул,
Сәләмәт бул,
Һары тешле,
Аҡ сәсле бул.

## 330. ИСЕМ ЯҢЫРТЫУ

Бала «ҡырҡы» сыҡмаç борон бик ныҡ илаһа, уны йә ауырый, йә исеме оҡшамай, тигәндәр. Баланы өшкөртөп, «бетеү» яҙҙырып алғандар ҙа, шуны түшенә ҡаҙағандар. Унан һуң да илауынан туҡтамаһа, исемен алмаштырғандар. Ҡабаттан исем ҡушҡандар.

## 331. ТУЛҒАҠ СӘЙЕ

Был йола бала тыуғас уҡ үткәрелә.

Яңы тыуған баланы күрергә күрше-күлән, туғаң-тыумаса йыйыла. Улар баланы хөрмәтләү йөҙөнән үҙҙәре менән бергә һөт, ҡатыҡ, тауыҡ һурпаһы, талҡан һ. б. ризыҡтар алып киләләр. Бала янында «тулғаҡ сәйе» эсәләр, әсәгә һәм балаға һаулыҡ теләйҙәр.

## 332. ТЕШ ТУЙЛАУ

Был йола балаға алты-ете ай тирәһендә, уның тәүге теше сыҡҡас, үткәрелә. Әсә кеше «тулғаҡ сәйе»нә килеүселәрҙең бөтәһен дә саҡыра. Теш туйларға килеүселәр балаға ла, әсәһенә лә, кендек инәһенә лә бүләктәр алып килә:

— Тешең теш кеүек булһын,
Тимер шеш кеүек булһын, —

тип сабыйға теләк теләйҙәр.

## 333. ТЕЛ ҠИЛТЕРЕҮ, ИР БАЛАНЫ СӨННӘТКӘ УЛТЫРТЫУ, ДАЛ-ДАЛ ИТЕҮ

### А

Бәләкәй балалар, ғәҙәттә, тиҙ генә һөйләшеп китә алмай. Теле асылмаған баланы шулай тип йыуатҡандар:

— Бына тағы яҙ килер,
Балама тел әпкилер
Ҡоштар йылы яҡтарҙан,
Ер таҙарғас аҡ ҡарҙан.

### Б

Ир баланы сөннәтләү — изге эш, бәйғәмбәрҙәрҙән ҡалған йола. Малайҙарҙы ике, дүрт, алты йәштә сөннәткә бирәләр. Йәшенең шулай йоп булыуы шарт. Сөннәткә алып барғанда:

— Бабай килә, бабасы килә. Күгәрсен, ҡуян алып килә!

— Баба * килә, барҡылдаҡ ат килтерә, — тип баланы алдаштыралар.

Сөннәткә ултыртыусы 99-сы йә 101-се малайҙың йән еренә ҡыл урап китә имеш, тиҙәр. Шуға ла һаҡлана торғандар ине. Бының өсөн сөннәтләнгән баланы тоноҡ һыуға ултырталар — ҡыл тарала.

Сөннәт баланың ысын ир затынан булыуын күрһәтә. Мыйыҡ, һаҡал йөрөтөүҙең дә мәғәнәһен шулай аңлаталар. Һаҡал, мыйыҡ үҫтермәгән ир теге донъяла ҡатын сифатында булыр, тигән ти. Тик шуныһы: ир-ат ҡырҡ йәшкә тиклем мыйыҡ ҡына ебәрә ала, ҡырҡтан һуң — һаҡал үҫтерергә лә ихтыяр.

Ҡатын-ҡыҙ сөннәте — ҡолаҡ тишеү. Сөннәтһеҙ ҡатын-ҡыҙ ҡолағынан теге донъяла йылан үтә, ти.

### В

Дим буйы башҡорттарында баланы «дал-дал» иттереү йолаһы бар. Ашап бөткәс тә, баланы һул ҡулының усына уң ҡулының һуҡ бармағы менән төртә-төртә:

— Дал-дал-дал,
Дал-дал-дал,
Дал-дал-дал! —

тип әйтергә, шунан әпәр итергә өйрәтәләр. «Дал-дал итеү» сабый өсөн үҙенә күрә доғаны алмаштырған.

### Г

Дал-дал иткәндә, баланың һул ҡулының усы менән уң һуҡ бармағы ғәрәптең «д» хәрефен — «дал»ды (د) хәтерләтә. Дим буйы ҡыпсаҡтарының бер төркөмөнөң тамғаһы — «дал-тамға» (ҡара: 294-се бит). Шулай итеп «дал-дал» итеүсе бала, һөйләшә белмәһә лә, исем-атын әйтә алмаһа ла, затын әйтеп ултырыр булған. Борон күсмә тормош менән көн иткәндә, яулыҡтар заманында, бала юғала ҡалһа, «дал-дал» итеүенән уның ҡайһы ырыу, араныҡы булыуын белә алғандар. «Дал-дал» итеү аҙаҡ баланы әүрәтеү, мауыҡтырыу сараһы булып киткән.

## 334. БАЛА ҺӨЙГӘНДӘ ӘЙТЕЛӘ ТОРҒАН ҺАМАҠТАР

Әнкәһенең ниһе бы* ?
Йөрәгенең башы бы.
Әнкәһенең ниһе бы?
Күҙ өҫтөндә ҡашы бы.
Әбеһенең ниһе бы?
Йәшел башлы таяғы.
Апайының ниһе бы?
Пар көйәнтә силәге.

Тыпыр-тыпыр тыплаһын,
Умартаһы меңләһен,
Һарыҡтары йөҙләһен,
Ярғыстары * ярһын,
Тирмәндәре тартһын,
Киләләре төйһөн,
Кәләше бик һөйһөн.

Дең-дең, дең һары,
Атаһылай һап-һары.
Һары булһа ла ярайһы,
Ҡараны ҡайҙан алаһы.

## 335. БАЛА ҺИКЕРТЕҮ

### А

Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Бигерәк матур бәпес тә.
Кем ҡарамай, кем һоҡланмай,
Бындай матур бәпескә.

Һәтес, һәтескенәһе,
Кемдең бәпескенәһе?
Кемдең булһын, ҡулдарында
Бейетеп тора инәһе.

Һоп-һоп көлә лә,
Матур итеп көлә лә.
Матур итеп көләүҙәре
Үҙәгемде өҙә лә.

Ҡара, ҡара, атаһы,
Ҡара, ҡалай талпына.
Талпынып та, йылмайып та
Һөймәç ерҙән һөйзөрә.

Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Һөйөргә бик йәтеш тә.
Ҡүтәсе бар, күмәсе бар,
Торғаны бер фәрештә.

Б

Тыңғыл-тыңғыл бәпәйем,
Тыңғылдатып һөйәйем.
Өй артында бүре бар,
Йылтыр-йылтыр күҙе бар.
Һыйыр һауған ҡашҡа бар,
Сеүәтәңде тотоп бар,
Күбек һөҙөп бирәйем,
Аны эсеп бөтмәһәң
Артыңа сыбыҡ бирәйем.

В

Ат итә лә, һат итә,
Бармаҡтары сат итә.
Ат итә лә, һат итә
Бармаҡтары сат итә.

## 336. ИР БАЛАНЫ ҺИКЕРТЕҮ

А

Шыманан да йүгергән,
Таҡырҙан да йүгергән,
Шаҙра битле ҡыҙ күргән,
Ҡаҡырған да төкөргән.
Шыма битле ҡыҙ күргән,
Йүгереп барып еткән.
Ас биленән тотҡан,
Суп иттереп үпкән.

Б

Атай, миңә сарыҡ тектер,
Тауҙан тауға шыуырға,
Атай, миңә кәләш эпир,
Ике имсәген ыуырға.
Атам миңә ат эпирҙе:
«Эйәрлә лә сап, — тине, —
Матур ҡыҙҙар ос(о)раһа,
Ҡосаҡла ла ят!» — тине.

## 337. ҠЫҘ БАЛАНЫ ҺИҠЕРТЕҮ

### А

Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше —
Алама тунды *, ала атты *
Алып китер бер кеше.
Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Бәләкәй генә бәпес тә,
Ҡашы ҡара, буйы зифа —
Ҡойоп ҡуйған кәртешкә.

### Б

Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше,
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше.
Йөҙ кешегә бирмәмен,
Алып китер бер кеше.

Ҡыҙы барҙың наҙы бар,
Ҡәртә тулы малы бар.
Ҡыҙы юҡтың наҙы юҡ,
Ҡаты тиртуны * ла юҡ.
Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше,
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше...

### В

Ҡыҙы, ҡыҙы, ҡыҙы бар,
Ҡыҙы барҙың наҙы бар.
Ҡыҙы юҡтың наҙы юҡ,
Баса тундары ла юҡ.

Тира-тира, тиратай,
Тиҙ кейәүгә бир, атай.
Тиҙ кейәүгә бирмәһәң,
Ҡөтәсәккә бир, атай!

Атаһының ниһе был?
Алтын эйәр ҡашы был.
Инәһенең ниһе был?
Яулығының аҡлығы,
Тамағының туҡлығы,
Шәлдәренең суҡлығы,
Һыуһағанда, ҡымыҙы ла,
Иреккәндә *, ҡумыҙы.

## 338. БИШЕК ЙЫРЗАРЫ

### А

Бәү-бәү, бәли-бәү,
Таһир йоҡоға китер.
Таһир йоҡоға китмәһә,
Айыу ашар ҙа китер.
Әлли-бәлли итер ул.
Әлли-бәлли итер ул.
Атаһына, әсәһенә
Тоғро хеҙмәт итер ул.
Тегер-тегер йөрөһөн,
Дегәнәк быға теймәһен,
Күп кешеләр быны һөйһөн —
Күҙ ҙа быға теймәһен.

Улым, улым, уламан,
Улыма мин ҡыҙ алам.
Унын күңеле була ла,
Минең киленем була.

Атаһы-дегет силәге,
Әсәһе — күмер силәге.
Унан тыуған балаһы —
Бешкән ҡурай еләге!

### Б

Бәлли-бәлли бәү итер,
Бәү итмәһә, ни итер?
Минең улым үҫкән инде
Марсҡа осоп китер.

Марс ҡыҙы алып ҡайтыр
Кәләш итеп үҙенә.
Марс ҡыҙы уңған булыр,
Һыу килтерер үҙемә.

Бәлли-бәлли бәү итер,
Бәү итмәһә ни итер?
Минең улым үҫкән инде,
Тороп мәктәпкә китер.

Йоҡла, балам, йом күҙең.
Тыңла әсәйең һүҙен.
Баш тарайһым бар ине,
Һинән бушамай үҙем.

Туҙғылаған сәстәремде
Ҡасан тарармын икән?
Үҫеп еткәс, кәләш алғас,
Мине ҡарарһың микән?

**В**

Әлли-бәлли бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әңкәһе?
Урмандарға еләккә,
Бәләкәскә бүләккә.
Әлли-бәлли итер ул,
Йоҡлап ҡына китер ул.
Үҫеп кенә китер ул да,
Бик ҙур кеше булыр ул.
Әлли-бәлли итер ул,
Батыр егет булыр ул,
Ут күҙенән ҡуҙ төшөрөп,
Ут төшөрөп торор ул.

Бәү-бәү-бәү генә,
Булыр әле дәү генә.
Булыр әле дәү генә.
Булыр әле дәү генә лә,
Быуынға бирәү генә.

**Г**

Йоҡла, балам, йом күҙең,
Йом-йом күҙең, йондоҙом.
Ҡистән һәйбәт йоҡлаһаң,
Уйнап үтер көндөҙөң.
Үҫеп көслө булыр был.
Тырыш эшсе булыр был.
Ялҡау булмаҫ, тик ятмаҫ,
Иген сәсеп, урыр был.
Был бала бик һиммәтле —
Ат уйнатып йөрөр был.
Бәү-бәү, бәпәйем,
Тал бишеккә һалайым...
Баса тунын ябайым,
Инәһе ауылға киткән,
Атаһы баҙарға киткән,
Аны ҡайҙан табайым...

**Ғ**

Әлли-бәлли итер был,
Мәҙрәсәгә китер был.

Тырышып һабаҡ уҡыһа,
Ғалим булып етер был.

Әллә-бәлли көйләрмен,
Һиңә теләк теләрмен,
Бәхетле бул, тиәрмен,
Йоҡла, йоҡла һин, балам.
Һине бишеккә һалам,
Һин йоҡоға киткәнсе,
Мин һинең янда ҡалам.

Йоҡла, йоҡла, йом күҙең,
Йом, йом күҙең, йондоҙом,
Ҡистән йоҡоң ҡанмаһа,
Илап үтер көндөҙөң.

### Д

Әллә-бәлли, бәү итә,
Улым йоҡоға китә.
Атаһы киткән арғы осҡа,
Инәһе киткән бирге осҡа —
Уларҙы ҡайҙан табайым?!
Әлли-бәлли, бәү, бәү...
Тал бишеккә һалайым,
Ҡәҙә туны ябайым,
Әлли-бәлли, бәү итә,
Улым йоҡоға китә,
Йоҡлап, ҙур үҫеп етә,
Шунан уҡырға китә.
Мәҙрәсәлә шәкерт булып,
Ҙур ғалим булып китә.
Әлли-бәлли, бәү, бәү.

### Ҙ

Аллаһыу, Аллаһыу,
Алла биргән аҡ бала,
Хоҙай биргән һор бала,
Аллаһыу, Аллаһыу.

### Е

Әлеү-бәлеү итер ул,
Тиҙҙән үҫеп етер ул,
Ул йәшенә еткәс тә,
Пионерға инер ул.
Пионерға ингәстен,
Комсомолға инер ул.

Әлеү-бәлеү, бәпкәһе,
Баҙыян ағас — һиртмәһе.
Бәү-бәү-бәү...

### 339. БАЛАНЫ СӘПӘКӘЙ ИТТЕРЕҮ

Сәп-сәп, сәпәкәй,
Ашағаны — әпәкәй.
Сәп-сәп, сәп итә
Тәнәй сәпәкәй итә.

Һәп-һәп, һәп итеп,
Сәп-сәп, сәп итеп,
Талпыналыр һәп итеп,
Һәп итеп тә сәп итеп.
Сәп-сәп, сәпәкәй...

### 340. БАЛАНЫ ТӘПӘЙ ЙӨРӨТКӘНДӘ

А

Тәпәй-тәпәй йөрөһөн,
Дегәнәк быға теймәһен.
Тәпәй-тәпәй килә ул,
Минең янға етә ул,
Тәп-тәп йөрөп, ҙур үҫкәс,
Мәктәптәргә китә ул.

Б

Йүгер, йүгер, тәп-тәп-тәп,
Йүгер, йүгер, тәп-тәп-тәп.

В

Әлләм-әлескенәһе,
Балам — бал эскенәһе,
Тәп-тәп атлар ул,
Алма төбөн таптар ул,
Мәҙрәсәлә ғилем алып,
Ғалим булып китер ул
(Мулла булып етер ул).

### 341. БАЛАНЫ АЯҠ ОСОНА БАҪТЫРЫП БӘҮЕЛТЕҮ

Ҡар-ға, сәүкә,
Һайыҫҡан, сыйыр-сыҡ,
Турғай, тор-на,
Тәҙ(е)-рәнән осоп сыҡ!

Баланы, арҡаға йәбештереп бәүелткәндә лә, шулай тиҙәр.

### 342. САБЫЙҘЫ ЙОКОНАН УЯТЫУ

#### А

Бәләкәсем, тор инде,
Йоҡоң туйғандыр инде.
Уйнай торған ҡурсаҡтарың
Ҡөтөп торалыр инде.

#### Б

Тор-тор, балам, тор инде,
Йоҡоң туйғандыр инде.
Бөтөн бала мәктәпкә
Барып тулғандыр инде.
Ҡомғанда бар йылы һыу,
Тиҙерәк, балам, битең йыу.
Балам, һиңә әҙерләнгән
Тәмле аштыр бына был.
Атаң китте баҙарға,
Хәләл малдар табырға.
Балам, һин дә тик ятма,
Уҡы, өйрән яҙырға.
Балам, булма быс(ы)раҡ,
Быс(ы)раҡтан бул йыраҡ.
Өҫкә кейгән кейемдәрең
Ҡарҙар кеүек булһын аҡ.

Оҙон ғүмер һорайым,
Бирһен шуны Хоҙайым.
Һәр кешегә булһаң ине
Асыҡ йөҙлө, малайым.

Ҙур кешегә сәләм бир,
«Яҡшы икән балам», — тир.
Зирәк бала бик тырыш:
«Юҡһа, артҡа ҡалам», — тир.

### 343. БАЛАНЫ МУНСАЛА САБЫНДЫРЫУ ҺАМАҒЫ

#### А

Һап-һап-һап,
Мунса ташы,
Бүрәнә башы,
Ябалаҡтан йөн ал,
Бүҙәнәнән май ал!
Ҡарсығанан ҡан ал!

Һап-һап-һап!
Мунса ташы, бүрәнә башы,
Әбейҙе «әбей» тип әйт,
Бабайҙы «бабай» тип әйт!
Айыу балаһы,
Бүре балаһы,
Татлы таба бул,
Алабуға бул,
Һыуҙан таҙа бул,
Һөләктәй бала бул!
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә, Фатима ҡулы
Һап-һап-һап!

Б

Һап-һап һау бул,
Исәпкә бар һан бул:
Алтыла ла бар бул,
Алтмышта ла бар бул!
Ишле бул, ҡушлы бул,
Ун ике мөсәлле * бул!

В

Һап-һап-һап!
Бер, ике, өс, дүрт, биш,
Алты..., алтмыш!
Һап!
Бәхетле бул,
Тәүфиҡлы бул,
Мәнфәғәтле бул;
Ҡайын кеүек буйсан бул,
Имән кеүек таҙа бул,
Айыу кеүек көслө бул,
Бүре кеүек тешле бул;
Тәмле телле бул,
Исемең булһын үрҙә,
Урының булһын түрҙә!

Г

Һап-һап-һап!
Айыу балаһы,
Бүре балаһы,
Түмәрҙәй бул,
Түрәләй бул,
Бүреләй бул,
Бүләрең булһын,

Биләрең булһын,
Малың артһын,
Йүнең артһын!
Мунса ташы,
Бүрәнә башы,
Айыу башы,
Йөҙөк ҡашы.
Һап-һап-һап!

Ғ

Мунса ташы,
Бәрей башы,
Төлкө башы,
Яҡшы ата балаһы
Төлкө тундың яғаһы!

### 344. БАЛАНЫ ҠОЙОНДОРОУ ҺАМАҒЫ

Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа,
Таҙалыҡҡа, байлыҡҡа.
Ҡыҙыл ситле яулыҡҡа!
Үҫ, үҫ, үҫ!

### 345. ҠЫҘ БАЛАНЫҢ СӘСЕН ҮРГӘС

А

Ейәнсәренең сәсен йыуғас, өләсәй өс мәртәбә шулай ти:

— Һыуың һарҡ, үҙең ҡалҡ,
Һыуың һарҡ, үҙең ҡалҡ ..

Ейәнсәренең сәсен үргәндән һуң, өләсәй уның толомон тарта-тарта:

— Һиңә — кейәү, миңә — күренеш,
Кейәү — һиңә, күренеш — миңә,
Һиңә — кейәү, миңә — күренеш, —

тип һамаҡлай. Шунан йоҙроҡ төйнәп, өс тапҡыр елкәһе төбөнә төртөп-ҡағып ала.

Б

Береһе — кейәүгә,
Береһе — миңә:
Кейәү һиңә,
Күренеш миңә.



# ЕРЛӘҮ ЙОЛАЛАРЫ

## 346. ӘҘӘМДЕҢ ДОШМАНДАРЫ

— Ҡайғы, ҡайҙа бараһың?
— Ҡартайтырға барамын.
— Һағыш, ҡайҙа бараһың?
— Һарғайтырға барамын.
— Бәлә, ҡайҙа бараһың?
— Бөкрәйтергә барамын.
— Ҡаза, ҡайҙа бараһың?
— Ҡаҙалдырырға барамын.
— Ауырыу, ҡайҙа бараһың?
— Ауырттырырға барамын.
— Үләт, ҡайҙа бараһың?
— Үлтерергә барамын.
Ҡайғы килһә — ҡартайтыр,
Һағыш килһә — һарғайтыр.
Бәлә менән ҡаза килһә —
Бар мөлкәтең сарпайтыр *,
Ауырыу килһә — ятҡырыр,
Тарамышың тарттырыр;
Үлем барыһын арттырыр —
Тар ләхеткә ятҡырыр.
Ҡайғынан да юҡ ҡотолмаҡ,
Һағыштан да юҡ ҡотолмаҡ,
Бәләнән дә ҡасмаҡ юҡ,
Ҡазанан да ҡасмаҡ юҡ,
Ауырыу төшһә башыңа,
Үлемдән дә ҡасмаҡ юҡ.

## 347. ҠАРА ЕР

Нисә йәштән яралған,
Яуҙар үткән донъядин;
Шундай-шундай аяулы
Хандар үткән донъядин;
Ибраһим менән Исмәғил * —
Улар ҙа үткән донъядин;
Ай ҙа үткән донъядин,
Күк тә үткән донъядин;
Яман, яҡшы айырмаҡ,
Бары ла үткән донъядин.

Атаң һинең — ҡара ер,
Әсәң һинең — ҡара ер.
Эсәрҙәрең бөттө ниһә,
Бармаҡ ерең — ҡара ер.
Тыуған ерең — ҡара ер,
Торған ерең — ҡара ер;
Бер яҙмыштың яҙғанын,
Күргән ерең — ҡара ер.
Барыр ерең — ҡара ер,
Ҡалыр ерең — ҡара ер.

## 348. КЕШЕ НУРЫ

Кеше үлер булһа, ул кешенең нуры төшә. Ҡатын кешенең нуры сәсле була. Ирҙәр нуры ҡашыҡ һаплы була.

Кеше үлер булһа, кеше нуры йә уның өйөнә төшә, йә — һарайына.

Кеше нуры күктән килә. Ир кешенең нуры оҙон булып һуҙылып төшә, ҡатын-ҡыҙҙыҡы — сәселеп. Шуны күргән кеше: «Фәлән кешенең япрағы төштө», — ти. «Япрағы төшкән» кешенең йөҙөндә нур ҡалмай.

Кеше үлеүгә бер нисә көн ҡалғас, уның нуры зыяратҡа төшә, уты сәсрәп, сәселеп китә.

* * *

Бик ҙур, бейек шыршы ағасы бар икән. Ул ағастың япрағына һәр кешенең исеме яҙылған, ти. Кем исеме яҙылған япраҡ төшә — ҡырҡ көн тигәндә, шул кеше үлә. Үлер кешенең иңе ҡырҡ көн алдан төшөп йөрөй, ти.

## 349. ҮЛЕМГӘ ӘҘЕРЛЕК

Үҙенең әжәленең ҡасан, ҡайһы ваҡытта, ниндәй сәғәттә килерен бик зирәк кешеләр генә алдан беләләр. Үлемгә әҙерлек өлкән кешеләр араһында ғына күҙәтелә. Улар «ҡайтмаç юлға» кит-

кәндә кәрәк булған бөтә әйберҙәрҙе лә: энә, еп, кәфенлек, еҫле һабын, хушбый, хәйерлек аҡса, таҫтамалдар, аяҡланған еп һ. б. алдан әҙерләп ҡуялар. Уларҙы йыйып ҡуйған һандыҡты «үлемтек һандығы» тиҙәр.

Кеше, үлер алдынан, үҙенең бөтә туғандарын йыйып алып, васыят әйтеп ҡалдыра. Васыят — ул кешенең яҡты донъяла әйтелмәй ҡалған һүҙҙәре, теләктәре. Үлгәндең васыят итеп әйтеп ҡалдырған һүҙҙәрен кеше оноторға тейеш түгел.

Үлемгә ауырығанды борсомайҙар: үлем түшәгендә ятҡанға ҡамасауларға ярамай. Шулай ҙа уның менән хушлашыуға һәр кемгә килергә рөхсәт ителә. Ләкин уның янында ҡысҡырып һөйләшеү тыйыла.

Кешенең «йәне» бик ауыр сыға, «йәне» сығыр алдынан уға ҡамасауларға, тауыш күтәреп һөйләшергә, ҡысҡырып иларға ла ярамай. Мәрхүмде үлгән көнөндә күмеү — боронғо йола. Йыраҡтағы яҡындарын көтөү кеүек сәбәптәр генә хушлашыуҙы кисектерә биреп торорға мөмкинлек бирә.

## 350. БЕРЕНСЕ КӨН

Ауырыуҙы эргәһендә ултырып һаҡлайҙар. Йән биреүсе яңғыҙ ҡалырға тейеш түгел. Йәне китеүе еңел булһын тип аят уҡыйҙар. Ауырыуҙың хәле бик насарланғас, ясин сығалар. Уның битенә аҡ яулыҡ йә таҫтамал һалалар. Көсө бөткәс, йәне оҙон тын булып сыға. Йәне аҡҡа сыҡһын тип, ауыҙын буҙ йә туҡыма менән ябалар. Мәрхүмдең күҙен тәңкә йә 5 тинлек баҡыр менән дә ябалар, ауыҙы асылмаһын өсөн, эйәк аҫтына, төйнәп, сепрәк һалып, ауыҙын таҫтамал менән ябып, тәңкә баҫып ҡуялар. Өй эсендә булған фотоһүрәттәр, китаптар, көҙгө һәм ялтыр әйберҙәр ябыла [10]. Төнөн мәрхүмде көтәләр (янында алмашлап ҡуналар) [11]. Көткәндә, ут яндырып, тәсбих әйтеп ултыралар. Мәйетте өс көн, өс төн көтәләр.

## 351. МӘЙЕТ КӨТӨҮ

Япма менән ябылған урындыҡтарҙа барыһы бергә өсмөйөш яһап ултыралар. Мәрхүм ятҡан күтәрмә уларҙың эргәләрендә була. Өсмөйөштөң уртаһында мәрхүмдең иң яҡын туғандары ултыра. Улар янына ҡымыҙлы аяҡтар * ҡуйыла. Өсмөйөш башына абруйлы аҡһаҡал (старшина) сүгәләй, уның ике яғына ике мулла ултыра. Улар мәрхүмдең гонаһтарын ярлыҡауҙы һорайҙар, доға уҡыйҙар ҙа ҡымыҙ эсәләр. Ошонан һуң әруаҡҡа бағышлап табын асалар. Табындағы ризыҡты килеүселәр генә түгел, үткенселәр ҙә ауыҙ итә. Ауыҙ итеп кенә ҡалмай, туйғансы ашауҙары ла фарыз.

Аштың башы — бишбармаҡ менән йылҡы ите. Ит ҙур-ҙур дүрт табаҡҡа турап ултыртыла.

Аҡһаҡал (старшина) һәм уның ярандарына айырым ҡәҙерхөрмәт күрһәтелә: һәр кем уларға ҡалъя һоғондорорға тырыша.

Иттән һуң һурпа эсәләр ҙә, шөкөрана әйтеп, иман тоталар, хужаға рәхмәттәрен әйтәләр.

Әруахҡа бағышланған мәжлескә, әйтеүҙе көтмәстән, йыназа һөрәнен ишеткәс тә киләләр.

Мәрхүмгә бағышлап, сөсө ҡамырҙан ҡырҡ бер көлсә бешерәләр.

Үлгән кешене хөрмәтләү йөҙөнән төпкө бүлмәгә һалалар. Түшәмгә, мәрхүм ятҡан күтәртмәгә артыш ҡуялар.

Мәйет янына ҡатындар килһә, өс икмәк тотоп килә. Унда береһен ҡалдыралар, икәүһен кире алып ҡайталар. Йәнәһе, теге донъяла үлеккә бер кешелек кенә ризыҡ кәрәк, артығы ярамай.

Ҡайтмаç ергә оҙатҡанда, йыназа намаҙы фарыз: һәр кем уҡыһа — мең һауап, аранан береһе уҡыһа — барыһына һауап, береһе лә уҡымаһа гонаһ.

## 352. ИКЕНСЕ КӨН

Бөтөн ауыл үлгән кешегә хәйер (еп, кәтүк, һабын һ. б.) килтерә. Мәйеттең күлдәген сисмәйҙәр, ярып алалар [12]. Иртән мәрхүмде мәйетен йыуалар. Әгәр үлгән мәле иртән булһа, шул уҡ көнөн йыуалар. Ирҙәрҙе — ирҙәр, ҡатындарҙы — ҡатындар йыуа. Мәйет йыуа торған һыуҙы алырға барғанда, һөйләшмәйҙәр. Һыуҙы ағым ыңғайына һоҫоп алалар, алып ҡайтҡанда, биҙрә өҫтөнә ябыу һалалар. Һыуҙы кеше күҙе күрергә тейеш түгел. Юғиһә, «быcрай» йә «ен күҙе тейә», ти. Мәйетте тәүҙә ике таҡтаға йә улаҡҡа һалалар. Йыуғанда, дүрт кеше дүрт мөйөшөнән ҡоршау тотоп, мәйетте пәрҙә менән ышыҡлап тора, бер кеше һыу бирә, ике кеше миндек йә бейәләй менән йыуа. Мәйет йыуыусының изге күңелле, кеше ғәйебен һөйләмәç кеше булыуы шарт. Ҡатындарҙы һигеҙ кеше йыуа. Мәйет йыуа торған һыуҙы йылытҡан һауыттар бер иш булырға тейеш. Ике сәйнүкте тултырып мейес өҫтөнә һыу йылытырға ҡуйһаң, ҡәртинәйем: «Үлек йыуырға ултыртмағанһың бит, ал бер сәйнүгеңде», — тип әйтә торғайны. Мәйет йыуғанда махсус бейәләй кейәләр (бер ҡат йыуған һайын алмаштырып торалар), алъяпҡыс бәйләйҙәр. Һыуҙы һауыттан һауытҡа һалғанда, ҡулдың һыртын әйләндереп, кирегә бороп һалалар.

Иң тәүҙә мәйеттең эстәрен йомшаҡ ҡына һыпыралар. Берәй нәмә бүленеп сыҡһа, сайҙырып ебәрәләр. Башлап истинжа ҡылдырыла *. Унан һуң мәйет йыуғанда кейгән тәүге бейәләй сиселә, икенсеһен кейәләр, мәйетте шуның менән йыуып бөтәләр. Шунан һуң мәйеткә тәһәрәт алдырыла. Башта һабынлап беләҙектәренә тиклем ике ҡулы, унан йөҙө, һуңынан ике ҡулы терһәктәренә тиклем йыуыла. Шайтан ашыҡтарына тиклем ике аяғы йыуыла. Барыһы ла өсәр ҡат ҡабатлана. Ауыҙ-моронона һыу индерелмәй. Бынан һуң мәйеттең башы, бер йә өс кәррә * йәнә йыуып төшөрөлә. Шунан уң ҡабырғаһына әйләндереп йыуыла, йыуыл-

маған урындары ҡалмаҫҡа тейеш. Шунан һуң мәйетте сайындырып, таҙа сепрәк менән ҡоротоп һөрткәс кенә кәфенләйҙәр. Мосолмандар мәйетте ултыртып ҡойондора.

Үлек йыуылған улаҡты шунда уҡ һүтәләр. Таҫтар, ҡоршау (пәрҙә) тотоп торғандарға таҫтамал бирәләр.

Мәйет йыуырға алып ҡайтҡан һыуҙы ҡулланып бөтөргә кәрәк, бөтмәһә, йорттан йәнә мәйет сыға. Мәйет йыуған һыуҙы кеше баҫмай торған ергә, ағас төбөнә күмәләр. Хужа унда үҙенең билгеһен һала. Мәйет йыуған бейәләйҙе һаҡлайҙар [13]. Мәрхүмдең бөтә кейемен йыуып, һыҡмай ғына тиҫкәре яғын әйләндермәй эләләр

Золом ҡылып, эсеп йә үҙенә ҡул һалып үлгәндәрҙе йыумағандар.

## 353. МӘЙЕТТЕ КЕЙЕНДЕРЕҮ

Мәрхүмде кейендергәндә уға иң алдан баштан алып тубыҡҡа тиклем «ожмах күлдәге» тегелә, арҡа яғына булмай. Кейем теккәндә бер төйөн дә булырға тейеш түгел. Тиҙерәк һүтелергә уңай булһын өсөн, шулай итәләр (сөнки, әгәр мәрхүм ожмахҡа эләкһә, унда уға яңы кейем бирәсәктәр). Мәрхүмдең битенә «бөркәнсек» ябалар. Аҫтына аҡ тауарҙан түшәк һалалар, ҡулына бейәләйҙәр тегеп кейҙерәләр.

Кәфенде аҡ әйберҙән тегәләр. Ҡатындарға — ете, ирҙәргә биш ҡат итеп бүләләр. Халыҡ хәтерендә кәфен иҫәбе шулай һаҡлана. Дини тәртип, ислам ҡағиҙәләренсә, ир кеше мәйете булғанда — кәфен өс ҡат, ҡатын булғанда — биш ҡат булыуы сөннәт. Теккәндә, энәне кирегә ҡаратып сәнсәләр. Еп бөтһә лә, төйөн төйнәмәйҙәр, тегелгәндең өҫтөнә ҡайтара биреп тегеп ҡуялар [14].

Кәфендең һәр бер ҡатының исеме бар. Беренсе ҡат — ләфнә — тышҡы ураү. Икенсе ҡат — әҙер — эске яҡтан ураү. Өсөнсө ҡат — лифафа — оҙон әхирәт күлдәге, баштан аяҡҡа тиклем кейҙерелә. Дүртенсе ҡат — ғәүрәт ябыуы — йән еренә ябыу (ир затынан булған мәйеттең йән ерен ябырҙан әүәл уның өҫтөнә бармаҡ буйы ҡусҡаталы ағас һалалар. Был түл өҙөлөүҙе аңлата). Бишенсе ҡат — түшенә түшелдерек ябыу. Алтынсы ҡат — яулыҡ йә бөркәнсек тип атала. Уныһы әхирәт күлдәгенә ҡуша тегелә. Мәрхүмдең башын ҡаплай. Етенсе ҡат — билбау, өс ҡат уратып билгә бәйләнә. Беренсе ҡат кәфен баштан алып аяҡ осона етерлек була. Икенсе ҡаты кешенең буйы менән типә-тиң була. Өсөнсөһө (әхирәт күлдәге) — баш яғынан да, аяҡ осонан да сығып тора. Ике остан да һығып бәйләрлек булһын өсөн шулай итәләр. Ирҙәрҙең әхирәт күлдәге тубыҡ аҫтына төшөп тора.

Ирҙәрҙең башына сәллә тегелә. Уның бер осо һалынып, мәрхүмдең арҡаһына төшөп торорға тейеш.

Бәләкәй мендәр тегеп, эсенә мәтрүшкә тултыралар ҙа мәрхүмдең башы аҫтына һалалар. Ҡәберҙә лә башы аҫтында шул була.

Кәфен теккән еп артып ҡалһа, хәйер итеп, берәй ғәрипкә, етем-

еһергә бирәләр. Ул епте ташларға йә өйҙә ҡулланырға ярамай [15].

Мәйет һаҡлағанда, ун ике кеше 99 йә 100 мәртәбә «лә илаһи» тынлай. Бер мулла әйтеп, уҡып ултыра. Әгәр кеше иҫәбе тулмаһа, түлдән (ырыуҙан) ҡалған ҡатындар керә. Барыһына ла ҡырҡ бер кәррә һалымлаңған еп таратталар.

Мәрхүмгә йыназа намаҙы уҡыла.

Уны уҡыу өсөн ҡайһы бер йола-шарттарҙың үтәлгән булыуы фарыз: тәһәрәтле булырға (һәр кемгә ғосол ҡойонорға) тейеш; кейемдәре таҙа, баш кейеме ҡағып-һуғып таҙартылған; бөтә урын, ултырған урындыҡ, баҫҡан ер таҙа булырға тейешле (йән сыҡҡан йорт эсендә сабата олтораҡына тиклем йыуыла, сөнки, йән биргәндә, йәғни Ғазраил фәрештә салып ебәргәндә, әҙәмдең ҡаны ҡырҡ аҙымға тиклем һәммә ергә сәсрәй, ти); мәрхүмдең башы ҡибла яҡҡа ҡаратып һалынырға: мәйет йыуылған булырға; уның донъялыҡтағы бурыстарын яҡын туғандары үҙҙәренә алырға (түләр өсөн), мәрхүмдең ниәте атҡарылған (төҫөм итеп, бүләк итеп фәлән-фәләнгә ҡалдырам тигән әйберҙәре тапшырылған) булырға тейеш.

## 354. ӨСӨНСӨ КӨН

Мәрхүм менән хушлашырға, бәхилләшергә бөтә ауыл килә. Һәр береһе яулыҡ, таҫтамал, һабын, туҡыма, аяҡлы еп, еҫле май алып килә. Барыһын да мәрхүмдең уң яҡ яурынына һалалар. Ошо ваҡыт, үлгән кешенең ҡорҙашы (ҡатын-ҡыҙҙың әхирәте) уның исемен менән яҙып ҡалдырылған хушлашыу һүҙҙәрен уҡый башлай. Ул юлдар, мәрхүмәнең баш осона ултырып, иламһыраған тауыш менән көйләп уҡыла:

— Йәйҙәргә инһәм, йөрөрмөн, тинем,
Хуш-еҫтәр еҫкәп, терелермен, тинем.
Әжәл шарабын эсәбеҙ икән,
Яҡты донъянан китәбеҙ икән.
Күҙем йомһам да, күҙҙәрем тала,
Барса ғәҡрәбем * донъяла ҡала.
Һеҙгә, дуҫтарым, — аҡтыҡ һүҙҙәрем,
Доға уҡығыҙ, йомһам күҙҙәрем.

Бындай хушлашыу, бәхилләшеү һүҙҙәрен һәр бер кеше үҙе сығара йә берәй сәсәнерәк кешенән сығартып, уҡый-яҙа белгән әхирәтенә йә ҡорҙашына ҡалдыра. «Мин үлгәс, мәйетем эргәһендә көйләрһен», — тип әйтеп ҡуя. Көйлө илау һамаҡтарын ҡалғандар тәсбих тарта-тарта тыңлап ултыра.

Тағы 100 тапҡыр «лә илаһи» тип әйткәндән һуң мәрхүмдең өҫтөнән Ҡөрьән йөрөтәләр. Шунан уны башы менән өйҙән алып сығалар.

Арба ҡуҙғалғансы, ике һыбай шәп итеп ауылды әйләнеп сы-

ға. Үҙҙәре: «Йыназаға барығыҙ!» — тип ҡысҡыра. Йола буйынса мәрхүмде ҡояш байығанға тиклем күмәләр [16].

## 355. ДӘҮЕР ИТЕҮ

Һәр мосолман кешеһенең был донъяла биш фарызы була: әүәл иманды яҡшы белмәк, икенсе — биш ваҡыт намаҙ, өсөнсө — ураҙа, дүртенсе — зәкәт, бишенсе — хаж ҡылмаҡ.

Кеше үлгәс, дәүер итәләр. Дәүер иткән саҡта уның донъялыҡта үтәлмәгән фарыз бурыстарын әйтәһең. Миҫал килтерәйек:

— Мөхәмәтзариф Мәхмүзә балаһының бер йылғы фарыз булмыш салатасауымының ошбу фидиәһен ҡабул итеп алдыңмы? — тиһең, бер төйөнсөктө мәйеттең күкрәге тәңгәлендә ултырған кешегә аша тоттороп. Ул кеше:

— Ҡабул итеп алдым, — ти.

Ни өсөн әсәһен әйтәләр? Сөнки ҡайһы бер ҡатындар, урамда йөрөп, атаһыҙ бала таба. Шуның өсөн. Ҡыҙ биргәндә, атай исеме әйтелә.

Үлгән кеше һикһән йәштә булһа, уның ҡырҡ йәшенә әйтәһең.

Шунан тағы шундай нәмәһе лә бар. Кешенең йәшенән бәлиғ тулғанға тиклемге дәүере алып ташлана. Боронғо китап буйынса, ир заты ун ике йәштән, ҡатындар заты һигеҙ йәштән бәлиғ була. Йәнә шул: утыҙ йәш һайын бер йәш өҫтәйһең. Йәш кеше үлһә, йәшәгән йәшен уртаға бүлеп тормайҙар. Миҫалға, әгәр кеше ҡырҡ йәштә үлһә, балиғ булғанға тиклемгеһен алып ташлайҙар ҙа утыҙ һигеҙ мәртәбә «Алдыңмы?», «Алдым» әйтәләр.

## 356. МӘРХҮМ МЕНӘН БӘХИЛЛӘШЕҮ

Элегерәк мәйетте урап, ҡабыҡҡа (йүкә ҡайырыһының эсе) һалғандар. Ҡатын кеше тим ағасына һалынғас, өҫтөнә ағас олонон (талды) бөгөп, ҡоршау ҡороп, уның өҫтөнә япма ябып, күтәрмә-көймә эшләр булғандар. Үлгән кешене оҙатҡанда, табанына ҡарап ҡалырға ҡушҡандар. Әгәр өйҙә ике үлек булһа, береһен ишектән, икенсеһен тәҙрәнән алып сығалар. Шулай итһәң, үләт туҡтай. Мәйетте ихатанан алып сығып киткәндә, 99 ҡабат тәһлил * әйтәләр, еп тараталар. Әбейҙәр әйтемләп ҡалалар:

— Бәхил бул, тыныс йоҡо!
— Ауыр тупрағың еңел булһын!
— Тар урының киң булһын!
— Ҡара гүрең яҡты булһын!
— Урының йәннәттә булһын!
— Тыныс ят!
— Йыш ҡайтып йөрөмә!
— Төшкә йыш кермә!
— Йәп-йәштәрҙе саҡырма!
— Артың теүәл, артыңдан саҡырма!
— Бәхил бул!

Хушлашыусы мәрхүмдең күкрәгенә уң ҡулын һалып: «Рәнйетһәм, ғәфү ҡыл! Бәхил бул! Бәхил бул! Бәхил бул!» — ти.

Хушлашыу йыназаһы уҡылғас, бөтәһе тороп «амин» әйтәләр. Мәйетте өйҙән алып сығып киткәс, ҡарттар ҡиблаға ҡарап:

— Аллаһы әкбәр,
Аллаһы әкбәр,
Лә Илаһи иллалла! —

тип көйләп тәҡбир әйтәләр. Шуны дүрт тапҡыр әйтеп, ике тарафҡа сәләм бирәләр. Ишек алдында, ҡапҡанан сыҡҡас, ошо «тәҡбир әйтеү» ҡабатлана. Йыназа уҡыусыға тейешле әжер * әйтелә. Ул дүрт тояҡлы мал булырға тейеш. Боронғолар, йыназа уҡыусыны, мулыраҡ әжер биреп, нығыраҡ һыйлаһаң, ул мәрхүмде ожмахҡа урынлаштыра, тигәндәр. Ихата, урам, ауыл ҡапҡаһын үткәндә, көйләп, шулай тип ҡалалар:

— Һығынамын солтаныма,
Яратҡан яппарыма *.
Сәләм әйткел мәҡамыма *,
Ятасаҡ тупрағыма!
Хуш! Хуш! Хуш! Бәхил бул!

Мәрхүм тереләрҙән ошо сәләмде тупраҡҡа еткерә торһа, үҙенә һауап була, оҙатып ҡалыусылар ҙа һауаплы була. Барасаҡ мәҡамға сәләм әйтеү өс рәт ҡабатлана.

Ҡатындарға зыяратҡа инергә ярамай. Улар мәрхүмде ҡапҡа тышына тиклем генә оҙата бара. Бала-сағаға, ҡыҙҙарға зыяратҡа инергә рөхсәт. Табутты таҫтамал менән яурын аша һалып, алты ир күтәрә. Уларҙы башҡалар алмаштыра. Тим ағасындағыһын күмәкләшкерәп һәм алмашлап күтәрергә тырышалар. Күтәреүселәр сиратлаша.

### 357. ҠӘБЕР ҠАҘЫУ

Ҡәберҙе, ғәҙәттә, мәрхүмдең яҡындары ҡаҙа. Ҡәбер ауыҙы асыусы алдан билдәләнә.

Кеше үлеүен, уның ҡасан ҡуйылырын белгәс, урам буйлап, бер-ике кешенең көрәк күтәреп үтеүен күреү менән уларға башҡа ирҙәр ҙә өнһөҙ эйәрә. Саҡырыу булмай.

Ҡәбер өсөн урын таҙа, йәғни иҫке ҡәбер булмаған ерҙән һайлана, мәрхүмдең буйына ҡарап ҡаҙалар. Ир кешегә кендек тиңенән дә ярай, ҡатындарға түш тиңенән ҡаҙыла.

Соҡорҙың ҡибла яғынан кеше һыймалы, ултырғанда, башы теймәҫлек уйым яһала (уны ләхет алыу тиҙәр [17]). Шул рәүешле үҙенсә бер «өй» барлыҡҡа килә. Йәнәһе, мәйетте күмеп, кешеләр ҡайтып киткәс, һорау алыусы фәрештәләр Нәңкер менән Мөңкөр килә һәм үлек, тороп ултырып, уларға яуап бирә була.

Ҡәбер әҙер булғас, мәйетте килтергәнсә, соҡор янында кеше

һаҡта торорға тейеш. Юҡһа, ҡараусыһыҙ ҡалған ҡәбергә ен-шайтан эйәләшә.

Ҡәбер тупрағына баҫырға, төкөрөргә, абынырға ярамай. Ҡаҙыусылар тәһәрәтле, пак булырға тейеш. Ҡысҡырып һөйләшеү, көлөшөү ҙә ҡәтғи тыйыла, юғиһә, ҡәбер эйәһе рәнйей, уның йәне уларға зыян ҡылыуы мөмкин.

## 357. МӘЙЕТ ОҘАТЫУ

Мәрхүмде алып киткәндә, бөтә ауыл эштән туҡтай [18], тауыштын сығарырға, йырларға, күцел асырға ярамай. Мәрхүмде арбаға һалып алып барғанда ла, ҡәбер янында ла мулла биш-алты кешенән саф теҙә. Зыяратҡа алып китер алдынан оҙата барыусыларға «сәфәр хәйере», таҫтамал, яулыҡ таратыла. Мәйетте ылау менән алып барғанда, ат башын тотоп барған кешегә лә «сәфәр хәйере»нән таҫтамал бирәләр. Ҡөрьән уҡыусыға фиҙиә саҙаҡаһы * бирелә.

Зыяратҡа алып барғанда, мәрхүмдең кәфене өс урындан: башы, аяғы, биле тиңенән бәйле була. Кәбергә төшөргәнсе кәфен бауҙарын сисергә ярамай: мәрхүмдең тәһәрәте китә тип юрайҙар.

Зыяратҡа ингәндә, ҡарттар туҡтап тағы тәкбир әйтә, ҡәбер янында тағы туҡтап тәкбир әйтә. Дүрт кеше ҡәберҙең дүрт мөйөшөнә ултырып тәһел әйтә, мулла йыназа уҡый. Шунан ул халыҡтан һорай:

— Йә, йәмәғәт, был яҡшы кеше инеме?

— Яҡшы кеше ине! — тип яуап бирәләр [19].

Һорау-яуап шулай өс рәт ҡабатлана.

— Кем бурысын ала?

— Мин алам! — ти яҡын туғаны. Мәрхүмдең бурысын алған кешегә мал әйтелә.

Мәрхүмде ҡәбергә өс таҫтамал менән төшөрәләр: бил, баш, аяҡ тиңенән алып.

## 359. ҠУЙЫУ

Мәйетте ҡәбергә төшөргәндә, ҡәбер ауыҙын шаршау менән ҡаплап торалар. Кәбергә мәрхүмдең иң яҡын кешеләре төшә («Мәйетте ҡан ҡәрҙәше һалһын», — тиҙәр). Төшөргәс, кәфендең бәйҙәрен сисәләр [20]. Бәйҙәр сиселгән урында ҡала.

Мәрхүмдең башын ҡибла яҡҡа боробораҡ һалалар. Башы аҫтына ҡыҙыл балсыҡ йә аҡ таш һалалар [21]. Мәрхүмдең элек йыя барған сәсен, тырнағын кәүҙәһе янына һалалар, күкрәгенә яуаплама ҡуялар [22]. Һуңынан мәрхүмдең өҫтөнә тәһел ташы тип, ваҡваҡ ҡырсын һибәләр [23]. Шунан ләхет таҡталары һөйәйҙәр. Тупраҡ төшмәһен өсөн, уның өҫтөнә йүкә ҡабығы йә туҙ йәйелә.

Аҫтындан уттар сәсрәр,
Өҫтөңдө тупраҡ баҫыр.
Йылан-саян килдениһә,
Ни тип яуап бирерһең?
Эй Хоҙайым, ярлыҡа,
Доғаларымды тапшыр,
Белгәнемде ғәфү ит,
Белмәгәнемде белдер [24].

Мәйетте ҡәбергә ҡуйғанда, шулай тип әйтһәләр, был үлек һәйбәт икән, быға йылан ебәрмәйек, тип әйтә, ти, ҡәбер фәрештәһе. Ҡәбергә төшөп, мәйетте урынлаштырып сыҡҡан кешеләргә һумлыҡ аҡса бәйләп таҫтамал бирелә.

Ҡәбергә тупраҡты тәүҙә услап, һуңынан көрәкләп һалалар. Көрәкте кешеләр бер-береһенә ҡулдан ҡулға бирмәйҙәр [25], ергә һалалар. Ҡәбер үҙенең тупрағы бөткәнсе күмелә. Ҡәбер ҡаҙығанда ла, күмгәндә лә, тирләргә ярамай, юҡһа, әҙәмде сир ала.

Мәрхүмдең күкрәге тапҡырына тупраҡ бейегерәк, ә аяҡ осона һарҡыуыраҡ өйөлә.

Ҡарт-ҡоро, тупраҡ һалғанда, доға уҡып, әйтемләп тора:

— Яратҡан тупрағыма,
Ятасаҡ мәҡамыма,
Бирәсәк сөһалыма,
Яратҡан яппарыма
Сәләм эткел, һеү, Алла,
Сәләм әйткел, һеү, Алла!

Күмгәс, ҡәберҙең дүрт мөйөшөнә дүрт кеше ултырып тағы ла йыназа уҡый, тәкбир әйтә. Муллаға гүр саҙаҡаһы бирәләр.

Тим ағасын һүтеп, бер урынға һөйәп ҡалдыралар.

Үлгән кеше исеменә, ете (йә ун ике) йәштән йыйған гонаһына, тип, мулла Ҡөрьән уҡый (ҡатын-ҡыҙҙарҙың ете йәштән, ирҙарҙың ун ике йәштән гонаһтары иҫәпкә алына).

Зыяраттан ҡайтҡанда, аяҡ кейеменән, көрәктән тупраҡты ҡағып, таҙартып ҡайталар. Юғиһә, тупраҡ тағы ла үлек һорай, ти.

## 360. ҠӘБЕРҘЕ ҠӘРГӘЛӘҮ

Ҡәберҙе күмеп бөткәс, мәрхүмдең баш осо тапҡырына уның үҙенең, атаһының исеме, фамилияһы һәм тыуған, үлгән йылдары яҙылған таш ҡуйыла.

Боронғолар, мөмкинселек булмағанда, ҡәберҙе уратып рәшәткәләмәгәндәр. Аҙаҡтан, «өсөн», «етеһен» уҡытҡанда, рәшәткәләргә уйлаһалар: «Фәлән көндө килеп, кәртәләрбеҙ (йә «бура бурарбыҙ, өйөңдө ҡыйыҡларбыҙ»), — тип, мәрхүмгә вәғәҙә биргәндәр. Әйтмәйенсә, һуңынан рәшәткәләү, бура ултыртыу килешмәй.

Сөнки ул «ҡәбер яңыртыу» була. «Ҡәберҙе яңыртһаң», ул тағы ла мәйет һөйрәй, тиҙәр.

Ҡумеүҙә ҡатнашҡан кешеләр ҡайта. Ҡәбер янында мулла йә берәй уҡымышлы ҡарт «тыңларға» ҡала. Ул ҡәберҙән ҡырҡ аҙым һанап ергә ята ла тыңлай (ҡәберҙән бик йыраҡ китмәй, ергә ҡурай сәнсеп тә тыңлайҙар). Һуңынан, өйгә ҡайтҡас: «Фәрештәләргә мәрхүм яуапты дөрөҫ, матур бирҙе. Йәмһеҙ тауыш-фәлән булманы», — ти [26].

Мәйет оҙатҡанды күреүселәр күмеүселәрҙең ҡайтҡанын да күрергә тырыша, юғиһә, мәрхүм төшкә инә, ти. Мәрхүмде күмгән көндө эт-ҡош борсолоп, һыйыр мөңрәп, көйһөҙләнһә, ундай саҡта: «Йәне йәннәттә генә булһын инде, ауырлығын малдар ҙа һиҙә», — тиҙәр. Мәрхүмдең ғазабы кешегә ишетелмәй, ә малға һиҙелә, ти [27].

Үлгәнде тәрбиәләгәндәргә яулыҡ таратыла. Ҡәбер ауыҙы асҡан кешегә — таҫтамал, ләхеткә һалған кешегә ҙур хәйер — таҫтамалға ойоҡ, аҡса, бейәләй ҡушып бирәләр. Ҡуйып ҡайтҡандарҙың барыһына ла еп таратыла. Быны «тәһел ебе» тиҙәр. Киткән ҡыҙға ҡарағанда, мәйеткә хәйер-саҙаҡалыҡ күберәк кәрәк, тиҙәр. Ҡөрьән уҡыған кешегә, тыңлаған кешегә гүр хәйере — фидиә — бирәләр. Уныһы — аяҡлы мал (тана, һарыҡ) була.

Мәйет сыҡҡан өйҙөң иҙәнен, түшәмен ҡырмай ғына йыуып сығаралар. Юғиһә, тегендә бик ауыртына, ти мәрхүм. Мәрхүмдең тынын таҙартабыҙ, тип, өй эсен артыш менән ыҫлайҙар [28]. Элек артыш ағасын мәйеттең башы осона ла һалғандар. Артышты уның башы осонда һындырыу йолаһы булған.

## 361. МӘРХҮМДЕ ИҪКӘ АЛЫУ

Ҡумеүселәр ҡайтыуына өйҙән таба еҫе сығаралар. Йола буйынса, сөсө ҡамырҙан йомшаҡ ҡына итеп баҫып, белен, йоҡа, йәймә бешерәләр. Мәрхүм исеменә беренсе көнөн дә кеше йыйып үткәрәләр, аят уҡыталар. Унда ла йәймә бешерәләр. Өс, ете, ҡырҡ йоҡа бешерелә [29].

Әгәр күмгән көндән алып етеһенә тиклем мәрхүм төшкә инеп бимазалаһа, ҡыҙыл сепрәк биреүҙе һораһа, өйҙөң бер ере йыуылмай ҡалған тигән һүҙ. Шуға күрә лә өйҙө яңынан һәйбәтләп йыуалар.

Үлгән кешенең ҡайһы бер таҙа кейемдәрен күмеүселәргә тараталар. Юғиһә, мәрхүм теге донъяла йылыға туя алмай, ти. Уны гүр һыуығы язалай була. Йыуып ҡуйылған кейемдәрен ҡырҡ көнһөҙ алмайҙар.

Мәрхүмдең өсөн, етеһен, ҡырҡын, йыллығын уҡытҡанда, оло бабайҙарҙы саҡырып таҫтамал тараталар. Итле аш, туҡмас бешерелә, килгән бер кешегә әйбер өләшәләр. Ул көндәрҙә сөйҙәге таҫтамалдарҙы ҡағып-һуғып, йыуып элеп ҡуялар. Үлгәндәрҙең рухы (әруахтар) шунда ултыра, ти.

Мәрхүмдәрҙең көндәрен үткәргәндә, борон уларҙы иҫкә алып,

илашып, һамаҡлап ултырыр булғандар. Сүрәләр, мөнәжәттәр уҡыла.

Әруахтар кесаҙна көн кис килеп, йома иртән ҡайтып китәләр, ти. Шуға күрә кесаҙна көн мейес алдын таҙартып, мейесте ағартып, ҡомған ултыртып ҡуялар. Ҡесаҙна көн тауышлы эш (ҡағыу, һуғыу), тыйыла, тырнаҡ, сәс киҫергә ярамай (юғиһә үлек алып китә, теректән ғүмере ҡыҫҡара). Тәҙрәгә күбәләк, ҡош осоп ҡунһа йә үрмәкес үрмәләп төшһә: «Мәрхүмдең изге хәбәре булһын», — тиҙәр. Мәрхүм төшкә керһә, хәйер бирергә кәрәк, тиҙәр.

Элек әүлиә ҡәберҙәре булған. Ундай урындарға тәңкә ташлап, әүлиәнең исемен атап, ҡорбан салғандар. Үткән-һүткән ҡәбер тирәләй аҡ таш һалып китер булған.

Эсеп, аҙып-туҙып йә үҙенә ҡул һалып үлгән кешеләрҙе зыярат тышына күмгәндәр. Ҡоролоҡ, афәт булғанда уларҙың ҡәбереренә һыу һалғандар. Улар йыуылмай тәһәрәтһеҙ күмелгән, үлер саҡта тамаҡтарына һыу тамыҙыусы ла булмаған. Шуға рәтһеҙ күмелгән. Улар зар булып яталар, ти.

Үлгән кешене юҡһынып, ныҡ ҡайғырған кешегә ҡәбер тупрағын алып килеп еҫкәтәләр: «Үлек булһа ла, терек», — тиҙәр [30].

Зыярат янынан үткәндә: «Сөьал * яуаптарығыҙ еңел килһен, гүрегеҙ яҡты булһын!» — тип әйтергә. Йырларға, ҡысҡырырға ярамай. Ҡәбер эйәләре: «Ахыр заман ҡасан була?» — тип һорайҙар икән. Шуға ла ҡәберлек янынан үткәндә:

— Иҫәнмеһегеҙ, әруахтар,
Иҫәнмеһегеҙ, әруахтар,
Иҫәнмеһегеҙ, әруахтар,
Беҙ белмәйбеҙ,
Белгесе — бер Хоҙай! —

тип әйтергә тейештәр.

### 362. ҮЛЕМГӘ БӘЙЛЕ БОРОНҒО ЙОЛА

#### А

Элек ҡарт кеше ныҡ ауырыһа, үлгәнен көтмәй, тауға ҡалдырып киткәндәр. Сирҙән ҡотолғаны ҡотолған, ҡотолмағаны шунда ҡалған. Тик кире ҡайтырға ярамаған. Күммәгәндәр. Эт-ҡош ашап киткәндәре лә булған. Эт-ҡош тейеп, өҙгөләнгән булһа, һәйбәт кеше булған икән, тип юрағандар, ти.

#### Б

Ҡарт кеше сирләһә, элек уға өс көнлөк аҙыҡ бирер, урманға, ҡырға илтеп ташлағандар. Уны һәйбәтләп оҙатҡандар. Бабай теләк әйтеп хушлашҡан. Үлһә — үлгән, ҡалһа — ҡалған, тик илгә ҡайтмаған.

В

Ер өҫтөнә күмеү йолаһы ла булған. Таш, ҡомдан ҡоролмалар төҙөлгән. Борон батырҙарҙы күмеп, улар өҫтөнә бейек-бейек курғандар өйгәндәр. Һәр үткән кеше ул ҡәбергә таш һалып китһә һауап һаналған. Ҡәшәнәләр ана шул боронғо ерләү йолаларының төрө.

## 363. МӘЙЕТ СЫҠҠАН ЙОРТТА УТ ЯНДЫРЫУ

Мәйет сыҡҡан өйҙөң утын ҡырҡ көн буйына һүндермәйҙәр. Мәрхүмдең йәне ҡырҡ көн буйына өйҙә була, тиҙәр. Майшәмдең утын шулай көндөҙ ҙә һаҡлағандар.

## 364. ҮЛГӘНДӘР РУХЫНА ХӘЙЕР БИРЕҮ ҺӘМ ФИҘИӘ САҘАҠАҺЫ

А

Үлгән кешенең рухы — әруахтар — ҡырҡ көн буйы өйөнә килеп-килеп торор, ти. Ҡилһә, сөй (ҡаҙаҡ) башына ултыра ла, хәйер биргәнде көтә, ти. Етем-еһергә, ҡарт-ҡороға «әруахтар рухына» тип, хәйер бирһәң, һауап була, ти. Хәйер биргәс, әруахтар ҡәнәғәт ҡайтып китәләр, ти.

Б

Мәрхүмдең гонаһтарын үҙҙәренә «алыу» өсөн, туған-тыумаса йыйыла. Улар өс, биш йә ете кеше булырға тейеш. Ашъяулыҡ тирәләй ултырышып, алдарына яҫтыҡ, мендәр йә бер әйберҙе аҡ сепрәккә урап һалалар. Шулай ашъяулыҡ аша һөйләшәләр: «Фәлән улы мәрхүм фәләндең гонаһы үҙенән, беҙҙең һәр беребеҙҙән сте диңгеҙ аръяғына китһен Мәрхүмдең ҡылған эше беҙгә лә, үҙенә лә гонаһ һаналмаһын». Шулай һөйләшеп, теләк теләп, доға ҡылып алалар. Фиҙиә саҙаҡаһына тип, элек муллаға ат, һыйыр, тана, башмаҡ, тай биргәндәр. Әммә, мәрхүмдең ауыр кәүҙәһен күтәргәндәргә тип, йола үтәп, саҙаҡа малын мәрхүмде йыуып-тәрбиәләгәндәргә, күмгәндәргә лә тараталар.

## 365. ҠӘБЕР ТӘРБИӘЛӘҮ ЙОЛАҺЫ

А

Борон зыяратты, ҡәберҙәрҙе ҡәҙерләп тәрбиәләп торғандар. Зыяратты бөтә ауыл бер булып ҡойма менән ураткан. Имән бағаналарға һәр кем үҙенең тамғаһын кирткән. Шул бағаналарҙағы тамғалар ҡойма кемдеке булыуын әйтеп торған ул. Йығылған ағасты, һынып төшкән ботаҡтарҙы ла йыйыр булғандар. **Күре-**

некле кешеләрҙең, әүлиәләрҙең ҡәберен аҡ таш менән уратыу ғәҙәте булған.

## Б

Беренсе мәртәбә мин Үргендә етмеш һигеҙенсе йылда ҡыш булғайным. Олатайҙарымдың нигеҙен, улар ултыртҡан сал өйәңкеләрҙе күрҙем, улар баҫып йөрөгән ерҙәрҙә йөрөнөм, Үрген буйҙарының, Үрген тауҙарының улар һоҡланған матурлыҡтарына хозурланып баҡтым. Һәммәһе лә уң килеп торғандай, үҙ инәйем, ҡәрсәйемдең Әбдрәхим исемле ҡустыһының һикһән йәштәрҙәге әбейе Шәкирә инәй, Ерәнсә сәсәнде «яҡындан белеүсе» булып сыҡты. Ниңә «яҡындан» тинем әле? Эш шунда: Ерәнсә сәсән иҫтәлеген һаҡлау, уның зыяратына күҙ-ҡолаҡ булып, уны төҙәтеп тороу бурысы, баҡһаң, борон-борондан уҡ быуындан быуынға, ҡулдан ҡулға тапшырыла килә икән. Һуңғы осорҙа был бурысты беҙҙең яҡтарҙа исеме, даны киң таралған, халыҡ табибиәтенең (йәғни медицинаһының) тәрән серҙәренә эйә булған Шамғол бабай башҡарып килгән. Ул Ерәнсә сәсән иҫтәлеген гел яңыртып, йыл һайын уның зыяратын барып ҡарап, ер өҫтөндәге таш бураманың төшкән йә ҡыйшайған урындарын төҙәтеп һалып, һәр кемгә лә тиерлек уның хаҡында белгәндәрен һөйләп йөрөр булған. Шунан ул, үтә ҡартайып, зыяратҡа күҙ-ҡолаҡ була алмай башлағас, ошо инәйемде үҙе янына, Эйек буйындағы Ишбирҙе ауылына, саҡыртып ала. Ни өсөн саҡырғанлығын асыҡ итеп һөйләп бирә лә уға Ерәнсә сәсәндең зыяратын ҡарау, уның тураһында кешеләргә яңыртып һөйләп тороу, белмәгән-күрмәгәндәргә ҡәберенең ҡайҙа икәнлеген күрһәтеү бурысын тапшыра. «Ошо бурысты үтәһәң, минең шәкертем булырһың, Шәкирә», — ти атаҡлы халыҡ табибы Шамғол бабай инәйемә.

Барып, зыяратты ҡарап, төҙәтеп йөрөйҙәр улар.

— Уратып өйөлгән таш — ҡәбер урыны булыр. Ә башы осонда өҫтәл һымаҡ яҫы таш торор. Ҡурҡма, әгәр мин төҙәтеп киткәндән һуң киренән ыҡһа, ятып ҡара. Унда яҙыуы ла күренер. Яҙыуҙы һары мүк алыр. Шул яҙыулы баш осо ташын бигерәк тә ныҡ тәрбиәлә, — ти Шамғол бабай.

Шәкирә инәйем уның аманатын ҡулынан килгәнсә үтәргә тырыша.

## В

### Әүлиә ҡәбере

Тимәшкә ҡәберлегенең һаҡсыһы бар ине. Тәүҙә Сөнәғәт бабай ине. Улар ҡарауылсы булғанда барып килдек. Ҡәбер бик һәйбәт ерҙә, тауҙа. Мин әйтәйем һиңә, беҙ барыуға, ҡунаҡ ҡаршылағандай булып, һайрай ҡоштары. Кешеләр, унда айыу, йылан бар, ебәрмәйҙәр, тигән булалар. Беҙгә улар осраманы, булманы. Зыяратын тимер менән рәшәткәләп йоҙаҡ ҡуйған ҡарауылсы. Беҙ

тәүҙә өс рәт әйләнеп тәкбир әйттек. Ике рәт намаҙ уҡыныҡ. Зыяратта бик ҙур ҡарағай ағасы бар. Шуны ҡосаҡлап-ҡосаҡлап илап әйләндек. Уның бөрөһө лә бар, һандуғастары һайрай. Бабай: «Тубырсығын йыймағыҙ, туп итеп алдығыҙға ғына төшкәнен йыйығыҙ», — тип әйткәйне. Асып керҙек. Ҡәберенең башы осонда ике төрлө таш тора, эскәмйә кеүек. Таштар икеһе лә ҡөҙрәт менән эшләнгән кеүек соҡорло. Береһенә ҡатындар, икенсеһенә ирҙәр хәйер һала. Хәйер һалғас: «Бабай, беҙ һине күрергә килдек, шәфҡәтеңде насип ит! Балаларыбыҙҙың балаларына ярҙамың тейһен! Яҡындарыбыҙға, илгә, үҙебеҙгә — әхирәттә лә, донъялыҡта ла бәхилле бул!» — тип теләк теләнек.

«Әүлиәләр зыяраты кәмемәҫ» тигән китап.

Ул әүлиә Сәйҙи Йәғәфәр ишан булған. Инәһе — Рәжәпбикә, атаһы — Ғабдулла. Сәйҙи Йәғәфәр япон һуғышында булған. Шунда мөғжизә күрһәткән. Уны кафырҙар атырға иткән. Шул саҡта ул юҡ булған да ҡуйған. Һыуҙың хәҙер бер яғында булһа, хәҙер икенсе яғында, ти. Уҡ та теймәгән, «Иннәфәтә әхна» сүрәһен уҡып, таяғын һыуға һалһа, шул юл булған уға.

Тәүҙә ул Иҫке Мерәҫтә булған. Шунан бында килгән. Башҡорттар: «Ергә керә!» — тип унан ер ҡыҙғанғандар. Ер бирмәҫкә итеп бер уҫалыраҡ кеше: «Уға Аллаһы тәғәлә былай ҙа килтереп тора бит!» — тип әйткән. Йәғәфәр ишан шунда: «Был Мерәҫкә оло бәлә килмәһен, кесе бәлә китмәһен!» — тип, фатиха ҡылған да киткән был ерҙән Тимәшкә ауылдары быны ҡабул итеп алғандар. Ул ултырған ерҙә шишмә булған. Төрлө ауырыуҙан ыҙаланған кешеләр шунан дауа күргән. Үҙе киткәс, шишмәләрендә һыу ҙа бөткән. Бик мөғжизәле кеше булған ул.

Мин был ауылға етмешенсе йылда килдем. Яҙын сәсеүгә сыҡҡанда һәр кем: «Эшем ишан бабайға!» — тип, бағышлай.

Ишан минең төшөмә керҙе: «Балам, исемемде телеңдән һалмайһың, беҙҙең йортто барып күреү кәрәк ине», — тине. Шунан барҙым. Аллаға шөкөр! Захар тирмәненең ҡаршыһында ғына ул зыярат. Мин уның «өйөн» күрҙем. Ҡәберҙең һул яғынан башлап уңға, ҡиблаға табан (сәғәт әйләнеүенә ҡаршы): «Аллаһы әкбәр, лә илаһи илаллаһ, әлхәмде!» — тип өс әйләнәһең. Шул саҡ бөтә тәнгә еңеллек килгән һымаҡ булып китә лә әйләнгән һайын әйләнге килеп тора. Тик күп ярамай.

Ҡәбер баҡсаһын асып кереп, баш осонда ултырып доға уҡығанда, мин Аман Рәсүле сүрәһен, хәҙрәт Ғәлене, хәҙрәти Хәсәнде уҡыным. Шундайын йәнгә рәхәт булды.



# ҠУЙЫУ-ЕРЛӘҮ ЙОЛАҺЫНА БӘЙЛЕ ҺАМАҠТАР, ӘЙТЕМДӘР, ҺЫҠТАУ-ҺЫҒЫНЫУҘАР

## 366. ӘХИРӘТКӘ ӘҘЕРЛӘНЕҮСЕНЕҢ АЛЛАҒА ҺЫЙЫНЫРҒА ӨНДӘГӘНЕ

Был донъяларҙин китә әҙәм —
Малы бирмәй уға ярҙам.
Иҫеңдә тот мине һәр әҙәм,
Тәүбә итеп ҡәлбең * саф ҡыл!

Бөгөн көндә, яҡты таңда
Сығыр йәнең, — шуны аңла.
Шуны аңла: ғафил * ҡалма,
Тәүбә итеп ҡәлбең һаҡлағыл!

Шәриф тәнең ауырып ҡалыр,
Ғазраил килеп, йәнеңде алыр.
Вариҫтар бүлеп, малыңды алыр,
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Йәнең сыҡҡас, һинең өҫтән
Кейемдәреңде алырҙар.
Йыуыр өсөн һине шунда
Ҡабыҡҡа һуҙып һалырҙар.

Йәнең сыҡһа шәриф тәндин,
Оҙатырға килер дуҫтар.
Иҫәпләһәң, китә һуштар —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Йыуырға башлағас, тәнең
Ауыртыр ҡул ҡатылыҡтан.
Үлем хәлен татыулыҡтан —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Алып китергә, ҡәҙерләп,
Әҙер дуҫтар йыраҡ юлға.
Туғандар хәҙер инде
Күтәрерҙәр һине ҡулға.

Беләһеңме, алып китеп
Улар һине ҡайҙа ҡуйыр?
Тәнеңде ҡорттар ейер —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Тәрән соҡорҙо ҡаҙырҙар,
Ләхет урыны алырҙар.
Һине шунда һалырҙар —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Ҡара ер аҫтында ҡалырһың,
Һин үҙең генә ятырһың.
Низәр күренер һинең күҙеңә —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Ҡылып киткән ғәмәлдәрең
Күренер килеп бер саҡ һиңә.
Ғафил булма, шуны ҡуйма —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Донъялыҡта ғәмәл ҡылһаң,
Яман эштәрҙе лә ҡуйһаң.
Гонаһтарыңды ла юйһаң,
Ҡылып тәүбә, йән хаҡына,
Йәнең рәхәт булыр һинең.
Ҡәб(е)реңә нур тулыр һинең,
Дәрәжән ҙур булыр һинең —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Ашығырга тейеш хәҙер
Ҡылырға һин яҡшы эштәр.
Көндөҙөн һәм дә төндәрен —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Әгәр ҡылһаң, ғафил булын,
Был донъяла яман эштәр,
Йылан-саян һине тешләр, —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Дәхи һиңә сағыр күҙле *
Һораусылар килеп керер.
Ғәзиз йәнең яфа күрер —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Әгәр һин теләр булһаң
Ҡотолмаҡсы был эштәрҙән,
Сығарма һис иҫтәрҙән —
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Иҫәпләп һин уйлап ҡара:
Ҡилеп киткән балаларың —
Берәүе китмәй ҡалалармы?
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

Был донъяның миҫалын
Ҡитаптар, ел кеүек, тигән.
Һүҙем шулар, һиңә, һөйгән,
Тәүбә итеп ҡәлбең саф ҡыл!

### 367. ӘХИРӘТКӘ ӘҘЕРЛӘНЕҮСЕНЕҢ АЛЛАҒА ҺЫҒЫНҒАНЫ

А

Ҡыҙыл-ҡыҙыл, ҡып-ҡыҙыл
Дүрткелдәрҙе кем уйған.
Ишеге юҡ, тәҙрәһе юҡ,
Был өйҙәрҙе кем ҡуйған?

Ғосол тотмаған көндәрең
Ҡәберендә тултырыр [31].
Яҙыҡ булған ҡылыҡтарың
Барын әйтеп ултырыр.

Б

Эй, Хоҙайым, ярлыҡа,
Доғаларымды тапшыр,
Белгәнемде ғәфү ит,
Белмәгәнемде белдер!

Өҫтөңдө тупраҡ баҫыр,
Аҫтыңда йылан ятыр,
Ҡырыңа һорау килер,
Нисек яуап бирербеҙ?

В

Рисауай итмә мәхшәрҙә *,
Ҡара һыуға һалғанда.
Гонаһымды аҙ ит,
Ғәмәлемде бар ит.

Сират күперен киҫкәндә [32],
Аяғымды тайҙырма,
Ғәйшә менән Фатиманы
Юлдаш ҡылғыл, сәҙалла *.

Г

Әжәлдәр килһә, юҡ, дуҫтарым дарыу,
Бигерәк ауыр яңғыҙ ләхеттә ҡалыу,
Эй, ауырҙыр әжәл шәрбәтен эскәндә,
Уң ҡул менән һул ҡул бәхилләшкәндә.

Бәхилләшә, айырыла ике күҙем,
Шул ваҡытта, Хоҙайым, бир түҙем,
Ғазраил килер йәнебеҙ алырға,
Ваҡыт бирмәй бер минутҡа ҡалырға.

Үлем хәстәһендә * бер көн ятып,
Ғазраил килгәс тә, беҙ нишләрбеҙ:
«Килдем һеҙҙең йәнегеҙ алырға», — тир
Йәнем ҡурҡа үлем асылығындин,
Әй Хоҙайым, өйрәт сабыр булырға!
Әй Хоҙайым, бир сабырлыҡ тим!

### 368. ЯУАП КӨНӨН КӨТКӘНДӘ

Һуҙылып мин ятып үлермен,
Еңһеҙ генә күлдәк кейермен.
Нәңкер, Мөңкөр * килеп һорау алыр,
Ни нәмә тип яуап бирермен?
Ғазраил алыр йәнемде,
Мәсет ҡарты йыяр тәнемде.
Нәңкер, Мөңкөр килеп һорау алыр,
Кем белер ҙә инде хәлемде.

### 369. ӘХИРӘТКӘ КИТЕҮСЕНЕҢ БӘХИЛЛӘШКӘНЕ

А

Ҡара юлдың ҡырсын ташын
Тирә-тирә китеп барам.
Бәхил булығыҙ, туғандар,
Оҙон юлға китеп барам.

Еңһеҙ күлдәк кейҙерерҙәр,
Башһыҙ атҡа мендерерҙәр.
Ҡаты һорау барған ергә
Бер үҙемде еткерерҙәр.

Еңһеҙ күлдәк кейҙерерҙәр,
Башһыҙ атҡа мендерерҙәр,

Аҡ миткалға урап-урап,
Ҡара өйгә индерерҙәр.

Б

Бөгөн иртән иртә үлһәм,
Ҡәберем тәрән ҡаҙығыҙ.
Баш осома таш ултыртып
Исемемде яҙырһыҙ.

Донъялыҡта ҡалһын исем,
Ҡояш нурына ҡанһын.
Йәнем осоп арыған да
Шул ташҡа килеп ҡунһын.

В

Йәйҙәргә инһәм, йөрөрмөн, тинем,
Хуш еҫтәр еҫкәп, терелермен, тинем.
Әжәл шарабын бер көн эсербеҙ,
Яҡты донъянан бер көн күсербеҙ.

Күҙем йомһам да, күҙҙәрем тала,
Барса әҡрәбем * донъяла ҡала.
Һеҙгә, дуҫтарым, аҡтыҡ һүҙҙәрем:
Доға уҡығыҙ, йомһам күҙҙәрем.

Тәндәрем зәғиф — ҡаты йыумағыҙ,
Кире ҡайталмам — ашыҡтырмағыҙ.
Буй-һынғынамды үлсәп алығыҙ,
Йыуып һаҡлағас, кәфен һырығыҙ.

Иптәш ҡалмаған, түшәк йәймәгән,
Күлдәк тегелгән аҡ-бүҙ йәймәнән.
Күкрәгем кибә, тындарым бөтә,
Ясин уҡығыҙ, ваҡыттар етә.

Алыҫ ерҙәрҙән күрергә килгәндәр,
Күреп ҡалһындар, «ҡайтмаҫ», тигәндәр..
Ҡәбер өҫтөмә сарҙаҡ * ҡороғоҙ,
Ағас ултыртып, ҡыуандырығыҙ.

Япраҡтар ярһа, ҡоштар һайраһа —
Рухым шатланыр, доғағыҙ барһа.
Бик ауыр икән донъя кисеүе,
Мөшкөл хәл икән ташлап китеүе.

Был донъяларҙа йөрөп туйманым,
Туйһам да мин, мәңге тормамын.
Күңелем үҫмәне, ҡулым барманы,
Хәсрәтле уйҙар минән ҡалманы.

Йәнем сыҡҡанда, янда булығыҙ,
Сәғәҙәт менән хуш, тип тороғоҙ.
Йәндәрем сыҡһа, тәнем һыуынһа,
Йөҙөм һалығыҙ ҡибла яғына...

Г

Мин киткән саҡта,
Бик илашмағыҙ.
Тәндәрем зәғиф,
Ҡаты тотмағыҙ.

Был яңғыҙ өйгә
Ҡемдәр килтергән?
Тәҙрәләре юҡ, —
Ҡемдәр бөтөргән?

Минең өҫтөмдә
Сейәләр бешә.
Ҡулымды һонһам,
Тупраҡтар төшә.

Һеҙ ҙә үлерһеҙ,
Гүргә керерһеҙ.
Яуап алырҙар,
Унан белерһеҙ.

Донъяла саҡта
Уҡыплар ҡалың,
Донъяла саҡта
Үлемде иҫкә алың.

## 370. ТЕРЕЛӘРҘЕҢ ӘХИРӘТКӘ КИТЕҮСЕ МЕНӘН БӘХИЛЛӘШКӘНЕ

А

Бәхил бул, тыныс йоҡо,
Беҙ бармайбыҙ әле,
Балалар үҫтерәбеҙ әле,
Ҡарттар бар әле,
Бәхил бул!
Сәләм әйт мәҡамыма,
Ятаһы тупрағыма,
Беҙҙе көтмәһендәр әле.

Б

Тыныс йоҡла, бәхил бул,
Ауылға йыш ҡайтма,
Йәп-йәштәрҙе алма,
Юлдарҙы өҙмә,

Сыбарлап йөрөмә,
Төшкә йыш кермә,
Тәһәрәтең теүәл,
Иманың камил,
Бәхил бул!

В

Бәхил бул!
Гүрең яҡты булһын,
Ауыр тупрағың еңел булһын,
Һыуыҡ тупрағың йылы булһын,
Ғәмәл пәрҙәләрең уң булһын,
Һулға түгел, уң ҡулыңа килһен,
Бәхил бул, тыныс ят!

## 371. ТАМЪЯН ЫРЫУЫНЫҢ ШӘҒӘЛИ ШАҠМАНҒА ҺЫҠТАҒАНЫ

Беҙҙе ниңә ташлап киттең,
Аҡ шоңҡарҙай атабыҙ?
Беҙҙе ниңә етем иттең,
Аҡ шоңҡарҙай атабыҙ?
Һинән башҡа көнөбөҙ ҡара,
Төнөбөҙ һалҡын беҙҙең.
Һин күктәге ҡояш инең,
Һин төндәге ай инең...
Әй! Әй! Әй! Әй-й!..
Аҡ шоңҡарыбыҙ — Шаҡманыбыҙ,
Онотма беҙҙе, ҡайта йөр,
Яҡшы һүҙең әйтә йөр!..
Әй! Әй! Әй! Әй-й!..
Беҙ иламай, кем илар,
Йорт башыбыҙ һин инең.
Ил иламай, кем илар,
Ил эсендә бер инең,
Һин бит батыр ир инең,
Ил ҡашында бер инең.
Күктә шоңҡар һин инең,
Ерҙә толпар һин инең!
Ил-йортобоҙ ҡорҙоң һин,
Яу ҡайтарып йөрөнөң һин,
Ил дошманын ҡырҙың һин;
Бөтәбеҙгә баш булдың,
Күҙ өҫтөндә ҡаш булдың...
Ауыр тупрағың еңел булһын,
Баш аҫтыңа яҫтыҡ булһын,
Ил ағаһы Шәғәле!
Әй! Әй! Әй! Әй-й!

# ТУЙ ЙОЛЛАРЫ

## СВАДЕБНЫЕ ОБРЯДЫ

## YÖRESEL DÜGÜNLER - toylar

## WEDDING RITES



## БИШЕК ТУЙЫ [1]

Ике ғаилә, үҙ-ара туғанлашыу-дуҫлашыу ниәтенән, тыуасаҡ балаларын йәрәштерергә һүҙ бирешәләр. Береһенең ҡыҙы, икенсеһенең улы тыуһа, бишек туйы үткәреү ваҡытын тәғәйенләйҙәр Ғәҙәттә, туй балалар тыуыуына ҡырҡ көн тулғанда уҙғарыла. Исем ҡушыу йолаһы ла ошо туйҙа үткәрелә. Бығаса баланы тәүге исеме [2] менән генә исемләп йөрөтәләр. Ғаиләлә тәүге балалар үлеп торһа, бишек туйын мотлаҡ үткәрергә тырышалар.

Бишек туйы ҡыҙ атаһы йортонда үтә. Балаларҙың ата-әсәләре сит ырыуҙан абруйлы кешеләрҙе ҡиәмәтлек ата-әсә итеп һайлайҙар, уларҙы туйға саҡыралар. Ҡиәмәтлек ата-әсә булыу хөрмәтле һәм изге эш иҫәпләнгән.

Бишек туйында ике яҡ бер-береһенә бүләк бирешә. Шулай уҡ ҡиәмәтлек ата-әсәгә, килгән әбей-һәбейҙәргә бүләктәр бирелә. Йәрәшеү билдәһе итеп, ике яҡ бер туҫтаҡтан ҡымыҙ эсә. Был йола бата * эсеү тип атала. Шунан сабыйҙарҙан бер-береһенән ҡолаҡтарын тешләтәләр [3]. Әбейҙәр әйтә:

— Ир бала ла ирәбе * —
Атаһынан ҡот ейгән.
Ҡыҙ бала ла ирәбе —
Әсәһенән һөт имгән.

Собханалла *, машалла *!
Яман күҙҙән һаҡлаһын,
Яман артаҡтан * һиҫкәнмәй,
Батырҙарса йоҡлаһын.

Беҙ — ҡиәмәт әсәләр,
Төп яратҡан әсә — беҙ.

Ҡөсөк күлдәк ташлатып,
Яңы күлдәк бесәбеҙ.

Шулай бишек туйы уйын-көлкө менән уҙғарылған бер байрам төҫөн ала.

## ҺЫРҒА ТУЙЫ

Ир бала атҡа менерлек, ҡыҙ бала көйәнтә күтәрерлек булғас, һырға туйы үткәрелә. Был туйҙа ир баланың ата-әсәләре килен буласаҡ ҡыҙға бүләккә алҡа, шәл алып килә. Бүләктәрҙе тапшырыу өсөн ҡушамат егет (кейәү егете) тәғәйенләнә. Ул йырсы ла, ҡурайсы ла, көрәшсе лә булырға тейеш.

Ҡыҙҙың да ата-әсәләре буласаҡ кейәүҙәренә сигелгән билбау, түбәтәй алып килә. Ошоларҙы тапшырыу өсөн «ҡушамат ҡыҙ» * тәғәйенләнә. Уның да һәйбәт йырсы, бейеүсе, төҫкә-башҡа сибәр булыуы шарт. Ҡушамат егеткә һәйбәт ҡуш булырлыҡ булһын.

Һырға туйының үҙәк өлөшө — үҫмер йәштәргә теләк әйтеү һәм ҡыҙға алҡа тағыу йолаһы. Бер яҡтан, башын ҡыҙыл сымылдыҡ менән ҡаплап, ҡыҙҙы, икенсе яҡтан егетте алып сығалар. Егет башына күк йә йәшел төҫтәге сымылдыҡ ҡаплайҙар [4].

Ҡыҙҙы күрһәтерҙән әүәл кейәү егеткә лә, ҡыҙға ла үҙен нисек тоторға өйрәтеп, өгөт-нәсихәт әйтәләр. Ҡыҙға:

Ҡушағанды *күргәндә
Ҡулың ҡалтырамаһын;
Ҡейәүең айбарһыҙ тип,
Юҡ-барға бойоҡмаһын.

Ҡыҙға бәхет, тәүфиҡ теләйҙәр; ипле, баҫалҡы, эшсән, тыңлаусан килен булырға өгөт-нәсихәт бирәләр. Ошонан һуң йәштәрҙең йөҙөн асып, икеһенә лә бәхет теләйҙәр.

Йырҙар, әйтештәр бөткәс, ике яҡ бер-береһен бүләкләй. Ҡушамат ҡыҙ үҙенең кейәүенә янсыҡ, сигеүле билбау, ә ҡушамат егет ҡыҙға алҡа, шәл бүләк итергә тейеш. Йырсылар маҡтап, ҡеүәтләп тора:

Әйҙә, егет, шәл ябындыр,
Буйын биҙәп торһон тип.
Йәш елкенсәк һүҙ ҡушҡанда,
Битен ҡаплап торһон тип.
Йәш елкенсәк һүҙ ҡушҡанда,
Йөҙөн ҡаплап торһон тип.

Әгәр бығаса бишек туйы үткәрелмәгән булһа, үҫмер кейәү ҡыҙға шәл яба. Ҡейәү яғы артынса ҡыҙ яғы бүләк бирә башлай. Ҡушамат ҡыҙ һәр бер бүләкте маҡтап, йыр йырлап таратырға

тейеш. Ҡейәү балаға ул суҡлы янсыҡ бүләк итә, билен уҡалы билбау менән быуа. Барыһы ла балаларға бәхет теләй.

Был йолалар башҡарылғас, бейә йә һарыҡ һуялар. Малды кейәү яғы кешеләре һуйырға тейеш[5]. Бисәләр һуғымдың эс-ҡарынын йыуа. Улар һуғымдың таҙ ҡарынын алып, ҡоҙаларҙың башына ҡапларға тырыша. Ҡоҙалар ҡарынсыға тәңкә, яулыҡ, бүтән бүләк биреп кенә ҡотола. Һый бүләктәре әҙ тойолһа, килендәр һамаҡлай-һамаҡлай тағы ла ҡарын менән янайҙар.

Һуғымдың һебә һөйәге менән муйын һөйәге яусыға тотторола. Яусы ике яҡтан ҡушамат йырсыларҙы әйтешкә саҡыра. Әйтешйыр бәйгеһенән һуң балаларҙың аталары ҡушаматтарға — билбау, ә әсәләре егет ҡушаматҡа — ҡулъяулыҡ, ҡыҙ ҡушаматына йөҙөк бирә.

Бүләкләшеү тамамланғас, һебә өсөн көрәш асыла.

Егет яғы туйҙа һуғымға мал килтерә. Һуғым итен бөтә ауыл халҡы ауыҙ итергә тейеш була.

Йола буйынса, ике яҡтың батырҙары майҙан тоторға тейеш. Еңеүсегә бүләккә — һебә ҡабырғаһы[6], еңелгәнгә — муйын һөйәге тотторғандар. Әгәр һебәне ҡыҙ яғы батыры алһа, ҡыҙ киләсәктә бейбисә исем-дәрәжәһенә эйә була. Бейбисәнең ире уның өҫтөнән икенсе бисә ала алмай. Әгәр һебәне егет яғы батыры алһа, ҡыҙ байбисә һанала. Был осраҡта кейәүҙең икенсе ҡатын алырға хоҡуғы бар. Ҡыҙҙың бейбисә йәки байбисә булыуына ҡарап мәһәр хаҡы ла үҙгәрә. Бейбисә булған ҡыҙҙың атаһы никах туйында теләгәнсә ҡалым малы, мәһәр һорарға хаҡлы. Һебә ҡабырғаһы алған егет ҡушамат ҡыҙҙы алһа, ҡауышыусы балалар бәхетле була, тип юрағандар. Көрәштә бил бирмәгән егеткә барырға тейеш булғанға, ҡыҙ ҡушаматы үҙенең яғында көрәшсене үҙе һайлай. Батырҙар майҙан тота. Майҙан хужаһы көрәшсегә билбау тотторғанда, ҡушамат ҡыҙҙың әхирәттәре һамаҡлап тора:

— Туйға килгән батырҙар,
Туйҙа кеме дан алыр?
Ҡөсө менән дан алған —
Ҡушамат ҡыҙҙы шул алыр!
Ҡушаматыбыҙ һылыу —
Батыры уға тиң булһын!
Икеһе лә пар килеп,
Ғүмерҙәре уң булһын!

Ҡайһы яҡтың көрәшсеһе еңә, шул яҡ, уны маҡтап, йыр йырлай. Еңеүсегә ҡушамат ҡыҙ йөҙөк бүләк итә. Әгәр һөйгәне еңеп сыҡһа, бүләген тапшырғанда ҡыҙ шулай тип йырлай:

— Сәс(е)рәтеп тә аға яҙғы һыуҙар,
Ер йылынғас, яҙғы ла болонда.
Егеткәйем, һиңә мин — бүләкмен,
Эсәр һыуым булһын иләндә.

Егет тә уға йыр менән яуап бирергә тейеш [7].

Әгәр ҡыҙ ҡушаматлыҡҡа көсләп алынһа, әхирәттәре, был турала белгертеп, асыулы һамаҡ әйтә, йыр менән риза һыҙлыҡтарын аңғарта. Был осраҡта егет менән ҡыҙ араһында ла ҡапма-ҡаршы әйтештәр булғылай.

Ҡөрәш бөтә. Батырҙар үҙҙәренә тейгән һебә менән муйын һөйәген йәрәшеүсе балаларға бирәләр.

Еңгәләр, өлөштәрҙе бешереп, ир яғынан килгән сәсәндәрҙе, ҡунаҡтарҙы һыйлайҙар. Сәсәндәр балаларҙың хоҡуҡтары, бурыстары хаҡында һамаҡ әйтә. Һебә ҡыҙ яғына эләкһә, ҡыҙ яғы йырсыһы, шаяртып:

— Ҡоҙа һуйған һимеҙ мал,
Ашатырға — ҡаҙы-ял.
Ҡыҙ балаға һебә тейҙе,
Егет яғы бигерәк йәл.

Ә егет яғы йырсылары һыр бирмәй:

— Ҡатын йортҡа бей булһа,
Айыры тояҡ мал уңыр,
Ҡатын байбисә булһа,
Ире илдә ел ҡыуыр.

Ҡара-ҡаршы әйтешеп, йырлашыуҙар бөткәс, балаларға тигеҙ ғүмер, бәхет теләйҙәр. Бер-береһен күреп, эҫенеп алһындар өсөн, балаларҙы аҙ ғына ваҡытҡа бер тирмәлә ҡалдыралар.

— Йә йылмайып һиңә таба
Бер бөртөк тә ҡарамай, —

тип таҡмағын әйтәләр.

Әгәр ҡыҙ егетте бер күреүҙә үк үҙ итһә, бейергә төшкәс тә, яулыҡ осон тотоп, дәртләнеберәк бейей башлай. Быны хуплап, таҡмаҡ әйтәләр:

— Әйҙә шулай бейегеҙ,
Тиң икәнһеҙ икегеҙ.
Күгәрсендәй гөрләшеп,
Тигеҙ ғүмер итегеҙ.

Шулай ҡыҙ һайлау, килешеүҙең үҙ билдәләре бар. Йыр ғына түгел, бейеү рәүеше лә — үҙе бер ишара. Әгәр егет оҡшаһа, ҡыҙ ҡулын һул бөйөрөнә ҡуйып, һул ҡулын уң ҡулы өҫтөнә һалып бейер. Әгәр йәштән ҡолағын тешләгән егете булһа, һул ҡулын уң яҡ бөйөрөнә ҡуйып, уң ҡулын һул ҡулы өҫтөнә һалып бейер. Әгәр был егетте һис тә яратмаһа, ике бөйөрөнә таянып бейер.

Бейеү аҙағында егеттең әсәһе, бер туҫтаҡ ҡымыҙға тәңкә һалып [8], ҡыҙға бирә. Ҡыҙ аш хаҡына туҫтаҡтан баш тартмай, уны төп күтәрә эсеп, тәңкәһен алырға тейеш. Егетте яратмаған сүрәттә лә, уның әсәһен оҡшатһа, туҫтаҡҡа үҙе тәңкә һалып ҡайтара. Әгәр ҡыҙ риза булһа, туҫтаҡҡа яңынан ҡымыҙ һалып, тулы туҫтаҡ бирә.

Ҡыҙ күҙләгәндә, төрлө уйындар, бигерәк тә «Аҡ тирәк» уйынын уйнайҙар. Ләкин уйын ҡәҙимгесә түгел, ә бик үҙенсәлекле төҫ ала.

Уйында ҡыҙҙар, егеттәр, хатта ҡыҙыҡ өсөн ҡарсыҡтар ҙа ҡатнаша. Бер ситкәрәк китеп йәки ҡыуаҡлыҡҡа инеп, кейемдәрен алыштырышып кейәләр[9]. Уйын кис, күҙ бәйләнгәс, уҙғарыла. Кейем алыштырышып бөткәс, ҡыҙҙар оран бирә:

— Аҡ тирәк!..

Егеттәр:

— Күк тирәк!..

Ҡыҙҙар:

— Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?

Егеттәр:

— Арағыҙҙан ҡыҙ кәрәк!

Ҡыҙҙар:

— Ҡулығыҙҙа ниҙәр бар?

Егеттәр:

— Бауға теҙгән тәңкә бар!

Ҡыҙҙар:

— Һабағында ниҙәр бар?

Егеттәр:

— Шәлкемләнгән ебәк бар!

Ҡыҙҙар:

— Әтәмбәйҙең нейе бар?

Егеттәр:

— Йөҙ йыуырлыҡ малы
(Бит йөҙлөккә малы) бар!

Бүләкте атап билдәләп бөткәс, ҡыҙҙар, ҡарттар, ҡарсыҡтар, малайҙар кейенеп, өс төркөмгә бүленеп, килеп сығалар. Егет күҙе төшкән ҡыҙҙы ҡыуып тоторға тейеш. Үҙе һайлаған ҡыҙҙан башҡаны тотҡан һайын егет хаҡ түләй, йыйындағыларға бүләк өләшә. Әгәр ул үҙе теләгән ҡыҙҙы тотһа, уйын ҡағиҙәһенә буйһоноп, ҡыҙ уның биргән бүләген алырға тейеш була. Ҡыҙҙың ҡолағы тешләтелгән булһа, әхирәттәре егеткә шулай ти:

— Һәр нәмәнең ине * бар,
Алырыңды белеп ал:
Ҡолағында һыры бар —
Йәрәшелгән йәре бар.

Ҡыҙ бүләкте алмай. Алдан һөйләшеп һүҙ ҡуйышҡан егете булһа ла, шулай итә. Ул сағында егет менән ҡыҙ араһында аңлашыу бөтә. Ҡыҙҙың атаһы егетте оҡшатһа йә малына ҡыҙыҡһа, балаһын ризалаштырырға тырыша. Әгәр һайланған ҡыҙ һырға туйында һебә алыусы булһа, аталары уны ҡолаҡ тешләүсе егеткә бирмәҫкә иректәре булғанын белдерәләр. Ҡыҙҙың фекерен белер өсөн, егеттең әсәһе бер туҫтаҡ ҡымыҙға тәңкә һалып бирә. Әгәр

атаһының теләгән ҡабул итһә, ҡыҙ туҫтаҡты алырға тейеш. Ҡыҙ риза булмаһа йыр менән уй-фекерен әйтеп бирә. Әхирәттәре уның исеменән сеңләй.

Зифа буйым ник үҫтерҙең,
Һатыр өсөнмө, атаҡайым.
Ҡолағымды ник тешләттең,
Илатыр өсөнмө, атаҡайым?

Ҡолаҡ тешләү йолаһы,
Аттың була ҡолаһы.
Һүҙен тотмай ҡоҙаһы,
Йәрәшеүҙе боҙасы.

## ҠЫҘ КҮҘЛӘҮ

Өйләнер ваҡыт еткәс, егет ҡыҙ һайларға берәй ауылға, сит ырыу яғына сығып китә. Егет йә әсәһе, йә яҡын дуҫы менән бара.

Ҡыҙ белешеү, танышыу, туғандар йә таныштар аша булыуы мөмкин. Танышырға иң яйлыһы, әлбиттә, — ҡыҙҙар уйыны. Шунда бар йәш-елкенсәк, ҡыҙ-ҡырҡын йыйыла. Ҡыҙ күҙләү уйыны йәй булһа — туғайҙа йә тауҙа, ҡыш икән — аулаҡ өйҙәрҙә уҙғарылған. Ҡыҙ күҙләп килгән егетте уйын башында уҡ күрһәтеп, таныштырып алалар. Ҡайһы саҡ йыр менән, ҡайһы саҡ йор һүҙ менән. Һәләтле, ҡыйыуыраҡ егет икән, ул, үҙе күҙе төшкән ҡыҙға уйын, теләгән белдерә. Улай булмағанда, егет теләктәштәре йыр менән ярҙамлаша.

Ҡашың ҡара ҡаралған,
Һөрмәләрҙән ҡаралған.
Ғишыҡ тотоп ҡушылышыу
Бәйғәмбәрҙәрҙән ҡалған.

Йыр артынса егет ҡыҙҙы бейергә саҡыра. Ҡыҙ егетте оҡшатһа, оҡшатмаһа ла бейергә төшөргә тейеш. Ҡалған йәштәр таҡмаҡ әйтеп тора.

Ҡыҙ бейеп бөткәс, күҙләргә килгән егетте таҡмаҡлай-таҡмаҡлай төшөрәләр:

— Ҡыҙың һайла үҙеңә,
Ал һин уны бейергә.
Матур ҡыҙға күҙең төшкәс,
Беҙ күрәйек һине лә.

Егет ҡулына яулыҡ тотоп бейей. Әгәр ҡыҙ егеткә барырға теләмәһә, яулыҡҡа ҡағылмай, айырым ғына бейей. Таҡмаҡсылар, ҡыҙҙың уй-фекерен белеп, егеткә:

— Егет, инде үпкәләмә,
Ҡыҙ бейеүең яратмай, —

ти.

Ҡыҙ күҙләүҙә ике яҡ уртаҡ тел таба алмаһа, һөйләшеүҙе башҡа ваҡытҡа күсерәләр.

## ЯУСЫЛАУ

Күңелдәренә оҡшаған ҡыҙҙы һоратыр өсөн егет атаһы ҡыҙ йортона яусы ебәрә. Яусы илдә абруйлы, үткер, йор һүҙле, аҡыллы кеше булырға тейеш. Ике араһағы килешеү-килешмәүҙең һөҙөмтәһе яусыға бәйле. Яусы, йәйәү йөрөһә, ҡартмы, йәшме, ҡуш асалы (саталы) таяҡ таяныпп[10], уң балағын һалындырып, билен быуып йөрөй. Һоратылыусы ҡыҙ менән ауылдаш булһа ла яусы, ғәҙәттә, ат менеп ала Бындай саҡта эйәренең ҡанъяғаһына ул сәрмә тағып килер. Яусы-димсе икәнен шунан белерҙәр. Ҡайһы бер яҡтарҙа, өйгә ингәс тә, яусы үҙенең аҫтына мендәр тартып алып һала. Был да уның ниндәй йомош йомошлауын аңлата. Шуға ла, әгәр берәү, кешегә килгәс, үҙ аҫтына үҙе мендәр тартып һалһа: «Яусылай булып, мендәр ҡуптарып ала бит әле!» — тиҙәр.

Яусы туранан-тура ҡыҙ йортона барып инмәй, уратып-суратып йөрөп, икенсе бер йортҡа кереп сыға[11], шунан ғына ҡыҙ йортона юллана. Һүҙен дә уратып башлай. Хәл-әхүәл һорашып бөткәс кенә: «Юҡ юғалтып (юғымды юллап) йөрөйөм», — тип әйтеп ҡуя йәки: «Юғалған аҡ ҡуй һеҙҙәме?» — тип һорай.

Беренсе килгәнендә яусыға ҡыҙ атаһы төплө генә яуап бирмәй. Үҙе лә ситләтеп: «Юғыңды эҙләй тор», «Ул ҡуй беҙгә кермәне әле», — тип әйтеп оҙата йә мәһәр хаҡын «туғыҙҙан[12] һала». Яусы киткәс, ҡыҙҙың атаһы ағай-энеһен, туғандарын йыйып кәңәш итә, ете быуынғаса ҡыҙ һоратыусының ғаилә, нәҫел-ырыуын төпсөй. Һуңынан яусыға хәбәр ебәрә.

Яусы, икенсе килеүендә, инде яусы ҡоҙа булып, туп-тура ҡыҙ йортона төшә. Яусының үҙен ҡыҙҙың әхирәттәре, йәш килендәр яман һүҙҙәр менән тиргәп, һамаҡлап ҡаршы ала[13]:

— Суҡмарҙай ҙур танауың
Емтек эҙләр ас эттәй,
Атҡа менеп, эҙләнеп,
Ниңә килеп туҡтаның?

«Юҡ юғалтып йөрөйөм, инде юғымды табып бирегеҙ», — тип, яусы ҡыҙ атаһына һүҙ ҡата. Ҡинәйәләп, һамаҡлай-һамаҡлай ниәтен әйтә:

— Миндә ҡайыш баулы ҡарсыға бар,
Һиндә ебәк баулы тутыйғош бар:
Шуны һорай килгәнмен...

Һөйләшеүҙәр бөткәс тә, йәштәр, яусыны яманлап, төнө буйына йырлап йөрөйҙәр:

— Һәр ауылдың таҙы бар,
Ҡыҙ баланың наҙы бар.
Беҙгә килгән яусының
Түбәһендә таҙы бар.

Яусы ике арала ҡайта-ҡайта йөрөй. Ҡыҙ атаһы, яусы менән һөйләшеп, егет атаһына ҡарындаш (ҡоҙа) булырға булһа, туғандарын кәңәшкә йыя. Был йоланы баш ҡушып кәңәшеү тиҙәр. Ул кәңәшкә яусы ҡыҫылмай, ҡыҙ атаһының яҡын ҡарындаштары ҡоҙа булыуҙы тейеш тип тапһалар, бер фекергә килгәс, яусы янына күмәкләшеп инәләр ҙә:

— Юғалған малың табылды, һөйөү кисәһен тәғәйенләйек, — тиҙәр.

Ҡыҙ атаһы яусыға — бер күлдәклек — яусы бүләге бирә. Яусы ҡыҙ атаһынан алған һүҙҙәрен егет атаһына барып һөйләй. Шунан һуң бер-ике туған кешеһен алып ҡыҙ әйттерергә китә. Һуңғы килеүендә мал биреү булъялын * ҡуйып, мал алыу туйына саҡырып уҡ ҡайта. Ҡыҙға ҡолонло бейә йә тыу бейә, быҙаулы һыйыр, һарыҡ бирергә вәғәҙәләшәләр [14].

Иң аҙаҡҡы урап ҡайтыуында яусы, таяғына таянып, егет атаһына ҡарап, өндәшмәй тора. «Яусының яңағы ҡарышып киткән икән!» — тиҙәр. Егеттең атаһы табан ялына яусының ауыҙына тәңкә ҡаптыра. Яусы ҡалым, мәһәр хаҡында килешкәнлеген, ҡоҙаларҙы күндергәнен әйтә.

Ҡайһы берҙә ҡыҙ әйттерергә оло әбей йә егеттең ата-әсәһе йөрөгән. Һөйләшер алдынан ике ҡоҙа әйтем әйтешеп тә алғандар [15]. Йомаҡ ҡойоу, йырлашыу йолалары булған:

Ҡыҙ атаһы:

— Килгәндә ни күрҙең?

Егет әсәһе:

— Парлы ат күрҙем,
Икеһе лә күк икән,
Дилбәгәләре яҡшы икән,
Тотҡан мин дә тотоп алдым,
Ысҡындырмайынса ҡалдым,
Ҡулда көс тә бар икән!

Шулай әйтемләшеп, ҡоҙалар вәғәҙә бирешәләр. Егет әсәһе — вәғәҙә бүләген, ҡыҙ атаһы яусы күлдәген тапшыра. Шунан ашһыу менән ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә.

## МӘҺӘР КИЛТЕРЕҮ

Бер аҙҙан ҡыҙ йортона мәһәр килтерелә: булаһы киленгә егет атаһы бер ҡат кейенерлек кейем, һый-хөрмәт бүләге алып килә. Мәһәрҙә төрлөһө була: бал, быҙау, гөрәнкә сәй, инә туны [16], кү-

шәгәбаш күлдәк, әбейгә күшәгәбаш күлдәк, ҡыҙға ике ос әҙрәс тире, ҡыҙ мәһәре — ҡалыншәл, ситек, күлдәк һ. б. [17]

Ҡоҙалар бер-береһенә бүләк бирешәләр. Ҡыҙ туғандары бөтәһе лә бүләкле булырға тейеш.

Был осрашыуға ҡоҙалашыусылар туй ваҡыты, мәһәр хаҡы, башҡа туй мәшәҡәттәре тураһында ентекләп һөйләшәләр. Килешеү билдәһе итеп, ҡыҙ атаһы егет атаһына тасҭамал биреп ҡайтара. Ҡоҙа, тасҭамалды ҡулына алғас, тәңкә һибеп ебәрә. Тасҭамалдың матурлығына ҡарап аҡсаны ла күберәк сөйә. Шуға өҫтәп, ҡыҙға атап, тағы ла тәңкә һала. Быныһы ҡолаҡ һөйөнсөһө була [18].

Был юлы ла ҡоҙаларҙы тиргәп, юрамаллап һамаҡ әйтеп ҡаршы алалар, оҙатып ҡалалар.

## ТАСҬАМАЛ ҠОТЛАУ

Тасҭамал алырға килгәндә, ҡыҙҙың еңгәләре тәҙрә аша кейәүҙе, уның туғандарын юрый яманлап, әр һамағы әйтеп торалар.

Беҙгә килгән башҡоҙаға
Бир тасҭамал, — ҡыуанһын.
Тасҭамалы муйынына
Йылан булып уралһын.

Беҙгә килә ҡоҙалар,
Дан тасҭамал алалар.
Дан тасҭамал алалар ҙа
Ҡыуанышып ҡалалар.

Был осрашыуҙа ике ҡоҙа ҡалым, мәһәр, дуға һаны, йәғни туйҙа ике яҡтан нисәшәр парҙы ҡатнаштырыу тураһында асыҡлап һөйләшеп ҡуялар. Шулай туйлыҡҡа [19] тыу бейә йәки һимеҙ бер йылҡы һөйләшелә. Егеттең атаһы, үҙ яғы алып килгән күстәнәс менән һыйлап, тасҭамал сәйе үткәрә. Ике яҡ араһында был юлы бүләкләшеүҙәр булмай. Ике ҡоҙа бер-береһенә ризалыҡ билгеһе итеп тасҭамал ғына бирешәләр. Тасҭамалды ҡотлап, килгән кешенең һәр береһе сәй-шәкәр, ҡорот, бал, тәңкә, тауар алып килә.

Төп ҡоҙа килгән көнөндә үк ҡайтып китә.

## ТАУАР КИЛТЕРЕҮ

Тасҭамал алып ҡайтҡас, кейәүҙең туғандары йә атаһы ҡыҙға бер ҡат кейем алып килә. Еңгәләргә атап сәй-шәкәр, күстәнәс килтерәләр. Был юлы алып килгән кейемде йырлап, һамаҡ әйтеп еңгәләр ҡотлайҙар, «тауар ҡотлау сәйе» йыялар. Ҡунаҡҡа килгән һәр кем ҡыҙға донъя кәрәк-ярағы бүләк итә.

Йола буйынса, ҡыҙға, ҡыҙ әсәһенә әйтелгән бүләктәр килтерелеп бөтмәйенсә, никах уҡылмаған.

Ошо осрашыуҙан ҡоҙалар бер йома көнгә никах үткәрергә һүҙ ҡуйыша.

## ЕГЕТ ЙОРТОНДА КӘҢӘШТУЙ

Егеттең атаһы ағай-энеләрен йыя. Был йоланы «Баш ҡушып, кәңәшеү» тиҙәр[20]. Улына ҡыҙ әйттергәнен, туй көнө тәғәйенләнгәнен иғлан итеп, мәжлес үткәрә. Мәжлестә туй малын биреү, туй тәртибе тураһында кәңәш ҡоралар. Туй малын һуйыу тураһында үҙ-ара һөйләшкәс, егеттең атаһы ҡоҙаһына туйлыҡты алып ҡайтыу өсөн кешеләр ебәреү тураһында хәбәр итә, мал алырға саҡырыусылар тәғәйенләй.

Мал алырға саҡырып ҡайтыу — мал биреү булъялын ҡуйыу тип аталған.

## МАЛ АЛЫУ ТУЙЫ[21]

Һөйләшелгән туйлыҡ малды алып ҡайтырға ҡыҙҙың атаһы үҙенең ағай-энеләре араһынан өс-дүрт буйҙаҡ егетте ебәрә.

Егеттәр һыбай йәки ат егеп, туй малы алыр ҡоҙалар булып килгәс, уларҙы, өйҙән өйгә йөрөтөп, бер нисә көн ҡунаҡ итәләр.

Һәр өйҙә туй малы алыусы ҡоҙалар өсөн ҡуллама бешерелә, унын янына бик күп итеп ҡаҙы, оса (һарыҡ, ҡуй итенең ҡойроҡ төбө) майы йә дөйә үркәсе ҡуйыла.

Ҡунаҡ һыйлаусылар алдан уҡ махсус билдәләнгән була. Улар ҡунаҡтарҙы һыйлап, күпләп һоғондорорға тейештәр. «Ҡоҙаның һыйы уртаса булды!» — тиерлек булмаһын. Ҡоҙа егеттәр һуңынан туйлыҡты ҡороҡлайҙар. Мал алдан уҡ йәшерелеп ҡуйылған була. Уны йырлап, һамаҡлап алып сығалар. Туйлыҡты һайлаусылар егет яғынан алдан билдәләнгән була.

Мал алыусылар бер аршин самаһы алып килгән тауарҙы ҡороҡҡа бәйләйҙәр. Быны «эрем ялауы»[22] тиҙәр. Малға ҡороҡ һалыусылар егет әсәһенең ҡәрендәштәре булырға тейеш.

Ҡалым малын (туй малын) һайлап бөткәс, егеттең атаһы мал алыусыларға яғалы тун яба[23]. Ҡунаҡтар егеттең атаһын туй һуйырға саҡырып, ҡайтып китәләр. Ҡилер көнөн йомаға тап килтерергә тырышалар. Саҡырыусыға күлдәк, таҫтамал бирелә.

## ҠЫҘ ЙОРТОНДА КӘҢӘШТУЙ[24]

Мал алынғас, ҡыҙҙың атаһы ҡоҙа төшөрөргә әҙерләнә башлай. Ҡилгән ҡалым малының берәһен һуйып, яҡын ҡарындаштарын саҡыра. Мәжлестә ҡыҙҙың атаһы ҡунаҡтарына, ҡоҙа төшкәндә, уларҙы хөрмәткә ҡатнаштырыуы тураһында хәбәр итә, уларҙың

ризалығын ала. Улар хөрмәтләүселәр була. Ике төн ҡоҙа алдан дуға һанын килешеп ҡуймаһа, ҡыҙҙың атаһы ошо кәңәштән һуң, егет яғына дуға хисабын еткерергә саҡырыусы ебәрә. Ҡыҙ яғынан хөрмәт итеүсе (нисә пар), егет яғынан да шунса дуға (шунса пар) ҡунаҡ килергә тейеш.

## ЕГЕТ ЙОРТОНДА ЭСКЕ ТУЙ

Хәбәр алғас, егеттең атаһы саҡырыусының әйткән һанынса ҡарындаштарын йыйып, ҡунаҡ итә. Был мәжлескә йыйылған ҡунаҡтар ҡалым туйға барыусы ҡоҙалар була. Ҡалым туйында ҡоҙалар һаны менән хужалар һаны бер тигеҙ булырға тейеш.

Саҡырыусы ике-өс көн егеттең атаһында ҡунаҡ була. Ҡайтыр сағында төп ҡоҙа уға сапан яба йәки күлдәк кейҙерә. Ҡунаҡ ҡоҙаларҙың барасаҡ көнөн, дуға иҫәбен асыҡлап ҡайтып китә.

## НИКАХ ТУЙЫ

Ҡыҙ менән егет йәрәшеүен рәсмиләштереү өсөн ҡыҙ йортонда никах уҡытыла [25]. Никах туйы мал алыу туйына ҡарағанда ҙурыраҡ була. Никах мәжлесенә борон хәлле кешеләр бер нисә тыу бейә, тыу һыйыр һуйған, һаба-һаба ҡымыҙ әҙерләгән.

Егет әсәһе килен башына ябырға никах яулығы алып килә.

Туйға ауылдың мулла-мәзине, оло бабай-әбейҙәр һәм кәңәштуйҙа булғандарҙың олораҡтары саҡырыла. Мәжлестә мәһәр, ҡалым биреү, туй һуйыу, туй бирешеүҙәр, һалымдар тураһында ҡабатлап һөйләшелә.

Мулла ҡыҙ менән кейәүгә никах уҡый. Еңгәләр шаршау артында хөтбә * тыңларға йыйыла. Йәрәшеүсе йәштәр был ваҡытта икенсе өйҙә була.

Мәжлескә йыйылған кешеләр араһынан ике кешене ҡыҙҙың ризалығын һорарға шаһит итеп ебәрәләр. Ҡыҙ исеменән ағаһы йә әхирәттәре «фәлән-фәлән кешегә ҡатын булырға ризамын» тигән таныҡлыҡты килтерә.

Никах уҡығанда, табынға таҫтамал йәйелә. Мулла егет атаһынан: «Һин фәлән кешенең фәләнә тигән ҡыҙын фәлән улыңа хәләл ефетлеккә алдыңмы?», — тип һорай. Егеттең атаһы: «Алдым», — ти. Мулла ҡыҙҙың атаһынан: «Һин фәлән кешенең фәлән тигән улына фәләнә исемле ҡыҙыңды хәләл ефетлеккә бирҙеңме?» — тип һорай. «Бирҙем», — ти ҡыҙ атаһы. Һәр һорау-яуап өс рәт тулы ҡабатлана [26].

Никах уҡылып, ризалыҡтар алынғас, ҡыҙҙың башына тәңкәле яулыҡ — никах яулығы — ябалар. Ҡыҙҙың еңгәһе яулыҡтың осон ҡыҙҙың битенә төшөрөп яба ла:

— Дөрөҫмө? — тип һорай.

— Юҡ, дөрөҫ түгел! — тип яуап бирәләр ҡыҙҙар.

Шулай өс рәт ҡабатлағандан һуң ғына никах яулығын ҡыҙ-

ҙың башына бәйләп ҡуялар. Дөрөҫ булһа, ҡушъяулыҡтың ситенә баҫылған тәңкәләр ҡыҙҙың маңлайына төшөп тора. Егеткә мулла уҡ тоттора [27] ла: «Йәмәғәтеңде һаҡла, ныҡ тот!» — ти. Никахлау ваҡытында әйтелгән теләкте «Бата теләк» тиҙәр.

Никах ваҡытында ҡыҙҙы әхирәттәре менән бер өйгә йәшереү йолаһы булған. Егеттәр был ваҡытта тышта йөрөйҙәр, дилбегәләр ялғап, шуның менән өйҙө уратталар. Дилбегәнең осон ҡыҙ өйөнә йәшерәләр. Ҡыҙҙы алырға килгән ике еңгә дилбегәнең осон табып сисергә тейеш булған. Ҡырҡырға ярамай, ҡырҡһаң, имеш, ҡыҙ кейәүенән айырыла. Еңгәләр ҡыҙҙы икенсе өйгә егет янына алып киләләр.

Мулла никахтан һуң бер туҫтаҡҡа һалған һыуҙы йәки кейәү алып килгән балдан яһалған шәрбәтте, доға уҡып, ҡыҙҙың әсәһенә бирә. Уны, «никах һыуы» тиҙәр. Был һыуҙы никахта булған кешеләргә һибәләр. Шул уҡ һыуҙы йәрәшкән йәштәрҙең баштарына, биттәренә һөртәләр Балды ауыҙ итәләр. Ҡыҙ әсәһе никахта ултырған нәҫел-нәсәбенә шәл, ҡалғандарына йыртыш йыртып бирә.

Никахтан һуң, бирнә биреү башлана. Ҡыҙ кейәүе өсөн үҙе әҙерләгән бирнә бүләктәрен әйтеп-атап бирәләр: «Инәс бирнә һала инәйем, дүрт ҡат кейәүгә: ике запун, ике кейем сылғау, дүрт ҡат күлдәк, дүрт ҡат ыштан, суҡлы күлдәк. Бөтәһен дә үҙем эшләгәнмен, үҙ ҡул көсөм. Нәҫел заттарына бөтәһенә лә ҡулъяулыҡ...» [28]

Ҡыҙ бирнәһен бөтәһе лә тотоп ҡарай, баһалап, килендең ҡулын маҡтайҙар.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар бирнә ҡотлап аҡса һалалар, йә сынаяҡ, ҡашығаяҡ бирәләр. Бүләкләү аҡсалата булһа, ҡыҙ ҡулына бирелә. Ул — ҡыҙ һумлығы тип атала. Егеттең атаһына күлдәк, һөлгө бүләк ителә. Таҫтамалды алғас, ул барыһына ла аҡса өләшә, ырғыта. Ҡыҙға табан да аҡса һибә. Быға ла «ҡолаҡ һөйөнөсө» тиҙәр. Һуңынан олораҡтар табынға ултыра.

Икенсе көн ҡыҙҙың атаһы, ҡоҙалар янына ағай-энеләрен яңынан саҡырып, ҡунаҡ күрһәтә. Улар ошо туйҙа исем алып ҡайталар: егеттең атаһы — башҡоҙа (төп ҡоҙа), уның менән бергә килгән иптәше — нүгер ҡоҙа, егеттең иптәше — кейәү үңәре *, ә ике ҡоҙа араһында йөрөгән кеше — яусы ҡоҙа була.

Егет яғы дүрт көн ҡунаҡ була. Баш ҡоҙа менән үңәр ҡоҙаға ҡыҙ атаһы күлдәк йәки сапан кейҙереп ҡайтара. Күлдәк урынына дүртәр-бишәр аршин ситса ла биргәндәр.

## ЕГЕТ ЙОРТОНДА «БИРНӘ БАҒЫУ»

Егет атаһы туғандарына килене ебәргән бирнәләрҙе күрһәтергә ҡунаҡҡа саҡыра. Һәр килгән ҡунаҡ егеттең ата-әсәһенә тәңкә йә тауар бүләк итә. Егет әсәһе ҡунаҡтарға ашъяулыҡ, күкрәксә бирә.

Барыһы ла ҡыҙ ебәргән бүләктәрҙе ҡотлап тәңкә һалалар. Был йола «бирнә бағыу» тип аталған.

## ЕГЕТ ЙОРТОНДА ТУЙҒА ӘҘЕРЛЕК [29]

Егеттең атаһы үҙҙәре яғынан өс-дүрт пар менән бер-ике буйҙаҡ егетте туй малы һуйырға ебәрә. Шуны туй малы һуйыу тиҙәр. Парлылар ҡыҙ әсәһенә ситса, үҙҙәре төшөп, ятып-тороп йөрөгән йортҡа күстәнәс әҙерләй.

Туйға инселәнгән һарыҡты һәйбәт тәрбиәләйҙәр: тарайҙар, муйынына суҡлы муйынсаҡ бәйләйҙәр, өҫтөнә яулыҡ ябалар.

## ҠОҘА ТӨШӨҮ

Бер аҙҙан нисә дуға һөйләшелгән, шунса парһыҙ ир кеше ҡыҙ атаһына ҡоҙа булып киләләр. Был «ҡоҙа төшөү» була. Ҡоҙалар бер көн ҡунаҡ булып, икенсе көнөн ҡайтып китәләр. Ошо килеүендә егет атаһы ҡыҙға бүләк алып килә: яулыҡ, елән, камзул, күлдәк һ. б. Ҡыҙҙың ике инәһе була икән, ике инә тун килтерә. Ике ҡоҙа был осрашыуҙа ныҡлап ҡалымтуй көнөн билдәләй.





## ҚЕЙӘҮ ҚИЛЕҮ

Ҡыҙ менән егетте ҡушыу йолаһы, ике яҡ килешеп, таҫтамал алышҡас, үткәрелә.

Ҡыҙ янына беренсе килгәнендә егет туп-тура үҙенең ҡайныһы йортона төшмәй, ә ошо ауылда булған еҙнә тейеш кешеһенә йә ҡайнағаһына төшә. Ул яңғыҙ булмай, кейәү үңәре менән килә (элек кейәүҙе ҡыҙҙың ике еңгәһе йә әхирәт-еңгәләр ат менән барып алған[30]). Қейәүҙе ҡыҙҙың яҡын туғандарына алып килгәндә, ихата ҡапҡаһы бикләнә. Ҡапҡа асҡан кешегә кейәү бер тәңкә бирә. Хужа кеше ҡыҙҙың әсәһенә кейәүҙең килеүен хәбәр итә, ҡыҙ ҡушыуға рөхсәт һорай. Уның ҡатыны кейәү егеткә тәрбиә күрһәтә, ҡыҙҙы ла алып килә. Һуңынан кейәү үҙенең үңәре менән күрһәтелгән өйгә китә.

## ҠЫҘ ЙӘШЕРЕҮ

Егет килер алдынан әхирәттәре ҡыҙҙы йәшерә. Қейәү үҙенең үңәре, ауыл егеттәре менән ҡыҙҙы эҙләй башлай. Ҡыҙҙар иһә кейәүҙе, уның иптәштәрен хурлап, таҡмаҡ әйтәләр.

Қейәү йорто сыуалын
Аҡбур менән бурлайыҡ.
Шунда торған кейәүҙе
Тотайыҡ та хурлайыҡ.

Қейәү үңәре ҡыҙҙарға тәңкә биреүе була, кейәүҙе маҡтау таҡмағы башлана.

Ҡыҙҙы һаман эҙләйҙәр. Берәй еңгә, ҡыҙҙы күрһәтәм, тип, егетте алдатып йөрөй. Ниһәйәт, ҡыҙ йәшерелгән йорт табыла.

Егеттәр тыштан ишек шаҡый. Эстән:
— Ҡем унда? — тиҙәр. Егеттәр:
— Беҙ юлаусылар, төнгә ҡалдыҡ, фатирға керетегеҙ! — ти.
— Нисә кеше?
— Улым менән икәү!
— Күпме түләйһең?
— Биш тәңкә!
— Аҙ!
— Ун тәңкә!
— Өҫтә!

. . .

Хаҡ бесә торғас, ахырҙа ике яҡ та килешә[31]. Ишек келәһе асыла. Егеттәр вәғәҙәһен үтәгән арала ҡыҙ сығып ҡаса.

Уны ҡыуыу башлана. Егет ҡыҙҙы, ҡыуып етеп, күтәреп алып килергә тейеш. Йә булмаһа, ҡыҙҙы еңгәһе етәкләп алып килә. Ошо ваҡыт әхирәттәре ҡыҙҙы унан тартып алырға тырыша. Ә еңгәләр көрмәкләшергә, уларҙың ирҙәре ҡыҙҙарҙы «ҡамсыларға» тотона. Ҡыҙҙы, әхирәттәренән тартып алғас, еңгәләр кейәү егеттәре менән тартыша, уларҙан, ҡыҙ хаҡы тип, бүләк тәңкә ала. Бер төркөм ҡыҙҙар еңгәләргә таҡмаҡ әйтә. Таҡмаҡҡа ҡаршы еңгәләре лә таҡмаҡлай.

Егеттәр, еңгәләр ҡыҙҙы тартып алыу өсөн булышҡанда, әхирәттәр шулай ти:

— Самауырҙы тиҙ ҡайната
Ҡаты ҡайын күмере.
Ҡыҙ һаҡлаған еңгәләрҙең
Ҡыҫҡа булһын ғүмере! [32]

Ниһәйәт, ҡыҙҙы, барыһынан да айырып, еңгәләре уратып алалар ҙа, баш өҫтөнә шаршау ҡаплап, ҡушылаһы өйгә алып китәләр[33]. Егеттәр уларҙың артынан эйәрә. Ошо ваҡыт кейәү егеткә: «Үксәһенә баҫ ҡыҙҙың, үксәһенә!»[34] — тип, ҡысҡыралар. Ҡыҙ менән кейәү ҡушыла торған тирмәнең йә өйҙөң ишеге арҡыры ҡыҙҙар ҡыҙыл төҫтәге йыртыш тотоп торалар. Кейәү уны айыра баҫып инеп китә. Шул йыртыш, туҡыма киҫәктәрен еңгәләр һамаҡлап тараталар. Кейәүгә йыртышҡа баҫыр алдынан ҡыҙ япына инеү хаҡы ҡуйыла:

— Ишек бауы бер тәңкә,
Йыртыш хаҡы биш тәңкә,
Ҡыҙыбыҙ тора мең тәңкә!

Кейәү егет был хаҡты ла түләй. Шул арала:

— Төн дә үтте, кейәүкәй,
Ай ҙа батты, кейәүкәй.
Тәү әтәс тә ҡысҡырҙы,
Ҡыҙың көтә кейәүкәй, —

тип, ҡыҙҙар тиҙ генә тағы өйгә инеп бикләнә. Егеттәр менән ҡыҙҙар араһында әйтеш башлана.

Е г е т т ә р:

— Асығыҙ ишегегеҙҙе!

Ҡ ы ҙ ҙ а р:

— Ас булһаң, туйып кил,
Сарығыңды ҡуйып кил!

Е г е т т ә р:

— Инеп ҡарармын әле,
Инеп күрермен әле.
Сарығымды ҡуймайынса,
Ҡергәндәрем бар әле! [35]

Ҡейәү үңәре ҡыҙҙарға бүләк вәғәҙә итә.

### ҠЫҘ ҠУШЫУ

Ишек асылыу менән тағы көрмәкләшеү башлана. Йәштәр ҡауышаһы урында тәүҙә еңгәләр аунап ала [36]. Ҡейәү һәр береһен урындарынан торғоҙоп, тәңкә биреп, сығарып ебәрергә тейеш. Ҡушыр еңгә һике аҫтына мал ялаған тоҙ [37], түшәк аҫтына йөн, тәңкә, һике аҫтына бысаҡ йә көҫәү [38] һалып ҡуйған була. Ошо еңгә кейәүгә ҡыҙҙың ҡулын тоттора ла: «Бына был һинең биргән малың, һөйөп, тапап көт!» — ти. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡыҙҙың алдына бала ултырталар [39]. Ҡейәү уға ла аҡса биреп сығара. Ҡейәү еңгә кешегә көмөш тәңкә бирә, ҡыҙҙың усына ла бер һумлыҡ көмөш аҡса һала. Еңгә йәштәрҙең өҫтөнә шәрбәт бөркөп, изге теләк теләп, сығып китә.

Ҡыҙ ҡушыу урынын күрһәткән өсөн, егет ҡыҙҙың әсәһенә инә тун йә һарыҡ әйтә. Еңгәләр был турала ҡыҙҙың әсәһенә еткерә.

Йәштәр урамда йыр йырлап, һамаҡ әйтеп, шау-шыулы уйындар ҡора [40].

Ҡыҙ янына ингәндә, кейәүҙең биле ҡатлы-ҡатлы итеп бик нıҡ быуылған, аяҡ кейеме тығыҙ итеп кейелгән була. Йәш кәләш, уңайын табып, уларҙы сисергә тейеш.

Шулай ҡауышыр йәштәргә йофаф төнө * етә.

### КЕЙӘҮ КҮРЕҮ

Иртән таң менән ҡыҙ кейәүе ҡуйынынан тороп өйөнә ҡайтып китә. Ҡейәү ҡәйнештәренә бүләккә бәке, балдыҙҙарына тәңкә, аҡса тарата.

Еҙнәләренән бүләк алырға тип килгәндә, йәш үҫмерҙәр, малайҙар таҡмаҡ әйтеп торалар:

— Еҙнә атың бейәме,
Ялы ергә тейәме?
Апайымды алған өсөн
Беҙгә аҡса тейәме?

Ҡыҙ ҡушҡан өй хужаһының ҡатыны иртән күрше-тирә йәш килендәрҙе кейәү янына ҡунаҡҡа саҡыра.

Ҡыҙ әсәһе күрһәткән килендәргә кейәү килтергән таҫтарлыҡ ситса йыртып өләшә, килгән ҡунаҡтарҙы һыйлай, хөрмәт итә. Һәр кем үҙе менән ҡоймаҡ, бутҡа һәм башҡа күстәнәс алып килә. Был йоланы кейәү ҡоймағы тиҙәр. Кейәү ҡоймағы ашаһа, һауытҡа тәңкә һала [41].

Ҡунаҡта ҡатнашҡан һәр кем кейәүҙе ҡунаҡҡа саҡыра. Үҙен ҡунаҡ иткән һәр йортта, кеше күҙенән йәшереп, кейәү үҙенең сынаяғы аҫтына тәңкә һала. Был тәңкә уның ошо өйҙәге балдыҙына тәғәйен.

## МУНСА

Ҡушылған төндөң иртәгәһенә ҡыҙҙы әхирәттәре менән бергә мунсаға оҙаталар.

Ҡыҙға бөркә торған кейәү балын әҙерләп ҡуйғандар. Ошо шәрбәтте оло еңгә, теләк теләп, мунса ташына һибә, ҡыҙға бөркә, миндек бешерә. Шәрбәтте ташҡа һирпкәндә ҡыҙҙың бөркәнсеген алалар, сисендерәләр. Ҡыҙҙы миндек менән иң элек ата-әсәһе иҫән әхирәте саба, һамаҡлап-һамаҡлап теләк теләй. Йыуынғас, ҡыҙ мунса төнлөгөнә, ләүкә аҫтына, көлгә, таш araларына тәңкә һалып сыға. Еңгәләр, ҡыҙға теләк теләп, уны ҡойондороп сайындыралар.

Мунса инергә кейәүгә сират етә. Йыуынып, сайынып сыҡҡанда, ул сөйгә, урҙаға сүк йә таҫтамал бәйләп ҡалдыра [43]. Иң ҡиммәт тәңкәне ул айырыуса нык йәшерә. Уны ете еңгә эҙләргә тейеш. Табыусы һый-күстәнәс ала, шунан еңгәләр бергәләп сәй эсәләр.

Мунсанан сығыуға йәштәрҙе ҡыҙҙың еңгәләре, әхирәттәре, кейәү эйәрсендәре ҡаршы алып, көтөп торалар. Кейәүҙе ҡатлама * менән ҡаршылайҙар. Егет ҡатламаны бер ҡаба ла, ҡалғанын яурын аша мунсаға таба ырғыта. Егеттәр берсһенән береһе ҡыуышып, шунда йүгерәләр. Кем шул ҡатламаны тотоп ала, йәнәһе, шул беренсе булып өйләнә.

Мунсанан сыҡҡас, кейәү ҡыҙ бүләк иткән кейемдәрҙе (камзул, билбау, ойоҡ-бейәләй, күлдәк) кейә.

Сәйгә ултырыр алдынан кейәүҙең аяғын, өҫ-башын һалдыралар. Тик бер кем дә уның бүреген һалмай. Уны йәрәшелгән ҡыҙ ғына һалдырырға хаҡлы. Бының өсөн кейәү ҡыҙға бүләк бирә.

Дүрт-биш көн кейәү, ҡунаҡ булып, һыйланып, һәр көн мунса инеп, кейәүләп ята. Шунан ғына өйөнә ҡайта.

## КЕЙӘҮЛӘП ЙӨРӨҮ

Беренсе килеүҙән ун-ун биш көн уҙыуға кейәү тағы килеп етә. Ул кәләшенең туғандарына төшә. Йәнә бер нисә көн ҡунаҡ була.

Ҡейәүҙең килеү аралары ҡырҡ көндән артыҡ, аҙнанан кәм булырға тейеш түгел. Аҙнакис, кеше аяғы һил булғас, килә.

Килеү ваҡытын еңгәләр билдәләп ҡуйған. Әгәр ул йола боҙоп, урынһыҙ ваҡытта килә икән, ауыл егеттәре уны туҡмап та ҡайтарыр булғандар [44]. Ҡыҙҙар кейәүҙе таҡмаҡ әйтеп үртәгән:

— Аҡ келәттең келәһен
Элә белмәй эләһең.
Шәфәҡ батмай, ҡарттар ятмай,
Килә белмәй киләһең.

Һәр килгәнендә, еңгәләр кейәүгә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтергә, мунса яғып индерергә тейеш булғандар. Был осор «кейәүләп йөрөү» [45] тип аталған.

Йәй көнөн кейәү өсөн айырым тирмә ҡорғандар. Кейәүҙең килеүен ҡыҙҙың еңгәләре менән әхирәттәренән башҡа бер кем дә белергә тейеш булмаған. Ҡыҙҙың әсәһе күп ваҡыт осрашыуҙы, яусылар҆ы белмәмешкә һалышҡан. Бәғзе ваҡыт үҙе үк йәштәрҙең осрашыуына булышҡан.

Кейәү килгәнде көтөп, ҡыҙҙар бергә ҡул эштәре эшләгәндәр, йөн иләп, шаршау, сымылдыҡ теккәндәр. Йырҙар йырлағандар:

— Аҙна кистәре етәлер,
Ҡыҙҙар кейәү көтәлер.
Бер иләйҙер, бер һүтәлер, —
Ҡыҙҙар өмөт итәлер.

Тәүге килгәндәрендә, ҡыҙҙар кейәүҙе тиргәп, хурлап таҡмаҡ әйтәләр.

Кейәүләү осоронда йәш кәләш менән ире әйтеш, йыр аҡрылы аңлашалар. Кейәү ҡайны-ҡәйнәһенә, уларҙан өлкәндәргә йөҙөн күрһәтмәй йөрөй. Кейәүләп, тәүге килеп ҡайтҡанында, кейәүгә ҡыҙ яғы баллы бауырһаҡ биреп ебәрә.

## ҠЫҘ БАУЫРҺАҒЫ

Егет йортонда ҡыҙ бауырһағына ҡунаҡ йыялар. Кәләш алыусыға был ҡорҙа бәхет, шатлыҡ теләп бүләк бирәләр. Ошо ваҡыт күренеш йолаһы үткәрелә. Ҡыҙҙың атаһы-әсәһе менән ҡушҡуллап күрешә. Бүләк биргәс, кейәү уларға «бабай», «әбей», «ҡайным», «ҡәйнәм» тип өндәшә башлай [46].

Туй үтеп, ҡалым түләнеп бөткәс кенә, кейәү ҡайны йортона иптәштәре, үңәре менән килеп, кәләшен күсереп алып ҡайтырға хаҡлы.

Ҡайны кеше кейәү аты бүләк итә. Кейәү атының сергеһе суҡлы, йүгәндәре уҡалы булыр.

## ЕГЕТ ЙОРТОНДА ЭСКЕ ТУЙ

Туйға китер көн еткәс, кейәүҙең атаһы йәнә аш әҙерләтеп мәжлес ҡора. Икешәр тәкә һуйыла, егерме-утыҙ ҡаҙаҡ бал ҡойола. Был мәжлестә һәр кем туйҙа әҙәп һаҡларға, бер төптән торорға, бер уҙаман һүҙе менән йөрөргә, туй ярыштарында еңеп сығырға, беренселекте нисек тә булһа ҡыҙ яғына ебәрмәҫкә һүҙ беркетәләр.

Был йыйында, йола ҡушҡанса, бер кешене «тиргәп», «әрләп» алалар [48]. Уны туйҙа ғауға ҡуптарыусы итеп ҡуялар. Бөтә ырыуҙыҡ итеп «әрләгәндә»лә, был кеше телләшергә тейеш түгел. Тиргәлеүсе, ырыу яҡҡан «ғәйеп»тән аҡланыу өсөн, йүгереп барып ҙур таш, ағас ырғыта.

Туйға китер алдынан ауылдағы йырсылар, ҡурайсылар, бейеүселәр, сәсәндәр, көрәшселәр — барыһы ла бергә йыйыла.

## ИМӘЛТӘ ЙЫЙЫУ

Барасаҡ кешеләрҙең бер-икәүһе туйға китер алдынан имәлтә йыя *. Таяҡ башына яулыҡ йәки башҡа берәй нәмә тағып, төп ҡоҙа өйөнән сығалар ҙа, өй беренсә йөрөп, төрлө тауар, таҫтамал, таҫтар йыялар.

Был йоланы ҡайһы саҡ малайҙарға тапшыралар, улар ҡолғаға йә таяҡҡа таҫтар бәйләп, урам буйлап болғай-болғай йөрөгәндәр.

Егеттең әсәһе кейәү һандығын әҙерләй. Һандыҡҡа күп итеп ҡулъяулыҡ, яулыҡ, таҫтар, йыртыш, күренес сапандары, төп ҡоҙаларға күлдәклек, биш-алты аршын өҫтәлмә йыртыш тауары һәм йыйылған бөтә имәлтә һалына. Һандыҡ төбөнә — затлыраҡ тауар. Быны сәрмә төбө тиҙәр. Һандыҡтың иң өҫтөнә, асыусыға аталып, ярты аршин тауар һалына. Егеттең әсәһе үҙ исеменән күп итеп бауырһаҡ ҡанъяға (йә йыуаса) тәкәһе йәки туйлыҡ (малы) [50] — тереләтә тәкә — алып бара. Күп итеп ит ҡаҡлана, бауырһаҡ әҙерләнә. Ҡыҙҙың әсәһенә бирергә күренеш күлдәге, берике ҡулъяулыҡ алына. Уларын «күренеш бүләге» тиҙәр. Кәрәгә асыусыға атап һарыҡ алып баралар.

Имәлтәнән йыйылған бөтә тауар хөрмәтенә егеттең әсәһе ҡатын-ҡыҙҙарҙы сәйгә йыя. Хужабикәгә һәр кем һарауыс алып килә. Был бүләктәр ҙә кейәү һандығына һалына һәм ҡыҙ йортонда таратыла.

## ТАУҒА БАРЫУ

Йәрәшелгән егет, ҡыҙ туй булғанға тиклем үҙ тиңдәштәре менән уйынға, тауға йөрөй алған. Йола буйынса, йәштәр барыһы бергә йыйылып, түңәрәк яһап [51] бейегәндәр, йырлашып күңел асҡандар. Түңәрәк уртаһында бер пар: кейәү менән кәләш бейей, ҡал-

ғандар етәкләшеп улар тирәләй әйләнә. Оло быуын кешеләре хәтерләүенсә, түңәрәк әйләнеү ике-өс тапҡырҙан артһа, әҙәпһеҙлек тип ҡарағандар. Бындай уйындар йылына бер тапҡыр, тик йәрәшелгән ҡыҙҙар менән егеттәр ҡатнашлығында үткәрелгән. Был уйындарҙа күберәк ҡара-ҡаршы бейешкәндәр.

## ҠАЛЫМТУЙ

### БЕРЕНСЕ КӨН

Тәғәйен көн етеү менән өс-дүрт пар һәм бер-ике яңғыҙаҡ һыбай, һуғымсы ҡоҙалар булып, ҡыҙ йортона баралар. Улар артынса ҡалғандар килә.

Ҡыҙ яғы ҡоҙаларҙы юлға сығып ҡаршы алалар. Ҡаршылаусыларҙың берәһендә ҡот була [52]. Уны ялауыс та тиҙәр. Ҡот (ялауыс) тотҡан кеше ҡоҙалар янына сабып килеп етә лә әйләнә лә саба. Һыбай барған ҡоҙалар уның артынан ҡыуа төшә. Арбалы-саналы булғандары ла сабырға тотона.

Сабышып барғанда, ҡаршы сыҡҡан ҡоҙаларҙың ҡайһы берҙәре арбалағы ҡоҙаларҙың бүректәрен тартып алып ҡаса. Улар бүректәрен, тәңкә биреп, «һатып» ала. Әгәр ҡунаҡ ҡоҙалар ялауыс алып ҡасыусыны ҡыуып етһәләр, «ҡот» улар ҡулына күсә. Ялауысты алған ҡоҙа уны үҙҙәренең яғынан килеүселәрҙән берәүҙең дуғаһына бәйләп ҡуя. **«Ҡот алыу»** бәхеткә юрала.

Ауыл ҡапҡаһына еткәс, ҡунаҡ ҡоҙаларҙан мал әйттерәләр. Хаҡ әйткәс кенә, **ҡапҡа асыла.** Алдан ҡот алып ҡасыусы туптура ҡыҙ йортона барып туҡтай. Уның артынан һуғымсы ҡоҙалар килеп етә. Ҡаршы алырға сыҡҡан ҡарт-ҡоро, йәш-елкенсәк, ҡунаҡтар килеп етеү менән уларҙы төп ҡоҙа өйөнә алып инәләр. Унда ирҙәрҙе бер башҡа — түргә, бисәләрҙе бер башҡа — ҡашығаяҡ яғына — айырып ултырталар. Ҡоҙа, ҡоҙағыйҙар ултырып бөтөп доға ҡылыуға, ҡунаҡ йыйыусы йәш ирҙәр һәм йәш килендәр килгән ҡоҙаларҙың өҫтәренә услап бауырһаҡ, сәтләүек, кәнфит, ҡорот һәм башҡа ашамлыҡтар һибәләр [53].

Алдан бүлешкәнсә, ҡыҙ атаһы яғынан туйға ҡатнашыусылар ҡунаҡтарын алып ҡайтып һыйлай. Быны **«тәүге аш»** тиҙәр. Әгәр туй йәй көнө үткәрелһә, ҡоҙаларҙы ҡырҙа һыйлайҙар. Ҡыуаҡ араһында, туғайҙа ике-өс көн буйы туй бара. Кейәү менән ҡыҙ яланға бармай, ә ауылда [54] аулаҡлай.

## Ҡөрәгә асыу

Бер аҙҙан ҡоҙалар төп йортҡа йыйыла. Ҡорға, йола буйынса, буйҙаҡтар ултырмаған[55]. Табынға ултырыр алдынан иң ололарҙан башлап ҡул сайҙыралар. Ҡул һөртә торған таҫтамалды, ғәҙәттә, төп ҡоҙаның өйләнгән кесе улы тотоп тора (табындан торғанда ла иң өлкән кеше алдан ҡуҙғалып, алдан ҡул йыуа). Ултырышҡас, иң тәүҙә **«аҡ эсеү»**[56] йолаһы үтәлә. Егеттең атаһы ҡунаҡтарҙы ҡымыҙ менән һыйлай. Ҡоҙалар ҡымыҙҙы маҡтап эсәләр, йыр йырлайҙар:

— Тәпәндәге ҡымыҙ бигерәк тәмле,
Нисәү икән һауған бейәһе?!
Уйнап ҡына көлөп, ай эсәйек,
Ҡыуанып та ҡалһын эйәһе.

Шунан **туй көрәгәһен** алып сығалар. Барыһы ла: «Һай! Көрәгә! Ҡотло көрәгә, бәрәкәтле көрәгә!», — тип, тәбрикләп, көрәгәне ҡаршы ала. Көрәгәне ҡотлап, маҡтау йыры йырлана:

— Һай!
Көрәгә килә! Көрәгә килә,
Көрәгәләр тулы бал килә.
Көрәгәләр тулы балдар килә,
Ҡура-ҡураларға мал килә! Һай!

Көрәгәне толоп йә тире өҫтөнә ултырталар. Көрәгә өҫтөнә аҡ таҫтамал ябылған була. Көрәгә асыусы, мал (бүләк) әйтеп, таҫтамалды ала. Уның бүләгенең һибәһенә ҡыҙ атаһы мал әйтә.

Аяҡсылар, ҡоҙаларға туй эсемлеген йырлап биреп, хөрмәтләп йөрөйҙәр.

Көрәгә-көрәгә ҡымыҙ һалып,
Ултырғанда тирмә эсендә.
Моңло итеп, һарғау көйөн йырлап,
Ҡоҙаһына йырлап эсерә.

Беренсе кәсәне (йә туҫтаҡ, аяҡты) һәр ҡоҙа тәңкә һалып ҡайтара. Көрәгә асыусы көрәгә ҡырында ғына була, һыйлап йөрөмәй.

Табын таралғанда, түрҙәге иң өлкән кеше алдан ҡуҙғала, алдан ҡул йыуа. Һәр кем түрҙән аша йөрөмәй, ҡайһы яҡҡа ултырһа, шул яҡтан (ундағылар ҡояш йөрөшө ыңғайынса, һулдағылар ҡояш йөрөшөнөң киреһенә) сыға.

## Һөйһөн килтереү. Туй малын һуйыу

Туйлыҡты алып килеү **«һөйһөн килтереү»**[57] тип аталған. Һөйһөн һуйғанда йәш кәләш өйҙә тормай: уны икенсе өйгә йәшерәләр. Еңгәләр, ҡыҙҙың әхирәттәре менән көрмәкләшеп, ҡыҙҙы талап алып, күтәреп сығып китәләр. Еңгәләр ошо ваҡыт һамаҡ әйтеп

бара Был йоланы **«ҡыҙ күтәреү»** тиҙәр. Өйөнә күтәреп алып ҡайтҡандары өсөн ҡыҙҙың атаһы еңгәләренә аҡса бирә. Быны **«еңгәләр аҡсаһы»** тиҙәр.

Ҡыҙ өйгә ҡайта, тик ул һөйһөн ашамай («һөйһөн ашаған һөйөшмәҫ!» [58] — тиҙәр).

Ә төп йортта ҡоҙалар туй ите — һөйһөн — ашай. Ҡыҙҙар шул ваҡыт тыштан таҡмаҡ әйтеп тора:

— Быйыл сәскән кәбеҫтәмдең
Яп(ы)рағы ете ҡат.
Ҡоҙаларға килгәнһегеҙ,
Һөйһөнөңдөң башын тап.

Ҡоҙалар таҡмаҡсыларҙы сығып ҡыуалар, үҙҙәре лә уларға ҡаршы таҡмаҡ әйтәләр.

**Туй һимеҙ** булһа, һуйыусылар араһынан бер ир кеше ҡоҙаларға, ә ҡарын алыусы ҡатындарҙан берәү ҡоҙағыйҙарға һөйһөн (туй малының һимеҙлеген маҡтап: «Туй һимеҙ, туй һимеҙ!», — тип һамаҡлап, бейей-бейей һөйөнсөләп, ҡунаҡтарҙан тәңкә йыя [59].

Туй ҡорбанының салыу ҡанын бала-сағаларҙың, туйҙағы халыҡтың маңлайҙарына һөрткәндәр. Малды салғанда, йөнөнә тотопорға ҡушҡандар. Туйлыҡтың салыу ҡанын аяҡ теймәҫ урынға, ә һөйәктәрен ағын һыуға һалғандар. Ҡорбан булғас, һыуға тейеш, эт ауыҙына теймәһен, тигәндәр.

Туй ҡорбанының йөрәк ҡанын, тултырмаға һалып бешереп йә ҡурып, ҡунаҡтарға ла ашатҡандар.

Туй малының салыу ҡаны изге иҫәпләнгән. Шуға ҡыҙҙың әсәһе аҡ сепрәкте ҡанға манып, ҡыҙына изге теләк теләп, кеше күрмәгән урынға йыйып ҡуйыр булған [60].

Ҡыҙҙың әсәһе туй малының тояғын бәйләүселәргә, **«тояҡ ялы»** тип, тәңкә, кулъяулыҡ; һуйыусылар **«бысаҡ урауы»** (йә **«бысаҡ ялы»**) тип, һуғылған таҫтамал; эсәк-ҡарын йыйыусыларға тәңкә, һарауыс бүләк итә [61].

Егеттең әсәһе (баш йәки төп ҡоҙағый), үҙе менән килгән ҡоҙағыйҙарҙы алып, килене янына бара. Улар киленгә бүләк биреп теләк теләйҙәр. Теләк әйткәндә уның яурынынан, арҡаһынан ҡағып-һөйөп торалар, ә йөҙө тәңгәлендә бауға тағылған тәңкә бәүелтеп тоталар, һамаҡлайҙар:

— Иңкәйгәндә игеҙ тап,
Туңҡайғанда туғыҙ тап.
Алдыңды бал баҫһын,
Артыңды мал баҫһын.

Йәғни, артың нык булһын, дәүләтең күп булһын, тигәнде аңлаталар.

### Таҙ ҡарынға болашыу

Эс-ҡарын таҙартыусылар таҙ ҡарынын таяҡҡа кейҙереп, ас эсәкте ҡороҡ итеп тотоп, ҡоҙалар янына киләләр. Ҡарынды улар-

ҙың баштарына кейҙерергә тырышалар йә ас эсәк ҡороҡларға итәләр. Ҡоҙалар аҡса һона. Әгәр берәйһе аҡсаны әҙерәк бирһә, ҡарын тотҡан килен, үҙе һорағанын алырға тырышып, тағы ла ҡарын менән янай, ябыҡ туйлыҡ алып килгәндәре өсөн ҡоҙаларҙы битәрләй:

— Итен ашайыммы икән,
Майын ашайыммы икән?
Туйға биргән һарығыңдың
Ярыһын тартайыммы икән?

Ҡоҙаларҙан аҡса йыйып алғас, килендәр ҡоҙағыйҙар янына баралар. Улар янына ҡарынды алып бармайҙар, ә тик бысраҡ ҡулдарын күрһәтеп: «Туй ҡарыны йыуғанда ҡулыбыҙ өшөнө, ҡулыбыҙҙы йылытып ебәрегеҙ», — тигән булып, ҡоҙағыйҙарға һыйыналар. Өҫтәре бысраныуҙан ҡурҡып, тегеләр аҡса биреп ҡоталалар.

Туй малын һуйып, тәрбиәләп бөткәс, тәртип буйынса ит бер нисә өлөшкә бүленә. Йылҡы малының ике яғынан да өсәр ҡабырға, һебәлек (ҡабырға бөткән йомшаҡ ит яғы) айырым алына.

Ике арт боттоң оса һөйәгенә ҡушылған янбаш өҫтө — ейәнһөйәк — ҡыҙҙың әсәһенең еҙнәһенә бирелә торған өлөш. Шуға «ейән һөйәк» алған кеше, ҡасан да булһа ҡыҙҙы кейәүе менән саҡырып, уларға күлдәк кейҙерергә һәм берәр мал бирергә тейеш. Оло бабайҙарға муйын, ҡабырға-һебә өлөштәре һалына.

Ҡоҙасаларға, ҡыҙҙың яҡын апаларына түш ите тейә.

Ҡыҙҙар уйын ҡорған ергә кейәү һебәһе (кейәү бүгәсәһе *) килтерелә. Ҡыҙҙар был өлөштө тәңкә биреп алырға тейеш. Уйын ҡорған ерҙә ҡыҙҙар таҡмаҡ, сеңләү әйтешә: атаһы йортонан китәсәк ҡыҙ исеменән әхирәттәре сеңләйҙәр, ҡыҙҙың атаһына, әсәһенә, туғандарына үпкә белдерәләр.

— Атаҡайым, һинең өйҙәреңдә
Ултырғанҡай ерем бер таҡта.
Шул таҡтаҡайыңды ҡыҙғанып,
Һатып ашап ҡуйҙың йәш саҡта...

Хәленән килгәндәр бер аҙҙан ат сабыштырыу, көрәш, уйын, ҡурайсылар, йырсылар бәйгеһе ойоштора.

Ҡисенә туй алышырға барған ҡоҙалар (күпме килгәненә ҡарап) ҡунаҡтарҙы, өйҙәренә таратып, алып ҡайтып китәләр.

## ИКЕНСЕ КӨН

Икенсе көнгө һый — **йорт ашы, ҡунаҡ күрһәтә торған аш.** Өс-дүрт өй берләшеп бөтә ҡунаҡтарҙы бер йортта һыйлайҙар. Икеөс көн буйы килгән ҡунаҡтарҙы, таратып алып, шулай, өйҙән-

өйгә һыйға саҡырыу була. Төп йортта барлыҡ ҡунаҡтарҙы бергә һыйлау **«туй ашы»** [62] тип атала.

Иртән ҡыҙ атаһы барлыҡ ҡоҙа һәм ҡоҙағыйҙарҙы, күршеләрен дә өҫтәп, күстәнәс сәйгә саҡыра. Шуның артынса оҙаҡ та үтмәй аш әҙерләнә һәм ауылдың ҡарттары, йәштәре, һәр бер өйҙән ир-ле-ҡатынлы икешәр кеше саҡырыла. Был **«ҡунаҡ күрһәтеү»** тип атала.

### Йыртыш йыртып таратыу

Ҡунаҡ күрһәткән саҡта һәр ҡоҙағый килтергән йыртышын (биш-алты аршин ситса) берәр ҡунаҡ һыйлаусы ҡоҙағыйына бирә. Тегеһе уны йыртҡылап, ҡунаҡ ҡашына (янына) алынған ағай-энеһенең ҡатындарына йыртып өләшә [63]. Күп ваҡыт егет әсәһе йыртышты ботона урап алып килер булған, сөнки йыртыш аҙ булғанда уның өҫтөнән кейемен шаярып, йыртып алыуҙар була икән. «Йыртышты аҙ алып килгәнһегеҙ, күлдәгенде һыпырып алабыҙ»,— тиһәләр, егет әсәһе ҡунысынан тауар алып биргән.

Ҡоҙалар ошо ваҡыт таҡмаҡ әйтә:

— Аҡ күгәрсен аҡ була,
Күк күгәрсен күк була.
Йыртыш һорай тип, көлмәгеҙ:
Борондан ҡалған йола!
Еккән аттары ҡола,
Йыртыш һорай тип, көлмәгеҙ:
Борондан ҡалған йола.
Талдан дуға бөгәбеҙ,
Ҡоҙаларҙың йыртыштарын,
Әсмүхәләп бүләбеҙ [64].

Әгәр ҡоҙағыйҙың йыртышы ҡунаҡ күрергә килгән ҡатындарға етмәһә, аҙыраҡ алып килгән ҡоҙағыйҙан яңынан йыртыш даулап, аҡса өҫтәтәләр. Наҡыҫ, ҡаты күңелдәрҙе битәрләп, тәрттөрөп таҡмаҡлайҙар:

— Ҡыпсаҡтан килгән Нурый.
Йыртыш һорай башлағайныҡ,
Йығылып китте юрый.

**Йыртыш таратыу** төрлөсә көрмәкләшеүгә барып етә. Ҡулына туй йыртышы киҫәге төшмәгән кеше ҡалырға тейеш түгел.

### Йыуаса

Туйҙың икенсе көнөндә, ғәҙәттә, егет яғы алып килгән күстәнәс — йыуаса менән һыйлау йолаһы була [65]. Был көндө сығарыла

торған төп һый — **йыуаса.** Шуға туйҙың икенсе көнөн **«Йыуаса көнө», «йыуаса ашы»** [66] тип тә атағандар. Йыуасаны барыһына ла ауыҙ иттерергә тырышалар, уны ауыҙ иткән һәр кем ҡунаҡ һыйлаусыға аҡса (тәңкә) бирә.

Йыуаса тоҡон (йә йыуаса батмусын) бушатмаһаң, килен үпкәсел була, тигәндәр. Йыуаса батмусы бушағас, өҫтөнә баҫып ҡәйнә бейей [67]. Уның аяғы аҫтына тәңкә һелтәйҙәр.

Ҡоҙасалар күстәнәс тултырылған һандыҡты — йыуаса һандығын — табынға сығаралар. Ул ит, ҡатырылған сәк-сәк (бауырһаҡ), унлап ҡаҙ түшкәһе, ун-ун биш аҡ күмәс, ҙур ғына тоҡ эсендә майҙа бешкән ваҡ күмәс һәм башҡа ризыҡ менән тулы була. Был ризыҡ-ниғмәттәрҙе маҡтай-маҡтай ауыҙ итәләр.

## Кейәү һандығы

Икенсе көндө **егет һандығын** да сығаралар. Уның өҫтөндә ҡыҙҙың кесе һеңлеһе бейей. Һандыҡтың туҡылдауына ҡарап самалайҙар: «Тулы булһа — туҡылдар, ярты булһа — яңғырар». Кейәү үңәрен дә ошо мәл һынайҙар (йомаҡ әйтәләр, һорау бирәләр). Ҡайһы ваҡыт уны бейетәләр йә һандыҡты күтәртәләр [68]. Иң өҫтә ятҡан бүләк — һандыҡ асыусыға. Ғәҙәттә, ул кеше ҡыҙҙың ҡартнәһе йә олораҡ йәштәрҙәге бүтән ҡатын була. Уға күлдәклек йә йыртыш, йә ҡыҙыл яулыҡ бүләк итәләр [69]. Егет әсәһе һандыҡтан барыһына ла йыртыш йә һарауыс өләшә. Кейәү һандығының иң төбөндә ятҡан бүләкте, мал әйтеп, ҡыҙҙың яҡын ағаһы йә туғаны (ҡустыһы) ала. Быны — **сәрмә төбө** йәки **сәрмә сисеү** тиҙәр. Бүләкте алғанда:

— Сәрмә төбө — ун тәңкә,
Ун тәңкә лә бер тәкә,
Бер тәкәгә һал тәңкә!

тип һамаҡлайҙар.

Ошонан һуң ҡыҙ әсәһе, һандыҡ тулы килеп, буш ҡайтмаһын, тип, уның төбөнә тәңкә ырғытырға тейеш. Хужалар ҡунаҡтарҙың һаранлығын йә йомартлығын, байлығын йә ярлылығын һынайҙар. Был хаҡта йыуаса тоҡон йөкмәп бейегәндә әйтелә. Йыуаса тоҡон күтәреп тәүҙә егет яғы ҡоҙасаһы бейей, унан — ҡыҙ яғы ҡоҙасаһы.

Ҡыз яғы еңгәйе йә ҡыҙҙың яҡын туғаны (егет яғының ҡоҙасаһы) йыуаса тоҡон йөкмәп алып, түңәрәкләп бейеп йөрөй. Егет яғы туғандарының арҡаһына тоҡ менән еңелсә генә һуғып та китә [70]. Уның аяғы аҫтына тәңкә ырғыталар.

Ҡоҙағыйҙар хәлле микән,
Хәлен хәлдән һорайыҡ.
Ҡоҙасаның йыуасаһын
Йөкмәп бейеп ҡарайыҡ!

Ҡоҙаса бейеп-бейеп йөрөй ҙә тоҡто өй уртаһына килтереп ул-

тырта. Тоҡтоң ауыҙын сисәләр, бауын ике еңгә һатып ала. Тоҡ ауыҙына тағы бер аршинлыҡ тауар бәйләнгән була. Уныһы ҡыҙ яғы ҡоҙасаһына бирелә. Тоҡто асҡас, еңгә кеше йыуасаны һибеп ебәрә. Барыһы ла йыуасанан ауыҙ итәләр. Тәүҙә, кұстәнәсте әсе һүҙҙәр менән яманлап, һамаҡ әйтәләр [71]. Шунан егет яғынан таҡмаҡсыларға тәңкә йә тауар өләшәләр. Ошонан һуң ғына йыуасаны маҡтап, данлап һамаҡ әйтә башлайҙар:

— Беҙҙең ҡоҙа хәлле икән,
Йыуасаһы баллы икән.
Ышанмаһаң, ашап ҡара,
Шәкәрҙән дә татлы икән!

Йыуаса йөкмәп бейегән кешегә егет әсәһе йә таҫтамал һалған, йә һарыҡ әйткән.

Йыр, бейеү, ике яҡ бер-береһенә таҡмаҡ әйтешеү бик оҙаҡ бара. Бейеүселәрҙе дәртләндереп йә халыҡты көлдөрөрлөк таҡмаҡ әйтешеп ярышҡандар. Туйлыҡ, кейем-һалым, аш-һыу — барыһы ла таҡмаҡҡа эләккән.

## Кейәү көрәгәһе асыу

Йыуаса тоғо асылғас, кейәү көрәгәһен [72] сығаралар. Көрәгә ауыҙына йыртыш бәйләнгән була. Ул кейәү күстәнәсен йөкмәп бейеүсегә бирелә [73]. Көрәгә өҫтөнә дүрт-биш метр самаһында аҡ йәки ҡыҙыл төҫтәге тауар йә таҫтамал ябылған була. Ул ябыуҙы алыусы алдан уҡ билдәләнеп ҡуйыла. Ябыуҙы ҡыҙ яғынан яҡын туғаны кейәүгә мал әйтеп ала. Ошонан һуң бөтә йыуасаны ашъяулыҡҡа түгеп, тоҡ төбөнән дүрт-биш метр самаһы тауарҙы сығаралар. Уны ла ҡыҙҙың бер туғаны мал әйтеп ала.

Йыуаса көнөндә төп ҡоҙаға (ҡыҙ атаһына) күлдәк бүләк ителә. Ошо күлдәк туй бөткәнсе, бер аҙ туйҙан һуң да өй йә тирмә түрендә эленеп торорға тейеш булған. Уға **түр күлдәге** тигәндәр.

**Көрәгә асыу** туй башлауҙы аңлата. Шуға ҡайһы бер урындарҙа (Миәкә, Дәүләкән, Ҡырмыҫҡалы, Баймаҡ, Хәйбулла яҡтарында) уны беренсе көндө үк асҡандар.

Ашъяулыҡҡа сәселгән бөтә һыйҙы ашап бөткәс, ҡыҙҙың әсәһе ҡоҙағыйы алып килгән бүләкте — **кейәү күренешен** — тарата: ирҙәргә — таҫтамал, йәшерәктәргә — тауар (йыртыш кисәге, һуңғыраҡ дәүерҙә ҡулъяулыҡ), әбейҙәргә һәм ҡатын-ҡыҙҙарға — яулыҡ, ҡулъяулыҡ, йыртыш. Ҡыҙ яғының оло әбей-бабайҙарына күлдәк бирәләр.

Һуңынан туй һебәһе өсөн көрәшеүҙәр ойошторола, ат сабыштырыу, уйындар үткәрелә. Егет үңәре һебәне көрәшеп ала ла ҡыҙ туғаны йә ағаһына (йә ағаһы урынына йөрөгән яҡынына) бирә. Ағаһы уға бер һарыҡ тәкәһе әйтергә тейеш.

Был көн кис **һаба йыйырға** сығалар.

## Һаба йыйыу

Һаба йыйыуға[74] туйҙа ҡатнашыусылар барыһы ла сыға. Берикеһенең ҡулында — **һаба (бейек күнәсек).** Шул һауытҡа ҡымыҙ, ә ҡалған силәктәргә, кәсәләргә өйҙән-өйгә йөрөп төрлө ашамлыҡтар йыялар. Шул йөрөү ваҡытында төрлө йыр-бейеү, һамаҡ әйтешеү, уйын-көлкө, төрлө мәрәкәләр (биттәрен ҡоромға буяшыу, өҫ кейемдәренең тиҫкәреһен әйләндереп кейеүҙәр) булған.

Һабасылар йола башланыуы тураһында һамаҡлап хәбәр иткәндәр:

— Һаба йыйырға сығайыҡ,
Төп ҡоҙанан башлайыҡ.
Ҡоҙағыйҙың йомартлығын
Ошо ерҙә һынайыҡ!

Һабасыларға ашамлыҡ, күстәнәс биреп ебәреүселәр үҙҙәре теләк теләп торалар:

— Алдын-артын яй булһын,
Умырғаның май булһын.
Бысағығыҙ баҙыҡ булһын,
Туҫтағығыҙ сөм май булһын,
Ҡоҙағыйҙар май сәнскәндә,
Ҡулдары йомарт булһын!

Һаранды үсекләп, йомартты маҡтап, һабасылар ҡара төнгә тиклем йөрөйҙәр. Һуңынан төп йортҡа ҡайтып, таңға тиклем шаугөр килеп йырлап күңел асалар, һый-хөрмәт күрәләр.

## ӨСӨНСӨ КӨН

Туйҙың өсөнсө көнөндә иртән төп ҡоҙа йортонда **ҡоҙаса сәйе** уҙғарыла. Был һыйҙы ҡыҙҙың һеңлеләре, яҡын ҡыҙ туғандары ойоштора.

Иң тәүҙә ҡыҙҙар егет үҫәрен һыйлайҙар: сәй эсерәләр, ит һоғондоралар. Үҫәр бер һауытты ла буш ҡайтармай — тәңкә һала. Сәй эскәндә, ҡоҙасалар егеткә тәрттөрөп таҡмағын да әйтә.

Һуңынан ҡоҙасалар ҡалғандарҙы сәй эсерәләр. Һәр ҡунаҡ сәй өсөн тәңкә һалырға тейешле. Һый-хөрмәт туй атҡарышыусыларҙың бөтәһенең дә өйөндә була. Төрлө уйын, йыр, бейеү, таҡмаҡ әйтешеүҙәр дауам итә. Хужалар ҡоҙаларға яулыҡ, аяҡлы еп, ҡулъяулыҡтар өләшә.

Ҡискә табан ҡунаҡтар барыһы ла бер йортҡа йыйыла. Был — **«ҡунаҡ ашына» («төп ашҡа» йә «мир балына»)**[75] йыйылыу тип аталған. Мир балы — ун кешенең шәкәренән ҡойолған. Балды маҡтап, кәсәләргә тәңкә һалып биргәндә һамаҡлап торғандар. Хужаларҙы, туйҙы маҡтап, ҡара-ҡаршы йыр йырлашҡандар.

Ҡыҙ яғы:

Туры аттар ектем, әй, һатыуға,
Аҡ кейеҙҙәр баҫтым ятыуға.
Бик күптәрҙең иҫе китһен әле
Ҡоҙа менән беҙҙең татыуға.

Ҡунаҡ ҡоҙалар:

Эһ-эй, умарталар, умарталар,
Бал ҡушайыҡ уның ҡортона.
Йырлап ҡына гөрләп ултырайыҡ,
Йәмдәр биреп ҡоҙа йортона.

## ДҮРТЕНСЕ КӨН

### Ҡоҙа оҙатыу

Туйҙың иң аҙаҡҡы көнө — **«хуш ите», «хуш ашы»** йәки **«сыбыртҡы ите»** тип аталған.

Һыйлау, хөрмәт итеүҙең аҙағында сыбыртҡы менән ҡунаҡтарҙы ҡыуыу йолаһы еткән.

Ҡыҙҙың ағаһы йәки яҡын туғаны тунды тиҫкәре яғы менән кейә, башына бүрек, биленә билбау бәйләп, бейей [70]. Уны «сыбыртҡысы» йә «көтөүсе» тиҙәр. Сыбыртҡыны, ғәҙәттә, һаламдан-бесәндән үреп, үрмә осона өс ҡыҙыл суҡ бәйләйҙәр. «Көтөүсе» һалам сыбыртҡыһын болғай-болғай барыһына ла «һуғып» сыға, үҙе: «Ат егеүле, ҡыбырлаһағыҙ ҙа була! Ат ҡойроғо төйөлгән, айыу туны кейелгән. Хуш! Хуш!» — тип әйтемләп-әйтемләп бейей.

Иң тәүҙә сыбыртҡысы төп ҡоҙаға һуға, уныһы «көтөүсе»нең билбауына бишлек ҡыҫтыра. Һуғылған һәр кем сыбыртҡы осона тәңкә тағырға тейеш. Ошо ваҡыт һамаҡ та әйтелә:

— Һайт-һайт, һайтылдама,
Сыбыртҡыңды ла төшөр.
Бына тағын һумлыҡ тағам,
Тиҙерәк итеңде бешер.

Шулай сыбыртҡысы «һуға-һуға» тәңкә йыя. Ә хужалар яғы яуап итеп, һамаҡлай:

— Һай-һайт, һай түҙә!
Әй ҡоҙалар, ҡоҙалар,
Аҡ майҙы ашап бөттөгөҙ,
Һарыһын да бөттөгөҙ,
Инде ҡайтып китегеҙ,
Һай-һайт, һай түҙә!

Көтөүсе йыйылған тәңкәне ҡыҙ яғы еңгәләренә, аш әҙерләүселәргә бирә. Тегеләре, йәнәһе, шул хаҡҡа хуш ашы, сыбыртҡы

ашы йндерәләр. Төп ҡоҙа хуш итенә бер нисә аяҡ (ҡаҙан) бишбармаҡ әҙерләгән була. Хуш итен ашатҡас, ҡыҙ әсәһе ҡунаҡтарға күлдәклек йә башҡа бүләк тарата. Хужалар хуш әйтә.

Ҡунаҡтар табындан тороуға, таяҡҡа сәрмә тотоп (быҙау тиреһенән тегелгән тоҡ), ишек янына ике яҡлап ике ҡыҙ баҫа. Һәр кем тоҡсайға тәңкә һалып сығырға тейеш [77]. Ҡыҙҙар һамаҡ әйтеп тора:

— Ҡоҙа һыйы — ун тәңкә,
Ҡалған һыйы — йөҙ тәңкә,
Сәрмә төбө — мең тәңкә!

Ҡоҙалар барыһы ла өйҙән сығып бөткәс, уларға хуш аяғы эсерәләр: бал, буҙа, ҡымыҙ. Ишек алдында күңел асыу, бейеүҙәр ҡабатлана. Ошо ваҡыт сыбыртҡысы аҙбар тирәләй мөйөштәргә, ситәнгә, кәртә-ҡураға һуғып йөрөй башлай, төрлө ергә кереп, сыбыртҡы шартлатып сыға. «Ат егеүле, ҡыбырлаһағыҙ ни була!» — тип, йәнә ҡунаҡтарҙы өтәләй.

Аяҡсы хушлашыу йырын башлай, ҡалғандар ҡушыла:

— Эй, ҡоҙалар, ҡоҙалар, ҡоҙалар, ҡоҙалар,
Аттарығыҙ егелгән, егелгән (2 тапҡыр).

Ҡойроҡтары төйөлгән, төйөлгән,
Кейеҙегеҙ йәйелгән, йәйелгән (2 тапҡыр).

Эй, ҡоҙалар, ҡоҙалар, ҡоҙалар, ҡоҙалар,
Йүгәнегеҙ һарылған, һарылған (2 тапҡыр).

Аттың ялы таралған, таралған, таралған,
Мендәрегеҙ һалынған, һалынған (2 тапҡыр).

Арғы яҡта арҡылсаҡ, арҡылсаҡ, арҡылсаҡ,
Бирге яҡта биргелсәк, биргелсәк (2 тапҡыр).

Һеҙгә етте ҡайтыр саҡ, ҡайтыр саҡ,
Беҙгә етте ятыр саҡ, ятыр саҡ!

Ҡоҙалар туйға килгәндә, үҙҙәре менән түшәк-юрған алған. Ҡайтыр ваҡыт еткәс, уларҙы яңынан арбаға тейәйҙәр.

Ҡоҙаларҙы оҙатҡанда, тағы **«кот сабыу»**, **«кот алыу»** бәйгеләре үткәрелә. Ҡоҙағый артына ҡарамай, баш аша сәк-сәк, тәңкә, кәнфит, йыуаса һибә.

Ҡыҙ яғы егеттәре ҡоҙаларҙы һай-һайлап ҡыуа сығалар. Уларҙың бүректәрен тартып алып, юлдарын бер нисә рәт арҡан менән бүлеп, тәңкә бүләк алмайынса ебәрмәйҙәр.

Ҡоҙаларҙы ҡыуып оҙатыусылар ауылдан бик алыҫҡа тиклем баралар [78].

Ишек төбөнә йә болдорға, ҡайһы саҡ ихатаға сыбыртҡы элеп, сыбыртҡы армытына бер ҡалъя ит бәйләп ҡуялар.

Төп ҡоҙа үҙ ҡоҙаһында ҡалып, тағы ла өс-дүрт көн яҡынан ҡунаҡ була. Ул тағы бер ҡабат ҡоҙаларға ашҡа йөрөп сыға, шунан ғына ҡайтып китә.

## Серге ҡағыу

Ҡоҙаларҙы оҙатҡас, ҡыҙ атаһының туғандары, хөрмәткә ҡатнашыусылар кире өйгә инеп, ҡалған һыйҙы ашап-эсеп күңел асалар, именлек, шатлыҡ теләшәләр. Еңгәләр аяҡ аҫтында ятҡан кейеҙҙәрҙе сығарып ҡағалар, уларҙы һуғып-һуғып, әр һүҙе әйтеп ҡуялар, йәнәһе, ен ҡыуалар. Ошоно **серге ҡағыу** тиҙәр. Төп ҡоҙа ҡағыусыларға тәңкә бирә. Олораҡ әбейҙәр ҡоҙаларҙы оҙатып өйгә ингәндә, ағас ботағы, таяҡ йә йуныҫҡы киҫәге алып, мейескә яға. Оҙатҡас, «буш ҡул менән ут янына инергә ярамай»[79], тиҙәр, юғиһә, киткән кеше менән ҡот китә була.

## Ҡарта ашы

Ҡоҙаларҙы оҙатҡас, икенсе көн ҡыҙ атаһы **ҡарта ашына** ҡунаҡ йыя. Был ашҡа тик йәш-елкенсәк, ҡыҙ-ҡырҡын, килендәр генә саҡырыла. Килгән ҡунаҡтар ҡыҙға һаҡал, ҡашмау яһау өсөн тәңкә, мәрйен, йөҙөк алып киләләр. Бүләк итә торған тәңкәләрен еңгәләр, күтән итенә, ҡарынға, йылҡының ҡартаһына ҡушып, ҡалаҡҡа һалып бирәләр[80].

Ошо көн кис еңгәләр китәһе ҡыҙға шаршау тегешәләр, төрлө йырҙар йырлайҙар, сеңләү һамаҡтарын өйрәтәләр.



# ҠАЛЫН АЛЫУ ТУЙЫ

## ЙОРТ КҮРЕҮ

Ҡейәү бер-ике тапҡыр кейәүләп ҡайтҡас, егет атаһы ағай-энеләре менән кәңәшләшеп, ҡыҙ атаһын ҡалын [81] алырға саҡырырға үҙ ауылынан урта йәштәрҙәге бер-ике кешене саҡырыусы итеп ебәрә. Ҡалын атҡарышыу өсөн сит ауылдың тағы бер нисә хәллерәк кешеһен, туғандарын ҡунаҡҡа саҡыра.

Саҡырыусы булып барған кешеләр өс-дүрт көн ҡунаҡ булғандан һуң, ҡыҙ атаһынан бүләккә камзул, күкрәксә йәки сапан алып, үҙен ҡалын алырға саҡырып ҡайталар.

Уларҙың ҡайтыуына егет атаһы һуя торған малдарын һуйып ҡуя. Ҡалын атҡарышыу өсөн саҡырылған ҡунаҡтары ла берәр тәкә һуйып, күпләп күстәнәстәр алып, әҙерләнеп торалар.

Ҡалынға барыр алдынан ҡыҙ яғынан кейәү яғына йорт күрергә баралар. Ҡыҙ туғандары егет яғында ҡунаҡ булып, ҡоҙаларының тормошон, малын күреп ҡайталар. Былары — **йорт күреү йолаһы.**

### Ҡыҙ йортонда әҙерлек

Ҡыҙ атаһы, саҡырыусы ҡоҙалар ҡайтып китеү менән, үҙенә туған булған ун парға һәм биш-алты һыбайлы кешегә ҡалын алырға барырға әйтә.

Ҡалын алырға әйтелгән ирле-бисәле кешеләр алтышар-етешәр аршин сатин, ятып-тороп йөрөй торған йорт хужаһына күстәнәс әҙерләйҙәр.

Ҡалынға барыр көн килеп еткәс, ҡыҙ атаһы, үҙенең әйткән кешеләрен алып, барыһы бергә юлға сығалар.

## БЕРЕНСЕ КӨН

### Ҡоҙаларҙы ҡаршылау

Егет атаһы тарафынан ҡоҙаларҙы һыйлашырға тәғәйенләнгән йәштәр ҡоҙаларҙы ярты юлдан ҡаршылайҙар.

Ҡоҙалар күренеү менән, туйҙағы һымаҡ ҡаршы барып, берәү «ҡот» алып ҡаса. Ҡемдәрелер килгән ҡоҙаларҙың бүректәрен тартып алып ҡасалар. Улар артынан һыбайлы ҡоҙалар ҡыуа төшә. Ҡоҙаларҙы яланбаш ауылға алып инәләр.

Егет атаһының ишек алдына килеп туҡтау менән, ҡоҙаларҙы хөрмәтләп, өйгә алып инәләр. Ауыл малайҙары ҡоҙаларҙың аттарын һыуытырға (йөрөтөргә) урам буйлап алып сығып китә.

Ҡоҙалар өйгә инеп ултырыр-ултырмаҫтан уларҙың өҫтәренә бауырһаҡ, кипкән ваҡ ҡорот һибәләр. Шуның артынса ҡунаҡтарға сәй килтерәләр, аш ҡуялар. Тәүге һый-хөрмәт һуңында, кисен, ҡоҙаларҙы егеттең ағай-энеләре үҙ өйҙәренә таратып алып ҡайта.

## ИКЕНСЕ КӨН

Икенсе көн иртән егет атаһы ауылдаштарын ҡунаҡ күрһәтеүгә [82] саҡыра. Был ашҡа, ғөмүмән, ҡалын туйының һәр мәжлесенә ҡунаҡты күберәк саҡырырға тырышалар. Шул көндө егеттең әсәһе ҡоҙағыйҙар йыйып килтергән бүләк ситсаны ҡунаҡ ҡараусыларға, уларҙың ҡатындарына йыртыш итеп өләшә, ҡоҙаларға тағы ла төрлө бүләктәр тарата. Быны **килен күренеше** тиҙәр. Унда таҫтамал, яулыҡ, ҡулъяулыҡ, йыртыш, аяҡлы еп, түшелдерек, янсыҡ, һарауыстар инә.

Ҡалым туйындағы һымаҡ егет яғына ҡыҙ яғынан **йыуаса** килә: майҙа бешерелгән сөсө күмәс, ҡаҡланған ит, бауырһаҡ, май һ. б. Ҡаршы һый итеп кейәү **сәксәге** сығарыла. Уның өҫтөнә аҡ таҫтамал ҡаплаулы була. Сәксәкте кейәүҙең еҙнәһе бер баш мал йә башҡа бүләк әйтеп асырға тейеш.

Мәжлес аҙағында һәр кем сәксәккә бүләк һала.

Бер ике көндән һуң сәксәккә төшкән бүләктәрҙе алып, кейәү кәләше янына китә. Ошонан һуң кейәүҙең ҡайны буҫағаһынан үтергә хоҡуғы арта. Ул өлкәндәр мәжлесендә ҡатнаша башлай.

**Ҡалын йыуасаһы** көнөндә төрлө уйын-көлкө, йыр, таҡмаҡ өҙөлмәй.

Еңгә кеше йыуаса тоғоп арҡаһына һалып бейей, барыһына ла бауырһаҡ һибә. Һуңынан әйләнә бейеп йөрөй, ҡайһы берәүҙәренә еңелсә генә «һуғып» та китә. Тоҡто болғай-болғай бейегәндән һуң: «Ҡайҙа минең өлөшөм?!» — ти башлай. Еңгәгә бүләккә яулыҡ, шәл йә күлдәклек бирәләр.

Йыуаса эйәһенә мал әйтеп, тоғон асалар. Йыуасаны барыһына ла ауыҙ иттерәләр. Таҡмаҡ, йыр, һамаҡ әйтешеүҙәр дауам итә:

— Ҡоҙағыйҙар, килдегеҙ,
Килдегеҙ ҙә еттегеҙ.
Һауалағы йондоҙ кеүек
Күҙемә күрендегеҙ.

Ҡоҙалар кәсә һайын тәңкә һалып бирәләр, эсеп бөткәс тә, тәңкә һалып, йырлап, ҡайтаралар. Ҡыҙ яғы яуап итеп:

— Әй ҡоҙалар, ҡоҙалар,
Һеҙ килгәндә — беҙ ерҙә.
Ҡунаҡ булып барҙыҡ иһә,
Ҡоҙалар ерҙә — беҙ түрҙә!

Был көндә ҡалын атҡарышыусы ҡунаҡтар алып килгән тәкәләр һуйыла. Ҡыҙ яғы ҡоҙалары төшкө аштан һуң бер нисә өйҙә ҡунаҡ булалар.

## ӨСӨНСӨ КӨН

Өсөнсө көн иртә менән егет атаһы өйөндә **мал тотоу, көрәгә ябыуын алыу** йолалары үткәрелә.

### Мал тотоу

Егет атаһы мал тотоу өсөн махсус ҡороҡ әҙерләп ҡуя. Шул ҡороҡто алып, ҡыҙ яғы ҡоҙалары мал араһына сыға. Тотолған мал, никах туйында килешелгәнсә, ҡыҙҙың атаһы өсөн һайлана. Шунан ҡоҙалар төп йортҡа йүнәлә.

Өй эсенән ишекте берәү бикләп, ҡоҙаларҙы эскә индермәй тора. Ҡоҙаларҙың береһе ҡысҡыра:

— Ишекте ас!
— Күпме мәһәр ташлайһың?
— Ун биш-егерме һум!
— Юҡ, бик әҙ!
— Утыҙ биш!
— Әҙ!

Шулай сауҙалаша торғас, мәһәр кәметеү егет атаһының үҙ өлөшөнә ҡарата бер сама ярарлыҡ булһа, эстән ишекте асып, ҡыҙ атаһын өйгә индерәләр. Уның артынан мал тоторға сыҡҡан икенсе бер ҡоҙа ишеккә килә. Уға ла ишек эстән бикле.

— Ишекте ас!
— Күпме мәһәр ташлайһың?..

. . . . . . . . . .

Шулай һәр бер ҡоҙаға ишек аша сауҙалашып, мәһәр хаҡын кәметеп инергә тура килә. Ҡоҙалар бер-бер артлы инеп, урындарына ултыралар.

## Ҡөрәгә ябыуын алыу. Ҡөрәгә асыу

Егет яғы табынға ҙур ҡымыҙ тәпәне йә самауыр ҡуя. Уның өҫтөнә аҡ сатин йә таҫтамал ябыла. Уларға күҙ-ҡолаҡ ҡуйыла. Ошо ваҡыт егет атаһы яғынан ҡоҙа һыйлап йөрөгән кешеләр түрҙә ултырған ҡоҙаларҙы берәм-берәм урындарынан һөйрәп торғоҙоп, үҙҙәре уларҙың урындарына ултыра.

Ҡыҙ яғы ҡоҙалары, аяғөҫтө йөрөп, түргә ултырған ҡоҙаларын хөрмәтләргә, һыйларға тейеш булалар. Ҡымыҙҙы йә самауыр сәйен егет яғы һатып алырға, йәғни һыйҙың һебәһен ҡайтарырға тейеш [84]. Ҡоҙа яғынан берәү түрҙә ҡунаҡ булып ултырғандарға берәр туҫтаҡ ҡымыҙ йә берәр сынаяҡ сәй яһап бирә. Егет яғы аяҡ өҫтө баҫып, ололап йырлай:

— Ҡалын алыуҙары, ай, һеҙҙәндер,
Ҡалым биреүҙәре беҙҙәндер.
Ҡөрәгәләр йырлап беҙ асабыҙ,
Йырлап алыуҙары һеҙҙәндер.

Ошондай йыр менән кейәү йортондағы ҡалын көрәгәһе асыла. Йырлап, ҡурай уйнатып хөрмәт иткәс, түрҙә ултырған кешеләр берәр алдыр ҡымыҙ, сәй эскәндән һуң, аяҡ өҫтө баҫып торған ҡоҙаларҙы (ҡыҙ яғы ҡоҙаларын) кире үҙ урындарына ултырталар.

Түрҙәгеләр, әүәлгесә уларҙы ҡунаҡ итеп, хөрмәтләп, аяҡ өҫтө торалар.

**Ҡөрәгә ябыуын алыу йолаһы** ҡоҙағыйҙар араһында ла ошо тәртип менән үтә. Тик улар тышҡа сығып, мал тотоп, мәһәр кәметеп йөрөмәйҙәр.

## Түшелдерек һатыу

Ҡисенә **түшелдерек һатыу** үткәрелә. Түшелдеректәрҙе ҡыҙ яғы ҡоҙалары һатып алырға тейеш. Ике-өс аршин тауарға күп итеп түшелдерек тағалар. Шул уҡ тауарға һарауыс, янсыҡ, һөлгөләр ҡушып тегелгән була. Тауарҙы ике башынан ике ҡоҙағый тотоп тора, түшелдерек һатыуҙары тураһында белдерә.

Иң алда «баш түшелдерек»те ҡуялар. Ул башҡаларына ҡарағанда матурыраҡ та, ҙурыраҡ та булырға тейеш. Шуға күрә ҡыйбатыраҡ хаҡ ҡуйыла.

«Баш түшелдерек»те төп ҡоҙағый (ҡыҙ әсәһе) алырға тейеш, ә ҡалғандарын егет яғынан туйға ҡатнашҡандар, йыуасаға килеүсе әбейҙәр, ҡатындар һатып ала.

Түшелдереккә йыйылған аҡса егет менән ҡыҙға була Ошо көндө кейәү ҡәйнәһенә **күренеш бүләген** бирә, унан фатиха алып күрешә.

### Көрәш

Көрәгә ябыуын алыуҙан һуң ашап-эскәс, майҙанға сығалар. Унда батырҙар көрәштереү, балаларҙы ярыштырыу, йүгертеү ойошторола. Еңеүселәргә бүләктәр тапшырыла. Алда килгән атты ҡотлап муйынына аҡ таҫтамал һалалар, ә өҫтөндәге егеткә (ат, тай, аяҡлы мал йә һарыҡ, кәзә) йә тун (сапан йә елән) бүләк итәләр. Көрәштә еңеүселәргә күлдәклек ситса, йыртыш, тәңкә, ҡайылған таҫтамал бирәләр.

### Һаба урлау

**Һаба урлау** [85] **йолаһы** ҡалын туйының өсөнсө кисендә атҡарыла. Ҡараңғы төшкәс, ирҙәр, ҡатындар айырым-айырым йыйыла. Ҡыҙ яғы кешеләре ҡалын туйында ҡатнашҡан, үҙҙәре ҡунып йөрөгән ҡоҙаларының өйҙәренә инеп, ҡымыҙ, аш-һыу йыялар.

Һаба йыйыусылар менән булған йырсылар өй һайын тәҙрә төбөнә барып, йырлап, ҡурайсылар ҡурай тартып тора, башҡалар бирелгән ризыҡты алып-һалып йөрөй. Йырсы һаранды хурлап, йомартты маҡтап таҡмағын әйтә:

— Ерән атым талауын,
Ерән атым талауын.
Һаба бирмәй ултыраһың,
Өңөрәйеп танауың [86].

Ҡайһы берәүҙәрҙән инеп, ашамлыҡты «урлап» алып сығалар. Өй хужалары, ғәҙәттә, һабасыларҙың килеүенә, алдан әҙерләнеп тора.

Йыйылған ризыҡты бер аулаҡ урынға алып барып, төн буйы күңел асып, һыйланып сығалар. Бер яҡтың ҡоҙалары ҡаршы яҡтыҡы менән биттәренә ҡором буяша, өҫ кейемдәрен алмаштырып ирмәк ҡора.

## ДҮРТЕНСЕ КӨН

### Оҙатыу

Туй ҡәҙере — өс көн (борон унан уҙһа, ете көнгә тиклем дә һуҙғандар). Дүртенсе көнгә **егет атаһы ҡоҙаларҙы оҙата.** Баш ҡоҙа егет атаһында ҡалып, яңынан өс-дүрт көн ҡунаҡ була.

Егет атаһы үҙ яғынан ҡалын ҡараған кешеләргә (ғәҙәттә, улар ун ир, ун ҡатын була) күлдәк кейҙерә.

### Сәрмә күтәреү

Ҡалын туйында, **сәрмә күтәреү** тип, махсус бейеү башҡарылған. Ике тоҡҡа бауырһаҡ тултырып, шуны көйәнтәгә аҫып, егет

яғынан бер ҡыҙ бейей. Икенсеһе батмус тотоп, аҡ йыя. Был ҡоҙаса бейеп килеп, ҡоҙаларына сәрмә менән һуға. Һуғылғаны йә һуғылырға теләмәгәне батмусҡа аҡса ырғыта. Шул аҡсаны ҡыҙҙар үҙ-ара бүлешеп ала [87].

## Кейәү күбәтәһе

Ҡалын ҡоро таралыр алдынан **кейәү күбәтәһе** * сығаралар [88]. Кейәүҙе саҡырып индерәләр. Тәүҙә ул барыһы менән дә ҡуш ҡуллап күрешеп сыға. Шунан уға, тәңкә һалып, ҡымыҙ тултырып, күбәтә тотторалар. Биргән берен кейәү үҙе генә эсеп тормай, бергә ингән тиңдәшенә, үңәренә лә бирә. Ҡымыҙын эскәс, тәңкәһен алып, күбәтәне кире ҡайтаралар. Кейәү буш ҡул сығырға тейеш түгел. Бөтәһе лә табынға йәйелгән ашъяулыҡҡа бүләк һала.

## Кейәү йортонда серге ҡағыу

Ҡыҙҙы оҙатып алыр ваҡыт еткәс, егет йортонда **серге ҡағыу** [89] йолаһы үтәлә. Егеттең яҡын ир туғандары, ағалары, оло бабайҙар мәжлескә йыйыла. Ошонда улар йәш кейәүгә өгөт-нәсихәт, теләк теләйҙәр. Һәр кем бүләк һала, мал әйтә. Егет әсәһе теләк теләп, улына аҡ ойоҡбаш бирә.

Китер ваҡыт еткәс, кейәү егетте арбаға йә атҡа күтәреп алып барып ултырталар. Кейәү йәнәшенә үңәре ултыра [90].

## ҠЫҘ ҠУСЕРЕҮ ТУЙЫ

Булъял тәүлеге тулғас, ҡалым, мәһәр түләнеп бөткәс, ҡыҙҙы туйлап ҡайны йортона оҙаталар [91]. Ҡыҙ оҙатып алырға егет яғынан бер нисә кеше бара.

Ғәҙәттә, ҡыҙҙы йәй күсергәндәр. Ҡышҡы, йәйге селләлә, сәфәр айында килен төшөрмәйҙәр, юғиһә, ул уҫал була, тиҙәр.

Егет яғы аш-һыу, күстәнәс әҙерләй, тыу бейә алып килә. Уны ҡырға сығарып, һуйып, ҙур мәжлес ҡоралар. Ике яҡтың да көрәшселәре, ҡурайсылары, йырсылары бәйгеләрҙә ҡатнаша.

Егет ҡыҙға һөйләшелгән бер ҡат кейем һәм ҡыҙ әхирәттәренә таратырға яулыҡ, тәңкә, башҡа бүләктәр алып килә.

Ғәҙәттә, кейәү ҡыҙға бүләктәрҙе ҡыҙыл төҫтән һайлай. Кейәү ҡыҙыл сәкмән, ҡыҙыл ғәлмәрйен сәкмән, шәл, килтерә. Тотош ҡыҙыл итеп, ҡыҙҙы ҡыҙыл түшәк, ҡыҙыл сергетыш һалып алып ҡайта [92]

Ҡыҙҙы оҙатҡансы, тағы бер нисә йола үткәреү фарыз.

### ТАҠЫЯҒА БОЛАШЫУ

Иртәгә атай йортонан китә торған көндө, ҡыҙҙың баш өҫтөнә шаршау ҡаплап, әхирәттәре ҡырға алып сыға [93]. Шунда береһе «таҡыя»ны ырғыта ла, артынан йүгерә, ә уның артынан ҡалғандар ҡыуа башлай. «Таҡыяны алып, тағы ырғыталар, тағы ла йүгерешеп ҡыуышалар. Шулай йүгерешеп дүрт-биш саҡрым ергә сығып китәләр. Таҡыяға болашып, йүгергән ҡыҙҙар артынан еңгәләр сыға. Арбала кейәү килә. Ҡыҙҙарҙы ҡыуып етеп, таҡыяны уларҙан алыр өсөн еңгәләр болаша, көрмәкләшеп китәләр. Бер ни тиклем тартышҡандан һуң, еңгәләр таҡыяны ҡыҙҙарҙан талап ала» [94].

Туғайға сыҡҡанда, ҡыҙҙар бергәләшеп бер ағасты суҡлаған була «Кем бәйләгән суҡ тиҙ уңа — шул ҡыҙ тәү башлап кейәүгә бирелә»[95], — тип юрайҙар. Шул ағасҡа китәһе ҡыҙҙың таҡыяһын элеп, түңәрәк йөрөтәләр, сең әйтәләр[96].

Таҡыяларын талға элеп,
Талпынып-талпынып илай ҡыҙ бала.
Китәр ҙә генә юлын ҡарай-ҡарай,
Ҡайырылып-ҡайырылып илай ҡыҙ бала.

**Таҡыяға болашыу йолаһында** китәһе ҡыҙҙы ҡушҡан еңгәһе менән көрәштерәләр. Ҡәйнә кеше ҡарап тора, һынай: әгәр киленә еңһә, ул донъя көтөргә ылдым булыр.

Китәһе ҡыҙҙың ҡыҙ сағы менән хушлашыуын аңлатҡан йола шулай ҙа атҡарыла. Ҡыҙҙы ҡырға алып сығыуҙы, өйөрмәс уйнарға йә арпа тапатмаға сығыу тиҙәр. Таҡыяға болашҡас, уны «өйөрсәк кеүек өйөртөп», ҡәйнәһе биленә ҙур француз яулыҡ бәйләй. Ҡыҙҙы тағы өйрөлтәләр, ҡулбашынан тапайҙар. Шунан ҡәйнә биленән ҡушъяулыҡ сисеп, уны килененең башына ябындыра[97]. Был йоланы **Өйөрмәс уйнарға** йәки **Арпа тапамаға сығыу** тиҙәр.

Йоланың ахырында ҡыҙҙар сеңләп илаша, йырлаша, теләк теләй.

Ҡырға киткән ваҡыттарында, ауылда **һунарға барыу** йолаһы үткәрелә. Өй беренсә йөрөп, төрлө бүләк йыялар: тәңкә, таҫтамал, яулыҡ, сүк һ. б. Бөтә бүләк һуңынан ҡыҙға тапшырыла.

## ҠЫЗ КҮТӘРЕҮ

Яланда уйнап, сеңләп, туғай менән хушлашып бөткәс, еңгәләр ҡыҙҙы күтәреп алып ҡайталар[98]. Был йоланы **«ҡыҙ күтәреү»** тигәндәр. Ҡыҙҙы күтәреп алып ҡайтҡан өсөн егет атаһы ҡалдырған аҡсаны еңгәләргә бирәләр. Был **«Еңгәләр аксаһы»** тип атала.

## ҠЫҘҘЫҢ АТАҺЫ-ӘСӘҺЕ, ТУҒАНДАРЫ, АУЫЛ МЕНӘН ХУШЛАШЫУЫ

Ҡырҙан ҡайтҡас, әхирәттәрен эйәртеп, ҡыҙ, аҡ бөркәнсек бөркәнеп, тыуған ауылы, яҡын туғандары менән хушлашырға сығып китә. Дүрт әхирәте шаршауҙың дүрт мөйөшөнән, сатыр кеүек итеп, ҡыҙҙың баш осонда тотоп бара. Ошолай өйҙән өйгә инеп, улар хушлашып, ҡыҙ исеменән сеңләп йөрөйҙәр. Һәр өйҙә хушлашҡан кешеләрҙең яурындарына ҡыҙ өс рәт, алмаш-тилмәш башын һалып, ҡосаҡлаша. Ҡыҙҙың түбәһенә тәңкә баҫалар. Һәр өй хужаһы уға бүләк (ғәҙәттә донъя кәрәк-ярағы) биреп сығара. Ҡыҙҙар бер өйҙә әйтелгән сеңләү һамаҡтарын мөмкин тиклем икенсе өйҙә ҡабатламаҫҡа, һәр осраҡҡа яраҡлыһын, яңыларын сығарырға, ҡыҙғанысыраҡ йөкмәткеле һүҙҙәр әйтергә тырышалар[99]. Һәр өйҙә лә ҡыҙ:

— Аршын ғына аршын аҡ уҡа
Аҡбуҙ атҡайҙарға элгегә.
Илай ғына һыҡтай еп бәйләйем,
Ҡалған әхирәттәргә билгегә, —

тип, сеңләй-сеңләй, урҙаға йә сөйгә, суҡ бәйләй йә тәңкә таға, ә еңгәһе таҫтамал элә.

Ата йортонда сеңләгәндә, ҡайһы бер яҡтарҙа ҡыҙ әхирәттәре менән хушлашыу бейеүен башҡара. Көйҙөң беренсе яртыһында ул һалмаҡ «алмаш аҙым» менән түңәрәк буйынса бейеп үтә, ә икенсе яртыһында берәй әхирәтенең яурынынан ҡосаҡлап, гүңәрәк уртаһында әйләнә. Шулай, оҙатылаһы ҡыҙ һәр әхирәте менән айырым хушлашып, бейеп сыға. Шунан ҡыҙҙың еңгәләре килеп, барыһының да өҫтөнән шаршау тарта, ә ҡыҙҙар китәһе әхирәттәрен уртаға алып, көй ыңғайына тирбәлеп тора.

Ҡыҙ ауылды урап ҡайтыуға баштан аяҡ төрлө суҡ, сепрәк, еп менән һарылған, ә битен ҡаплаған бөркәнсегенә күп тәңкә, төрлө төҫтәге сепрәк, суҡ тағылған була [100].

Урамда барғанда, ҡыҙҙар илай-илай сеңләй:

— Урам ғына аша уҙайыҡ,
Йәшел генә ебәк һуҙайыҡ.
Йәшел генә ебәк, йәшләй йөрәк,
Иламайса нисек түҙәйек?!

Сеңләп ауылды урап сыҡҡас, ҡыҙҙар төп йортҡа ҡайта.

## ҠОҘАЛАРҘЫ, КЕЙӘҮҘЕ ТИРГӘҮ

Ҡыҙ атаһы йортона ҡайтҡас, **еңгәләр, әхирәттәр ҡоҙаларҙы тиргәү, хурлау һамаҡтарын әйтеп, сеңләй башлайҙар** [101]. Яҡшы булһа ла, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙың, кейәүҙең кейгән кейемдәрен, үҙҙәрен, хатта алып килгән ашамлыҡ күстәнәстәрен хурлап һамаҡлайҙар. Шаянырак ҡоҙалар: «Әйт, килен, әйт, ҡатырағын әйт!» — тип, ҡеүәтләп торалар.

Ҡоҙаларҙың аттарын
Аҡбур менән бурлайыҡ.
Беҙгә килгән ҡоҙаларҙы
Кәзә тәкәһе тип хурлайыҡ.
Ҡоҙа, ҡоҙа — ҡоҙороҡ,
Ҡаҡ башыңа — йоҙороҡ!

Тиргәү бик ҡуйырып киткәс, сеңләүселәргә ҡоҙалар тәңкә ырғыталар. Ошонан һуң башҡарыусылар кейәү яғын маҡтап, данлап һамаҡлай, йырлай башлай.

Ағиҙелдең һыуы һалҡын,
Йөҙөп сығарлыҡ түгел.

Безгә килгән ҡоҙаларҙы
Маҡтаһаң да йәл түгел.

Ҡыҙ үҙенең әсәһе, атаһы менән сеңләп, әйтешеп ала.

## ҠЫҘ ҠЕЙЕНДЕРЕҮ. БИЛ БЫУЫУ

Илап, сеңләп хушлашҡандан һуң, **ҡыҙҙы еңгәләре ҡатын кейемәнә кейендерә башлай.** Ошо ваҡыт ҡыҙҙың башына ҡашмау кейҙереү өсөн еңгәләр, әхирәттәр араһында болаш башлапа. Еңгән еңгәһе ҡыҙҙың башына көсләп ҡушъяулыҡ яба йә ҡашмау кейҙерә [102]. (Сөңки ҡыҙ уларҙы бер нисә рәт быраҡтырып ебәрә.)

Башың яланғас тормаһын,
Ҡеи башыңа ҡашмауың.
Атаң-әсәң булмаһа ла,
Оҡшамай бит ташлауың.

Ҡейендереп бөткәс, ҡыҙҙың сәсен ике толомға үрәләр.

Бер ҙә генә толом сәстәреңде
Икегә лә үреп һал инде [103].
Ҡилен булып өйҙән сығып киткәс,
Шаршау арты макам булыр инде [104].

Еңгә ҡыҙға селтәр һала, һамаҡлап, теләк теләп, уның билен быуа.

Ҡабағандан ҡаптырма,
Тибәгәндән типтермә.
Минең һымаҡ сәсән бул, телдәр бул.
. . . . . . . . . . .

Аҙаҡтан, ҡыҙҙың битен бөркәнсек менән ябып, әйтеп ҡуя: «Мүк билғау, йәшел суҡ, дошманыңды йәшен һуҡ!»

Ҡыҙға ата-әсәһе лә теләк, өгөт-нәсихәт әйтә:

— Хәҙер һин кеше кешеһе:
Башың ярылһа — яулыҡ эсендә,
Ҡулың һынһа — еңең эсендә,
Тауышың, йәшең үҙ эсеңдә,
Ҡеше ишетмәһен, күҙ-ҡара күрмәһен [105].

## ТҮШӘККӘ БОЛАШЫУ

Ҡыҙҙар сеңләшеп йөрөгән арала, егеттәр ҡыҙ түшәген ҡырға уҡ алып ҡасып, уны бер тирәк төбөнә йәйеп, мөйөшөнән шул агасҡа бәйләйҙәр. Ҡыҙҙар уны сисеп, үҙҙәре үк кире шул тирәккә бәйләп ҡуялар ҙа бауҙың осон бик ныҡ итеп йәшерәләр, шунан түшәк башына менеп ултыралар. Бауҙың осон эҙләгән еңгә-

ләр, егеттәр йән тиргә төшөп бөтәләр. Түшәк өсөн көрмәкләшәләр. Ахырҙа еңгәләр түшәкте үҙҙәренә алалар ҙа йортҡа алып ҡайталар. Түшәк алырға килгән ҡоҙағыйҙан (кейәү әсәһенән) еңгәләр бүләк, күстәнәс алалар.

Түшәккә болашыуҙы ҡарарға ауылдың бөтә йәш ҡыҙҙары, килендәре килә.

## ҠЫҘ ОҘАТЫУ

Кейәү арбаһына (йә санаһына) ултырырҙан элек ҡыҙҙар тағы хушлашып, бәхилләшеп сеңләй башлайҙар.

Шәлъяулығымдың остарын,
Бөгөр генә инем — әмәл юҡ.
Кил, әсәкәйем, күрешәйек,
Аяҡ ҡына баҫыр хәлем юҡ.

Әсәһе ҡыҙына теләк теләп, «әсә һөтө» тип, аҡ эсемлек (һөт, ҡымыҙ йә ҡатыҡ) эсерә [107]. Ҡыҙ әсәһе менән ҡосаҡлашып, хушлаша. Ошо ваҡыт еңгәләр уларҙың икеһен айырым-айырым таҫтамал менән айырып алалар [108]. Ҡыҙҙар яр-яр әйтә:

Сәсмәүемдең сәсәге ишмә булыр, яр-яр,
Күҙҙәремдең йәштәре шишмә булыр, яр-яр.
Атаһынан, инәһенән айырмағыҙ, яр-яр.

Ҡыҙ өйҙән сыҡҡанда, ишек яңағына таянып, китмәҫкә ҡырталаша, илай. Үҙе маңлайын ишек яңағына тейҙереп-тейҙереп ала. Ата-әсәһе, мал әйтеп, ҡыҙҙы ишектән айырып ала.

Ошонан һуң ҡыҙ тыуған йортон өс тапҡыр урап сыға [109]. Арбаға ултырыр алдынан, ҡыҙ арба тирәләй ҙә өс рәт әйләнеп, ағаһына сеңләй:

— Ултырҙым да урам уртаһы,
Фәрештәләрҙең ҡанаты.
Ултыртма ла, ағасай, ултыртма
Ят кешеләрҙең арбаһы.

Шунан ҡыҙ оло әбей-бабайҙар менән күрешеп сыға. Әбейҙәр уның яулығына таңкә баҫа.

Ҡыҙҙы оҙатып алып барыусы ағаһы уны, күтәреп алып, арбаға ултыртырға итә, тик ултыртмай. Шулай өс мәртәбә ҡабатлана [110]: өсөнсөһөндә, арбаға ысынлап ултыртып, мал әйтә лә, ҡыҙҙың ауыҙына таңкә ҡаптырып:

— Ҡалыр нигеҙең шунда,
Таштай, ҡомдай бат шунда.
Һау бул, таҙа бул,
Иленә игелекле бул [111]!

тип әйтемләй.

Ҡапҡанан сығып киткәндә, артынан таш ырғытып: «Һыуға батҡан таш кеүек бул!» — тиҙәр.

Ҡыҙ сөйө буш ҡалмаһын тип, ҡәйнә сөйгә таҫтамал элеп ҡалдыра.

Арбаға ҡыҙ менән бара торған ағаһының ҡатыны (ҡыҙҙы ҡушҡан еңгә) ултыра, ағаһы ат тота. Ҡейәү арбаһына ҡыҙҙы алырға килгән ҡоҙағый, ул булмаһа уның урынына килгән арсый, ултыра.

### АТ БАШЫНАН АЛЫУ

Ҡыҙ йортонан сыҡҡанда, кейәү арбаһы алдан сығып китергә тейеш. Ошо ваҡыт еңгә кеше теҙгенде ҡулына урай ҙа атты ебәрмәй тора. Ҡейәү уға яулыҡ бирергә тейеш. Арба ҡуҙғалып китеүгә ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, арттарына ҡарамай, тәңкә, кәнфит һибеп ебәрәләр. Ҡыҙ үҙе лә артына ҡарамаҫҡа тейеш. Юғиһә, ҡото айырылып ҡала. Күсереү туйын **«Ҡыҙ туйы»** тиҙәр [112]. Ул өс көн бара.

### МЕНДӘР АЛЫУ

Күсәр ҡыҙҙы арбаға ултыртҡас, кейәүгә тейеш мендәрҙе буш бирмәҫ өсөн тартҡылашыу булып ала [113]. Мендәрҙе кейәү үҙе йәки килен күсерергә килгән ҡоҙағый бейеп алырға тейеш. Бейей белмәһәләр, мендәрҙе аҡса түләп алалар. Ҡыҙҙар был ваҡыт таҡмаҡ әйтә:

Алай итәйек микән,
Былай итәйек микән?
Арҡаһына мендәр тектек,
Ҡолап китмәҫме икән?

### ҠОТ САБЫУ

Арба ҡуҙғалғас, ҡыҙҙың яҡын ағаһы һауытҡа ҡаймаҡ алып һыбай саба. Шуны **«Ҡот сабыу»** тиҙәр. Ҡейәү яғы һыбайсылары «ҡот»ҡа болашып, ҡыуа төшәләр, әгәр уны һалдырып алһалар, ҡоҙағыйҙың (кейәүҙең әсәһенең) арбаһына күтәреп һуғып ебәрәләр. Был ваҡытта «ҡот» кейәү яғында ҡала. Әгәр «ҡот»то ҡыҙ яғындағылар алһа, ул ҡыҙ арбаһында ҡала.

Ҡапҡанан сыҡҡанда, кейәү аҡсаны күп һипмәһә, өс-дүрт һыбайлы уны ҡамсы менән «һыҙыра» башлайҙар. Аҙаҡтан «үсегешеп», аттарының ҡойроғон төйнәп, ҡапҡаға төкөтөп бәйләп ҡуялар. Быны күреп, ҡыҙҙың атаһы сөсө бал сығара, һыбайлыларға тәңкә бирә. Һый оҡшаһа, һыбайлылар ҡайтып китә, оҡшамаһа, кейәүҙе һаман «туҡмайҙар» [114].

Ҡоҙаларҙы ун саҡрымға ҡәҙәр ҡыуып, сабышып баралар.

«Ҡоҙағый ҡот бир, ҡоҙағый ҡот бир[2]» — тип, ҡоҙағыйҙың башынан яулығын да тартып алалар.

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар ауылдан сығып киткәнсе, ҡыҙ яғы уларҙы сеңләп «тиргәп» ҡала.

Ауылдың өлкәндәренә кейәү үҙ ҡулы менән аҡса бирә. Егет йолаларҙы еренә еткермәһә, унең артынан ат менән ҡыуа сығып, башындағы бүреген алып ҡасалар [115]. Бүректе кейәү аҡса биреп алырға тейеш.

Бирнә тейәлгән арба иң алдан бара. Оҙатыусылар, ҡыуыусылар айырылғас, ҡырҙа кейәү күсе туҡтай. Ҡыҙ арбанан төшә, ағаһы ағасҡа суҡ йә ҡыҙыл сепрәк бәйләй [116]. Ошонан һуң күс туптура кейәү атаһы йортона табан йүнәлә.

Ҡыҙҙы оҙатҡандан һуң барыһы ла кире өйгә инеп фекер алышалар, йәштәргә изге теләк теләп, ҡалған һый менән ҡунаҡ булалар. Ҡыҙ әбейе (йә өләсәһе) мейескә утын һала йә икмәк валсығы һибеп ҡуя.



## КИЛЕН ТӨШӨРӨҮ

Килен килеүен бөтә ауыл йыйылып көтә. Йәш киленгә кейәүҙең ағай-энеһенән берәйһенең ҡатынын морондоҡ әсәй тип билдәләп ҡуялар. Ул ҡатын егет йортонда аш-һыу әҙерләшеп, йыйыштырышып, башҡалар менән килен көтә.

Килен күсе килгәнен күреп, бөтә бала-саға, йәш-елкенсәк, ололар ауыл ҡапҡаһы янына киләләр. Егет яғы ҡатын-ҡыҙҙары киленде ҡаршы алырға ҡырға уҡ сығып торалар. Арбанан төшөүгә, килендең башына сымылдыҡ күтәреп, ян-яғынан уратып, ауылға йәйәү алып инәләр. Егет-йортона етер-етмәҫ тағы арбаға ултырталар. Килен арбаһын туҡтатып, ҡапҡа быуалар. Ҡоҙағый ҡулъяулыҡ биргәс кенә уны ебәрәләр.

Киленде оҙата килеүселәр, ала барыусылар арбанан төшөп, өйгә инәләр. Килен төшмәй. «Киленгә таянсыҡ кәрәк!» — тиҙәр. Ҡәйнә кеше алдан әҙерләп ҡуйған малды килендең арбаһы янына етәкләп алып килә, морондоҡ инәй килен аяғы аҫтына аҡ кейеҙ йәйеп, өҫтөнә мендәр һала. Килен уң ҡулы менән малға таянып төшә, кейеҙгә уң аяғы менән баҫа. Таяныс мал килендең үҙенә инсе мал булып ҡала. Таянсыҡ һәр кем хәленә ҡарап орғасы мал (ҡолонло бейә, йә һауын һыйыр, йә тана һыйыр, йә кәзә, йә һарыҡ) малы биргән.

Ҡаршылаусылар килен аяғы аҫтына таш[117] ырғыталар[118]. Ҡәйенһеңлеләр киленде ҡултыҡлап алалар. Килен төшкәненә ҡарап, һынап, һамаҡ әйтеп торалар:

— Ҡырын төштө — ҡырын килен,
Тура төштө — тура килен.
Етеҙ төштө — етеҙ килен,
Текә төштө — текә килен.
Ҡаты төштө — ҡаты килен,
Теләп төштө — телсәр килен,

Төбәп төштө — төплө килен,
Уңдан төштө — уңған килен,
Уңған аяҡ — уң аяҡ,
Уң аяҡтан төш килен,
Тояҡтарың еңел булһын,
Таштай, ҡомдай бат килен [119]!

Ҡәйнә кеше килене менән күрешә, уның маңлайына аш һөртөп, ауыҙына май, бал яға, кәсә менән аҡ бирә (ҡымыҙ, һөт, ҡатыҡ). Килен ауыҙ итеп һауытты ҡәйнәһенә ҡайтара. Тик өйгә инмәй тора. Ошо ваҡыт: «Килен ишеккә һыймай тора, ин кәрәк, ин!» — тип ҡысҡыралар. Ҡәйнә кеше: «Ингә бер һарыҡ!» йә: «Ингә бер башмаҡ, ин, килен, ин!» — тип, мал әйтә. Ҡайһы ваҡыт, шаярып: «Йыуғыс менән ҡырғыс!» — ти.

Килен өйгә инә, тик, тупһа аша атлағанда, тағы туҡтай, тағы мал әйтәләр [120].

Киленде ике малай ишектән индермәйенсә тора. Килен уларға ҡулъяулыҡ бирә. Өйгә ингәс тә, сөйгә таҫтамал элә, маңлайын өс мәртәбә мейескә тейҙереп ала [121].

Ишектән инеүе менән егет әсәһе тағы тана йә һыйыр, һарыҡ, бәрән әйтеп, килененең арҡаһынан һөйөп һамаҡлай:

— Түллей, түллей түлле бул,
Бүҙәнәләй түлле бул.
Уллы бул, ҡыҙлы бул,
Бер ҡулың балда булһын,
Бер ҡулың майҙа булһын.
Көлдөксәң тулы көл булһын,
Ҡаҙаның тулы аш булһын! [122]

Йәш килен өйгә инеү менән үк урынына ултыра һалмай. Морондоҡ инәй килененең ултырмай торғанын күреп: «Урындыҡ, киленгә урындыҡ кәрәк!» — ти. Йәки: «Килен ултырмай», — тиҙәр. Ҡәйнә тағы бер баш ваҡ мал әйткәс, килен түргә уҙа. Ҡарттарға уның исеменән еңгәһе таҫтамал тарата.

Тирә-яҡҡа йыйылған йәштәр өҫтөнә кейәү яулыҡҡа төйнәлгән сәксәк ырғыта. Уны кем дә булһа бирәү тотоп алып, барыһының өҫтөнә сәксәк һибә, малайҙарға өләшә. Яулығы иһә шул сәксәк өләшеүсегә килен бүләге була.

Килен ауыл бала-сағаларына төрлө төҫтәге еп, суҡ, ығырмау тарата. Балалар ауыл буйлап ошо суҡтарҙы болғай-болғай йүгереп йөрөй [123].

## БИЛ СИСЕҮ

Килен өйгә ингәс **билбау сисеү** йолаһы үтәлә. Ҡыҙ йортонда ҡәйнә бәйләгән билбауҙы ҡәйнәнең бер яҡын ағай-энеһенең ҡатыны сисеп ала ла уны бер ҡыҙ балаға бәйләй [124]. Билбауҙы си-

сеп алған ҡатынға килен «инәй» тип өндәшә. Инәй — морондоҡ ҡатын, инәйҙең ире — морондоҡ атай була. Билбауҙы бәйләгән ҡыҙ киленгә ҡаныш (ҡәйенһеңле, бикәс) була[125]. Йәш килен ҡәйнәһенә ашъяулыҡ һала. Шунан ғына һөйләшә ала[126].

Килен билбауын ҡайһы ваҡыт ҡыҙ кеше сисә, уға бикәс тип әйтәләр.

Килен ҡаршылағанда, яр-яр әйтеп ҡотлау йыры йырлағандар:

— Ҡотло булһын туйығыҙ,
Ҡыуанығыҙ, яр-яр.
Йылы булһын өйөгөҙ,
Йыуанығыҙ, яр-яр.
Ҡотло күңелең менән кил,
Киленебеҙ, яр-яр.
Төклө аяғың менән ин,
Киленебеҙ, яр-яр[127].

## ҺЫУ БАШЛАТЫУ

Килен билбауын сискән ҡыҙ икенсе көн таң менән еңгәһенә килә. Тәҙрә сиртеп, йырлап-һамаҡлап, **һыу башлатырға** килеүен белгертә. Еңгәһенә билбауҙы бирә, унан йөҙөк ала.

Килендең морондоҡ әсәһе һыу күнәктәрен үҙе көйәнтәләп алып, алдан төшә, ә йәш килен әхирәттәре менән уның артынан эйәрә. Улар артынан килен күрергә йыйналған йәш-елкенсәк, ҡыҙ-ҡырҡын, бала-саға эйәрә. Морондоҡ әсә бүләк итеп ҡыҙҙарға күкрәксә тарата, ә килен йөҙөк, тасма өләшә, малайҙарға янсыҡ, ығырмау бирә.

Һыуға барғанда, килен ауыҙына тәңкә ҡаба. Барып еткәс, шул тәңкәне һыуға ташлай. Морондоҡ әсә ошо ваҡыт: «Киленде тотма, тәңкәне тот!» — тип ырымлай. Йә килен үҙе: «Мине тотма, тәңкәне тот! Сир-сырхауымды йот! — ти. Һыу алыр алдынан йәш килен битен-ҡулын йыуа, теләк теләй. Йәш килендең яурынына тулы күнәкле көйәнтәләрҙе морондоҡ әсә йә бикәс кеше һала ла кире ала — шулай итеп өс тапҡыр ҡабатлай.

Килен һыуҙы сайпылдырмай, тигеҙ генә баҫып атлап ҡайтырға тейеш. Шуның менән уның уңғанлығы һынала.

## КИЛЕН СӘЙЕ

Ҡәйнә килен алып килгән һыуҙан сәй ҡайнатып, ҡунаҡ йыя. Йоланы **«килен сәйе»** йә **«килен һөйөү»** тип атайҙар. Сәйгә килгән ҡатындар килендең аяҡ баҫыуын, эш ибен, ҡунаҡтарҙы хөрмәтләүен ҡарап-һынап, өҫ-башына кейгән кейеменә, бил быуыуына тиклем тикшереп ултыралар. Ҡулы бушаған мәлдә килен, һөйәлеп, ҡәйнештәре менән һөйләшеп торһа: «Был килен ус ялатмаҫ, ауыҙы-башы остаңлап, күп һөйләй, үҙе ялҡау булыр — һө-

йәлеп тора», — тип ғәйепләргә әҙерҙәр. Килен күрергә элек тик әбейҙәр, бабайҙар ғына йыйылған. Егет әсәһе әбейҙәргә түшелдерек, бабайҙарға таҫтамал тарата. Сәй һыйы үткәс, киленде ауыл буйлап, өй беренсә йөрөтөп күрһәтәләр.

Ишектән ингәндә, киленде йомаҡ йә һорау биреп һынайҙар:

— Тайп-тайп, тайпауыс;
Ҡәйнәң биргән һарауыс.
Күпмәгә ятаһыңмы?
Септәгә ятаһыңмы? [129]

— Күк әнәнең күтере күткәре сәнсеп ултыра. Ул нимә?

Килен аҡыллы итеп яуап бирергә тейеш. Күпмәгә тиһә — «ҡотло», «уңышлы булыр», ә «септәгә» тиһә — «әшкинмәҫ» тиҙәр.

Килен юлына һеперткене йә көйәнтәне арҡыры һалып ҡуйыр булғандар: һөйәп ҡуйһа — уйлы, аша үтһә — аңһыҙ булыр.

Халыҡ алдына сыҡҡас, ҡәйнеше еңгәһе тирәләй [130], уҡлау тотоп, өс тапҡыр әйләнә.

## БИТ АСЫУ

Ҡәйнә кеше ҡарсыҡтарға «килен күренеше» тип түшелдерек тарата. Улар бүләккә һебә мал әйтәләр. Ҡыҙ йөҙөн күрһәтмәй, еңгәһе, теләк һамаҡлағанда, ҡыҙҙы бер алға, бер артҡа әйләндергеләй. Ошонан һуң килендең битен асып халыҡҡа күрһәтәләр, теләк теләйҙәр:

— Битең асам, бисмиллаһи,
Әүхәлеңде әйт, килен.
Бойороҡ менән кил йортҡа,
Өйҙәге уйыңдан ҡайт, килен.

Барыһы ла киленгә өгөт-нәсихәт, тәрбиә һүҙен, изге теләктәрен әйтеп сыға, **«килен күрмәлеге»** тип, яурынына тәңкә баҫалар. Тәңкә баҫҡанда:

— Тегеп ҡуй, йоғоносо булһын,
Алып ҡуй, йыуанысы булһын! —

тиҙәр. Шунан таҫтамал һалалар, мал әйтәләр.

Олораҡ йәштәге ҡатын, ҡыҙҙарға килен түшелдерегә, һаплы (аяҡлаған) еп таратыла. Ул епте **«Килен ебе»** [131] тиҙәр.

Йәш ҡоҙаларға, егеттәргә сәй айырым урында ойошторолған. Быға **«ҡоҙаса самауыры»** тигәндәр. Сәй ваҡытында ҡоҙасалар таҡмаҡ әйтә:

— Ҡоҙалар ҡайҙан килгәндәр? —
Ҡара итек кейгәндәр.
Уйнар өсөн килмәгәндәр,
Һынар өсөн килгәндәр [132].

Ҡоҙасалар менән ҡоҙалар шаяра: биттәренә ҡором яғыша, кейемдәрен алмашыша...

## ҠИЛЕН ҺАНДЫҒЫН АСЫУ

Теләктәр әйтелеп бөткәс, килен һандығын сығаралар. Һандыҡты егет яғынан иң яҡын апаһы бүләк әйтеп аса.

Ирҙәргә — таҫтамалдар, ҡатын-ҡыҙға яулыҡ, алҡа, беләҙектәр тараҡтандар.

Ошо көндө үк килен бирнәһен ҡарау үткәрелә. Йәш ҡатындың ҡул эшен, сигеү, һуғыу, ҡайыу оҫталығын һынағандар.

Килен күреүгә килгән бала-сағаға, йәштәргә бейем кеше (егет әсәһе) бүләк тарата: малайҙарға — ҡулъяулыҡ, ҡыҙҙарға — еҫле май, еҫле һабын, тараҡ, көҙгө. Иң яҡын ҡәйнешенә килен ынйы-мәрйендән ҡайылған ҡулъяулыҡ бүләк итә.

## ХУШ ӘЙТЕҮ

Килендe оҙатып килеүселәр ҡунаҡ булыуҙың өсөнсө көнөндә **«хуш аяғына»** — һуңғы ашҡа йыйыла. Төрлө уйын-көлкө, ҡурай, йыр, таҡмаҡ, бейеүҙәр була. Сәй эсеп, ҡунаҡ булғандан һуң, ауыл халҡы тарала. Ҡыҙ менән килгән бер-ике ағай-эне арсы булып барған була. Ҡайтыр ваҡыт еткәс, арсыларҙың ҡатындарына бирнә биреп ҡайтаралар. Оҙатыр алдынан ҡот сабыу йолаһы үткәрелә. Атҡа менеп килгән йәш егеттәр: «Кот бирегеҙ, ҡот, ҡот сабырға килдек!» — тип, һөрән һалып ҡоҙаларҙы оҙатырға әҙер торалар. Силәккә май, уның өҫтөнә күмәс һалып егеттәргә сығарып бирәләр. Был силәкте алған егет күмәс менән майҙы ашай-ашай алып ҡасып китә. Уның артынан шәберәк атлы берәү ҡыуып етеп, силәкте ҡулына ала, майҙы ашай-ашай алып ҡаса. Ошолай, силәктәге май бөткәнсе ҡулдан ҡулға тартышып, баҫтырышып йөрөйҙәр. Май бөткәс, силәкте килтереп ташлайҙар.

Йола буйынса арсыларҙы * оҙатырға йәш килен сыҡмаҫҡа тейеш. Юғиһә, ҡото кире китә [133].

## КИЛЕН КҮРЕҮ

Ҡоҙалар ҡайтҡандан һуң бер нисә көн үткәс, егеттең еңгәләре аш-һыу әҙерләйҙәр, тағы **«килен сәйе»** йыялар. Был ҡорҙо тик еңгәләр генә үткәрә [134]. Йәш киленгә изге теләктәр теләйҙәр. Ошо көндән яңы килен йорт мәшәҡәттәренә инеп китә. Ул өҫтөнә кәзәки йә елән кейә. Йола, әҙәп буйынса ул ялан күлдәк, яулыҡһыҙ, билен быумай, балтырын йәшермәй йөрөргә тейеш түгел. Шулай уҡ үҙенә ҡәйнеш булмаған ир кеше менән һөйләшергә йә уның алдынан үтергә ярамай.

Әгәр килен икенсе (өсөнсө) ҡатынлыҡҡа алынһа, уның көндәше ире менән бергә була торған бер нисә сират көнөн йәш киленгә биреүен әйтергә тейеш. Ул көндәште үҙ теләге менән алдырыуын, ҡыҙҙы үҙе һайлауын халыҡҡа белдерә. Йәш килен менән көндәш ҡатын бер-береһенә йыр, һамаҡ әйтешеп тә аңлашҡандар.

Килен менән ҡәйнә бүләк бирешкәс кенә, бер-береһе менән һөйләшә алған. Ошо шарт үтәлмәгән сүрәттә һөйләшмәү йылдар-

ға һуҙылған. Әгәр килен тәүбашлап һүҙ ҡушыр булһа, ҡәйнәһенә таҫтамал, яулыҡ йә ашъяулыҡ биргән. Ҡәйнә кеше башлап һүҙ әйтер булһа, килененең усына һумлыҡ көмөш тәңкә, яурынына шәлъяулыҡ һала, теләк әйтә:

— Юлың тәңкәле булһын,
Ҡөтөүең тәкәле булһын,
Ҡаҙың бәпкәле булһын,
Һүҙең үткеле булһын,
Йылҡың йылғыр булһын,
Һыйырың һөтлө булһын,
Алдың тулы бала булһын,
Артың тулы мал булһын,
Минең балам — һиңә ир.
Ирҙе балаңдай ҡара
Һәр дайым иргә яра... —

тип арҡаһынан тапап ҡуя.

Борон ҡәйнә менән килен, ҡайны менән килен, килен һәм кейәүҙең туғандары былай ғына һөйләшмәгән, гел һамаҡлап, таҡмаҡлап аңлашҡан. Шуға әрләшеү ҙә, ығы-зығы ла булмаған. Ҡәҙимге ваҡытта ла матур әйтергә тырышҡандар инде.

Ҡәйнәм, шуны бир әле,
Ҡәйнәм, шуны ҡуй әле,
Ҡәрәк нәмәм еҙ тас ине
Сығарыпҡай ҡуй әле.

Бына шулай булған ул. Килен ҡәйнеше менән генә тура ҡарап, тура әйтеп, тәңгәл һөйләшкән.

Килен тәүләп ҡунаҡҡа барғанда, һәр өйгә бүләк алып бара: таҫтамал, суҡ-ығырмау тарата. Һәр өйҙә уға бал, май ҡаптыралар йә һыу эсерәләр. Сәй эскән йортта килен, йорттоң бәләкәй ҡыҙына, тип сынаяҡ аҫтына тәңкә, мәрйен һалып ҡалдыра.

Әбей-һәбейҙәргә еп, ҡыҙҙарға йыуаса таратыла. Килендең яурынына тәңкә баҫып, тағы теләктәр әйтәләр, тормош тәртибенә өйрәтәләр.

Килende еңгәләре берәр аҙна өйҙән өйгә ҡунаҡ итеп алып йөрөйҙәр [135].

### ТҮРКЕН БАРЫУ

Килен, кейәү менән бер йыл самаһы торғас ҡына, тәүҙә атаһы йортона ҡунаҡҡа бара. Тәүгә ҡунаҡҡа ҡайтырға сыҡҡанда, урамдан (ишек алдынан) уҡ атҡа ултырып сыҡмай. Бер талай йәйәү бара. Шунан ғына уны ултырталар [136]. Иң тәү тапҡыр килгәндә, ҡыҙ үҙе генә ҡала, һуңынан уны кейәүе йә берәр яҡыны барып ала. Кейәү килгәндә, бал алып килә. Ҡыҙ әсәһе унан бал ҡоя.

Бер аҙҙан ҡыҙҙың ата-әсәһе «түркен балына» тип атап, ҡунаҡ саҡыралар. Был балды эсергә килгән кешеләр һәр ҡайһыһы көсөнә күрә бүләк бирәләр. Ҡалынға барған кешеләр, кейәү менән

ҡыҙға айырым хөрмәт күрһәтеп, бүләк әйтәләр. Йәштәрҙең ҡайтыр көнө еткәс, атаһы ҡыҙына инселәп мал бирә. Уны ҡыҙҙың берәй яҡыны кейәү йортона илтеп тапшыра [137]. Был малды игәт * малы тиҙәр.

Мал алып килгән кешене кейәү йортонда һыйлап, бүләк биреп, ҙур хөрмәт күрһәтеп, ҡунаҡ итеп ҡайтаралар.

Түркен балы мәжлесендә мал алып килгән ҡунаҡты йырлаталар йә бейетәләр. Шуның өсөн уға һебә — ҡыҙылсуҡлы түбәтәй бирә ҡыҙ әсәһе.

Үҙе йырлап кәсә бирә:

Һырлап-һырлап мәрйен теҙҙем
Суҡлы түбәтәйемә.
Күрһәгеҙ, күҙ тейҙермәгеҙ
Минең кейәукәйемә!

Ҡейәүҙе ошо мәжлестә тағы бейетеп һынайҙар: «Йә, кейәү, бейе әле, үҙеңә айыра тояҡ (йәғни айыра тояҡ мал)!» — тиҙәр. Ул бейегәндә, аяҡ аҫтына тәңкә ырғытып торалар:

— Аттар кергән ашлыҡҡа,
Аттар кергән ашлыҡҡа.
Бер бейемәй биш бейерһең,
Бының кеүек шатлыҡҡа [1].

Әсәһе ҡыҙға тағы теләк, нәсихәт әйтә: «Үҫкән ерҙән төшкән ер еҫе, балам, бәхетле, тәүфиҡлы ғүмер ит».

Түркен мәжлесе үткәс, егеттең кәләше ике-өс айға ата-инәһендә ҡунаҡҡа ҡала ала. Был хаҡта ҡыҙ атаһы кейәү менән үҙе килешә. Шуны «риза булыу йолаһы» тиҙәр. Атаһы йортонда ҡалған кәләш ҡунаҡ булып ҡына йөрөмәй, донъя кәрәге йыя: йөп иләй, балаҫ һуға, мамыҡ юрған күбей, кейеҙ баҫа, тула баҫа, бәйләм бәйләй.

Игәт малы ҡайтҡан көндө егет йортонда халыҡ йыйыла. Ҡалын эскән кешеләр, килтереп-килтереп, игәт малына бөтәһе суҡ бәйләй. «Еңгәм игәт килтерҙе!» — тип, бөтә ауыл ҡыҙҙары, егеттәре йыйыла. Суҡтарҙы сисеп алып, йыйылған кешеләргә биреп торалар» [138].

Башҡорт туй йолаһы шулай тамамлана.

# ТУЙ ЙЫРҘАРЫ

## СВАДЕБНЫЕ ПЕСНИ

## DÜĞÜN TÜRKÜLERİ

## WEDDING SONGS





## ҠЫҘ КҮҘЛӘҮ

**Ҡыҙ яғы:**

1 Ҡырас ҡына яллы ҡара ат менеп,
Ил аралап килгән был егет,
Атаһы ла түрә, үҙе — мырҙа,
Ҡәҙерле лә үҫкән бай егет.
2 Теҙгенендә уйнай толпар аты,
Ҡыҙ күҙләргә уйлап килгәндә;
Ҡалталары * тулы тәңкә менән,
Услап алыр бүләк биргәндә.

**Барыһы ла:**

3 Уйын уйнау — ҡор түгел,
Йәш елкенсәк йолаһы.
Ситтән килгән был егет —
Йыраҡ илдең мырҙаһы.
4 Ил аралап, ир килгәс,
Уйнап-көлмәй китерме?
Уйлап килгән дәрттәрен
Сәсмәй бойоҡ итерме?
5 Тарт ҡурайың, уйнаһын,
Ҡан тамырҙар буйлаһын.
Дәрте барҙар бойоҡмаһын,
Бейеп-йырлап уйнаһын.
6 Ҡөрәгә асыу, ҡымыҙ һалыу —
Табынсының эше ул.
Беҙҙә башлап уйын асыу —
Ҡунаҡтарҙың бәҫе ул.
7 Ил аралап килгәнһең,
Ат тирләтеп елгәнһең.

Алыç ерҙәге һылыуҙы —
Әллә төштә күргәнһең.
8 Ҡыҙың һайла үҙеңә,
Ал ҡыҙыңды бейе лә.
Матур ҡыҙға күҙең төшкәс,
Беҙ күрәйек һине лә.
9 Йәле, егет, һылыу ҡыҙ,
Бергәләшеп бейегеҙ.
Арағыҙҙа яҡынлыҡты
Шуға ҡарап белербеҙ.
10 Ипле баçып бейе лә,
Бейеүҙәрең килбәтһеҙ.
Әллә, егет, ояламың?
Ҡыланыуың ҡыйыуһыҙ.
11 Былай бейегән егеттәр
Беҙҙең илдә дан алмаç.
Йәле, йүнле бейеп ҡара, —
Быңдай бейеү ярамаç.
12 Бай булһа ла егетең,
Йөрөп уйын күрмәгән.
Бер ҙә былдай бейеүҙәрҙең
Ярамауын белмәгән.
13 Егет, инде үпкәләмә,
Ҡыҙ бейеүең яратмай.
Бер йылмайып һиңә табан
Бер бөртөк тә ҡарамай.
14 Таҡыя баш ҡурайҙар
Урманда үçә икән,
Был икәү ҙә ҡурайҙың
Ҡөйөнә баçа икән.
Батыр тыумаç ер булмаç,
Ыласын тотмаç ир булмаç.
Мәргән булып дан алһа,
Ҡыҙ арбамаç ир булмаç.
Әйҙә ҡушлап бейегеҙ,
Күргән кеше таң ҡалһын.
Был икәүҙең күңелдәре
Һөйөшә икән тиһен.

### Ҡыҙҙар, егеттәр әйтеше

15 Ҡыҙҙар: Ҡара бөҙ(ө)рә сәскәйҙәрен
Үрҙәргә ҡарап тарай.
Үҙе бында ҡыҙҙар һайлай,
Ҡатыны бала ҡарай.

16 Егеттәр: Ҡара бөҙрә сәскәйеңде
Үргә һалып тарама.

Беләм инде серҙәреңде,
Ҡаш аҫтынан ҡарама.

17 Ҡыҙҙар: Төймәләрен, төймәләрен,
Төймәләрен элмәгән.
Ошо егетегеҙме әле
Матур ҡыҙҙар эҙләгән?

18 Егеттәр: Тәҙ(е)рәндең бормаһын
Тартып асырмын әле.
Ҡыҙығыҙҙы бирмәһәгеҙ,
Алып ҡасырмын әле.

19 Ҡыҙҙар: Яр аҫтында һыу аға,
Һыу аҫтынан ҡом аға.
Һылыуҙарҙы алып бөткәс,
Шаҙыраһын кем ала?!

20 Егеттәр: Йәнекәйем, балдағыңды
Урта бармағыңа кей.
Бер генә иле булһа ла,
Минән артыҡтарҙы һөй!

21 Ҡыҙҙар: Эй иләйем, еп иләйем,
Ниңә ебем ырамай?
Үрге осҡа кейәү килә,
Ниңә мине һорамай?

22 Егеттәр: Оло күлдең уртаһына
Аҡҡоштар төшөр әле.
Өлөшкә тигән көмөшөң
Һиңә лә төшөр әле.

23 Һөйләр өсөн һүҙ кәрәк,
Күҙләр өсөн күҙ кәрәк.
Һикереп төшөп бейер инем,
Тағы таҡмағы кәрәк.

### Егет менән ҡыҙ әйтеше

24 Ҡыҙ: Абзыйымдың аттары,
Килә алдан саптары.
Уйнап-көлөп йөрөй торған
Самай беҙҙең саҡтары.

Егет: Аҡ ҡалпағың алтын суҡ,
Ҡеймә муйын талдырып.
Үҙең миңә килмәгәс,
Йөрөмә йөрәк яндырып.

Ҡ ы ҙ: Ҡара бүркең кейеп ал,
Ҡараңғыла танырмын.
Төн була, тип, килмәй торма,
Ҡаршы сығып алырмын.

Е г е т: Аҡ ҡалпағың кесерәк,
Уҡа әйләндер өс әрәт.
Ҡыҫма күҙең, һиҙәм үҙем,
Әйләнермен кисерәк.

Ҡ ы ҙ: Һыу аҫтында ҡама бар,
Ҡама түгел, ҡондоҙ бар.
Ҡараңғы тип, килмәй торма,
Ай булмаһа, йондоҙ бар.

## ЯУСЫ ҠИЛЕҮЕ

### 1. Яусы ҡаршылағанда ҡыҙҙар әйткәне

25 Тауҙан да таяҡ ташланым,
Тауға ғына төшмәй, һыуға төш.
Быйыл түккән күҙ йәшем,
Ҡем димләгән икән — шуға төш!

26 Ишегем алды сырмаҡа *,
Һикереп сыҡты бер баҡа.
Яусы булған кешенең
Яуырыны һырмаҡа *.

27 Өй артымда суҡ муйыл
Сәскә ата ап-аҡтан.
Ниндәй бәхет көтәйем мин
Һәндерәп бөткән ҡарттан?

28 Яусы, яусы, яусыһы —
Әллә кемдең ялсыһы.
Был донъянан үҙем китеп,
Бер таш булып ҡалһамсы.

29 Анауында ла кесерткән,
Бынауында ла кесерткән.
Ҡейәү ҙә тигән кешегеҙ
Етмеш тә йәшлек кеше икән.

30 Гөбөр-гөбөр бешәйем,
Гөбө төбөн тишәйем.
Яусы булған кешенең
Төртөп, күҙен тишәйем.

## 2. Яусы йыры

31 Һиндә ебәк баулы тутыйғош бар,
Миндә ҡайыш баулы ҡарсыға бар.
Шуны һорай килгән мин,
Сонайҙан ат алған мин,
Бохарҙан эйәр алған мин,
Сыңлап һиңә килгән мин,
Боролоп һиңә ингән мин,
Һин тимер булһаң, мин — күмер,
Иретергә килгән мин.

32 Һеҙҙә лә бар бешкән алма,
Беҙҙә лә бар бешкән алма.
Шул ике бешкән алманы
Бергә ҡушайыҡмы әллә?

33 Һеҙҙә аҫыл ҡош булһа,
Беҙҙә мәргән уҡсы бар.
Аҫыл ҡошон төйәгенә
Алып ҡайтыр уйы бар.

Ҡылған эшем хаҡ булыр,
Ҡыҙға кейәү тап булыр.
Һүҙемде һис йыҡмағыҙ,
Сәпсеп ҡаршы сыҡмағыҙ.

Аҫыл ҡошто ыласын
Типмәйенсә туҡтамаҫ.
Ыңғай һүҙегеҙ ишетәйем,
Атым бороп, туҡтағас.

34 Ебәк баулы аҫыл ҡош
Барҙыр һинең өйөңдә.
Ҡайыш баулы ыласын
Барҙыр минең илемдә.

## 3. Ата һүҙе

35 Айран һорап килгәнһең,
Силәгеңде йәшермә.

36 Ул ике бешкән алма
Бәлки бер ергә төшөр.
Балалар риза булһа,
Тәүәкәлләрлек булыр.

## 3. Ҡыҙҙарҙың яусыны хурлағаны

37 Һәлпән-һәлпән һәлпәнләп,
Ҡулыңа таяҡ таянып,
Бер балағың һалпайып,
Өс өй аша йортоңдан,
Арыҡ атың атланып,
Ҡырма кәпәс башыңда,
Башың үргә ҡаҡайып,
Ҡайҙа юлың тоҫҡаның?
Суҡмарҙай ҙур танауың
Шыр-шыр тартып, еҫкәнеп,
Емтек эҙләр ас эттәй,
Атҡа менеп эҙләнеп,
Ниңә килеп туҡтаның?
Оятһыҙ бысраҡ битеңде —
Күҙ-йәш менән йыуырға,
Ҡылҡылдаған тамағың —
Ҡаҙы менән һыйларға
Яусы булып килдеңме?
Күҫәк менән туҡмаҡлап,
Баш юйырға килдеңме?
Ҡартҡа яусы булдыңмы?
Йәшкә яусы булдыңмы?

38 Һәр ауылдың таҙы бар,
Ҡыҙ баланың наҙы бар.
Беҙгә килгән яусының
Түбәһендә таҙы бар.

39 Арғы яҡта йырнаҡа,
Һикереп сыҡтыҡ был яҡҡа,
Бөгөн килгән яусының
Һорағаны бер тәңкә.

40 Быҙауҙарын ябырға,
Ҡотой кәртә кәртәләй.
Яусы булған Ҡотойҙоң
Ике бото тәртәләй.

41 Ҡотой аты ерәнсәй.
Бесән һорап кешәнәй.
Ҡотой көтөп ҡоҙаларҙы,
Йоҡлап ята сисенмәй.

42 Ҡоҙалар килде — ҡот килде,
Бер ҡыҙ өсөн ут килде.
Ҡоҙаларҙың араһында
Яусы тигән эт килде.

## МӘҺӘР КИЛТЕРЕҮ

43 Мин ҡоҙаға * барған инем,
Ҡүлдәк кейермен тиеп.
Ҡиндер биреп ҡайтарҙылар,
Иләп кейерһең, тиеп.

44 Мин ҡоҙаға барған инем,
Ҡүлдәк кейермен, тиеп.
Йыртыш биреп ҡайтарҙылар,
Ҡушып тегерһең, тиеп.

45 Мин ҡоҙаға барған инем,
Ит-туй ашармын, тиеп.
Ике бөртөк картуф бирҙе,
Өтөп ашарһың, тиеп.

46 Атаһы бар — ат һорай,
Инәһе бар — тун һорай.
Ҡойолдороҡ еңгәһе бар —
Бер һалмалыҡ он һорай.

47 Атаһына ат бирәм,
Инәһенә тун бирәм.
Ҡойолдороҡ еңгәһенә
Инде нимәмде бирәм?

## ТАҪТАМАЛ АЛЫУ

48 Мәхмүт ҡарттың самауыры
Ике лә ерҙән артмалы.
Мәхмүт ҡарттың тапҡаны
Ҡарсығынан артманы.

49 Беҙгә килгән баш ҡоҙаға
Бир таҫтамал, ҡыуанһын.
Таҫтамалы муйынына
Йылан булып уралһын.

50 Таҫтамал алам тиеп,
Таҫтамал алам тиеп.
Гәрәй ҡоҙа килгән икән,
Тишек сәкмәнен кейеп.

51 Аръяҡта ла, ай, сыйырсыҡ,
Бир яҡта ла була сыйырсыҡ.
Ҡоҙағыйҙың да ашағаны, —
Ҡаты-ҡото менән ҡыйырсыҡ.

52 Беҙгә килгән ҡоҙалар,
Эре яра бит улар.
Миңлебайға һыйыр һалып,
Ҡилен ала бит улар.

53 Ай эйәһе, эйәһе,
Беҙҙең ерҙә сейәһе.
Тиҙерәк ҡайт, ҡоҙағый,
Шәлен һорай эйәһе.

## ТАУАР ҠИЛТЕРЕҮ

54 Атың арыҡ, ҡоҙағый,
Үҙең һимеҙ, ҡоҙағый.
Ҡаҡ таҡтаға ултырып
Нисек килдең, ҡоҙағый?

55 Ҡүтәрмәлә бер ҡыҙ тора,
Ҡейгәне ҡалпаҡ ҡына.
Ҡейәүкәйен мин дә күрҙем,
Мороно ялпаҡ ҡына.

56 Алып килгән тауары
Элеп кенә ҡуймалы.
Муйынсағы теҙелгән,
Таҫтамалы бөрөлгән.

57 Ҡара болот сыҡты инде,
Яумай китер тиһеңме?
Уҫал ҡәйнә килде инде,
Алмай китер тиһеңме?

58 Ҡоҙағый күлдәк һораһа,
Аласа күлдәк бирегеҙ.
Аласа күлдәк алмаһа,
Ҡайтарып ебәрегеҙ!

59 Анау яҡта ла аҡ тана,
Бынау яҡта ла аҡ тана.
Анау килгән ҡоҙағый
Тауарым бар тип маҡтана.

60 Итәк текһәң, ең сыкмай —
Ҡоҙағыйҙың тауары.
Еңе сыҡһа, көт тә тор
Ҡыҙыл ҡарҙың яуырын!

61 Француз яулыҡ ҙур булғас,
Ярты яулыҡ килтергән.
Ҡоҙағыйҙан затлы бүләк
Беҙгә тиклем кем күргән?!

62 Ҡоҙағыйҙың тауары —
Һары төлкө яғалыр.
Ҡалғанына ҡарама,
Ҡалғаны бик самалы.

63 Ҡоҙағыйҙан бүләккә,
Тауар алдым күлмәккә.
Рәхмәт инде бүләккә,
Ябыу ябам сүлмәккә!

### ҠЫҘ ҠУШЫУ

#### 1. Ҡыҙ йәшереү

64 Ҡыҙҙар: Ана тора гөбөһө,
Бына тора гөбөһө.
Бер яулыҡ тип, сабып йөрөй,
Әптерәйҙең гөбөһө *.

Һаҙ, һаҙ, һаҙ аша,
Һаҙҙа ҡуян аҙаша.
Зифа менән Мөнирә
Бер һырғаға талаша.

65 Кейәү: Ҡара бейә һуйҙығыҙ,
Ҡаҙыһына туйҙығыҙ.
Миңә тигән ҡыҙығыҙҙы
Төнөн ҡайҙа ҡуйҙығыҙ?!

66 Егеттәр: Самауырҙы тиҙ ҡайната
Ҡаты ҡайын күмере.
Ҡыҙ һаҡлаған еңгәләрҙең
Ҡыҫҡа булһын ғүмере!

Еңгәләр: Ҡаптыр-ҡоптор туныңды
Ҡыптырҙатып кейерһең.
Бәхетеңә тура килгәс,
Ҡарт булһа ла, һөйөрһөң.

#### 2. Ишек астырыу

67 Егеттәр: Асығыҙ ишегегеҙҙе!

Ҡыҙҙар: Ас булһаң, туйып кил,
Сарығыңды ҡуйып кил!

Егеттәр: Инеп-керермен инде,
Ҡыҙҙы күрермен инде.
Күңелегеҙ булһын, әйҙә,
Хаҡын бирермен инде.

Ҡыҙҙар: Инермен тигән була,
Һуғырмын тигән була.
Ишекте лә астыра алмай,
Хәбәр һөйләгән була.

### 3. Ишек бауы

68 Егеттәр: Беҙ юлаусылар, арба
Ҡыйраны, ҡунырға алығыҙ әле!
Эстән: Арағыҙҙа кемдәр бар?
Егеттәр: Һунарсылар беҙҙә бар!
Эстән: Ниндәй кейек ҡыуалар?
Егеттәр: Йәне теләгәнде алалар.
Эстән: Ҡайтармаға ни бирәһегеҙ?
Егеттәр: Төлкө туны бирәбеҙ!
Эстән: Ҡушып нимә бирәһегеҙ?
Егеттәр: Ҡыҙы булһа хужаның,
Ҡыҙыл аҡса бирәбеҙ!

69 Еңгәләр: Биш еңгә йыйылғанбыҙ,
Һиңә һорау ҡуйғанбыҙ:
Ишек бауы — ун тәңкә,
Ҡыҙыбыҙ беҙҙең буштан түгел,
Ҡыҙыбыҙ беҙҙең — мең тәңкә!

70 Ҡыҙҙар: Һаранланыр саҡ түгел,
Еҙнә һин ҡомһоҙланма.
Аҡса бирһәң — инәһең,
Туҡта, сабырһыҙланма.

Беҙҙең ҡапҡа башында
Ҡарға ҡарап тора, ти.
Беҙҙең ауыл, ишек бауы
Ун биш тәңкә тора, ти.

### 4. Йыртыш баҫыу

71 Ҡарама, кейәү, ҡыйбатҡа,
Хәҙер керетәм йәннәткә.

Хур ҡыҙын тапшырҙым иһә
Ирешерһең дәүләткә.

72 Ҡайҙа, егет, бүләгең?
Ебәр ишек тотҡаһын! —
Ҡыҙыбыҙҙы йәшереп,
Тотторорбоҙ ҡортҡаһын!

73 Тупһа төбө — туҡһан тин,
Бүләгеңде әйтеп ин!

74 Йыртыш хаҡы бер тәңкә,
Ҡыҙыбыҙ тора мең тәңкә.
Йылытһаң ҡулыбыҙҙы,
Бирербеҙ ҡыҙыбыҙҙы!

75 Аяҡ туҙҙы, аҡса һал,
Йыртышыңды йырта һал!

76 Түшәк төбө һиңә,
Тупһа төбө миңә.
Апайымды алырһың,
Ҡосағыңа һалырһың!

77 Йыртыш тора бер тәңкә,
Апайым тора мең тәңкә.
Өҙә баҫып инерһең,
Апайымды күрерһең!

## 5. Ҡыҙ ҡушыу

**Ҡыҙ ҡушыусы еңгә:**

78 Берегеҙ — бөркөт, берегеҙ — сәскә,
Ҡушылдығыҙ ғүмергә,
Берегеҙ — ебәк, берегеҙ — уҡа,
Ишелдегеҙ мәңгегә.

79 Буйлы-буйлы юрғаныңды
Бөркәнеп ябынырһың.
Әсәң менән атаңды,
Үлгәнсе һағынырһың.

80 Киш(е)мир ҙә шаршау, ебәк бау
Ҡорайыҡ та, ҡыҙый, түреңә.
Ҡейәүеңә яҡшы хеҙмәт итеп,
Тороғоҙ ҙа бергә ғүмергә.

81 Түшәгегеҙ ҡотло булһын,
Ҡосағығыҙ татлы булһын!
Икәү булып ятығыҙ,
Өсәү булып тороғоҙ!
Бына һиңә — айлыҡ түгел,
Йыллыҡ түгел, ғүмерлек!

**Кәләш кейәүләү**

82 Балдыҙҙары, ҡайынеңгәләре:
Кейәү, кейәү икән дә,
Үңәсе оҙон икән дә.
Атҡынаһынан осоп ҡалған,
Кәләш кейәүләп килгәндә.

83 Кейәү килгән ҡыҙға тип,
Күтәрмәләр боҙҙа, тик.
Күтәрмәләрҙән аунатып,
Кейәүкәйҙе имгәттек.

84 Кейәү килгән ауылдан,
Ваҡ-ваҡ ҡына сауылдан.
Кәләшенә килгән икән,
Кире ҡыуҙылар ауылдан.

85 Сабып килер атының
Ялын тарап үрәлер.
Хаҡ йәрәшкән кәләшен
Төндә төштә күрәлер.

86 Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Нөғәмән.
Кейәүебеҙ иртә йоҡлай, —
Тауыҡ та төнәмәгән.

87 Аҙна кистәре етәлер,
Ҡыҙҙар кейәү көтәлер.
Аҙна араһы етмәйсә *,
Кейәү килеп етәлер.

**Кейәү менән кәләш йыры**

88 Кейәү: Урал ғына тауы бейек икән,
Ат арытып мендем, йәйәүләп.
Ат арытып менеп, юлда ҡунып,
Ҡайтып ҡына киләм кейәүләп.

Ҡ ә л ә ш: Урал ғына тауҙың, әй, биленән,
Турыға сыға беҙҙең һуҡмаҡ-юл.
Ҡилер генә булһаң, әйт һүҙеңде,
Ҡилмәҫтәй ҙә булһаң, хуш-һау бул!

### ТУЙ ҠАРШЫЛАУ

89 Туй асылыр алдынан, ҡоҙаларҙы табынға йыр менән әйтемләп ултыртҡандар:

Ал кәрәкмәй беҙгә, кем,
Ал кәрәкмәй беҙгә, кем,
Ай, гөл булғас,
Вай, гөл булғас.
Яттар кәрәкмәй беҙгә, кем,
Яттар кәрәкмәй беҙгә, кем,
Ай, һеҙ булғас,
Ай, һеҙ булғас.
Һандуғастарҙың, һай, кем,
Һандуғастарҙың, һай, кем,
Ай, һарыһын,
Вай, һарыһын.
Һағындыңмы, тип һорайһың,
Күрмәйһеңме йөҙөмдөң, кем,
Ай, һарыһын,
Вай, һарыһын?!
Ҡоҙалар килә лә, һай, кем,
Ҡоҙалар килә лә, һай, кем,
Туйлар өсөн,
Туйлар өсөн,
Көрәгәләр асып, һай, кем,
Көрәгәләр асып, һай, кем,
Данлар өсөн,
Данлар өсөн.
Ҡоҙаларҙың килгән, һай, кем,
Ҡоҙаларҙың килгән, һай, кем,
Аҫылдары,
Аҫылдары.
Ҡоҙасаларҙың килгән, кем,
Ҡоҙасаларҙың килгән, кем,
Матурҙары,
Матурҙары!

90 Ҡоҙалар ҡайҙан килгәндәр? —
Ҡара итек кейгәндәр.
Уйнар өсөн килмәгәндәр,
Һынар өсөн килгәндәр.

Ҡоҙа килә, ҡоҙа килә,
Ҡоҙа килә — ҡурҡмабыҙ!
Ҡоҙа килһә, ҡурҡмабыҙ,
Ҡүлдәк осон йыртмабыҙ!

91 Ҡоҙаларым, килдегеҙ,
Килдегеҙ, күрендегеҙ.
Зөһрә йондоҙ кеүек кенә
Нурлы һеҙҙең йөҙөгөҙ!

92 Ҡоҙаларым ғына, ай, килгәндәр,
Яғалы ла кейем кейгәндәр.
Ҡәҙер генә, хөрмәт күрһәтәйек,
Донъялары матур, тиһендәр.

## ҠӨРӘГӘ АСЫУ

93 Һай!
Ҡоҙалар килә, ҡоҙалар килә.
Ҡоҙаларҙан алда дан килә!
Шул ҡоҙалар килеп ултырһа,
Ҡөрәгә-көрәгә тулы бал килә!
Һай!
Ҡөрәгәкәйҙәрҙең күрке ҙур,
Үҫеп-үҫеп киткәндәй булам.
Ҡөрәгәкәйҙәрҙе алып китһәләр,
Үлеп-үлеп киткәндәй булам.

Һай!
Йүгәнһеҙ ҙә аттың йүне юҡ,
Ҡөрәгәһеҙ ҡорҙоң ҡото юҡ.
Ҡөмөш тәңкә һалып бирҙем, ҡоҙа,
Эсмәй генә ҡуйһаң, ҡәҙер юҡ.
Ҡоҙалар килә, ҡоҙалар килә,
Ҡоҙаларҙан алда дан килә!
Шул ҡоҙалар килеп ултырһа,
Ҡөрәгә-көрәгә тулы бал килә!
Һай!

94 Аҡ тәңкәләр һалып, ай, асайыҡ
Ҡөрәгәкәй тулы балдарҙы.
Йырлап ҡына көлөп, ай, эсәйек,
Яндыра бит балдар ҡандарҙы.

Ялан ғына, ялан ерҙәрендә
Ҡолонсаҡтар уйнай уҙышып.
Ҡөрәгәләр асып, ҡурай уйнап,
Ултырайыҡ, ҡоҙа, йырлашып.

95 Ошо көрәгәнең эстәрендә
Нәҙекәй билле ҡорттоң балдары.
Ашап ҡына эсегеҙ, эй, ҡоҙалар,
Хужаларҙың хәләл малдары.

96 Өҫтәл өҫкәйҙәре, — ай, көрәгә,
Өҫтәл аҫҡайҙары — күләгә.
Көрәгәкәй алда, эй, булғанда,
Һыйҙ үткәреп була ҡоҙаға.

Ҡурайҡайын алып, мөңөрәтеп,
Көй күтәрә башҡорт балаһы.
Көрәгәләр асып, билен быуып,
Ҡоҙа һыйлай — башҡорт балаһы.

## ТУЙ ҺУЙЫУ

### 1. Туйлыҡ килтереүселәргә

97 Бисмилла итеп башланым,
Тауға таяҡ ташланым.
Беҙгә килгән ҡоҙаларға
Таҡмаҡ әйтә башланым.

Быйыл сәскән кәбеҫтәмдең
Яп(ы)рағы ете ҡат.
Ҡоҙаларға килгәнһең,
Һөйһөнөңдөң * башын тап.

Туйлыҡ бирһәң, башмаҡ бир —
Башмаҡ ите йом(о)шаҡ.
Алла бирһә, ултырырһың,
Киленеңде йомошлап *.

### 2. Ҡоҙалар ҡоҙасаларға

98 Ҡоҙалыҡҡа * килгәндә,
Ҡаршы килдем буранға.
Таҡмаҡ әйткән ҡоҙасалар
Көнө буйы урамда.

99 Арьяҡта ла ҡаҡы,
Бирьяҡта ла ҡаҡы.
Таҡмаҡ әйткән ҡыҙҙарҙың
Тамаҡтары ла ҡатты.

100 Ҡоҙалар, ҡоҙалар,
Ҡоҙалар, ҡоҙасалар.

Беҙҙә лә бит, һеҙҙең кеүек,
Йырлап күңел асалар.

### 3. Ҡоҙаларға ҡоҙасалар

101 Ҡескәй генә самауырҙың —
Борҙониһәм, — һыуы юҡ.
Беҙгә килгән ҡоҙаларҙың
Мәһәр һалыр малы юҡ.

102 Ай ҡашында яҡты йондоҙ,
Батыр булһаң, бат инде.
Бай хөрмәте бер ҙә бөтмәҫ,
Әрһеҙ ҡоҙа, ҡайт инде.

103 Самиҡ ҡоҙа — төп ҡоҙа
Ҡарундарға оҡшаған.
Туйға биргән һарыҡтары
Сәүек эткә оҡшаған.

Төп ҡоҙаның быймаһы
Һике аҫтына һыйманы.
Туйға биргән һарыҡтары
Бер ҡаҙанға тулманы.

Ишек алды таш мейес —
Икмәк һалам арыштан.
Күренешегеҙ етмәһә,
Хәҙер йыртам бер ыштан.

Алтынан ишкән дилбегәһе,
Теҙгененә етмәне.
Һалған ите, исраф булып,
Ҡайтыр ашҡа етмәне.

104 Ғәббәс ҡоҙа, итегеңдең
Үксәләре өс ҡатлы.
Туйға биргән һарығыңдан
Көлә-көлә эс ҡатты.

105 Иҙел буйы тал ғына,
Үтеп сығырлыҡ түгел.
Ҡоҙағыйҙың туй һарығын
Ашап туйырлыҡ түгел.

### 4. Ҡороҡлағанда, таҙ ҡарынға болашҡанда

106 Ҡороҡ һалһаң да, ыжламай,
Был ҡоҙабыҙ яй икән.

Үҙҙәре бик бай булһа ла,
Ҡеҫә яғы һай икән.

107 Ҡылсылдама, төп ҡоҙа,
Беләбеҙ аҡсаң барын.
Аҡса бирмәй ҡарыулашһаң,
Кейҙерербеҙ таҙ ҡарын!

108 Һайыҫҡандар йыйылғандар
Ылаштағы ҡоротҡа.
Ҡоҙасалар йыйылғандар
Ҡоҙаларға ҡороҡҡа.

109 Туйға биргән һарығын,
Алып килгән арығын.
Ҡороҡ һалып алам инде
Ҡоҙаларҙың барыһын.

Ҡойроғон һелкетәйек,
Тояғын һелкетәйек,
Ҡоҙаларға ҡороҡ һалып
Туйҙарын * һимертәйек!

**ЙЫРТЫШ ЙЫРТЫУ**

**Ҡоҙағыйға ҡоҙасалар менән йәш ҡоҙағыйҙарҙың әйткәне:**

110 Әйләнә тирмән ташы.
Ҡоҙағыйҙың йыртышы —
Киндер юрғандың тышы.

111 Тауыш килә аръяҡтан,
Тауыш килә бирьяҡтан.
Ҡоҙағыйым йыртыш тиеп,
Бирҙе уҡалы ыштан.

Теләктә ултырабыҙ,
Теләктә ултырабыҙ.
Йыртыш бүләге етмәһә,
Күлдәген һыпырабыҙ.

**Ҡоҙағыйҙың әйткәне:**

112 Туйығыҙ ҡотло булһын,
Нигеҙегеҙ ныҡлы булһын!
Ҡотло булһын туйҙар,
Берҙәм булһын уйҙар!

113 Йыртышты тиң бүлегеҙ,
Ике яҡты тиң күрегеҙ!

## ЙЫУАСА

114 Төп ҡоҙағый хәлле тиҙәр,
Хәлен хәлләп ҡарайыҡ.
Төп ҡоҙағый йыуасаһын
Йөкмәп бейеп алайыҡ!

115 Ҡулъяулығым сигелгән,
Сигелгәнен кем белгән?
Ҡоҙаларҙың йыуасаһы
Әҙ булырын кем белгән?

116 Йыуасаның эстәрендә
Ике йомғаҡ майы бар.
Ҡоҙағый ниңә ҡурылһын,
Ҡурылмаҫлыҡ яйы бар.

**Хужалар:** Ҡоҙаларҙың дилбегәһе
Нисә ерҙән ишелгән?
117 Йыуаса һалған тоҡтары
Уртаһынан тишелгән.

118 Ҡоҙа менән ҡоҙағый
Туй алдынан көрәшкән.
Әллә шуға был икәүҙең
Йыуасаһы бөрөшкән?

Ҡоҙасалар: Йылайыр буйы бормалы,
Ҡарап тороп булманы.
119 Их, дуҫҡайым, был туйҙа ла
Ашап туйып булманы!

Хужалар: Эй, бөкрәйгән, бөкрәйгән —
Йыуасаһын йөкләгән.
120 Әллә уңған, әллә туңған,
Биш-алтыға бөкләнгән.

**Ҡоҙалар:** Эй, йыуаса, йыуаса,
Тоҡсай ауыҙын кем аса?
121 Тоҡсай йөкләп, бейеп йөрөй,
Йоморо беләк ҡоҙаса.

122 Ҡоҙасаның шәле
Ергә тейер әле.
Әхирәткә еткермәйсә,
Бер үбермен әле.

Х у ж а л а р: Берәү микән, икәү микән
123 Мискәһенең ҡоршауы.
Мискәле ҡоҙағыйҙарым [139]
Күңелемә оҡшаны.

124 Аҡ самауыр керәнтеһен
Бороп ҡарағыҙ әле.
Ҡоҙаса кеүек, йыуаса йөкләп,
Бейеп ҡарағыҙ әле!

Х у ж а л а р: Аттарығыҙ һүлпән килгән,
125 Сыбыртҡығыҙ юҡ мәллә?
Йыуасағыҙ ҡаты бешкән,
Әсеткегеҙ юҡ мәллә?

Б е й е ү с е ҡ о ҙ а с а:

Тоҡтоң ауыҙын асайыҡ,
Йыуасаһын сәсәйек.
Бынауынса халыҡҡа
Бөртөкләп өләшәйек!

126 Арпанан да йыуаса,
Бойҙайҙан да йыуаса.
Бейеһәм дә, көсөм етә, —
Өс ҡаҙаҡтай йыуаса.

Х у ж а л а р: Һаҡмар һыуында йыуҙыңмы,
127 Тоғоң ап-аҡ, ҡоҙағый?
Йыуасаны күп бешергән,
Ах, маладис, ҡоҙағый!

128 Күстәнәнең * сауҡаһын
Ваҡ-ваҡ сабып, таплайыҡ.
Йыуасаны күп бешергән,
Ҡоҙасаны маҡтайыҡ!

129 Ҡоҙағыйым, һин үҙең,
Ҡашыңдин ҡара күҙең.
Ынйы кеүек теш араң —
Һайланып сыға һүҙең.

130 Эй, йөкләйек, йөкләйек,
Йыуасаны йөкмәйек.
Йыуасаны еткермәһә,
Төп ҡоҙаны бикләйек.

Ҡ о ҙ а л а р: Ана ултыра үҙҙәре,
131 Тексәйешеп күҙҙәре.

Йыуасабыҙ бик күп ине,
Ашап бөткән үҙҙәре.

Ҡоҙаса, ҡоҙаса,
Ҡоҙаса күңел аса.
Йыуасаны мул тарата —
Һәр кем уны ярата.

### ТУЙ БЕЙЕҮҘӘРЕНӘ ТАҠМАҠТАР

132 Беҙҙең ҡоҙа бейеп йөрөй,
Бейеүенең рәте юҡ.
Ҡоҙа булып килгән булған,
Бер бейергә хәле юҡ.

133 Өфө ҡалаһымы ни?
Бөрө ҡалаһымы ни?
Алпан-толпан бейеп йөрөй,
Айыу балаһымы ни!

134 Бер балағы эстәрәк,
Бер балағы тыштараҡ.
Үҙе шулай йөрөһә лә,
Бейей һеҙҙән оҫтараҡ!

135 Лавкаларға бара һалып,
Ситса тауар алайым.
Ҡоҙаларҙың күңеле булһын,
Бер-ике баҫып алайым.

136 Ҡөтөүе менән бүре,
Ҡөтөүе менән бүре.
Их, үҙемдең ҡоҙағыйым —
Бейеүҙәре лә эре!

137 Скрипкам — ҡарағай,
Бер тартырға ярамай.
Яңы килгән килендәргә
Һүҙ әйтергә ярамай.

138 Яҙғы һыу ағыр әле,
Аҡ күбек булыр әле.
Таш һын кеүек ҡоҙасабыҙ,
Бер көлөп, бейер әле!

139 Самауыр таҙартмайым,
Ҡулымды ҡабартмайым.

Бейемәгән ҡоҙаларҙы
Һис кенә яратмайым.

140 Аҡ һарыҡтың йөнө һәйбәт
Быйма баҫып кейергә.
Гармундың көйө матур
Ойотторол бейергә.

141 Арғы оста, бирге оста
Патефон уйнаталар.
Бөгөн кискә Санияны
Ҡейәүгә оҙаталар.

142 Һай, тибеҙ, һай, тибеҙ,
Таянабыҙ бөйөргә.
Ҡоҙағыйҙың ғәҙәте бар:
Урындыҡта бейергә [140].

143 Аҡ алъяпҡыс билдә тормай,
Булавка ҡаҙамайса.
Матур егет ҡулда тормай,
ЗАГС-та яҙылмайса.

144 Дуҫым, һинең буйҙарың!
Ҡемдә икән уйҙарың?
Уйың кемдә, шуның менән
Үтһен ҡыҙыл туйҙарың.

145 Ҡара һыйыр көтөүҙә,
Алаһы ла көтөүҙә.
Ҡоҙасалар мунса яҡҡан,
Сыҙап булмай төтөнгә!

146 Ҡоҙа, ҡоҙа икәнһең,
Ҡоҙа түгел икәнһең.
Туйҙа булған бөтә хәлде
Ҡешегә һөйләй икәнһең.

147 Алын алыу ғынаһы [141],
Гөлөн кейеү генәһе лә
Гөлөн кейеү генәһе.
Ҡулъяулығын ҡулына тотоп,
Бейеп килеү генәһе лә
Бейеп килеү генәһе.

Алын ғына кейерһең,
Гөлөн генә кейерһең дә
Гөлөн генә кейерһең.
Ҡоҙағыйым бейеп йөрөй,

Аҡҡош йөҙә тиерһең дә
Аҡҡош йөҙә тиерһең.

Аҡ алъяпҡыстарын быуып,
Бейеп йөрөү генәһе лә
Бейеп йөрөү генәһе.
Ҡулъяулығын ҡулына тотоп,
Хөрмәт итеү генәһе лә
Хөрмәт итеү генәһе!

Аҡ ҡалпағың кейәһең,
Ҡейһәң, сисә белмәйһең дә
Ҡейһәң сисә белмәйһең.
Һөйһәң, һөйә белмәйһең,
Ғүмерем үтә тимәйһең дә
Ғүмерем үтә тимәйһең.

Ҡоҙаҡайым, үҙеңә,
Һүҙем үҙекәйеңә лә
Һүҙем үҙекәйеңә.
Тыпырҙатып баҫыуҙарың
Яҡын күңелкәйемә лә
Яҡын күңелкәйемә.

## ҠЕЙӘҮ ҺАНДЫҒЫ

### 1. Бата әйткәндә

148 Ҡайҙа бында кейәү егете,
Мылтыҡтарын аттырһын [142].
Хоҙай һеҙгә көндән көнгә
Мөхәббәтен арттырһын!

Ҡулдәк кейһәң, кей ҡараһын,
Ең остары тар булһын.
Күп бәхетле, мөхәббәтле
Мәңгелеккә йәр булһын.

### 2. Ҡәйнә һүҙе

149 Ҡейәүкәйем, кәртә тот,
Етәр ерен етә тот.
Минең ҡыҙым һиңә булды,
Ҡәҙерен белеп, иркә тот.

150 Ҡейгән кейемкәйең, ай, уҡалы,
Ҡейәүкәйем, атың дағалы.

Бөтә генә илдәр беҙҙәй түгел,
Ҡайтыр ереӊ булһын доғалы.

Һыу буй(ы)ҡайҙары, эй, шау ҡамыш —
Тау буй(ы)ҡай юлдан китегеҙ.
Ат тирләтеп килеп алған йәреӊ,
Балам, татыу ғүмер итегеҙ.

151 Туҫтаҡҡайым ғына төбө алтын,
Төбө алтын да түгел, сите алтын.
Ошо ғына торған кейәүемдеӊ
Бер-бер һүҙкәйҙәре меӊ алтын.

Тубылғы ла ағас ҙур булмаҫ,
Араһынан үтәр юл булмаҫ.
Бәләкәй ҙә тип үк кәмләмәгеҙ,
Аҫыл ғына һөйәк ҙур булмаҫ.

3. Ҡәйенеӊгәләренеӊ әйткәне

152 Беҙҙеӊ кейәү бик уӊған,
Ҡәртәһе мал м(ен)ән тулған.
Һылыу ҡыҙҙар күҙләй-күҙләй,
Беҙҙеӊ ҡыҙға тап булған.

153 Тәҙ(е)рәнән (тәҙ(е)рәгә
Гөлдәреӊде ултыртма.
Гөл үҫтереп һиӊә бирҙем,
Һыу һипмәйсә ҡоротма.

Ҡейәүкәйем, сибәрһеӊ,
Күҙҙәр тейә күрмәһен.
Ҡыҙ баланыӊ күӊеле нескә,
Һүҙҙәр тейә күрмәһен.

154 Ҡейәүкәйем, түбәтәйеӊ
Түбә түшәменә теймәһен.
Ай-һай ҙа ғына, кейәү, бик матурһыӊ,
Собханалла, күҙем теймәһен.

Ҡейәүкәйем, һиӊә ни бирәйем? —
Бүләгемде ҙурлап ҡабул ит.
Иркә генә үҫкән ҡыҙ баланы
Бер-бер күӊелдәрен ҡыймай көт.

155 Ҡара ғына камзул бик килешә,
Сит-ситкәйе уҡа, ай, булһа.
Ҡыҙ балаҡайға ла шул килешә
Ҡейәүкәйе аҫыл ир булһа.

156 Ҡейәүкәйем, атың, ай, йөрәгәс,
Һөйгән йәрең генә көләгәс.
Көләгәстәй йәрең хөрмәт итһен,
Мәһәрҙәрен үҙең түләгәс.

**4. Ҡыҙҙың егеткә йырлағаны**

Өҫтәреңә кейгән күлдәгеңде,
Еҫле һабын менән йыуҙыңмы?
Буйың ғына зифа, ҡашың ҡара,
Ҡәҙер кисәһендә тыуҙыңмы?

Аяғыңа кейгән итегеңдең
Бузулусский икән олтаны.
Ҡашҡынайың ҡара, буйың зифа,
Һин икәнһең ирҙең солтаны!

**5. Егет менән ҡыҙҙың әйтешкәне**

Егет: Һаҡмар ғына буйын, әй, тал алған,
157 Япраҡтары ситкә таралған.
Ҡәкүк тә генә менән, әй, һандуғас,
Моңло һайрар өсөн яралған.

Ҡыҙ: Иртәнсәккәй тороп, бер ҡараһам,
Һаҡмар буйы ята күгәреп.
Болондарға ҡарап, бер йырланым,
Уйҙарымды алыҫ ебәреп.

## ТУЙ ТАБЫНЫ

158 Хужа ҡоҙа:

Тәпән генә тәпән бал, көрәгә,
Алмағасҡай төбө — күләгә.
Иртән генә тороп, сәләм бирҙем
Хәбибулла тигән ҡоҙаға.

159 Туры аттар ектем, әй, һатыуға,
Аҡ кейеҙҙәр баҫтым ятыуға.
Бик күптәрҙең иҫе китһен әле
Ҡоҙа менән беҙҙең татыуға!

Ҡунаҡ ҡоҙа:

Эһ-эй, умарталар, умарталар,
Бал ҡушайыҡ уның ҡортона.
Йырлап, бейеп, гөрләп ултырайыҡ,
Йәмдәр биреп ҡоҙа йортона.

Хужа: Беҙҙең ауыл — ҙур ауыл,
160 Ҡапҡаһы юҡ, ҡарауыл.
Ағай-эне татыу булһа,
Туйҙар шулай бара ул.

**Ҡоҙалар яғы йыры**

161 Һандуғастар ҡунып һайрай,
Һыу буйында баланға.
Эсең янамы, ҡоҙағый,
Балаң беҙҙә ҡалғанға?

162 Алмалар өҙөп алдым,
Аҡ яулыҡтарға һалдым.
Күңелем күреп, хәстәр итеп,
Ҡыҙынды димләп алдым.

163 Тәрән генә икән, һай, һыуығыҙ,
Текә лә генә икән ярығыҙ.
Һеҙгә лә килеп ҡунаҡ булдыҡ,
Инде үҙегеҙ беҙгә барығыҙ.

**Хужалар яғы йыры**

164 Эх, ҡоҙа, ҡоҙа, ҡоҙа,
Һин булдың беҙгә ыҙа.
Ыҙа булһаң да, һыйлармын,
Борондан килгән йола.

165 Йырлайым әле, йырлайым,
Мин йырлайым икене.
Йырламаҫ инем икене,
Ҡоҙаларым һөйкөмлө.

Килгән ҡоҙалар беҙгә лә,
Ҡоҙасалар ҙа беҙгә.
Һеҙ һандуғас кеүек беҙгә,
Беҙ нисек икән һеҙгә?

Ҡайната шул самауырҙы —
Ҡара миләш күмере.
Ҡоҙа менән ҡоҙағыйҙың
Рәхәт үтһен ғүмере!

166 Юл буйында юрғалаған
Бүҙәнәнең балаһы.
Йырлап бирәм ҡоҙасаға, —
Илебеҙҙең йолаһы.

167 Ҡөрәгәсе йырлап тора,
Аяҡсы бал тарата.
Ҡөрәгәсе йырлап торһа,
Мәжлес шуны ярата.

168 Ҡоҙаҡайым, ҡоҙағый,
Буҙаңды һин һуҙа ҡой.
Һандуғас һайраған кеүек,
Ҡалһын иҫтә беҙҙең туй.

Ай, бал микән, бал микән,
Балдың һарыһы икән.
Беҙҙең кеүек ултырғандар
Бүтән ерҙә бар микән?

169 Самауырҡай тигән аҫыл затҡа
Зәмзәм һыуы ҡойҙом — тулманы.
Һеҙ ҡоҙалар менән бер ултырып,
Күреп тә генә күҙем туйманы.

## ТУЙ ЙЫРЫ

(«Байыҡ» көйөнә)

170 Йәмле Иҙел буйында,
Гөлғәйшәнең туйында,
Ҡейәү, йыртыш, йыуасалар —
Беҙ алырбыҙ барын да!

Ҡушымта:

Һай-һай, һай-һай!
Таҡмаҡ әйтеп, бейешеп,
Һай-һай, һай-һай!
Туй яһайбыҙ көлөшөп.
Батыр менән Гөлғәйшәләр
Ғүмер итһен һөйөшөп.

Ҡотло булһын туйығыҙ,
Изге булһын уйығыҙ.
Азаматтар килгән беҙгә,
Бергә булһын туйығыҙ!

Ҡушымта.

Туй ҡоҙаһы шатланыр,
Күргәндәре таң ҡалыр.
Гөлғәйшә лә күп яусынан
Ныҡ талыҡты, тын ҡалыр.

Ҡушымта.

Һай-һай, һай-һай!
Таҡмаҡ әйтеп, бейешеп.

Һай-һай, һай-һай!
Туй яһайбыҙ, күлөшөп.
Батыр менән Гөлғәйшә лә
Ғүмер итһен һөйөшөп!

### ҺАБА ЙЫЙЫУ

171 Беҙҙең ҡоҙа-ҡоҙағый
Ҡүҙенә ҡара бәйләгән.
Беҙ килерҙе белмәгәнме,
Ишеген нишләп бикләгән?

172 Һары май бит келәттә,
Оҙон нескә күнәктә.
Һары майҙы сәнскән саҡта,
Беҙ торабыҙ теләктә!

173 Һаба һауытын алайыҡ,
Төп ҡоҙанан башлайыҡ.
Йырын йырлап, ҡурай уйнап,
Бер ҡаҙандан ашайыҡ.

174 Ҡәртә артынан ырғып сыҡты,
Күк ат икән анауы.
Һаба бирмәйсә ултыра,
Өңөрәйеп танауы.

175 Һаба тоғо ҙур булған,
Һалған ите әҙ булған.
Бирелгән ҡыҙҙың кейәүе
Уңмаған егет булған.

176 Юлыбыҙ бит уңманы,
Һаба төбө тулманы.
Их дуҫҡайым, быныһының
Ҡаҙы-ялы булманы!

Һаба, һаба, һаба, һаба!
Һабаға һауап тула.
Беҙ ҙә былай йөрөмәҫ инек,
Боропдан ҡалған йола.

Тарт, тарт, тарт әле,
Ҡурайыңды тарт әле.
Һабаларға сыҡҡандарҙың
Күңелдәрен ас әле!

Бар, бар, бар әле,
Һаба төбө бар әле.

Еңгә, әйҙә, тоҡ төбөнә
Бер ҡалъяны һал әле!

Бейе әле, бейе әле,
Бейер хәлең бар әле!
Һаба тоғон тултырғансы,
Йөрөйһөбөҙ бар әле!

Алай ҙа һал, былай ҙа һал,
Һаба үҙебеҙҙеке.
Алай ҙа бар, былай ҙа бар,
Урам үҙебеҙҙеке.

### СЫБЫРТҠЫ АШЫ

177 Хужа яғы:

Толоп кейеп, ҡойроҡ тағып,
Урманға сығып китте.
Уйнап ҡалығыҙ, ҡунаҡтар,
Ҡайтыр көн килеп етте.

Ишегем алды — һарымһаҡ,
Бәйләп ҡуйҙым ҡолонсаҡ.
Беҙгә етте хуш итер сак,
Һеҙгә етте ҡайтыр сак!

Көрәгәлә балдар бөткән,
Өҫтәлдә һыйҙар бөткән.
Уйнап ҡалығыҙ, ҡунаҡтар,
Ҡайтыр көн килеп еткән.

178 Сыбыртҡысы:

Һайт-һайт-һайтүҙә!
Һайт-һайт-һайтүҙә!
Һике өҫтөндә — һәңелсәк,
Ат өҫтөндә — ыңғырсаҡ.
Һеҙгә етте ҡайтыр саҡ,
Беҙгә етте ятыр саҡ.

Хужалар:

Сыбыртҡылыҡ ишмә йүкә
Урманда үҫә икән.
Уйнап ҡалығыҙ, ҡунаҡтар,
Ҡайтыр көн килеп еткән.

179 Итте ашап бөттөгөҙ,
Майҙы ашап бөттөгөҙ.

Инде беҙҙән хөрмәт юҡ,
Әйҙә ҡайтып китегеҙ!

180 Һандуғастар осто инде,
Оялары буш инде.
Хушығыҙ инде, ҡунаҡтар,
Айырылышыу ошо инде.

Һандуғастар осто инде
Оялары буш инде.
Хушығыҙ һеҙ, ҡоҙаларым,
Хуш аяғы ошо инде.

Сылтыр-сылтыр ғына ни сылтырай?
Ат өҫтөкәйендә ыңғырсаҡ.
Һеҙгә генә килде, ай, ҡайтыр саҡ,
Беҙгә генә килде ятыр саҡ.

181 К у н а ҡ  ҡ о ҙ а л а р:
Ағиҙел туғай микән,
Йөҙөргә уңай микән?
Айырылышыу ауыр беҙгә,
Һеҙгә лә шулай микән?

Һайт-һайт-һайтүҙә!
Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Хәтирә.
Өс көн ҡунаҡ итә лә
Ҡыуа икән был тирә.
Һайт-һайт-һайтүҙә!
Балта менән тумырығыҙ,
Бысҡы менән бысығыҙ.
Ҡасан ҡайтһаҡ та ҡайтырбыҙ,
Беҙҙә булмаһын эшегеҙ!

Артығын ҡыуалама,
Сыбыртҡыңды ла төшөр.
Бына һиңә тағы тәңкә,
Тиҙерәк итең бешер.

Баҡсалағы алмаларҙы
Ал итәм дә гөл итәм.
Ҡайтыр ваҡыт етте иһә,
Туңҡаям да тик ятам.

182 Ары ҡарап ҡараған,
Бире ҡарап ҡараған.
Арыу әйбер тапмағас,
Йүкә бәйләп ураған.

### Хушлашыу йыры

183 Аҡ әтәскәй менән күк әтәстең
Ҡысҡырыр ҙа ваҡыты етте инде.
Хужаларға рәхмәт әйтәйек тә
Ҡайтыр ғына ваҡыт етте инде.

184 Димкәй буйҙары ла ҡабырсаҡ,
Бесәндәрең сапһаң, таҡыр сап.
Ашаныҡ та эстек, туйҙар иттек,
Инде етте беҙгә ҡайтыр саҡ.

185 Ҡайтабыҙ ҙа инде, хуш булығыҙ,
Тал дуғалар кәрәк тартырға.
Хуш итәйек, ҡоҙалар, юл алдынан,
Хуш доғалар кәрәк ҡайтырға.

Селтәр элдем ситәнгә,
Елбер-елбер итергә.
Беҙ килмәнек тик китергә,
Ҡилдек алып китергә.

Алай итергә кәрәк тә,
Былай итергә кәрәк.
Хужаларға рәхмәт әйтеп,
Ҡайтып китергә кәрәк.

Аҫылйәр, хуш инде,
Айырылабыҙ шул инде.

Мендем тауҙың башына,
Яҙыу яҙҙым ташына.
Йә, ҡунаҡтар, хуш итәбеҙ
Был ҡоҙаның ашына.

Аҫылйәр, хуш инде,
Айырылышыу шул инде.

## ЕГЕТ ЙОРТО. ҠАЛЫМ ТУЙЫ

186 Х у ж а л а р:
Ҡоҙалар ҙа килә, ай, бағығыҙ,
Ҡаршы ла ғына сығып алығыҙ.
Ҡаршы ла ғына сығып алмаһағыҙ,
Асыҡ та ғына торһон ҡапҡағыҙ.

Ҡөрәгә тулы әсе бал,
Әйҙә, ҡоҙа эсеп ал.

Нисек ҡунаҡ һыйларға
Кешеләрҙән отоп ал!

Кәмәлекәйҙәрҙә, ай, ҡамыштар,
Саф көмөштәй һыуын эсәбеҙ.
Ата-бабаларҙан ҡалған йола —
Көрәгәләр йырлап асабыҙ.

187 Алыҫ ҡына яҡтан алты ат килә,
Алтын дуғалары ҡағылып.
Алыҫ ҡына ерҙе яҡын итеп,
Ҡоҙағыйҙар килгән һағынып.

Ҡоҙағыйҡайым, һыйҙың даны, тимен,
Балдың балы татлы бал менән.
Ғүмеркәйҙең генә даны, тимен,
Йәнгенәңә яҡын дуҫ менән.

Эй, ҡоҙалар, ҡоҙалар,
Ҡоҙа һыйы беҙҙә бар.
Тағы бер көн торороҙсо,
Ҡоҙа һыйлар рәтем бар.

Ҡ о ҙ а л а р:
Эй, ҡоҙалар, ҡоҙалар,
Ҡоҙа булып килдек беҙ.
Атыбыҙға бәйге тағып,
Ыҙа булып килдек беҙ.

Ҡоҙағыйҙың һыйы күп,
Ҡыҙ туйында бер туйҙым.
Туҫтаҡ-туҫтаҡ бал эстем,
Ит киҫәкләп умырҙым.

Көрәгә төбөн ҡотлайыҡ,
Көрәгә күркен хуплайыҡ.
Бал-буҙаны тәмле ҡойған
Хужаларҙы маҡтайыҡ!

188 Ҡ ы ҙ ҙ ы ң ә с ә һ е н ә:
Өҫтәреңә кейгән еләнеңдең,
Бөйөрҫәһендәме тәңкәһе?
Ҡашҡынайың ҡара, буйың зифа,
Һингенәме ҡыҙҙың әңкәһе?

189 Ҡ ы ҙ ә с ә һ е:
Алыҫ ҡына ерҙән, ай, ел иҫә,
Ел иҫкәндә йөрәк елкенә.
Һеҙҙең яҡтан елдәр, ай, иҫкәндә,
Балаҡайым төшөр иҫемә.

## ҠЫҘ OҘАТЫУ

### СЕҢЛӘҮ

### Ҡырға сығыу (Таҡыяға барыу)

190 Таҡыя ла башлы ҡырлы ҡурай
Ялан ғына ерҙә һыҙғыра.
Һиҙәр генә үтмәй, ниҙәр күрмәй,
Әсәһенән киткәс, ҡыҙ бала.

191 Ҡүк үләндәр үҫә лә, әй, өйөлөп,
Баш-башына сәскә төйөлөп.
Ҡыҙ балаҡай китә ят илдәргә
Ата-әсәһенән төңөлөп.

Һаҙ ҡарағаттары беште бит,
Һаҙ ҡуйынына томан төштө бит.
Ҡылдан ғына нәҙек билкәйемә
Таштан ауыр хәсрәт төштө бит.

192 Анау ғына тауҙың үҙәге —
Турысай атҡайымдың төйәге.
Булмаһын да малай, булмаһын бабай,
Булһа булһын егет үҙәге.

Таҡыямды ғына кейәрем юҡ —
Тороп ҡалды талға эленеп.
Хәлдәремде кемгә һөйләйем һуң,
Йөрәккәйем тора өҙөлөп.

193 Беҙҙең күлдең һыуҙары
Туңыр инде боҙ булып...
Минән ҡалған тиңдәштәр
Уйнар инде дуҫ булып.

Һаҡмар ғына буйы томбойоҡтар
Туңды микән инде боҙ булып?
Һаҡмар ғына буйы! Һиндә беҙ
Күп йөрөнөк микән ҡыҙ булып?!

194 Француз ғына күлдәк туҙмай, тиҙәр,
Туҙа икән һүткән йөй кеүек.
Ҡыҙ ғүмеркәйҙәре уҙмай, тиҙәр,
Уҙа икән иҫкән ел кеүек.

Илдәрегеҙ генә ил түгел,
Баҙыян ғына үҫер ер түгел.
Баҙыян түгел гөлдәр үҫмәй,
Мин тораһы ғына ил түгел.

195 Ағиҙелкәйҙәрҙең буйҙарынан
Аҡ үрҙәктәр килә, — йөҙә алмай.
Яратҡан да йәрем түгел икән,
Йөрәккәйем яна, түҙә алмай.

196 Йүгереп кенә мендем тауҙарға,
Ултыра ла төштөм таштарға.
Ултыра ла торғас, йырлап алдым,
Йөрәккәйем янып ташҡанға.

197 Ҡыйғаҡ ҡына ҡыйғаҡ ҡаҙ ҡысҡыра,
Һыуһыҙ ергә төшкән ҡаҙ микән?
Сеңләп кенә илап оҙатыла,
Ярлы ергә төшкән ҡыҙ микән?

198 Ҡарлуғасҡай ҡара, муйыны ала,
Нишләп илай икән ҡыҙ бала?
Иламаç та ине, ай, ҡыҙ бала,
Сит ерҙәргә бара, юғала.

199 Һандал ғына билбау ике ҡат,
Сискеләрем килмәй билемдән.
Оҙатып та ҡала еңгәләрем —
Киткеләрем килмәй илемдән.

200 Умырзая ниңә үçә икән,
Яҙҙан алып, көҙгә етмәгәс?
Ҡыҙ балалар ниңә үçә икән,
Ата-инәкәй ҡулында үçмәгәс?!

201 Ҡарайыпҡай ятҡан юл микән?
Күгәрепкәй ятҡан күл микән?
Китмәм дә китмәм, тип йөрөй инем,
Китеп барыуҙарым шул микән?!

202 Ҡара ҡаҙҙар оса теҙелеп,
Урта билдәренән өҙөлөп.
Ҡара ҡаҙҙар ҡайта, ҡыҙҙар ҡайтмай,
Инәләре ҡала төңөлөп.

203 Аҡыҡ ҡына һалдым — аҡманы,
Көмөш кенә һалдым — батманы.
Ырыç-бәхетемә ышанмайым,
Ырыç-бәхеттәрем ҡалманы.

204 Ҡаранан ғына ҡара, һай, бөрлөгән,
Ҡаршымда ғына ла бешә икән.
Толпар кеүек ярһый, һай үҙәгем,
Яҙ көндәре нисек түҙәрем?!

Көргәҫ * кенә буйы бөгөл-бөгөл,
Бер бөгөлкәйҙәре ерекһеҙ.
Йәмле Ҡейекбайҙың буйҙарынан
Сығып ҡына киттек ирекһеҙ.

205 Аршын да аршын аҡ уҡа —
Аҡбуҙ атҡайҙарға дилбегә.
Һыҡтай ҙа илай еп бәйләйем
Тыуған үҫкән ергә билгегә.

206 Ураҡ урған ерҙәрем,
Бесән сапҡан ерҙәрем.
Күк сәскә атып, күкрәп ҡалды
Минең йөрөгән ерҙәрем.

207 Милай * ҙа япраҡ ярҙы инде,
Илай ҙа күҙем талды инде.
Мин иламай ҙа кем илаһын,
Тыуып үҫкән ерем ҡалды инде.

Юл буйындағы сабынлыҡты
Саба ла саба барығыҙ.
Ҡәйнәкәйемде уҫал тиҙәр,
Һораша ла һораша барығыҙ.

Ағиҙелкәй буйы аҡ татыр,
Ат аяҡайҙарын ҡаҡшатыр.
Тиң-тиңдәштәр менән уйнаған ер
Күк үләнкәй үҫмәй ҡаҡ ятыр.

Әй, һөргән ер, һөргән ер,
Һөргән ерҙән артыҡ йөр(ө)гән ер.
Әлхәмдилла * шөкөр, әй, үҫкән ер.
Әллә ниндәй була төшкән ер.

**Йорт-ҡура, ауыл эсендә сеңләү**

**1. Атаһына**

208 Түңәрәк тә күлдә, ай, дүрт өйрәк,
Атмала ғына, атай, алам тип.
Бирмәҫ кенә ергә бирҙең, атай,
Бармала ғына инде балам, тип.
Әй...

Һаҡмар ғына буйы — һары тал,
Башҡынайын ҡайырып, һыуға һал.

Бирмәç кенә ергә бирҙең, атай.
Хәлгенәйең етһә, айырып ал.
Эй...

Һаҡмар ғына буйы ҡаҙ микән?
Ҡуна торған ере һаҙ микән?
Эскенәйем боша, йөрәгем яна,
Әллә ғүмерҙәрем аҙ микән?
Эй...

209 Атаҡайымдың пар атын
Егеп кенә эшкә китһәмсе.
Атаҡайымдың ҡулында
Ун һигеҙ генә йәшкә етһәмсе.
Эй...

210 Аҡ күлдәгемдең итәген
Тегер генә инем — энәм юҡ.
Ун дүрт йәшлек килен булғансы,
Үлер генә инем — әмәл юҡ.
Эй...

211 Мине лә биреп ни алдың?
Япраҡ-япраҡ аҡса алдың.
Япраҡ аҡса бөттө инде,
Ҡулыңдағы балаң китте инде.
Эй...

212 Бура ла бура ашлығың,
Аш итә алманың, атайым
Бер-ике йылға иш инем,
Иш итә алманың, атайым.
Эй...

213 Сылтыр-сылтыр салғы яныған саҡта,
Талманымы, атай, беләгең?
Йәш ҡыҙыңды ҡартҡа биргән саҡта,
Янманымы, атай, йөрәгең?
Эй...

214 Ай, әлем суҡ, әлем суҡ,
Ыштыялары йәшел суҡ
Ҡарт кейәүгә биргән атайымды,
Эй, Хоҙай ғынам, йәшен һуҡ!
Эй...

215 Атайымдың аттары
Һыуҙан ғына сыҡҡан балыҡтай.

Атайымдың биргән ере,
Янып ҡына торған тамуҡтай...
Эй...

216 Ағастары япраҡ ярҙы инде,
Илай-илай күҙем тала инде.
Алған малыңды кире биреп,
Атаҡайым, алып ҡал инде.
Эй...

217 Ишеккәйем алды күк үләнде
Еп бәйләпкәй өҙөп алһамсы.
Мал һатмаçлыҡ ергә ҡыҙ һатҡансы,
Таш бәйләпкәй һыуға һалһаңсы.
Эй...

218 Сылтыр ғына сылтыр килтерегеҙ,
Ҡымыҙ ғына итеп тартайым.
Сит ерҙәргә китә яңғыҙ башым,
Ҡайтарығыҙ, атай, ҡайтайым.
Эй...

219 Яңы ғына инем ҡолонсаҡ,
Көйәнтәләр алдым әле саҡ.
Атаҡайым, һинең, ай, ҡулыңда
Ун бер генә торҙом, бары саҡ.
Эй...

220 Йәйгә генә сыҡһам, ултырыр инем,
Күк үләнкәйҙәргә парланып.
Атаҡайым, китәм һинең йорттан
Кәкүк кеүек, ай-һай, зарланып.
Эй...

221 Саптарсай ҙа атым ял-ҡойроғон
Мин үрмәһәм, уны кем үрһен?
Илама ла башым, түгелмә йәшем,
Мин күрәһеләрҙе кем күрһен?
Эй...

Тәпән генә тәпән балығыҙ,
Шәл-яулыҡтар менән ябығыҙ.
Бирмәç кенә ергә бирҙең, атай,
Башҡынамды йырып алығыҙ.
Эй...

Аҡ тәпәнкәйҙәргә балдар ҡойоп,
«Әсемәһен балым», — тиһеңме?

Бирмәҫ кенә ергә бирҙең, атай,
«Йәлсемәһен балам», — тинеңме?
Эй...

Арҡаларға үҫкән арпалыр,
Арпаларҙан үлән тарталыр.
Ризалыҡ менән китмәҫ инем,
Ризыҡтарым ҡырға тарталыр.
Эй...

222 Алты ла ғына ҡонан, биш дүнән,
Кейәүемдең биргән мәһәре.
Атай, йәштән биреп ашаның
Төшһөн инде Алла ҡәһәре
Эй...

223 Ҡаҙанлыҡта сымылдыҡ
Ҡороулы ла торалыр.
Туғыҙ яҫтыҡ, ун юрған,
Өйөүле лә торалыр.
Эй...

Атайымдың өйөндә
Буҙа ҡойор көбө юҡ.
Атайым биргән кейәүҙең
Ятыр, торор өйө юҡ.
Эй...

224 Минең китер юлыма
Балан ултырт, атайым.
Балан башы ҡоронһә,
Балам, тип, әйт, атайым.
Эй...

225 Тәҙрәм төбө — ҡара ер,
Ҡайтарып та алып булмайҙыр
Әтекәйем йорто — һарайҙыр,
Айырылып китеп булмайҙыр.
Эй...

Атаҡай, сыҡма урамға,
Таҡта ла төшөр башыңа.
Ун ике йәштән ҡыҙ бирҙең,
Ҡәһәр ҙә төшөр башыңа.
Эй...

226 Атаҡайым, инде һарғайырмын,
Һайрар ҡошоғоҙ яҙған ерҙәрҙә.

Минең менән, атай, күрешерһең, —
Ҡолас ярым ҡара гүрҙәрҙә.
Эй...

227 Һандуғасҡай булып һайрармын,
Талдан ғына талға ҡунармын.
Ҡайғы-хәсрәт күрһәм, атаҡайым,
Аулаҡтарға сығып, иламын.
Эй...

Әсәкәйем, мине, әй, ник таптың?
Атаҡайым, мине ник һаттың?
Мине генә һатып, ниҙәр алдың?
Йәш йөрәккәйемә ут һалдың.
Эй...

228 Эй һөргән ер, һөргән ер,
Һөргән ерҙә йөрөгән ер.
Йөрөгән ерем — алтын ер,
Нисек кенә булыр төшкән ер?
Эй...

Ишегем алды туң тимер,
Өшөнөм, атай, туның бир.
Риза ла бул, бәхил дә бул,
Хуш бул, атай, ҡулың бир.

Эй...

## 2. Әсәһенә

229 Ҡоҙағый алып килгән күлдәкте
Ҡейҙермәйем, тиһәң, ни була?
Шунда ғына торған инәкәйем:
«Мин бирмәйем», — тиһәң, ни була?
Эй...

230 Ҡөмөш тә йөҙөк бәләкәй,
Ҡейә алмаҫһың да, инәкәй.
Минең һымаҡ ҡыҙ күрһәң,
Түҙә алмаҫһың да, инәкәй.
Эй...

231 Сылтыр-сылтыр ғына сылтыр
Ат өҫтөндә ыңғырсаҡ.
Инәкәйемдең ҡулында
Ун ике йыл торҙом бары саҡ.
Эй...

232 Әсәкәйем усаҡ яҡҡан,
Төтәй микән усағы?
Һалҡын гүргә тиң күренә
Ҡарт кейәүҙең ҡосағы.
Эй...

233 Инәкәй, тышҡа сығырһың,
Йөрөгән ерҙәремде күрерһең.
Йөрөгән ерҙәремде күрерһең,
Янып-көйөп, өйгә керерһең.
Эй...

234 Әсәкәйем, мине һин үҫтерҙең,
Күкрәк һөткәйеңде имеҙеп.
Бер күреп тә һөйләшер өсөн
Мин йөрөрмөн инде тилмереп.
Эй...

235 Ҡәкүк кенә саҡыра, ай, тирәктә,
Тауыштары китә йыраҡҡа.
Мин китермен, инәй, әй, йыраҡҡа,
Табалмаҫһың инде, юллап та.
Эй...

236 Инәкәйем, күҙ нурым,
Бәхетһеҙ иттең мине.
Мал артынан ҡыуам, тиеп,
Гүрҙәргә һалдың мине.

237 Ҡиземер яулыҡ, төрлө биҙәк,
Ҡил, әсәйем, бергә эрләйек.
Ҡитәр генә ваҡытым етте инде,
Ҡуй, әсәйем, йәштәр түкмәйек.

238 Сәскенәйем минең ҡоландыр,
Май бир, әсәй, майлап тарайым!
Ҡулҡайыңдан китәм, әсәкәйем,
Инде кем ҡулына ҡарайым?

### 3. Ағаһына

239 Ағасайымдың аттары
Боролоп-боролоп юл башлай.
Минең ағасайым иҫәр икән,
Юлымсыларға ҡыҙ ташлай.

240 Ағасайым өйҙө бейек һалды,
Осоп барған ҡоштар ҡунһын тип,

Ағасайым мине йыраҡ birҙе,
Бер-ике йыл килмәй торһон тип.

241 Таҡта ла таҡта балауыҙ,
Таҡта буйлап китеп барабыҙ.
Бер түшәктә ятып, тиңдәр үҫеп,
Айырылып китеп барабыҙ.
Эй...

242 Ағаҡайымдың иҙәне
Баҫҡан һайын ғына шығырҙай.
Ағаҡайым мине бирмәҫ ине,
Еңгәкәйем килеп шыбырҙай.
Эй...

243 Борма асҡыс, борма йоҙаҡ, —
Боролоп килеп ишек ас.
Мин китте, тип, күп илама,
Уйнап-көлөп, иркең ас.
Эй...

244 Ағаҡайым, һиңә ҡунаҡ инем,
Айырылыр сағым етте инде.
Нуҡта теймәҫ иркә ҡолон инем,
Иркә көнөм үтеп китте инде.
Эй...

Ят йорттарға барып, ят һыу эсеп,
Йөрәккәйемә инде май ҡунмаҫ.
Ят йорттарҙа янған йөрәккәйем,
Ағаҡайым, һине онотмаҫ.
Эй...

245 «Әғүҙе» менән «бисмилла» —
Әүәлге иман башы, имеш.
Беҙҙе лә былай бойоҡторған
Бер Хоҙайҙың эше, имеш.
Эй...

246 Барҙым урман ситенә,
Туйҙым сәскә еҫенә.
Ағаҡайым, туғанҡайым,
Һин булырһың иҫемдә.
Эй...

247 Ағиҙелкәй буйын, ай, тал алған,
Тал башҡайҙары ла таралған.
Бер бөртөккәй сәсем төшмәҫ ерҙән
Ике ағайым барып мал алған.
Эй...

## 4. Апаһына

248 Апаҡайым, һиңә бик килешә,
Аҡ күлмәккәйеңде кейһәңсе.
Апаҡайым, һиңә шуға килдем,
Бер-ике пар тәгәс бирһәңсе.
Эй...

Әйҙең генә лә Әйҙең буйҙарында
Бешә лә генә микән ҡарағат.
Беҙҙе генә былай илатырға
Ҡуша ғына ла микән шәриғәт?
Эй...

## 5. Тиңдәштәренә

249 Тубылғы ла ағас ҙур булмай,
Ҡайын ғына һыуы бал булмай.
Ҡайғырма ла башым, ай, ҡайғырма,
Ҡайғы-хәсрәт йөрәккә ял булмай.
Эй...

250 Ҡарағай ғына тигән буй таҡта,
Ҡырып ҡына йыуайыҡ ҡыҙ саҡта.
Ҡилен генә булғас, йырламайҙар,
Уйнап ҡына ҡалайыҡ ҡыҙ саҡта.
Эй...

251 Ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ ҡына ҡысҡырып,
Баҫыуҙарға төшкән ҡыр ҡаҙы.
Берҙе генә йырлай, берҙе илай,
Ярлыларға төшкән бай ҡыҙы.
Эй...

252 Үҫкән саҡта мин үҫтем,
Нескә билле ҡыҙ булып.
Был хәсрәтте күргәнсе,
Ниңә аҡманым боҙ булып?!
Эй...

253 Ҡарағай ҙа таҡта, буй таҡта
Ялт-йолт итә аяҙ сыуаҡта.
Ҡыҙ балаҡайҙарға һүҙ әйтмәгеҙ,
Һығылып-һығылып илай аулаҡта.
Эй...

254 Әй буйында бер һандуғас
Өҙөп-өҙөп һайрай, таң тыуғас.

Нишләйем һуң, ҡыҙҙар, ай, нишләйем,
Атаҡайым өйөнән ҡыуғас?!
Эй...

255 Ҡара ла ҡара күренгән
Ҡара урманҡайҙың башы ул.
Тыңдаштәрем, хуш булығыҙ,
Айырылышыуҙың башы шул.
Эй...

256 Саҡырма ла, кәкүк, әй, саҡырма —
Күп саҡырһаң, һине атырмын.
Һеҙ тыңдаштәремдән айырылһам,
Ҡауырһынҡай булып ҡайтырмын.
Эй...

257 Мендем дә мәсет башына,
Ҡараным да — ауыл түңәрәк.
Ауылҡайым ҡалды, әй, бик йыраҡ,
Тыңдаштәрем ҡалды бит илап.
Эй...

### 6. Еңгәһенә

258 Атыңа бесән һал, еңгәй,
Ауыҙлыҡтарын ал, еңгәй.
Башыма ла яулыҡ япҡансы,
Татлы йәнемде ал, еңгәй.
Эй...

259 Яҙғы ла туңған йоҡа боҙҙо
Көйәнтә менән уйҙыңмы?
Еңгәкәйем, мине биреп,
Эсәк-ҡарын ашап туйҙыңмы?
Эй...

### 7. Оҙатыу бәйете [144]

260 Ваҡытым етте китергә —
Белмим ни хәл итергә.
Тоттом китап, күрҙе күҙем:
Ҡушҡан сабыр итергә.
Эй...

Ҡаҙ бәпкәһе һары икән,
Теҙелеп һыуға бара икән.
Ата йортон ташлауҙары
Бигерәк кенә зар икән.
Эй...

Бисмилланы әйтәйек,
Алла аят итәйек.
Алла беҙгә шулай ҡушҡан,
Бәхетебеҙҙе көтәйек.
Эй...

Мәҙрәсәнең ишеге
Эскә табан асыла.
Ҡыҙ баланың ризыҡтары
Илдән илгә сәселә.
Эй...

### 8. Етем ҡыҙ сеңләүе

261 Ҡушлап-ҡушлап тағырға,
Ҡуш төймәләрем юҡ минең.
Ҡушлап та ҡушлап оҙатырға,
Үҙ ағаҡайҙарым юҡ минең.
Эй...

Таш тәрилкә беҙҙә юҡ,
Тал мәрйенкәй булып китһәсе.
Ер аҫтынан юлдар һалып,
Атаҡайым килеп китһәсе.
Эй...

Уратып та уратып ҡарҙар яуа,
Уйһыу еркәйҙәрҙе түбә итеп.
Минең атаҡайым ята микән,
Уйһыу еркәйҙәрҙе түбә итеп?*
Эй...

Ишеккәйем алды ҡом таҡыр,
Табыпҡай ҙа алдым бер баҡыр.
Диуанаҡай булып ултырғанда,
Кем өйрәтер икән бер аҡыл?!
Эй...

Ишеккәйемде асып ҡараһам,
Аҡ таҫтамалҡайым сөйҙә юҡ.
«Атаҡайым ҡайҙа?» — тип һораһам,
Әхирәттә, тиҙәр, бында юҡ.
Эй...

Аҡ мәсеткәй һалдым дин өсөн,
Буятыпҡай ҡуйҙым дан өсөн.
Ғәзиз генә башым китеп бара,
Етешмәгән донъя малы өсөн.
Эй...

262 Алып та һалып йәйергә
Үҙ түшәккәйем юҡ минең.
Һағынған һайын килергә
Үҙ инәкәйем юҡ минең.
Эй...

263 Ике генә кәкүк тиң ҡысҡыра
Йәшел генә япраҡ аҫтында.
Мин иламай ғына кем илаһын,
Атаҡайым тупраҡ аҫтында.
Эй...

**9. Ҡыҙҙың барыһы менән дә хушлашыуы**

264 Сапсаҡ та сапсаҡ аҡ борсаҡ,
Ағасайым бармай, башламам.
Ағасайым биргән һумлыҡты,
Биҙәккәйе бөтмәй, ташламам.
Эй...

265 Минән генә ҡалған ҡашуҡаны *
Иркәләремә (гөркәләремә) тағығыҙ.
Минән генә ҡалған ҡыҙ иркәмде
Ун һигеҙгә тиклем тотоғоҙ.
Эй...

266 Сөйҙә лә торған көмөш алҡа,
Көмөшкәйен түкмәй, тағығыҙ.
Минән ҡалған инәкәйемде,
Күҙ йәштәрен түкмәй, бағығыҙ.
Эй...

267 Туғайҙарҙа осҡан турғайҙы
Ебәк менән бәйләп тотоғоҙ.
Минең әйтеп киткән һүҙемде
Васыят ҡына итеп тотоғоҙ.
Эй...

268 Ҡулымдағы балдағымды
Бер һалам да бер кейәм.
Илемдән китәһем килмәй,
Ҡыйын булһа ла китәм.
Эй...

269 Ҡытат ҡына елән, ҡыҫма бил,
Ҡайһы оҫталар бескән һорауһыҙ?!
Аяҡтарым сыҡһа, билем ҡороша,
Һис бер сығып булмай һорауһыҙ.
Эй...

270 Саҡыра ла кәкүк саҡыра
Ҡаршы ла ғына тауҙың башында.
Һағындырмағыҙ, һарғайтмағыҙ,
Саҡырығыҙ кәкүк айында.
Эй...

271 Етен генә һиптем елдәргә,
Осоп ҡына китте диңгеҙгә.
Ебәрҙегеҙ мине сит ерҙәргә,
Мәңге бәхил түгел мин һеҙгә.
Эй...

272 Аҡҡан һыуҙар кире аҡмаҫтыр,
Юнышҡылар унда батмаҫтыр.
Бәхил булығыҙ ҙа, дуҫтарым,
Башҡынайым кире ҡайтмаҫтыр.
Эй...

273 Әғүҙе лә менән, ай, бисмилла,
Иман башҡайҙары шул микән?
Ауыл ҡарттарынан фатиха алып,
Китеп барыуҙарым шул микән?
Эй...

274 Аҡ ҡуянҡайҙарҙы аттығыҙ,
Аҡбуҙ атҡайҙарға таҡтығыҙ.
Яңғыҙ тамағығыҙ туйҙыра алмай,
Донъя малҡайына һаттығыҙ.
Эй...

275 Сәхрәләргә сығып барғанымда,
Табып ҡына алдым таш ҡомған.
Минең генә күргән хәсрәтемә
Әйләнсек тә булды башҡынам.
Эй...

276 Сәс ишә торған сәс бауым
Сәс төпкәйенә лә етһәсе.
Оҙата ла барыр иптәштәрем
Тау итәгенә лә етһәсе.
Эй...

Атай, әсәй, хуш инде!

### 10. Яҡындары

Уралҡайҙы ташлағанда,
Бер ҡарарһың ҡайырылып.

Сит илдәрҙә юҡһынырһың,
Ҡитәһең бит айырылып.
Эй...
Һылыуым, Гөлғәйшә, хуш инде! [145]

Ҡ ы ҙ: Ҡулымдағы аҡыҡ йөҙөккәйҙе,
Һурып алыр еңгәмдәр.
Серҙәш булған һылыуымды
Онотмағыҙ, еңгәмдәр.
Еңгәмдәр, дуҫтарым, хуш инде!

Биҙрә генә биҙрә бөрлөгән
Инәкәйем минән тирҙергән.
Ҡилгән дә ҡоҙа кире ҡайтыр ине,
Димселәр шул димләп бирҙергән.
Эй...

277 Бөркәнсегемдең эргәһен
Тегер генә инем, энәм юҡ.
Булъялда көнөм тулды инде,
Үләр генә инем, әмәл юҡ.
Эй...

278 Ҡарағат йыйҙым, ҡаҡ ҡойҙом
Ят йәйләүҙәргә буләккә.
Иртә лә торҙом, бил быуҙым,
Ят йәйләүкәйҙәргә китмәккә.
Эй...

### 11. Туғандарына

279 Сапсаҡ-сапсаҡ аҡ борсаҡ,
Бөтмәҫтәй итеп күрҙегеҙ.
Ҡаҡтығыҙ ҙа мине, ай, һуҡтығыҙ,
Китмәҫтәй итеп күрҙегеҙ.
Эй...

280 Ишеккәйем алды ҡара ҡом,
Сыбар ғына ала тай тора.
Тай тигәнкәйҙәрем ат булды,
Бар туғанҡайҙарым ят булды.
Эй...

281 Ағайымдың бишмәтен
Мин килмәйенсә киҫмәгеҙ.
Мин бәйләгән ебемде
Серемәйенсә сисмәгеҙ.
Эй...

282 Ҡил, туғанҡайым, ҡаршыма,
Таянайым яурын башыңа.
Яурын башым да талды инде
Бәхил дә булып ҡал инде.
Эй...

283 Ай, яландыр, яландыр,
Яланда үҫкән баландыр.
Бир, әбекәй, фатиханды,
Үҙ ҡулыңда үҫкән баландыр.
Эй...

284 Мендем дә бейек тауҙарға,
Ҡараным ауылдарға, инәкәй.
Теләгән дә теләккәйҙәрем,
Осто ел-дауылдарға, атаҡай.
Эй...

285 Төптөр ҙә төптөр төп ауыл —
Өҙөп тә бара ел-дауыл.
Илдән дә китеү бик ауыр,
Өҙөлөп тә бара эс-бауыр.
Эй...

### 12. Ағаһы ҡыҙға

286 Ҡәрендәшем, китәһең сит яҡҡа,
Тамағыңа үтмәҫ аштарың.
Йылан телле уҫал ҡәйнәң
Ашар инде һинең баштарың.
Эй...

Саҡырма ла, кәкүк, ҡаршымда,
Саҡырһаң да, атып алырмын.
Һин һағынһаң (ҡәрендәш) ни эшләрһең?
Мин һағынһам, саҡырып алырмын.
Эй...

Бейек тауҙың башында
Самауыр ҡайнар ел менән.
Илама, туған, илама,
Бер һиндә түгел, ил менән.
Эй...

### 13. Тиңдәштәре

Анау тауҙа ла йыуа юҡ,
Бынау тауҙа ла йыуа юҡ,

Илама, тиңдәш, илама,
Алып ҡала торған йола юҡ.
Эй...

287 Баҡырма ла, быҙау, баҡырма,
Инәйеңде имерһең.
Илама ла, тиңдәш, илама,
Йыл тәүлеккәйенә килерһең.
Эй...

### Кейәү яғын әрләп сеңләү

#### 1. Кейәүгә

288 Туң, туң тумыртҡа,
Туң ағаста нимәң бар?
Һаҡалыңа сал кергәс,
Йәш ҡыҙҙарҙа нимәң бар?
Эй...

289 Сейәһе сейә икән дә,
Һабағы нәҙек икән дә.
Кейәүе кейәү икән дә,
Аяғы ҡамыт икән дә.
Эй...

290 Өҫтөндәге бишмәтеңде
Өлгө һалып бестеңме?
Һалбыр ауыҙ, һумтыҡ баш,
Баҙ аҫтында үҫтеңме?
Эй...

291 Ҡуршелә лә эт өрә,
Үҙебеҙҙә лә эт өрә.
Шунда ла торған кейәүҙең
Салбары тишек, ел өрә.
Эй...

#### 2. Ҡәйнәгә, ҡайныға

292 Ҡоҙағыйҙың ҡашмауында
Буй-буй төшкән нескә еп.
Шунда торған ҡоҙағыйҙың
Танауы тора кәксәйеп.
Эй...

293 Ҡарғаһы килгән ҡаңғылдап,
Ҡоҙғоно килгән ҡаңҡылдап.

Бүтәне килгән етмәгән,
Атаһы килгән оңҡолдап.
Эй...

294 Аръяҡта ла ҡомалаҡ,
Биръяҡта ла ҡомалаҡ.
Беҙгә килгән ҡоҙалар
Ҡап-ҡаранан тумалаҡ.
Эй...

**Урамда барғанда сеңләү**

295 Ағас та башын яңғыратҡан
Ниндәй ҙә кәкүк балаһы.
Ауыл да араһын яңғыратҡан
Ҡемдең дә ғәзиз балаһы?

296 Урамдан үтә сығайыҡ,
Йәшел дә ебәк һуҙайыҡ.
Йәшел ебәк, йәш йөрәк
Иламай ҙа нисек түҙәйек?

Ағын ғына һыуҙар — эй, һалҡын һыу,
Аҡҡош ҡанатҡайы түҙерме?
Сең әйтепкәй ҡыҙҙы оҙаталар,
Ҡем балаһы кемгә ҡәҙерле?

297 Йүгереп йөрөп ҡарағаттар йыйҙым,
Нәҙек кенә билем талдырып.
Ауылдаштарым ҡарап ҡала,
Ҡарағаттай күҙен талдырып.

298 Әй, шау ҡамыш, шау ҡамыш,
Шау ҡамыштан сыға бер тауыш.
Билен дә быуып, илен ташлап,
Ҡитеп тә бара был байғош.

299 Сауыл араларын яңғыратҡан
Ниндәй ҙә ҡоштоң тауышы?
Ауыл араларын яңғыратҡан
Ҡемдең дә ауыр һағышы?!

300 Аҡыҡ ҡына аҡыҡ йөҙөгөмдө
Һандыҡ төпкәйенә һалығыҙ.
Туған илдән китеүҙәре ауыр,
Ҡөйҙәремде тыңлап ҡалығыҙ.

## ҠЫҘ КЕЙЕНДЕРЕҮ. БИЛ БЫУЫУ

### 1. Еңгәләре

301 Ҡәйнә, ҡайны йортонда
Шаршау булыр ул өйөң.
Ҡыҙ сағыңда йылмайып ҡал,
Һарғайыр әле йөҙөң.

Ата-инәң йортонда
Һинең ҡолонсаҡ сағың.
Ҡашмауыңды кейерһең,
Килен булып йөрөрһөң.

302 Ата-әсәң үҫтерҙе,
Аҡыл, белем өйрәтте.
Килен булып барырһың,
Шул аҡылды тоторһоң.

Инде беҙҙән китерһең,
Үҙең донъя көтөрһөң.
Ҡайны менән ҡәйнәңә,
Ҡәҙер-хөрмәт итерһең.

Кейәү менән татыу бул,
Мөхәббәтле ҡатын бул.
Ата-әсәң хаҡы кеүек,
Ирендең дә хаҡын бел.
Тыңла әйткән һүҙемде,
Ныҡ йәшермә күҙеңде.

Һайыҫҡандан һаҡ бул,
Йомортҡанан аҡ бул.
Ғәйептәрҙән йыраҡ бул!
Ағын һыуҙан тоноҡ бул!

### 2. Әсәһе

303 Сәйең мәтрүшкә булмаһын,
Сынаяғың көрөшкә булмаһын.
Икмәгең сөсө булмаһын,
Ашың тоҙло булмаһын.
Йылан телле булма,
Ҡаты күңелле булма.

### 2. Бил быуыусы еңгәй

304 Ҡабағандан ҡаптырма,
Төйләгәндән типтермә,

Сәсәндәрҙән алдырма,
Үҙ эшенде ҡалдырма.
Бер ҡулың майҙа булһын,
Бер ҡулың балда булһын.
Алдыңа аҡ көн тыуһын,
Артыңа аҡ мал тулһын.
Ҡәйнәң менән татыу бул,
Ҡейәүең менән ҡуштан бул.
Дошманыңдан һаҡ бул,
Тоноҡ һыуҙан пак бул!
Хәҙер һин кеше кешеһе:
Башың ярылһа — яулыҡ эсендә,
Ҡабырғаң һынһа — елән эсендә,
Ҡулың һынһа — ең эсендә.

305 Бил, бил биләйем,
Ҡотҡайыңды биләйем.
Байлығыңды бирәйем,
Бергә ҡушып бәйләйем.
Билкәйеңде биҙәйем,
Бил тиңенте биләйем,
Аҡ һүҙемде теҙәйем,
Пак һүҙемде теҙәйем.
Ҡырын һүҙ ҡырға китһен,
Ҡара күҙ һулға китһен.
Бил, бил биләйем,
Ҡотҡайыңды бәйләйем.

306 Атылған йондоҙҙай, юҡ булһын!

307 Башы-аҙағы ошо булһын,
Ырыу йөҙөн ҡыҙартмаһын!

308 Ҡайны-ҡәйнәңә ҡәҙер ит,
Иреңә хеҙмәт ит!

### 4. Әсәһе

309 Селтәреңдең тояҡтарын *, балаҡай,
Ҡойоп ергә түшәмә.
Төҫөң боҙоп, теш ыржайтып, балаҡай,
Йәмәғәтеңдә үртәмә.
Һағынғанда, тау саҡыр, балаҡай,
Һарғайғанда, һыу саҡыр, балаҡай.

### 5. Ҡәйнә
(ҡыҙҙың билен быуып)

310 Билең һығып быуайым,
Беҙҙең яҡҡа ашайым *:

Елдән етеҙ бул,
Ҡесе бәйелле бул,
Ҡоттан ҡотло бул,
Уңдан уллы бул;
Иңемдән уй төшһөн,
Ҡулымдан эш төшһөн!

### 6. Билен быуған еңгәләргә ҡыҙҙың әйткәне

311 Ҡулға ла кейһәм — йөҙөк мин,
Һыуға ла төшһәм — һөлөк мин
Йыуасаларҙан ыуаҡ мин,
Еңгәләр, һеҙгә ҡунаҡ мин.

Бәйләмә, еңгә, билемде,
Билғауың билемә бата ла.
Илама, еңгә, илама,
Әйткән дә һүҙең ята ла.

## ҠЫҘ ОҘАТЫУ ЯР-ЯРЫ

### 1. Әхирәттәр

312 Сәсмәүемдең * сәсәге * ишмә булыр, яр-яр,
Күҙҙәремдең йәштәре шишмә булыр, яр-яр.

Аҡ сепрәккә төргәнең аҡыҡмы ни, яр-яр?
Күк сепрәккә төргәнең күк ташмы ни, яр-яр?

Ҡилер-ҡайтыр юлыца киндер сәстем, яр-яр,
Ҡиндер етән * булғансы, килһен бутам *, яр-яр.

Ҡара һыйыр мөгөҙөн айырмағыҙ, яр-яр,
Атаһынан, инәһенән айырмағыҙ, яр-яр.

Ағын һыуға аҡ ҡойһаң, ағып китер, яр-яр,
Ят кешегә бала бирһәң, алып китер, яр-яр.

Өс түшәкте бергә һалың, аҙ булмаһын, яр-яр
Асып ҡараң кейәүҙе — таҙ булмаһын, яр-яр.

### 2. Ҡыҙ

313 Бер әсәнән тыуып, бергә үҫкән,
Ҡайҙа һуң минең ағайым?
Илама ла илама, ай, тиһегеҙ,
Ят өйҙәргә нисек ярайым?

### 9. Егет

Инде аттар егелгән,
Хушлашырға ваҡыт, яр-яр.
Илде һағыныуың баҫылыр,
Ҡитергә лә ваҡыт, яр-яр.

Илкәйеңә теләгең(де) әйт,
Иҫән булһын тирмәң, яр-яр.
Тыуған еркәйеңә тәжем ҡыл *,
Бәхиллегем тирһең, яр-яр.

## АТҠА УЛТЫРЫР САҠТА ҠЫҘҘЫҢ ӘЙТКӘНЕ

### 1. Әсәһенә

314 Француз яулыҡ биҙәккәй,
Ябынмайым, инәкәй.
Ят кешенең арбаһына
Ултырмайым, инәкәй.

315 Инәкәй, мине ник таптың?
Туҙ бишеккә бинәп, ник баҡтың?
Инәкәй, мине йәшләй генә биреп,
Йәш йөрәккәйемә ут яҡтың.

316 Суҡлы ғына ситле яулығымды
Бөгәр генә инем — әмәл юҡ.
Ҡил, әсәкәйем, бир ҡулыңды.
Атлар ғына инем — хәлем юҡ,

317 Бейек кенә бейек баҫҡысҡа
Менә генә алмаҫһың, инәкәй.
Аҡ таҫтарың керекте иһә,
Йыуа алмаҫһың, инәкәй.

### 2. Ағаһына

318 Сылтыр ҙа сылтыр ат еккәндә,
Талмаймы, ағасай, беләккәйең?
Саналарға илтеп ултыртҡанда
Янмаймы, ағасай, йөрәккәйең?

### 3. Барыһына

Ултырҙым да көймә түрҙәренә,
Ҡөймә төптәрендә ҡара юҡ.
Бәхил дә булығыҙ, туғандар,
Хоҙай ғына ҡушҡас, сара юҡ.

# ҠИЛЕН ТӨШӨРӨҮ

## БИТ АСЫУ

### 1. Ҡәйнә

319 Бүҙәнә бул, бүлле бул,
Бүҙәнәнән түлле бул,
Ҡарсығанан ҡаҡ бул,
Һайыҫҡандан һаҡ бул.
Теймәгәнгә теймә,
Тейгәнде тиген *ҡуйма.
Олторағың ялпылдап,
Урам аша йөрөмә.
Ауыҙ-мороноң остаңлап,
Ошаҡ һалып йөрөмә.
Аҡ сәсле, һары тешле бул,
Бәхетле, тәүфиҡлы бул!

320 Тибәгәндән типтермә,
Ҡабағанға ҡаптырма.
Алдыңды-артыңды б...ҡ баҫһын,
Алдыңды-һыртыңды сөрөк * баҫһын!

321 Ҡилен килде күрегеҙ,
Күрмәлеген бирегеҙ!
Ҡилен битен асабыҙ,
Өлөшөн әйтеп инегеҙ!
Битең асам, бисмилла!
Әүхәлеңде әйт, килен.
Ҡәйнә буҫағаһынан
Уң аяҡтап ин, килен!

Ҡәйнәң ҡушҡан йомошто
Ташлап ҡасма, киленсәк.
Иреңә ҡаршы һүҙ әйтеп,
Ауыҙ асма, киленсәк.

Өлкәндәргә ҡайҙа ла
Хөрмәт күрһәт, киленсәк.
Ҡеселәргә ҡайҙа ла
Үрнәк күрһәт, киленсәк.

322 Түлле, түлле, түлле бул,
Бүҙәнә кеүек түлле бул.
Иренмәһәң, игеҙ тап,
Йыбанмаһаң, йыл да тап!

323 Ҡолон-ҡолон ҡолонсаҡ,
Инде булдың киленсәк.

Минең кеүек зирәк бул,
Минең кеүек һирәк бул.
Тумырғаның май булһын,
Тулғатҡаның ул булһын!

Ҡилен, килен, киленсәк,
Алғы төйөн-төйөнсәк.
Ауыҙ-мороноң сүсәңләп,
Һүҙ йөрөтмә, киленсәк.
Итәк-еңең шапылдап,
Ауылсы булма, киленсәк.
Ауыҙ-мороноң сапылдап,
Ошаҡсы булма, киленсәк.
Апһындарға бирешмә,
Ҡәйнәң менән ирешмә!

324 Теймәгәнгә теймә,
Тейгәнде тиген * ҡуйма.

325 Уйпат-уйпат ерҙәрҙә
Тибен тибә ҡолонсаҡ.
Итәк-еңен һыҙғанып,
Бейә һауа киленсәк...
Дөмбөрҙәтеп ҡымыҙ бешә
Киленсәктең уңғаны.
«Ҡымыҙ юҡ», — тип, яуап бирә
Киленсәктең туңғаны (ялҡауы)

326 Ирең ҡушҡан һәр эште
Еренә еткер, киленсәк,
Иреңә ҡаршы һүҙ әйтергә
Ҡыя күрмә, киленсәк.

Ололарға кире әйтеп,
Тауыш ҡатма, киленсәк.
Ҡеше һыйыр һауғанда
Йоҡлап ятма, киленсәк.

Һыуға барған ереңдә
Һуҙылып торма, киленсәк.
Өйөң бикләп, урам буйлап,
Ғәйбәт һатма, киленсәк.

Ҡил, кил, киленсәк,
Ҡотло юлдан йөрөмсәк,
Уңыш менән бәхет көҫәп,
Уң аяҡтан керемсәк.
Ин, ин, киленсәк,
Инселеккә * ҡолонсаҡ!

327 Күршең менән татыу бул,
Һөйләшергә батыр бул.
Ирең өйҙә юғында
Ҡыҙҙар алып ятыр бул!
Эшһеҙ ғүмер уҙҙырма,
Ир тапҡанды туҙҙырма,
Үҙең дә ит хәрәкәт,
Шунда килер бәрәкәт.
Ошо һиңә теләгем,
Минең изге бүләгем,
Оҙон ғүмер, аҡ бәхет
Бирһен һиңә Хоҙайым!

328 Әйтер һүҙем шул минең:
Ҡотоң менән кил, килен.
Еңел булһын аяғың, —
Ел урынына ел, килен.

Мөлкәт килһен, күрәлеп,
Уңыңдан да һулыңдан.
Алтын-көмөш сылтырап,
Тамып торһон ҡулыңдан.
Хәләлеңә ғәҙел бул,
Ни әйтһә лә, әҙер бул.
Кеселәрҙән оло бул,
Ололарҙың ҡоло бул.
Күрше хаҡы — Тәңре хаҡы,
Унһыҙ усаҡ үрләтмә.
Ҡәйнә — килен тупрағы,
Тупрағыңды хөрмәтлә!

## 2. Оло килен

329 Килен, килен, киленсәк,
Әсәңдә һин ҡолонсаҡ,
Ҡәйнәңдә һин уйынсаҡ.
Ҡайныңды ла ҡәҙер ит,
Ҡәйнәңде лә ҡәҙер ит.
Ирең йоҡонан тороуға
Тәмле ашың әҙер ит.

330 Итәгең-башың елберҙәп,
Ауылсы булма, киленсәк.
Яулыҡ осона сәй бәйләп,
Хәйерсе булма, киленсәк.

Еп кеүек сираҡ бул,
Минең кеүек тираҡ * бул!

Яман эштән йыраҡ бул,
Ҡушағаңа терәк бул!
Тыйнаҡтан да тыйнаҡ бул,
Йыйнаҡтан да йыйнаҡ бул.

331 Битең асам, бисмилла,
Әхүәлеңде әйт, килен.
Бой(о)роҡ мән * килең был йортҡа,
Өйҙәге уйыңдан ҡайт, килен.
Тоноҡ һыуҙай таҙа бул,
Яҡшы юлды тап, килен,
Буйыңды керһеҙ, таҙа ҡыл,
Йомортҡалай аҡ килен.
Яман юлдан йыраҡ бул
Һайыҫҡандай һаҡ килен.
Күңелең менән хеҙмәт ит,
Ҡайны-ҡәйнәң баҡ, килен.
Килен килде, күрегеҙ,
Күрмәлеген бирегеҙ.
Бирәм, тип, бушҡа йыуатмай,
Атын әйтеп ҡуйығыҙ!

### 3. Ҡәйнә

332 Урынһыҙға һүҙ ҡатып,
Гонаһҡа батма, киленсәк.
Байыңдан борон түшәккә
Барып ятма, киленсәк.
Өй буйынса ҡыҙырып,
Ошаҡ һатма, киленсәк.
Дөрөҫ һүҙҙе үҙгәртеп,
Ялған әйтмә, киленсәк.
Ҡайны-ҡәйнәң әйткәндә,
Була күрмә иренсәк.
Бәйләп ҡуйған малыңдың
Башына һуҡма, киленсәк.
Мал ҡәҙерен күп уйла,
Бөгөн килгән киленсәк.
Ысын нәсихәт әйтәмен,
Бөгөн килгән киленсәк.
Килен килде, күрегеҙ:
Күрмәлеген бирегеҙ.
Бирә торған малығыҙҙың
Төҫөн әйтеп бирегеҙ!

### 4. Ҡәйенбикәләр

333 Далалағы һыйырға
Һау-һаулама *, киленсәк.

Ҡалын тауышың сығарып,
Ҡау-ҡаулама *, киленсәк.
Ҡаптың ауыҙы буштыр тип,
Ҡорот урлама, киленсәк.
Үҙең ятып, иреңде
Тор-торлама, киленсәк.
Инәйем өйҙә юҡ икән, тип,
Түргә сыҡма, киленсәк.
Ярауһыҙ ятҡан ҡораманы
Муҡсаңа тыҡма, киленсәк!

334 Ҡотло булһын баҫыуың,
Тупрағыңды баҡ, килен!
Әүәлеңдән ҡайт, килен,
Таштай, ҡомдай ҡал, килен.

**5. Оло килен**

335 Ҡушағаңа ҡушылып,
Ҡушаҡлы бул, киленсәк.
Аҡ ебәктәй ишелеп,
Уңышлы бул, киленсәк.
Олторағың һәлберәп,
Ауылсы булма, киленсәк.
Ҡарт ҡәйнәңә алаңлап,
Яусыл булма, киленсәк.
Күренгәнгә екерәңләп,
Даусыл булма, киленсәк.
Ауыҙың-башың остаңлап,
Һүҙсән булма, киленсәк.
Апһын менән талашып,
Сүмес алма киленсәк.
Һыйыр һаумай, күп йоҡлап,
Һуңға ҡалма, киленсәк.
Ҡабағандан ҡаптырма,
Тибәгәндән типтермә.
Баһымсаҡҡа — баҡа айғыр
Маңлайыңдан сирттермә.

Һәперә булма, уяу бул,
Артыңа «шап» типтермә.

**6. Ҡайны һүҙе**

336 Бейек тауҙа күкләгән,
Ҡарсығалай, балам, бул.
Ыласындай, уяу бул.
Ҡыйғыр ҡоштай, аяу бул.

Ғолпар аттай юшаған,
Ҡанаттарың йәйелһен.
Ауылыңдың эсендә
Ырыуың бергә булһын.

Ҡола йылҡың ҡолонлап,
Ҡола яландар тулһын.
Ала йылҡың ҡолонлап,
Ала яландар тулһын.

Ҡаҙаның аҫмаҡҡа булһын,
Һыйырың башмаҡҡа булһын
Килер ҡунағың бөтмәһен,
Бәхетең ситкә китмәһен.

337 Өйөр-өйөр йылҡыларың
Яландарҙы тултырһын.
Ырыу-ырыу балаларың
Ауыл-ауыл ултырһын.

Әйҙә, килен, төш әйҙә,
Беҙҙең йорттоң эсенә.
Аҡ кейеҙҙәр түшәрбеҙ
Һинең баҫҡан эҙеңә.

Иртән өйҙөң түрендә
Йоҡлап ятма, киленсәк.
Һағыҙ сәйнәп, урамда
Ғәйбәт һатма, киленсәк.

Ҡәйнәң ҡушҡан йомошто
Ташлап ҡасма, киленсәк.
Ирең менән ирешеп,
Яу ҡуптарма, киленсәк.

338 Тулғатҡаның ул булһын,
Тумырғаның мул булһын.
Кимергәнең май булһын,
Ҡәртәң тулы мал булһын!

339 Ағай-эне килгәндә,
Яҡты йөҙөң ялтырат.
Тиҙерәк самауыр тотоп,
Һоҫҡо-сипсың шалтырат.

Килен, килен, киленсәк,
Үпкәләмә, киленсәк.
Был йоланы әйтмәҫ инек,
Боронғонан килгәнсәк!

## Ҡыҙ ҡаршылау яр-яры

Ҡыҙҙар: Бәйғәмбәрҙең бер ҡыҙын,
340 Ғәли * алған, яр-яр!
Ҡыҙ алыу, ҡыҙ бирешеү
Шунан ҡалған, яр-яр!

Йософ менән Зөләйха
Йәр инеләр, яр-яр!
Бер-берейен күрмәгә
Зар инеләр, яр-яр!

Төштә күреп Йософто,
Ғашиҡ Зөләйха, яр-яр!
Ғишыҡ тотоп, ҡауышыу
Шунан ҡалған, яр-яр!

Таһир менән Зөһрәләй
Тоғро булың, яр-яр!
Йәнең фиҙа ҡылырға
Әҙер тороң, яр-яр!

Ҡотло булһын туйығыҙ,
Ҡыуанығыҙ, яр-яр!
Йылы булһын өйөгөҙ,
Йылыныгыҙ, яр-яр!

Бына тигән һылыуҙарҙың
Һылыуы һин, яр-яр!
Әхирәттәрең араһында
Бер йондоҙһоң, яр-яр!
Ҡәләш булыр егетеңә
Ҡәҙерлеһең, яр-яр!

Ҡотло күңелең менән кил,
Киленебеҙ, яр-яр!
Төклө аяғың менән ин,
Киленебеҙ, яр-яр!

341 Әлхәм сүрә Ҡөрьәндең башындалыр, яр-яр!
Бәйғәмбәрҙәр Алланың ҡашындалыр, яр-яр!
Берең — мәрүәр *, берең — мәрйен, теҙелешеп, яр-яр!
Берең — хандыр, берең — ханса, йәр булығыҙ, яр-яр!
Берең — алтын, берең — көмөш, түш булығыҙ, яр-яр!
Берең — гөлдөр, берең — йофар *, хуш булығыҙ, яр-яр!
Берең — айҙыр, берең — көндөр, ҡайырылмағыҙ, яр-яр!
Заман ахры булғансы айырылмағыҙ, яр-яр!
Берең — гәүһәр, берең — яҡут, йәрәшептер, яр-яр!

Береҫ — тутыйҙ, береҫ — былбыл, һайрашыптыр, яр-яр!
Береҫ — хур ҡыҙ, береҫ — нур ҡыҙ, тиҫ тороғоҙ, яр-яр!
Ахры замандар булғансы бер булығыҙ, яр-яр!
Яр-яр әйтмәк боронғо өлгөбөҙҙөр, яр-яр!
Изге ниәттә беҙҙәрҙе лә онотмағыҙ, яр-яр!

**Килен ҡаршылаусыларҙың күмәкләп әйткәне**

342 Төклө аяғың менән,
Майлы ҡулың менән,
Яҡты йөҙөң менән,
Шифалы ямғыр кеүек һүҙең менән,
Ихлас күңелең менән
Түрҙән уҙ!

343 Тәүфиҡлы бул!
Шәфҡәтле бул!
Мөхәббәтле бул!
Ир рәхәтенә кинән —
Түл көтәбеҙ һинән!

**Һыуға башлау**

Ҡ ы ҙ ҙ а р: Иртәнсәккәй тороп, китеп барҙым
344 Һыҙылып ҡына ятҡан юл менән.
Һыуҙарға ла барып, һыуҙар алдым,
Етмеш ике төрлө уй менән.

Һаҡмар ғына һыуы тулды инде,
Күҙкәйҙәрем йәшкә тулды инде.
Ҡара ғына ҡашым, зифа буйым,
Йән һөймәҫ тә йәргә булды инде.

345 Иртәнсәккәй тороп һыуға барҙым,
Һыу һалҡынын йәнем һөйгәнгә.
Ап-аҡ ҡына йөҙөм ҡара булды,
Күпте уйлап ҡаты көйгәнгә.

Иртәнсәккәй тороп, һыуға барһам,
Һыуға барған юлым урғылды.
Эскенәйем боша, йөрәгем яна,
Тауыштарым шуға тарғылды *.

346 Юлыҡайы йәшәһен,
Юлыҡайы йәшәһен, —
Теләк теләйбеҙ.
Яусыларҙың теләген,
Яусыларҙың теләген, теләген [146]
Моңлап теләйбеҙ.
Һайлап алған Шоңҡарың,
Һөйөп менгән толпарың

Ҡайҙан тапҡанһың?
Аҡ сәскәләй бөрөләнеп,
Күк сәскәләй нурланып, нурланып,
Сәскә атҡанһың.
Ҡабул булды теләктәр,
Ҡушылды йәш йөрәктәр
Сәскә ташлайбыҙ.
Яңы килгән киленгә,
Бигерәк матур киленгә һыу юлын
Бөгөн башлайбыҙ.
Ҡашмау-сәсмәү һалдырып,
Уҡа-елән кейҙереп, кейҙереп,
Килен ҡотлайбыҙ!

**Һыу һатыу** [147]

347 Ҡыҙыбыҙ еләк кеүек,
Һыуыбыҙ көмөш кеүек.
Ниңә бүләк йәлләйһегеҙ,
Һаран бажалар кеүек?

Ҡоҙа булып килгәнһегеҙ
Ҡайҙа һеҙҙең атығыҙ?
Һыу алырға килгәнһегеҙ,
Ҡайҙа һеҙҙең яртығыҙ?

348 Рәхмәт, ҡоҙа, нығ һыйланың
Беҙ (е) рәңә — бер баҡыр.
Димдең һыуынан да артыҡ
Тәмлерәк һыуҙар юҡтыр!

Рәхмәт, ҡоҙа, һыуың тәмле —
Силәгеңә бер көмөш.
Ҡунаҡҡа килерһең миңә,
Сығарам һиңә өлөш.

**Килен һөйөү**

349 Килен килде, — күрегеҙ,
Күрмәлеген * бирегеҙ.
Килен битен асайыҡ,
Өлөшөн әйтеп инегеҙ.

Өлкәндәргә ҡайҙа ла
Хөрмәт күрһәт, киленсәк.
Кеселәргә ҡайҙа ла
Үрнәк күрһәт, киленсәк.

350 Ирең ҡушҡан һәр эште,
Еренә еткер, киленсәк.

Ирендə ҡаршы һүҙ әйтергә
Ҡыя күрмә, киленсәк.

351 Ҡил, кил, киленсәк,
Ҡотло юлдан йөрөмсәк,
Уңыш менән бәхет көсәп,
Уң аяҡтан килемсәк.

352 Ҡил, кил, киленсәк.
Хәйерлегә киленсәк.
Бәхетле көнгә киленсәк,
Балдай яғыл,
Майҙай һең!

353 Эй, бүлле бул, бүлле бул,
Бүҙәнәләй түлле бул!
Алдың-артың мал булһын,
Тулғатҡаның ул булһын.
Ай ҙа тап, көн дә тап,
Йыбанмаһаң, көн дә тап!
Иртән һуҙылып ятма,
Ҡушағанды уятма,
Ҡешеләрҙән кәм булма,
Күршең менән мал бүлмә,
Ололарҙан хур булма!
Ҡесене кесе тиң,
Олоно оло тиң!

354 Ҡотло аяғың менән,
Еңел тояғың менән!
Тигеҙ ғүмер итһен,
Алты ҡыҙлы булһын,
Ете уллы булһын;
Ҡушағалар ҡушылып,
Билдәрен бөкөрәйтеп,
Күҙҙәрен секерәйтеп,
Имәндәй ҡартайып,
Ҡайындай мыртайып,
Бергә-бергә ҡартайһындар,
Тигеҙ ғүмер итһендәр!

**Килендәштәр теләге**

355 Аллы бул, гөллө бул,
Ҡуян кеүек, түлле бул;
Һүҙсән булма, киленсәк,
Күҙсән булма, киленсәк;
Беҙҙең кеүек уңған бул,
Ҡушағанды хөрмәт ит,
Ҡайны-ҡәйнәңә хеҙмәт ит;

Ҡушаған менән ҡуш ҡартай,
Тулғатҡаныңдан игелек күр,
Юлыңда йүгереп йөр!

**Ҡәйнә теләге**

356 Бәхетле бул,
Миңә һөйөклө бул,
Юлдарың аҡ булһын,
Балаларың күп булһын,
Малдарың ишәйһен,
Уң аяҡтан кил,
Еңел аяҡтан кил,
Ырыҫың менән кил,
Һөйөнһөн бөтә ил!



## АҢЛАТМАЛАР

Аңлатмаларҙа йыйынтыҡҡа ингән йола фольклоры үрнәктәренең сығанаҡтары, информаторҙар һәм яҙып алыусылар күрһәткесе, шул мәғлүмәттәрҙең дөйөм күрһәткесе, иҫкәрмәләр һәм һүҙлек бирелә.

1. «Иҫкәрмәләр»ҙең беренсе бүлеге — төрлө йолалар, икенсеһе туй йолаһы буйынса төҙөлдө.

2. «Сығанаҡтар күрһәткесе» баҫма һәм ҡулъяҙма сығанаҡтарҙы үҙ эсенә ала. Баҫма сығанаҡ хаҡындағы мәғлүмәттәр аҙағынан — нөктә һәм һыҙыҡ, ҡулъяҙма сығанағы тураһындағыһынан һуң — ике нөктә ҡуйылды. Артабан сығанаҡтың йә датаһы, йә биттәре, йә рәт һаны (№), ә ҡыя һыҙыҡ артынса йә тасуирламаның, йә поэтик тексың, йә икеһенең бергә (туй поэзияһы өлөшөндә — куплеттарҙың) томдағы урыны күрһәтелде.

3. «Информаторҙар һәм яҙып алыусы күрһәткесе»ндә тәүҙә информатор, унан йәйә эсендә уның тыуған йылы, йәшәгән (йә яҙҙырған) урыны, йәйә тышында (һыҙыҡ аша) яҙып алыу ваҡыты, яҙып алыусыһы һәм текстарҙың (тасуирламаларҙың) йә куплеттарҙың рәт һаны теркәлде.

4. Йолаларҙың тасуирламаһы төрлө сығанаҡтарҙан алынған текстарҙан төҙөлгән осраҡтарҙа сығанаҡтар һәм башҡарыусылар күрһәткестәрендә бер үк һан төрлө урында ҡабатлана. Мәҫәлән, туй йолаһына йыйылма тасуирлама бирелде. Ошо юл менән был йоланың һәр төбәктә төрләнә алыусанлығын, шул уҡ ваҡытта бөтә осраҡта ла, дөйөм алғанда, уның уртаҡ структураһы, йөкмәткеһе тотороҡло ҡалырға һәләтле икәнен күрһәтергә тырышылды. Өҫтәлмә мәғлүмәттәр «Иҫкәрмәләр»ҙең II өлөшөндә күрһәтелде.

5. «Дөйөм күрһәткес»тәге 1-се бағаналағы һандар поэтик өлгө һәм тасуирламаларҙың томдағы урынын, 2-сеһендәгеләре сығанаҡтың «Сығанаҡтар күрһәткесе»ндәге, 3-сөһөндәге — информаторҙарҙың «Информаторҙар һәм яҙып алыусылар күрһәткесе»ндәге урынын аңлата.

6. Күп ҡабатланыуҙарҙан арыныу маҡсатында, туй йолаһын биҙәп, уны тулыландырып, мәғәнәлерәк итеүсе поэтик үрнәктәрҙең бер өлөшсәһе генә тасуирламаларҙа, ә иң мөһимдәре һәм күпселеге айырым урынлаштырылды.

7. Шулай уҡ был томға халыҡ ижадынан көйләп әйтелгән ҡайһы бер өлгөләрҙең ноталары бирелде. Нотаға һалыусыһы — Л. Сәлмәнова, ноталарҙы яҙыусы — рәссам Р. Рамазанов.

8. Томды төҙөгәндә түбәндәге шартлы ҡыҫҡартмалар ҡулланылды:

АЭ — Археология и этнография.

БӘФҠ ФФ — Башҡорт дәүләт университеты башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһының фольклор фонды.

Вар. — вариант.

ҒА — Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге янындағы ғилми архив.

ғәр. — ғәрәп һүҙе.

ИҠ — информаторы күрһәтелмәгән (тигәндс аңлата).

оп. — опись һәм һаҡланыу берәмеге.

рус. — рус теленән ингән һүҙ.

ТЙ — туй йолаһы.

фарсы. — фарсы теленән ингән һүҙ.

Ф. Б. — Фәнил Нафиҡ улы Баишев (1956—1993), күренекле ғәрәп теле белгесе, тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан фәндәр академияһы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре, Республиканың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты.

ФБФ — ТТӘИ-ң фольклор һәм сәнғәт бүлеге фонды.

һаҡл. б. — һаҡланыу берәмеге.

һөйл. — һөйләш йә диалект һүҙе.

## ИҪКӘРМӘЛӘР

### I

[1] Боронғоларса, һәр һөйәк билдәле магик көскә эйә булған (II, 6-сы иҫкәрмәне ҡарағыҙ).

[2] Мейес — ҡот билдәһе: мейес янына яңы тыуған быҙауҙы, бәрәсте, ҡолонҙо һалыу ҡот (түл) теләү мәғәнәһенә эйә.

[3] Айғырҙың, тәкәнең ҡайһы бер өлөштәре ритуал ашамлыҡ рәүешендә лә ҡулланылған. «Уны ғәҙәттә тик ирҙәр, малайҙар ғына өтөп ашаған. Сөнки түл йәйеүҙә ир кешенең роле өҫтөнөрәк күрелгән» (Сәғитов М. Боронғо башҡорт ҡобайырҙары, 167—168-се б.).

[4] Ни юғала, шул әйтелә.

[5] С. И. Руденко ла көньяҡ Урал башҡорттарында ҡарға бутҡаһы байрамында башлап йөрөүсе ҡатындарҙың үҙенә башҡараҡ кейенеүен, баштарына «башкейем» кейеүҙәрен билдәләй (Руденко С. И. Башкиры. — М.–Л.: Изд. АН СССР, 1955. — С. 277—278).

[6] Һәр ырыуҙың йыйыны йылдың бер мәлендә үткәрелгән. Пермь, Свердловск өлкәләрендә йәшәүсе башҡорттар араһында «Ирәкте йыйыны», «Гәрә йыйыны», «Ҡайпан йыйыны», «Ғәйнә йыйыны», «Өпәй йыйыны» тигән йыйындар үткәрелер булған (Кирәй Мәргән. Башҡорт халыҡ ижады, 37—38-се биттәр).

[7] Ҡасҡынбай — Зәки Вәлидиҙең шәриҡтәше, Алағуян башы (хәҙерге Бөрйән районы Яңы Мөсәт) ауылы имамы Шәмсетдин Ҡасҡынбайҙың улы.

[8] Башҡарыусы иҫкәрмәһе: «Уны (был йырҙы. — Төҙ.) беренсе ҡабат Ишәле ауылы (Мәсетле р-ны) Фәхретдинов Бәҙретдин ҡарттан (балалары — Ҡыям, Сәғҙи, Ғәрифйән, Мөьминә, Мөхәрләм, Саима) ишеткәйнем. Ул уны Ишәле кейәүе Йомағолов Сәйфи ағайға төрттөрөп йырлағайны. Һуңынан, 1945 йылда, көтөүҙә йөрөгәндә, Иманов Фәтих бер нисә ҡат мөңрәп ишеттергәйне. «На-а, малҡай» йыры (йәки «Ылаусылар йыры». — Төҙ.) XVIII быуаттарға ҡарай. Уны һуңғы йырлаусылар Фәттәхов Ҡәүи (1903) менән Әбделмәнов Фәтих (Теләштән) булды».

[9] Башҡарыусы иҫкәрмәһе: «Үгләжинйә һамағы» XVIII—XIX быуаттарҙа сыҡҡан. Уны Бөйөк Ватан һуғышына тиклем үк ишетергә насип булғайны. Мәктәпкә утын әҙерләгәндә, усаҡ янында йыйылған балаларға Ишәле мәктәбе уҡытыусылары Дилмөхәмәтов Мөхәмәтйән Ғәлимйән улы менән Әхтәров Минһаж Әхтәр улы йырлап ишеттергәйне. Ул йырсыларҙың икеһе лә, үкенескә ҡаршы, яу ҡырынан ҡайта алманы...»

[10] Ғафури, Учалы, Мәсетле яҡтарында ялтырауыҡ нәмәләр бөтөнләй алына.

[11] Мәрхүмде төндә һаҡламаһаң, уға шайтан кереп ҡала ла һуңынан ҡәберҙән убыр уты булып сыға, ти.

[12] Мәйетте бимазаламау, рәнйетмәү өсөн кейемен ярып алалар. «Ярып алған кейемдә кейһәк тә, сирләмәйбеҙ әле» һүҙе шунан килә.

[13] Ул бейәләй һыйыр еленен, сөйәлде, шеште имләүҙә ҡулланыла (Учалы р-ны Ҡунаҡбай ауылы — 1986. Р. Ә. Солтангәрәева: ФБФ).

[14] Дим — Өршәк буйында, Учалы, Баймаҡ яҡтарында был йоланы сәллә (салма) урау тиҙәр (Дәүләкән р-ны Алға ауылы Мөхәмәткирәева Тимербикәнән (1916) — 1988, Р. Ә. Солтангәрәева — ФБФ).

[15] Ҡәфен теккән епте тотонһаң, «үлек ебе тарта» (Учалы р-ны Аҡҡужа ауылы Тажетдинова Ғәфифәнән (1923) — 1987, Р. Ә. Солтангәрәева — ФБФ).

[16] Ҡояш байығас ерләһәң, ҡәбергә убыр эйәләшә.

[17] Яуап биргәндә, мәрхүм тороп ултыра торған урын.

[18] Һорау алыусы Нәнкир менән Мөнкир тигән фәрештәләр: «Фәлән-фәлән әҙәм нимә эшләп ҡалды?» — ти икән. Әгәр теге кеше берәй эш эшләп ҡалған булһа: «Ярай, шул эше бөткәс тә, бында алырбыҙ», — тиҙәр икән. Шуға күрә мәрхүмде ҡайтмаҫ юлға оҙатҡан мәлдә баш ҡарашалар, һарыҡ йығып йөн барлайҙар: йөнәһе, сәс, йөн бөртөктәрси һанап бөтөп булмай (Учалы р-ны Ураҙ ауылы, Миәкә р-ны Илсеғол ауылы — 1986. ФБФ).

[19] Бәғзе яҡта был һүҙҙәр үлекте күмгәс әйтелә.

[20] Ҡәфендең бауын мәрхүм тотоп ултырып «яуап биргәндә» уңай булһын өсөн сисәләр.

[21] Юҡһа мәрхүмдең ауыҙы асылып, ен-зәхмәт кереүе ихтимал, тиҙәр (Туймазы р-ны Собханғол ауылы Ғүмәрова Мәхмүзә Хәләфетдин ҡыҙынан (1918) 1984, Р. Ә. Солтангәрәева — ФБФ).

[22] Фәрештәләргә яуап биргәндә уҡыла торған доға.

[23] Ҡырсын ташын өлкән йәштәге әбей-бабайҙар йыя. Шишмәнән, тау башынан йыйған ваҡ ҡына был таштарҙы улар йыл һайын һыуҙа йыуып, яңыларын өҫтәп, яңыртып тора. Шуны «тәһел ташы» тиҙәр. «Тәһел ташы» һалыу йолаһы Миәкә, Учалы, Әбйәлил, Хәйбулла һ. б. районддарҙа әле лә күҙәтелә.

[24] Һыҡтауға тартым был һамаҡ бәғзе төрки халыҡтарында (мәҫәлән, ҡырғыҙҙарҙа) әле лә мәрхүмде әйтемләп-һыҡтап оҙатыу йолаһын хәтерләтә. (Баязитова Ф. С. Этнолингвистические мат-лы к реконструкции древн. традиционных обрядов мордвы-каратаев // Мордва-Каратай: Язык и фольклор. — Казань, 1991. — С. 121.)

[25] Ҡөрәкте, ергә һалмай, икенсе кешегә тотторһаң, яҙыҡ була: яңы мәйет сыға.

[26] Йола һәр саҡ мәрхүмгә һүҙ тигеҙмәҫлек баһа бирә. Был осраҡта мулланың яман тауыш ишетмәүен әйтеүе лә шунан килә.

[27] Йәне тамуҡҡа юлыҡҡан кеше эсе ҡысҡыра, ти. Шуны хайуан ишетә була.

[28] Артыш — изге ағас. Уны ен-шайтанды биҙҙереү, им-том, хуш еҫе өсөн файҙаланалар.

[29] «Ете йоҡа бешереү», ғәҙәттә, мәрхүмде иҫкә алыу (өсө, етеһе, ҡырҡы) көндәрендә үтәлә. Мәрхүмде күмгән көндө ҡырҡ бер көлсә бешереү йолаһы булған (Дим — Өршәк буйы, төньяҡ башҡорттары).

[30] Был йолаларҙа кеше һәм ер, кеше һәм тупраҡ заттарының бер үк тәбиғи булмыштан тигән мәжүси ышаныуҙарҙың сағылышы күренә.

[31] Донъялыкта кеше тәһәрәт алмай йөрөһә, йома көн ҡара һыу (кер һыуы) түкһә, бөтөн шул һыуҙар ҡәберенә тула тигән ышаныу телгә алына.

[32] Сират күпере — теге донъяға барғас, ҡылдан нескә ҡылыстан үткер күпер аша тик гонаһһыҙҙар ғына үтә һәм йәннәткә юлыға, гонаһлылар — тамуҡҡа.

## II

[1] Буранғолов М. Башҡорт туй йолалары. ҒА, оп. 12/215; Ш. Сүнчәләй «Этнографические материалы о башкирах». — ҒА, оп. 12/200; Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар. Икенсе китап. / Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Салауат Галин. Яуаплы ред. Ким Әхмәтйәнов. / Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1977.—221—277-се б. БӘФК, фф. һаҡл. 171, 13—14-се бб., ҒА, 73/74 (Баймаҡ), 92/3 (Учалы), 92/8 (Миәкә).

Бала донъяға килмәҫ элек үк, уларҙы йәрәштереү тураһында килешеп, тыуғас та, ҡауыштырыу йолаһы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» (Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Икенсе китап / Төҙ., инеш мәҡ. һәм аңлатмалар авт. М. М. Сәғитов. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1973, 60—123, 124—140-сы бб. Артабан: БХИ; БХИ: Әкиәттәр, 2-се кит. — № 41), «Таһир менән Зөһрә» эпосында БХИ: Эпос. Өсөнсө кит. / Төҙ., инеш мәҡ. һәм аңлатмалар авторы Н. Т. Зарипов. — Өфө: Башҡ. кит. нәшр., 1982. — 272—275, 277—279-сы бб.), батырҙар тураһында әкиәттәрҙә (БХИ: Әкиәттәр. 2-се китап. — № 41; БНТ. Т. 3. Богатырские сказки / Сост. Н. Т. Зарипов. Вступ. ст., коммент. М. Г. Барага и Н. Т. Зарипова. — Уфа: Башкнигоиздат, 1988. № 54, 55), асыҡ сағылыш тапҡан. Ҡырҡы үткән тиңдәш сабыйҙарҙы ҡауыштырыу (ә бындай күренеш Дәүләкән, Хәйбулла, Әлшәй, Бөрйән һ. б. райондарҙа беҙҙең замандарҙа ла күҙәтелә) йолаһын, ғәҙәттә, балаһы үлеп торған йә ауырыған ата-әсә мотлаҡ үтәргә тырышҡан. Йоланың тамырҙары боронғо дуалистик ҡараштарға, ишлелектең магик көсөнә ышаныуға барып тоташа. «Ишле — көслө», «Ике кеше — бер кешенең Тәңреһе (ишлелек яуыз көстәрҙән һаҡлай)» ише мәҡәл-ырымдар шул замандан ҡалған. Әлегәсә һаҡланып килгән бәпес туйы ҡолаҡ тешләтеү туйы (бишек туйы) менән тамырҙаш.

[2] Тәүге исем — яуыз көстәрҙән һаҡланыу, уларҙы алдау маҡсатында ҡушылған (Кирәй Мәргән, БХИ. — 43—44-се б.).

[3] Ҡолаҡ тешләтеү — ҡыҙ ҡолағына инәү һалыу кеүек ҡаралған булһа кәрәк.

[4] Йәштәрҙе сымылдыҡ йә шәл менән ябыу — уларҙы яуыз сихри көстәрҙән һаҡлау սараһы. Бөркәнсектең төҫө төҫ магияһына ышаныу менән бәйле: күк — тимер (сыҙамлылыҡ), йәшел — тереклек (тереклек рухы Хыҙыр Ильяс, мәҫәлән, тик йәшел сапан кейгән аҡ һаҡаллы ҡарт итеп һүрәтләнә), ҡыҙыл — ҡыҙ-ҡырҡын (түллек, үрсем) билдәһе һ. б. Ҡыҙыл, ал төҫ — ҡояш төҫө, ҡөҙрәтле төҫ. (Фархадова С. Т. Обрядовая музыка Азербайджана. — Баку, 1982. — С. 200).

Бөркәнсектең күк (йәшел) төҫтә булыуы был төҫтәрҙе тереклек билдәһе тип таныу (йәғни) төҫ магияһына ышаныу менән бәйле.

[5] Егет яғының мал һуйыуында ят ырыу (ҡыҙ яғы) тотемдарының «күңелен» арбарға тырышыу сағыла.

[6] Һебә ҡабырғаһы — ҙур баһа билдәһе. Борон табында һөйәкле өлөш һәр кемдең дәрәжәһенә, һәләтенә, ҡәрҙәшлек кимәленә, йәшенә ҡарап тотторолған.

һөйәкле өлөш бүлеп, ырыу, араларҙы ла билдәләгәндәр (Рашид-ад-дин. Сборник летописей. Т. 1. Кн. первая. — М.—Л.: Изд-во АН СССР, 1952.— С. 221). Борон хәҙерге Бөрйән р-ны Иҫке Монасип (һарт) ауылы аҡһаҡалы: «Ағай-эне, ауыл ҙурая, төрлө зат күбәйә. Әйҙә, ара бүлешәйек», — тигән ти, ҡарттарҙы йыйып алып. «Әйҙә», — тиешеп, былар бер ҙур һарыҡ тәкәһен һуйып, бешерәләр ҙә табын ҡоралар. Тәкәнең ике мөгөҙөнөң төбөн (бүкән башын) алған ҡарттың затын — бүкәнбаштар (Бурановтар), кепесләп торған күҙе тирәһен алған ҡарттыҡын — кепестәр (Муллағолов, Йомағоловтар), ҡарынын алғаныныҡын — сәрмәләр һ. б. тип йөрөтә башлаған, ти. 1965 йылда Иҫке Монасип ауылы Хәлитов Шәрәфулла бабайҙан яҙып алынған. (Ә. М. Сөләймәновтың шәхси фонды.) Һәр өлөш уны алыусының йәмғиәттәге урынын, һәр зат үҙ өлөшөн (дәрәжәһен) белергә тейеш тигәнгә ишара яһаған. Бында һөйәктең магик көсөнә ышаныу сағыла, буғай.

[7] Егеттең йыр менән яуап биреүе боронғо никах алды (буласаҡ ирҙе интеллектуаль яҡтан) һынауҙың бер төрө булған. Был йола әле лә күҙәтелә. Көнбайыш башҡорттарында уны мәслихәт туйы тиҙәр. Кәңәш туйында ла әйтеш булған (Туймазы р-ны Урманай ауылы М. Р. Хәбибуллинанан (1901). — ҒА, оп. 92/2. — 49-сы б.).

М. Буранғолов яҙмаһы буйынса, Баймаҡ р-ны Дияров Кәрим (1905—1985), Салауат р-ны Абдуллина Сания (1927), Хәйбулланан Усманова Әсмә (1930) һ. б. әйтеүенсә, ҡыҙҙар уйынында ла ҡыҙ күҙләр булғандар. 1926 йылда Ғафури р-ны Яҡты күл ауылы Ҡоломбәтов Вәлиулла сәсән Фазыл улы (1881—1964) шундай бер таҡмаҡ теркәгән:

Ҡыҙҙар кейәү көтәләр —
Йыйылдылар бер түшкә.
Батыр кейәүҙең ғәҙәте
Баҫып керер йыртышҡа. —

ҒА, оп. 12/261. — 121-се б.

[8] Ҡымыҙға тәңкә һалып бирә. — Башҡорттар көмөш тәңкәнең тылсымлы көсөнә ышанған. Боронғолар ҡарашынса, ғөмүмән, металл, айырыуса көмөш кеҫәге магик көскә эйә булған. — Кагаров Е. Г. Состав и происхождение свадебной обрядности // Сборник музея антропологии и этнографии. — М.—Л., 1929. — Т. 8. — С. 155.

[9] Алмашып кейенеүҙең боронғо нигеҙе яуыз көстәрҙе алдау өсөн ҡиәфәт үҙгәртергә тырышыуҙа ята.

[10] Сата (аса) — иштең берлегенә ишара яһаған. Яусының бер сатаны һындырып ҡайтып килеүе уның юлы уңыуын аңлата (Миәкә, Дәүләкән, Хәйбулла һ. б. р-ндары).

[11] Уратып-һуратып йөрөү — яуыз көстәрҙән эҙ яҙҙырыу сараһы. Мифик заттарҙы аймылыштырыуға иҫәпләнгән йәшерен «тел».

[12] Туғыҙ һаны менән хаҡ әйтеү — яусының һүҙен кире ҡағыуҙы ситләтеп белдереү сараһы. Туй йолаһында өс, етс һандары ла кинәйәле мәғәнә ала.

[13] Яман һүҙҙәр менән тиргәү көлөүҙе аңлатмай, ә яуыз сихри көстәрҙән һаҡланыу сараһы ғына.

[14] Орғасы мал биреү — кейәүгә сығыусының түлле булыуын теләү билдәһе ул.

[15] Был йоланы бәйет әйтешеү тип тә атайҙар (Образцы башкирской раз-

говорной речи / Под ред. Н. Х. Максютовой. (Уфа: РИСО БНЦ УрО АН СССР, 1989. — С. 97. Артабан; Образцы...)

[16] Борон орғасы мал тиреһенән тегелгән тунды инә туны тигәндәр. Тора-бара инә тун итеп йөн, туҡыма йә күлдәк бүләк итәләр. — (Образцы... 98 с.).

[17] Максютова Н. Восточный диалект башкирского языка. — М.: Наука, 1978. — С. 76 (Артабан: Восточный диалект...)

[18] Образцы... С. 34. Халыҡтағы берәйһе: «Һөйөнсө!» — тиһә: «Һөйөнсөһөнә — уң ҡолағы!», «Уң ҡолағың үҙенә!» — тип мәрәкәләп әйтеү ғәҙәте шуға бәйле булыуы ихтимал. Өлөш өләшкән мәлдә яҡшы хәбәр әйтеүсегә башиттең уң ҡолағын киҫеп биргәндәр.

[19] Туйлыҡты (туйға тәғәйен малды) теретуй итеп тә, һуйып та алып килгәндәр. — Образцы... — С. 88.

[20] Ғәбитов Хәбибулла. Башҡорттарҙа ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү рәүеше // Яңы юл. — 1923. — №—8. 34—39-сы б., 1924. — № 1. 25—28-се б. (Артабан: Ғәбитов Х. Башҡорттарҙа ҡыҙ алыу...)

[21] Дәүләтшин Ғәббәс. Бүгәсәү башҡорттарында ҡыҙ биреү рәүеше // Яңы юл. — 1923. — № 1—2. (Артабан: Ғ. Дәүләтшин. Бүгәсәү башҡорттарында.)

[22] Ғәбитов Х. Башҡорттарҙа ҡыҙ алыу...

[23] Заман үтеү менән ҡоҙаларға тире (тире тун) урынына уларҙы хәтерләтер билдә — яғалы тун урынына хатта яға ғына бирә башлағандар.

[24] Ҡыҙ йортонда кәңәш-туй. Ҡыҙ, егет йортондағы эске туй. — Ғәбитов Х. Башҡорттарҙа ҡыҙ алыу...

[25] Никах нығытыу рәүеше төрки халыҡ туй йолаһында исламлаштырылған. Әммә никахтың ҡыҙ атаһы йортонда уҡытылыуында, туйҙың төп мәжлесенең дә ҡыҙ яғында үткәрелеүендә был йоланың тамыры иш табыуҙа катын-ҡыҙҙың баш булыуы, ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙың өҫтөнлөгөн күрһәткән матриархат тәртиптәренә олғашыуы һиҙемләнә.

[26] Ҡайһы бер төбәктә никах уҡыған ваҡытта ҡыҙ менән егетте бер өйгә бикләйҙәр. Ризалыҡ яуабын йәштәр менән бергә ултырған еңгә бирә. Йәштәр ултырған арала ижап уҡыталар: Образцы... С. 28. Йәштәрҙең йәрәшәсәген никахҡа тиклем рәсмиләштереүҙе ижап ҡабул итеү тигәндәр. Мулла доға уҡып ике аралағы килешеүҙе нығыта. Ижап, ғәҙәттә, кейәү беренсе килеп киткәс тә уҡытыла. — Руденко С. Башкиры. — С. 262

[27] Уҡ тоттороу (Георги И. Описание всех обитающих в Российском государстве народов: СПб., 1789. — Ч. 1. — С. 106). Йола боронғо был ҡоралдың магик көсөнә ышаныуға нигеҙләнгән. Монголдарҙа уҡ — аталар хоҡуғына, бүрәттәрҙә ырыу тамырына, ҡотҡа ишаралар билдә иҫәпләнгән.

[28] Максютова Н. Восточный диалект... — С. 276.

[29] Ғәбитов Х. Башҡорттарҙа ҡыҙ алыу...

[30] Ирҙәр ҡоронан һайлап алыу, ирҙе ырыуға алыу хоҡуҡтары матриархат традицияларына нигеҙләнә.

[31] Ҡыҙ йәшереү йолаһы борон сихри яуыз көстәрҙән эҙ яҙҙырыу сараһы булып иҫәпләнгән. Ишек төбөндә хаҡ бесеү 1960-сы йылдарҙа Бөрйән р-ны Иҫке Собханғол ауылы Бикҡолова Ғәфүрәнән яҙып алынған. — БӘФҠ ФФ, һаҡл. б. 7—10-сы б.

[32] БӘФҠ ФФ, һаҡл. б. 191, 100-се б.

[33] Ульябаев Х. ҒА, оп. 12/1, 317, 20-се б.

[34] «Шайтан, ен, яман көс кешенең һул яғынан йөрөй, этлек, насар уй ке-

шенең үксәһендә йөрөй», — ти халыҡ. Тимәк, ҡыҙҙың үксәһенә баҫыу уны насар уйҙарынан арындыра була.

[35] Солтанғужина-Ҡоҙашева Ф. Ғ. Йылайыр районы башҡорттарының байрамдары һәм йолалары: Диплом эше. — Өфө: БДУ, 1982. — БӘФҠ ФФ. — Һаҡл. б. 185. — 45-се б. Варианты: Ишек янында әйтешәләр: Егеттәр ишек шаҡый. Эстән:

— Кем унда? — тиҙәр. Егеттәр:
— Беҙ — юлаусылар, төнгә ҡалдыҡ, ҡунырға индерегеҙ!
Ҡыҙҙар:
— Нисәү һеҙ?
Егеттәр:
Ишеккә лә һыябыҙ,
Өйгә лә һыябыҙ,
Һәкегә ултырмайбыҙ,
Ҡаҡ иҙәнгә ятмайбыҙ!
Ҡыҙҙар:
— Янығыҙҙа кем бар?
Егеттәр:
— Аҡ эҙләгән күк бар,
Пар эҙләгән ҡуй бар!
Ҡыҙҙар:
— Күпме түләйһегеҙ?
Егеттәр:
— Ишегеңде ас,
Ас та үҙең ҡас!

1989 йылда Миәкә районы Туҡһанбай ауылында Р. Ә. Солтангәрәева яҙып алды.

[36] Был йолала ул яуыз көстәрҙе аймылыштырырға тырышыуҙы (йәнәһе, яңы түшәккә йәш ҡыҙ түгел, донъя рәтен белгән ҡатын ята) сырамытырға була. «Яңы урындың енен ҡыуып алайыҡ!» тип еңгәләрҙең әйтеүе лә бушҡа түгелдер.

[37] Халыҡ хөрәфәттәрендә тоҙ күҙ тейеүҙән, ғәйбәт һүҙҙән, сир-зәхмәттән һаҡлар( ауырыған кешегә әле лә тоҙ өшкөртөп, шуны иҙеп эсереү ғәҙәте бар), ә мал ялаған тоҙ түл арттырырға булышлыҡ итер тылсымлы аш иҫәпләнгән.

[38] Йөн, тәңкә, бысаҡ, кеҫәү — ен-шайтан, бүтән мифик заттарҙан һаҡлар әйберҙәр хисабында булған. Йөн — уңыш, түлгә булышлыҡ итә тип, ышанғандар (ҡайһы бер халыҡтарҙа түл, ырыҫ, бәхет юрап йәштәрҙе тирегә, йөнтәҫ кейеҙгә ултырталар).

[39] Гәйнә башҡорттарынан. — Образцы.. С. 130. — Башҡа бик күп халыҡтарға ла (рус, белорус, украиндарға һ. б.) хас был йола тыуым, үрсем теләүҙе аңлата.

[40] Шау-шыу, шартлатыу, ҡағыу (барабан) тауыштары борон яуыз көстәрҙе өркөтә тип белгәндәр.

[41] Кейәү егет ҡоймаҡты ашап бөтһә, ҡыҙҙың ғиффәтле (ҡыҙ намыҫын һаҡлаған), ауыҙ ҙа итмәһә йә тишеп бирһә, гиффәтһеҙ икәне аңлашыла.

[42] Никах төнө артынса яғылған мунсаны Ырымбур, Курган, Бәләбәй, Миәкә, Стәрлебаш башҡорттары «Туй мунсаһы», «Кейәү мунсаһы» тип атайҙар. Мунса ингән һәр ҡоҙа таштабаҡҡа «мунса хәйере» һалып сыға. — Образцы... — С. 98.

43 Мунса эйәһен ризаландырыу йолаһы.

44 Тыйыуҙы боҙоу (тыйыуһыҙланыу), йола хоҡуғы буйынса, язаға тарттырыла. Ҡыҙға ауылдаш егеттәрҙең кейәүҙе ҡыуыуынан матриархат дәүерендә ҡыҙ өсөн ир туғандарының яҡсы, ҡурсы (яҡлаусы), ә кейәүҙең сит ырыу кешеһе булараҡ, килмешәк иҫәпләнеүен сырамытырға ла була. Быныһы бер. Икенсенән, егет, ҡалымын түләп бөткәнсе, кеше күҙенә күренмәй генә, кейәүләп йөрөргә тейеш булған. Ошо йөмләнән ҡарағанда, килмешәклеге өҫтөнә ил йолаһын тотмаған кейәүҙе ҡыйырһытыу борон ғәҙәти хәл булған тип уйларға кәрәк.

45 Дим, Өршәк буйы башҡорттарында ҡушылғандан һуң кейәү егет кәләше янына бер ай самаһы ваҡыт үткәс кенә килер булған. Был йола «түркенләй килеү» тип аталған. Ошо килгәнендә кейәү күстәнәскә бер мискә бал килтерә.

46 БӘФК, ФФ, һаҡл. б. 122, 28-се б.

47 Ҡорбанғәлиев Х. Башҡорт халҡында ҡыҙ биреү рәүеше // Башҡорт аймағы — 1927. — № 4. 19—27-се б. (Артабан: Ҡорбанғәлиев Х. Башҡорт халҡында...); Вилданов Ғ. Башҡорт этнографияһы материалдары // Башҡорт аймағы. — 1928. — № 6. — 23—26-сы б. (Артабан: Вилданов Ғ. Башҡорт этнографияһы...)

48 Был йола бер кеше ғазабы бөтә ырыуҙың гонаһын юя, тигән боронғо ышаныу менән бәйле, ахырыһы. Уны шулай уҡ һүҙ күтәреүсәнлек күнекмәһе биреү дәресе тип ҡарарға ла булалыр.

49 Вилданов Ғ. Башҡорт этнографияһы... — 20—26-сы б.; Ғәбитов Х Башҡорттарҙа ҡыҙ алыу. — 25—28-се б.

50 Ҡанъяға тәкәһе тип ғәйнә башҡорттары (Свердлов, Пермь өлкәләре), туйлыҡ мал тип Курган, Силәбе, Һарытау яҡтарында әйтәләр.

51 Ағас, кеше һ. б. тирәләй йә былай ғына түңәрәк яһап әйләнеүҙәр, түңәрәк менән ҡурсалап һыҙып ҡуйыуҙар этнографияла, берҙән, яуыз йәндәрҙән һаҡланыу тылсымын үтәй, икенсенән, Ҡояш культының бер сағылышы булараҡ баһалана (Герасимов Г. М. Символика орнамента на стрелохранилище // Зап. Науч. исслед. ин-та культ. и экон. — Улан-Удэ, 1948. — Вып. VIII — С. 173). Боронғо башҡорттар уҡыныn, ергә түңәрәк һыҙып, йылан, ен-шайтан инә алмаҫлыҡ «кәртә ҡорған», теләккә сыҡҡанда түңәрәк ултырып, Тәңренән ямғыр, йәшеллек, мал үрсеме, ҡот теләгәндәр.

52 «Ҡот» (аҡ сепрәк, ҡыҙыл яулыҡ, таҫтамал) өсөн болашыуҙар уның тылсым көсөнә ышанып, ырыҫҡа (ҡотҡа) ынтылыуға нигеҙләнә. Ҡайһы бер яҡтарҙа, мәҫәлән, ҡатай башҡорттарында, ҡоҙалар «Тупый алмаға... сабыша». Әгәр ҡыуып етеп ала алмаһа, үҙ тупыйын (баш кейемен) үҙе һатып ала. — Образцы.. С. 88.

53 Ризыҡты һибеү муллыҡ (ырыҫ, түл-үрсем) теләүҙе аңлата.

54 1970 йылда Курган өлкәһе Әлмән р-ны Шәрип ауылы Х. Йыһандарованан (1904) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған — ҒА, оп. 65/5. — 156-сы б.

55 Никахһыҙҙар ултырһа, түлләнеүгә зыян килә тип иҫәпләнгән. Буйҙаҡтарҙың ирҙәр араһында урын ала алмауында «ир ҡорона» етмәгәндең, йәғни инициация йолаһын үтмәгәндең хоҡуғын сикләү ҙә сағылғанға оҡшай.

56 Аҡ төҫ — изге төҫ. Туй мәжлесен ҡымыҙ, һөт кеүек ризыҡтан башлау аҡ (бәхет, изгелек) теләүҙе аңлатҡан. «Көрәгә-көрәгә ҡымыҙ һалып...» йыры // Буранғолов М. Башҡорт халыҡ йырҙары. — ҒА, оп. 12/217. — 25-се б.

57 Курган, Силәбе өлкәһендәге Ҡара, Барын Табын, Ҡатай башҡорттарын-

да туйлыҡ мал алып килеү шулай аталған. Туйлыҡ малы, ғәҙәттә, туйҙың беренсе йә икенсе көнөндә һуйылған.

[58] 1970 йылда Курган өлкәһе Әлмән районында Х. Йыһандарованан Ф. А. Пәҙершина яҙып алған. — ҒА, оп. 65/5, 132-се б. Үҙенә бағышланған ҡорбандың итен ашаһа, һуйылған йәндең асыуы, ҡарғышы төшә тигән ышаныу бар.

[59] Туй һарығы ябыҡ булһа, Үсәргән (Хәйбулла) башҡорттары «Туй һимертеү» йолаһын атҡара. Һарыҡтың ас эсәген таҙартып, шуны таяҡҡа элеп, ҡоҙалары «ҡороҡлайҙар». Улары аҡса биреп кенә ҡотола — туй «һимерә». 1989 йылда Хәйбулла р-ны Аҡъяр ауылында Усманова Әсмәнән (1930) Р. Ә. Солтангәрәева яҙып алған. — Р. Ә. Солтангәрәева. — ш. ф.).

[60] Боронғо хөрәфәттәр буйынса, ҡан мәшһүр тылсым көсөнә эйә. Ҡәрҙәшләшеүгә ҡараған йолаларҙа ул үрсеүгә булышлыҡты, туғанлашыуҙы аңлата.

[61] 1988 йылда Миәкә р-ны Әбеш ауылы Өммөгөлсөм Әюпованан (1909) Р. Ә. Солтангәрәева яҙып алған. — ҒА, ф. 3, оп. 92/8. С. 222.

[62] Ғ ә б и т о в Х. Башҡорттарҙа ҡыҙ алыу.

[63] Бер бөтөндән өлөш сығарыу — бөтәһен дә тиң күреп, туғанлашыуҙы, уртаҡлашыуҙы аңлата.

[64] 1961 йылда Куйбышев өлкәһе, Больше-Черниговр-ны Хәсән ауылы Даянова Тутыянан М. М. Сәғитов яҙып алған. — ҒА, оп. 21/6. — 263-сө б.

[65] «Йыуаса менән һыйлау» йолаһын тора-бара «йыуаса» тип кенә йөрөтәләр. Йыуасаға ғәҙәттә бауырһаҡ, ҡорот, кәнфит, күмәс, ҡош ите кеүек күстәнәстәр инә.

